Спартак Ильясов

Колой кантон



Зәйнәб
Биишева
исемендәге
"КИТАП"
нәшриәте

ӨФӨ·2012

УДК 821.512.141-94
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4
И 40

Ильясов С. М.
И 40 Ҡолой кантон. Тарихнамә. – Өфө: Китап, 2012. – 400 бит.

ISBN 978-5-295-05504-1

2012 йылда илебеҙ 1812 йылғы Ватан һуғышы башланыуының 200 йыллығын билдәләй. Ошо ваҡиға айҡанлы Ҡолой кантон китабында автор тарихыбыҙҙың бығаса билдәле булмаған хәл-ваҡиғаларын сағылдыра. Бай мәғлүмәттәр, рухи мираҫ хәтеребеҙҙе яңырта, халҡыбыҙҙың асылы, булмышы, йәшәйеше тураһында тәрән уйландыра.

ТП–129/12

ISBN 978-5-295-05504-1

УДК 821.512.141-94
ББК 84 (2 Рос=Баш)-4

© Ильясов С. М., 2012
© Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы, 2012

БАШ ҺҮҘ

Автор очерктарында, тарихнамәләрендә ҡиммәтле тарихи ваҡиғалар ята, ул уларҙы үҙенсә дәлилләй. Дәлилләй тип әйтеү шул, автор, тарих өсөн, бигерәк тә үҙ төбәге, үҙ ере, үҙ халҡы тарихының байтаҡ биттәрен аса алған.

С. М. Ильясов бик күп ер атамаларын яҡшы белә. Көнсығыш Табын халҡының тарихын уларға туранантура бәйләп кенә түгел, дәлиллəп тасуирлай. Был фекер бигерәк тә «Олатайҙар тотҡан ҡоралдар», «Үҙ тарихым асылы», «Хәтерҙә ҡалғандар» һ. б. очерктарҙа тәрән, асыҡ күренә. Авторҙың үҙ төбәгендә, табын-барындар ерендә сыҡҡан йырҙарҙы һаҡлауы, яҡшы белеүе, уларҙы риүәйәттәре менән яҙып сығыуы («Ватандаш», № 2, 2007) ҡыуаныслы күренеш. Ә «Буғай хаким», «Вариҫтар ил ҡурсалай», «Болоттар ҡуйырғандан ҡуйыра», «Көлой кантон Көсөкөв» әҫәрҙәре халҡыбыҙ тарихының һәр саҡ ғәскәрилеген дәлиллəй, уны оҫта һүрәтлəй. Илен, ерен сит бауырҙан һаҡларға күтәрелеүендә халҡыбыҙҙың Ватансыллығы ярылып ята.

«Олатайҙар тотҡан ҡоралдар» («Ватандаш», № 2, 2008) тураһындағы мәғлүмәттәре фәнни өлкәлә иғтибарға лайыҡ. Шуның менән бергә авторҙың ҡайһы бер фекерҙәре бик үҙенсәлекле, тарихҡа билдәле дөйөм фекер менән тап килмәгән мәғлүмәттәре лә бик ҡыҙыҡлы. Автор тарихи әҫәрен ерле ауыҙ-тел ижадына, риүәйәттәргә, һыу атамаларына, шәжәрәләргә архивҡа таянып яҙа. Дөйөм алғанда, уның хеҙмәте тарихсылар, фольклорсылар, уҡытыусылар, мәктәп уҡыусылары өсөн аҫыл сығанаҡ һәм фәһем булырлыҡ.

Ғайса ХӨСӘЙЕНОВ,
академик, Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы



БУҒАЙ ХАКИМ

Күңелемде бик күптәнән өйкәп йөрөгән вәкиғалар 16–18-се быуаттарға тура килә. Табын-Барын шәжәрәһенең яҡынса 1550–1607 йылдарына ҡараған осоро. Хәҙер ырыу башы тип йөрөтөлгән Айшан менән Тайшандың ҡәберлеге бөгөн дә билдәле. Ул көнсығыш яҡтан килгәндә Урал тауҙарының тәүге алдағы армыттары булған Ҡомас тауы башында. Барын-Табындарҙың боронғораҡ осорға ҡараған шәжәрә тармаҡтары, башҡа ырыуҙарҙыҡы кеүек үк, барлыҡ исем-шәрифтәрҙе, уларҙан барлыҡҡа килгән фамилияларҙы солғап алмай. Борондан алып ҡайһы фамилия шәхестәре үҙ шәжәрәләрен һаҡлай алған, шул осмоттар ғына беҙгә билдәле.

Барындар, бигерәк тә хәҙерге быуын, Айшан менән Тайшан тураһында ялпы-йолпо ғына ишетһә лә, уларҙың атаһы Буғай хаким, уның атаһы Кискилде, атаһы Тәңребирҙе тураһында әҙ белләр. Беҙҙә, халыҡ теленә, күптәнге, бик күптәнге вәкиғә тураһында һүҙ барһа: «О-о-о, ул буғай заманында булған хәл дә ул!» – тигәнерәк хәбәрҙе һәр кемдең ауыҙынан ишетергә мөмкин. Һөйләнеләсәк вәкиғалар ҙа — шул Буғай осоро. Әле 1965–1975 йылдарға тиклем ул осорҙо бик тасуирлап, вәкиғаларын барлап һөйләгән ҡарттайҙарҙың ҡайһы береһе тере ине. Бигерәк тә хәҙерге Силәбе өлкәһе Уй районы Булат ауылы аҡһаҡалы, 1890 йылдар кешеһе Ғәбитов Хәжиәхмәт ҡарттайға ҙур рәхмәтлемен. Вәкиғаларҙы бик тасуирлап, ләззәтләнеп, үҙе лә шунда ҡатнашҡандай итеп һөйләр ине. Һөйләр ҙә һамаҡлап көйләр ине. Был ниндәй эпос, поэма, тигән һорауыма: «Буғай васыятнамәһе», – тиер ине. Байтаҡ, ҙур ғына өлөшөн яҙып та алғайным, тик үкенес: «ҙур начальник» булып йөрөй торғас, урындан урынға күскән осорҙа ғәйеп булды. Ғәйеплемен халҡым алдында уны юғалтыуым өсөн. Уның бер өлөшөн бал мәжлестәре вәкытында беҙҙең Ҡорама ауылы аҡһаҡалы Кәрим Нурислам улы Сәғитов та һөйләр

булды. Бына шул Буғай васыятнамәһе һәм уға ҡушып, дауамы итеп һөйләнелгән Кәрим бабай һәм Хәжиәхмәт ҡарттайҙарҙың хәтирәһе менән яҙма рәүештә уртаҡлашырға булдым. Һөләймән ауылынан, төп сығышы Силәбе өлкәһе Ҡаҙыбай йәки Ям ауылы кешеһе, Беренсе бөтә донъя һуғышы яугиры Шәйхетдин Бәшәров бабай ҙа байтаҡ нәмәне шул тарихтың ямау өлөштәрен беҙгә, малайҙарға, ат көткәндә төндәр буйы һөйләр булды. Шәжәрәнән күренеүенсә, Буғай хакимдың яҙмаға ингән ни бары өс улы күрһәтелә. Йомаҡай — Йомакилде, Айшан һәм Тайшан.

Буғай хаким оло улы Йомакилде, кеселәре Айшан һәм Тайшан, ҡартталары Кискилденең ағаһы Тәңребирҙе ерләнгән Тәңребирҙе тауы итәгендә ҙур яланда йыйын йыялар. Тәңребирҙе тауы ер бүлеү, ер тартып алыу ревизияларынан аҙаҡ Эйәртау, унан һуң Шәүкәнде тауы тип бөгөн дә атала. Ләкин минең ҡул аҫтындағы шәжәрәлә Шәүкәнде исеме юҡ. Күрәһең, ул хәҙерге икенсе фамилия кешеләренең шәхесе булғандыр. Әммә шуны төҫмөрләп була: ул аҫаба башҡорт! Талап алынған казачий ерҙә булып та, исеме һаҡланғас, ул, һис шикһеҙ, яусыл шәхес, иң кәме сотник — йөҙ башы йәки алай башы. Тәңребирҙе йыйыны ат саптырыу, бил һынашыу, ҡыҙ күҙләү өсөн генә йыйылмаған. Тәңребирҙе йыйынында барындар, тиләүҙәр, күбәләктәр, ҡыуаҡандар, ҡаратабындар оло сәйәси ваҡиғаны бөтә халыҡҡа еткереп, фекер алышып, тейешле ҡарар ҡабул иткән. Ырыу башлыҡтарына айырым-айырым да, әлекке майҙандарҙа ла, ноғайҙарҙы, татарҙарҙы ҡулланып, урыҫ батшаһының вәзирҙәре «мөрәжәғәтнамә» уҡыталар. Тик ырыу халҡы ғәреп батшаһының был тәҡдимен тыңлағас, илселәргә яра ғына яуап әйтмәйҙәр.

* * *

Тәңребирҙе тауы буйы — Буғай хакимдың төп ултырағы. Беренсенән, Ибер уйһыулыҡтары бөтөп, Урал армыттары алды, йәйләргә тау аралары, сылтырап аҡҡан йөҙәрләгән шишмәләр, унарлаған күлдәр, Уй, Мейесле, Яйыҡ, Әй, Иҙел башы.

Шәреҡтән яу килһә, Тубылдан ултыраҡҡа тиклем оҙайлы саҡрымдар. Ғәрептән тау аша килгән яуҙы ла әҙерләнеп ҡаршы алып була. Төп Урал һыртына 25 – 30 саҡрым ер.

Бөгөнгө оло йыйынға ла Ғәреп батшаһынан ҡораллы ун биш кеше килә ине. Сапҡындар уларҙы өсөнсө көн үк Исәт буйында туҡтаттылар. Мөрәжәғәтнамәһен уҡығас, бөтәһен дә ҡоралһыҙландырып, юл күрһәттеләр. Саҡрым һайын торған һәр сапҡын оҙата килде.

Илселәр килеп еткәс, Буғай хаким алдына бишәр-бишәр өс ҡатҡа тубыҡланып тороп, маҡсаттарын аңлаттылар. Торҙолар,

йомшаҡ үләнгә ултырҙылар. Ул-был иткәнсе, Көркәк буйынан да, Хөкөмташ йәйләүенән дә, Күгәрсен ташы һаҡсылары, Һарытүр буйындағылар — һәммәһе лә килеп бөттө. Буғай хаким йәш муйылдан семәрләп үрелгән ултырғысында айыу тирәһе өҫтөндә артҡа һөйәлеп ултыра ине. Көнбайышҡа, тауҙар теҙмәһенә, армыт-армыт булып ятҡан Нәрәле, күкһел Һарытүр, Ҡылысбай армыттарына, Олоһаҙ буйҙарына ялбыр ҡаштары аҫтынан һөҙөп ҡарап сыҡҡас, халыҡҡа ла, илселәргә лә ҡарап, былай тине.

– Хөрмәтле ырыуҙаштарым! Алыҫ ерҙе алыҫ тимәй, ер-һыу, ил, байлыҡ дәғүәләп килеүсе илселәр! Беҙ бөгөн һеҙҙең ҡағыҙҙы тыңлап тормайбыҙ. Беләбеҙ нимә яҙылғанын. Донъяла ғәрептә, әлекке беҙҙең ҡандаштарыбыҙ йәшәгән Тын, Ҡобан яҡтарында хәҙер баш булған олуғ һәм һәр тарафҡа ут һәм ғәйрәт сәскән батша барлығы тураһында ла хәбәрҙарбыҙ. Беҙҙең ҡайһы бер ҡәбилә ептәребеҙ ғәреп батшаһы менән һабаҡтыҡҡа бәйләнһә лә, әле улар беҙгә күренеп хәл-әхүәл белдергәндәре юҡ. Шик ҙур. Йә улар ҡағыҙ алмаған, йә хәбәр тик ҡағыҙҙа ғына, ғәмәлдә юҡ. Урыҫтар ниңәлер ҡанунға әйә кешеләрен ебәрмәйҙәр. Ялсылары, уларға һатылған ҡайһы бер татарҙар ялағайланып йөрөүҙәре күренеп тора.

Олуғ ҡанбабабыҙ Табынлы, Уп һәм Йыртыш һыуы яғынан ғәреп сигенә тиклем еткергән уғланы Томансы, уның уғланы Майҡы бей беҙгә сик ҡалдырмаған. Ултыраҡ булһаҡ, таш серегәнгәсә, аяҡланһаҡ, һөйәктәребеҙ муртығансы хәрәкәттә булһаҡ та, еребеҙ сигенә етә алғаныбыҙ юҡ әле. Бәләкәй ырыуыбыҙ, йомрандарыбыҙ, кәлсер, ҡумыраҡтарыбыҙ, ер кендеге аша ҡояш байыш яғына ултырҙылар. Улар ҙа вәзирләшмәгәндәр әле. Ҡолморҙаҡ бей менән Оморҙаҡ батыр һыу тартылғас беҙҙең йүндә булғанын беләһегеҙ! Ирәмәленең арҡаһы менән сапҡындарыбыҙ тора, бөгөн улар яҡтан хәбәр юҡ. Йәрхәмбикалла! Ғәреп батшаһының сапҡындары ла, салғыйҙары ла япҡаны, еле лә тейгәне юҡ әлегә. Шуны аңламайбыҙ! Ниндәйҙер бер сит бауыр, сит телле, сит динле дәғүәт беҙҙең үҙ еребеҙҙә, үҙебеҙгә йәшәргә рөхсәт бирергә самалай. Үҙ тупрағыбыҙға, үҙ Уралыбыҙға кемдер рөхсәт бирмәксе? Алйотмо, хыялыймы улар? Ваҡыт үҙе хаким, вәзирҙәр!

Буғай хакимдың һүҙенә бар халыҡ баш әйҙе.

– Эйе, эйе, ваҡыт үҙе хаким! Йә, хәҙергә шуның менән тамам, илселәр!

Бик йыуан муйынында бәләкәй генә күренгән башын бороп, һиҙелер-һиҙелмәҫ итеп ымланы ул. Үҙе йомшаҡ итеп эшкәртелгән айыу тирәһендә ҡымшанмай ултыра бирҙе.

Ырыу нөгәрҙәре, вәзирҙәрҙе аттарына мендереп, арттарынан юллап оҙатып китте.

Вәзирҙәр йыйын майҙанынан бурҙай арыр ара китмәйенсә уйланып ултырҙы Буғай хаким. Һул ҡулы аҫ башы менән бөткән биҙәр-биҙәр кәкре шешкеһенең тотҡаһын ағартҡансы ҡыҫа ла ебәрә, ҡыҫа ла ебәрә ине.

Ултыра торғас, алаптай ҙур кәүҙәһен бик сапсан алға ташлап һикереп торҙо. Уға бурыл юрғаһын килтерҙеләр. Барлыҡ уландарын, аймаҡ, түбә, иллелек, йөҙлөк баштарын Эйәртауҙан ғәрептәрәк ятҡан ҡышлау урынына — Алтын-Ташҡа саҡырырға бойорҙо. Ҡышлау ере — бик боронғо ултыраҡ. Солохло хан тип аталған Мортаҙа хандың да төйәге ине борон. Ул ер әле лә буш түгел. Алтын-Таш тип атала. Барындарҙың әлеге ырыу башы Буғай батырҙың ҡышлауы. Күлдәр теҙмәһе аша Мейесте һыуының уң ҡушылдығы булған Тәңребирҙе шишмәлегенең ҡалҡыулығында ултыра.

Ҡышлауҙың иң ҙур йорто — Буғай хакимдыҡы. Яҡтары алтышар ҡуһай булған был йорт йөҙйәшәр ҡарағастарҙан тәпәйгә тәпәй һалып бураған. Көн сығыр яғында — ике, көн төшөүҙә — алты, көнбайышта — бер һәм шималда бер тәҙрәһе бар ине. Өй эсе бүлгеләнмәгән. Кәрәк саҡта кейеҙ бүлектәр менән өскә бүленә. Бының өсөн өй яҡтарындағы ҡарағас сөйҙәр, үлсәп киҫелгән йоҡа кейеҙҙәр осонда ҡайыш элмәктәр бар. Элергә буй етмәгән ерҙәрҙә оҙонло-ҡыҫҡалы бүкәндәр тора.

Өй эсенең дүрт ҡоймаһы ла — ҡаҡ бүрәнәләр. Бүрәнә араһындағы мүктәр бөгәрләнеп бик тыңҡыслап кире төйөлгән. Өйҙөң кеше керер алды, иң ҙур өлөшө — ҡунаҡтар ҡабул итеү бүлмәһе. Һауыт-һаба торған, ҡатын-ҡыҙ сырҡылдашҡан бәләкәй бүленмәһе лә бар.

Буғай хаким ҡышлауға бик тәрән уйҙа ҡабаланмай ғына ҡайтып етте. Ниңәлер бурыл юрға ла йөрәкһеп, алға гөрөшөп, ынтылып барманы, тигеҙ генә атлап килде.

Ҡарағас ағастар менән бик ҙур итеп ҡоймалап алынған хаким ҡышлауы эсендә уның күбәләк ырыуынан алған Аҡсискә исемле һылыу ҡатынынан тыуған берҙән-бер улы Йомаҡайҙың — Йомакилденең ике бисәһе һәм бала-сағалары, маҡул уйғырҙарҙан ярлап алынған Юлдус исемле ҡатынынан тыуған Айшан һәм Тайшандың бала-сағаларының йорт-ҡуралары менән тулы.

Буғай хакимдың атаһы Кискилде, уның игеҙ ҡустыһы Ҡушкилденең, уларҙың бер туғандары Тәңребирҙенең, уның улы Юҡбирҙенең һәм башҡа бөтмәҫ ырыу ботаҡтары балалары Айынташ армытынан алып, Түрге яҡ күл буйына, Исәт һыуына, Тубыл ярҙарына тиклем таралған.

Шулай ҙа бөтәһе лә Буғай хакимға ҡарап тора. Йома һайын тигәндәй Тубыл буйындағы Алтай исемле йәйләүҙән йә ҡапма-ҡаршы яҡта ятҡан Өрәңге буйынан, Тағанай итәгенән ҡиблаға

Үрген күле тәшәлтәһендә һыулаған һәм Айынташ йәйләүендә йәйләгән туған-тыумасалар бер-бер артлы килеп кенә торалар. Ләкин Буғай хаким бөгөн һанызын да (бөтәһен дә) йыйырға ҡарар итмәне. Ат саптырып хәбәр ебәреп, алыҫ ерҙәрҙән берәм-һәрәм ҡасан жыйылып бөтөр халайыҡтар?

Бында, бәләкәйерәк ҡорҙа берҙәм фекерләшкәс, үҙе ебәрергә булды ул сапҡындарҙы. Уйҙарына бирелеп, ҡышлау күрнисәһенә килеп еткәндә, уны үҙе кеүек үк алаптай ике ейәне Бороҡ һәм Ҡайып атының башын тотоп ҡаршы алдылар.

– Хәҙер беҙҙең ураҙаға тағы ла ағай-эне жыйыла. Өйҙә түгел, ураҙала ултырасаҡбыҙ. Йәмғеһенә лә етерлек булһын ашау-эсеү, – тип ҡыҫҡа ғына әмер бирҙе Буғай ейәндәренә.

Өйгә кергәс, шул уҡ һүҙҙәрҙе ҡаршы алып торған бисәләре Аҡсискә менән Юлдусҡа ла әйтте. Буғайҙың бойороғо йәмғеһе өсөн дә ҡәтғи ҡанун ине.

Аҡшам намаҙының алдынан һыбайлы ир-ат ҡышлау ҡапҡаһы аша Буғайҙың ураҙаһына йыйыла башланы. Киң ураҙаның уртаһына дүрт-биш ергә ут яғылған. Ут тирәләп иллеләгән эреле-ваҡлы түмәрҙәр ҡуйылған. Күрнисәне төшөү менән, һулаҡайҙа эшләнгән киң, оҙон таҫҡалыҡ өҫтөндә килендәре: күҙәйҙәрҙә күҙләп, Йомакилдегә урлап алып ҡайтылған Фәзизә, Күбәләк-Тиләү табындарҙан Айшанға алынған Алҡалы, Тайшанға алынған Тәңкәле, ҙур алдырҙан үлән һуттарына, тоҙға һәм тоноҡ әсеткеһенә бешкән һимеҙ һарыҡ ите киҫәктәрен өҙөп, сей шешкә теҙәләр ине. Айшан менән Тайшандың улдары Көйөк, Сапҡын һәм башҡалар шешкә теҙелгән шешлектәрҙе усаҡ өҫтөндә һарылтыһы етеп бешкәнсе тоталар ҙа таҫҡалыҡ өҫтөндәге табаҡҡа һалалар. Ураҙаға тәмле ит, үлән һыуы еҫе таралған. Буғайҙың ике бисәһе Аҡсискә һәм Юлдус күнәктә ҡымыҙ бешә.

Аҡшам намаҙы етеүгә барыһы ла йыйылып бөттө. Буғай хаким, барлаған кеүек, халайыҡтарға күҙ йөрөтөп сыҡты ла йәнәшендә торған Өмөтбай муллаға, намаҙ башларға рөхсәт, тигәндәй иҙелер-һиҙелмәҫ баш ҡаҡты. Өмөтбай мулла ла, һәр кемдең алдында намаҙлығы булыуына инанғас, аҡшам намаҙын башланы. Тирә-йүн тып-тын булып ҡалды. Ҡайҙалыр ситтәрәк эт өрөүе, үрләүҙә өйөр айғырының кешнәүе, Өмөтбай мулланың моңло тауышына тағы ла мең биҙәктәр өҫтәп, һәр кемдең күңеленә нур бөркә ине.

Намаҙ уҡылып бөткәс, Өмөтбай мулла йыйылған халыҡҡа вәғәз әйткәндәй былай тине:

– Барлыҡ тереклеккә һәм ҡәүемгә Аллаһы тәғәлә биргән көн үтеп китте. Аҡшам үтһә лә, көндәлегебеҙ дауам итә. Көн төн менән алмашынғандай, халҡыбыҙ алдында бурыстарыбыҙ ҙа үҙгәреп торасаҡ. Ул беҙгә яңы хаят (йәшәү, тереклек) көсө бирәсәк, ит-

тифаҡлы (берҙәм, ойошҡанлыҡ) итәсәк! Йәрхәмбикалла, шулай булһын! — тип тағы ла доға ҡылдылар.

Был йыйынға тик ир-егеттәр генә саҡырылғайны. Бөтәһе лә усаҡтар янындағы бүкәндәргә ултырҙылар. Һәр береһенә шешлеге бысырлап майы ағып торған шеш таратып сыҡтылар хаким ейәндәре. Сапсаҡтарҙан туҫтаҡ-туҫтаҡ ҡымыҙ ҡойолдо. Ярайһы уҡ ваҡыт үтеүгә, бөтөнләйгә ҡараңғы төштө. Һимеҙ шешлек ашап, ир-егеттәрҙең асығыуы баҫылды, һыуһындары ла ҡанды тиерлек.

Атаһы менән йәнәш ултырған Йомаҡай, ҡулындағы хәнйәре менән итле еҙ алдырға өс тапҡыр еңелсә генә һуғып алды. Барыһы ла тын ҡалды. Буғай хакимдың ырыу тормошона ҡағылған бик мөһим хәбәр әйтеүен көттө улар! Түрҙә ултырған Буғай алға ынтыла биреп һүҙ башланы:

– Ағай-эне, уландарым, мырҙаларым! Оло жыйында сит бауыр вәзирҙәре күҙгә ҡарап торғас, асылып, һеҙгә әйтә торғанды әйтеп булманы. Һеҙ шәйләгәнһегеҙҙер, вәзирҙәрҙең тел төбө бик тәрәнгә бара. Жыйын алдынан миңә Фәли хандан сапҡын килде. Ул беҙгә ғарыз итеүсе (тәҡдим итеү, аңлатыу, еткереү) хат ебәргән.

Буғай хаким киндер тоҡсайҙан йомарлап тығылған һары ҡаты ҡағыҙ сығарҙы ла барыһына ла ишетелерлек итеп уҡый башланы:

«Эй, минең ҡәрҙәштәрем! Тоҡомдаштарым! Үҙ еребеҙгә тоғро булып, үҙ һыулауыбыҙҙы һаҡлап, еребеҙҙе ҡосоп ғүмер итеүселәр! Олатайым Мортаҙа эскән шишмә һыуын тәмләгәндәр! Атайым Күсем хан дәғүәт (өндәү, саҡырыу) итеү менән, ике ат арырлыҡ жиргә һә тигәнсе етеп, ҡунаҡ булып ҡайта инек. Хәҙер ваҡыттар үҙгәрҙе. Ҡыҫҡаса ошбуны ғарыз итәм (тәҡдим итеү, аңлатыу, еткереү): Урыҫтарҙың Вәриҫ Фәдән (Борис Годунов) тигән батшаһы беҙҙең Ибергә, Уралға нығытма артынан нығытма төҙөтә. Күскенсе һары кешеләр өйөр-өйөр булып килеп, беҙҙең ергә ултыра.

Ҡара Фәзиз (Ҡара-Табын) тоҡомдарының ҡайһы бере уларға әғлә (яҡшылыҡ) күрһәтә. Әммә Шәйем һәм Хәйербирҙе, уларҙың балалары әлегә беҙгә тоғролоҡ һаҡлай, беҙҙең менән бер ҡатарҙан ихтилафлыҡ (ҡаршылыҡ) ҡыла. Беҙҙең ҡуҙ яғып (кузница) һандал һуҡҡан еребеҙҙе иң алда яндыра, вата. Ниәттәре — ҡоралһыҙ ҡалдырыу. Әле беҙ Исәттең шималында (төп яғында) Тамаҡҡул йылғаһы ярындабыҙ. Сапҡындар үҙ аралығын яҡшы белә. Ярын Өпәгә һөжүм итәсәкбеҙ. Сөнки улар Өпәлә терәк тота. Ҡорал һуғыу бөтәгеҙгә лә ҙур лазым. Ун меңлек ғәййәр егеттәр әҙерлә! Мин Әйлегә, Көҙөйгә, Ҡатайға, Һалйотҡа, Терһәккә, Һыҙғыға, Ҡыуаҡанға, Ҡара-Табындың тоғроларына, Һеңрәнгә лә хәбәр ебәрҙем. Үҙ нәүбәтеңдә Тиләүгә, Күбәләккә еткер ошо дәғүәтте.

Һарыларҙың алғасҡылары һәр ерҙә мәғдәнле урындарҙы, мейестәр, ҡуҙсыҡтар булған ерҙе белергә тырыша. Быныңөсөн улар һатлыҡтарҙы, ҡайһы бер нуғай түбәләрен, мишәрлеләрҙе

йәлеп итә. Өрмәмбәт солтандан хәбәр юҡмы? Өрөш мырҙаға был тирәләге ҡайһы бер тоҡомдаштарының үҙ төркиҙәренә ҡаршы хеҙмәте тураһында хәбәр ебәр. Күмәкләһәк, ғалиб булырбыҙ! Амин!»

Күсем уғланы Ғәли

Буғай хаким, Ғәли хандың был хатын уҡығас, барыһына ла аңлашылдымы икән, тип тын ҡалды. Ҡорҙа серәкәй бызылдағаны, кемдеңдер тамаҡ ҡырғанынан башҡа тауыш юҡ ине. Торонбаштарҙы әйләндереп, усаҡтарҙы ҡуҙғатып ебәргәс, тирә-йүн яҡтырып, шәүләләр ҙә оҙонайып китте. Йыйылған кешеләр алған тәьҫораттан сыға алмай һаман да үҙ уйҙарында йөҙә ине. Тағы ла шеш тулы берәр әҫе шешлек таратып сыҡтылар. Кем нимә тип хәбәр әйтер икән, тип көткәндәй, Буғай хаким уйға батып һаман да өндәшмәй ултырҙы.

Тыныслыҡты Буғайҙың өс туған ҡустыһы, оҙон ҡаҡса Ҡырлас бәһлеүән боҙҙо.

– Хаким! Был шомло хәбәрҙәр менән күптәнән тирә-йүн тулған. Ситкә сыҡҡан һәр кеше шомло хәбәр килтерә. Тыныслыҡ шималда юҡ. Һары һаҡалдар Алта мырҙаның беҙгә ғәһед (килешеү) менән ебәрелгән кешеһен ултергән. Алта иһә Ян ҡәрҙәшенә сапҡын ебәргән, имеш. Уның биш мең яугиры юлда, ти. Алта үҙе һеҙҙе шәрәф (хөрмәт) итеп килергә булһа ла, был уйынан әлегә ваз кискән, – тип һүҙен бөтөрҙө.

Буғай, Ҡырласҡа боролобораҡ:

– Ҡайҙан был хәдис (ваҡиға) билдәле? — тип һораны.

– Әҡембәт ағайым Ишем солтан менән Тисә (Теча йылғаһы) тамағында осрашҡан.

Буғай хаким, бер аҙ тынлыҡ һаҡлағандан һуң, бик ышаныслы, ҡәтғи тауыш менән һүҙ башланы:

– Мөхтәбәр (хөрмәтле) халыҡ, уландарым! Урыҫтар Ҡазан ханын баҫып алыуға байтаҡ ваҡыт үтте. Ғәреп батшаһы һаман туҡтамай, һаман да шәреҡкә ынтыла. Әле беҙҙең ырыу еренә килеп етмәгәндәр. Ҡыуаҡандар, күҙәйҙәр менән Ләмәҙе буйында беҙ уларға көслө маниғ (кәртә, ҡаршылыҡ) күрһәткән инек өсөнсө йыл, беләһегеҙ. Бынан Урал аша беҙгә үтә алманылар. Шималға, үргә киттеләр. Ишетеп, күреп тораһығыҙ: ҙур жасуслыҡ (шымсылыҡ) алып баралар. Күптәре ихтилафта башын һалды. Ғарызнамә артынан ғарызнамә килеп уҡыйҙар. Әммә бөтәһе лә мөнәфиҡлыҡ (ике йөҙлөлөк, эскерлелек) күрһәтә. Бәғзеһе туранан-тура итәғәт (буйһоноу) талап итә. Беҙ үҙ еребеҙҙә йәшәйбеҙ, үҙ һыуыбыҙҙы эсәбеҙ. Үҫәргән, Тамъян кеүек, ниңә беҙ үҙ еребеҙгә сит бауырҙан шәһаҙәт (таныҡлыҡ) алырға тейешбеҙ? Нисек аңларға быны? Суҡынмыш бәжәнәк Йәрмәк һалған юлды киҫеү өсөн, Ғәли ханға ярҙамға Алта нуғай килгән. Нойондары менән ҡалмаҡтар ҙа килә,

ти. Еребеҙҙе ғасб (көслəп тартып алыу) итергə юл ҡуйыу — ул үлем менəн бер! Тəклиф (көслəп) ҡушылыу ҙа юҡ! Жасустарҙың (шымсыларҙың) барлыҡ теләгəне — беҙҙең мəғдəн тапҡан ерҙəрҙе белеү, тимер иретеүселəрҙе, ҡорал һуғыусыларҙы үлтереү, күмер яндырыу серҙəрен өйрəнеү. Быныҡ өсөн улар үҙебеҙҙең аранан уҡ һатлыҡтарҙы эҙлəйҙəр. Ер һыҙмаһы — хəритə (географик карта) яһайҙар. Мал-тыуарға, ир-атҡа, малайҙарға хисап алып барырға тырыша килгəн һəр вəзирҙəре лə. Һиҙəһегеҙҙер! Ҡурҡыныс хəбəрҙəр тараталар. Бесəнлектəргə, йорт-ҡураға төндəрен үрт һалып ҡасалар.

Бына шуларҙан сығып, уландар, түбəндəгеләрҙе ҡарар ҡылам.

Тимер, ҡурғаш, көрəн тимер (марганец), көкөрт, баҡыр, алтын сыҡҡан тамаҡтарға ҡарауыл ҡуйырға! Темеҫкенеп йөрөгəн шымсы сит бауырҙы йəлləмəй юҡ итергə. Был — минең ҡарар! Мəғдəн иреткəн нарлы (ут, ялҡын) ерҙəрҙе киңəйтергə, яңы мейестəр ҡорорға. Мөһим бурыс булып тимер иретеү, ҡылыс, ҡорал һуғыу оҫталарын һаҡлау тора. Һаҡлау ғына түгел — һəр береһен ҡарауыллау! Оҫталарҙың һəр береһенə, кəм тигəндə, биш-алты ярҙамсы ҡуйырға. Бөтəһенə лə бер ləҡəб (ҡушамат) бирергə. Кемдең кем икəнен белмəһендəр. Шымсылар беҙҙең ҡылсыға (кольчуга) һəм ҡылыстар менəн бик ҡыҙыҡһына. Мəғдəн иретеү, тимер алыу, ҡорос һуғыу ысулдарын белергə бурыс ҡуйылған уларға.

Сатҡыр (Урта Урал — Ибер Камышлов ҡалаһынан көньяҡтараҡ) буйындағы һуғышта беҙ уларҙың ҡылыстарын өҙə сабып бөттөк. Ҡаты тимер — ҡорос эшləү алымын белмəй улар. Ҡорос һуғыу өсөн ниндəй күмер һүндерелгəнен дə сер итеп тоторға! Тағандағы, Ҡыятүр, Өрəңге үңерендəге, Ҡырласнарҙағы мейестəр айырым һаҡлауға мохтаж. Ҡиммəтле таштар мəркəзе (баш ҡала, ер) Йəмəле тауы исемен һəм есемен сер итергə. Fөмүмəн, мəғдəн сыҡҡан һəр урынды, беҙҙең тəғлимəтте алып араға килеп морон төрткəн кешеларҙан дə йəшереп тоторға.

Кешеларҙе дүрт-биш сифатҡа бүлеп, хеҙмəткə беркетергə. Мəғдəн сығарыусылар, мəғдəн ташыусылар, иретеүселəр, ҡорал һуғыусылар, һəр төрлө ярҙамсылар был ҡарарыбыҙҙы Йомран-Табындарға, кəлсерҙəргə, кеселəргə еткерегеҙ! Был эштəрҙе барлауға Айшанды тəғəйен итəм. Юҡбирҙе аҡай күҙ-ҡолаҡ булыр. Айшанға ярҙамсылар: Тайшан, Əҡембəт, Һарығол, Ҡырлас. Ҡалғандарын үҙегеҙ билдəлəрһегеҙ.

Йомакилде менəн үҙем дəғəрмəстə йөҙлөк эйəртеп Fəли ханға барып киləм. Ҡалған йөҙлөктəрҙе бүлеп, ҡушылған эштəрҙе ентеклəп башҡарығыҙ! Йорт янында бер-ике йөҙлөк ҡарауылға ҡалһын, – тине Буғай хаким.

– Хәҙрәт, – тип өндәште ул Өмөтбай муллаға. – Урыҫ батшаһына баш эйеп барғандарҙан шундай хәбәрҙәр килә: ерҙәрен үҙҙәренә ир-ат һанына ҡарап яҙа, тиме? Уныһы тағы ниндәй ғиллә була икән? Бер ғәләмәте барҙыр ул монафиҡлыларҙа (ике йөҙлөләрҙә). Хәҙрәт, һин барлыҡ нәҫел-нәсәбебеҙҙең аҙаматтарын икенсе ҡағыҙға күсереп теркә. Мин юлдан ҡайтыуға әҙер булһын.

Үҙең дә уйла. Ни өсөн кәрәк булыр был? Зиһенлеләр менән кәңәшләш. Яуап тапһаң, сауаплы булырһың. Әммә ир аҙаматтары һанын ете йоҙаҡҡа биклә. Үҙеңдә булһын хисап.

Өйөрҙәрҙе теркә, бигерәк тә өс-дүрт йәшлек ҡонандарҙы. Төп китапты хәҙер үҙем ҡулыңа бирермен. Хәритә тирәһе (географик карта төшкән йоҡа тире) һиңә кәрәкмәҫ.

Йә, барығыҙ тарафынан да мәҙкүр (күрһәтелгән, атап кителгән) ғәһед (һүҙ ҡуйышыу) ҡырҡа үтәлһен. Риғаяғыҙға (иғтибар итеүегеҙгә) рәхмәт! Таң атыу менән, тейешле ерҙәребеҙгә юлланайыҡ!

Буғай хаким яй ғына урынынан торҙо. Бисәләре Аҡсискә һәм Юлдус оҙатыуында ыҙмаһы яғына атланы. Алдарына бик күп бурыстар ҡуйылған ир-аҙаматтар тиҙ генә таралышманы. Төн бик йылы ине. Ҡибланан йомшаҡ ел иҫә. Ир-аттың лыбыр-лыбыр һөйләшкән тауыштары аша меңәрләгән сиңерткәләрҙең сигерләшкәне, таллыҡтағы һандуғастарҙың сут-сут һайрауы һәр кемдең күңеленә һағыш та, һағайыу ҙа өҫтәй ине.

* * *

Буғай хаким китте лә батты. Көндө — төн, төндө көн алмаштырҙы ла алмаштырҙы. Өс йома намаҙын Өмөтбай мулла Буғай вәлиһеҙ (вәли — дәүләттең бер өлөшө менән етәкселек иткән вазифа) үткәрҙе. Кешеләр уның яҙмышын һағайыбыраҡ һораштырҙылар. Яуап урынына Өмөтбай мулла һәр саҡ икенсе хәбәргә күсер булды. Ә ҡыҙыу ҡанлы Айшан менән Тайшан да аталарының яҙмышын әйтеп барманылар. Кәйефтәре юҡ ваҡытҡа тура килһәң, йә ҡырҡыу яуап, йә көтөлмәгән эш ҡушырҙар... Әҙ генә киреләнһәң, мүлдергәһе ҡулынан ысҡынмаған өс тармаҡлы нәҙек ҡамсы осаңа килеп ҡуныуы бар.

Кистәрен Юҡбирҙенең улдары Әҡембәт, Ҡырлас, Һарығол менән осрашып, был турала төрлө фараз йөрөтһәләр ҙә, эҙләп сығыу әле иртәрәк, киткән ере бик йыраҡ бит, өҫтәүенә, Ғәли хан бер урында торор микән? Ай-һай! Урал итәге, Ибер тигеҙлектәре буйлап эҙләүе уны...

Тағы ла бер йома көтөргә булдылар уны. Буғай вәлей ҡушҡан эш тә бик ҡатмарлы, ауыр ине. Тимер иретә, ҡылыс һуға торған

мейестәрҙе киңәйтеү өсөн барыһын да бер юлы боҙоп ташлау яңылышлыҡ булыр, тип фаразланы улар.

Нисек кенә булмаһын, барлыҡ мейестәрҙең ауыҙына кәрәкле мәғдәндәрҙе күберәк ташытыу эшен ойоштороҙолар. Әре мейестәрҙе киңәйтеү өсөн, ҡыҙыл балсыҡтан дүрткел һуҡмалар яһап, төрлө-төрлө ҡыҙыулыҡта бик оҙаҡ яндырҙылар. Янып ҡатҡан һуҡмалар менән мейестәрҙең иҙәнен, яҡтарын тигеҙләп һалдылар. Күмерселәрҙән тик ҡарағас күмере генә һүндерттеләр. Бынан башҡа, мәғдән иретеү, ҡорос һуғыу, һөңгө, уҡ баштары, ҡылыс, айбалта, суҡмар, өҙәңге, йүгән өсөн ауыҙлыҡ һәм башҡа бик күп төрлө эштәрҙе ойоштороу элекке кеүек көндәлек эш булһа ла, өҫтәмә бурыс тынғы бирмәй ине. Өҫтәүенә, Әйҙең ғәрепкә боролған ерендә урыҫ батшаһының йөҙ иллеләгән ҡораллы кешеһе, мәғдән алған урында Атанай һәм Бейғара батырҙың йөҙләгә менән осрашалар. Һөйләшеү буйынса, Атанай уларға кисекмәҫтән кире боролорға, беҙҙең ергә ҡайҙан килеп сығыуҙарын һорап мөрәжәғәт итә. Әгәр һеҙ Әйле ере аша килһәгеҙ, Көҙәй ырыуы вәлиенең беҙгә яҙған танытмаһы булырға тейеш, ти ул. Команда башлығы, бик тәкәббер ҡыланып, ниндәй мәғдән сығарыуҙарын, был таштарҙың ҡайҙа иретелеүен әйтеүҙәрен талап итә. Ерҙең исемен һорай.

Бер-бер хәл була ҡалһа тип, Бейғараның кешеләре килмешәктәрҙең артына баҫа.

Атанай, команда башының ҡаршыһына килеп баҫа ла: «Ер ташһыҙ булмай, илен һаҡлаған ашһыҙ булмай! Беҙ һеҙгә баҫҡын булып кермәнек. Баҫҡын ашын да, башын да юғалтырға тейеш. Һау саҡта һеҙгә китеү хәйерле!» — ти.

Ҡапыл мылтыҡ атҡан тауыш ҡаяларға, ҡалын урман кейеп ятҡан тауҙарға бәрелә-бәрелә Әй үҙәне буйлап таралды. Килмешәктәрҙең ут бөркә торған ҡоралдары бер-бер артлы шартлай башлағанда, Бейғараның егеттәре ҡындарынан ҡылыстарын һурып алып, баҫҡынсыларҙың байтаҡ өлөшөн һирәгәйтеп тә ташлай. Тау-таш, урманлы ерҙә ике яғы ла үткерләнгән оҙон меч та, килбәтһеҙ ауыр мылтыҡ та ярҙам итмәне. Аралаш һуғышта мылтыҡ яһарға баҫҡындың мөмкинселеге булмай. Киң, ауыр меч менән бер һелтәгәнсе, оҙон, тар, еңел, кәкрерәк ҡылыс менән Атанай егеттәре бик сапсан эш итә.

Ҡулбашына йәҙрә тейгән Атанай: «Ҡалғандарын ура, ура! Урап ал!» — тип һөрәнләй боронғо ғәҙәт буйынса. Урыҫтар «ура» һүҙенән ҡурҡалар ине, сөнки элек-электән маҡул-төркиҙәрҙең һуғыштағы бындай саҡырыуы һәр саҡ еңеүгә тылсым асҡысы булды. Ҡалған егерме биш-утыҙлағаны, өлгөрмәгәне текә тауҙарға, урман араһына ҡасты.

Ҡул һуғышында һыбай килеш бәрелештәрҙе лә күп үткәргән Бейғара батыр, хәрби етәксе булараҡ шуны аңланы: тау-таш, урман араларында ат өҫтөнән һуғышыу отошло түгел.

Алыш урынында егерме бишләгән яҡшы тәгәрмәсле арба, һикһән-туҡһан мылтыҡ, шул уҡ сама килбәтһеҙ төҙ ҡылыс, көршәк һауыттарҙа һаҫыҡ ҡара дары, күн тоҡсайҙарҙа тимерҙән бөрсөклəп ҡойолған эреле-ваҡлы йəҙрəлəр, аҙыҡ-түлек, йүгән, ҡамыт, башҡа əпсен-төпсөн тегер өсөн һəр төрлө ҡайыш, һауыт-һаба һəм башҡа əйберҙəр менəн етмешләгән мəйет ятып ҡалды.

Ләкин Атанай менән Бейғара утыҙлаған ир-егетен юғалтты.

Баҫҡынсы шəһиттəрҙе ергə бирҙеләр, үҙҙəренекен арбаларға һалып, ҡышлаҡҡа ҡайтыуҙан башҡа сара ҡалманы. Алған яра, күрəһең, бик тəрəн булғандыр. Атанай юлда йəн бирҙе. Күрəһең, Буғай хакимдың тоҡомдаштарына биргəн əмере барыһында ла ҙур яуаплылыҡ тыуҙырған. Үлер саҡта арбала ятҡан Атанай, йоҡоһонан уянғандай, терһəктəренə бер аҙ таяна биреп ҡалҡынды ла: «Сынтимер аҡай тереме?» тип һораны. Ҡорос тимер эшлəүсе Сынтимерҙең ғүмере өсөн Атанай, тағы ла биш егет яуаплы ине. “Тере, тере,” — тип шыбырланылар уға. Барыһына ла риза булғандай, мəңгелеккə күҙҙəрен йомдо Атанай.

Дүрт йома үткəс кенə Алтын-таш ҡышлауына сапҡын килдe. «Буғай хаким, Йомаҡай аҡай һəм башҡалар ҡайтып килə! Юлдары көн оҙонлоғондай ҡалды!» — тип һөрəнлəне ул. «Ауыҙыңа бал да май!» — тип ҡысҡырҙы Аҡсискə.

Шул хəбəрҙəн һуң, əйтерһең дə, оло ҡышлауға йəн керҙе. Бөтə Алтын Түбə буйлап йүгерешеп, балалар һөрəн һалды. «Буғай ҡарттай ҡайта! Буғай ҡарттай ҡайта! Килеп етеүенə бер көнлөк юл ҡалған!» — тип сырылдаштылар.

Яҡын-тирəлəге барлыҡ йəйлəүҙəргə, ҡышлауҙарға тиҙ таралды был хəбəр. Мəғдəн тамағында һəлəк булған ир аҙаматтарын ерлəү ҡайғыһы баҫҡан ырыу халҡы, геүləгəн бал ҡортондай, тағы ла терелде. Йəйлəүҙəрҙең тирə-яғын таҙартыу, ҡышлау урҙаларын һепереү, үҙ-үҙҙəренең ҡиəфəттəрен ҡарау менəн бергə, ҡушылған бойороҡтарҙы үтəү миҡдарын да һанай башланылар. Айшан менəн Тайшан кəңəш өсөн тағы ла Əҡембəтте, Ҡырласты, Һарығолдо, Аҡсура һəм Туҡсора тоҡомдарын, Бейғара хужаны, Өмөтбай һəм Ислам хажи мулланы саҡырған ине. Йыраҡ йəйлəүҙəргə, ҡышлаҡтарға ат саптырырғамы, əллə Буғай вəлей ҡайтып еткəс үҙе фарман һалырмы?

Оранды үҙе ташлар, кəрəк булһа. Шулай хəл иттеләр ырыу башлыҡтары. Əле ҡолоҡайҙарға, быуаҙ бейəләргə ҡышҡы селлəгə һəм аҡман-тоҡманға бесəн əҙерлəү, япраҡ һындырып өйөү эштəре лə күп. Көҙгөһөн алыш-бирешкə үткенсе бизнəкəүҙəр,

ноғайҙар һәм ҡаҙаҡтар дегет, ҡарағас сайыры, ҡара йәнлек тире-ләре һорап теңкәгә тейә торғандар.

Ҡаҙаҡтар беҙгә яраҡлы әллә ни тауар алып килмәһә лә, көньяҡтан килеүсе дөйәле бизнәкәүҙәр киҫәк йә һипмә алтынға ебәк, буҫтау тауар, ҙур яулыҡтар, ҡәһүә, сәй, шәкәр, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн мәрйен, гәрәбә, һөрмә, алҡа, көнсығыш балтаһы, һөңгө, уҡ баштары, ҡылыс-хәнйәрҙәр, әллә ниндәй беҙ күрмәгән хазиналар тейәп килгеләй. Ниңәлер улар көнсығыш шималдан килеп сыға ла ҡибла яҡҡа китеп юҡ була. Күсем хан, унан алдараҡ та тәртипкә һалынған сапҡын хеҙмәте әлегә тиклем бик төҙөк эшләп килә. Эшләмәҫлекме ни? Сапҡын — ҡолаҡ, сапҡын — күҙ! Сапҡын — ҡарауыл! Ваҡытында хәбәр алып килмәһә, йә ҙур күңелһеҙлеккә дусар булыуың, йә бөтә ырыу менән оло бәләгә тарыуың ихтимал. Буғай вәлиҙең торағынан дүрт яҡҡа ла һәр ун, егерме саҡрым һайын атлы сапҡындар торағы бар. Тораҡтар йә күренмәле бейек тау башында, ялан ерҙә булһа — бейегерәк ҡалҡыулыҡта, кисеү тамаҡтарында, оло һаҙлыҡ муйындарында урынлашҡан ине. Тау башындағыларға хәбәр итеү еңелерәк. Биш төрлө мәғлүмәт бергә ине улар. Тауҙың ҡиблаһындағы төтөнлөк бер хәбәр ебәрһә, шималындағы икенсе хәбәр әйтә, ә тау түпәһендәге өсөнсө мәғәнә бирә ине. Уларҙың араһы ла оҙон. Тиҙ генә сабып етермен тимә. Ул тауҙарҙың күбеһенең исеме бөгөн дә Ҡарауыл тауы. Ялан ерҙәге тораҡ сапҡындары күберәк ваҡыт бер-береһенә йәһәт кенә хәбәр менән саба. Унар саҡрым һайын ҡуйылған илле сапҡын биш йөҙ саҡрымдағы мөһим ваҡиғаны төп ултыраҡҡа ике намаҙ ҡтеүгә килтереп еткерәләр ине.

Шулай һис бушамай көн артынан көн үтте. Иртәгәһен йоҡонан тороуға ысынлап та барлыҡ кешеләре менән һис юғалтыуһыҙ Буғай хаким ҡышлау ураҙаһына килеп керҙе. Бик иртә булыу сәбәпле, ырыуҙың яҡын-тирәләге йәйләү кешеләре лә ҡаршы ала алманы уны.

Һәр саҡ ҡаршы алыуҙарға, оҙатыуҙарға өйрәнеп бөткән хаким был юлы һис бошонманы. Иң мөһиме: ике бисәһе лә ҡапҡа тышында ҡаршы алды уны. Арыҫайны, бик арыҫайны Буғай. Үҙе генә түгел, бар йөҙлөгө бик йонсоғайны. Шуға ла ул, ҡулын күтәреп, барыһына ла таралырға, ял итергә ишара бирҙе. Өс көн ял итте Буғай ыҙмаһында. Йыуынды, өҫ-башын алыштырҙы, бисәләренең күңелен күрҙе, ейән-ейәнсәрҙәрен иркәләне, әллә ниндәй ят тәмлекәстәр таратты.

Буғай хаким юл буйына тәрән уйға батып килде. Ярай, мин инде ашай торған һый-нигмәтте ашағанмын, тере һыуҙы ла, күпме теләһәм, шунса эстем. Икенсе уйҙар борсоно Буғайҙы. Урыҫтар Уралдың урта өлөшөнән шәреҡкә, Ибер киңлектәренә сығып, бер-бер артлы нығытмалар төҙөйҙәр икән. Һөйләшеү ҙә юҡ,

һорау ҙа юҡ! Ниндәй вәхшилек! Ниндәй яуызлыҡ, оятһыҙлыҡ. Инде нисә быуат ишетелмәгән яуызлыҡ башҡорт илендә! Туҡтамыш хан менән Аҡһаҡ-Тимерҙең яғалашыу ваҡытына инде ике йөҙ йылдан артыҡ ваҡыт үткән. Беҙҙең төбәк унан һуң бындай баҫҡынды белмәне... Башҡорт илебеҙҙең жәнүб яғы урыҫ баҫҡынынан яҡтайып, яһаҡ түләргә риза булған бит.

Урыҫтар шимал менән яйлап шәреҡ яҡҡа үтеп баралар. Беҙҙе урайҙар ул яҡтан. Ярай ҙа ҡибланан беҙгә әлегә йоҙроҡ төйөүсе юҡ.

Ғәли хан янында булған ваҡиғаларҙы ла берәм-берәм иҫкә төшөрҙө Буғай вәли. Оло ҡоролтайҙа һөйләрмен, тип ниәтләнде ул. Улай тиһәң, оло жыйын жыйһаң, барыһына ла серҙе һөйләп бөтөү була. Тәғәйенлеләрен генә сақырайым, тип уйынан кире ҡайтты хаким.

Буғайҙың сапҡындары, ялан яҡтағы ҡатайҙар, ҡара-табындар ярҙамы менән Тубылдың текә ярында торған Ғәли хан ултырағына яраһы уҡ тура юл менән алып сыҡты. Ғәли хан уға өс сапҡын ер араһы ҡаршы килде. Ул Ишем ярынан Тубылға күскән ине. Ғәли хан ваҡиғаларҙы Буғай вәлигә ҡарағанда күберәк белә. Ул ҡырғыҙ ҡайсаҡтар менән дә аралаша. Урыҫтар Ибергә ҙур-ҙур ултыраҡ булып урынлашалар, тип һөйләне. Бер-береһенә тик ҙур ҡарауыл көсө менән генә йөрөйҙәр. Ер тырнайҙар. Бөртөклө ашлыҡ сәсәләр. Ҡорал, башҡа кәрәк-яраҡты Урал аша батшалыҡтарынан килтерәләр. Байтаҡ утыраҡтарын Ғәли хан яндырған. Урыҫтарҙың ҙур бер өлөшө Иртыш аша Упҡа уҡ киткән икән.

Үҙенең олоҫона улы Ғәлиҙе ҡалдырып, Күсем хан урыҫтарҙы ҡыуалап, арттарынан киткән булған. Шәреҡ Иберендә хакимлыҡ иткән Тайбуға хандың ейәндәре Күсем хандан ярҙам һорағандар икән. Упҡа еткәс, Күсем ғәскәренең төп өлөшөн йылға аша урыҫ баҫҡағын эҙләргә сығара. Үҙе ғаиләһе һәм бер йөҙлөк кенә кешеһе менән һул ярҙа ҡала.

Шул сақта Военков етәкселегендәге ете йөҙ урыҫ һәм улар менән Ҡазан яғынан килгән өс йөҙ татар Күсем хандың торағын арттан баҫа. Күсем хан йөҙлөгө тамам ҡыйратыла. Уның балиғ булмаған биш улы, һигеҙ ҡыҙы, бер төркөм кешеләре менән бисәһе әсирлеккә алына. Был хәл 1598 йылдың 20 август көнө була. Үҙе аяуһыҙ һуғыша-һуғыша көньяҡтараҡ көн күргән нуғайҙарға килә. Хәл-әхүәл тураһында улдары Ғәли хан менән Ишем солтанға хәбәр еткерә. Нуғайҙар урыҫ воеводаһынан үс алыр өсөн көс бирмәгәс, Күсем Бохара ханлығына юллана.

Шунан бирле Күсем хандан хәбәр юҡ икән. Ғәли хан башҡа хәл-әхүәлдәрҙе лә һөйләне. Жәнүб — шәреҡ яғынан ҡалмаҡ тигән бик күп халыҡтың килеүен дә хәбәр итте ул. Көндәрҙән бер көн

Fәли хан менән бергәләп тау яғында ҡалған мәғдән иретеү мейесен ҡараны.

Fәли хан Буғай вәлигә ҡоралланыу, мәғдән суйынынан тимер һуғыу эше төп бурыстарҙың береһе булыуын төшөндөрә ине. Мәғдән урынына барып еткәс, күрҙеләр. Барлыҡ тимер оҫталары үлтерелгән. Мейес емерелгән, төҙөндөләр яндырылған. Яндарында өс йөҙлөк кенә һуғышсылары булһа ла, дау ҡубып, был ерҙән ҡырҡ-илле саҡрымда торған урыҫ ултырағын табып алдылар. Көтөү килер алдынан ҡапҡалары асыҡ булыуҙан файҙаланып, Fәли хан йөҙлөктәре, ғәйәр ҡысҡырышып, бүрәнә, ҡойма менән уратып алынған слобода тигән тораҡҡа барып керҙе лә ҡорал тотоп ҡаршылашҡандарҙы сапҡыларға тотондо. Буғай вәли оло йәштә булғанға күрә, был алышҡа кермәне. Ике тәғәрмәсле бейек арбала йыраҡтан ғына алышты күҙәтте.

Ҡара төтөн сыҡты. Сиркәү тигән осло бейек өйҙән саң итеп шаңдау һуғалар ине. Кешеләр слободанан йә атта, йә йәйәүләп төрлө яҡҡа сығып ҡасалар. Таңға тиклем янды слобода. Яҡтыра башлағанда бай ғанимәт (трофей) алып йыйылдылар. Өс көндән, өйлә намаҙы үткәс кенә хан ултырағына ҡайтып еттеләр.

Буғай ҡайтыр ваҡытта Fәли ханға бер күн янсыҡ һипмә алтын бирҙе. Олатаһы Мортаҙа хан торағында алтындың күплəп йыйылып сығыуын белә ине Fәли. Алтынға барлыҡ нәмә алып була. Был ниғмәтте ул тик ҡорал туплау өсөн генә тотонорға ҡарар итте.

Бергә һөйләшкән ҡарарҙары байтаҡ булды. Fәли хан да Буғай вәлигә көнсығыш туҡымаһы, йомшаҡ балаҫтар менән ябылған арба, бер нисә тиҫтә мылтыҡ, ҡара дары һәҙиә (бүләк) итте.

Хаким кәйефләнеп юлға сыҡһа ла, дөйөм ваҡиғалар бик хәүефләндерҙе.

* * *

Юлдан ҡайтыуына йома үткәс кенә бәләкәй ҡоролтай йыйҙы хаким. Барлыҡ аймаҡтарҙан, түбәләрҙән, йәйләүҙәрҙән, утыраҡтарҙан килделəр. Буғай суйын иретеүселəрҙең, тимер һуғыусыларҙың, ҡорос эшләүселəрҙең, алтын йыйыусыларҙың береһен дə ҡалдырмай саҡырырға әмер биргән ине. Алтын-Таш ултырағына барыһы ла килде.

Fәҙәт буйынса, бик күп шеш әҙерләнде. Шешлекте тик һарыҡ итенән генә әҙерләнеләр, ә ағас алдырҙағы киҫәк-киҫәк боҫло ит тик йылҡыныҡы булды.

Эйәртау итәгендәге Буғай урманы ситендә, Тәңребирҙе шишмәһе янында ҙур ғына яланда булды ҡоролтай.

Өмөтбай һәм Исламхажи мулла өйлә намаҙын уҡыны. Берҙəм доға ҡылғандан һуң, туйғансы шешлек менән һыйланды халыҡ.

Унан һуң ыçланған күнәктәрҙән кем күпме теләй, шул тиклем сүмес күтәреп ҡымыҙ эсте.

Ата-олаталарының аттарын ҡарап торорға барған малайҙар Тәңребирҙе шишмәһенең һыуын туйғансы һемерҙеләр, һибеште, ҡоторҙо...

Фәмһеҙ бала сәктың ҡайғыһы юҡ ине шул! Атай ҙа, инәй ҙә көнө-төнө янда. Яуҙа, йә булмаһа ауырып, яҡты донъя менән бәхилләшкән ағай-эненең дә балалары йәтим түгел. Улар ҙа йә ағайҙарының, йә бабайҙарының ғаиләһендә бер туғандар!

Йәрхәмбикалла! Ул ҡағиҙәне Буғай хаким үҙе лә, Өмөтбай һәм Исламхажи мулла ла бик ентекле тикшереп тора. Йыраҡ ултыраҡтағы муллалар ҙа был һорауҙың нисек тороуына Өмөтбай мулла алдында яуап тота. Өмөтбай мулла күберәк ер-һыу, малтыуар, матди байлыҡ, ҙур дөйөм ырыу кимәлендә тикшерелгән һорауҙарҙа Буғай хаким менән кәңәшләшеп хәл итһә, Исламхажи мулла күберәк үҙ-ара мөнәсәбәттәр, тигеҙлек, ғөрөф-ғәҙәт, ҡыҫҡаһы, көндәлек тормош ағымы һорауҙары менән мәшғүл булды. Үҙ-ара бик оло сәбәп-низағтар сыҡҡанда ғына шундай ҡоролтай саҡырыла.

Тәңребирҙе шишмәһе буйында йыйылған ҡоролтай, Табын-Барын ырыуы халҡы яҙмышында ғына түгел, барлыҡ Көньяҡ Урал халҡының киләсәге хаҡында ине.

Буғай хаким майҙанға Ғәли хан бүләк иткән уҡалы балаҫтар менән биҙәлгән, үҙе яратҡан ерән ҡашҡа айғыры егелгән арбаһында килде. Менгеһе, суҡлы әйәр һалынған бурыл юрғаһы, арба артынан килә. Аҫ башлы, матур ваҡ таштар һеңдерелеп эшләнгән тотҡалы кәкре ҡылысы, өс асалы ҡамсыһы әйәр дуғаһына бәйләнгән. Ҡалҡыуыраҡ түпһәлгә ҡуйылған ултырғысында атаһының бар халыҡҡа күҙ йөрөтөп сыҡҡанын һиҙгәндәй, Айшан, билге итеп ҡамсы тотҡан һул ҡулын күтәрҙе. Ул һулаҡай ине. Барлыҡ халыҡ тын ҡалды. Һауала, бик бейектә, ҡанаттарын елпемәй йөҙгән бөркөткә ҡарап, фекер туплап алды ла хаким һүҙ башланы:

– Ағай-эне, уландар! Хәдисәләр беҙҙе йышыраҡ осраштырып тороуы яҡшы. Әммә бөгөнгө шәрех (аңлатма) барыбыҙға ла бик ҙур бурыс йөкмәтә. Һеҙгә мәғлүм: мин Ғәли хан янында булып ҡайттым. Унда күргән һәм ишеткән ваҡиғаларҙы һеҙгә еткерергә лазым (тейеш, кәрәк) таптым.

Мөҡҡәддәмәмдең (һүҙ башы, кереш) тәүге өлөшө хәбәр булыр. Асылын аҙаҡ һөйләрмен, әйәһе менән... – Буғай ниҙер хәтерләгәндәй, бер ни тиклем тынып ҡалды. Ян-яғына ҡаранып, күҙҙәре менән Һарығолдо һәм Ҡырласты тапҡас, уларҙы ҡулы менән ишаралап саҡырҙы...

– Халыҡ араһында жасустар (шымсылар) юҡмы икән? Кешелә-регеҙгә әйтегеҙ: танып етмәгәндәрҙе күҙҙән ысҡындырмау кәрәк ултыраҡтарына таралғас та... Һәр ерҙә кешеләрегеҙ әшләйме? – тип һораны ул ситкә боролобораҡ тыныс, әммә бик ҡәтғи итеп.

– Әйе, әйе, хаким, ул әште беҙ ойоштороғанбыҙ. Шигебеҙ әлегә юҡ, – тинеләр.

Яуапҡа риза булғандай, хаким үҙ урынына ипләңкерәп ултырҙы.

– Әлегә тиклем беҙгә килеп еткән хәбәр буйынса, олуғ ханыбыҙ Күсемдең илебеҙ, еребеҙ өсөн шәһитен белә инек. Юҡ хәбәр булған! Күсем хан иҫән! Тәҡлеф (көслән ҡушыу) өсөн килгән ерәндәрҙе ҡыуғанда, икенсе береһе аңдып тороп, арттан баҫа. Төп көсөн Уптың аръяғына сығарған була. Үҙе нуғайҙарға сыға, ә янында әҙ генә нөгөрҙәр ҡала. Тик ғаиләһе генә әсиргә төшә. Күп ҡан аға. Әҙселекте күпселек еңә. Хәҙер ул Тайбуға хан балалары менән берлектә ҡалмаҡ тигән халыҡ менән һүҙ беркетә икән, яңы ғәскәр төҙөй, ти. Уға һарттар, нуғайҙар, ҡырғыҙҙар ҙа берләшә. Ғәскәр төҙөр өсөн күп алтын, аҫыл ташлар, тимер-ҡорос кәрәк, ти. Урыҫтар болғарҙың тәхетен таяныу итеп, беҙҙең Өпәне лә биклән алды. Үкенес, беҙ Өпәне нуғайҙарға ышанып, тижарәт (сауҙа, алыш-биреш) өсөн ваҡытлыса рөхсәт иткән инек тораҡ итергә. Урыҫтар килгәс, улар Өпәне ташлап китте. Өпә беҙгә хәжәт булғанда берәү ҙә һорауһыҙ керә алманы. Бөтәбеҙ ҙә унда осрашыр инек. Ул ата-олатайҙарҙан ҡалған ғәҙәт булды. Урыҫтар Өпәне яулап алманы, тыныс көйө керҙе. Беренсенән, Өпәне яҡларға беребеҙгә лә фарман булманы, икенсенән, беҙ мәғдәнгә килдек, башҡалар тоҙға китте. Өпәлә нығынғас, улар Урал аша тура беҙгә сығырға бик ныҡ тырышты. Уларҙың ҙур бер ғәскәре әллә нисә йөҙ ылауы менән бынан ун биш йыл самаһы әлек тау аша беҙгә килергә сыҡҡайны. Ҡаралар күптәнән бирле беҙҙең менән беҙҙең ерҙәрҙе ижғал итеү (биләү) өсөн ғауғалашалар.

Ҡаралар юл күрһәткән уларға. Улар күптәнән бирле беҙҙең ерҙәрҙе биләү өсөн ғауғалаша. Әммә таҙҙар, ҡыуаҡандар беҙгә тиҙ генә хәбәр иттеләр. Иттифаҡлыҡ менән (берлек, ойошҡанлыҡ) тау аша ҡаршы барып, Егәлгә артында, Ләмәҙе буйында тегеләрҙе тамам ҡыйраттыҡ. Бик күп ғәнимәт (трофей) алдыҡ. Шунан һуң улар беҙгә килеүҙән ваз кистеләр. Хәҙер шималдан үтеп, ҡаралар менән бер һүҙгә кереп, беҙҙе шәреҡ-шимал яҡтан ҡамалайҙар. Ҡаралар урыҫтарға ерҙәрен биреп, бер нисә ырыуы Сулман буйына күсенеп китте, әлегерәк киткән ырыуҙаштарын эҙләп...

Ҡалғандары урыҫҡа яһаҡ түләү менән килешеп, күсенмәгәндәр. Урыҫҡа яһаҡ түләһәләр ҙә, улар беҙгә балиғ. Әле үткәндә Бүре солтандары килеп китте. Тәңре биргән көндәр һанаулы, кешелә-ребеҙҙе бергәләп химая итәйек (ҡанат аҫтына алайыҡ, яҡлайыҡ),

ғәһедләшәйек (һүҙ ҡуйышайыҡ, килешәйек), тип һораны. Ғасбҡа (көслəп тартып алыуға) һəм тəҡлифкə (көслəп ҡушыуға) беҙ ҡырҡа ҡаршы, бергəлəп ихтилафҡа (ҡаршылыҡ ҡылыу) торайыҡ, мөхарәбә (һуғышыу) итәбеҙ, тинем. Шәимдәр менән бик тә килешә алмаһағыҙ, ныйындырырбыҙ. Өрөш мырҙа ла һеҙгə күршелеккə һылыша түгелме? Һеҙҙең килеүгə тиләүҙəр ҙə ҡаршы булмаҫ, һөйләшербеҙ... Һе! Ҡаралар яһаҡ түләйҙəр! Үҙ ереңдə, үҙ илеңдə йəшəп, барып баш һалыуы, өçтəп яһаҡ түләүе?! Аллаһы Тəғəлə биргəн аҡ көн өсөнмө? Һеҙ аңлайһығыҙмы шуны, ағай-эне? Йəрхəмбикалла! Беҙ, барындар, тиләүҙəр, күбəләктəр, ҡыуаҡандар, əйҙе, күҙəйҙəр, мырҙа, һыҙғылар кемгəлер итəғəтле түгелбеҙ. Быныһы хəбəр булды, – тип ҡырт туҡтаны Буғай хаким.

Һүҙенең төп асылын əйтер өсөн, ул тағы ла етдиләнеберəк, бар халыҡҡа төбəп ҡарап сыҡты ла бойороҡло тауыш менəн дауам итте:

– Əле йəй миҙгеленең уртаһы. Тағы ла өс миҙгел үтер... Менгеләр ҙə, еген аттар ҙа тағы ла май жыйыр. Алдағы йəйҙə урыçтар тораҡ-нығытма итеп алған Өпəгə яу асабыҙ. Өпəне кире алһаҡ, Иберҙəн урыçтар үҙҙəре ҡасасаҡ. Ғəли хандың ҡарары шулай. Ҡабатлап əйтəм, Ғəли хан был яуға ноғайҙарҙы, үҙебеҙҙең барлыҡ Ибер табынлыларын, шəреҡтән килгəн ҡалмаҡтарҙы, ҡарағалпаҡһарттарҙы, ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙы йəлеп итмəксе. Бындай көстө туплау өсөн бик ҙур, бик ҙур əҙерлек кəрəк. Был эштəр шунан ғибəрəттер.

Төп мəсьəлə: ҡорал туплау. Быныӊ өсөн мəғдəн иретеү, суйындан тимер һуғыу, тимерҙəн ҡорос эшлəү, ҡорал йүнəтеү. Алтын йыуыу, алтын туплау — сауҙа, алыш-биреш өсөн. ул бик хəжəтле икəн, бик тə, бик тə, тип алтындың ҡиммəт таш. Иӊ алда инаныу өсөн ҡушылған эшкə яуаплылар, ҡоролтайға шəрех (аңлатма) бирергə тейеш, – тип уртансы улы Айшанға ҡараны.

Үҙен тəхет вариçе итеп тотҡан Айшан атаһы ултырған ултырғыс яныһа сығып баçты. Ул – оҙон һомғол буйлы, киӊ күкрəкле, ас яңаҡлы, үткер йəшел күҙле кеше. Аяғында табанлыҡҡа ҡат-ҡат ҡалын күн һалып тегелгəн тула ҡуныслы сарыҡ. Суҡлы ҡысмауҙары элмəк итеп бəйлəнгəн. Йоҡа буçтауҙан тегелгəн салбар, шундай уҡ бишмəт, башына түбəтəй кейгəн. Биленə оҙон кəкре ҡылыс бəйлəгəн, арҡырыһы бөгөлгəн тимер булһа ла, тотҡаһы ағас тамырлы. Ҡайтармалы асыҡ түшлеге аша күренгəн йөнлə күкрəгенəн көс, ҡеүəт үҙе сығып килгəндəй һиҙелə. Һул ҡулының белəҙегенə өс тармаҡлы нəҙек ҡамсы һабының мүлдергəһе кейелгəн.

– Атай, шəрəфле ырыуҙаштарым! Атайым юлға сығыр алдынан беҙҙең алға ҡуйылған бурыстар — ул ил бурысы! Ул барлыҡ халҡыбыҙҙың мəнфəғəте лə, бөгөнгөһө лə, киләсəге лə. Шуға ла

беҙ барыбыҙ ҙа һин ҡушҡан эштәрҙе бик уйлап, ентекле үтәргә тырыштыҡ. Ҡыятүр, Өрәңге, Һүлейәләге оло мейестәрҙе яңынан ҡорҙоҡ, ә Таған-Ай, Ҡырлас-Нәрәлеләге мейестәрҙе эшләп бөтмәгәнбеҙ. Уларға мәғдән ташыу йыраҡ, уныһы ла бәлә. Һүлейәләге, Ҡыятүрҙәге мейестәрҙе өсөнсө йыл Ҡыуарҡош һыртынан бире ятҡан Ҡаҡуа йылғаһындағы мейестәр кеүек итеп ҡорҙоҡ. Бейек, дүңгәрәк, соңҡа булһа, мәғдән тиҙ ирей. Һынап ҡараныҡ: күмер ҙә әҙерәк китә. Мөһәндис (инженер) оҫта Ҡолан, мейес ҡабырғаһынан таш төрбә аша ҙур тирһыҡтан ел өрөп эшләне. Ут та көслө яна, мәғдән дә ике-өс тапҡырға тиҙерәк аға.

Барлыҡ мәғдән сыҡҡан ергә ҡарауыл ҡуйҙыҡ. Сапҡындары ла бар. Оҫталар менән эшләгән барлыҡ кешеләргә бер ҡушамат бирҙек. Бурһыҡтар, турһыҡтар, тоҡтар... Сит кешеләр кемдең кем икәнен тиҙ генә аңламай. Бөтәһенә лә бер исем.

Айшандың был һүҙҙәренән һуң бар халыҡ шаулашып көлөп алды.

– Үҙең, үҙең кем булаһың хәҙер, – тип ҡысҡырҙы өмөтлө бөркөтсө. – Беҙ Буғай булабыҙ, – тигәс, бөтәһе лә тын ҡалды. Аҙ ғына тора биргәс, Айшан етди тауыш менән:

– Оҫталарға беркетелгән кешеләр мейестәрҙе лә, оҫталарҙы ла һаҡлай. Һәр бер ерҙә ун-ун биш егет... Алтын йыйҙыҡ. Алтын һәр ерҙә йыуыла. Юлдыбай ағай ултырағы артында күберәк сыҡты. Бында үҙебеҙҙә лә аяҡ аҫтында, тигәндәй. Ташҡын аҙағынан ҡалған сөптөрлөктәр ҡомонда ла күп. Сүплəп алдыҡ. Баҙар өсөн, тиһең, бына, атай, – тип, Буғай хаким алдына бер тоҡсай һалды. Биҙәртауға ла күҙ-ҡолаҡ ҡуйылған... Әле тағы ла ҡыҙҙар һыбай барып, ваҡ таштарын сүплəп килтергән. Ҡайһы — ҡолағына, ҡайһы муйынына еп менән элеп йөрөтәләр. Күмер һүндереүселəр ҙə үҙ эштәрен белə. Ҡарағас күмерҙең ҡараһы ла, ҡыуаны ла айырым һалына. Ҡайын, ҡарағай күмерҙəре башҡа ерҙə япма аҫтында ята. Мәғдән ташыу ҙа бара, эммə бик ауыр. Арба тəгəрмəстəре ватыла... – тип һүҙен бөтөрҙө Айшан.

Буғай хаким башҡаларҙан һәр береһенең эшен ентеклəп һораманы. Үрелгән ултырғысының арҡалығына ипләберәк һөйəлде лə һүҙҙе тағы үзе алды.

– Ҡышҡа тиклем мәғдән ташып, мейестәрҙән күберәк суйын алып ҡалыу лазым. Ҡар яуһа, йөрөү ауырлашасаҡ. Унан көҙгөһөн, ҡышын, тимер һуғылыр. Барлас хужаға күмер һүндереү, күмер ташыу эштəре булһын. Көсөктəр ҡорос һуғыр. Бейғара был эшкə мөғаян (билгеләнгән). Бынан башҡа, янсыларға, уҡсыларға күп итеп йүнəтəлəр эшлəргə кəрəк. Түсəй был эште яҡшы белə. Ҡонандар өйрəтеү, һайлап алыу эше Өмөт менəн Ҡайыптыҡы. Кешеләрегеҙҙе ҡушығыҙ. Күн, ҡайыш, эйəр, тəгəрмəс, арбалар эшлəүҙе Алғыр алыр. Арҡан ишеү, дегет ҡайнатыу эштəре лə бар

бит әле... беҙгә берәү ҙә ситтән, Тәмәскәнән, ҡорал килтермәҫ! Туҡыма, һирәк-һаяҡ ҡылыс, һауыт-һаба һәм башҡа ваҡ әйбер генә килтерәләр. Бөтәһен дә үҙебеҙ эшләй беләбеҙ, амин! Эшләүе — эшләү, эшләнгән эште һаҡлай ҙа белергә кәрәк.

Йомакилдегә эшләнгән әйберҙәрҙе бергә йыйып һаҡлау бурысын ҡуяйыҡ. Мәғәзәләр (һаҡлай торған урын) эшләтһен. Йә ярға ҡаҙып, йә таш менән бурап. Элек эшләнгәндәрен тәртипкә килтерһен. Хисабы ла булырға тейеш. Ул хисапҡа шәп... Ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ла эштәр бик күп. Һәр берәһе тула баҫһын, буҫтау һуҡһын, кейеҙ итектәр, сарыҡтар тегеү, дарыу үләндәре жыйып киптереп, тоҡсайҙарға һалыу, тегеү... Аҙыҡҡа ит киптереү, ҡорот, ҡаҡ ҡаҡлау... Эйе, бөтәһе лә кәрәк. Тайшан барлар быларҙың бөтәһен дә... Йәмғиәте менән...

Буғайҙы бигерәк тә Айшандың Ҡолан Мөһәндис тураһында һөйләүе аптыратты. Ҡолан тиренән турһыҡ тегеп, күмер өрҙөргән! Мәғдән дә тиҙ ирегән. Ҡаты-ҡото булып түгел — дегет кеүек аҡҡан. Бының бик-бик мөһимлеген хаким аңлай ине. Суйын алыу эше байтаҡҡа еңеләйә лә, миҡдары ла арта түгелме? Барыһына ла күрһәтергә кәрәк был эште. Алтын йыуыуҙа ла яңы ысулдар эҙләргә кәрәк.

Яңы ысул менән алтын йыуыуҙы Буғай хаким Ғәли ханға барғанда ла, ҡайтҡанда ла оҙон юл буйына уйланы... Яҙғы ташҡын булғанда текәлектәрҙән аҡҡан сөптөрләктәрҙә алтын ҡала ла баһа. Тимәк, ул балсыҡ, ҡом, ваҡ таштарҙан ауыр. Киҫәк алтын да, бөртөк алтын да ҡомдан аҫтараҡ ята бит. Шулай булғас, тип фекер йөрөттө Буғай, ҡайҙа соҡороҡ, алтын бөрсөктәре лә шунда йыйыласаҡ... Ҡапыл уның күҙ алдына йыуан ағастан өңөп эшләнгән һаба килде. Әгәр һабаны бер нисә итеп эшләп, тауҙан шәп аҡҡан йылға ағымына теҙеп ҡуйып, өҫтөнә алтынлы ҡом һибеп болғатып торһаң, балсығы иҙелеп ағып бөтәсәк. Ике-өс улаҡ булһа... Ҡомо, ташы өҫтә ҡаласаҡ, ә алтын — аҫта. Улаҡты бит нәҙек төҙ ҡарағай, ауһаҡтан, ҡайындан йымлап, юнып эшләп була... Шундай уй килде Буғай башына. Фекеренә ул ҡыуанды ла, тиҙерәк уйлағанса улаҡтар эшләп, ысынбарлыҡта һынап ҡарамаҡсы булды.

– Эйе, эйе. Алтын йыуыуҙа ла ысулдар эҙләргә кәрәк, – тигән кәңәш-бойороғон әйткән саҡта ул тап шул улаҡтар тураһында уйлай ине.

– Алтын киләсәктә байтаҡ кәрәк буласаҡ... Ғәли ханға ла ебәрербеҙ, үҙебеҙгә лә алмаш-толмашҡа ярар. Иншалла, алтын да еребеҙҙәге барлыҡ йылға үҙәндәрендә бар. Билдәле урындарын сит күҙҙәрҙән һаҡлау лазым. Ғөмүмән, мәғдән, алтын тураһында ауыҙ киреп һөйләшеүҙе тыйырға кәрәк. Уларҙы табыу, эшкәртеү

алымдары ла сер булыуы мотлаҡ, – тип уйланы Буғай хаким. Был фекерҙәрен ул бәләкәйерәк ҡорҙа әйтергә ҡарар итте...

Мәғдәнгә йөрөүселәрҙең, бигерәк тә мейестән китмәй тимер, ҡорос һәм ҡорал, кәрәк-яраҡ эшләүселәрҙең мал-тыуарҙарын ҡарарға, ғаиләләренә барлыҡ ярҙамды ойоштороргә кәрәк. Улар бит ҡайһы саҡта өсәр аҙна ҡайта алмай. Күмер һүндереүселәр ҙә шундай уҡ хәлдә. Шимал ҡаралары ла, йәнүбтәге тамъяндар, ҡатайҙар, күбәләктәр, ҡыпсаҡ-бөрйәндәр ҙә ҡорал һуғалар бит. Уларға барып ҡарап, күреп килеү ҙә кәрәк. Үҙҙәрен дә саҡырайыҡ. Яңылыҡтары булһа, өләшерҙәр. Тамъян, Бөрйән, ҡыпсаҡтар, улар итәғәтле (буйһоноулы) инде, ғәһедле (килешеү) ҡағыҙҙары буйынса, ҡорал һуғыуҙан тыйылғандар, тиме... Әммә ул — тик ҡағыҙҙа ғына, тиҙәрме үҙҙәре. Тимер иретеү, ҡорос һуғыу — беҙҙең бик боронғо шөғөл. Ата-олатайҙарыбыҙ был эш менән нисә быуат инде мәшғүл. Тимерһеҙ бер нәмә лә эшләп булмай, – тине Буғай хаким, үҙ алдына һөйләнгәндәй.

– Тайшан, – тип кесе улына өндәште ҡапыл. – Былай кешеләрҙе анау тиклем ергә Һүлейә, Ҡыятүр, Оло Урал артына тиклем йөрөтөү бик ауыр. Уларҙы шул ергә яҡын күсереп булмаҫмы малтыуары, донъялары менән? Быны ла уйларға кәрәк. Билдәле ерҙәр бар бит, йәйләү урындары. Үҙең атайһың түгелме бер ерҙе Һыраҫты тип? Шул ер яҡын булыр. Йомош төшкәндә, Һыраҫтынан килеп йөрөп булыр. Мейеслегә килеп атланған йылға буйында ла һәйбәт йәйләү. Тоҙо булмаһа ла, үләне йомшаҡ...

Әҙерәк уйланып ултырғас, Буғай, бик мөһим нәмә иҫенә төшкәндәй, Тайшандан былай тип һораны:

– Янар аҡ ташлы ерҙәр иҫәптәме? Улар нисәү?

Бүкән кеүек төплө, киң ҡулбашлы, янып торған ҡара күҙле Тайшан йоҡоһонан иләүһерәп килеп торғандай, ҡапыл һикереп торҙо. Аяҙ күктә, бик бейектә инде икәүләшеп йөҙгән бөркөттәргә ҡарап, эстән генә үҙенсә иҫәпләне лә:

– Өсәү... – тине. – Берене йәнәштә, Асы йылғаһы башында, тоҙлоҡтар йәнәшендә, берене — мәғдәнгә яҡын Биҙәртау алдында. Берене... Әйлеләр менән йәнәш.

– Ә-ә, Йәмәле тауын әйтәмең, – тип дөрөҫләп ҡуйҙы Буғай.

– Эйе, эйе, хәҙер беҙ уны Биҙәртау тип атайбыҙ. Ҡыҙҙар шулай ҡушты.

– Әйҙә, әлегә шулай булһын. Ул тауҙа йөҙәрләгән төр янар таштар... Каруансыларға ул таштарҙы күрһәтһәк, дөйәләренән йығылып төшәләр, нимә һорайһың, шуны бирәләр. Алтындан да ҡиммәт булып сыға түгелме? Һарылар, Ҡазан яғында йәшәгән татарҙарға һәр төрлө әйбер, туҡыма һәм башҡа нәмәләр биреп, беҙҙең араға ебәрәләр. Төп маҡсаттары — мәғдән, алтын, аҫыл таш ятҡылыҡтарын белеү. Ҡаралар яҡтан килгән берене тирегә

хәритә (карта) эшләп маташты. Тейешле еренә еткерә алманы... Белəһегеҙ! Шулай хас була! — тип йомғаҡ яһаны уйҙарына.

Һыу һипкәндә үҙенән-үҙе ҡайнап торған янар аҡ таш, мәрдән иретеүҙə кəрəк икəнен яҡшы белə Буғай. Йəш сағынан уҡ ул ата-олаталары кеүек үк ер-һыу өсөн бик күп эреле-ваҡлы һуғыштарҙа ҡатнашты. Табын-Барын ырыуының ҙур тармағына хаким итеп һайланғас та был шөғөлөнəн ваз кисмəне. Ҡыятүр, Ҡылысбай, Ҡырлас йəки Нарлы мейестəрендə һуғылған ҡорос ҡылыстары һарыларҙың оҙон, төҙ мечтарын аҙ өҙə сапманы Буғай. Мал аҫрау тамаҡ сығанағы булһа ла, тимер һуғыу Буғайҙың төп шөғөлө булды. Шуға күрə лə ул был əшкə ырыуҙың оҫта ҡулдарының барыһын дə йəлеп итте. Оҫта булмағандар мал ҡараны, төрəн менəн йыртып арпа, тары сəсте.

Һуңғараҡ Буғай тары сəсеүҙе ҡыҫҡарта төштө, сөнки тарыны был тирəлə оя ҡорған меңəрлəгəн торна көтөүе дүрт-биш таң үтеүгə ашап бөтə. Күпме ҡарауыллаһаң да, килештереп булмай. Ҡалған-боҫҡан тарыны балаларға бутҡа, быламыҡ бешерергə һəм төлкө, ҡуян, ҡыр кəзəһен ала торған бурҙайҙарҙы яратыу өсөн тоттолар.

– Хəбəрҙең инде əйəһен əйтəйем, – тине Буғай. – Барығыҙ ҙа яҡынираҡ ултырығыҙ...

Ҡоролтайҙа булған барлыҡ ир-ат ҡабалана-ҡабалана Буғай хаким ултырғысына яҡынираҡ килеп, түңəрəклəп, кем йөгөнлəп, кем аяҡ салып ултырҙы. Бик мөһим мəсьəлəгə сик ҡуйылыуын нисектер һиҙенəләр ине. Халыҡҡа был мөһим һүҙ Буғайҙың ҡатындары Аҡсискə менəн Юлдустан сыҡтымы икəн? Ай-һай, бер ғиллəһе барҙыр! Əллə халыҡтың һиҙгерлегеме, зирəклегеме был?

Уйға батып оҙаҡ ҡына ергə ҡарап ултырғандан һуң, ул бик һалмаҡ һəм иҫбатлау ауазы менəн яй ғына тағы ла һүҙ башланы:

– Ағай-əне, белəһегеҙ. Тəңре биргəн яҡты көндə хеҙмəт тə бар, хөрмəт тə бар. Ғүмер буйы хеҙмəт булмай бит. Тик Тəңрем ағай-əне хөрмəтенəн ҡалдырмаһын. Минең əле алда əйтə торған һүҙем үҙемдеке генə түгел... Фекерем Өмөтбай, Исламхажи һəм башҡа муллалар тарафынан да химая (яҡлау) тапты. Хəҙер олоғайҙым, бик оломон. Ғүмерем ағышында башҡурт быуаты, йəғни өс арғымаҡ ғүмере күптənəн үтте. Тағы ла Ғəли йондоҙоноң сығыуын көтөү гонаһ булыр. Илаһ ундай ғүмер бирмəҫ. Мазарлыҡҡа барыуҙан берəү ҙə əле ҡаса алғаны юҡ. Һəр хəжəттең үҙ ваҡыты була. Шулай булғас, беҙҙең дөйөм ҡарарҙы һеҙгə кəшеф (асыу) итəбеҙ. Өмөтбай мулла менəн Исламхажи мулла һəр берегеҙҙең тамыр-нисбəтегеҙҙе иҫəпləп сығып, ептəрегеҙҙең дөйөм олатайыбыҙ Турғай ханға, унан һигеҙ быуын аша ҡара шəйех, йəғни Барын олатайға барып тоташҡанын тəстиҡ итте. Еребеҙ

дәйөм. Һәр берегеҙ үҙ ғаилә. Яҡын ағай-энеләрегеҙ менән үҙ төбәгегеҙҙә, үҙ тыбәгеҙҙә... Киләсәктә үҙ-ара өрөш-талаш булмаһын өсөн, ҡарттайыбыҙ Хупбирҙе балалары Кискилде, Ҡушкилде, Тәңребирҙе нәҫелдәре өсөн тыбәндәге ерҙәрҙе ишғал итеү (биләү) лазым. Әммә ер элеккесә дәйөм була. Мин иҫкә алған ерҙәргә баш булып өс улан торасаҡ. Айшанға — Ирандағ, Ҡомас, Мейесле һыуының үҙәне — Ялан яҡ, Тубылға тиклем. Был мал-тыуар, ғәскәри эштәр менән шөғөлләнергә ҡулайлы.

Тайшанға, барлыҡ уй-фекере, фиғеле, булмышы менән мәғдәнгә, тау-ташҡа, урманға, һунарсылыҡҡа һиммәтле булғанға, Күгәрсен ташынан алып Оло Урал арҡаһы буйлап шималға, Алтынтамаҡ йәйләүендә Әйле, Ҡыуаҡан ерҙәре менән осрашып, Биҙәртауға, Айшан еренә төртөлгәнгә тиклем. Аҡ Иҙел башы, Әүәләк һырты Бәләкәй Ирәмәлдең шәреғе, Ҡыҙҙар тораһы, унан килеп, Әй, Яйыҡ, Уй, Мейәс һыуҙары ғәребендәге армыттары менән Тайшанға керер. Ирандағ, Ҡомас тауы — сик. Ғәребе — Тайшанға, шәреғе — Айшанға.

Тайшанды өнәгән нәҫел-нисәбтең ултырағы ла, йәйләүҙәре лә шул ерҙәрҙә. Йомакилденең ултырағы Яйыҡ ярында, йәйләүе Айынташ һыртында. Хөкөмташтан йәнүбкә Ҡара һыйыр аша Көнтөшмәҫ һыҙаты менән Эрәҫтәк һыртына, тиләүҙәргә тиклем. Ғәрепкә Аҡ Иҙел һыуына саҡлы уңға ла, һулға ла, шәреҡкә Тубылға тиклем, тик жәнүбкә (көньяҡҡа) кереп ҡәрҙәштәребеҙ тиләүҙәрҙе ҡуҙғатмаҫҡа. Бороҡ аны аңдаң. Ситкә баҫҡаҡ булып кереү килешмәҫ... Донъя хәлен белеп булмай. Тәңребеҙ нисә тапҡыр ҡояштың сыҡҡанын да, батҡанын да күрһәтер, уныһы билгеһеҙ. Шуның өсөн был ҡарар бик дөрөҫ булыр. Йомакилде, Айшан, Иҫәнбәт балалары ла Тайшанды хаким итәйек, ул мәғдән, алтын эшен дә белә, хисабы ла бар, уҡый-яҙа ла белә, тинеләр.

Буғайҙың был һүҙҙәренә Кискилде балалары ғына түгел, Дуҫбирҙе балалары ла бик теләп риза булдылар. Тайшандың бөтә ергә лә хаким булыуы барыһы өсөн дә ҡулай булыуы шунан да ғибәрәт ине. Холҡо менән Тайшан тыныс, уйлап һөйләй, кеше менән бергә фекерләшә. Айшан кеүек ҡыҙыу, ҡамсыға йә шешке тотҡаһына тиктән тик үрелеп бармай. Күбәләк-Тиләү ырыуынан алған ҡатыны Тәңкәле лә бик сабыр, аҡыллы, өҫтәүенә, уҡый-яҙа белә, үләндәр төнәтмәһе менән күпме бала-сағаны, ҡарт-ҡороно аяҡҡа баҫтырҙы. Айшандың ҡатыны, бер туған апаһы Алҡалы ла күптән инде халыҡ араһында ҙур табип булып танылған. Йөҙәр саҡрымда ятҡан йәйләүҙәргә, ултыраҡтарға аҙ сапманы улар көндө — көн, төндө төн тимәй. Ғүмер, сал сәсле ҡартҡа ла, типһә тимер өҙөр бәһлеүәнгә лә, донъяла һис бер кем алдында гонаһы булмаған сабыйға ла ғәзиз. Килен, инәй булыуҙан тыш, Алҡалы менән Тәңкәленең маңлайына баҫылған ине был изге бурыс.

– Тиҙ арала жыйылып булмаҫ, аулаҡ саҡта әйтеп белдерәйем. Ғәли хан янында булып ҡайтҡас, уның һөйләүе буйынса шуны төшөндөм. Һарылар беҙҙе Таш арты кешеләре, Таш арты ере тип атай икән. Таш, тип беҙҙең Урал тауын әйтәләр, ти. Нишләп беҙ таш артында булайыҡ? Ҡояш бит башта тауға төшә, уны әүәле беҙ күрәбеҙ... Беҙ — Уралтау алдында, улар бит таш аръяғында, – тип фаразланы Буғай. – Һеҙҙең күбегеҙ тигәндәйе бик йыраҡ яу сәфәрендә булғаны юҡ. Шуға күрә лә белмәйһегеҙҙер. Был ерҙән жәнүбкә бер көн, көн ярымлыҡ ерҙә тиләүҙәр, аръяғында күбәләктәр. Аръяғы — тамъяндар. Ғәрепкә тура китһәк — ҡыуаҡандар, уңда — әйлеләр, шималда Мейәс һыуы аша ҡаратабындар. Быныһы һеҙгә — ер хәритәһен күҙ алдына килтерер өсөн. Һарылар Болғарҙы алғас, тау аша ян-яҡҡа илселәрен ебәрҙе. Мыуафиҡлыҡ күрһәтеп, үҙҙәренең шарттарын уҡыйҙар. Имеш, аҡ батшаға баш һалығыҙ. Ерегеҙ үҙегеҙгә булыр...

Уныһы ниндәй ғәләмәттер! Үҙ ереңде үҙеңә маялай. Аңламайым. Ниндәй оятһыҙлыҡ, баҫҡынсылыҡ! Түңгәүер, Ҡыпсаҡ, Бөрйән барған, ти. Тамъяндың Шаһғәли тәүгеһендә юлдан кире боролған, тиме? Беҙгә лә килделәр. Мин йәш инем, утыҙым да тулмаған сағым. Ҡан тамырға һыймай һулҡылдай ине... Атайҙарҙың ымлауы булды, береһе лә кире китмәне...

Әйтер һүҙем шул. Беҙ, барындар, тиләүҙәр, күбәләктәр, ҡыуаҡандар, беҙгә йәнәш ятҡан ҡараларҙың бер өлөшө, әйлеләр, ҡатайҙар, мекетәләр, һалйоттар, һыҙғылар, өпәләр, баш һалмағас, улар беҙҙе урап, шималдан Ибергә үттеләр. Күсем хан бөтә иберлеләрҙе — Тубыллы, Тарлыҡ, Томанлы, Бараба, Умарталы ырыуҙарынан тыш, беҙҙе, Уралдағы табындарҙы ла ҡул аҫтына алды.

Яу, нигеҙҙә, Иберҙә бара. Шулай итеп, уйлап ҡараһаң, беҙ яңяҡтан ураулы. Шәреҡтә – ҡайсаҡ-ҡалмаҡтар. Ғәрептә, шималда — һарылар. Ҡибла яҡ ҡына тыныс ҡала түгелме? Ғәли ханға әсир булып төшкән бер кенәз, урыҫтарҙың Вариҫ Ғәдән тигән батшалары үлгән (1552–1605). Хәҙер Василий тигән батша икән. Ул Василийҙың беҙҙә әле эше юҡ, төньяҡта диңгеҙ арты менән дә һуғыша икән. Өҫтәүенә, Тын яғында Иван Болотный тигән кеше батшаға яу асҡан, ти. Шундай икән хәлдәр. Әлегә беҙҙең ил тыныс тормаҡсы. Көндәлек булмыш менән бергә тимер, алтын эшен киңерәк ҡулланыр кәрәк. Оҫталарҙы, оҫталарҙы күбәйтеү — беҙҙең бурыс, – тип һүҙен йомғаҡлағандай итте Буғай.

– Барлыҡ ваҡиғалар ыңғай тормай шул... Үткәндә ҡара-табындарҙың Бүре солтаны килде, тип һөйләгәйнем. Уның үҙ-ара тыныс, килешеп йәшәргә ине, тигән фекере бик төплө.

Байтаҡ йылдар әлек Иҫән-хан менән ҡайҙалыр ғәрепкә ҙур бер өлөшө күсенеп киткән бит. Ҡалғандары илле йылдар әлек, урыҫ-

тар Ибергә үткәс, яһаҡҡа ризалаштылар. Баш һалырға риза булмағандары Иртәш күле буйында, Мейесле һыуының аръяғында ултыраҡ ҡорҙолар. Һүҙҙәре килешеүле булғас, беҙ ҙә ҡаршы килмәнек. Ҡаралар үҙ-ара ла һәр саҡ тыныс түгелдәр. Әнүәр улы Үтәмеш менән Бүре солтан үҙ-ара йөрөшмәйҙәр. Шуға ла Бүре солтан: «Ҡоҙа-ҡоҙағый ҙа булып бөткәнбеҙ, һеҙҙең араға һыйынайыҡ, баҫһа ла, ни күрһәк тә бергә күрәйек», – тип хәбәр һалды. Уныһын Аллаһы Тәғәлә алда үҙе күрһәтер. Тик уның бер яғы бар. Урыҫтар башҡа ырыуҙарға ҡарағанда Ҡара-Табынды эҫерәк күрә һымаҡ... Төндәрен сиркәүле Ибер ултыраҡтарынан килеп-китеп тә тораларҙы тигән хәбәрҙәр ишетелә. Бүре солтандың кешеләре генә беҙҙеңсә ныҡ тора. Ә Ғәли хан осрашҡанда бындай хәбәр ҙә ярып һалды. Һарылар батшаларына яҙған ғарызнамәһендә тик ҡараларҙы ғына күрһәтеп, уларға ғына шәһәҙәт (таныҡлыҡ) биреү тураһында белдерәләр, ти. Иҫән нәҫеленән һәр түбә ыҙбаларын да хисаплап сыҡҡандар икән. Һары һаҡалдар мәғдәнле армыттарҙан ҡараларҙы, беҙҙең ҡарын-бүһеребеҙ таҙҙарҙы, ҡыуаҡандарҙы, бәкәтиндәрҙе, һеңрәндәрҙе урынынан ҡыуыу тураһында ҡағыҙ яҙа, ти. Үҙ ереңдә ҡыуғында булмаҫ өсөн, берҙән-бер алым шул: табын ҡанлыларҙың иберлеләр менән бергә булыуы.

Алтынды күберәк табыу, уның менән тижарәт (сауҙа итеү, алыш-биреш) ҡылыу, тимер-ҡорос менән кейенеү. Васыятнамә тип әйтһәм, яҙыҡ булмаҫмы икән?.. Әле йәшәге килә бит әле. Бүре солтандың түбәләре таҙҙар, шәйемдәр, хәйерҙәр менән һүҙ беркетеү яңылыш булмаҫ. Йомакилденең ултырағында беҙҙең ырыу халҡы һирәгерәк. Халыҡ йым булһа, ил ҡалынайыр. Әгәр ултыраҡ һорап килһәләр, уртаҡ тел тапһағыҙ, был һүҙем дә яҙыҡ түгел... Ризалашыу дөрөҫ булыр.

Тәңребирҙе шишмәһе буйындағы йыйындан һуң алты йома үтеүгә Буғай хаким ҡапыл мәрткә китте. Тағы ла тынғыһыҙ бер йома үтте. Өмөтбай һәм Исламхажи мулла хакимдың янынан китмәне. Ҡатындары Аҡсискә менән Юлдус, килендәре Алҡалы һәм Тәңкәле һәр төрлө аш-һыу, үлән төнәтмәләре әҙерләнеләр. Әммә өшкөрөүҙәр, ен ҡыуыуҙар, арбауҙар, дарыу үләндәре лә еңеллек килтермәне. Тик ятты Буғай. Етенсе көн таң алдынан ул иҫенә килде. Тәңребирҙе тауы артынан бына-бына күренәм тип торған ҡояшты көттө ул. Ә ҡояш һаман да сыҡмай ҙа сыҡмай. Шәреҡкә ҡараған тәҙрә аша Тәңребирҙе тауы күренә. Ниңә ҡояшты сығармай ҡаплап ултыра әле ул Тәңребирҙе тауы? Ул булмаһа, ҡояш күптәнән килеп сығыр ҙа Буғайға еңеллек килтерер ине. Тәңре уға нурын һипһә, науығып тороп та китермен, тип тоноҡ ҡына уйланы аңында. Эх!.. Ярын, Ғәли хан, ҡустыһы Ишем солтан менән Өпәгә яу сабыр ине... Өпәлә тәхетте тергеҙһәк, Иберҙән

һары һаҡалдар тиҙ генә таралып юҡ булырҙар ине... Ҡорал, ҡорал эшләү... Та... Тайшан, тип нимәлер әйтергә уҡталды. Юҡ, көтөп ала алманы яңы ҡояшты. Тәүлегенең дә, ғүмеренең дә һуңғы минеле булды. Һарыса айының тымыҡ таңында күҙҙәрен йоммай тыныс ҡына икенсе донъяға күсте.

Һуңғы йыйында ырыуы аҙаматтарына һуңғы васыяттарын әйтеп ултырған түбә өҫтөнә ҡылсығаһын (кольчуга), йәймәләп һуғып, синәп эшләнгән торҡаһын кейҙереп, һабы аҫ башлы ҡылысын, еҙләп ишелгән йүгәнен, биҙәр таштар һалып тегелгән, күн менән көпләнгән тотҡалы эйәрен йәнәшенә һалып, мосолман ғөрөф-ғәҙәтен еренә еткереп ерләнеләр Буғай хакимды.

Шул ваҡыттарҙан алып бөгөнгә тиклем ул түбәнең исеме Буғай түбәһе, йәшәгән осорон Буғай заманы тип һөйләр булды халыҡ. 140 йыл буйы тигәндәй Буғай түбәһендә, Буғай яланында, Тәңребирҙе шишмәһе башында үтте халыҡтың оло ла, кесе лә ҡоролтайы.

Исламхажи мулла Буғай хакимдың ҡәберенә ҡоралдарын да һалып ерләүгә риза булмайынса, үҙ алдына бер ни тиклем күмһеһә лә, Өмөтбай мулла быға ҡаршы булмағас, өндәшмәне. Боронғо ғөрөф-ғәҙәт әле уйҙарынан да, аҡылдарынан да сығып бөтмәгән ине.

* * *

Бер-береһенә һырығып, үҙ-ара ҡоҙа-ҡоҙағыйлашып, бер фекер, бер маҡсат йөрөткән көнсығыш табын ырыуҙары, Буғай хаким үлгәс, бер ни тиклем етемһерәп ҡалғандай тойолдо. Хәҙер инде уларҙы бер фарман менән тиҙ генә йыйып алыусы ла юҡ ине. Тайшан — көслө, ҡеүәтле баһадир ҙа ул, өҫтәүенә, кейәү ҙә, тик тиләүҙәр ҙә, күбәләктәр ҙә уны Буғай кеүек үҙ итмәне. Күберәк айырым йыйылыр булып киттеләр.

Ләкин бер сәбәп уларҙы тағы ла Буғай түбәһенә йыйылырға мәжбүр итте. Көнсығыш табындарына ике афәт бер юлы килде. Буғай хаким үлгәс, ҡыш үтте, яҙ килде. Ғәли хандан сапҡын булып Ишем хан улы Аблай солтан менән Ҡара Табындан Ҡалҡаман хаким Һарытүр йәйләүенә килеп оран һалды. Ғәли хан Өпәгә ҡуҙғала!

Ҡараларға, барындарға, тиләү-күбәләктәргә ҡуҙғалырға фарман бирә. Әҙерлеккә дүрт йома. Ғәли ханға нуғайҙар, шәреҡтән килгән ҡалмаҡтар ҙа ярҙам итмәксе икән. Ибер табындары менән Ғәли хан нуғайҙарҙан Өрөш мырҙа, Урал алды табындарынан Тайшан һәм Ҡалҡаман батырҙар тарафынан ойоштороlған күтәрелеү Ишем, Тубыл, Исәт буйҙарындағы һәм Урал арҡаһындағы байтаҡ нығытмаларҙы туҙҙырып, Ҡара Иҙелдең һул ярындағы Ҡорма,

Ҡалъян армыттарын артта ҡалдырып, Өпәгә йүнәлделәр. Үҙ-ара төплө бәйләнеш, ә ҡулда хәритә булмауы үткенеҙ тау, урман, һаҙлыҡтар Ғәли хандың дөйөм көсөн ваҡ өлөштәргә бүлгеләне. Аҙ көс менән алға киткән Ғәли хан ҡамауҙа ҡалды. Ҡанлы сапҡылашыу ҡул менән һуғышҡа күсте. Урыҫтарҙың ун ике яугиры Ғәли ханды ҡоралһыҙ көйө әсир алды. Ханды әсирлекә алғандарын белгәс, һарылар тиҙ генә Өпәгә сигенде. Тайшан егеттәре урыҫтар артынан ҡыуғын булып төштөләр. Етә алманылар. Яуҙың мәғәнәһе китте. Үҙ-ара кәңәшләшкәндән һуң, кире боролдолар. Урман-тау араһында йөрөп өйрәнмәгән ҡалмаҡтар бер тотам да артта ҡалманы. Был уңышһыҙ яуҙан һуң һарылар көс туплап төньяҡтан ҡараларға, көнсығышҡа иберлеләргә ябырылды.

Өпә яуына барғанда алыштарҙың береһендә Йомакилде ҡаты яра алып ҡайтып киткән ине. Уның төп ултырағы Айынташ армыты алдында, Яйыҡтың уң ярында түбә өҫтөндә торҙо. Был түбә Батшалыҡ тип аталып, Ибраһим, Мортаҙа хандарҙың да туҡталған ере булды. Йомакилде ҡайтҡанда, бөтә халыҡ тиерлек Айынташ йәйләүендә ине. Күп аҡты шул ҡаны оҙон юлда. Тәрән яранан Йомакилде үнжей алманы. Айшан менән Тайшан яуҙан ҡайтҡанда, ул яҡты донъя менән бәхилләшкәйне. Был йылда көнсығыш табындарға килгән афәттең беренсеһе Өпәгә уңышһыҙ яу, Ғәли хандың әсиргә төшөүе булһа, икенсеһе ҡараларҙан килде.

Шул ваҡиғалар менән сорналып, сығырға йөйөн таба алмай йөрөгәндә Һарытүр йәйләүенә ҡапыл Бүре солтан үҙ кешеләре менән килеп төштө. Төп ерҙәре Мейесле йылғаһының шималы, Исәт буйы, Тубыл яры булған ҡараларға Төмән яғынан бер-бер артлы һөжүм башлана. Ултыраҡтар, йәйләүҙәр талана, яндырыла, ҡыҙ-ҡырҡын әсиргә алына, ир балалар үлтерелә, мал-тыуарҙар ҡыуып алып кителә икән. Шәйем һәм Хәйерзаман балалары бире, көньяҡҡа, барындар еренә кереп ултыра башлағандар икән. Ҡараларҙың бер өлөшө һаҡланып, элек ырыуҙаштары киткән Сулман һыуы буйына ҡуҙғала. Бер өлөшө Мәскәү батшаһына баш һалырға ризалаша. Мал-тыуарҙарын, әйбер-ҡараларын, үҙ баштарын хисапҡа һалып биргәндәр, ти. Шундай хәбәр килтерҙе Бүре солтан. Ә ул, Бүре, күсеп тә китмәй, баш та һалмай.

– Һөйләшәйек, халҡым менән арағыҙға алығыҙ, – тип һорай.

Был юлы Буғай түбәһенә йыйынға төрнәлеүҙең сәбәбе шул булды. Бүре солтан килеп киткәс, Тайшан хаким күбәләк-тиләүҙәргә көнөн билдәләп, сапҡын ебәрҙе. Үҙ ҡолаҡтары менән ишетеп белһендәр тип, тау арты Әй буйы ҡыуаҡандарын да ҡараларҙың Шәйем менән Хәйерзаман балаларын да саҡырҙы. Ҡалҡаман менән Бүрегә йыйын көнөн әйтеп ҡайтарған ине.

Билдәләнгән көнгә Буғай түбәһенә тиләүҙәрҙән ике игеҙәк, Килдеш батыр һәм Ҡушкилде бәһлеүән үҙҙәренең думбырасы, ҡу-

райсыларын, бөтә аймаҡ баштарын эйәртеп, ике тәгәрмәсле бейек арбаларына суйын, ҡаҙан, ҡымыҙ тултырылған бөкөлө ағас сапсаҡтар һалып килеп туҡтанылар.

Ҡыуаҡандарҙан Алғыр хаким, кеше һүҙен һәр саҡ тыңлар, әммә һүҙ ҡушһаң, яуап бирмәҫ Тупай ҙа килгән ине үҙ кешеләре менән.

Оло йыйындағы кешеләрҙе әллә аптыратыр өсөн, дөрөҫөн әйткәндә, башҡа ырыу халҡы алдында бер ни тиклем маһайыр өсөнмө ҡыуаҡандар аттарына ҡалын ҡайышҡа еҙ биҙәүҙәр тегеп эшләнгән ялтырауыҡлы йүгәндәр, түштек һәм ҡойошҡандар кейҙереп килгәндәр. Уларҙың кәрәккәндә лә, кәрәкмәгәндә лә ҡайһы ваҡыт һауаланыу холоҡтарын башҡалар белһә лә, өндәшмәйенсә, мыйыҡ аҫтынан йылмайҙы. Шуға ла ҡыуаҡан йәргүндәре тигән исемдәре осрашҡан һайын иҫбатлы булды. Йәргүн йәргүн дә ул, әммә ҡыуаҡандар араһында тимер-баҡыр, еҙ иретеү оҫталары күп булды. Көнкүреш кәрәк-яраҡтары ғына түгел, ҡорал, биҙәү эштәре, алҡа-һырғалар, балдаҡ-йөҙөктәр ҙә эшләп һаталар бит. Оҫталар башҡа ырыу халҡында ла аҙ түгел, әммә ҡыуаҡандар тимер мейесенең төп хужалары ине. Күрәһең, уларҙың ултырған ерҙәре тап мәғдән өҫтөндә булғанлыҡтан, был һөнәр ныҡ йәбешкәйне уларға.

Барлыҡ халыҡ йыйылып бөтөүгә, Ҡара Табын ырыуы вәкилдәре Бүре солтан менән Ҡалҡаман батыр ҙа үҙ кешеләре менән килеп, аттарынан төштөләр.

Фәҙәттәгесә, хәл-әхүәл белешкәс, халыҡ түңәрәкләп ултырҙы. Өмөтбай мулла ҡыҫҡаса вәғәз әйтте. Ваҡиғаларҙы терелтте, изгелек эшләп, сауап алырлыҡ миҫалдар килтерҙе. Шәһиттәрҙе иҫкә алып, доға ҡылдылар. Атаһының үрмә ултырғысында ултырған Тайшан вазифаһы буйынса дөйөм тормош, хәл-әхүәл, сәйәси ваҡиғалар, ҡунаҡтар менән таныштырҙы халыҡты. Һүҙенең аҙағында Ҡара Табын вәкиле Бүре солтанға һүҙ бирҙе. Бүре солтан уҡалы еләненең ҡаптырмаларын ысҡындырып, башындағы йоҡа ғына итеп тегелгән ҡырпыу бүреген ҡулына алды. Дәрәжәһен тотҡандай, халыҡҡа бер ни тиклем ҡарап торғандан һуң, һүҙ башланы.

– Ҡәбиләләштәрем! Туғандар! Ҡәрҙәштәр! Табын иленең бер осонан икенсе осона тиклем йә алға, йә артҡа бер ниндәй ҡаршылыҡһыҙ, ҡайғыһыҙ һәр ерҙә ҡышлау ҙа, йәйләү ҙә ҡороп йәшәгән иркен саҡтар үтте. Беҙгә ҡаршы ғәрептән бик ҙур көс килде. Шуныһы ғәжәп: ҡыйралып торалар, яңылары килеп етә. Күптәр, бик күптәр яһилдар. Уралыбыҙҙың урта биленән үтеп, Ибергә тулдылар, күп, бик күп нығытмалар ҡорҙолар. Үҙҙәре кеүек үк кешеләре үҙҙәренә ҡол.

Беҙҙәге кеүек тигеҙлек юҡ уларҙа. Ҡолдарын көнө лә, төнө лә эшләтәләр ағас, ер эшендә. Шуға ла тиҙ генә нығытмалар ҡора ла

ҡуялар. Ҡораллы кешеләре күп. Хәҙер тағы ла бик күп итеп бер иш кейенгән ҡораллы кешеләр килтерҙеләр ҙә беҙҙең ултыраҡтарҙы яндырҙылар. Тамам тәҡәт бөттө. Беҙҙең ырыу һеҙҙекеләр кеүек бер төптән түгел. Күбебеҙ Сулман һыуы яғына китеп бөттө. Арабыҙҙа хыянатсылар, ошаҡсылар, ике йөҙлөләр, яраҡлашыусылар күбәйҙе. Шәйемдәр, улар менән тағы бер нисә ҡәүем баш һалып йөрөй. Хатта үҙебеҙгә ҡул күтәреүселәр бар. Шуға күрә беҙ уларҙан айырылабыҙ. Беҙ бер ергә лә күсмәйбеҙ Уралыбыҙҙан. Баш та һалмайбыҙ. Ни күрһәк тә, бергә күрербеҙ. Күмәгерәк булһаҡ, ҡарыулы ла булырбыҙ. Ерегеҙ иркен бит. Күңел етһә, аш һәр саҡ етер. Алтау ала булһа, ауыҙҙағы китер, дүртәү теүәл булһа, түбәләге килер, – тип һүҙен бөтөрҙө Бүре солтан.

– Солтан дөрөҫ әйтә: береккән көтөүҙе бүре алмай, ағайэне, – тип өҫтәп ҡуйҙы Ҡалҡаман батыр.

Халыҡ тын ҡалды. Үҙ-ара һөйләшеүҙәр, бәхәсләшеүҙәр оҙаҡ ҡына дауам итте. Ләкин береһе лә сығып үҙ фекерен әйтмәне. Бындай ҙур мәсьәләне ҡышлау башлыҡтары менән алдан һөйләшеп ҡуймағанлыҡтан, Тайшан хаким үҙе лә аптырабыраҡ ҡалды. Ләкин бәйҙе тота килеп сисер кешеләр бар ине. Тәүҙә һүҙҙе ағаһы Айшан алды:

– Ваҡиғаларҙың нисек тороуын үҙегеҙ белəһегеҙ. Әйнәүəһенбәйнәүəһен һөйләп тораһы түгел. Минең фекерем шул: болот ойошһа, күк күкрәй. Күмәк ағас дауылдан ҡурҡмай.

Айшандың фекерен Килдеш тотоп алды.

– Эйе, эйе, ике кәңәш бер булһа, илле егет йөҙ була. Күршебеҙ Йомакилде мәрхүм булды, белəһегеҙ. Хәҙер халҡы тик етемһерәп йөрөгәндәй. Тәҡдимем шул: әгәр барындар үҙҙәре риза булһа, Йомакилде ултырағына Бүре солтанды керетеү насар булмаҫ.

Килдештең был тәҡдимендә уның үҙ мәғәнәһе бар ине. Бүре солтан үҙ нөгәрҙәре менән килеп, Батшалыҡ түбəһенə ултырһа, ул тиләүҙәрҙе төньяҡтан ышаныслы һаҡлаясаҡ. Эй аҡыллыһың да инде, Килдеш, тип эстән генә үҙ-үҙен маҡтап алды. Ə Ҡыуаҡан Алғыр батыр, Бүре солтан халҡына, барындар менән ҡыуаҡан ерҙәре осрашҡан тау армыттарының итәгенə йəки Исəт менəн Мейəс йылғалары араһын тултырырға кәрәк, тине.

Был һүҙҙәрҙән һуң Ҡалҡаман аяҡ өҫтө баҫты:

– Ағай-эне. Алғыр батыр һүҙен һүҙ итһәк, беҙ ырыуҙаштарыбыҙ шәймдәр, хәйерҙәр менән һуғышасаҡбыҙ. Был һарыларға эште еңеләйтеү тигән алым була. Тиктән-тик тигәндәй, үҙ ҡаныбыҙҙы үҙебеҙ ҡоясаҡбыҙ. Әле бит беҙҙән алда ҡатайҙар ҙа ята. Улар ҙа Ишем солтан менән бергәләп баштары яуҙан сыҡмай. Улар ҙа күсмəксе Урал араһына. Мин Килдеш ҡорҙаштың фекерен яҡлауы-

ғыҙҙы хуп күрер инем. Бер ағас мейестә янмаҫ, дүрт ағас далала ла һүнмәҫ.

Төрлөһө төрлө фекер йөрөттө. Тайшан хаким, ағаһы Айшан менән кәңәшләшкәс, былай тине:

– Ағай-әне! Көнсығыштағы барлыҡ ырыуҙар беҙгә ҡарап тора. Ҡаралар араһында татыулыҡ керетергә тырышайыҡ. Уларҙы үҙ-ара бәхәсләштереү яҙыҡ булыр. Ҡалғандары менән хәбәр алып барырбыҙ. Ә Бүре солтанға, Йомакилде ағай еренә кереп, беҙҙең менән бер ҡатар сәйәсәт алып барыу шарты менән рөхсәт ҡылайыҡ. Шулай дөрөҫ булыр.

Йыйын өс көн барҙы. Байрам иттеләр. Бүре солтан менән Ҡалҡаманды уртаға алдылар. Егеттәр көс һынашты. Уҡтан атып, һөңгө ташлап мәргәнлектәрен һынанылар.

Бер тапҡыр ҙа ҡолонламаған буҙ бейәнең ите етмәй ҡалды, өҫтәп ҡуйҙар һуйылды. Шулай итеп, Буғай түбәһендәге ҡарар нигеҙендә ҡара-табындарҙың — Бүре солтан, Ҡалҡаман батыр нәҫелдәренең барындар менән тиләүҙәр араһына ултырып йәшәү осоро башланды.

Әммә күсеп ултырыу ваҡиғаһы бик йылдам булыуҙы талап итте. Сөнки Ғәли хан урынына ҡалған ҡустыһы Ишем солтан барлыҡ ырыу-ҡәбилә башлыҡтарына, Ишем йылғаһы ярына саҡырып, сәләм-фарман ебәрҙе. Ваҡытын һәм килеү-килмәүҙе ҡәтғи ҡуйған. Табындарҙан башҡа әйләләр, көҙөйҙәр, ҡатайҙар, ҡыуаҡандар, барлыҡ иберләләр һәм башҡалар саҡырылғайны.

Сыңға-Туралағы йыйында, нигеҙҙә, ике һорау ҡарала. Береһе Ишем солтанды хан тип иғлан итеү, икенсеһе һары һаҡалдарҙы Ибер һәм Урал буйынан ғәрепкә ҡыуыу. Көнсығышҡа һуғыша-һуғыша киткән Күсем хан улы Әлейҙән, ҡустыһы Мәмәтҡолдан һис бер хәбәр-хәтер булманы. Шәреҡ яҡҡа төрлө тарафҡа сапҡындар ебәрелһә лә, береһе лә һөйөнөслө хәбәр килтермәне. Байтаҡтары зым-зыя юҡ булды. Урыҫ батшаһы кешеләре менән осрашып, баш һалдылар. Кире ҡайтҡан әҙ генә өлөшө, көҙгә ауышҡан көндәрҙә бер туҡтамай ҡойма ямғырҙар яуыу сәбәпле, барлыҡ йылғаларҙың, бигерәк тә Йыртыш һыуының ташып ярҙарынан сығып, ер өҫтөн тотош сикһеҙ даръяға әйләндереүе сәбәпле, аша сыға алмауҙары, еүешлектән, аслыҡтан интегеүҙәре тураһында ҡайтып һөйләнеләр. Ваҡиғалар барышы буйынса Мәмәтҡол һәм Әлейҙән ярҙам алырлыҡ булмаһа ла, Ишем солтан үҙ фекерендә нык торҙо. Башта ул нуғайҙар менән уртаҡ тел тапты. Табыуының үҙ шарты бар ине. Яйыҡ менән Уй араһына ныҡлап ултыраҡ булыр өсөн ер һоранылар нуғайҙар. Ишем солтан нуғайҙарҙың күмәй төбөн аңлап алғас, тиҙ генә Күбәләк, Ҡыпсаҡ, Бөрйән ырыуҙарына үҙе юл алды.

Ниндәй кимәлдә һәм шартта һүҙ барғандыр уларҙа. Табындарҙың хәтере уны һаҡламаған. Тик шуныһы билдәле: нуғай хакимдары, Ишем солтан менән килешеп, һүҙ ҡуйыша. Ҡыпсаҡ ҡәбиләһенең ҡаҙаҡтарға ҡараған Ҡарабалыҡ, Күкдүнән, Ҡолан-Ҡыпсаҡ ырыуҙарының ғәребендә нуғайҙар ултыраҡ таба. Уның бер осмото хәҙерге ваҡытта Ҡостанай өлкәһенә һәм Силәбе өлкәһенең Нуғайбәк районының еренә тура килә. Нуғайҙар менән ныҡлап һүҙ беркеткәс, Ишем солтан инде төньяҡ Ҡаҙағстанда йәшәгән ҡалмаҡтарға илсе ебәрҙе. Ҡалмаҡтар илселәрҙең шартын хур күреп, уларҙы һуйып, тоҡтарға тултырып, аттарына бәйләп кире ҡайтарҙылар. Быға асыуы килгән Ишем солтан ҡул аҫтында булған ун меңләгән нөгәре менән ҡалмаҡ йәйләүҙәрен тар-мар итергә тотондо. Был оло сапҡында Уралда ҡалған барлыҡ ҡара-табындар, барындар, тиләүҙәр, ҡыуаҡандар, күҙәйҙәр, таҙҙар, ҡатайҙар, Иберле ырыуҙары төп көстө тәшкил итте. Ҡаҙағстандың киң далалары буйлап таралған ҡалмаҡтар һис ҡаршылыҡ күрһәтә алманы. Шулай бер нисә йыл үтте. Ҡалмаҡтарҙан таҙартылған төньяҡ Ҡаҙағстан, Ишем солтанға һыйынып, көтмәгәндә өҫтәмә көс булды.

Башҡорттар, нуғайҙар, ҡаҙаҡтар берләшмәһе барлыҡҡа килде. Ырыуҙарының тарҡалыуы сәбәпле, берәм-берәм ҡыйралған ҡалмаҡ тайшаһы бөтә ҡәбиләләрен бергә йыйырға бойорҙо, нойондарын бер йоҙроҡҡа тупланы.

Ҡалмаҡтарҙың боҫҡондары ла, алғаҫҡылары ла башҡорт ере сиктәренә етеп, шымсылыҡ эшен киң йәйелдерҙеләр. Башҡорт ҡорғолары менән һуғышып, ҡыйралып та ҡайттылар.

Ишем хандың ере иркен, халҡы күп, өҫтәүенә, нигеҙҙә, ултыраҡ тормош алып баралар, тимер эше оҫталары, ҡоралдары күп булыуы аптыратты ҡалмаҡ тайшаһын. Шуның өсөн дә ул, үҙ ваҡытын көтөп, әлегә башҡорттар менән килешеү төҙөргә ҡарар итте. Ишем солтандың, ағаһы һәм атаһы Күсем хан кеүек үк, Рәсәй батшалығы менән һуғыш алып барыуын белә ине тайша... Ҡалмаҡтар менән дә килешеү төҙөлдө. Әммә урта Урал аша үткән урыҫ кешеләре Ибер еренә теше-тырнағы менән йәбешеп, ныҡлап тамыр йәйеп ебәрҙеләр. Һуғыш-көрәш көндәлек төҫөн алды. Ишем солтан ултырағына ҡораллы урыҫтар тиҙ генә етә алмаҫлыҡ ялан яҡҡа Аман Ҡарағай урманына күсерҙе. Урыҫ батшаһының кешеләре Иберҙә, урта Уралда тамыр йәйһә лә, иркенләп ялан-ҡырҙа йөрөй алманылар. Эш барған һәр урын ҡораллы көс менән һаҡланды. Городище, слобода, монастырь тигән ултыраҡтарынан бер-береһенә тик хәрби ҡарауыл булғанда ғына йөрөнөләр. Төнгөлөккә городищеларының ҡапҡалары ныҡ итеп бикләнер булды. Бейек итеп эшләнгән баш түпәләрендә (башня) һәр саҡ көнөн дә, төнөн дә ҡарауыл торҙо.

Яу килһә, йә сапҡын күренһә, шартлы һуғыу менән баш түпәләренә әленгән тимер-шаңдау һуҡтылар. Көндәлек тормоштоң һәр тармағында тимер иретмәләрен уңайлы ҡулланған төрки-табындарҙан һәм башҡа ҡәбилә-ырыуҙарҙан отоп алып, шаңдау һуғыуҙы урыҫтар уңайлы баһаланы.

Төркиҙәр, бейек тау баштарында, оло йылғаларҙың кисеүҙәрендә, тигеҙлек ерҙәрҙә йыраҡтан күренгән ҡалҡыулыҡтарҙа торған ҡарауыл-һаҡсылар ел-ямғырҙа, бурандарҙа саҡма менән тиҙ генә ут яғып ебәрә алмаһалар, түбәндә торған сапҡындарға шартлы тауыш менән шаңдау һуҡтылар.

* * *

Ишем солтан Аман Ҡарағайға барыуына тиклем үк, уның ҡалмаҡ тирмәләрен туҙҙырып, кире Уралға ҡайтып китеүенә күп тә үтмәй, ҡырғыҙҙар менән ҡушылып, аралашып ҡалған табын-барындарҙың, тиләүҙәрҙең бер ҡәүеме Күксәтәү буйҙарында, бер өлөшө боронғо олаталары Турғай хан ерҙәрен тотоп, бер халыҡҡа ла бирешмәй, үҙ көндәрен үҙҙәре күрә ине. Көнсығыштан ҡара яу булып үткән ҡалмаҡтар, ҡаҙаҡтарҙы туҙҙырған кеүек үк, ҡалмыш барындарҙы, тиләүҙәрҙе лә нык туҙҙырҙы. Ҡәбиләләренең бер өлөшө Иберҙә, бер өлөшө Урал армыттары итәгендә булыуын белгән күкйөрәктәр берҙәм ғәрепкә ынтылдылар. Әммә ғәрепкә ярайһы үк үтеп ингән ҡалмаҡтар арттан килгән барындарҙы әсиргә алдылар. Ҡалмаҡ тайшаһы уйға ҡалды: «Минең тирмә аймаҡтарҙы ҡанға батырғандары өсөн үс алыу бик уңайлы... Ләкин...» Әгәр ул был әсир барындарҙың, тиләүҙәрҙең барыһын да һуйһа, хәбәр, һис шикһеҙ, Ишем солтанға, Бүре хакимға, Ҡалҡаман, Айшан, Тайшан, Килдеш батырҙарға етәсәк. Уларҙан башҡа шундай үк төрки халыҡ нуғайҙар ҙа тора бит әле Яйыҡ, Уй араларында... Мәжбүр булды ҡалмаҡ тайшаһы барлыҡ табын-барын, тиләүҙәрҙе илдәренә ҡайтарырға.

Илдәренә ҡайтарырға, әммә илсе итеп. Бына мин ырыуҙаштарығыҙҙы ҡайтарам, әммә һеҙҙең менән килешер өсөн. Килешеүҙең төп асылы ер булыр, ер алыу, нығыныу, илле булыу ине төп уйында тайшаның. Күршеләрең менән солохта булмай, ерле булып булмаҫ. Ай-һай, булмаҫ. Күксәтау барындарының башында торған Таҡмасҡа һәм башҡорт тиләүҙәре хаким Аралға еткерҙеләр тайшаның ҡарарын. Хәтер ул саҡтағы, 1606–1610 йылғы, ҡалмаҡ тайшаһының исемен беҙгә еткермәгән. Әммә шуныһы асыҡ: был ваҡиғалар 1671–1721 йылдарға тиклем ҡалмаҡтар тайшаһы булған Айыука, Доржа, унан һуң тайшалыҡ ҡылған Дундук Омбо замандарынан байтаҡҡа алда була.

– Ҡалмаҡ тайшаһының һары балсыҡтан түңәрәкләп өйөп эшләнгән ур асыҡлығынан керетеү менән, ҡыл арҡандар менән ауыҙынан алып, башын артҡа ҡайырып бәйләнгән Таҡмасты ла, Аралды ла системәр. Нойондар, елкәләренән төртөп, тайша алдында йөгөнләттеләр. Ҡалын кейеҙҙәр өҫтөндә ултырған тайша, ҡалмаҡтар алдында бер ни ғәйебе булмаған Таҡмас менән Аралға ҡыйбыҡ күҙҙәре менән текәлеп, байтаҡ ҡына ҡарап ултырҙы. Әсирҙәрҙең янына төрткөслəп ҡатып бөткән тире кейемле ҡаҙаҡ ҡарты тылмасты кереттеләр. Үҙ телендә тайша Таҡмас менән Аралға ҡулдарын һелтәй-һелтәй бик оҙаҡ ниҙер һөйләне. Нойондар ҡаҙаҡ ҡартына тәржемә итергә бойороп, төрткөслəп ишара яһаны. Ҡаҙаҡ тылмас һүҙенән шуны аңланы Таҡмас: ҡалған бөтә кешеләре, мал-тыуарҙары менән Тубыл аша сығып, ҡәбиләләренә ҡайтарыла; ҡайтҡас, тайшаның һүҙ сәләмен башҡорт хакимдарына тапшырырға. Шулай булды. Тубыл аша сығыу менән башҡорт ерҙәре башланды.

Һанар, Өйәл, Уй йылғаларының ҡушылдығы араһындағы ҡалҡыулыҡта Өстамаҡ тигән нығытмала башҡорттарҙың һаҡсы сапҡындары йыл әйләнәһенә, бер-береһен алмаштырып, уяуҙа тора ине.

Таҡмас менән Арал Өстамаҡҡа етеп, ҡалмаҡтарҙан алған хәлəхүәлде түкмәй-сәсмәй Айшандың улы Ҡайыпҡа һәм Аятҡа еткерҙе. Фекер алышып, кәңәш ҡорғас, Ҡомас тауы итәгендәге ултыраҡҡа сапҡындар сапты. Ҡомас буйынан был хәбәр Сыңға Тура еренә Ишем солтанға һәм башҡа ырыу-нәсәб рәйестәренә еткерелде. Ике йома үтеүгә, Өстамаҡ урына көнсығыш табындарының барлыҡ ырыу башлыҡтары, күрше-күләндәре һәм Ишем солтан үҙе килде. Кәңәш ҡорҙолар. Ике мөһим ҡарар ҡабул ителде көнсығыш һәм Ибер табындары өсөн. Ҡалмаҡтарҙың солох һорап килеүҙәрен ҡабул итеп, уларҙы берләшкән башҡорт, ҡаҙаҡ, нуғай маҡсатына — урыҫ батшалығына көрәшкə ылыҡтырырға. Ер тураһында өнəһəләр, тура яуап бирмəй, иң алда көрəш мəсьəләһен хəл итеүҙе ҡуйырға... Әлбиттә, ул халыҡҡа башҡорт еренең бер аяһын да бирмәҫкә. Бынығы — төп ҡарар!

Өстамаҡ йыйынында ҡабул ителгән икенсе ҙур ҡарар шул булыр. Табын тиләүҙәре Арал кешеләренə, Тубылдың һул ҡушылдығы — хəҙерге Аят йылғаһынан ғəрепкə тиләү ырыуы ерҙəренə тиклем өлөш. Ə Күксəтауҙан килгəн барындарға — барындар еренə тиклем бер ҡыйсым (өлөш) ер бирергə. Ул ер Тубылдан алып оло барындар менəн Ҡалҡаманға арҡа терəп ятырға тейеш. Ул ерҙəр Илсе ерҙəре (Илселек ерҙəре) тип аталды халыҡ телендə. Хəҙерге Ҡуяндар аймағы, Асылы, Һəйтəк, боронғо Мулдаш, Аҡбулат, Абдулбаҡый, Аҡҡужа, Болаҡ (хəҙерге Ҡандыболаҡ) көнсығышта хəҙер Силəбе өлкəһе Күмлəк, Таҡмас, Һанар,

Туғаҙаҡ йылғаһы урта ағымы Илсе ерҙәренә инде. Илсе ауылын Илсекәй Әсәнов тигән кеше нигеҙләмәгән. Ә ысынбарлыҡта илселәр ултырағы бик күптән була. Айшан менән Тайшан тарафынан Таҡмасҡа ҡыйсым (ер) бирелгәс, уны улар башта йәйләү урыны итеп тоталар. Ҡараны һыуы тәмле, бурандарҙан ышыҡ, яғырға утын күп булыуы ла Таҡмас кешеләрен ҡайын-ҡарағас менән тома ябыулы Юрға тау буйҙарына тиккә ҡайтармағандыр.

Ә. Әсфәндиәров ауылдар тарихын урыҫ ревизиялары яҙыуҙарына ҡарап яҙа. Ә бит башҡорттар урыҫ ревизияларын һис үҙ итмәгән, уларға бер ниндәй мәғлүмәтте бирмәгәндәр. Ревизияларҙың бигерәк тә тарихи мәғлүмәттәре һис дөрөҫ түгел. 1735–1740 йылдарҙағы башҡорт күтәрелештәрендә бик актив ҡатнашҡан башҡорт ерҙәрен килмешәктәргә биреү тураһында указ сыҡҡас, килгән, ер алған кешеләр ул ауылдарҙы үҙ исемдәренә яҙҙыра башлаған. Әсәновтың исеме Илсе булғанмы, юҡмы — билдәһеҙ. Әммә уның тыуған йылы 1746 булыуы дөрөҫкә тап. Тимәк, ул Салауат яуынан һуң килеп ултыра ауылға. Илсе ере булғас, ревизия яҙыусылары тарафынан Илсе Әсәнов тип яҙыуҙары бик мөмкин. Тағы ла шуныһы дөрөҫ: Илсе Әсәнов, һис шикһеҙ, ситтән килгән батша яҡлы кеше, бәлки, шымсы, юғиһә, уға ултыраҡ, ауыл теркәмәҫтәр ине шундай сәйәси бола ваҡытта. Илсенең, төп башҡорт илселәренең ерен «как бунтовщичьи земли» сит бауырға биргәс, ерһеҙ ҡалған боронғо башҡорт илселәр типтәр сифатын алған да инде.

Боронғо Күксәтау яғынан килгән барын башҡорттары илселәргә әйәртенешеп, айырыла алмай, ҡоҙа-ҡоҙағый булып бөткән, йә иһә аҙаҡ нәҫел-нәсәбтәрен юллап килгән ҡаҙаҡ рәүешле халыҡтың ауылда күп булыуы ла бер билдә. Күсәрбаев, Иҙелбаев, Ҡалабаев, Күҫәкбаев, Тулыбаев һәм башҡа фамилиялар ҙа оҡшаш кеүек ауыл тарихына. Районыбыҙҙа шул осорҙан килгән халыҡтарҙың да ауыл-ауыл булып ойошоп ултырыуҙары дөрөҫ хәл. Мәҫәлән, Кәрим ауылының Ҡостанай урамы, Төпәй ауылы. 1740–1858 йылғы ревизияларҙан йәки 118 йылдан һуң Илсе һыҙмаһы, Илсе һыҙаты, Илсе ере исемдәре халыҡ теленән бөтөнләйгә төшөп ҡала. Илсе һыҙмаһы тураһында Ҡарт Муйнаҡ ауылы ҡарты Ғүмәров Мәүлит бай тигән бабай көтөү көткәндә һөйләр ине.

Төп илселәрҙең нәҫелдәре хәҙер кемдәр? Уны Таҡмастан, Һанарҙан, Күмләктән, Илсенән эҙләргә кәрәктер инде. Ә улар бар. Холоҡ-фиҙеле, булмышы, рухы, мәҙәнилеге айыра уларҙы. Төҫмөрләргә генә кәрәк. Кемгәлер бик һыҙлаулы булмаһа ла, тарих өсөн, дөрөҫлөк өсөн төбәгебеҙҙең ауылдары тарихын яңынан яҙыу кәрәктер? Уныһына ваҡыт һәм ваҡиғалар хаким!

Шулай итеп, Өстамаҡ йыйынында ҡабул ителгән ҡарарҙар ҙа көнсығыш табын ырыуҙары тарихында тәрән эҙ ҡалдырҙы. Эҙ ҡалдырыуының төп сәбәбе шул. Башҡорт иле, табын халҡы, ҡурҡыныс дошман, аңғармаҫтан арҡаға хәнйәр ҡаҙай торған ҡалмаҡтар менән оҙайлы солохҡа килеште. Тарих фәндәре кандидаты, ерҙәшем Әлим Зарипов үҙенең «Эй, Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт» исемле китабында Ишем солтандың берлектәге көс менән 1616 йылда Өфөнө азат итеп алыуын яҙа. Был фактты урыҫ тарихсылары һәм Мурат Аджиның «Полынь Половецкого поля» китабында яҙыуынса, Киев Русендә борон төрки телендә һөйләшкәндәрен, төрки телендә ғибәҙәт ҡылғандарын йәшерәләр. Төркиҙәрҙең Европаны уятыуы, шөғөллө һәм мәҙәниәтле итеүҙәре тураһында әлеге көндәрҙә күренекле рус яҙыусыһы Александр Бушков үҙенең «Неизвестная Азия» исемле китабында бик күп дәлилдәр килтереп яҙа. Быны әллә ни дәлилһеҙ ҙә аңлап булалыр, минеңсә. Фәлсәфәүи уй һәм аҡыл менән уйлап ҡарағанда ла, әгәр һин эҙ генә тәбиғәт балаһы булһаң, төшөнөрһөң. Беҙ аңлағаң да, аңлай алмағаң сәбәптәр теҙмәһе ята бында.

Яҡтылыҡ ҡайҙан сыға, ҡеүәт тә шунда. Ә көс барлыҡ тереклекте уята. Бер ҡеүәтте икенсе төрлөгә әйләндерә. Тимәк, ҡояш сыҡҡан яҡ — көнсығыш барлыҡ илаһи ҡеүәткә эйә. Ҡалған булмыштар уға буйһона, эйәрә, хасил була. Азиянан алған көс, ҡеүәт, тимәк, байлыҡты ҡулланып, көнбайыш инде бөтә параметрҙары буйынса серергә юл алған. Ул үләсәк, әгәр физик рәүешле булмаһа, рух рәүешле, ә рух үлеме, ул дәүләттәрҙе лә, кешеләрен дә буш ҡыуыҡҡа әйләндерәсәк. Әлбиттә, быға йөҙ йыллыҡтар кәрәк.

* * *

Ишем солтандың ҙур коалиция төҙөй алыуы үҙе үк төрки донъяһындағы ғәйәт ҙур ваҡиға, тик уға иғтибар бирep, халыҡтар рухына, халыҡтар көсөнә баһа бирә белеү кәрәктер. Ишем солтан, ағаһы Ғәли хандың вариҫы булараҡ, Сыңға Тура тирәһендә хан итеп иғлан ителһә лә, уға ниңәлер хан исеме йәбешмәй. Шулай ҙа ул бик ғәйрәтле шәхес. Әле 1621 йылдан һуң уның юлда осраған Ибер слободаларын, ҡыңғырауһыҙ монастырҙарын емереп, Урал аша Өпә (Өфө) ултырағына тағы ла яу менән барғаны билдәле. Тимәк, 1620 йылдан һуң да Ишем солтан үҙ ҡеүәтен юғалтмай коалицияны ҡулда тотҡан. Тарих — үҙ һүҙле фән! Ләкин һәр осор, һәр ижтимағи-сәйәси дәүләт уны үҙ мәнфәғәтенә ҡулайлаштырып яҙа. Тарихи ысын ваҡиғалар йә аҫта ҡала, йә шул осор

сәйәсәтенә ҡулайлаштырып яҙыла ла көслө тарафынан көсһеҙләрәккә көслəп тағыла. Тарихҡа берҙəн-бер хөкөм — ваҡыт!

Ысынбарлыҡта 1751 йылдарға тиклем, йəки үрҙə яҙылған ваҡиғаларҙан 140 йыл артығы менән үткəс тə, көнсығыш табындар, нигеҙҙə, үҙаллы йəшəй. Тик Ҡара Табын ырыуының Мейəс йылғаһының һул ярында, Исəт, Ишем буйҙарында йəшəгəндəре генə 1608 йылдарҙа урыҫ воеводствоһына яһаҡ түлəй башлай. Яһаҡты ялан-ҡатайҙар ҙа түлəй. Инйəр, Туҡан яҡтарына күскəндəре əлегə яһаҡтан һəм баш эйеүҙəн азат була. Урыҫ дəүлəте башҡорт менəн ҡаҙаҡ араһына Долмат сиркəүе яғынан Өр йылғаһы буйына тиклем ныҡытмалар төҙəй башлай. Новгород, Сарапул өйəҙҙəренəн ҡол крəҫтиəндəрен күсереп, шул ерҙəргə ултырта. Ергə тəүге ревизия 1740 йылда ойошторола. Был йылдарҙа Рəсəйҙə Петр I ағаһы Иван IV Алексеевичтың ҡыҙы Анна Ивановна тəхеттə була. Лəкин ул ил менəн етəкселек итмəй. Ысынбарлыҡта ил менəн Э. И. Бирон етəкселек итə. Башҡортостанда ревизия иҫлан ителгəс, ул ревизия үткəреүселəргə 1739 йылдың 5 майында императрица исеменəн фарман-иҫкəрмə яҙа. Фарман былай тип атала: «О непроведении переписи башкир. Именной, даный из кабинета Ея Величества генерал-майор Саймонов. 5 мая 1739 г... доносите, что по полученным известиям от Уфимской провинциальной канцелярии не надейтесь, чтоб башкирцы в перепись себя допустили, а паче Сибирская дорога; а из онаго экстракта усмотрено, что Сибирской дороги башкирцы такую перепись за велукую себе противность почитают... однако ж сие надлежит чинить весьма с великою предосторожностью секретно, не давая ни малейшего вида...»

Батшаға əле 1740 йылдарға тиклем үк тулыһынса баш эймəгəн көнсығыш табындар араһында ислам динен тотҡан, тел белгəн үҙ кешеләре кəрəк була. Был ролде батшаға һəр саҡ тоғро мишəрҙəр, һəр төрлө ваҡ əйберҙəр һатҡан кеше булып, халыҡ араһында теҙмеҫкенеп йөрөгəн татарҙар, христиан динен алып, Иван Иванович булып йөрөгəн нуғайҙар уңышлы үтəй. Тəүге ревизияға тиклем үк иң алда яр яҙмаһын үткəрəләр. Был 1727 йылда тəхеткə килгəн Петр II ваҡытында була. Ул да дəүлəт менəн етəкселек итмəй, ысынбарлыҡта етəксе А. Д. Меньшиков була. Петр II исеменəн яҙылған фарман 1728 йылдың 2 августында донъя күрə.

«О распределении геодезистов по губерниям для сочинения ландшафта. Сенатский» тип атала. «Около Уфы и прочия места лежащия между Уфою, Яиком, Тоболом со впадающими реками до Волги».

Был тəүге ер үлсəү əллə ни тулы булмайҙыр. Сөнки киләсəктəге ер үлсəүҙəрҙең, ревизияларҙың һөҙөмтəһе Екатеринбургтан Ырымбурға тиклем ерҙə «тридцатипятиметровая полоса»ға тəүге

крепостнойҙар, казак исеме алған ҡасаҡтар, һәр төрлө башкиҫәрҙәр ер бүләк ителеп ултыртыла. Был ревизиялар ун тапҡыр ҡабатланып, оҙонлоғо 700 самаһы, киңлеге 100-гә яҡын саҡрым башҡорт ере алына. Билдәле күп ерҙәргә урыҫ исемдәре бирелһә лә, бөгөн дә бихисап ерҙәр, йылға-күлдәр үҙ исемдәре менән ҡалған. 1736 йылдың 11 февралендә тағы ла бер фарман сыға. «...в башкирских жилищах кузнецов и кузниц не иметь, и из городов кузнецов и насекальщиков не отпущать, а быть только в одних городах и то числу потребному без излишества... ружья и пороху, и свинцу, панцырей, сабель, луков, копий, стрел не делали, не возили, и не продавали, и не меняли. Башкирцев, кто пойман будет в воровствах... учиня наказание кнутом, в Рогервик в работу...»

Үткән йөҙ ҙә ҡырҡ йыл эсендә күп мейестәр емертелә, оҫталар үлтерелә, каторгаға ебәрелә, мәғдән урындары ябылып, тик халыҡ хәтерендә генә ҡала. Шулай итеп, оҙон-оҙаҡ бер туҡтауһыҙ яуҙар аша тарих 1700 йылдарға килеп етә.

ВАРИҪТАР ИЛ ҠУРСАЛАЙ

Буғай хаким вафатынан һуң, ойошоп йәшәгән көнсығыш табындары һүҙҙә бер булһа ла, ырыуҙары алдына килеп баҫҡан оло һәм кесе һорауҙарҙы хәл итеүҙә үҙаллы булып китте. Һәр ваҡиғаны бер-береһенә көн эсендә хәбәр еткереп тороусы сапҡын егеттәр ҙә, үҙ-ара өс-биш саҡрымдағы осар урындарын ташлап, үҙ йорттарында йәшәне.

Тайшан ырыу башлыҡтарын был турала бер нисә тапҡыр иҫкәртһә лә, күбәләктәр ҙә, тиләүҙәр ҙә, бигерәк тә уртаға кереп урынлашҡан ҡара табындар уның һүҙенә майпаһынманы. Бер нисә йыл үтеүгә был шөғөл бөтөнләйгә һүрелде. Тик бейегерәк тау баштарында һәм яу килеүе төҫмөрләнгән йүнәлештәрҙә генә ун-ун биш һыбайлы ыҙма сик буйлап йөрөнө. Көньяҡ Яйыҡ, Тубыл баштарында йәшәгән нуғайҙарҙың Уй тамағынан ғәрептәрәк Ибер яҡҡа, Исәт, Мейәс уйһыулыҡтарына үтеүен дә дүрт мең баш йылҡы юғалғас ҡына белделәр.

Тайшан менән Айшан был турала тиҙ генә ырыуҙарға сапҡын ебәрҙе. Әммә барып килеү өс көнгә һуҙылды. Күбәләктәр, беҙҙең мал-тыуар теүәл, тип килмәне. Тиләүҙәр килде. Ҡаралар өндәшмәй ҡалды. Барындар, тиләүҙәр дүрт йөҙләгән һыбайлы менән ҡыуа китте.

Өс көндән һуң Исәт уйһыулығында ҙур яланда тупланған ғәскәргә тап булдылар. Күптәр, бик күптәр ине улар, ялан тулы. Береһе лә ат өҫтөндә түгел. Аҫтарынан төтөн сыҡҡан аҫылған ҡа-

ҙандар, туғарылған арбалар, тиҙ-тиҙ ҡоролған тирмәләр, меңәрләгән кешеләр һәм аттар бергә буталған ине. Саң туҙҙырып сабып килгән табындар, бер-бер хәл була ҡалһа тип, һөңгөләрен ҡулдарына алды. Ҡындарына беркетелгән ҡайыш әлмәктәрен ҡылыс тотҡаһынан ысҡындырҙылар. Әммә яландағыларҙың яу ҡаршылар ниәте юҡ ине. Һәр кем үҙ шөғөлө менән булды. Шулай ҙа бер төркөмө һағайҙы. Тиҙ генә аттарына менеп, кемдеңдер ҡул һелтәп күрһәтеүе буйынса Айшан менән Тайшан төркөмөнә ҡаршы сапты. Уҡ атыр ара ҡалғас, ике яҡ та ярһыу аттарын туҡтатты. Ҡалмаҡ (ҡалмыҡ) телен дә, ҡаҙаҡ телен дә яҡшы белгән Муйнаҡ батыр алға сыҡты. Ул бик мыҡты кәүҙәле, киң ҡулбашлы, йыуан муйынлы, кешегә һөҙөп ҡараған бәһлеүән ине. Тышҡы ҡиәфәте менән атаһы Буғай хакимға оҡшаған. Аталары Айшан һәм Тайшан менән бер булһа ла, Муйнаҡтың инәһе төрки мағул уйғыр ҡыҙы ине.

Муйнаҡ бала саҡта уҡ инәһе Һутлы Ҡаҙы сабып барғанда, ат өҫтөнән йығылып төшөп, билен һындырып, донъя ҡуйған. Үгәй инәйҙәре уны һырыҡтырып бармай. Кешеләрҙән ситләшер, ҡыян һәм ҡырағайыраҡ булып үҫә. Буй еткергәс, атаһы Буғай уға ҡара табындарҙан кәләш әйттереп, башлы-күҙле иткәс, ере сигендәге Тубыл ултырағына күсерә. Унда уның бер-бер артлы бәһлеүәндәй улдары, тормош тотҡаһы булырҙай таяныслы ҡыҙҙары тыуып, үҙ тамырҙарын тармаҡландыра. Атаһының төп ултырағы Алтын-таштан ярайһы уҡ алыҫлыҡта булыу сәбәпле, ата йортонда барған бөтә ваҡиғаларҙа ҡатнаша алмай. Дөрөҫөрәге, бик үҡ ҡатнашаһы ла килмәй, әсендә бала саҡтағы ҡыйырһытылыуҙар йөйө һаман да тигеҙләнмәгән була. Саҡырһалар, килә, әммә йылына иң күбендә — ике тапҡыр. Муйнаҡ килһә, йыйында башҡа күренекле көрәшселәр көрәшмәй. Ҡустылары Айшан менән Тайшан һәр саҡ ағалары менән бил һынаша. Әммә Муйнаҡ уларҙы кеше алдында бер ваҡытта ла йыҡмай. Йығырға теләмәне ул ҡустыларын кеше алдында.

Ҡаршы яҡтан сабып килеүселәр тап-таҙа башҡорт телендә быларҙың ҡайһы ерҙән, ҡайһы ырыуҙан, ниндәй йылғаның һыуын эсеүҙәрен һораны. Яуап ишеткәс, барыһы ла ҡоралдарын йыйҙы. Бергәләп Оло Яланға киттеләр.

Был Ишем Солтандың нуғайҙар, ҡаҙаҡтар менән һөйләшеү өсөн йыйған оло ҡоро булып сыҡты. Осраҡлы хәл шулай Тайшан менән Килдеш батырҙы Ишем солтан ҡорона килтерҙе. Ишем солтан Килдеш менән Тайшанға ҡаҙаҡтар, нуғайҙар менән килешеү, бер табын булыу тураһында өндәмә менән ҡор яһауын, ғауға-ғәләмәт сыға ҡалһа, һаҡ булыуҙы, әммә бик мөләйемлек күрһәтеү кәрәклеген төшөндөрҙө. Әммә Тайшан менән Килдеш нуғайҙарҙың дүрт меңләгән йылҡыны Туғаҙаҡ, Аят буйҙарынан

ҡыуып алып китеүҙәрен һәм кисекмәҫтән кире ҡайтарыуҙарын һораны.

Ишем солтан уйға ҡалды. Бер аҙ уйланып торғас, былай тине: «Мин хәҙер үҙ кешеләремә әйтәйем. Кем ҡайҙан, күпме мал баҫҡан һәм ҡайҙа урынлаштырған? Иң алда шым ғына шуны беләйек. Мәжлестә төп хәбәр барғанда был турала өндәшмәҫкә. Килешеү төҙөлөп, уларҙан шырт алғас, был һорауҙың ҡәтғилеге үҙ урынын алыр». Шулай килештеләр. Ике-өс көн үтеүгә Ишем Солтан ебәргән сапҡындар менән ҡатайҙар, ҡара табындар, әйлеләр (әйҙеләр), ҡыуаҡандар, күбәләктәр һәм башҡалар килде. Килдеш менән Тайшан алайы (полк мәғәнәһендә) Оло Яланға килеүенең бишенсе көнөндә барлыҡ сапҡын кешеләре килеп бөттө.

Уртаға дүрт ат екмәле, дүрт тәгәрмәсле киң тәхет сығарып ҡуйҙылар. Ул балаҫтар, келәмдәр менән ябыулы. Шунда уҡ бер башынан яһалма күтәрмә текәнеләр. Түпһәлгә ҡуйылған тәхет тирәләй барлыҡ халыҡ өйөр-өйөр булып үҙ урынын алды. Тәхет алдында — Ишем солтан кешеләре, улар артында — дүрт-биш ҡораллы алай. Улар йәнәшендә бөтә Көнсығыш Урал армыттарынан килгән ырыу вәкилдәре. Уң ҡулда — Алта хакимдары менән нуғайҙар, Алаш солтандары менән ҡаҙаҡтар, һул яҡта — торғауыт һәм хошауыт ырыуы вәкилдәре менән ҡалмаҡ-мунғалдар.

Торғауыт ҡалмаҡтары төркисә яҡшы аңлаһа ла, хошауыт ҡалмаҡтары был телде аңламай ине. Шуға күрә лә Ишем солтан тәржемә итеп, ҡысҡырып әйтеп торор өсөн тылмастар ҡуйҙы. Үҙе һәр һүҙҙе уйлап, ҡыҫҡа, әммә ҡырҡа хәбәр әйтергә ҡарар итте. Барлыҡ халыҡ үҙ урынын алып, бер аҙ тынысланғас, нағышлап тегелгән елән, еҙ баҫылған киң ҡайышына ҡылыс таҡҡан Ишем солтан балаҫ менән түшәлгән баҫҡыстан тәхеткә менде.

Әллә ҡанун һаҡлап, әллә баҙнат итмәй, тәхет өҫтөнә берәү ҙә күтәрелмәне. Уны ҡораллы һуғышсылары, яҡын ялмандары ураты алған ине. Тәхет өҫтөнә йоҡа келәм менән ябыулы үрмә ултырғыс, алдына һырлап, ҡытмырлап эшләнгән биҙәр бүкән ҡуйылған. Өҫтөндә ниндәйҙер бер китап, һөрмә кәләм, дүрт ҡырлы итеп теленгән йоҡа ғына һары туҙ биттәре ята. Ишем солтан тәхет өҫтөнә менгәс, һәр халыҡ тын ҡалды.

– Иреклеләрем, ҡандаштарым, фекерҙәштәрем, яуҙаштарым! — тип мөрәжәғәт итте ул. – Был ергә мин һеҙҙе ҡыуып та, көслəп тә килтермәнем. Йома үтеп бара, берегеҙ ҙә ташлап китмәне был ерҙе. Һәр халайыҡ, һәр ырыу башы менән бөгөн төплө ҡарар ҡабул итер өсөн көн һайын фекер алыштыҡ. Кемдең ниндәй шартта тороуын хәҙер беләбеҙ. Төп мәсьәлә – ер-һыу мәсьәләһе...

Ерең булһа – илең бар,
Илең булһа – йортоң бар,
Йортоң булһа – күркең бар!

Тәүарих беҙҙе бында жыйырға үҙе бойорҙо. Һәр мөьмин, теге донъяға китерҙән алда, был донъяла азат һәм иркен, үҙ еренә хужалыҡ тойғоһо кисереп йәшәргә хаҡлы һәм бурыслы. Хужалыҡ тойғоһо ерең, илең, үҙ ултырағың булғанда ғына күңелдә йәшәй. Ул тойғо беҙгә рух бирә, ә рухың маҡсат ҡуя. Әле бында килгән һәр халайыҡ ил, ер дәғүәләй. Ләкин үҙ-ара ҡан ҡойошоп, беҙ ерле лә, илле лә була алмабыҙ, тик бер-беребеҙҙе мөнтөкләрбеҙ. Тәүарих беҙгә, төркиҙәргә, етерлек ер биргән. Бөтә Ибер уйһыулығы, Алтай менән Урал аръяғы Оло Иҙелгә тиклем йәйрәп ята еребеҙ. Әммә берҙәмһеҙлек, үҙ-ара татыу булмау насар һөҙөмтәләргә килтерҙе. Бер нәмәләре менән артыҡ булмаһалар ҙа, үҙҙәрен башҡа төркиҙәрҙән өҫтөн күреп, беҙҙең менән бәйләнеш тотмайынса, йәки тиктән-тик яһаҡ һорап маташҡан болғарҙарҙың яҙмышы билдәле. Уларҙы Иван батша баш һалдырҙы. Мишәрҙәр ҙә, нуғайҙар ҙа, беҙ, башҡорттар, иберлеләр ҙә ярҙамға барманыҡ. Дөрөҫөрәге, бер һүҙҙән йәшәмәгәс, жыйналып бара алманыҡ ярҙамға. Шулай үҙ-ара низағтар ҙур һәләкәткә килтерҙе. Иван батша Ҡазан ҡалаһын алып, унда нығынғас, көнсығышҡа, беҙгә юл асылды уға. Өпәгә килеп нығындылар, унан Урта Урал аша үтеп, хәҙер Ибергә, беҙҙең төп тороҡҡа һибелделәр. Торғауыт һәм хошауыттар менән фекер алышҡанда шуны аңланым: уларҙың ерҙәре, илдәре юҡ. Тибет тигән яҡтағы илдәренән уларҙы ҡытайҙар, уйғырҙар ҡыуып ебәргән. Улар ҙа күп халыҡ икән. Зюлзугу Өрлүк тигән хандары менән бөтә ҡаҙаҡ иле аша күп ғауғалар, яуҙар тыуҙырып, бер өлөшө Яйыҡтың түбәнге ағымына, бер өлөшө беҙҙең тирәлә бутала.

Нуғайҙар ҙа илһеҙ. Өпә янынан бер өлөшө Тын, Ҡобан яғына китте. Бер өлөшө Тубыл башында ултырҙы әлегә. Алта хакимдары менән хәбәрләшеп торған инек. Бына хәҙер төп мәслихәт, төп хәжәт ваҡыты килеп етте. Инде ерле булыр өсөн бер генә шарт бар...

Ишем солтан туҡтап ҡалды. Сөнки тылмастар хошауыттарға ҡысҡыра-ҡысҡыра ҡул болғап аңлата. Тегеләре тылмастарҙы әллә аңламай, әллә риза булмай үҙ-ара шаулаша. Хошауыт етәксеһе бер тылмасты етәклән, Ишем солтан ҡаршыһына килде.

– Тибет еренән ҡыуылғандар тигән һүҙ оҡшамай уға, ханым. Нимә тип әйтәйем? — тине тылмас. Ишем хан ҡалмаҡтарҙың өс ҡәбиләһе, йәғни торғауыттар, хошауыттар, дербеттәр һәм уларға эйәргән башҡа ваҡ мунғал һәм төрки мағул ырыуҙарының ҡытайҙар, һуңынан уйғырҙар менән булған һуғыштарҙа еңелеп, ҡаҙаҡтарҙың Оло Йөҙөн туҙыра-туҙыра, бер өлөшө Бохара яғына, бер өлөшө Көнсығыш Урал, Ибер уйһыулыҡтарына, бер өлөшө Яйыҡ тамағы йүнәлешендә китеүҙәрен бик яҡшы белә ине. Ҡалмаҡтарҙың Ибер, Урал, Яйыҡ, Һамар, Кинел йылғалары буйында һаман

да башҡорттар һәм казактар менән ғауғалашып йөрөүҙәрен тойоп, уларҙы урыҫ хакимлығын Өпәнән ҡыуыу өсөн көньяҡтан һәм көнсығыштан яу ойоштороуын ҡулланыр кәрәк, тип уйланы Ишем хан. Шуға ла ул тылмасҡа:

– Әйт ҡалмаҡҡа, улар беҙгә Тибет яғынан ярҙамға килгән. Урыҫ хакимлығын ҡыуһаҡ, уларға Иберҙән ер бүлербеҙ. Туған булырбыҙ. Тик үҙ хандарына тиҙ арала еткерһендәр. Улар менән осрашыуҙы хәбәрләшербеҙ, – тине. Был һүҙҙәрҙән һуң ҡалмаҡтың күҙҙәренә осҡон ҡунды, йөҙөнә киң булып йылмайыу сыҡты. Үҙ халҡы янына барып аңлатҡас, хошауыт ырыуы шау-гөр килде, һикерештеләр, һауала ҡылыстарын болғанылар. Халыҡ тыныслан-ғас, Ишем хан дауам итте:

– Барыбыҙ ҙа азат, ирекле, илле, ерле булыу өсөн шарт берәү генә, – тип ҡабатланы ул. – Бөтәбеҙгә лә берләшеп, берләштерелгән көс туплап, бер етәкселек аҫтында Иберҙән, Урта Уралдан ғәреп батшаһы кешеләрен ҡыуып сығарыу, Өпәне азат итеп, олатайҙарыбыҙ Мортаҙа, Ибәк Ибраһим, Мәхмүдек хан-ҡарттайҙарыбыҙ тәхетен тергеҙәйек! Шул ерҙәр азат ителһә, ер барыбыҙға ла етер, ҡалмаҡҡа ла, тармаҡҡа ла, – тине. Нуғайҙарҙың Алта хакимын, башҡаларға әйәреп Ҡобан яғына китмәҫкә, шул ерҙә ҡалырға өндәне. Оло Иҙел аръяғынан, урыҫ ҡыҫымынан яҡтайып, нуғайҙарға ҡушылған мишәрҙәр ҙә бар ине араларында.

Ишем солтан уларға бер ҡыйсым ер сиге билдәләне. Шул осорҙан алып хәҙерге Ҡоншаҡ, Екатеринбург, Төмән, Ҡурған ерҙәрендә һипмә булып таралған халыҡтар тамырҙары йәшәйҙер әле лә. Әммә Ишем солтан ҡалмаҡтарҙың бер төптән булмай, бер өлөшө Мәскәү менән килешеү тураһында һүҙ алып барыуын, христиан динен алып, суҡыныуҙарын, ә бер өлөшө уның менән көрәшер өсөн төрки халыҡтары менән һүҙ беркетеүен белмәй ине. Был осорҙа ҡалмаҡтарҙың дөйөм ханы булып Хо Өрлүк иҫәпләнде. Хо Өрлүк тигәне төрки телендә ҙур ул, оло ул, ҙур орлоҡ, ҙур нәҫел тигәнерәк мәғәнәне аңлата булһа кәрәк. Ә атаһы Зюлзугу Өрлүк исеме – юлдаш, юлсы, төрки телендә юл сығыу, юл ҡото, юлғотто тип аңлау кәрәктер. Мунғалдарҙың йолаһы буйынса, ҡалмаҡтарҙа эске тәртип ҡағиҙәһе бик ҡәтғи ине.

Бер-береһен алдаған өсөн – үлем, һүҙ һатҡан ғәйбәт өсөн – үлем! Дуҫына тоғроһоҙлоҡ йәки һуғыш ерен ташлап ҡасыусыны ла шул уҡ яза көтә.

Ләкин уларҙа Сыңғыҙ ғәскәрендәге кеүек унлыҡ, иллелек, йөҙлөк бүленештәре булманы. Ҙур ҡаҙаҡ сахраһында тырым-тырағай, һис бер ҙур ойошоуһыҙ йәшәгән ҡаҙаҡ ырыуҙарын ике йөҙләгән меңәрбала, һөйрәткелә килгән ҡалмаҡтар тиҙ ҡыйратты.

* * *

Урта Йөҙҙәң Арғын, Кәрәй, Ҡыпсаҡ, Найман ҡәбиләләре ныҡ уҡ ҡаршылыҡ күрһәтһә лә, бер йөҙө йоҙроҡҡа тәйнәлә алманы. Ҙур шул дала, бик ҙур! Бер-береңә сапҡын менән дә, хатта ҡош ҡанатына йәбешеп тә тиҙ арала еткеһеҙ. Ҡол Дүнән, Аҡ Найман, Садыр, Балталы һәм башҡа ырыуҙар, Балхаш күленең көньяғына күсеп, уларға юл асты. Бәләкәй Йөҙҙәң ете ырыу ҡәбиләһенең Кердере, Тама, Шеркеш ырыуҙары ла ҡаршы тора алманы. Жағалбайлы, Телеү ырыуҙары ғына йән аямай һуғышты. Ҡаҙаҡтар, ҡалмаҡтарҙан ҡасып, Тубыл, Яйыҡ аша сығып, Уй, Мейәс башына килеп, башҡорттарға мөрәжәғәт итһә лә, әлек һәр саҡ барымта, ҡарымта менән йәшәү сәбәпле, уртаҡ һүҙ таба алманылар.

Ә ҡалмаҡтар барлыҡ Ҡаҙағстанға тиерлек хужа булып алды. Иҫтәренә килгән ҡаҙаҡ солтандары берләшеп, ҡалмаҡтарға бик көслө һөжүм ойоштороҙо. Көрәш күсәгилешле унар йылға һуҙылды.

– Эйе, ҡалмаҡтарға ла ер етер, – тип ҡабатланы Ишем солтан. Мәскәү хакимлығы Урта Уралда беҙҙең мәғдән иретә торған мейестәрҙе емереп, урынына яңынан суйын иретеү ҡоролмалары төҙөнө. Һуғыш һәм ер эшкәртеү ҡоралдары шунда эшләнә. Әммә уларҙы һаҡлау көсө ҙур түгел. Был яланға жыйналған арыҫландар, ул зауыттарҙы емереп, Өпә яҡҡа еңел үтәсәк...

Ишем солтан дөйөм бурыстан һуң һәр ҡәбиләгә ни эшләргә кәрәклеге тураһында бурыс йөкмәтте. Алдан һөйләшеп ҡуйған һүҙ беркетеү буйынса, Ҡатай ҡәбиләһенән – Ҡотҡойҙо батыр, әйлеләрҙән – Тайыш бәһлеүән, барындарҙан – Тайшан, ҡыуаҡандарҙан – Арҡалаш һәм башҡалар нотоҡ тотто. Дөйөм йыйын: «Еребеҙҙе бирмәйбеҙ, еребеҙҙе азат итәбеҙ!» – тигән дөйөм күтәрелеш, ҡысҡырыш, ҡорал болғау менән тамамланды.

Йыйындан һуң Ишем солтан үҙ тирмәһенә ҡалмаҡ тайшаһын, ҡаҙаҡ ханын, нуғайҙарҙан Алта солтанды, бөтә башҡорт иле ырыу баштарын саҡырҙы. Оло йыйын барғанда тәхет йәнәшендә кемдең ни турала һөйләгәнен һәм ниндәй ҡарар ҡабул ителгәнен яҙып барыусы сәркәтиптәр йәйләүҙең ишек төбөнән урын алды. Дөйөм ҡарарҙың ысын күңелдән булыуын-булмауын белер өсөн Ишем солтан иң алда ҡаҙаҡ ханы вариҫына һүҙ ҡушты:

– Биргән һүҙгә тоғромо? — тип һораны.

– Тоғро, тоғро, – тип баш ҡаҡты ҡаҙаҡ. Сәркәтип Урта Йөҙ хан вариҫының исем-шәрифен яҙып, туҙ ҡағыҙҙы Ишем солтанға бирҙе.

Тарих та, риүәйәттәр ҙә беҙгә ул осорҙағы Бәләкәй һәм Урта Йөҙ ҡаҙаҡ хандарының исемен еткермәгән.

Ҡаҙаҡ ханы вариҫы уҡый-яҙа белмәй ине. Ишем солтан туҙ ҡағыҙҙы тотторғас, ул, бының менән ни эшләргә икән тигәндәй,

уны ян-яҡҡа әйләндерҙе. Ишем солтан ҡаҙаҡ ханынан уң ҡулын һораны. Хандың уң ҡулының баш бармағын тотоп, сәркәтипкә ымланы. Был күренешкә өйрәнгән сәркәтип, тиҙ генә һөрмә ҡәләм менән хандың бармағын буяны. Ишем солтан уға туҙ ҡағыҙҙа бармаҡ баҫырға урын күрһәтте. Ҡалмаҡ менән дә шундай уҡ хәл ҡабатланды. Башҡорт ырыу баштары һәм нуғай Алта ғәрәп хәрефтәре менән имза ҡуйҙы. Яҙа белмәгәндәре ырыу тамғаларын төшөрҙө.

Быны күргән ҡаҙаҡ ханы, туҙ ҡағыҙҙы кире һорап алып, бармаҡ баҫмаһы яныңа ат дағаһына оҡшаған тамға ҡуйҙы. Аш ашалып бөтөп, доға ҡылынғас, Тайшан менән Килдеш батыр Ишем солтанға һүҙ ҡушты:

– Ханым, беҙҙең сик менән үткәндә Алта солтан кешеләре ҡырҡ йөҙ йылҡыбыҙҙы ҡыуып алып киткән. Эҙҙәренән килдек. Ҡан ҡойош булыр ине, рәхмәт ханыбыҙға, хәҙер беҙ бер-беребеҙгә шырт бирҙек. Беҙҙең малдар кире ҡайтыр, тип өмөтләнәбеҙ. Яуға менер ҡонандар ине күбеһе.

Алта был һүҙҙәрҙе ишеткәс, төҫө боҙолдо, ситкә боролоп, төкөрөп ебәрҙе. Ишем солтан уға ҡарап:

– Алта, дөйөм эште дегет менән бутама. Аттарын теүәл генә кире ҡайтар, яу алдынан бер-беребеҙҙе тулыландырырбыҙ, – тине. Алта:

– Дәлил бармы? – тип һораны.

– Бар, – тине Тайшан. – Атайымдың бурыл юрғаһын улың Нуржан менеп алған. Менгең менән тирмә ҡаршында йәнәш тора, – тине. Ҡор тын ҡалды. Ишем солтан Алтаға туҙ ҡағыҙҙы күтәреп күрһәтте. Тын ҡалған Алта:

– Ун йөҙөн юлда торғауыт Шөкөр Данчинға ҡуйға, йәнлек тиреләренә алмаштыҡ, ҡалғанын алып ҡайтырҙар, – тине.

– Юҡ, үҙегеҙ алып бараһығыҙ, – тип ҡырҡа ҡаршы төштө ҡара табынлы Ҡалҡаман батыр. Ул оло йыйынға килеп өлгөрмәне, әммә хан тирмәһе мәжлесенең уртаһында ине.

Ишем солтан эштең талаш-болашҡа китеүенән хәүефләнеп, Алтаны яныңа саҡырып ултыртты.

– Эш ҙурға китмәһен, ҡайтар малды, ҡуй табылыр, халҡың ас булмаҫ беҙҙең арала. Мин һиңә ер инәнем, беләһең. Ул ер хаҡы ҡырҡ йөҙ ҡуй түгел...

Ризалашты Алта. Ун биш-егерме көндән мал йөрөгән еренә ҡайтыр, айҡалашмайыҡ, тине. Муйнаҡ бәһлеүән, Айшан үҙ нөгәрҙәре менән, төндө төн тимәй, шул уҡ көндө ҡайтыр юлға сыҡты. Ә Тайшан, Килдеш, Ҡалҡаман икенсе көн юлға сыҡты. Арттарынан нөгәрҙәре килде. Уй буйында Муйнаҡ ағалары йәйләүендә ике-өс көн ял иттеләр, ҡунаҡ булдылар. Буласаҡ Өпә яуына әҙерлек эштәрен тикшерҙеләр. Алта нуғай йылҡыларҙы килтерә торған

урынға барырға кешеләрҙе билдәләнеләр, алыш-биреш итеү, тимер һуғыу эштәре һәм башҡа хужалыҡ мәшәкәттәре тураһында кәңәш ҡорҙолар.

Алта илселәре, Ишем солтандың һүҙен йыға алмай, ҡалмаҡ ҡуйҙарын ҡыуаланы. Шөкөр үҙе саңдауҙа булманы. Ул атаһы Хо Өрлүкте эҙләп, Яйыҡтың урта ағымы буйына киткән ине. Шау тыуҙы, ғау сыҡты. Ҡалмаҡтарҙың самаһы менән күп ҡуй етмәне, тиреләрҙең дә иҫәбенә сығырлыҡ түгел. Йыртылған, иҫке, йә был тирәлә бөтөнләй булмаған ваҡ йәнлек тиреләре килтергәндәр. Мал бағырға ғына ҡалған аҙ һанлы ҡалмаҡ торғауыттарҙы тиҙ баҫты нуғайҙар. Бөтә малды өйөрөп алғас: «Башҡорт еренә, башҡорт еренә ҡыуабыҙ», – тип ҡысҡырыштылар. Йәшенер өсөн бурһыҡ ояһын ҡаҙып, киңәйтеп, шул соҡорға боҫҡан бер нисә ҡалмаҡ: «Башҡорт еренә, башҡорт еренә!» — тигән һөрәнде апасыҡ ишетте. Ҡаҙаҡ далаһында йәшенер өсөн тау ҙа, ағас та булмағанлыҡтан, йәшеренер өсөн иң ҡулайлыһы ҡаҙылған соҡорҙар, балсыҡ өйөмө урҙары, киңәйтелгән бурһыҡ, байбаҡ оялары ине. Нуғайҙар малдарҙың күпселек өлөшөн кире ҡайтарҙы. Әммә Тайшан үҙ кешеләре менән был турала ғауға күтәрергә ниәтләнмәне. Ҡарауылда торған егеттәр нуғайҙарҙың төньяҡҡа бик күп мал ҡыуып алып киткәндәрен күргән. Был турала Тайшанға еткерҙеләр.

Өпә яуына әҙерлек менән йәй, көҙ, оҙон ҡыш үтте... Тайшандың күңелендә ҙур шом йөрөнө. Яуға әҙерләнеүен әҙерләнәбеҙ ҙә ул... Тик беҙ киткәнде көтөп, ҡалмаҡтар илде баҫмаҫтармы? Улар Ишем солтанға яуға ҡушылмауҙары тураһында хәбәр еткергәндәр, ти. Хо Өрлүк һәм улы Шөкөр Данчин малдарын ҡыуып алып киткән нуғайҙарҙы башҡорттар тип һығымта сығарҙы һәм ентекле әҙерлек башланы. Бының өсөн улар башҡорт иленең сигенә, Тубылдың уң ярына тупланды. Яҡын-тирәләге барлыҡ ҡалмаҡ тайшалары кешеләрен йыйҙы. Билдәле, Ҡондорса, Һамар, Кинел буйҙарына үткәндәре килмәне. Шулай ҙа ҡалмаҡтар Көньяҡ Башҡортостандан алып төньяҡҡа, Исәт йылғаһы буйына тиклем яу асырға ниәтләнде. Бының өсөн егерме биш меңдән артыҡ яугир әҙерләнде. Сәбәбе башҡорттар ҡыуып алып киткән малтыуарҙарын кире ҡайтарыу булһа, төп маҡсаттары башҡорттарҙың Ишем солтан менән Өпә яғына яуға китеүҙәрен файҙаланып, илдәрен тамам ҡыйратыу, үҙҙәрен бала-сағалары менән һуйып бөтөрөү ине. Тамам тар-мар итеп, ерҙәрен баҫып алырға. Урыҫ батшаһы бик көслө, унан һау ҡайтырҙар микән, тигән уй йөрөнө Өрлүктә.

* * *

Яҙ етеп, ҡонандар күк үләнгә туйыу менән Ишем солтандан барлыҡ табындарға, тамъяндарға, әйлеләргә, ҡатайҙарға — һәммәһенә лә фарман килде. Ишем солтан иң алда Әҫем (Сим) буйында осрашырға тигән фарман бирергә уйлаһа ла, ағаһы Ғәли хандың яңылышлығын ҡабатламаҫҡа булды. Тәүҙә барлыҡ көстө бергә тупларға, бергә йыйылып алырға уйланы ул. Йыйылыр урын Өрәңге тауы артын билдәләне. Бында әйлеләргә, дыуандарға, табындарға һәм башҡаларға бер йоҙроҡҡа төйнәлеү уңайлы тип тапты ул. Шундай фарман алды бөтә ырыу башлыҡтары. Ҡаҙаҡтарҙың Ҡыпсаҡ, Арғын, Телеү, Табын, Ҡара Көсәк ырыуҙары йыйылмаһы ла, Ишем солтандың үҙенә әйәреп, Өрәңге тауының һыртына килде. Нуғайҙар, ҡаҙаҡтар, ә төп көс башҡорт яугирҙары ине был ғәскәрҙә. Ҡалмаҡтар күҙ буяр өсөн килеүҙәре тураһында хәбәр бирһәләр ҙә, ышанманы уларға Ишем солтан. Килмәнеләр. Ҡара дары тултырылған көршәктәр, ауыр ҡоралдар, киптерелгән ит, ҡорот, һауыт-һаба, дарыу үләндәре, әйәр, ҡайыштар, мылтыҡтар, ҡалҡандар, тағы ла әллә нәмәләр тейәлгән арбалар, егерме меңгә яҡын һыбайлы һуғышсы унар саҡрымға һуҙылды. Иң ауыры йылғаларҙы үтеү булды. Һыбайлылар уны бата-сума булһа ла үтте. Йөклө һалдарҙы һыу арҡырыһына тиҙ тарттылар. Арбаларҙы оҙон арҡандар менән һыу төбөнән һөйрәп сығарҙылар. Ун биш көн тигәндә, тауҙарҙы артта ҡалдырып, урманлы тигеҙлеккә төштеләр. Икенсе көнө таң менән алда барған боҫконсолар хәбәр килтерҙе. Ҡариҙелгә еттек. Ишем солтан ғәскәрен урмандан сығармаҫҡа, алға юртауылдар ебәрергә ҡарар итте. Төрлө яҡҡа кешеләрен ебәреп, хәбәр йыйҙы ул. Өпә, боронғо Имән ҡала, уға таныш ине. Бейек тау башында ултырыуы ла, көнсығыштан бейек яр, көнбайыштан һәм төньяҡтан тәрән үҙәкле батҡыл йылға, көньяҡтан Ағиҙел аҡҡанын ул яҡшы белә. Өҫтәүенә, йыуан имән бүрәнәле ҡәлғәнең бейек ҡоймаһы бар. Ҡойма артында ышыҡланып, мылтыҡ менән ҡоралланған һары һаҡалдар тора. Сабып барып һөжүм итеп булмай, уҡтан, мылтыҡ утынан ҡоймалар һаҡлай. Тиҙ генә ҡоймаларын яндырып ебәреү ҙә үҙе бер афәт, мылтыҡ, пушка йәҙрәһе көтөп тора. Килеп еткәнсе нисектер Ишем хан был турала уйламай ине.

Һәр ырыу башы менән кәңәшләште ул. Төрлөһө төрлөсә фекер әйтте. Әммә уның күңелендә иң ышаныслы һуғышсылары – Урал табындары, әйлеләр, дыуандар, ҡатайҙар, ҡыҫҡаһы, бөтә башҡорт һуғышсылары ине. Шуға ла ул күңелендә тыуған ҡарарын нығытыр өсөн башҡорт ырыу башлыҡтары менән һөйләшергә булды. Ҡариҙелгә тиклем әле утыҙ-ҡырҡ саҡрым. Ярайһы уҡ оҙаҡ юлдан һуң ғәскәр урман яландарында таралып урынлашҡан. Бер кем дә буш түгел. Кемдәрҙер аттарҙы ҡарай. Уларҙың

алғы яҡҡа, Ҡариҙел уйһыулығына, бигерәк тә Өпә ҡаршыһына барып сығыуҙары, яр башында, имән буралар өҫтөндә торған урыҫ һағауылдарының иғтибарын тартыр ине. Әлегә улар бер нәмә лә белмәй, Имән ҡала эсендә көндәлек тормош. Ҡаланан ситкә сыҡмайҙар. Сыҡһалар ҙа ун биш саҡрымдан ары китмәйҙәр. Ҡоролған нығытмалары араһында тик ҡораллы ғәскәр ҡарауылы аҫтында йөрөйҙәр. Әгәр ҡәлғәләр араһында ҡораллы командалар менән йөрөһәләр, уларҙы көнбайыш йүнәлештә Йылан, Йәлдәк, Ҡаңлы Гәрә, Ҡырғыҙ ырыуҙары аңдып торҙо. Төньяҡҡараҡ Ҡариҙелде буйлаһалар, йә Дим һыуы буйлап көньяҡ-көнбайышҡа йүнәлеш алһалар, меңдәр тыныслыҡ бирмәне. Таланылар, күпме ҡорал, күпме ҡаҙна аҡсалары юҡ булды. Шуға ла тик ҙур ҡораллы көс кенә бәйләнеште тәьмин итте.

Был тарихта 1616 йыл менән билдәле ине. Ишем солтан Өпәгә яҡын ятҡан башҡорт ырыуҙарына ла хәбәр еткерҙе. Ырыу башлыҡтарын үҙенә саҡырҙы. Төрлө яҡҡа күҙ-ҡолаҡ ҡуйҙы. Имән ҡала эсендә нисә һуғышсы, нисә кеше, пушкалар ҡайҙа тора, бөтә һалдаттарында ла утлы ҡорал бармы, диуар нисек һаҡлана, ҡасан ҡапҡа асыла, аттар күпме һәм башҡа һорауҙарға яуап алыр өсөн кешеләр эҙләй башланы. Урыҫтар менән сауҙа иткән кешеләр бармы икән, иҫәп-хисап беләме, урыҫса һөйләшәме? Шундай кешеләрҙе эҙләтте ул. Дүрт-биш көн үтеүгә уға унлаған кешене килтерҙеләр. Башҡорт ғәскәре килеп тулғанын ишеткән тирә-йүн күптәнән шау-гөр килә ине инде. Бөтәһе лә ҡыуаныша. Күптән инде ашлыҡ сәскән йыландар, меңдәр ашлыҡ, ит һәм башҡа аҙыҡ-түлек килтерә. Бөртөклө ашлыҡты аҙ күргән, йәки бөтөнләйгә күрмәгән кешеләр өсөн был яңы ризыҡ оҡшаны. Тиҙҙән тарыны ла, һолоно ла ҡаҙанда үҙҙәре ҡыҙҙырып ашай башланылар. Ишем солтан, Тайшан менән Айшан, Муйнаҡ, Килдеш, Ҡалҡаман һәм башҡа батырҙар һайлап алынған ете кешене сауҙагәр ҡиәфәтенә индереп, ат, арба, ит, бөртөклө ашлыҡ, ҡайыш, күн һәм башҡа әйберҙәр менән тәьмин итеп, төндә ҙур кәмәләрҙең өҫтөнә бүрәнә ағастар теҙеп бәйләп, һал кеүек йөҙгөс эҙерләп, ике төндә барлыҡ арбаларҙы, аттарҙы Ҡариҙел аша сығарҙылар. «Сауҙагәрҙәр» ит, ашлыҡ һатып, өс-дүрт көндә кире әйләнергә тейеш ине. Әммә сауҙагәрҙәр Имән ҡала ҡәлғәһе ҡапҡалары алдына килеп етеү менән үк ҡаршыларына ҡылыс тотҡан иллеләгән һыбайлы килеп сыҡты ла, ҡыуалап, ҡала эсенә алып кереп китте. Һаҡаллы, картуз кейгән урыҫ воеводаһының әмере буйынса, шунда уҡ алты арбалағы арпа, тары, ит һәм башҡа әйберҙәр өләшеп алынды. Аттарын да арбалары менән үҙ-ара бүлештеләр. Етәүһен дә бер-береһенә йә быҫау, йә арҡандар менән бәйләп, воевода өйө алдына алып килделәр. Сауҙагәр булып килгән ете кешенең өсәүһе генә урыҫса аҙ-маҙ һупалай ине. Воевода уларҙан көнсығыш яҡтан ниндәй ғәс-

кәр һәм нисә ат, пушка, ҡораллы кешеләре булыуҙарын һораны. Бөтәһен дә имән ҡоймаға эт кеүек муйындарынан бәйләп ҡуйҙылар, ә ҡулдары артҡа шаҡырайтылған ине. Ҡамсы менән туҡманылар. Түҙҙе туҡмауға мең башҡорто Нәсибулла. Етмешкә тиклем иҫәпләне ул йыуан ҡамсыны. Күҙ алдары ҡараңғыланып йығылды. Башҡаса хәтерләмәне. Өҫтөнә һыу аҡҡандай булғанға иҫенә килде ул. Таң атып яҡтырған. Йылы ямғыр яуа. Иптәштәре бөтәһе лә тиерлек ята, тик Шәрәфетдин генә ҡоймаға арҡаһын терәп ултырған, ауыҙынан ҡан аға, ыңғыраша, ниҙер әйтергә теләй, әммә ауыҙын аса алмай. Уның телен ҡырҡып алғандар. Теле шешеп, ауыҙына һыймай, яңаҡтары, бөтә башы шеш.

Ҡәлғә ҡапҡаһы асыҡ. Унда бер һаҡсы ла юҡ. Ҡәлғә эсендә ватылған ағас сапсаҡтар, алама кейем-һалым, әҙер утындар, таҡта ултырғыстар, саналар һәм башҡа бик күп төрлө әйбер, ҡоролма ҡалдыҡтары тулып ята. Нәсибулла тағы ла күҙен асҡанда, һуңғы ылау ҡаланан сығып китте. Ҡала буп-буш. Бер кемдең дә тауышы юҡ. Ул Шәрәфетдин янына нисек етте, шулай шыуышып килеп, теше менән уның артҡа бәйләнгән ҡулдарын систе. Унан үҙе аяҡтарын ысҡындырҙы. Ыңғырашыу аралаш Нәсибулланы систе. Икәүләп иптәштәрен ҡыл арҡандарҙан бушатырға тотондолар. Әммә берәһе лә тере түгел ине. Бығауҙарын алып, сеймәлткәнсе нәҙек арҡандар менән бәйләп киткәндәр үлеләрҙе. Әле урыҫтар «сауҙагәрҙәр»ҙе язаламаҫ борон уҡ, Нәсибулла эштең нисек булғанын төшөнгән ине. Ишем солтан ғәскәре туплауына балыҡ килтереп, ҡайышҡа алмаштырып алып киткән сыуаштар, үткән аҙнала уҡ Ҡариҙел аша сығып, урманда, көнсығыш яғынан килгән бик ҙур ғәскәрҙең урынлашыуын Өпә воеводаһына хәбәр иткәндәр ине инде. Воевода ышанманы, әре балыҡтар биреп, тикшерер өсөн, өс «күҙ-ҡолағын» ебәрҙе. Күҙ-ҡолаҡтар дәлилде раҫланы. Ҡораллы көсө ете-һигеҙ мең булған ғәскәрҙән Өпә нығытмаһы ҡурҡты. Ҡасыу, бер-берәһен талау, урлашыу, кем нисек, нәмә менән китә ала — шундай бола башланды. Аҕиҙел аша сығыр өсөн тағы ла ҙур һалдар эшләп өлгөрҙөләр. Воевода халыҡты тоторға, тәртип ойоштороргә тырышып, дошманға ҡаршы һуғышырға өндәп ҡараны, әммә уны берәү ҙә тыңламаны. Дөйөм паника бөтәһен дә солғап алған ине. Сыуаштар килеп хәбәр биреү менән үк ул Ҡазанға, унан бире ятҡан нығытмаларға ярҙам һорап аттар саптырған ине. Әле улар барып етәме, юҡмы? Үлгең, һуйылғың килмәһә, тиҙерәк ҡасыу хәйерле.

Төньяҡ ҡапҡанан сығып ҡасыуҙы ҡурҡыныс һананы, сөнки Ҡариҙел аръяғынан уларҙың ҡаланы ташлап китеүен күҙәтеп тороуҙары ихтимал. Юлдары киҫелһә, былай ҙа ҡоттары алынған баҫҡынсыларҙың тарҡау көсө нис ҡаршылыҡ күрһәтер хәлдә түгел ине. Әйбер-ҡараларын бисә-сәсәләрен, бала-сағаларын тейәгән

ҡасаҡтарҙың бар теләге – дошман күреп, һиҙеп ҡалмаһын, тиҙерәк Ағиҙелдең һул ярына сығып ҡалыу, үлемдән ҡотолоу. Бер юлы килеп тығылған халыҡты ҡаршы ярға сығарыу еңел булманы воеводаға. Тәүге ҙур кәмәләр менән үҙе, һәм ғаиләһен сығарҙы. Ротмистрын, ҡылыс менән янап, уң ярҙа күскенселәрҙе сығарыу эшен ойошторорға ҡушты.

Етенгә ҡыл ҡушып ишелгән йыуан арҡандарҙы Иҙел аша тарттылар ҙа, сыңға аша үткәрелгән арҡандар осон сығырға уратып, арғы яҡтағы кәмәләрҙе өйөрөп тарта башланылар. Эш байтаҡҡа ойошҡан төҫ алды. Ялбарып, ҡысҡырып илаған балаларҙың, сәрелдәшкән ҡатын-ҡыҙҙарҙың ауыҙҙарын туҡымалар менән бәйләргә ҡушты воевода стрелецтарына.

Йәйге иртәлә бик йыраҡҡа китә тауыш. Әлдә бер бәхет ярҙам итте уларға — йылға өҫтө, үҙәне томан менән ҡапланған ине.

Нәсибулла, барлыҡ тәненең нулҡылдап һыҙлауына түҙеп, саҡсаҡ аяҡҡа баҫты. Ҡасты йәлләттәр. Тиҙерәк, тиҙерәк Ҡотҡойҙо ағайға хәбәр итергә кәрәк, тип уйланы Нәсибулла. Әйле батыры Ҡотҡойҙоға Ишем солтан боҫконсолар, алғасҡылар һәм күҙҡолаҡтар эшен тулыһынса йөкмәткән ине. Эйелеп, башын ҡулдары менән тотоп, ҡалтырап, һыҙланып ултырған Шәрәфетдингә ул һары һаҡалдарҙың Имән ҡаланан Ағиҙел тәшәлтәһенә сығыуҙары тураһында тиҙерәк Ҡотҡойҙо ағайға еткереүҙе әйтте лә, алдында бөгәрләнеп үлеп ятҡан Ҡоләхмәт аша ашаҡлап, төньяҡкөнсығыш ҡапҡаға йүгерҙе.

Тәндәренең, аяҡтарының һыҙлауына тешен ҡыҫып түҙеп, йүгерҙе лә йүгерҙе ул. Байтаҡ ваҡыт үтте. Ниһайәт, текә ярҙан Ҡариҙелгә борма-борма һуҡмаҡ менән йүгереп төшә башланы. Алда боролма һайын ялтырап-ялтырап ҡала Ҡариҙел. Тик тау бөтмәй ҙә бөтмәй.

Ниһайәт, Иҙел ярына килеп сыҡты. Тик һис әҙәм юҡ. Йән асыуы менән ҡысҡыра башланы Нәсибулла. Йыраҡ та түгел бирге ярҙағы ҡамышлыҡтар араһынан ҙур булмаған кәмәлә мылтыҡ, уҡ, йәйә, һалдау, һөңгө һәм ҡылыстар менән ҡораллы дүрт кеше күренде. Нәсибулланы күргәс, улар тиҙ-тиҙ генә уның янына йөҙөп килде. Башы, бите, тәне, ҡара күк булып бөткән Нәсибулла кәмәләгеләргә тылсым һүҙен әйтте – «Абаға».

Тәнендә башҡаса көс ҡалмағанын һиҙеп, ергә сүгәләне. Уны күтәреп, кәмәгә кереттеләр. Битен, күҙен, ҡолаҡтарын һаҡлыҡ менән генә еүешләнеләр. Аҙ ғына аңына килгәс, ул барыһын да түкмәй-сәсмәй һөйләп бирҙе. Кәмә шәп итеп йылғаға ҡаршы йөҙә ине. Боролма ышығында егерме-егерме биш ҙур һалдың һәр береһендә илле-алтмышлап ҡораллы һуғышсы баҫҡан. Кәмә һалдар янына килеп етер-етмәҫтән бер нисәүһенең ҡабаланып

һыуға һикереп төшөп, ярҙа торған башлыҡ янына йүгереүҙәрен шеш ҡабаҡтары аша саҡ-саҡ күрҙе Нәсибулла.

Йылға өҫтөндә шау-шыу ҡупты. Һул ярға сабып килеп еткән унлаған һыбайлы хәбәр алып, төп көстәргә тиҙерәк еткерергә кире боролоп сапты. Нәсибулланы күтәреп, әмир янына уң ярға сығарып, кейеҙ өҫтөнә һалдылар. Әмиргә лә ул барлыҡ күргәндәрен түкмәй-сәсмәй еткерҙе. Таңда яуып үткән ямғыр ҙа, һуңынан йылға өҫтөн ҡаплап алған томан да ерҙе әллә ни еүешләмәгән. Яртылаш ҡоро килгән был йәйҙә тупраҡ еүешлекте үҙе үк һурып алып һеңдерҙе. Нәсибулланың һүҙенән һуң әмир һалсыларға ҡулын һелтәй-һелтәй, тиҙ-тиҙ әмер бирҙе лә йылға ағышы буйына уң ҡулын һуҙҙы. Ҙур ишкәктәре менән ашығып ишеп, һалдар түбәнгә ағып китте. Башына осло түбәтәй кейгән оло йәштәге бер кеше Нәсибулланың ҡанлы яраларына йәбешеп ҡатҡан кейемдәрен еүешләп, һаҡ ҡына ҡутарып алды. Яраларына билсән, кесерткән япраҡтары төймәһен һалып, өҫтөнән балыҡ майы һөртөп, киндер сепрәктәр менән бәйләне. Башҡаһын хәтерләмәй Нәсибулла.

Ул арала ун биш меңләгән һыбайлы бөтә Ҡариҙел уйһыулығын тултырып сабып килде лә, йылғаға еткәс, иллешәр һыбайлы бер рәткә теҙелеп, туҡтап та тормаҫтан йылғаға шаулап, бер-береһен дәртләндереп ҡысҡырып килеп керҙе. Киң, бик ҙур һыуҙарҙы аша йөҙөп сыҡканда аттарының ауыҙлығын ысҡындырған һуғышсылар был юлы ул эште башҡарманы.

Йылға әллә ни киң күренмәһә лә, һыуы һалҡын, ағымы ла ярайһы уҡ булып сыҡты. Рәт-рәт булып төшкән һыбайлыларҙы һулға, ҡамыштар янына уҡ һуҡты ағым. Ҡайһы бер аттар, ауыҙҙарына һыу йотоп сәсәп, бата башланы. Һыбайлылар, аттары өҫтөнән төшөп, йәнәшәләп йөҙөп, ҡамыштарҙың түбәнге яғында ғына ергә баҫа алды. Шуға күрә лә кисеү ойоштороуҙы үҙ ҡулдарына алған Килдеш менән Тайшан артабан һыуға төшөүҙе туҡтатты.

Һыу ҡаршыһына саба биреп, тағы ла бер иңкеү ярҙы табып, аша сығырға ҡул һелтәнеләр. Ҡариҙелде меңәрләгән ат аяҡтары болғатты. Ул ҡайнай, өйөрөлә, күбекләнә, аттар ҡаршы ярға ынтыла, ә ағыш уларҙы түбәнгә тарта. Сама саманан артмай. Бөтә һыбайлылар ҙа тәүге иҫәпләнгән тәшәлтәгә килеп сыҡты. Ишем солтан үҙе һул ярға ат өҫтөндә килһә лә, йылғаны кәмәгә ултырып сыҡты.

Уң ярҙа ул барлыҡ меңлектәрҙең башын йыйҙы. Нуғай Алтаға, ҡаҙаҡ солтаны Әүбәкиргә Имән ҡаланы уңдан урап, Ағиҙел ярына сығырға, әгәр сығып бөтмәгән көс булһа, туп-тура нуғышҡа инергә, Аблай менән Тәүкилдегә ҡәлғәне һул яҡтан урарға бойорҙо. Аркалаш менән Ҡалҡаманға ҡәлғәнән сыҡҡан Ҡазан

юлын баҫып, Иҙелгә төшөргә, Айшан менән Килдешкә ҡәлғәгә тура Себер ҡапҡаһы аша үтеп, Иҙелгә төшөргә, дошманды йылға аша сыҡҡансы уҡ сапҡыларға, ҡәлғәне яндырыуҙан һаҡларға, әгәр йылға аша сығып өлгөрһәләр, туҡтамай һыуға керергә бойорҙо барыһына ла. Ҡара туры айғырына менеп, Ишем солтан алға киткән ғәскәрҙең артынан ҡалған меңлектәр менән арттан төштө.

Ашыҡты солтан. Донъя хәлен белеп булмай, алға киткәндәр ниндәй шарттарҙа һуғышаларҙыр, әлегә билдәһеҙ. Һуғыш яланынан Ишем солтанға хәбәр килтереүсе сапҡындар ҙа килмәй, тимәк, хәлдәр насар түгел, тип уйланы солтан. Ҡалған ете меңлек ғәскәре менән Ишем солтан төп көс булып һуғыш ҡыҙып, еңеү бер яҡҡа ауыша башлағас ҡына дошман өҫтөнә ташланырға уйланы ул. Бәлки, урыҫтар батырланып, беҙҙең алдан һөжүм иткән көстәрҙе баҫтырырға тотонор. Ул осраҡты ла уйланылар. Әгәр улар беҙҙең бер төркөм менән генә һуғышһа, беҙҙекеләргә, ҡасҡан булып, ҡәлғә эсенә үтергә кәрәк.

Ул ваҡытҡа тиклем Арҡалаш менән Ҡалҡаман ҡәлғәнең Ҡазан юлы ҡапҡаһын тотасаҡ. Айшан менән Килдеш Себер ҡапҡаһын ябасаҡ. Һары һаҡалдар ҡыуа килеп ҡәлғә эсенә керһәләр, кәмәләрҙә, һалдарҙа йөҙгән Муйнаҡ батыр һуғышсылары арттарынан ҡыуа килеп, Иҙел ҡапҡаһын бикләйәсәк... Һәйбәт тоҡ булыр ине, бик һәйбәт. Хәбәрселәр һаман да юҡ. Шуға ла Ишем солтан ғәскәре менән туп-тура ҡәлғәгә сапты. Ә Иҙел буйында ваҡиғалар икенсе төрлө бара ине. Ҡәлғә ҡоймаларынан алып һөйрәп килтерелгән ауыр суйын пушкаларҙы һалдарға тейәй алмай интекте ротмистр.

Дары, йәҙрәләрен алып сыҡтылар. Әммә ун бишләгән пушканы һалға тейәү бик ауырға төштө. Беренсенән, һалдар ярға уҡ килеп етә алмай. Икенсенән, уларҙы тәгәрәтеп мендерә торған ағастарҙан һалдар эшләп бөткәндәр ине. Ағиҙелдең уң ярында меңләгән мылтыҡ менән ҡоралланған стрелец, биш йөҙләгән хеҙмәтсе һаман да ат, арбалар, әйбер-ҡара, ҡалған кешеләрҙе шау-гөр килеп тейәй. Өпә ҡалаһында воеводаға хеҙмәтселәр төрлө ҡатлам, төрлө милләт кешеләре булды. Нигеҙҙә тирә-йүндән эш өсөн ҡыуып килтерелгән муҡшы, ар, татар кешеләре һәм йыраҡ ерҙәрҙән Оло Иҙел ашаһынан килтерелгән урыҫ крәҫтиәндәре ине. Уларҙың береһенә лә воевода ҡорал бирмәне, ҡоралландырыуҙан ҡурҡты хеҙмәтселәрен.

Романовтарҙың тәүге батшаһы Михаил Федор улы яугирҙарының мылтығы көбәгенең осонан яһала ине. Һәр стрелецтың ҡулбашы аша аҫылған тире муҡсайҙа дары, сүбәк һәм йәҙрәләр ятты. Айырым ҡойғос менән иң алда көбәк осонан ҡара дары, шуның өҫтөнән шомпол тип аталған нәҙек оҙон төҙ таяҡ менән сүбәк төйәләр, өҫтөнә йәҙрә һалып, тағы ла аҙ ғына сүбәк менән

төйгәс, дары ятҡан тишек аша саҡма менән ут төртәләр ҙә, тиҙ генә мылтыҡты дошманға төҙәйҙәр. Ҙур тауыш яңғыратып, ҡаракүк төтөн, кәбәк осонан көлтәләй ут бөркөп, мылтыҡ атылып китә. Стрелец уны тағы ла яһарға тотона. Әммә бындай мылтыҡ тик ҡәлғә стеналары артында тороп, бер бойороҡ буйынса берҙәм атҡанда ғына уңыш бирҙе. Яланда, йүгергәндә, ҡабаланда ул мылтыҡ оронсоҡ ҡына.

Ҡапыл яҡында ғына, ҡуйы томан эсенән ике тиҫтәнән ашыу ҙур һал, кәмә өҫтөнән ҡораллы кешеләр ҡабалана-ҡабалана ярға һикерешеп төшөп, «ура, ура», тип ҡысҡырып йүгерә килеп ҡындарынан кәкрерәк ҡылыстарын һурып алып, ярҙа эш менән мәшғүл булған стрелецтарға ташланды. Иҫенә килгән ротмистр стрелецтарға кисекмәҫтән залп бирергә бойорһа ла, улар һуңланы. Пушкаларҙы, әйбер-ҡараны ташлап, һыуҙан йүгереп сығып, ҡомлоҡта бер-береһенә һөйәп өйөп ҡуйылған оҙон мылтыҡтарға етеп, ҡораллана алманылар. Баҫып килеүселәр араға килеп керҙе. Китте сабыш, китте сәнсеш, аҡырыуҙар, ике-өс телдә һүгенеүҙәр. Биш йөҙләгән ҡоралһыҙ хеҙмәтсе был мәхшәрҙе ташлап, Ағиҙелдең текә тауына төньяҡҡа ынтылды. Бәхетһеҙлектәренә ҡаршы, шау-шыу, һуңлап булһа ла атылған бер нисә мылтыҡ тауышын ишетеп, аттарын ярһытып сабып килгән Алта нуғай һәм Әбүбәкер ҡазаҡтың меңлектәренә дәл булдылар. Бик аҙҙары, бик аҙҙары ғына тере ҡалды. Улары ла үлгән кеше булып, алданыраҡ йығылып ятҡандар иҫәбендә ине. Әйтерһең дә, уйнсыҡ түмәрҙәр. Ике меңләгән һыбайлы 450–500 самаһы кешене бер тотам ваҡыт эсендә сабып ташланы. Шул йүнәлештәренән туҡтамайынса йылға ярына ашыҡтылар. Артҡы яҡтан килеп сыҡҡан һыбайлыларҙан ҡасып, үргә, ҡәлғәгә ынтылып ҡарағандарының ҡаршыһына Айшан менән Килдеш меңлектәре осрап, тағы ла ике тотам, ике мәл үтеүгә бөтәһе лә түмәр кеүек Иҙел тәшәлтәһендә, соҡорҙар, үрҙәр буйында ята ине инде. Муйнаҡ батырҙың ағып киткән барлыҡ һал-кәмәләре Имән ҡала воеводаһы стрелецтары йылға аша тартҡан арҡыры арҡандарға барып бәрелеп туҡтаны. Яр ситендә 12 пушка, ике меңгә яҡын мылтыҡ, дары, йәҙрәләр, уңайлы итеп эшләнгән саҡмалар, тетмә йөн-мамыҡ һәм башҡа бик күп әйбер ҡалды.

Йылғаның һул ярына сыҡҡан воевода кешеләре, уң ярҙа һуғыш башланғас, ярҙамға сығырға береһе лә риза булманы. Кем нәмәгә әләгә – шулай ҡасты. Һуғыш оҙаҡ ҡына барҙы. Ишем солтан үҙ меңлектәре менән Иҙел ярына килеп еткәндә, ҡаршы ярҙа бер кем юҡ ине.

Яра алған ротмистр һәм бер нисә тиҫтә стрелец әсир төштө. Нәсибулланың һәм башҡа биш егеттең нисек туҡмалыуҙарын, Шәрифулланың теле ҡырҡылып алыныуын күҙ алдына килтерҙе

әйле батыры Ҡотҡойҙо. Ата-бабаларының ерен тиктомалға талап алыуҙарын, меңәрләгән-меңәрләгән кешеләрҙе баҫып, ултереп, көл итеп, ҡатын-ҡыҙҙы мәсхәрәләп, балаларҙы, ғәриптәрҙе лә йәлләмәй йөҙәрләгән ултыраҡтарҙы яндырып килгән был күскенсе баҫҡынсыларҙы Ҡотҡойҙоноң күңеле ғәфү итмәне. Әйтерһең дә, ул күргән барлыҡ вәхшәтлекте шул ротмистр эшләгән. Ярһыны Ҡотҡойҙо, тештәрен ҡыҫты, ҡаны тамырына һыймай һулҡылдай башланы. Ул яй ғына ҡынынан ҡылысын сығарҙы. Ҡаршыһында Ишем солтан торһа ла, туҡтаманы, һелтәне. Өҙөлгән баш кәүҙәһенән ысҡынмайса һәленеп ҡалды. Быны эшләгәс кенә ул солтанына баҡты. Шулай бер-береһенең күҙенә ҡарап, бер аҙ торҙо улар. Ишем хаким уға беленер-беленмәҫ кенә баш ҡаҡты. Тимәк, солтан Ҡотҡойҙоно аңланы. Солтанға әсирҙәр кәрәкмәй ине. Йәмғеһенең дә яҙмышы шулай булды. Төш ауышһа ла, солтан барлыҡ ғәскәрҙе шул урынға йыйырға бойорҙо. Яралы, шәһит булған яугирҙарҙы йыйып, тәүге тупланған, арбалар ҡалған ергә илтергә бойорҙо.

Дошман кәүҙәләрен ҡәлғәнең түбәнендә ятҡан соҡор-саҡырға тултырҙылар. Шәһиттәргә аят уҡыныла. Ут яғып, оҙон шештәргә шешлектәр кейҙереп өтөп ашағас, Имән ҡала воеводаһының башҡа кешеләрен тамам ҡыйратырға, Ҡазанға еткермәҫкә ҡарар итте солтан. Имән ҡаланы һәм уның тирә-яғын белһә лә, унан алыҫҡа, көнбайышҡа киткән һайын ул ер хәритәһен иҫләмәй ине. Шуға ла оҙаҡ уйланды ул. Мең баштары ла Оло Иҙел буйҙарын белеп бөтмәй. Һамар, Кинел боронғо беҙҙең йылғалар ҙа ул... Ата-олатайҙар яҡшы белә торған ине ул ерҙәрҙе. Мең баштары менән тағы кәңәш ҡорҙо солтан. Хәҙер воевода ҡарамағында дүрт меңдән артыҡ ғәскәр юҡ. Өҫтәүенә, арбалары, әйберҙәре. Ун ике пушка беҙҙең ҡулда. Дары ғына юҡ тигәндәй. Йәҙрәләрен ҡойорбоҙ. Дарыһын да эшләй беләбеҙ. Ишем солтан өсөн иң ҡиммәтле һе дары ине. Икенсе бурыс — мөмкин тиклем һары һаҡалдарҙың көсөн кәметеү. Уларҙа бит кеше күп, беҙҙәге кеүек халыҡ һирәк ултырмаған, өҫтәүенә, байтағы ҡалала йәшәй. Һәр төрлө һөнәрселек менән мәшғүлдәр. Йәшәү алымы, йәшәү сифаты күп итеп ғәскәр тупларға мөмкинлек бирәлер. Тағы ла бер өҫтөнлөк файҙа биреүен уйланы солтан воеводаны ҡыуа төшөүҙең. Һис шикһеҙ, воеводаның күҙенә беҙҙең бик ҙур ғәскәр барлығын күрһәтеү. Мәскәү батшаһы Ибер менән Иҙел буйҙарына болашыу уйынан ваз кисер. Ул саҡта Урта Уралдан Ибергә үткәндәре һыпырып ташлаған кеүек юҡ булыр.

Киләсәккә ҡорған уйҙары күп, тәрән һәм мәғәнәле ине солтандың. Воеводаны ҡыуып етеп, стрелецтарын сапҡыслап ташлауҙың, үҙен әсир итеүҙең тағы ла бер яғы бар ине солтан өсөн. 1608 йылда ағаһы Ғәли хан Өпә тауға, Өпә ҡалаһын кире ҡайтарыу

өсөн яу ойошторғайны. Быйылғы кеүек үк булмаһа ла, ҙур ғәскәр төҙөнө. Әммә Өпәгә тырым-тырағай килеү һөҙөмтәһендә һәм хандың ҙур булмаған шәхси алайы, Ҡазандан Өпә аша Урта Уралға, унан Ибер киңлектәренә, Төмәнгә, боронғо беҙҙең Сыңға Тураға китеп барған өс-дүрт меңлек урыҫ воеводаһы ғәскәренә осрап, һуғышта ауыр яралы килеш әсир төшкән ине Ғәли хан. Уны әллә Өпә зинданында, әллә Ҡазанда тотто һары һаҡалдар. Фани донъяла ул әллә бар, әллә юҡ, билгеһеҙ беҙгә. Әммә воеводаны, ғаиләһен, тағы ла баш булып йөрөгән бер нисәһен ҡулға төшөргәндә, бәлки, алмаш тәҡдим итер ине.

Хәритәне белмәһәк ни, юлдар бар бит. Меңдәргә юлдарынан төшөргә, иң кәмендә ун, ун биш саҡрым алға алғасҡылар ебәрергә. Төнгөлөккә ялға туҡтайҙарҙыр бит. Шунан файҙаланып, бер нисә меңлегә ситләп алға сығырға, ҡабырғалап урынлашырға... Юлда ғәскәре оҙон булып һуҙылғас, төп һөжүмде арттан, улар көткән ерҙән бер меңлек менән генә һөжүм итергә. Йәйәүле стрелецтары арбаларына ышыҡланып, ҡушлап бер атыуҙарынан һуң төп көстәр менән ян-яҡтан һөжүмгә күсергә. Уларҙа хәҙер пушка юҡ. Мылтыҡтарын ҡасан яһап алғансы бөтә ылауҙарын баҫасаҡбыҙ. Валлаһи, бөтәһе лә тырым-тырағай ҡасасаҡ.

Тик воеводаны, уның ғаиләһен, бөтә ҡәлғә аҡсаһын, беҙҙән төрлө юл менән күскән алтын, дары, йәҙрәләрҙе, бөтә ҡоралдарын, ат-арбаларын ҡулға төшөрәһе ине, тип хыялланды солтан. Шул уйын еткерҙе мең баштарына. Төрлө өҫтәүҙәр, сифаттар керетеп дөйөм уйҙы бергәләп нығыттылар. Һәр мең башы үҙ һуғышсыларына бурыстарын еткерҙе.

Ашап-эсеп алғас, аттарының ауыҙлыҡтарын һалдырып, көндөң ауыша барыуына ла ҡарамай, ашыҡмай, шау-шыуһыҙ бик ниәтләнеп меңәрләгән һыбайлы сират-сират булып Иҙелгә төшөп китте.

Һоҡланып ҡарап торҙо Ишем солтан нөгәрҙәренең Иҙел аша йөҙгәнен. Шатлығынан йөрәге тамағына килеп тығылғандай тойолдо. Иншалла, ниһайәт, Имән ҡаланы үҙебеҙгә кире ҡайтарҙыҡ. Туҡта-туҡта, тип үҙен тынысландырҙы солтан. Башта әле ҡуйған бурысты тормошҡа ашырайыҡ. Унан һуң Өпә тауындағы Имән ҡаланың һәм тирә-йүндәге генә түгел, бөтә башҡорт халҡына фарман ауазын ташлаясаҡ ул.

Атын Иҙел аша сығарғас, уға кәмә бирҙеләр. Йылға аръяғына сыҡҡас, ул тағы ла мең баштарын йыйып, кәңәш ҡорҙо. Кемдең кем артынан барыуын билдәләне. Алғасҡылар нисек хәбәрләшәләр һәм башҡа һорауҙарын ентекле тикшерҙе ул. Был юлда Ишем солтан иң баш меңлек эсендә барырға ҡарар ҡылды. Ваҡиғалар шуны талап итте. Сөнки дөйөм бойороҡ, хәбәр иң алда уға килергә тейеш. Алғасҡыларҙы ебәргәс, төп көстәр ҙә ҡуҙғалды.

Ҡояш байығанға тиклем һис бер тауыш-тынһыҙ бик шәп барҙылар. Аттар ҡара тиргә батты. Әммә воевода ғәскәренең ҡойроғона баҫыр ваҡыты етмәне. Аттарҙы ял иттереп, усаҡтар яҡмай ғына шау-шыуһыҙ төн үткәрҙеләр — кем ағас төбөндә, кем таш янында.

Таң атыу менән тиҙ-тиҙ йыйынып, тағы ла ҡуҙғалдылар. Аттарын бер туҡтауһыҙ юрттырып барып, кисләүгә тәүге алғаҫҡыларҙан хәбәр килде. Сәрмәсән йылғаһына етеп баралар. Улар йылғаға еткәнсе ҡараңғы етәсәк. Тимәк, тип уйланы солтан, воевода ҡараңғыла халҡын йылға аша сығармаҫ. Төн ҡуныуҙары бире ярҙа булыр. Ҡараңғыла һөжүм итеү атлы ғәскәр өсөн уңайлы эш түгел. Иртә менән һөжүм итергә ҡарар итте ул. Был осорҙа улар йыйыныр, ат-арбаларын теүәлләр, уңайлы кисеү ҡарарҙар. Шул ваҡытта дөйөм көс менән берҙәй булып баҫырға бойорҙо ул мең баштарына.

Таң атты. Воевода лагеры йоҡлай ине әле. Шул саҡта ташландылар өҫтәренә. Һирәк, бик һирәк кенә мылтыҡтар атылып өлгөрҙө. Яһаулы булһалар ҙа, күптәре ут бөркә алманы. Ҡояш ярайһы уҡ күтәрелде, ә яланда унда ла, бында ла, әммә бик һирәк ерҙә баҫтырышыу, ҡылыс менән бермә-бер алышыу бара ине.

Күп аттар, арбалар Сәрмәсәндең батҡыл еренә сумды. Һирәктәре генә аша сыға алды. Төш етмәҫтән алда ялан тынып ҡалды. Бөтә аттарҙы, арбаларҙы кире борҙолар. Воеводаны эҙләй башланылар. Уны бигерәк тә Тайшандың күргеһе, бергә-бер ҡылыс менән алышаһы килде уның. Сәрмәсән соҡорҙарына һәр үлектә ҡарап ташлаһалар ҙа, таба ла, таный ҙа алманылар воеводаны. Тайшан уны хәрби кейемдә, түшенә ялтыраҡтар таҡҡан, итекле, ҡыҫҡа һаҡаллы кеше итеп күҙ алдына килтерә ине. Булманы, күрәһең, ул ябай хеҙмәтсе кейемен кейеп алғандыр. Бер арбалағы тимер менән ҡоршаулы һандыҡта туп-тулы аҡса табылды. Солтандың теләге тормошҡа ашты. Барыһы ла – көмөш, йә алтын тәңкәләр. Киҫәк-киҫәк һәм ваҡ ҡом алтын икенсе бер ҡумтала булып сыҡты. Балсыҡ көршәктәрҙәге дарыларҙың иҫәбе-хисабы юҡ тигәндәй. Әллә 30, әллә 35 ылауға тейәнеләр. Кейем-һалым алдылар, мылтыҡтар, пушкаларға йәҙрәләр тейәнеләр. Воевода йә үлтерелгән, йә ылауҙы ташлап ғаиләһе менән алға ҡасып киткән тигән һығымта сығарҙылар.

Тиҙ генә бер ерҙән дә ҡурҡыныс янамағанын солтан төшөнә ине. Һәм ул ысынында ла шулай. Яҡын-тирәлә көслө ғәскәр торҙай ҡала-ҡәлғә юҡ. Ҡазан йыраҡ. Яҡын булһа ла, үҙ ҡарауылын ебәреп, буш ҡала алмай бит воеводаһы.

Мәскәүгә ҡасан хәбәр бара? Унда, әле был тиклем йыраҡ ерҙә шундай көслө ғәскәр хасил булғас, тиҙ генә ҡуҙғала алмаҫтар. Ғөмүмән, ниңә кәрәк Мәскәүгә был тиклем сит бауыр ере? Ғүмер

буйы шулай һуғышып йәшәрме? Башына һыйҙыра алманы Ишем солтан Мәскәү сәйәсәтен. Фәскәренә ул яйлап ҡайтырға бойорҙо. Юл буйынса, исмаһам, уйланып ҡайтыр. Унан юлдаштары менән кәңәш ҡорор. Әле өс-дүрт, кәм тигәндә ике йыл солохло йәшәрбеҙ. Шул осорҙа бик күп эш эшләп өлгөрөргә кәрәк, тип уйланы солтан. Хәҙер беҙҙең мәсьәлә, бер яҡтан, уңышлы сиселһә, икенсе яҡтан, киҫкенләште, тип фаразланы.

Ҡалмаҡтарҙың бергә яуға килмәүе борсой ине уны. Әле беҙҙең менән булмаһалар ҙа, көньяҡта бит халҡыбыҙҙың ҙур, көслө өсырыуы ята. 200 мең тирмәле ҡалмаҡтар кәм тигәндә 30–35 меңлек ғәскәр йыя ала. Шул көс менән берҙәм булып башҡорт иленең көнсығышына ҡылыс күтәрһәләр, ҙур һәләкәт килтерәсәктәр. Ә беҙҙең көс туплағаны әлегә 15 меңлек. Сағыштырһаң, күп тә түгел. Әммә Имәнтауҙа нығынып, барлыҡ Урал буйы, Ибер менән идаралыҡты берләштергәндә ҡалмаҡ түгел, бөтә Русия ла ҡурҡыныс түгел. Тын, Ҡобан, Ҡаф тауы халҡы, Ҡырым берләшеп була бит. Эйе, эйе, була, тик берҙәмлек кәрәк, яңылыш аҙым эшләү яҙыҡ. Имән ҡаланы кире ҡайтарҙыҡ, ә ил көнсығыштан һәләкәт күреүе бар. Нуғайҙар ҙа, ҡаҙаҡ урҙаһының бер өлөшө лә бында, тип уйланып килә ине солтан.

Имән ҡалаға кергәс, уны тәртипкә керетергә, таҙартырға, бигерәк тә шишмәләренең һыуын... Кафыр эскән һыуҙы, абыҙ алдырып, өшкөртөп ғөсөлләндерергә кәрәк. Сиркәүҙәрен емереп, яңынан мәсеттәр һалдырырға. Ҡалала кейем тегеү, ат менер, егер өсөн барлыҡ эпсен-төпсөн эшләү, тимер иретеү, ҡорал һуғыу эштәре тора. Был эштәрҙе башҡарыу, ҡала һәм яҡын тирә-йүн менән төплө идара итеү өсөн айырым башлыҡ ҡуйыу мотлаҡ. Халыҡ алыш-бireш итер өсөн ҡала ситендә ҙур баҙар асыу ҙа хәйерле.

Йәшәү һәм идаралыҡ өсөн һарай һалыу... Был эштәрҙе юлға һалыуҙы көтөп тормайынса, барлыҡ башҡорт иленә сапҡын ебәреп, ҙур ҡорға йыйырға. Һарай кешеләрен, урындағы идаралыҡ шәрифтәрен билдәләргә. Илгә лә, халыҡҡа ла файҙа булһын өсөн, һәр урында шөғөллө үҙәктәр булдырырға. Бигерәк тә мәғдәнле урындарҙы билдәләп, улар янына ҙур тимер мейестәр һалдырырға. Ҡорамалдарҙы тимерҙән зауыҡлы итеп эшләтеү үҙе бер оло өлгө тирә-йүн өсөн. Беҙгә башҡа халыҡ та килер, берләшербеҙ, һөйләшербеҙ. Шулай ҙа тәүге мәсьәлә – ҡорал һуғыу, яугирҙарҙы тимер ҡорал менән ҡоралландырыу. Ханлыҡ янында даими алайҙар тотоу ҙа маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

Йыраҡтан тороп һәр ырыу менән етәкселләп булмаҫ. Олоҫтарҙа үҙидара ҡороу эште еңеләйтер. Башлыҡтары һәр саҡ килеп торор, хәжәттәрен әйтер. Атай-олатайҙарҙағы кеүек, Имән ҡала баш ер булыр. Һәр тарафҡа сик ҡуйып, даруғаларын билдәләүҙә етәкселек өсөн уңайға тура килер. Даруғаларға ла баш ҡуйыу

боронғо ғәҙәт. Һәр береһенә шәһәҙәт (свидетельство) биреү кәрәк. Уныһын көмөштән иретеп ҡойоп эшләрбеҙ. Көньяҡ даруғала ҡарттайҙар торағы Торатау бар. Ҡарттайым Мортаҙа хан, Имән ҡалала мәкәб ҡылһа ла, Торатау торағына ла боронғо атабабабыҙ Тура хандың Дим ҡуштаны Ыҫлаҡ буйындағы ултырағын да етем итмәгән. Ыҫлаҡ йылғаһының исеме бик боронғо, ултырағы ла иҫ етерлек ваҡыттан да алда йәшәгән ере ҡарттайҙарының. Сит халыҡтан, сит илдән килеүселәрҙе ырыу уртаһына кереткәнгә тиклем сисендереп, кейемдәрен дә, үҙен дә төтөндә, ялҡын-эҫелә тотҡандар, ғөсөлләндереп йыуындырғандар. Ыҫлаҡ ере кәҫтән, бура ағастан, таштан эшләнгән. Хан етәкселегендә, уның күҙәтеүе аҫтында үткән был алым.

Йәрхәмбикалла, шулай эшләрбеҙ, Аллаһы Тәғәлә насип итһә. Уҡый-яҙа белгән кешеләр ҙә күп кәрәк буласаҡ. Бохара, Сәмәрҡәнд яҡтары менән бәйләнеште көсәйтеп, мәхәлләләр янында мәҙрәсә-мәктәптәр асыу кәрәк. Быныһы ла киләсәк өсөн бик мәслихәт булыр. Төп маҡсат – бөтә башҡорт ерен, мосолман халҡын туплау, ҙур урҙа ҡороу...

Ҡайтыу юлда ҙур-ҙур яландарҙа туҡтап ял иткәндә, яралыларҙың яраларын дауалағанда, улъя итеп алған һимеҙ аттарҙың итенән шешлек бешереп ашағанда ла уйланды солтан. Йәшерәктәр ҡурай моңона бейене, ҡылыс алышы уйнап, тамаша күрһәтте, оҙон-оҙон көйҙәр һуҙҙы. Солтандың уйҙар тулҡынында йөҙөүен күргән мең башлыҡтары уның янына йыйылды. Ҡайһылыр шаянзирәктәре урыҫтарҙан алынған аҡ һыуҙы ҡымыҙға бер ни тиклем ҡушҡан, буғай. Быны һиҙмәгән солтан барлыҡ уйҙары менән уртаҡлашты, ҡалмаҡтар тураһында икеләнеүен белдергәс, барыһы ла өндәшмәҫ булды.

Шундай фекерҙәр, уйҙар эсендә йөҙөп килеп, Ағиҙел ярына килеп туҡтағандарын да һиҙмәй ҡалды солтан. Ашыҡмай, ҡабаланмай ғына, имен-аманлыҡта барыһы ла кис алдынан уң ярға сығып бөттөләр.

Алдан ҡуйылған бурыс буйынса, Аблай менән Тәүкил үҙ кешеләрен алып, Имән ҡаланы ҡарарға, ипкә килтерергә китте. Фәскәр яр буйына төн үткәреү өсөн урынлашып, аш әҙерләү, башҡа хужалыҡ эштәре менән мәшғүл булғансы, Ишем солтан үҙе лә ҡәлғәне ҡарарға ҡарар ҡылды. Ҡәлғә емерелмәгән дә, яндырылмаған да. Күрәһең, һары һаҡалдар уны ваҡытлыса ғына ҡалдырып торорға уйлаған. Ҡараңғы төшкәнсе йөрөнө ул ҡәлғә эсендә.

* * *

Олатаһы Мортаҙа хан Өпә, Торатау нығытмаһын нуғайҙарға ваҡытлыса аманатҡа биреп, үҙе көнсығышҡа, мәғдән сыҡҡан ер-

ҙәргә, Уралтауҙың көнсығышына күсенгән ине. Мортаҙа хандың Өпә ҡәлғәһен ҡалдырып, көнсығышҡа бөтә халҡы менән күсеүенең тағы ла бер сәбәбе бар ине. Әллә ниндәй һис көтөлмәгән көслө мур башланды. Бер йән эйәһен дә ҡыҙғанманы мур. Эттәр, бүреләр, мал-тыуар, кешеләр ҡоторҙо. Ауыҙҙарынан күбектәр килеп, күҙҙәре аҡайған килеш йөрөнөләр. Кешеләр ҙә, мал-тыуар ҙа себен кеүек ҡырылды. Ҡәлғә эсен көнө-төнө ыҫлатты хан. Бер йән эйәһен дә сығарманылар ҙа, керетмәнеләр ҙә ҡәлғәгә. Әллә ҡайҙан сыуаш ҡамдары килеп сыҡты. Үлеләрҙе күммәҫкә, яндырырға өгөтләне улар. Дөрөҫтөр был, тип уйланы Мортаҙа. Ут барыһын да еңә, яндыра. Ауырыу ҙа шул кәүҙәләр менән янып үләсәк, тип фаразланы ул. Күп кеше китте фани донъяға. Әлегә тиклем тик ҙур яуҙарҙа ғына бындай бихисап кеше шәһит була ине. Бында һуғыш та, һуйыш та юҡ. Ниндәй ғиллә нигеҙендә китә кешеләр теге донъяға? Һәр кем үлем көттө. Ҡазан шәһәре яғынан килгән мулла үҙе лә донъянан ваз кисте. Урындағы Әғләметдин ахун, Ҡасим мулла ханға ҡәтғи рәүештә был урындан йыраҡҡа китергә тәҡдим итте:

– Хан, тик шул осраҡта ғына ҡотолорһоң, – тине. Мортаҙа хан үҙ муллаһы Йәлембәтте саҡырып, Ҡасим мулланың һүҙҙәрен әйтеп, кәңәш һораны.

– Әйе, әйе, ханым. Мин әйтһәм, күңелегеҙгә ауыр булыр, тип heҙгә был тәҡдимде Ҡасим мулла арҡыры әйттерҙем. Нигеҙ алыштырыу – ер алыштырыу түгел. Ултырған ултыраҡҡа Аллаһы Тәғәлә ниңәлер гонаһ ебәргән. Күсенергә кәрәк. Бәләкәй ҡыҙың Ағиҙел сирләмәһен, тиеүем...

Йәлембәт мулла Мортаҙа хандың етеп килгән матур ап-аҡ ҡыҙын бик яратыуын белә ине. Был һүҙҙәрҙән һуң нигеҙ алыштырыуҙы тамам ҡарар итте Мортаҙа хан. Ҡәлғәне былай ғына ҡалдырып китеп булмай бит. Халҡына йыйынырға ҡушты. Ә үҙе көньяҡ далаларҙа күсеп донъя күргән нуғайҙарға хәбәр ебәрҙе. Аманатҡа ер бирә, ҡәлғә ҡалдыра. Оҙаҡ көттөрмәне нуғай ханы. Һөйләштеләр, килештеләр. Мур баҫылғансы кермәй торорға тәҡдим итте Мортаҙа. Ҡыш үтһен, яҙ урынлашырһың.

Ханлыҡ осоронда Мортаҙа бер кем менән дә дәғүәләшмәне лә, һуғышманы ла. Шуға күрә уны «Солохло хан» тип йөрөттөләр. Уртаҡ һүҙ, уртаҡ фекер таба белде тирә-йүн менән. Шулай итеп, дәғүәһеҙ, талашһыҙ, ун бишенсе быуаттың аҙаҡтарында көнсығышҡа боронғо Шәйбәк ҡартталары ере яғына күсте Мортаҙа. Мортаҙа хандың Йәлембәт мулла кәңәше буйынса нуғайҙарға бындай хәбәр ебәреүендә лә бер ғиллә бар ине. Мур өс йыл рәттән йотто мал-тыуарҙы, кешеләрҙе. Аҡылы етеп, йылҡы малдарының бер өлөшөн ҡояш сығыуға күсергән ине. Боронғо йола буйынса үлгәнен дә, ауырый башлағанын да утҡа яҡтылар. Унан хәбәр килә,

үлем туҡтаны, тип. Өпә ҡәлғәгә меңдәрҙе, йыландарҙы, йә бөрйән-ҡыпсаҡтарҙы ҡалдырһаҡ та, шул хәл буласаҡ. Улар үҙҙәре лә был «тәхеттән» баш тартасаҡ. Ана бит, ҡыпсаҡ солтаны хәбәр ебәргән. Ул, тәхет кәрәкмәй, ләхет булыуы ихтимал, тигән. Шуға ла үҙенекеләрҙе яҡын да килтертмәне, көсләшмәне лә. Икенсенән, нуғайҙар көньяҡтан, ҡалмаҡтарҙан бер ни тиклем ҡапҡас ине. Кәрәк саҡта Мортаҙа ла уларға ярҙам итеп торҙо. Ҡыҫҡаһы, бер һүҙҙә булдылар әлегә. Әммә нуғайҙар урыҫ кенәзе ғәскәр башлыҡтары менән дә бер һүҙгә килә. Йә Булыға буйлап йөҙгән ҡасаҡтарҙы тоторға, йә диңгеҙ аша фарсы ерҙәренә һөжүм итеү өсөн ярҙамлаша. Ҡурҡыныслыһы шул ине, улар урыҫ тәғлимәтен ала башланы. Күп кенә йорт, алай баштарының исемдәре хәҙер урыҫса.

Сит тәғлимәтте алғас, улар киләсәктә сит бауыр буласаҡ. Төрки тамырҙарын оноторҙар, беҙгә ҡаршы һуғыша башларҙар. Шуға ла уларҙы ваҡытлыса эскә индереп тороу суҡындырыуҙан ҡотҡарыр, ислам мөхитендә һаҡлар... Был да ҙур бер сәбәп ине нуғайҙарға Өпәне ҡалдырыуға.

Ишем солтан ҡәлғәне ҡарап, үҙ һөҙөмтәләрен сығарыуға, уны ашҡа төшөргә саҡырып, сапҡын килде. Аш-һыу алдында хәбәр тағы ла ҡәлғәне баш итеп, тирә-йүнде бында ылыҡтырыу һорауы торҙо. Оҙаҡ һөйләштеләр, кәңәшләштеләр мең башлыҡтары. Ҡарар ҡапыл һәм ҡәтғи генә булды. 1. Яҡын-тирәгә һәм ат еткән ергә сапҡын саҡырыу ебәреп, бөтә ырыу башлыҡтары йыйынын үҙғарырға. 2. Тәхетлекте – ҡәлғә, ҡаланы тәртипкә килтерергә. 3. Ҡәлғә, ҡалаға идаралыҡ өсөн баш ҡуйырға. 4. Алты-ете кешенән солтанға ярҙамсылар, кәңәшселәр, арҡалаштар билдәләргә. 5. Ырыу вәкилдәре килгәнгә тиклем илде ырыуҙарҙың ултырышына ҡарап, дүрт йүнәлешле даруғаға бүлеп беркетергә. 6. Солтан янында даими ғәскәр тоторға. Улар ҡәлғәлә һәм уның янында йәшәргә тейеш. 7. Ерҙәрҙең хәритәһен төшөрөп яҙырға. 8. Мәғдән урындарын билдәләп, мәғдәнселек менән шөғөллө оҫта кешеләр берекмәһен ойоштороргә. Бына шундай мәсьәләләрҙе ҡарап, яҡынса ҡарар ҡабул ителгәс, барлыҡ ғәскәр эшкә тотондо. Йыраҡ та, яҡын да ерҙәргә сапҡындар сапты. Йома ярым ваҡыт үтте. Был көндәрҙә ғәскәр дәррәү эшләне. Ҡәлғә әсе таҙартылды, йорттар тәртипкә килтерелде. Уңайлы бер йорттан ваҡытлыса мәсет эшләнеләр. Дөйөм башҡорт йыйынын ойоштороргә урын эҙләнеләр. Йыландарҙанмы, меңдәрҙәнме, кемдеңдер әйтеүе буйынса, йыйын урыны билдәле булды. Ул Ағиҙел менән Ҡариҙелдең килеп ҡушылған еренән ҡиблаға ҡарай ун саҡрымдай самаһы ҡуптайып ятҡан ҙур киң түбә түпһәле ине. Ҡаратун түпһәле тип йөрөттөләр үҙен. Баҡһаң, элек бында һәр йыл һайын Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Юрматы, Үҫәргән, Мең, Түңгәүер ырыуҙарының да

йыйыны булып торған икән. Ырыуҙар баш һалғас, урыҫтар Өпәнән нуғайҙарҙы ла ҡыуып ебәреп, ете ырыу йыйынын да тыйғандар икән. Хәҙер ул ете ырыу Мәскәүгә буйһоноулы, ти. Табындар, әйлеләр, ҡатайҙар, ҡыуаҡандар һәм башҡа көнсығыш башҡорттары баш һалмағас, ете ырыу йыйылыр урынды ла белмәй ине. Ҡаратун түпһәлен ҡарап сығып, оҡшаттылар был урынды. Ишем солтандың тағы ла бер бик ҙур шиге бар ине. Урыҫ воеводаһын ҡыйратҡанға ике йома ғына ваҡыт үтһә лә, был хәбәр, һис шикһеҙ, Ҡазанға еткәндер. Мәскәү батшаһы әле бының белмәйҙер. Донъя хәлен белеп булмай, һаҡлыҡ сараһын күргә кәрәк.

Беҙ тоҡта ятмай, хәбәр урҙа тормай. Беҙҙең Өпә ҡәлғәһен алыуҙы ҡыр йыландар, гәрәләр, йәнәйҙәр, ҡаңлылар, ҡырғыҙҙар, ғәйнәләр һәм башҡа ырыуҙар ҙа яҡшы беләләр, тип фаразланы ул. Төрлө тарафҡа өс-дүрт биш йөҙлөк ебәреп, урындағы ырыу менән һөйләшеп, Ҡазан юлы яҡты ҡамалап ҡарауылсы-сапҡындар ҡуйыу хәйерле. Был яҡтың ерен белмәйбеҙ, хәритәһен дә төшөрөр инек тире-күнгә. Йылғаларҙың кисеүҙәрен белеү мотлаҡ. Нисек йәшәйҙәр был яҡта, мал-тыуарҙары күпме, бөртөклөләр сәсәләрме, тимер һуғыр урындары бармы? Тағы ла әллә нисә әрәле-ваҡлы һорауҙар бирҙе ул үҙ-үҙенә. Ишетеп үҙҙәре килһә, бик яҡшы. Һөйләшеү ҙә, бурыс ҡуйыу ҙа еңелләшер. Фәскәр ебәрһәм, айышын-тойошон төшөнмәй, баҫҡаҡтар тип ҡабул итеүҙәре бар. Былай ҙа ваҡыт әле бар кеүек. Әҙ генә, әҙ генә сабыр итәйем. Һиҙемләүе, тойғоһо шулай ҡушты уға. Һәм дөрөҫ тә булды. Оло йыйынға фарман алыу менән сапҡындар китеп 5–6 көн үтеүгә ҡаңлылар, ҡыр йыландар, гәрәләр, йәнәйҙәр һәм башҡалар йыйылышып, үҙ күҙҙәребеҙ менән күрәйек, ышанайыҡ, тип ҡәлғәгә килде. Ун бер кеше ине улар. Һаҡсылар күҙ-ҡолаҡ бурысын үтәгән меңлек башы Ҡотҡойҙоно саҡырҙы. Ҡәлғә эсенән баштан-аяҡ ҡоралланған үткер күҙле, киң яурынлы, әммә һағайыбыраҡ һөйләшкән мөләйем был батырҙы күргәс, илселәр ҡыуаныстарынан ни эшләргә белмәне, тубыҡланды, юғарыға бағып доғалар уҡыны. Илаштылар, Ҡотҡойҙоно ҡосаҡлап һөймәк булды иң ололары. Әммә уның артында әнә артынан йөрөгән еп кеүек артынан ҡалмаған ун биш һаҡсы илсенән Ҡотҡойҙоно ҡосаҡлаттырманы, әҙәпле генә тыйҙы. Һиҙҙермәйсә бысаҡ ҡаҙамаһын тип шикләнделәр кеүек. Хәл-әхүәлде, маҡсаттарын белгәс, илселәрҙе ҡапҡа тышында ҡалдырып, үҙе солтанға керҙе. Элек воевода ултырған бүлмәне икегә бүлеп торған бүрәнә ҡойма алынғас, бик иркен, көнсығышҡа алты, Иҙел яғына дүрт, ғәрепкә лә дүрт тәҙрәле бүлмә хасил булды. Иҙәнгә келәмдәр түшәлгән. Бүлмәнең төпкө яғында иҙәндән сирек ярым самаһы бейеклектә сәхнә кеүек киң, өйҙөң ике иңенә лә етеп торған урындыҡ

әшләнгән. Ул да келәмдәр менән түшәлгән. Урындыҡ өҫтөндә келәм менән ҡапланған, ә өҫтөнән айыу тиреһе ябылған үрмә ултырғыс тора. Түбәндә бүлмә иңе буйлап урындыҡ бейеклегендәй генә оҙон, алты-ете кеше һыйышлы ҙур урындар ҡуйылған.

Ҡаршы килеп, бүлмә уртаһында ҡаршыланы илселәрҙе солтан. Үҙ ғүмерҙәрендә беренсе тапҡыр башҡорт ханын күрә ине илселәр. Ҡыуаныштылар, бик ҡыуаныштылар, әммә әлегә хандың маҡсатын да, хакимлыҡ ҡеүәтенең нәмәнән ғибәрәт буласағын да күҙалламанылар.

Килгән милләттәштәребеҙ менән именлек, тормош, көнкүреш һорауы хәл ителергә тейеш, ҡор алдында һөйләшмәй булмаҫ, тип уйлап, солтан вәзиренең ҡолағына шыбырланы. Ултырып доға ҡылып, кем ҡайһы ырыуҙан, ниндәй йылғаның һылауында тормош-көнкүреш итеүе тураһында һөйләшкәнсе, табын әҙер булды. Сәркәтипкә солтан илселәрҙең исем-шәрифен, ер-һыуҙарын ғына түгел, нәмә тураһында һөйләгәндәрен дә яҙырға ҡушҡан ине.

Хан ҡоронда үҙҙәрен бик кеселекле, итәғәтле һәм диндар итеп тотто илселәр. Һөйләшеү шул уҡ юҫыҡта барҙы. «Ҡатыташ» ҡушаматлы илсе ир уҙаманы хандың һәр һүҙенән һығымта сығарырға, уның нәмә теләүен аңларға тырышты. Төплөрәк белер өсөн ханға бер нисә һорау ҙа бирҙе. Ҡатыташ һөйләгәндә башҡалары өндәшмәй тик кенә ултырҙы. Ишем солтан үҙенең Урал алдынан, Ибер уйһылыҡтарынан килеүен, Күсем хандың икенсе улы булыуын әйткәс, илселәр тороп китеп, бер ҡатҡа баҫып, хандары алдында тубыҡланып тағы ла баш эйҙе. Ишем солтанға бынан һуң «ханыбыҙ» тип өндәшер булдылар. Илселәрҙән хан, әле 1608 йылда Өпәгә яу ваҡытында һанлы нөгәрҙәре менән яралы килеш әсирлеккә эләккән атаһы Ғәли хан тураһында ентекләп һораны. Шул йылдарҙы, йәки әсиргә төшөп бер-ике йыл үткәс, Ғәли хандың Өпә ҡәлғәһенә кире килтерелеүен ишеткәндәр ишетеүен, әммә башҡаса һис хәбәр-хәтер юҡ ине. Иберҙә әле күпме көс булыуын ентекләп һорағандар. Унан һуң хан ярҙамы менән Ибер хәритәһен эшләргә уны Ҡазанға алып киткәндәр. Унан Ишем хан төп һорауға күсте.

– Исемегеҙҙе әйтмәнегеҙ, Таш әфәнде, – тип өндәште Ишем илсегә.

– Эйе, эйе, – тип баш ҡына ҡаҡты ул. – Төп атым минең Ташбулат.

Артабан Ишем хан был Ташҡа һәм башҡаларға тәфсирләп, йыраҡтан һәм төптән ҡыҙыҡһындырған мәсьәләһен ярып һалды. Бөтә көнбайыш юлдарына ҡарауыл ҡуйырға һәм сапҡын хеҙмәтен ойоштороуҙы һораны.

– Был дөйөм мәнфәғәт, һеҙҙең был донъяла бар булыуығыҙ шул эшегеҙҙән дә ғибәрәт булыуы бар... Бөгөн мин һорайым, – тип ҡырт киҫте. Сабыр итегеҙ, тыңламаһағыҙ, ҡушырмын, тигән һүҙенең башы ине был.

– Беҙгә күпме ваҡыт бирәһегеҙ? – тип һораны Таш.

– Оло йыйынға Ҡаратун түпһәленә килеп өлгөрөгөҙ. Һеҙгә һүҙ бирермен, – тине хан.

Илселәр тиҙ-тиҙ йыйынып, кире юлға сыҡты. Шималдағы ғәйнәләргә лә бойороҡ менән бер нисә йөҙ башы ебәреү хәйерле. Урыҫтарҙың Иберҙәге нығытмаларынан бында һуғылмай китә торған юлдары юҡ. Ике ырыу башына икешәр йөҙлөк дүрт йөҙ яугир вәкәләтләнеләр.

Аҙна үтеүгә сапҡындар килә башланы. Түңгәүер, Үҫәргән, Бөрйән, Ҡыпсаҡ яҡтарынан күңелһеҙ хәбәр килтерҙе сапҡындар. Ҡалмаҡтарҙың ҙур-ҙур ойроттары көньяҡ-көнсығыш яҡҡа яу артынан яу ойоштора икән. Яу ҙа яу!

Тәҡәттәре ҡороған. Урыҫ дәүләтенән ярҙам һорап Ҡазанға сапҡын ебәргәндәр һәр берәһе. Оло йыйынға тик вәкәләттәр генә ебәреп, ырыу баштары килә алмай икән. Ни булһа ла булыр, әммә оло ҡор, оло майҙан ойоштороуына риза ине Ишем. Тағы аҙна үтеүгә Ҡаратун түпһәленең ҡояш төшкән көнсығыш битенә йыйыла башланы халыҡ. Йола буйынса, йыйын, ҡор үткәрергә ҡарар итте Ишем солтан кешеләре. Тик һуңынан ғына ат өҫтөнән дә, йәйәүле килеш тә ҡылыс һуғышы күргәҙмәһен тамаша ҡылырға уйланы. Тик нөгәрҙәренең ҡулына ысын ҡылыс урынына таяҡ ҡылыс тоторорға уйланы ул. Күрһендәр Ишемдең нисә мең ғәскәре булыуын. Әле был ғәскәр төп көстәрҙең ундан бере генә, тиәсәк ул. Ҡаратун түпһәле кеше менән тулы булһа ла, күбеһе үҙ кешеләре ине Ишемдең. Һәр оло ырыуҙан вәкилдәр килһә лә, ике йөҙ, ике йөҙ илленән артманы, буғай, ҡунаҡтар. Ҙур тирмә алдына ҡуйы үлән өҫтөнә йәйелгән кейеҙ, балаҫ, келәмдәр өҫтөнә түңәрәклән ултырҙы Ишем солтандың ун биш мең башы һәм килгән ҡунаҡтар. Ҡунаҡтар уның кем булыуын белһә лә, Ишем солтан, өйлә намаҙы уҡылып бөтөүгә, үҙенең кем улы, ҡайһы ерҙе һәм ниндәй һыуҙы һыулауын, ере сиге нисә көнлөк юл булыуын, ниндәй халыҡтар йәшәүен һөйләне. Оло Иҙелгә тиклем әлегә урыҫтар биләп алған ерҙәр, ҡарттаһы Шәйбән, уның ейәне Мортаҙа хан, атаһы Күсем хандың ерҙәре, ә Өпә ҡәлғәһе, Торатау уларҙың төп ултырағы булыуын әйтте. Намыҫ ҡушыуы буйынса, беҙ үҙ еребеҙҙе ҡайтарып алырға бурыслы. Ер хәритәһен Оло Иҙелгә тиклем тирегә яҙғас, сик буйлап көс ҡуйырбыҙ. Торатауҙы ла, Өпәне лә ҙур ҡалаға әйләндерербеҙ. Улар һарай ҡалаһы кеүек сауҙа үҙәге буласаҡ...

Ибер яҡта Күсем хандың икенсе ҡатынынан тыуған улдары Мәмәтҡол, Әлей, өсөнсө ҡатынының улдары, бында, ҡорҙа ултырған Аблай, Тәүкил хакимлыҡ итәсәк. Бынан башҡа Ишем солтан юлда уйланып килгән барлыҡ уй-фекерҙәре менән уртаҡлашты. Яҡын-тирәләге ырыу халҡына Өпә ҡәлғәһе яныңа ғаиләләре менән күсеп ултырырға, һәр төрлө һөнәрселек эштәрен йәйелдерергә саҡырҙы. Ҡәлғә янында, хан һарайында даими ғәскәр тотоуҙы, быныңөсөн яһаҡты үткән 59 йыл кеүек һары һаҡалдарға түгел, ә үҙ ханлығына түләүҙәрен киҫәтте. Алта атлыларын да, Урта йөҙ ханы вариҫын да ҡайтармаған ине Ишем. Артабан Ишем төрки халыҡтарға, нуғайҙарға, ҡаҙаҡ-ҡарағалпаҡтарға, иберләргә, болғарҙар янында йәшәгән боронғо тату ырыуы кешеләренә, барлыҡ башҡорт ырыуҙарына үҙ байрағы аҫтына йыйылып йәшәргә тәҡдим итте. Ишем солтан кешеләре уның һүҙен ҡеүәтләп баш ҡағып, ауазлап ҡысҡырып ултырһалар ҙа, килгән ҡунаҡтар өндәшә һалып барманы. Тынлыҡты боҙоп, яй ғына Ҡыпсаҡ батыры Байтүмә аяҡ өҫтө баҫты.

– Ағай-әне, туғандар, ҡандаштар! Күпме йәшәп әле бындай көс-ҡеүәт аҫтында был ерҙә йыйылғаныбыҙ юҡ ине. Ун-ун биш йыл әлек ата-олатайҙар йолаһы буйынса шунда йыйылырға иткәйнек. Хәтерләйһегеҙҙер нимә менән бөткәнен. Өпә ҡалала торған биш йөҙләгән һыбайлы йыйынға килә башлаған йөҙләп кешебеҙҙе сапҡыслап таратты. Унан һуң беребеҙ ҙә баҙнат итмәне бында килергә. Тик үҙ ҡуйыныбыҙҙа ғына йыйынабыҙ ҙа ул, әммә әле хан һөйләгән бурыстарҙы тормошҡа ашырыу беҙгә күктәге йондоҙҙарға үрелеү менән бер. Минең иң алда шундай тәҡдим бар, ағай-әне. Һөйләшкән хәбәрҙәрегеҙҙе лә тыңлап йөрөйөм. Олораҡтар хакимға «солтан» тип өндәшә. Ә йәштәр «ханыбыҙ» ти. Хан ғына итәйек Ишем солтанды. Шуға ризаһығыҙмы?» – тиеүгә, бөтә ялан дәррәү ҡысҡырҙы:

– Хан, хан, хан!

Шунда уҡ аҡ кейеҙ һөйрәп килтереп, Ишем хандарын шуға ултыртып, күмәклән шау-гөр килеш аҫтында 40 тапҡыр күккә, 40 тапҡыр ергә төшөрҙөләр ҙә, ҡибла яҡҡа йөҙө менән бороп ултырттылар.

Тағы ла ҡор яһанылар. Һәр кем үҙ урынын алды. Байтүмә тағы ла аяҡ үрә торҙо.

– Бына хәҙер ханыбыҙ ҙа бар. Боронғо ҡалабыҙҙы ла кире ҡайтарҙыҡ. Рәхмәт табындарға, әйлеләргә, ҡатайҙарға, ҡыуаҡандарға, яуҙаш фекерҙәштәргә. Уныһы шулай, – тип тауышын түбәнерәк төшөрҙө. – Әммә ҡурҡыныс яғы ла бар түгелме? Мәскәү батшаһы ете ырыуҙы үҙ ҡанаты аҫтына алдым, тип беҙҙең ҡарттайҙарға «Жалауанный грамота» тигән ҡағыҙ биргән. Үҙ ерегеҙгә үҙегеҙ хужа, тип. Шуға Ҡазанға, Мәскәүгә үк алып барып

яһаҡ түләп торҙоҡ. Шунан Ҡазанға йөрөү бик йыраҡ булғас, беҙҙекеләр, яһаҡты Өпәгә түләйек, Өпә ҡәлғәһенә кешеләрегеҙҙе ҡуйығыҙ, тип һорағандар Ҡазанға барғанда. Бына инде утыҙ йыл яһаҡты бында килтерәбеҙ. Ҡулыбыҙға үҙ еребеҙгә үҙебеҙ хужа тигән ҡағыҙ алғас, хәҙер кем була инде ергә хужа?

Хәҙер башҡорт ханы бар. Шул тирәһен аңламайым, ә ҡалғаны менән риза ла ул мин. Ҡайтҡас, тағы ла үҙебеҙҙә ҡор йыйырбыҙ, халыҡҡа еткерербеҙ был ҡарарҙы. Унан бер нәмә. Урыҫ әлегә үҙе килеп етмәгән. Хисап та алғандары юҡ. Яһаҡты үҙебеҙҙең аҡһаҡалдар йыя. Тәғәйен кешеләребеҙ бар. Урыҫ иле бик ҙур, ҡалалары ла, кешеләре лә бихисап, ти. Сит илдәр менән һуғыша.

Ә беҙҙең бит ҡалалар юҡ. Кешеләребеҙ ҙә, шөғөлөбөҙ ҙә әҙ. Унан бит әле шәреҡ яҡтан ҡалмаҡ килеп сыҡты. Беҙ инде улар менән байтаҡ бәрелештек. Күп, бик күп бит улар ҙа. Кире ҡағылып торалар, арттан өҫтәлеп тағы киләләр. Башын һуғып ватһаң да, барыбер килә. Үгеҙ кеүек, ауыртыуҙы белмәгән үгеҙ кеүек. Тамам ҡыйратһаң ғына ҡасалар. Ә бер ҡасһалар, йыраҡ ҡасалар. Беҙ был яҡҡа ҡуҙғалырҙан алда бер өйөрө, ике меңләп булыр, килеп баҫты. Күп ҡан ҡойолдо инде. Ҡалмаҡтар ҡайҙандыр шәреҡтән көслө халыҡтан ҡыуылып килгән, ти. Улар ил, ер даулай, ергә болаша. Бер туҡтауһыҙ яу ҙа яу, күпме егеттәр баш һалды. Ә алдан ғәрептән һары һаҡалдар һуғыш менән килһә? Ни булыр?

Күңелһеҙләнеберәк бөтөрҙө һүҙен Байтүмә. Ул үҙ урынына ултырып та өлгөрмәне, ҡулындағы ҡамсыһын болғай-болғай уртаға Тайшан сығып баҫты.

– Ҡорҙаш, тип әйтәйемме, буйҙаш, тип әйтәйемме, Байтүбә. Мин һинең фекерең менән килешмәйем. Фекерең, бәлки, ысын күңелдән әйтелгәндер, шулай тойола, әммә һин башланған баш әштән үҙеңде, ырыуыңды, беҙҙе һыуындырырға һыу нибәһең түгелме? Әйткәс, әйтәйем, киләсәктә ҡайһы бизмән баҫырын берәү ҙә белмәй. Белһә, Тәңре үҙе генә беләлер. Беҙ инде һары һаҡалдар менән, һеҙ алтмыш йыл яһаҡ түләгән кеүек, 60 йыл һуғышабыҙ. Ҡандаштарығыҙға килеп күренеп тә, уларға ярҙам итеп тә киткәнегеҙ юҡ әле. Бынһы бер үпкә һүҙе. Ә һүҙ мәғәнәһе былай. Һары һаҡалдар ҡалмаҡ түгел. Улар барлыҡ януарҙан да уҫал. Урта Уралда, Иберҙә беҙҙең тораҡтарҙы, суйын иреткән мейестәрҙе емерҙеләр. Күпме кешене ҡырҙылар. Ҡалмаҡтар килеп һөжүм итә лә ҡаса. Ә былар ҡатын-ҡыҙҙарын, бөтә мөлкәттәрен килтереп, баҫып алған ергә ҡәлғә, слободалар төҙөй башлай. Ағас әшенә, мәғдәнгә, балыҡ тотоу, ер эшкәртеүгә оҫталары күп. Өпәне беҙ уларҙы Иберҙән ҡыуып сығарыр өсөн алдыҡ. Бында ныҡынырға кәрәк ханға, ә беҙ һәр беребеҙ уға әжер биреп, үҙ еребеҙҙә йәшәрбеҙ. Әле бит һин, Байтүмә ҡорҙаш, тере урыҫ күргәнең юҡ.

Баш һалыу яҡшы билдә микән килмәгән батшаға? Шунан ул Русия тигән илгә баш һалғас, ул һинең ереңә хужа бит. Үҙ ереңә үҙең хужа булыр өсөн әллә кемдән, сит бауырҙан ҡағыҙ алыуығыҙҙы төшөнмәйем мин. Тимәк, үҙ әйберең үҙеңдеке түгел! Әллә ҡайҙа ятҡан Мәскәүҙән ҡағыҙ һорап алыу... әллә, аңламайым һеҙҙе... Беҙ уларға беребеҙ ҙә барғаныбыҙ ҙа юҡ, бармайбыҙ ҙа. Урыҫҡа баш һалып, уның ҡанаты аҫтына кергәс, ниңә ул һеҙҙе шул ҡалмаҡтарҙан яҡламай, ғәскәре көслө булғас? Яҡламай ул, белеп ҡуйығыҙ, яҡламаясаҡ та. Киреһенсә, һеҙҙе көсһөҙләндерер өсөн, аҫтыртын ғына үҙ илселәрен ебәреп, ҡаршы ҡоторта. Үҙегеҙҙе тамам ҡыйратһалар, елкәгеҙгә менеп ултырыуы уға ауыр түгел. Бына тиҙҙән алтын, мәғдән сығҡан ерҙәрегеҙҙе талай башлар. Һалымын күбәйтер, аттарығыҙҙы баҫып алыр, күреп тор. Унан ул ҡалмаҡтарҙы алдап-йолдап үҙ диненә күсерә, үҙ исемен бирә. Хан хаҡ һөйләй. Тик барлыҡ төркиҙәр халҡы берләшеп кенә ҡаршы тора алабыҙ. Минең фекерем шулай, ханым, – тип боролобораҡ әйтте лә үҙ урынына барып ултырҙы.

Тағы ла тынлыҡ урынлашты. Тағы ла кем һүҙ әйтер тигәндәй, хан барыһына ла күҙ йөрөтөп сыҡты. Һөйләүсе булманы. Барлыҡ төп бурыстарҙы яйлап, һалмаҡ тауыш менән тағы ла һанап сыҡты. Был юлы Ишем хандың һүҙҙәрендә лә, тауышында ла бойороу ауазы ярылып ята ине. Фәскәренең һуғыш алымдарын күрһәткән тамашанан һуң аш ашалғас, таралырға әмер бирҙе ул. Ҡунаҡтарҙың абруйлы, ҡайтҡас, ырыу баштары алдында яуап тота торған кешеләрен саҡырып, өҫтәмә күрһәтмә бирҙе. Ил-йорт тынысланһа, килеүҙәре тураһында сапҡын ебәрһендәр. Барлыҡ яҡҡа сапҡын хеҙмәтен тергеҙһендәр. Сапҡын булмаһа, һуҡыр кеше кеүек бер ни белмәйбеҙ бит. Һәр береһе ырыуы, ҡайһы ерҙә йорттары, мал-тыуар, ир-егеттәр һаны, ҡорал тураһында хисап килтерһендәр. Өндәшмәй генә баш әйҙе ҡунаҡтар. Килешеп бөтмәнеләр төҫлө һиҙелде ханға. Әммә быға иғтибар итмәҫкә тырышты. Сырайын да һытманы.

Уйын һуғышы башланыуын иҫкәртеп, майҙанға һөйрәп килтерелгән бер пушканан йәҙрәһеҙ генә атып ебәрҙеләр. Ҡолаҡ тондорғос тауыштан һуң наҫыҡ ҡара төтөн ҡапланы яҡын араны. Тағы, тағы ла аттылар. Шуны ғына көтөп торғандай, ике яҡтан ҡара-ҡаршы меңәр-меңәр ике меңлек бер-береһенә таяҡ ҡылыстар, таяҡ һөңгөләр менән ташланды. Ысын һуғышты хәтерләтә ине был алыш. Төртөшәләр, йығылып төшәләр. Яланда буш аттар ҡуркып, кешнәшеп сабып йөрөй. Һуғыш ҡырынан аҡһаҡ һуғышсылар сығып, ҡарап торған халыҡ араһына килеп бутәлды. Ниһайәт, бер яҡ һыбайлылары икенсе яҡтың күбеһен ат өҫтөнән гөрөп төшөргәс, туҙ борғо менән тауыш биреп, уйынды туҡтаттылар. Ҡул һелтәй-һелтәй үҙ-ара бәхәсләштеләр, ҡысҡырышып та

алдылар. Әммә был алыштың һөҙөмтәһен тикшереү оҙаҡ буласағын белгәнгә, күбеһе үҙ фекерен әйтмәне. Көнсығыштан, тауҙар артынан ҡап-ҡара болот бөтә яҡты баҫып алған ине. Аш ашау нибәләп яуған ямғыр аҫтында барҙы. Ҡунаҡтар ҡайтыр булғас, Ишем хан ҙур тирмәһенән үҙе сыҡты. Ололарына ҡул биреп һаубуллашты. Вәғәздәрен ҡабат-ҡабат әйтте хан, яйлап, ашыҡмайынса ғына. Һөҙөмтәһеҙерәк бөткән кеүек тойолдо уға Оло йыйын.

* * *

Ҡәлғәгә ҡайтҡас, төнө буйы уйланды хан. Иртәгәһен тағы ла кәңәшселәрен, мең баштарын йыйырға бойорҙо. Аш-һыу әҙерләгәнсе барыһы ла йыйылып бөттө. Ишем ханға башта кәңәшселәренең фекерен белеү ҡиммәт ине.

– Хәҙер беҙ аулаҡтабыҙ. Нимәләр ҡайнай әс-бауырығыҙҙа? Әйтегеҙ! Бер фекергә киләйек, – тине.

Һүҙҙе был юлы ҡаҙаҡ вариҫы Әүбәкир алды. Һүҙенең төп мәғәнәһе тиҙерәк ҡайтыу ине. Ҡалмаҡтар Оло һәм Урта Йөҙҙөң ҡаҙаҡ ырыуҙарын да баҫҡаҡ теткеләгән ине бер-ике йыл элек. Уларҙың көнсығыштан тағы килеүҙәре мөмкин. Торғауыт тигәндәре менән аҙ-маҙ һүҙ аңлашып булһа ла, хошауыт һәм дербет тигәндәре бигерәк ҡырағай.

– Ҡайтырға кәрәк, хан, – тип һүҙен йомғаҡланы Әүбәкир. Нуғайлы Алта ла төп халҡы, бисә-сәсәләре, бала-сағалары Ишем хан вәғәҙә иткән Исәт менән Мейәс араһындағы ерҙә ҡалыуҙарын, уларҙың да яҡлаусыһыҙ, һаҡлаусыһыҙ булыуын белдерҙе.

Ҡара табындарҙы, тилөүҙәрҙе, барындарҙы, ҡатайҙарҙы ла тырнай ине был һорау. Әйлеләр, ҡыуаҡандар ғына бер ни тиклем тынысыраҡ булды, сөнки уларҙың ере төп Урал һыртының ғәрәбендә ине. Ә ҡалмаҡтар урман-тауҙа йөрөргә яратмай, бәләкәй генә урманда ла йүнәлештәрен юғалта, тиҙерәк яланға сығырға тырыша. Шулай фекер алышып, үҙ теләктәрен белдереп, ул-был иткәнсе аш-һыу әҙер булды. Табаҡ-табаҡ һимеҙ йылҡы ите, һөҙләклә һурпа, иҙелгән ҡорот, ҡаты итеп бешерелгән үлән сәйе, ҡаҡ, һары май, бал һәм башҡа аҙыҡ-түлек ине алдарында. Икенде намаҙын уҡынылар. Байтаҡ ваҡыт өндәшмәйенсә һәр кем тамаҡ ялғаны. Бер аҙ ваҡыттан һуң киндер таҫтамалға ҡулдарын һөртөп таҙартты ла ҡорҙағыларға һүҙ ҡушты хан.

– Йә, тағы кемдәр нимә уйлай, әйтегеҙ, дөйөм эш бит, уйлағанығыҙҙы әйтмәү яҙыҡ булыр, – тип һүҙ көттө.

Ит һоғоноуҙан туҡтап, бер аҙ ҡалҡына биреп, араларында йәш буйынса иң олоһо Муйнаҡ бәһлеүән һүҙ алды. Атаһы Буғай хакимға бик оҡшағайны ул. Йыуан, бик йыуан муйынында уның да башы бәләкәй генә күренә. Йыуан кәүҙәле булыуына ҡарамаҫтан,

кейеҙ өҫтөнә оҙон аҡ ҡуныслы йөн ойоҡ кейгән аяғын бик йәтеш итеп һалып ултырған.

– Дәрәжә оломо, сал сәстәрем оломо, уныһына һәр кемдең зиһене үҙе баһа бирер, – тип һүҙ башланы ул. – Әммә мин ҡустыларҙан алда һүҙ алмаҡсымын. Үҙ фекеремде тура ғына әйтер көсөм бар. Ханым! Олуғ хандарыбыҙ халҡыбыҙҙы үҙ ҡанаты аҫтына йыйып тотҡанда, беҙ бик ирекле, азат халыҡ булғанбыҙ, бөтә, бөтә башҡорт иле. Нуғайҙар заманы үҙе бер дәүер генә булған инде. Мортаҙа хан Өпәне ҡалдырып киткәс, башланған бит инде нуғай осоро. Ул ваҡытта ла Өпәлә ултырған нуғай ханына беҙ яһаҡ түләмәгәнбеҙ. Атай-олатайҙар беҙгә бер ваҡытта ла яһаҡ түләү, яһаҡ еткереү тигән һүҙ һөйләмәне. Әммә, ханыбыҙ, хәҙер ул һорау бөтә Башҡорт иле өсөн яһаҡ түгел, ә бурыс итеп ҡабул ителергә тейеш. Ҡул эштәре, дөйөм алыш-бireш оҫтасылыҡ, мәғдәнселек эштәрен ойоштороу, алтын-хазиналарыбыҙҙы ҡулланыу, баш мәркәзде күтәргәнгә тиклем бөтәбеҙ өсөн дә зарур. Һеҙҙең һөйләгән фекерҙәрегеҙҙе тыңлап, беҙҙең алда бик ҙур эштәр һәм маҡсат тороуын аңлайбыҙ. Әле неҙҙең был табынға тиклем беҙ үҙара фекер алышҡан инек. Уртаҡ фекер таптыҡ шикелле. Беҙҙең дөйөм фекер шулайыраҡ, ханыбыҙ.

Беҙ теләйбеҙме, теләмәйбеҙме, уртаҡ тел табып, бер төптән булып хәл итәйек нуғайҙарға, ҡазаҡтарға, ҡатайҙарға, беҙгә, беҙгә, тиеүем: барындарға, тиләүҙәргә, ҡара табындарға ҡайтырға кәрәк хәҙергә. Ибер эштәре менән булыр өсөн Аблай солтан да беҙҙең менән юлланһа, яҙыҡ булмаҫ. Хәҙер бында йоҙаҡ бикләнгәс, Иберҙәге һары һаҡалдар ҡалмаҡтар менән бергә йә беҙгә, көнсығыштарға ябырылыр, йә өйөрҙәре менән Урал аша бында, Өпәгә йомолор. Өсөнсө осрағы ла бар. Мәскәүҙәр күп көс туплап, Ҡазан аша килеп, һуғыш башлар. Әммә ул бик тиҙ генә булмаҫ, бер-ике йылдан ғына килерҙәр, тип уйлайыҡ, әммә килерҙәр, уныһы һис шикһеҙ. Шуның өсөн беҙ ҡайтып ил-йорттоң хәлен беләйек, ғаиләләребеҙҙе, ер-һыуыбыҙҙы ҡурсалайыҡ. Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Тамъян халҡы менән бәйләнешкә инәйек. Ҡатайҙар, иберлеләр менән ат сабышып торорбоҙ. Урта Йөҙ ханы менән дә хәбәрләшәйек. Улар еренән ҡалмаҡтар үтеп бөтһә, уларға ла шәреҡтән башҡаса ҡурҡыныс юҡ икән. Ҡазаҡтар шулай ти. Оло Йөҙҙәре тотоп тора бит әлегә. Әгәр ил-йорт тыныс торһа, дөйөм ғәскәр туплап, яҙ килербеҙ. Хәбәрләшеп торорбоҙ, ханым, ҡар төшкәнсе. Ғәрептән һары һаҡалдар яҙ етеп, ер-һыу кипмәҫ борон килә алмаҫ. Әммә бағаяҡ сәскәһен ҡойғас, килеүҙәре ихтимал, әгәр башҡа һуғыштары булмаһа.

Шундай фекер әйтте Муйнаҡ баһадир. Уның һөйләүе бөтәһенең дә күңеленә хуш килгәндәй тойолдо. Хуплағандай, барыһы

ла баш ҡаҡты. Ишем ханға Муйнаҡ бәһлеүән менән килешмәйенсә башҡа сара юҡ ине. Шулай ҙа ул үҙ төҙәтмәләрен индерҙе.

– Әлегә, – тине ул, һалмаҡлап ҡына, – Муйнаҡ әйтмешләй, теләйбеҙме, теләмәйбеҙме Ҡыуаҡан иле – Арҡалаш батыр, Әйҙе иле – Тайыш баһадир, Тубыл уғланы Тәүкил минең янда ҡаласаҡ. Һеҙ юлланғас, беҙ, бүленешеп, өс даруғаға сығабыҙ. Шималға таныптарға, балыҡсыларға, урандарға һәм дә ундарға етербеҙ. Ғәйнәләрҙең ашын ашарбыҙ. Ғәрептә ирәктеләрҙе, юрмыйҙарҙы, байҙар һәм бүләр ырыуҙарын мыжғытырбыҙ.

Ҡармасан, Сәрмәсән, Баҙы, Сөн, Ағиҙел уйһылыҡтары менән ҡыр йыландарҙы, гәрә, йәнәйҙәрҙе, ҡаңлы, дыуанайҙарҙы, таҙ, ҡаршын, ыуаныштарҙы күрербеҙ. Йәлдәктәрҙән Йәлдәк йырау Ҡаратун түпһәлендә хәл-әхүәлде һөйләне. Йәнүбтәге юрматы, үҫәргән, бөрйәндәрҙе әлегә борсомай торорбоҙ. Үҙҙәрен көтәйек. Халайыҡтар араһында иң алда аңлатыу өгөт-нәсихәт алып барайыҡ. Берәү ҙә беҙҙең изге теләгебеҙгә ҡаршы килмәҫ, иншалла. Ул турала Аллаһы Тәғәлә үҙе лә белеп, халыҡ күңеле күптән инде ризалығын биргән. Араларынан күренеклеләренән буласаҡ Ибер-Урал урҙаһының яуаплы баш кешеләрен ҡуйырбыҙ.

Яҙа белгән сәркәтиптәр сапҡындар аша Өпәләге беҙҙең вәкәләткә хәбәр еткереп торор. Урҙа төҙөү, боронғоно аяҡҡа баҫтырыуҙа беҙҙең көнсығыш халайыҡтарының күңелендә шик булмаһа ла, ғәрептә йәшәгән ҡандарыбыҙ күңелендә шик-шөбһә тора. Уныһын һиҙемләйбеҙ.

Шулайыраҡ тойола. Үҙ мәркәзебеҙҙе ҡарттайыбыҙ Мортаҙаның ҡалдырып китеүенә ун арғымаҡ ғүмеренән артыҡ ваҡыт үтте. Хәҙер беҙҙең төп бурысыбыҙ ғәреп үә йәнүб тоҡомдаштарыбыҙҙы буласаҡ Урал урҙаһы ҡеүәтенә инандырыу. Күңелдәрендә ышаныс күтәреү. Әлеге быуын халайыҡтары ҡарттайҙарыбыҙҙың дәүләте иҫтәлеген аңдарында юйып бара. Уны мотлаҡ яңыртыу лазым. Мортаҙа ҡарттайыбыҙ мур ҡырған йылдары Урал алдына, ҡояш сығыуға күскәс, әле бер йыл нуғайҙар Өпәгә килмәй торған. Дөрөҫөн әйткәндә, был Өпә ҡәлғәһе бик борондан һәр саҡ болашыу, өпәләшеү, һуғышыу тауы булып, төп хужалары Әй-Табын ҡәбиләһе, Өпәй ырыуы халыҡтары була. Беҙ уны бөтә төрки, мосолман халайыҡтарын берләштереүсе ҙур урҙаға – Урал-Ибер урҙаһына әйләндерергә тейешбеҙ.

Шуны эшләй алһаҡ, тора-бара болғар ҙа азат ителер. Үҙҙәре беҙгә, беҙ уларға ынтыласаҡбыҙ. Иншалла, шулай булһын. Ул көндәрҙе беҙгә лә, уларға ла күргә яҙһын. Тағы ла шул. Әгәр Мәскәү менән солохло булып китһәк, Ҡазан виләйәтендә үҙенән-үҙе ҙур баҙар хасил буласаҡ. Тайшан менән Айшанға, Килдеш менән Ҡалҡаманға затлы таштар, алтын, баҡыр, еҙ иретмәһе эшләүҙе күбәйтергә кәрәк. Улъяға (трофейға) төшкән ун ике йәҙрәлек

(пушка) бик әҙ. Туҡымаларын ҡарарбыҙ, дарыларын һынарбыҙ. Ә тимер иретеү, ҡылыс, һөңгө, балта һуғыуҙы өсләтә, дүртләтә арттырыу – төп бурыс. Тәүкил әлегә ҡәлғәнең барлыҡ эштәренә баш булыр... Хоҡуғын һәм бурыстарын билдәләрбеҙ.

Шундай тәҡдимдәр, теләктәр, күрһәтмәләр менән бөттө яңы тәхеттәге был һөйләшеү.

* * *

Туғыҙ меңе башы менән һигеҙ меңдән артыҡ ҡораллы кеше ҡайтырға юлланды. Көндәр көҙгә тартымлай башланы кеүек. Өндәшмәһәләр ҙә, бөтәһе лә ашҡына ине өйҙәренә. Сәселгән тарыны, арпаны ураһы, бесән әҙерләү, ҡышлауҙы йылытыу менән бергә шәһит булғандарҙың да ғаиләләренә күмәклəп ярҙам күрһәтеү бурысы тора.

Быларҙан тыш, хан ҡушҡан дөйөм ҡәүем эштәре лә күп. Тимер иретеү мейестәренә ҡышҡылыҡҡа мәғдән ташыу, күмер һүндереү, утын әҙерләү, күн, ҡайыш эшләү... Тағы әллә ниндәй мең эштәр араһында ҡорал һуғыу һис туҡталырға тейеш түгел.

Шулай, бөтәһе лә тиерлек донъя мәшәҡәттәрен уйлап барҙы. Ишем хан менән килгән юл барыһына ла таныш, бигерәк тә кисеүҙәре билдәле ине. Тайшан, Айшан, Муйнаҡ, Килдеш һәм Ҡалҡаман батыр кәңәшләшеп, үҙ ерҙәренә тура сығыу ниәте менән боронғо юл, Егәлгә армыты менән Нөргөш – Аҡтау араһына, уңға боролдо. Ул юлды башҡалар белмәй ине. Әллә нисә йөҙ ылау, арба, дары, ҡорал, башҡа нәмәләр менән тулы булғанлыҡтан, алға барыу бик әкренәйҙе. Көнөнә утыҙ, утыҙ биш саҡрымдан артыҡ китә алманылар. Алғасҡылар юл, кисеү ҡарап килгәнсе көтөргә лә тура килә. Бигерәк тә батҡыл һаҙлыҡтар ныҡ ҡамасауланы. Ҡариҙел, Эҫем, Лəмəҙе үҙəндəрен үтеп, Əмшəр, Аҡсыра тауҙарын һүлдә ҡалдырып, Егəлгə һыртының төньяҡ осон урабыраҡ сыҡҡас, Йүрүҙəнгə килеп төртөлдөләр. Йүрүҙəн был тирəлə лə бейек тауҙар, ҡалын урмандар, батҡыл һаҙлыҡтарҙы артта ҡалдырып, шималға ашыға. Шулай ҙа йомро ташлы һөҙəк кисеүен таптылар. Ике яҡ ярындағы яландарҙы билəп, төн ҡундылар. Меңəрлəгəн аттарҙың бышҡырып үлəн ашағаны ишетелə, усаҡтарҙың ялтлауы аҫтында əллə нисə йөҙ ҡаҙанға һалынған ит быуы һəр кемдең танауын ҡытыҡлай. Таң алдынан ҡойоп ямғыр яуҙы. Ҡуйы томан йөҙйəшəр ҡарағастарҙың, əйтерһең дə, һəр бер əнəһенə йəбешкəн. Юлды белеү өсөн киткəн алғасҡылар ҙа юғалды. Тауыш та, тын да юҡ.

Көндөң яртыһында ғына үҙəн буйлап иҫкəн елдəн томан аҙ ғына шыйыҡланды. Тора-бара ағастарҙың осо ла болотҡа тағып

ҡуйылған олон кеүек күренә башланы. Тағы ла ике намаҙ уртаһылай ваҡыт үткәндер.

Алғасҡыларҙың етәүһе кире килде, әммә алдағы бик бейек тауҙың түбәһе лә, биләне лә күренмәй, тинеләр. Ғәскәргә урында тороуҙың файҙаһы юҡ. Алға ҡуҙғалдылар. Алғасҡылар килеп, бер ерҙә һис бер нәмәнең күренмәүен тағы ла хәбәр итте. Шулай ҙа һөҙәгерәк ерҙәрҙе һайлап, алға, көнсығышҡа барҙылар. Был ғәләмәт ҙур тауҙан, һәр ташлыҡ аҫтынан тигәндәй, әреле-ваҡлы йылғалар атып сығып, түбәндә, уйһыуыраҡ ерҙә бергә ҡушылалар ҙа, ярҙары булмағас, бөтә яланға таралып, ҙур-ҙур батҡыл һаҙлыҡтар барлыҡҡа килтерәләр. Оҙон һутлы үләндәр, ат бауырынан аша сығып, өҙәңгегә баҫҡан аяҡты балтырға тиклем еүешләй. Аратирә ҡалын үләнде ишеп атлап, көпшә сүплəп ашаған айыу, нимәнәндер кинәт ҡурҡып ҡасҡан ҡыр кәзәләренең оҙон-оҙон һикерешеп ҡасҡаны күренеп ҡала.

Күтәрелер ер бик оҙонға оҡшай. Шулай ҙа менгән һайын батҡыл ерҙәр аҙайған кеүек һиҙелә. Йылғалар ҙа ваҡлана, ағастар ҙа нирәгәйә. Ваҡ-ваҡ ялансыҡтар күбәйҙе. Ҙур таштар өйөмө менән тирә-яҡ тулы кеүек. Тауға күтәрелгән һайын томан аҫта ҡала барҙы. Бына улар ап-асыҡ һауаға килеп сыҡты. Артта, түбәндә болоттар йөҙә. Уның эсенән оҙон эсәк кеүек һуҙылып, һыбайлылар, йөк тейәлгән ауыр арбалар сыға ла сыға. Ерән ҡашҡа айғырының өҫтөндә һоҡланып ҡарап торҙо Тайшан. Аҫта, бик алыҫта ғәскәр һуҙылған да һуҙылған. Ә алда мөһабәт аҡ башлы баһадир Аҡтау – Нөргөш тора. Йәй уртаһы булыуға ҡарамаҫтан, башында ап-аҡ ҡар, аралаш боҙлоҡ күренә. Уң яҡта биллек, иңкеүерәк урын төҫмөрләнә. Ә ул иңкеүгә суғырмаҡ-суғырмаҡ ҡаялы түшен терәп, тағы ла бер бейек тау терәлгән. Ап-аҡ тауға ҡап-ҡара ҡаялы мөһабәт армыт килеп төртөлгән. Егәлгәнең бер тармағы микән, тип уйланы Тайшан.

Дәүмәлдәре унлаған өйҙән ҙурыраҡ ап-аҡ таштар һул яҡтан өйөлөшөп-өйөлөшөп ятһа, билдәштең уң яғынан ҡырлы-ҡырлы ҡап-ҡара ҡаялар аҫылынып тора. Бынан боронғо юл үткәнен белә ине Тайшан. Боронғо һуғыш юлы тип атала ине. Был ерҙе, был юлды Нөргөшкә менгәс кенә таныны барыһы ла. Әгәр ылауҙарҙы был үҙәктән имен-аман үткәрһәк, аръяғына түбәнгә лә түбәнгә. Ниһайәт, алда килгәндәр билдәштең өҫтөнә менеп етте, буғай. Туҡтанылар. Алғасҡыла барған Айшан, ғәскәр баштарын саҡырып, ҡамсылы ҡулын болғай ине. Тауға һуҙылған ғәскәрҙең иң артынан ҡаҙаҡтарҙың Урта Йөҙ меңлеге килә. Уның алдында — ялан ҡатайҙар Ҡотҡойҙо батыр менән, унан алда – нуғай меңлеһе Алта, унан Ибер табыны Тәүкил, ҡара табын Ҡалҡаман, ә иң алда юл башлаусылар Айшан, Муйнаҡ һәм Тайшан бара. Тайшан менән Муйнаҡ, Айшан меңлеһен ике яҡтан сабып үтеп, биләнгә менде.

Болоттар таралды. Билән ер булһа ла, тирә-яҡта күҙ күреме ерҙәр күренә. Армыт-армыт тауҙар, ҡара урмандар. Иге лә, сиге лә юҡ. Әйтерһең, бөтә ер өҫтө тик тауҙар, ҡалын урмандар менән ҡапланған. Һул ҡулда – Нөргөштөң ҡар ятҡан башы, ситенән бик-бик алыҫта шундай уҡ мөһабәт тау армыттары күренә. Уңда, ғәрептәрәк, үркәс-үркәс ҡаялы тауҙар бер-береһенең бөйөклөгөнә һоҡланып ҡарап ултырған төҫлө. Ә алда, һул яҡта, оҙон Өрәңге тауы килеп бөтә. Уң яҡта Ялауҙы, Ҡараташ, Ҡыҙҙар тораһы текә булып, бер-береһенә етмәйерәк туҡтап ҡалған. Түбәндә, бик түбәндә ҡуйы таллыҡ менән ҡапланған ҙур шарлыҡ. Уның өҫтөнән әле томан таралып бөтмәгән. Ҡайҙан китәбеҙ, тип һораны Айшан. Уңға, тау битләп китһәк, һаҙлыҡ аҫта ҡала. Берәҙәк йылғаһын кисеп, Әүәләк менән Бәләкәй Ирәмәл осона сығабыҙ. Ул юл урау һәм бик ауыр. Был юлдан бер тапҡыр ғына үтмәгән Муйнаҡ түбәнгә, һаҙлыҡҡа, ҡул һелтәне. Тауҙан төшөү бик текә, өҫтәүенә, тығыҙ тарлауыҡ, йылға ине.

Өрәңге тауы менән Әүәләктең бөткән урыны Ялауҙы, Ҡараташ, Ҡыҙҙар тораһы тауҙары итәгендә лә үткеһеҙ һаҙлыҡлы урын бар. Аҫас түшәргә тура килер, тип уйланылар. Был ҙур һаҙлыҡтан түбәнгә, Әй йылғаһына ла, шималға, Зыяраткүлгә лә ҡоя торған йылғалар аға. Ике ярҙағы ҡоро ер, һаҙлыҡтың бер ерендә бер-береһенә яҡын килә. Шул ерҙән аҫас түшәргә ҡарар ителде. Һуғыш ҡоралдары – айбалталар, ҡылыстар менән аҫас киҫә башланылар. Күмәк көс был эште оҙаҡҡа һуҙманы, төш ауыуға һаҙға, батҡылға һалынған аҫас түшәме күпер аша үтеп, Өрәңге тауы менән Ҡыҙҙар тораһы, Ялауҙы һырттары араһынан Әй һы-уының киң туғайына килеп тулдылар. Айырылышыр ер шул булды. Тиләүҙәргә, ҡара табындарға уңға, көньяҡҡа, Әйҙең үрге кисеүенә, Ялпантауға менә торған еренә юлланырға кәрәк. Ҡалғандар Әйҙең ҡаршы кисеүен кисеп Оҙонҡыр, Әңкә, Һарытүр, Уйташ тауы араһы менән Уй йылғаһы башына, унан яланға сығасаҡ. Һуңғы төндө Әй үҙәнендә бергә үткәрергә, ғәскәргә ял бирергә булдылар. Үҙ-ара киләсәк өсөн хәбәрләшеп тороу юлдарын, сапҡын хеҙмәтен аяҡҡа баҫтырыуҙы килештеләр. Ике һорау билдәһеҙ булды. Иберҙә ҡалған һары һаҡалдар ғәрепкә кире китерҙәрме, көс туплап беҙгә ташланырҙармы? Әллә ярҙам көтөп тик кенә ятырҙармы? Ҡалмаҡтар менән бәйләнешкә кереп, яу ҡутармаһалар ярай ҙа беҙ юкта.

Фекер алышыу төн буйына шул һорауҙар тирәһендә сырмалды. Ҡайтып етмәйенсә бер нәмә лә белеп булмай. Был ерҙә ҡыуаҡандарҙың йәйләүҙә ҡышлау тораҡтары ла беленмәй, күрәһең, аҙ ғына өҫтәрәктер һәм түбәндәрәктер. Сөнки ялан ситенән, шатыршотор килгән ылауҙарҙан ҡурҡып, ике-өс өйөр йылҡы көтөүе Әйҙең үрләүенә лә, түбәнгә лә йән-фарман сапты. Ҡайтып еттек, тип

иҫәпләне Тайшан да, Айшан да. Тик ғәҙәте буйынса Муйнаҡ ҡына асылып китмәне. Хәҙер үҙ ултыраҡтарына юлды нуғай Алта ла, ялан ҡатайы Ҡотҡойҙо ла табыр. Әммә иберле Тәүкилгә һәм ҡаҙаҡ Әүбәкиргә тура юл күрһәтеүсе тәғәйенләргә кәрәк, тип уйланы Тайшан. Таң яҡтырыуға ял яланында барындарҙан башҡа береһе лә ҡалмаған ине. Йоҡолары туйғансы йоҡлап, яйлап йыйындылар, Әй кисеүенән беләү таштар табып, бәкеләрен үткерләп, үҙәндә үҫкән ҡыҙыл сәскәне күбекләндереп, еткән һаҡал-мыйыҡтарын ҡырҙылар, төҙәттеләр. Томан таралып, ҡояш Ялпантау аша байтаҡҡа күтәрелгәс кенә юлға сыҡтылар. Уйташ тауының Ҡарағайташ ҡаяһы артындағы биләмәһе менән килеп менделәр. Һул ҡулдағы һаҙлыҡ-шишмәнән Уй йылғаһы баш ала. «Килеп сыҡтыҡ, үҙ йылғабыҙ, үҙ Уйыбыҙ!» – тип ҡысҡырышты йәш нуғышсылар.

Бараһы ер күп ҡалманы, түбәндәге Ямаҙы йәйләүенә, күп булһа, дүрт-биш саҡрымдыр. Унда туҡтап, хәл-әхүәлдәрҙе белешкәс, һәр түбәне, һәр аймаҡты үҙ ултыраҡтарына таратырбыҙ, тип килешкәндәр ине үҙ-ара. Әҙкә армыты моронон үтеп, Һарытүр тауына табан Аҡ йылға менән Уй ҡушылған ерҙән өҫтәрәк Ямаҙы яланына килеп сыҡтылар. Әммә... Ни булған? Аҡ йылға буйында, Уй үрләүендә теҙелешеп ултырған тирмәләрҙең береһе лә юҡ. Ҡайҙа киткәндәр, ни өсөн? Йәйләү бынан кәм тигәндә ун, ун биш көн алдан киткән. Усаҡтар, тағандар туҙған, әйбер-ҡара ла арлы-бирле ташланған. Ағас һәнәктәр һынған. Күнәктәр ватылған... Тирмәләр урындарын ҡарай торғас, бер нуғышсы ҡанлы сарыҡ, ҡанлы балаҫ табып алды. Бөтәһе лә бер фекергә килде. Илде ҡалмаҡтар баҫҡан, беҙҙең юҡлыҡтан файҙаланып. Тиҙ генә кәңәш ҡорҙолар. Барлыҡ йәйләүҙәргә, ултыраҡ түбәләргә сапҡындар ебәрергә. Тайшандың үҙ йөҙлөктәре менән сапҡындарҙың хәбәрен Ҡомас тауының Тамъян шишмәһе янында көтәсәген әйттеләр. Барлыҡ ултыраҡтарҙан да хәбәр килеп бөткәс, төп ҡарарға килербеҙ. Ә хәҙер бөтә сапҡындар ҙа ат алмаштырып, юл сапһындар.

– Айшан ағай, һин төп ултыраҡ Алтынташҡа бар, ғаиләләрҙең хәлен бел. Килерһең, бик булмаһа, ат саптырырһың миңә. Муйнаҡ ағай, үҙ кешеләрең менән үҙ ултыраҡтарыңды тикшер. Хәбәр көтәм. Әгәр беҙҙең шик дөрөҫләнһә, барығыҙға ла йыйылырға! Кисекмәҫтән! – тип ҡынынан ҡылысын һурып алды Тайшан. Ярһыған ине ул. Күҙҙәре осҡон сәсә. Ултыраҡтарын яндырған, йәйләүҙәрен туҙҙырған, меңәрләгән баш мал-тыуарҙарын урлап, ҡыҙ-ҡырҡындарын талап алып киткән ҡыр ҡалмаҡтарына ҡаршы яуға ташланырға хәҙер үк әҙер ине ул...

* * *

Тайшан үҙ кәбиләләштәре менән Ишем солтанға ҡушылып, Өпәне яуларға киткәс, бер йома ла үтмәне, шәреҡ яҡтан килгән ҡалмаҡ атлылары йәшенә-боҫа йәйләүҙәр, ҡышлау ултыраҡтар тирәһендә күренә башланы. Улар йә еләккә сыҡҡан бисәләрҙе, бала-сағаларҙы баҫтырып ҡайтарҙы, йә йәшеренеп ятып малтыуар көтөүҙәрен, тирмәләрҙе, өйҙәрҙе иҫәпләне. Йорт-ерҙе, мал-тыуарҙы һаҡларға ҡалдырылған йөҙ илле ҡораллы ҡарауылсы ҡалмаҡ алғасҡыларын төрлө ерҙән ҡыуһа ла, бер генә дә тота алманы. Был йөҙ илле һаҡсының һәр береһе оло йәштә булып, өҫтәүенә, күбеһенең йә күҙе тоноҡ күрә, йә ҡолағы ҡатҡан, ә ҡайһы береһе бөтөнләйгә сатан ине.

Барлыҡ ырыу алдында үҙенең алдан зиһенләй белеүе, буласаҡ ваҡиғаларҙың һөҙөмтәһен яңылышмай әйтеп биреүсе зирәк Түләбай ҡарт бар ине. Түләбай үҙе ҡурайсы, йырсы, һөйләгән һүҙҙәрен табындарҙа шиғри юл менән әйтә торған үткер фекерле булды. Шуға ла уны Түләбай һынсы, Түләбай сәсән тип йөрөттөләр. Уның атаһы Бурай ҙа йырға, моңға, телгә лә бик маһир һәм үткер фекерле кеше булды. Түләбайҙың ике ҡатынының береһе бала күрмәне. Икенсеһе уға ике ҡыҙ, бер ул бүләк иткән ине. Тормош хәсиәте ғилем алғанда һәм алыш-биреш иткәндә атаһы Бурай аҡын Бохара яҡтарынан һутлы йөҙөм, алма килтерә торған ине. Шул һутлы емештәрҙең тәме егет булып өйләнгәнгә тиклем ауыҙынан китмәне Түләбайҙың. Шуға ла ул ҡыҙҙарының олоһона Йөҙөм, ә икенсеһенә Алма-Алмаҡай тип исем бирҙе. Ә улы, ырыу халҡының байтағы аҡ, ә ҡайһы берҙәре ҡыҙылыраҡ та булғанғамылыр, аҡ йөҙлө, ҡуңыр-һары сәсле булып донъяға килде. Түләбай уға яратҡан сапҡын атының исемен Ерәнсә тип ҡушты. Ана шул тиктормаҫ, телсәр Ерәнсәне һигеҙ йәш тулыуына бесәнлектә, урман ситенән, ҡаҙаҡ барымтасылары урлап алып китте. Түләбайҙың сапҡын аты янында юҡ ине. Ҡыуып етә алманы ҡул аҫтындағы ат менән. Ҡайғырҙы, бик өҙгөләнде Түләбай ғаиләһе. Ҡон ҡағиҙәһе буйынса, шул уҡ йылдың көҙ башында ҡаҙаҡтарҙан өс бала ярлап алып ҡайттылар. Әммә Ерәнсәне таба алманы Түләбай. Ерәнсә юғалғас, тағы ла һигеҙенсе яҙ үтте. Һигеҙенсе йәй килде... Һиҙенә ине Түләбай, бик һиҙенә ине. Ҡалмаҡ алғасҡылары килеп юҡҡа ғына күҙәтеү алып бармай. Яу киләсәк, һис шикһеҙ яу киләсәк. Шуға ла ул бөтә мал-тыуарҙы яландан урман, тау араларына ҡыуырға, йәйләү урындарын алмаштырырға кәңәш бирҙе. Күп ғәскәргә йөҙ илле кеше менән ҡаршы тороп булмаҫ... Тиҙерәк, тиҙерәк тау араларына күсенергә тип, һәр ултыраҡҡа, йәйләүгә бүленешеп саптылар. Шул арала тағы ла бер ваҡиға булды. Урталағы иң ҙур, иң бейек Ҡарауыл тауы итәгендәге йәйләүҙән бер ҡыҙ бала юғалды. Еләк йыйып йөрөгән

балаларҙың береһен ҡалмаҡ атлыһы елкәһенән тотоп күтәреп, әйәренә һалып алып киткән.

Ҡыҙ баланың иң ҙурын, аң-тоңдо белгәнен алғандар. Тимәк, уларға тел кәрәк булған, тип фаразланы Түләбай. Оло йәйләү халҡы барыһы ла бергә йыйылған ине. Күп, бик күп ҡара яу баҫасағын белә ине Түләбай. Әммә уға бер кем дә ышанманы кеүек. Тойҙо ул яу килерен, һиҙҙе генә түгел, ап-асыҡ белде. Намаҙ ваҡыты етмәһә лә, бөтә халыҡ алдында шәреҡкә ҡарап тубыҡланды. Унан күкрәге менән ятып, уң ҡолағын ергә һалды. Барлыҡ халыҡ тын ҡалды.

– Бик күп, бик күп ат тояҡтары тауышы ишетелә алыҫта, – тине ул. – Әммә береһе, саҡма тояҡлыһы, бик яҡын, бик яҡын. Әллә улым Ерәнсә ҡайтып киләме хәбәр менән? – Үҙ һүҙҙәренә үҙе ышанды Түләбай һынсыл. – Ерәнсә ҡайтып килә саҡма тояҡлы толпар менән, – тип ҡысҡырҙы ул бөтә Ямаҙы яланына.

Төшкө сәй ваҡыты етеп килә ине. Бына Аҡ йылға кисеүе яғынан шарлыҡ буйлап сабып килгән бер һыбайлы күренде. Барлыҡ халыҡ тирмәләренән йүгерешеп ҡаршы сыҡты. Аҡ күбеккә төшкән, суртан кеүек шыма, күҙҙәре ут сәсеп торған йөрәк арғымаҡтан буй еткергән егет һикереп төштө лә туп-тура Түләбай һынсылды: «Атай, атай», – тип барып ҡосаҡланы. Барлыҡ халыҡ хайран ҡалды. Унан һуң ул һәр береһе менән һаулашып сыҡты.

Аш ашап, һыуһын ҡандырғас, Ерәнсә түбәндәгеләрҙе бәйән итте. Урланғас, уны ҡулдан-ҡулға биреп бик алыҫҡа – Турғай һыуы буйҙарына алып баралар. Шунда үҫә. Йылдар бер-бер артлы үтә тора. Ерәнсәнең хужаһы Күсембай күсенә-күсенә Тубыл буйҙарына килеп сыға. Ҡасып китеүенән ҡурҡып, уны йылҡы көтөргә ҡушмайҙар. Ул һарыҡ көтә. Көндәрҙән бер көн ҡаҡ ашҡаяҡҡа кейҙереп ҡуйылған ат башы һөйәген күрә лә, уға ҡарап һамаҡлай:

Толпар башы тип быны кем әйтһен,
Көтөүсе тип, һынсыл улын кем белһен?
Ырыу башы кем, тип һораһағыҙ,
Ырыу башы был мин – сәсән Ерәнсә.

Янында йөрөгән ҡаҙаҡ малайы быны байға еткергән. Бай уны саҡырып алған да:

– Минең көтөүемдә толпар бармы? – тип һораған.

– Юҡ, һинең көтөүеңдә толпар ат юҡ. Бына күрше көтөүҙә бар, – тигән. Күрше көтөүгә килеп ҡараһалар, толпар шул булыр, тип уға йәш ярымлыҡ бер айғыр тайҙы күрһәткән, ти. Күсембай күршеһенең ай-вайына ҡуймай теге ябағаны һатып алған да:

– Үҫтер, буй еткерһә, бәйгелә сабып ҙур йөлдә алырбыҙ, – тигән.

Ерәнсә менән ерән толпар көндө лә, төндө лә бергә үткәреп, тағы ла өс йыл үтеүгә утыҡҡан, бауыр күтәргән.

Ерән – текә, ҡаты тояҡлы, тибенгеһе көслө, киң күкрәкле, мундаһы бейек, тартым эсле, суртан кеүек шыма, ҡаҡ башлы, үткер күҙле, ҡайсы ҡолаҡ, ҡуңшырығы киң арғымаҡ. Ерәнсә толпары менән башҡа аттар һис ярыша алмаған. Ҡаҙаҡ ханы, ямғырҙар яуып, дала ҡаты үлән менән тулғас, оло жыйын (йыйын) һәм унда ҙур бәйге иғлан иткән. Бәйгегә йыраҡ ерҙәрҙән бик күп йөрөк аттар килгән. Ерәнсә лә үҙ толпарын ярышҡа әҙерләгән. Бына бәйге көнө еткән. Далала ике күҙ күреме араны сабышалар икән толпарҙар. Иллеләгән һайланмыш ат киткән бәйгегә.

Билдәле ерҙән сабыш башланған. Аҫтынан һурылып сығып килгән арғымағын тота-тота ҡулы талған икән Ерәнсәнең. Әммә ул толпарҙы тотоп, майҙанға иң арттан килеп кергән дә:

– Эй, кәрәйҙәр, аҡсарылар, ҡурсарылар, мин ҡайттым, – тип ҡысҡырып майҙан уртаһынан үтеп, толпарының теҙгенен бушатҡан. Ҡыуһалар ҙа, бер ат та етә алмаған. Аҡсарылар, ҡурсарылар Урта Йөҙҙөң Кәрәй ҡәбиләһе халҡы икән. Дүрт көн сапҡан Ерәнсә. Икенсе көндө далала уны бик күп ҡалмаҡ һыбайлылары уратып ала. Әммә ҡуласаны үтеп ҡаса Ерәнсә. Толпарға бер ҡалмаҡ аты ла етә алмай. Ташлы ерҙә толпар тояҡтары ут сәсеп бара икән. Ҡомас тауы итәгендәге ултыраҡта бер кем булмағас, йәйләү урыны Ямаҙыға сапҡан Ерәнсә. Уйҙың ҡушылдығы Аҡ йылға аша һикергәндә, толпарҙың тояҡтары йәймә ташҡа төшөп, эҙҙәре ташта уйылып ҡалған. Шул таш барындар хәтерендә һаман да, Толпар баҫҡан ташы булып ауыҙ-тел ижадына кереп киткән.

Ерәнсә ҡайтып бик күп ҡалмаҡ баҫҡаҡтары килеүен халыҡҡа еткергәс, йәйләүҙәр тауҙар ҡуйынына тағы ла төпкәрәк күсте. Түләбай ялан яҡҡа, хәҙерге Сабырты, Шартым тауҙары башына ҡарауыл ҡуйған ине.

Көндәрҙән бер көн тау баштарындағы ҡуҙҙар төтәне. Унан сабауылдар үҙҙәре лә килеп етте. Уй йылғаһының һул ҡушылдығы – тоҙлоҡло ерҙән сыҡҡан Асы йылғаһының һәр батҡыл кисеүенә, ҡамыштар араһына уҡсылар йәшерелеп ҡуйылды. Әммә улар бик аҙ ине. Ултыраҡтың бер өлөшө – Бурама тауы буйында Аҡ шишмә ҡаршыһында, бер өлөшө – Кәйек тауы менән Оҙонҡыр тауы араһында ҡара тал шишмәлеге түпһәлендә, бер өлөшө – Ҡомас итәгендә Мостай тауы шишмәһе ҡаршыһында, бер өлөшө – Тамъян шишмәһе түбәһендә. Ә йәйләүҙәр Ямаҙыла, Алтмыш ҡолан йылғаһы яланына урынлаша. Урланған ҡыҙҙан башҡорттар Өпә яғында яуҙа булыуын белгән ҡалмаҡтар ашыға. Улар һис бер ҡаршылыҡ көтмәй. Алда уларҙы ҙур табыш көтә.

Мал-тыуар, ҡышҡылыҡҡа аҒас йорттар, йәйләүҙәрҙә бай тирмәләр. Ә иң мөһиме – ер! Ерле буласаҡ улар. Илле буласаҡ. Ат тубыҒынан бейек барлыҡ ир енесле кешеләрҙе сапҡысларҒа ҡушылҒан уларҒа. Ҡатын-ҡыҙҙары ҡолиә һәм йәриә буласаҡ, ә бәпес малайҙары буйһоноп, ҡол булып үҫәсәк. Шундай ине уларҙың төп маҡсаты. Ҡалмаҡтарҙың таралышмай, бер һыҙатҡа өйкөм-өйкөм теҙелеп килеүҙәрен белгәс, йөҙ илле ҡораллы ҡарт, үҫеп, буй еткереп килгән үҫмерҙәр, йәш ҡатындар ҡулдарына кем балта, кем ҡылыс, уҡ-һаҙаҡ алды. Йөҙ илле ҡораллы оло һуҒышсы Асы йылҒаһының батҡыл кисеүе ҡаршыһына килде. Уҡсылар йылҒаның ҡуйы ҡамышлыҒы араһына боҫто. Бына алҒасҡы булып килгән тәүге ун биш ҡораллы ҡалмаҡ сабышып, ҒауҒалашып, батҡыл кисеүгә килеп керҙе. Шунда уҡ ҡамыш араһынан шыйлап уҡтар осто. Дүртәүһе аттарынан шунда уҡ батҡылҒа ҡолап төштө. Етәүһе, сәнселгән уҡтарҙы тартып алырҒа маташып, ҡаршы ярҒа сыҒыуҒа, таҒы ла арҡаларына, елкәләренә уҡ алып, аттары өҫтөнән йыҒылып төштө. Икеһе кире сыҒып ҡасты, ә ҡалҒан икеһе аттарын ҡыуып, йылҒаның аҒымы буйлап сапты. Ул арала төп көстәре килеп етте.

Туп-туп булып берләшкән ҡалмаҡтар, һис бер нәмә күренмәгәс, ышаныслы ҡиәфәт менән кисеүгә керҙе. ТаҒы ла шыйлап уҡтар осто. УнлаҒан һыбайлы таҒы ла ат өҫтөнән йыҒылып төштө. Китте буталыш. Кемдер ҡысҡыра, кемдәрелер кисеү аша сыҒырҒа ынтылҒанда таҒы ла уҡ алып, яралы көйө батҡыл һыуҙа бутала. ҠалҒандарының аттары өркөп, кисеүгә кермәй. Төҙәп атҡан уҡтарҙан байтаҒы яра алып, артабан һуҒышҡа керерлек хәлдә түгел. Ә арттан өҫтәмә туплауҙар килде лә килде. Өйөлөшөп кисеүгә килеп терәлгәндәре берҙәм атылҒан уҡтарҙан яра алып, кире сапты. Үлеләре ерҙә ятып ҡалды. Ярты саҡрым самаһы ерҙә оҙаҡ ҡына үҙ-ара кәңәшләштеләр ҙә, дүрт-биш йөҙлөк икенсе кисеү эҙләп, йылҒа түбәненә сапты. ҠалҒандарынан дүрт-биш йөҙләгәне аттарынан төшөп, ҡамыш ҡаршыһына килеп, бәләкәй генә көмрө яндарын тартып, әллә нисә йөҙ уҡ осорҙо. Ҡамыш араһына урынлашҡан егерме өс уҡсы Түләбай һынсыл кәңәше менән кем ҡалын үгеҙ тиреһенән эшләнгән, кем ҡалын ҡалай ҡалҡан алҒан ине. Күтерле ҡамышлыҡҡа бата биреп, ҡалҡан менән ышыҡланһалар ҙа, ямҒыр кеүек уҡтар ҡапланмаҒан урын тапты. Егерме өс уҡсының йөҙәрләгән һуҒышсыларҒа ҡаршы атыуҙан файҙа юҡ кимәлендә ине. Шулай атыш кискә тиклем барҙы. Ҡамыш араһындаҒылар инде үлеп бөткәндер тип, бер төркөм һыбайлы ике-өс тапҡыр кисеү аша үтергә маташып ҡараны. Әммә һәр ынтылыш һайын ҡамыш берҙәм атылҒан уҡтар осорҙо. Ҡояш Ирәндек артына төшөргә инде күп ҡалмаҒан ине. Тамаҡ төбө менән ҡысҡырҒан әмер буйынса уҡсы ҡалмаҡтар аттарына

йүгерҙе. Атырға уҡтары бөткән ине. Дәррәү йүгерешеп аттарына менделәр ҙә, кисеүгә ағын булып йомолдолар. Был ваҡытҡа ҡамыш араһындағыларҙан Түләбай һынсылдың ҡыҙы Алмаҡай ғына тере ҡалған ине. Уғы тамам бөткәнсе терәп тигәндәй атты ла атты ул. Ахырҙа уның бер уғы ла ҡалманы. Кисеүҙе сыҡҡан ҡалмаҡтар аттарынан һикерешеп төштөләр ҙә, ҡындарынан ҡылыстарын һурып, ҡамышҡа ташландылар. Алмаҡай ҡулына беҙ һөңгө алды. Күтерле ерҙә һөңгө менән үҙенә ебәрмәҫкә ҡарар итте ул. Әммә берӗһен сәнсеп, уны һурып алып маташҡанда икенсе ҡалмаҡ һөңгөһөнөң аҫас һабын өҙә сапты. Ауыр яралы йәш һуғышсы Көйәк был алышты күҙен бер асҡанда күреп, иҫенә һалды. Алмаҡайҙы шул урында сапҡыслап, ҡылыстарындағы ҡанды еңеү билгӗһе булараҡ яланылар ҙа, алда, түбәлектә барған ҡылыс һуғышына саптылар. Йөҙ илленән аҙ ғына артыҡ башҡорттар уңдан да, һулдан да килгән ҡалмаҡ атлылары менән ҙур булмаған түбәлек өҫтөндә аҡтыҡ кешеләре ҡалғансы һуғышты. Барыһы ла башын һалды шул түбәлә. Әммә ике йөҙләгән ҡалмаҡ башы ла ер тапты. Үҙҙәренең кешеләрен дә, башҡорттарҙы ла ергә бирмәнеләр. Ашығалар ине. Тиҙерәк бер-берӗһенән болаша-болаша ултыраҡтарҙы, йәйләүҙәрҙе талау, мал алыу ине өмөттәре. Шул ваҡиғаларҙан һуң бөгөнгө көнгә тиклем Асы йылға аша сыҡҡан боронғо кисеүҙе һәм йылғаның ҡәберлектәр булған ярын «Алмаҡай» тип атап йөрөтәләр. Ҡалмаҡтар менән яулашып баштарын һалған батырҙар түбә̆һен әле лә «Шәһиттәр түбә̆һе» тиҙәр. Хәҙер ул түбә халыҡ телендә ҡыҫҡартылып «Шәһи түбә» тип атала. Йәшерен йәйләүҙәрҙән килгән халыҡ зыяратҡа ҡарт батырҙарҙы ерләне.

* * *

Ҡояш байыр алдынан Ҡомас тауы итәгендәге Тамъян шишмә̆һе ултырағына – Тайшанға сапҡындар хәбәр килтерҙе. Барлыҡ йәйләүҙәр тиерлек таланған, туҙҙырылған, тораҡтар яндырылған малтыуар, ҡыҙ-ҡатын ҡыуып алып кителгән. Аҡшам намаҙынан һуң Тайшан ултырағына Муйнаҡ һәм Айшан ағалары, Ҡомас тауы шималындағы ултыраҡтарҙан Иҫәнбәт балалары ла килде. Шешлек ҡыҙҙырып, таңға тиклем кәңәш ҡорҙолар. Төп мәсьәлә, әлбиттә, ҡалмаҡтарҙан үс алыу, мал-тыуарҙы һәм кешеләрҙе әсирлектән ҡотҡарыу ине. Төрлө фекерҙәр булды. Күп мал, ауыр арбалар, йәйәүле әсирҙәр менән йыраҡ китеп өлгөрмәҫтәр, тип фараз ҡылдылар. Шулай ҙа улар Тубыл йылғаһын аша сыҡҡандарҙыр. Ҡалмаҡтарҙың көс-һанын әле белмәйбеҙ. Шуға ла тиҙ арала йыйылып, уларҙың юлын, көсөн, туҡтаған ерҙәрен белер өсөн унарлыҡҡа бүлеп бер йөҙлөктө төрлө юл менән алғасҡыға

ебәрергә кәрәк. Ара йыраҡ, хәбәрләшеү өсөн һәр ун саҡрым һайын сапҡын күрнисәһен тоторға, ҡаҙаҡтарҙың Урта Йөҙ ханына ла Ишем солтан исеменән ҡалмаҡтарға бергә яу сабырға тәҡдим яһау бик урынлы булыр, тип таптылар. Сөнки ҡалмаҡтар ҡаҙаҡтар менән йышыраҡ бәрелешә, ғауғалаша ине. Был яуаплы эште олпат Муйнаҡ үҙ өҫтөнә алып, шул уҡ таңда ҡаҙаҡ далаларына юл алды. Күбәләк-тиләүҙәргә, ҡара табындарға ла хәбәр еткереү, арып ҡайтҡан кешеләрҙе тағы ла аяҡҡа баҫтырыу еңел булмаҫ тип, уларға бурҙай Ҡырлас юл алды. Тайшан менән Айшан яңы яуға әҙерләнеү өсөн бында, төп ултыраҡта, Алтынташта ҡалды. Уҡтар эшләү, ҡорал төҙәтеү, ат әпсен-төпсөнөн йүнәтеү, аҙыҡ-түлек, арбалар, аттар туплау, тағы әллә ни тиклем йөҙәрләгән һорауҙы ике-өс көн эсендә хәл итеп, юлға ҡузғалырға һүҙ ҡуйыштылар.

Күбәләк-тиләүҙәр, ҡара табындар менән Кәртәле Аят һәм Ҡамышлы Аят йылғалары ҡушылған ерҙә осрашырға ла, Урта Йөҙ ханынан хәбәр көтөргә булды. Әгәр ҡаҙаҡ ханы сәбәп табып яуға сыҡмаһа, үҙҙәре алышырға ҡарар ҡылды.

Яуҙың төп маҡсаты – урлап ҡыуып алып кителгән малтыуарҙы кире ҡайтарыу ғына түгел, ә ҡоллоҡҡа алынған малайҙарҙы, ҡыҙҙарҙы, йәш ҡатын-ҡыҙҙы ла ҡотҡарыу. Бының берҙән-бер юлы – ҡалмаҡ ойраттарын туҙҙырыу, сапҡыслау, юҡ итеү, бөтөнләйгә был тирәнән ҡыуыу. Сөнки улар ил байлығына ғына түгел, ә илдең, ерҙең үҙенә хужа булырға, беҙҙе юҡ итергә бурыс ҡуйған. Муйнаҡ бәһлеүән ҡаҙаҡ ханына юл алғас, Тайшан нисектер үҙен иркенерәк, киҫкенерәк тотто.

Һуғыш алымдарын төрлөсә уйланылар. Шулай ҙа төп ҡарар ике төрлө булды. Ҡыуаҡан, Ҡатай һәм башҡа ырыуҙарҙан, нуғай һәм ҡаҙаҡтарҙан ҡырҡа яуап алмаҫ борон, ҡалмаҡ ултыраҡтарына яҡын бармаҫҡа, тик бик көслө күҙәтеү алып барырға.

Әгәр ҙур, көслө йоҙроҡҡа төйнәлеп булһа, аңғармаҫтан баҫып, маңлайға маңлай килеп сапҡысларға йәлләттәрҙе. Әгәр уларҙың көсө ҙур булһа, бәләкәй төркөм менән ташланған булып, аҙаҡ ҡасыу уйнап, Уй буйҙарына тиклем көстәрен һуҙып бүлгесләргә, тоҡҡа индерергә. Һәр яҡтан боҫҡоға ҡуйылғандар көтмәгәндә ике ҡабырғанан, арттан һөжүм итеп тураҡларға. Башҡа төрлө алымдарҙы ла бик ентеклəп, бармаҡтары менән балсыҡҡа һыҙып, аңлаштылар. Әҙерләнеп, хәбәрләшеп сыҡҡансы тағы ла бер йома үтеп китте. Алдан һөйләшкән урында осрашырға тура килмәне. Сөнки Тайшан ҡалмаҡтарҙың күп булыуынан шикләнеп, шимал ҡара-табындарына, нуғай Алтаға һәм ялан-ҡатайҙарға ла хәбәр итеп өлгөргәйне. Нуғай Алтаға аңлатып хат ебәрҙе сапҡын артынан. Өҫтәмә хәбәр буйынса йыйылыу урыны булып Туғаҙаҡ йылғаһына етмәҫ борон Һаҫыҡ күл буйы тәғәйенләнде. Айшан

менән Тайшан ике мең ҡораллы һуғышсылары, йөҙҙән артыҡ ылау менән тағы ла ярты йома үтеүгә һаҫыҡ күлдән йыраҡ түгел ҡуптыҡ түпһәлгә килеп туҡтаны. Сапҡындар алдан һәм ике ҡабырғанан 30–40 саҡрым ерҙән хәбәр ебәреп килде. Тирә-яҡ тып-тыныс, һис бер әҙәм заты юҡ. Ҡаҙаҡтар ҙа, күрәһең, был тирәнән ҡасып китеп бөткән.

Тупланыр ергә килгәс, Тайшан сапҡын хәбәрселәрҙе йыраҡҡа, 70–100 саҡрым ерҙәргә ебәрҙе. Тағы ла өс көндән ҡалмаҡтарҙың Ҡамышлы Аят йылғаһы буйында тирмәләре ҡоролоуын һәм уларҙың бик күп булыуы тураһында хәбәр килтерҙеләр. Һаҫыҡ күл түпһәлендә тағы ла биш тапҡыр йәстү намаҙын уҡынылар. Алтынсы көн сабах намаҙынан һуң, ҡояш нурҙарының сасаҡтары офоҡто йыртҡас, Килдеш һәм Ҡалҡаман батыр етәкселегендә күбәләк-тиләүҙәр, ҡара табындар тып-тын ғына ятҡан томанды йыртып, күл түпһәленә килеп сыҡты. Ҡосаҡлаштылар, күрештеләр. Ләкин Айшан һаҡта йөрөгән нөгәрҙәрҙе шул тиклем күп кешене һиҙмәй ҡалып хәбәр итмәүҙәре өсөн аттарынан төшөрөп, ылаусы, хужалыҡ эштәренә күсерҙе. Ул ваҡытта башҡортта һуғышсы өсөн аттан төшөрөлөп йәйәүлегә әйләндерелеү иң хурлыҡлы яза иҫәпләнгән. Ә ғәйебе бөтөп, йә яу сафына баҫыр өсөн атҡа атландырыу башҡорт егете, башҡорт ире өсөн иң ҙур бүләк, ололау, билдәлелек һаналған. Шуға ла бөгөнгө көнгә тиклем үк килеп еткән Атҡаҙанған тигән данлы исем бар.

Икенсе көнө ялан ҡатайҙан Ҡотҡойҙо, ә нуғайҙан Аҡтай батырҙары етәкселегендәге ике төмән килде. Ҡайҙан ишеткәндер, Ҡотҡойҙо кешеләренә ҡушып, Аблай солтан да үҙ кешеләрен ебәргән. Әммә шимал ҡара табындары килмәне. Уларҙың бер өлөшө яһаҡҡа яҡын була тип, Болғар менән Өпә араһына күсмәксе булып төрнәлеп алһалар ҙа, китә алманылар. Уларға Аблай солтан урыҫ хакимлығы бөтөүен белдереп, үҙ яһағы кимәлен билдәләп, фарман ебәргән ине.

Беҙ Русия дәүләтенә ҡушылырға, яһаҡ түләргә шыртҡа килгәнбеҙ, ике баҙар бер булмай. Улар беҙҙе Сулман буйына, әлекке ата-олатайҙарыбыҙ еренә, күсереп ултырырға ризалашты. Ишем солтан ана үҙҙәренең ҡурсаҡтары һәм дә ҡатайҙары менән йәшәһен, беҙҙә уның һис ҡыҫылышы булмаһын, тип яуаплағандар.

Фарманды туҙға төрөп, ағас һандыҡҡа һалып Исәт йылғаһына ташланылар. Йәнәһе, һандыҡ Исәттән Тубылға төшөп, Аблай солтандың үҙенә кире ҡайта. Шуға ла бөтә көсөн ебәрмәне Аблай Тайшанға. Ҡотҡойҙо аша хат ҡына ебәрҙе. Аблай ебәргән бер төмән ун меңлек тә ҙур, бик ҙур ярҙам ине.

Алта нуғай ҙа яҡшы көс ебәргән. Һәр ҡайһыһы ҡалмаҡтар менән ил, ер-һыу өсөн һуғышты аңлай ине. Шулай итеп, көтмәгәндә тигәндәй, егерме меңгә яҡын атлы ғәскәр барлыҡҡа килде.

Килә торған халыҡ килеп бөткәс, һуңғы фекер, дөйөм ҡарар туплар өсөн ҡорға ултырҙылар. Тайшандың улы Сапҡын, Иҫәнбәт балалары Күкәм, Муйнаҡ улы Үтәғол кисә ҡалмаҡ саңдауынан баҫтырып тотоп Алаҡшан, Боғла, Һомба исемле өс әсирҙе килтерҙе.

Әсирҙәрҙән шуны белделәр: әле ҡалмаҡтар ҡамышлы һәм Кәртәле Аят йылғаларының араһынан китергә йыйына. Өрлүк тигән тайшалары урыҫ батшалығы кешеләре менән һүҙ алып бара икән. Иртә яҙ көнө Хо Өрлүктән күрһәтмә килгән. Имеш, ул урыҫ воеводаһы менән көҙ үк һөйләшеп килешкән. Ҡалмаҡтар ерле башҡорттарҙы йә ҡырып, йә ҡыуып ебәреп, Уралдың көнсығыш яҡ ерҙәрен һәм ҡаҙаҡтарҙы Турғай һыуына ҡыуып, ғәрептә оло Иҙел киңлектәренә тиклемге ерҙәрҙе биләһәләр, киләсәктә урыҫтар уларға Себер ханлығына, Үзбәк ханлығына ҡаршы көрәштә арҡалаш булырға вәғәҙә биргән. Шуға ла ул йәй башында уҡ башҡорттарҙы ҡырыу һәм ҡыуыу өсөн яу асырға бойорған.

Өрлүк Тайшаның был күрһәтмәһен үтәп, Далчи-Шукр ҡаҙаҡтарҙың Урта Йөҙ ырыуҙарына һәм башҡорт Уралына һөжүм ойоштороған икән. Ваҡыты ла бик уңайлы тура килгән – башҡорттарҙың барлыҡ көсө Ишем солтан менән Өпә яуына киткән ваҡыт һайланған. Әсир итеп тик йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙы һәм бәләкәй малайҙарҙы ғына алырға ҡушҡан. Талап алынған малдарҙы Иберҙә слободаларҙа нығынған урыҫ воеводаларына ҡоралға, кейем-һалымға алыштырырға бойорған. Был турала күрһәтмә уларға бирелгән, тип хәбәр иткән Хо Өрлүк иртә яҙ көнө. Үҙе бик ҙур диңгеҙ башынан йыраҡ тормай. Алда даръя кеүек оло йылға, әммә унда бик көслө халыҡ нуғайҙар бар, тигән.

Тубылдың аръяғында торған дербеттәр менән яҡындараҡ тупланырға фарман килгән. Сәбәбен белмәйҙәр. Өрлүктән хәбәр-фарман килеүенә ҡояш инде ун тапҡыр батҡан. Йыйыныуға тағы ла ике-өс тапҡыр батасаҡ. Боғла менән Һомба әлекке саңлау ерендә йәшереп ҡуйған ҡайыштарын алырға килгән икән. Ә Алаҡшан уларҙан алда килеп ҡайыштарға хужа булырға хыялланған. Ҡалмаҡтар араһында болаш һәм һуғыш сығып китә. Һуңлап күреп ҡалалар Үтәғол менән Сапҡын егеттәрен. Аттарына менеп ҡасып ҡараһалар ҙа, баҫтырып етешеп, боғалаҡ ташлап, аттарын да, үҙҙәрен дә тотоп алалар. Әсир ҡалмаҡтарҙан һорау алып, төрлө уйҙар, фекерҙәрҙе берәмләп тикшергәндә, Муйнаҡ бәһлеүән дә ҡаҙаҡтарҙың Кесе Йөҙ, ете ырыу ҡәбиләһенең жағалбайлы, Теләү, Табын, Тама ырыуҙарының берләшмә көсөн Ҡурпыш батырҙары етәкселегендә әйәртеп килтерҙе. Үҙ-ара оҙаҡ фекерләшкәндән, бәхәсләшкәндән һуң ҡарарға килделәр.

Беренсенән, беҙ уларҙың нисә һуғышсыһы барлығын белмәйбеҙ. Тура ғына яуға өҫтәренә ташланғанда, улар әҙерләнеп өлгө-

рәсәк. Нимә тиһәң дә, аралыҡ йөҙ саҡрым самаһы. Уларҙың да алғасҡылары барҙыр. Хәбәр итерҙәр, бөтәһе лә әҙерләнеп, аяҡҡа баҫырҙар. Туранан-тура ташланыу яҙыҡ булыр, тип һығымта яһанылар.

Ике ҡәбиләнең көсөн бер ергә юҡҡа тупламайҙарҙыр, ләкин быны башҡартырға һис ярамай. Дербеттәргә яҡыныраҡ булыр өсөн уларға Тубыл аша сығырға кәрәк бит. Меңәрләгән йөклө арбаларын сығарыу өсөн һалдар кәрәк буласаҡ уларға. Хәҙер уларҙы әшләйҙәрҙәр ҙә инде. Һалдар әҙер булыу менән күсенә башлаясаҡтар.

Төп ҡараҙы бер һүҙҙән ҡабул иттеләр. Ҡалмаҡтар урындарынан ҡуҙғалып, Тубылға юлланғас, һиҙҙермәй генә арттарынан барырға. Ара һуңғыларынан 18–20 саҡрымдан да йыраҡ булырға тейеш түгел. Ә алғасҡылар уларҙы далала күҙ-һан айырмалы ерҙән оҙата барырға тейеш. Тубылға еткәс, атлыларҙың артыһы, әлбиттә, йөҙөп ҡаршы ярға сығыр. Дөйәләр, ат-арбалар, тирмә, әйбер-ҡаралар тейәлгән һалдар ҙа арғы яҡҡа сыға башлар. Беҙҙең әсирҙәрҙе алдан да сығармаҫтар, аҙаҡҡа ла ҡалдырмаҫтар. Йылға аша сығыуҙың урта өлөшөндә тейәрҙәр уларҙы һалдарға. Атлы ғәскәренең артыһы сығып, тәүге һалдар тейәлеп бөтөүгә, күмәк көс менән ҡапыл өҫтәренә ташланырға ла ҡыйратырға. Арғы ярҙағылар кире сыға алмаҫ. Ярҙамға сығырға ташланғандарын ҡаршы алырбыҙ, арба ылауҙарын ярға ҡуйып ҡамарбыҙ ҙа, сыҡҡан береһен сапҡысларбыҙ. Ҡалмаҡтарҙың торҡалары ла, һаймандары ла юҡ. Һөңгөләренең һабы ҡыҫҡа, ҡылыстары ла төрлөсә. Һуҡма ла, тартма ла, шешке ҡылыстар ҙа бар уларҙа. Үҙҙәре тимер һуҡмағас, бөтә ҡоралдары улъянан тора. Ҡылсығаларҙың (кольчуга) һәм тәңкәле һаймандарҙың йә еңһеҙен, йә еңе ҡыҫҡа булғандарын кейергә кәрәк. Еңелерәк булыр. Ҡылыстарҙың да еңелдәрен алырға. Төп алым – яртыға ҡалған көстәрен урап алыу һәм юҡ итеү. Әсирҙәрҙе азат итеү, мал-тыуарҙы бөтә кире ҡыуырға, барлыҡ әйбер-ҡараларын талап алырға. Үҙебеҙҙекеләрҙе кире ҡайтырырға. Ҡалмаҡтар Тубылға терәлгәс, ҡатай Ҡотҡойҙо, барындар Айшан менән Тайшан, ҡара табын батыры Ҡалҡаман, тура, йөҙгә-йөҙ, ә ҡаҙаҡ Ҡурпыш һулдан, Аҡтай нуғай уңдан ташланырға һүҙ беркетте. Ҡара Табын батыры Бүре солтан йәше оло булғанлыҡтан, был яуға сыҡманы. Улы Байрамбирҙене, ейәндәре Хажиәмәт менән Аҡмәнбәтте ебәрҙе меңлеге башында. Муйнаҡ, Байрамбирҙе һәм Килдеш үҙ меңлектәре менән артта, һағауылда һәм алыштың һәр бер һүлпән еренә ярҙамға килер өсөн аҙ ғына артта барасаҡ. Иртәгәһен өйлә намаҙы етмәҫ борон уҡ сапҡындар килеп хәбәр һалды. Таң менән ҡалмаҡтар Ҡамышлы Аят йылғаһын кисеп, Тубылға йүнәлде. Башҡорттар туҙ борғо менән юлға сығыу

өсөн оран уйнаны. Арбалар, әйбер-ҡараларҙы шул түпһәлдә ҡалдырырға бойорҙолар.

Ҡамышлы Аят йылғаһы менән Тубыл араһы ла йөклө арбаға көн ярымдай ерҙә ята. Оҙаҡ та үтмәне, күп меңле атлы ағыҙма теҙелешеп юлға сыҡты. Һөйләшкән аралыҡты тотор өсөн башта ҡыҙыу ғына юртһалар ҙа, көн кисләүгә сапҡындарҙың хәбәрен көткәс кенә тиҙлекте йә кәметтеләр, йә бер аҙ шәбәйттеләр. Бара торғас, ҡараңғы төшөрҙөләр. Береһенә лә ут яҡмаҫҡа бойорҙолар. Һәр башлыҡ үҙ кешеләре янында төн үткәрҙе. Таң атыуға борғоһоҙ ғына тороп, аттарына менделәр. Сапҡындар ҙа ҡалмаҡтарҙың төн ҡуныуҙары, ә хәҙер Тубылға юлланыуҙары тураһында хәбәр килтереп, кире сапты.

Төш етеп килгәндә, һаҡсы сапҡын килеп, алда ҙур һыу, урыны-урыны менән, бигерәк тә бирге яры ҡамышлы булыуы һәм ҡалмаҡтарҙың бер урында түгел, ике урынға тупланыуҙары тураһында әйтте. Хәҙер арғы ярға атлыларының нисә өлөшө сығыуын беләһе ҡалды. Бирге яҡ ҡамышлы булғанға, бөтәһе лә асыҡ күренмәне. Сөнки Тубылдың бөгөлөп аҡҡан ере ҡалмаҡтарҙы ҡапланы. Шуға ла күҙәтеүселәрҙе түбәнгәрәк ебәрҙеләр. Алда, киңлеге саҡрым ярым самаһы булыр, тәрән, оҙон, бер осо Тубылға, бер осо икһеҙсикһеҙ далаға кереп киткән ҙур үҙәк ята. Бөтә башҡорт ғәскәре шул уйһыулыҡҡа төшөп, ташланыу өсөн хәрби сафҡа теҙелде. Ҡояш ҡибланы үтә башлағанда, күҙәтеүселәр сабып килеп, һөрән һалды. Баҡһаң, оҙон ҡамышлыҡтар уртаһынан ике һөҙәк кисеү булған икән. Байтаҡ ҡалмаҡ һыбайлылары йылғаны аша сығып, усаҡтар яғып та ебәргән. Кисеүҙәрҙә шау-шыу тынмай. Аттар кешнәшә, йәмһеҙ итеп ишәктәр ҡысҡыра, һыйыр малдары үкерешә.

Сафтар теҙелешеп бөткәс, башлыҡтар бөтәһе лә юл аттарынан төшөп, һуғышҡа керә торған тыныс, йөрәк аттарына менеп, бөтә ғәскәр алдынан йөрөп сыҡты.

– Ағайҙарым, ҡустыларым, ҡандаштарым! – тип ҡысҡырҙы Тайшан. – Еребеҙ, илебеҙ, таланған, хурланған халҡыбыҙ өсөн ҡон алырға ваҡыт етте! Дошман беҙҙе аямай, талай, үртәй. Еребеҙҙе тартып алырға, үҙебеҙҙе үлтереп бөтөргә уйҙары. Юҡ, уға ирек бирмәбеҙ! Дошманға үлем! Үлем!

Айшан да, Тайшан да, Ҡотоҡай ҙа ҡындарынан сыңлатып ҡылыстарын һурып сығарҙы.

– Ил өсөн, балаларҙың азатлығы өсөн, Уралыбыҙ өсөн! – тип ҡысҡырҙы Тайшан. Меңәрләгән тауыш уны күтәреп алды, алға ынтылған меңәрләгән ат тояҡтары аҫтынан ҡом аралаш ваҡ кәҫтәр осоп, ямғыр булып һуғышсылар өҫтөнә ҡойолдо.

Тубылға етмәҫ борон ҙур үҙәклеккә тупланған меңәрләгән һуғышсыларҙың ҡапыл ер аҫтынан килеп сыҡҡан кеүек йән-фарман

сабып килгән теҙмәләренә, йылға аша сығыусыларҙы ғәмһеҙ генә күҙәтеп торған ҡалмаҡ һуғышсылары аңдарына килә алмай бер ни тиклем ҡарап торҙо ла, араларында сыуалыш башланды. Ниндәйҙер бер саф алып, ҡаршы сығырға ваҡыт ҡалманы. Ул арала Тайшан, Айшан һәм Ҡалҡаман төмәне ҡалмаҡ өйкәмдәре өҫтөнә килеп тә етте, сапҡыслашыу ҙа башланды. Үҙ-ара ҡысҡырыш, һәр кем үҙ телендә орош, тимер-ҡорос сыңлауы, яралыларҙың ыңғырашыуы һәм башҡа әллә ниндәй йәмһеҙ тауыштар менән дала тулды. Айшан: «Ҡалҡаман! Егеттәрең менән ҡалмаҡтарҙы йылғанан айыр», – тип ҡысҡырып та өлгөрмәне, уңдан яр буйлап нуғай Аҡтай, ә һулдан ҡаҙаҡ Ҡурпыш батырҙың һыбайлылары ҡалмаҡтарҙы йылғанан айырҙы. Ҡаршы ярҙағы бер нисә меңлек ҡалмаҡ атлылары ярҙамға, йылғаны кире сығырға һыуға ташланды. Ләкин, һөйләшеү буйынса, Аҡтай нуғайҙары кейеҙҙәр менән ябылған ҙур бейек арбаларҙы ярҙан йылғаға тәгәрәтеп төшөрөп, кисеүҙе бөтөнләйгә биклəп ҡуйҙы. Йылғаға бикләнгән һыбайлыларҙың ҡайһыһы ҡамыш күтеренә батты, ҡайһыһы түбәнгә аҡты, ә байтағы кире йөҙҙə ине инде. Береһе лə аттарынан төшөп, йәйәүле килеш һуғышҡа инергə теләмəне. Атһыҙ һуғышыуҙы күҙ алдына ла килтерə алмай ине ҡалмаҡ. «Йəйəүле ҡалмаҡ һуғышсы түгел, ə байбаҡ», – тигəн ҡарттайҙар.

Ҡалмаҡтарҙың бисə-сəсəләре, бала-сағалары йə арбалы аттарында, йə йəйəүлəп далаға таралып ҡаса ине. Бер-береһенə ҡыл арҡандар менəн бəйлəнгəн башҡорт əсирҙəре үҙ арбалары аҫтына йəшеренгəн. Ян-яҡтан ҡамап алынған ҡалмаҡтар йəн аямай һуғышһалар ҙа, ярлыҡау һорағандай, аяныс тауыш менəн ҡысҡыра, һаман да уңлы-һуллы һелтəнə. Ҡотҡойҙо менəн Айшан араһын дəррəү һөжүм итеп, ҡалмаҡтар ҡуласаны өҙҙө лə, шул аралыҡтан быуанан ҡотолған һыу шикелле атылып сығып, таралып һуғыша башланы. Шул саҡта ҡуласа айырылған ергə Байрамбирҙе атлылары йомолдо, ə Килдеш яланға сыҡҡандарын баҫтырырға тотондо. Ҡуласа эсендə ҡалғандар аяуһыҙ ҡысҡырышып, Айшан менəн Ҡурпыш араһын өҙҙө. Үҙ һуғышсыларын əйҙəп алға ташланған Айшанға йыуан ҡалмаҡ ҡыҫҡа һөңгөһө менəн арҡаһына сəнсте. Бəхетһеҙлеккə ҡаршы, ҡалмаҡ ҡулында беҙ һөңгө булып сыҡты. Һөңгөнөң оҙон нəҙек беҙе дүңгəлəклəп эшлəнгəн ҡылсығаны киңəйтеп, һул ҡулы аҫтына тəрəн, бик тəрəн кергəн ине. Атынан йығылып төшөп, шунда уҡ йəн бирҙе Айшан. Унлаған егет һуғыштан айырылып, Айшандың йəнһеҙ кəүҙəһен буш арба өҫтөнə күтəреп һалды ла, оҙон һөңгөлəрен алып, йəйəүле килеш сəнсешергə тотондо. Байтаҡ егеттəр арҡаға арҡа терəп тигəндəй тороп, оҙон һаплы һөңгө менəн йəйəүлəп һуғышыу уңышлыраҡ икəнен күреп, ҡайһы береһе ҡул һуғышы ысулына күсте. Ҡурҡыуға, ҡамауға дусар булған ҡалмаҡтар аттарынан төш-

мәне. Нисек тә булһа ат өҫтөндә ҡасыу ине уйҙары. Оҙаҡ сапҡылаштылар. Ҡысҡырыуҙар, ороштар тынған арала тик тимер сыңлауы, ыңғырашыуҙар ғына ишетелһә, ҡапыл ҡәтғи фарман өндәмәләре, йә аяуһыҙ эҙергәләнеү ауаздары менән тула ине һауа. Ул осорҙа бирелеүҙең, еңелеүҙең билдәһе ике ҡулды ла күтәреү икәне ғәҙәти түгел ине. Тамам ҡыйралыуға, үлемгә дусар булған ҡалмаҡтарҙың күбеһе аттарынан төшөп, берҙәм ҡеүәттең ҡылысынан йә ат аҫтына йәшеренде, йә яҙмышына буйһонып, ҡоралдарын ташлап, ергә ятты. Тапалдылар, киҫелделәр, сәнселделәр. Икенде намаҙы етеүгә Тубыл яры меңәрләгән үле һәм яралы һуғышсылар һәм аттар кәүҙәләре, емерек арбалар, туҙған ҡоралдар менән тулды. Тере ҡалып, ҡуласанан сыға алған ҡалмаҡтар Тубылға ташланды. Ярһыған, еңеү тойғоһон кисереп ҡыҙған, берләшкән көс һуғышсылары ҡалмаҡтар артынан бер тотам да ҡалмайынса, арттарынан һыуға керҙе. Тубыл тыныс ҡына ағыуын белде. Ҡаршы ярға ынтылып йөҙөп барған меңәрләгән ат өҫтөндәге һуғышсылар һыу өҫтөндә сәнсешә. Ҡыҫҡа һаплы ҡалмаҡ һөңгөләре бында ҡорал була алманы.

Башҡорт егеттәре өсөн һыу өҫтөндәге һуғыш еңел табыш булды. Күп, бик күп ҡалмаҡ кәүҙәләре аҡты түбәнгә. Арғы ярға йыйылған бер нисә мең ҡалмаҡ уҡтар менән атырға яр буйына килһәләр ҙә, һыу өҫтөндә буталып бөткән һуғышсыларға атыу, үҙҙәренең яугирҙарын да үлтереү ине.

Бөтә һыу өҫтөн ябып, күҙ күреме ерҙе ҡаплап алған кеүек күренгән һыбайлыларҙың йылға аша йөҙөп килеп сыға башлауҙарын туҡтатып булмаясағын күреп, яҡындан тороп төҙәп берәр уҡ аттылар ҙа, аттарына менеп, далаға ҡастылар.

Бөтөнләйгә ярҙамсыһыҙ, ярҙан яҡлаусыһыҙ ҡалған ҡалмаҡтарҙың бөтәһе лә тиерлек берләшкән көстәр ҡылысы аҫтында баш һалды. Ил баҫыуҙы, халыҡтарҙы, тотош милләтте ҡол итергә ынтылыусыларға, ҡол иткәндәргә тарих ҡасан да булһа үҙ хөкөмөн сығара. Ҡалмаҡтар менән дә шулай булды.

Был алышта шулай ҙа тағы ла бер юғалтыуға дусар булды башҡорттар. Ҡаҙаҡ Ҡурпыш, ҡатай Ҡотҡой, нуғай Аҡтай яраланды. Тубылды аша йөҙгәндә, тиҙерәк арғы ярға сығырға өндәп алға ынтылған Тайшандың муйынына ярҙан тоҫкап атҡан уҡ ҡаҙалды. Торҡа септәһе елкәһен, ҡулбашын ҡаплаһа ла, алғы яғы асығыраҡ ине. Йәймә, ҡырҡма башаҡлы уҡ алҡымына сәнселеп, ҙур ҡан тамырын өҙҙө. Ат өҫтөндә тигәндәй йән бирҙе Тайшан да. Уны аты ҡаршы ярға алып сыҡҡанда, ярҙағы ҡалмаҡтар йән-фарман ҡаса ине. Арттарынан ҡыуманылар. Шулай бөттө һуғыш. Кем йөҙөп, кем уң ярға теркәлгән халдарға әйбер-ҡара, ҡалған ҡоралдарҙы, яралыларҙы, шәһиттәрҙе тейәп, кире һул ярына сыҡты Тубылдың. Яралыларҙы йыйҙылар, мөмкин тиклем ярҙам күрһәт-

теләр. Арбаларға ҡалған әйбер-ҡара, ҡорал, яралыларҙы тейәп, улъя аттарын егеп, оҙатыусылар, наҡсылар ҡуйып, һәр береһен илдәренә оҙаттылар. Шәһит булған һуғышсыларҙы мосолман ғөрөф-ғәҙәтен еткереп, ергә бирҙеләр. Ҙур маҙарлыҡ барлыҡҡа килде. Аҙаҡ, йөҙәр йыл үтеүгә ҡарамаҫтан, Тубыл буйына Елҡыуар маҙарлығына зыярат ҡылырға, аят уҡытырға йөрөнөләр. Елҡыуар маҙарлығына кем, ниңә шундай исем биргәндер, билдәһеҙ. Әммә меңәрләгән ҡәберлектәргә таш та, ағас та табып билге ҡуйыу мөмкин түгел ине. Унарлаған йылдар үтте. Дала еле, ҡом, балсыҡ, үлән ҡалдыҡтары менән ҡәберлектәрҙе яйлап ер менән тигеҙләне. Хәҙер ул ерҙәр Ҡаҙағстан ере. Ҡаҙаҡтар хәтере уны нимә тип һаҡлағандыр, әммә иҫле барындар өсөн ул бөгөн дә Елҡыуар тигән ер. Елҡыуар маҙарлығына зыярат ҡылыр өсөн ялан ҡатайҙар ҙа, тәңрелектән ислам тәғлимәтенә күскән Иберле мосолмандары ла, беҙҙең көнсығыш табындары, бигерәк тә барындар йыл һайын йөрөнө. Нуғайҙарҙың бер өлөшө христиан диненә күскәс, ул ғәҙәттәрен онотто. Исламда ҡалған бер өлөшө, Ҡазан аръяғы Мищеры буйынан килеп, Исәт, Мейәс һыуҙарының урта һәм түбәнге уйһылыҡтарына ултырған мосолман мишәрҙәргә ҡушылды, улар әсендә тарҡалды.

Ырыу башлыҡтарын юғалтмағас, күбәләк-тиләүҙәр, ҡара табындар ҙа башта әүҙем йөрөһәләр ҙә, тора-бара улар һүлпәнәйҙе, быуындар алмашынды. Аҙаҡ, ҡалмаҡтар был тирәнән киткәс, ҡаҙаҡтар менән мөнәсәбәт бер ни тиклем ҡатмарлашты. Барымта, алымталар йышайҙы. Шулай ҙа ташламаны барындар Елҡыуар маҙарлығына зыярат ҡылыуҙы, бағышлап аят уҡытыуҙы. Был шөғөл йөҙ егерме-йөҙ утыҙ йыл буйы ғөрөф-ғәҙәт булып торҙо. Яҙ етеп, күк үлән сығып, ҡонандар туйынғас, Әүеш тауында әүлиә һыуын әсеп, әүлиәләр ҡәберлегенә зыярат ҡылғандан һуң, Елҡыуар маҙарлығына юлланыр булдылар. Тик урыҫ дәүләте тамам баҫып, Ур йылғаһынан Исәткә тиклем ҡәлғәләр төҙөп, Өстамаҡ (Троицк) торағын баҫып алғандан һуң ғына был ғөрөф яйлап һүрелде. 1735 йылғы ваҡиғалар ҙа хәтерҙе юйҙы.

Айшанды ла, Тайшанды ла ҙур арбаларға кейеҙ өҫтөнә һалып, яй ғына алып ҡайттылар. Ҡалмаҡтар тарафынан туҙҙырылған, емерелгән, таланған, яндырылған төп тораҡ, аталары Буғай хаким ултырағы Алтынташҡа килтерҙеләр. Шунда уҡ үҙенән-үҙе ырыу кәңәше барлыҡҡа килде. Муйнаҡ бәһлеүәнде баш иттеләр. Ул да хәҙер алты тиҫтәне сискән ине. Табындарҙа боронғо ғәҙәт буйынса ырыу башлыҡтарын, ҙур батырҙарҙы, уҡымышлы зиһенлеләрҙе, билдәле әүлиә, ахундарҙы дөйөм маҙарлыҡтан ситкәрәк, барлыҡ ғәмдең иғтибарын йәлеп иткәнерәк ергә ерләү ғәҙәте йәшәп килде. Төрки донъяһынан алынған был ғөрөф Көнбайыш һәм Азия илдәре тарафынан да ҡабул ителде.

Күңеле һәр саҡ асылып бармаған йомоғораҡ Муйнаҡ ырыу башы итеп һайланыуына бер ни тиклем һис өндәшмәне. Уның әллә риза, әллә риза түгеллеген иң алда берәү ҙә аңламаны. Тик Өмөтбай имам менән бер ни тиклем кәңәшләшкәс кенә Муйнаҡ уға һүҙ бирҙе. «Уландарым! Хәҙер һеҙгә беҙҙең фекерҙе имам әйтер», – тине.

Урта буйлы Өмөтбай имам еләненең ҡаптырмаларын ысҡындыра-ысҡындыра алғараҡ сыҡты. Ул башына Бохара муллалары кеүек сәллә һалманы. Йәй көнө һәр саҡ түбәтәйҙә, яҙ һәм көҙ ҡырпыу бүрек йөрөттө. Тик ҡышҡы һалҡын көндәрҙә генә ҡолаҡсынһыҙ, бит һәм елкәне япмалы төлкө бүрек кейҙе. «Ағай-эне, уландар! Илебеҙ тағы ла яу күрҙе. Тағы ла еребеҙ, илебеҙ өсөн күп кенә арыҫландарыбыҙ баш һалды. Уларҙы иҫләп доға ҡылайыҡ», – тип, бик оҙаҡ доға-сүрәләрен уҡыны. Доға ҡылынғас, яңы хакимға ыңғай юл, ыңғай ел теләне. Тағы ла доға ҡылдылар. Артабан Өмөтбай мулла үҙ-ара татыулыҡ, берҙәмлекте нығытыу, юғалып кире килгән мал-тыуарҙы һәм улъя булып алынғандарын да ғәҙел генә бүлешеү турала вәғәз ҡылды. Телмәренең һуңында үҙ-ара ерһыуға болашмаҫ өсөн ике оло бәһлеүән ырыу башына иғтибар һәм ихтирам йөҙөнән балаларының, зат-зәүерҙәренең ҡылған эштәренә ҡарап, баһа биреп ятыу өсөн боронғо йолабыҙ буйынса ерҙәребеҙҙең сиге үткән күркәм Ҡомас тауыбыҙ башына кәүҙәләрен бирергә тәҡдим итте. Тәҡдимде барыһы ла хупланы. Муйнаҡ хаким ҡыҫҡа ғына итеп, ләкин бойороҡло тауыш менән эшләй торған барлыҡ хужалыҡ эштәрен һанап әйтте. Хәбәрсе, ҡарауылсапҡын хеҙмәтен боронғо ултыраҡ Өстамаҡҡа, хәҙерге Троицкиға тиклем тергеҙҙе.

Иртәгәһен барлыҡ ир-ат ике арбаға һалынған Айшан менән Тайшан кәүҙәләрен Ҡомас башына оҙата китте. Ерләнеләр. Яҙыулы таш ҡуйҙылар. Тарих сәғәте был осорҙа 1616 йылды күрһәтә ине. Был яуҙан һуң ҡалмаҡтар илле булыр өсөн көнсығыш башҡорттарына ҙур яу менән килеүҙән баш тартты. Урыҫ дәүләте менән солохҡа килеп, Булыға тамағындағы Һары һыу, Сары сыу, Ҡарицын (Сталинград) булып киткән ерҙәрҙә йәшәгән төркиҙәр, төньяҡ Ҡаф тауҙары, Тын буйындағы халыҡтар менән даулашты, һуғышты. Ҡайһы саҡта дала буйлап күсеп йөрөгән вағыраҡ ырыуҙары менән сыуалыштар булып торҙо башҡорт илендә, әммә былары ҡурҡыныс түгел ине. Яуға бармағандар Шәһитүбәлә шәһит булған 150 һуғышсыны Асы йылғаһы аръяғына, кисеү ҡаршыһына ерләгәндәр ине. Эре ҡайынлыҡ ине ул ер әлек.

Һуңғараҡ Алмаҡай ҡәберлеге өҫтәрәк ултырған Яратҡол ауылы ҡәберлегенә әйләнде.

Шәһитүбәлә ер тапҡан ике йөҙләгән ҡалмаҡ кәүҙәһе сереп, һаҫыҡ еҫ сығарып, тик һөйәктәре генә унда-бында үлән араһында

ята ине. Шәһиттәр түбәһен бысратып ятмаһын өсөн күрше түбә соҡорона йыйып ауҙарҙылар һөйәктәрен. Шул осорҙан бөгөнгө көнгә тиклем ул түбә «Һөйәктүккән түбәһе» тип атала. Йөҙ илле ҡарт һуғышсы башын һалған Шәһитүбә менән ике йөҙ ҡалмаҡ һөйәге өйөлгән Һөйәктүккән түбәһе араһынан Ҡомас үңеренән килгән Шишмәлек йылғаһы Асыға ҡоя. Үҙәне батҡыл, мәтеле, ул ваҡытта ҡамышлы ҡуйы үлән менән ҡапланған була. Шул ҡамыштар араһынан 150 ҡарт һуғышсының әләме лә табыла. Әләм Табын ҡәбиләһенең, бәлки, боронғо Табын ҡағанатының әләме булғандыр. Ҡалын киндер туҡымала – ҙур ҡояш, ә сәсмә нурҙары бөтә әләм битен япҡан. Ҡояштың өҫкө ситенә Тәңре хан, ә түбәндә Ирәмәле (Ирәмәл) тауының һүрәте төшөрөлгән була. Тәңре хан тауы Алтайҙың иң бейек тауы булһа кәрәк. Сығанаҡтарҙа миңә осраманы был исем. Әләмде Айшан менән Тайшан ҡәберлеге янында үҫкән ҡарағасҡа беркетәләр. Оҙаҡ тора ул. Күрәһең, туҙа, ел-дауыл, ямғыр ҙа серетҡәндер. Тик ҡарағас ҡына Әләм ҡарағасы исемен алып, тағы ла 150–160 йыл йәшәй әле. Әләм ҡарағасын да 1773 йылда яндыра карателдәр. Байраҡ булып халҡын азатлығы өсөн көтәргән Йосоп Арыҡов, Бәпәнә, Аҡҡужа батыр, Юлдаш мулла, Төлкөсура, Биктимер Уразаев, Аҡай батырҙарҙан ғына түгел, Әләм ҡарағас та шом һала баҫҡынсылар күңеленә. Халыҡ хәтере яйлап уны ла онотто. Урынына тимер маяҡ ҡуйҙылар. Ул да серене. Тик әләм табылған үҙәк кенә һаман да Әләмүҙәк булып халыҡ хәтеренән юйылмаған.

Айшан менән Тайшан исемдәре яҙылған таш-хәтер 119–120 йыл ятты. 1735–1740 йылдарҙағы ихтилал осоронда урыҫ империяһы карателдәре тереләрҙән генә түгел, зыяраттарҙан да үс алды. Айлы һәм айһыҙ таштарҙы емерҙеләр, ваттылар, ағаслы зыяраттарға үрт һалдылар. Шул осорҙа Айшан менән Тайшан ҡәберлеген мыҫкыл итеүҙән һаҡлап, ул таштарҙы ҡарттайҙар шул тирәгә, йә ҡәбер аҫтындағы бик ҙур ҡаялыҡ аҫтына шишмә янынараҡ күмгән. Шундай ауаз ҡолаҡта ҡалған бабайҙар ауыҙынан. Был юлдар авторы ағайҙары, дуҫтары менән эҙләп тә ҡараны ул таштарҙы. Тыуған ерҙең йомшаҡ тупрағы үҙ ҡуйынында әле лә һаҡлай уларҙы.

* * *

Табындар, иберлеләр, нуғайҙар, ҡазаҡтар ҡайтып киткәс, Ишем солтан етемһерәп ҡалды. Ҡыркыу, үҙ-үҙенә ышанған, ваҡыты менән тәкәббер булған Ишем солтан йыуашайған кеүек күренде. Биргән әмер ауаздарында ла ҡырҡылыҡҡа ҡарағанда кәңәш ишетелде. Бер йома тирәһе үҙ-үҙенә урын таба алманы. Йә ғаиләһе, ҡатындары, балалары янында юҡ. Ҡайтып киткән улы

Аблайҙың һәм башҡаларҙың яҙмышын белмәү тырнай ине күңелен. Ҡалмаҡтар һары һаҡалдар менән берләшеп, беҙҙекеләр ҡайтып еткәнсе ил-йортто туҙҙырмаһалар ярар ине, тип бик бошондо ул. Әллә кире ҡайтып китергәме, тигән фекер башына килһә лә, тиҙ генә ул уйҙарын ситкә ҡыуҙы. Янында булған әйле Тайыш, ҡыуаҡан Арҡалаш батырҙар, ҡурҡыу белмәгән ауанираҡ сәркәш Тәүкил күңелен йылытты. Солтандың ышанысы ла, таянысы ла ине улар. Аҙна-ун көн бөтә ғәскәр хужалыҡ эштәре менән мәшғүл булды. Ҡәлғәне нығыттылар, аҙыҡ-түлек, кәрәк-яраҡ, ҡорал әҙерләнеләр, төҙәттеләр. Яҡын-тирәгә сығып, ер-һыу һәм халыҡтар менән таныштылар. Тирә-йүндән бер аҙ хәбәр һәм белешмәләр йыйғас, Ишем хан үҙенә тоғро булған Көнсығыш Урал алды кешеләренән башҡа һәр ҡәбилә, ырыу баштарына саҡырыу-өндәмәләр яҙҙы. Быныҡ өсөн ул алдан эш алып барҙы. Тирә-яҡтағы йөҙ саҡрымдай ерҙә йәшәгән барлыҡ зиһенлеләрҙе, муллаларҙы, уҡый-яҙа белгәндәрҙе ҡәлғәгә саҡырҙы. Мул итеп ашһыу әҙерләп, ҙур табын ойоштороҙо. Шул табында үҙенең «Халайыҡтарға өндәүнамә»һен уҡыны. Берәүҙе лә әлегә көсләмәне. Кемдәр шунда уҡ өндәүнамә менән ризалаша, шуларҙың исем-шәрифен айырым теркәтте.

Уйланғандарына ваҡыт бирҙе, өндәшмәгәндәренә һүҙ ҡушманы. Халыҡ араһына сығып өндәүнамә уҡырға риза булғандарҙы һарайында ҡалдырҙы. Бындайҙар егермегә яҡын кеше булып сыҡты. Тағы ла бер нисә көн үҙ дәғүәттәрен төшөндөрҙө солтан. Унан һәр береһенә юл йыһаздары, ун бишләгән ҡораллы нөгөр биреп, ян-яҡҡа юлландырҙы. Вәзирҙәр һәр тарафҡа юл алғас, Беүә, Танып башынан, Сулман уйһыулығынан ғәйнәләр, таныптар, Төй, Ҡариҙел буйынан балыҡсылар һәм ундар килде. Ишем хан барыһына ла үҙ сәйәсәтен төшөндөрҙө. Ишем хандың «Халайыҡтарға өндәүнамәһе»нең төп асылы түбәндәгесә булды.

Ибер – Урал урҙаһын төҙөп, төрки халыҡтар дәүләтен булдырыу. Алтайҙан Оло Иҙелгә тиклем ерҙәрҙе берләштереү. Баш мәркәзе – ҡарттаһы Мортаҙа хан тораҡ-ҡәлғәһе Өпә ҡалаһы. Был бурысты тормошҡа ашырыу өсөн тәүге ҙур эш – Өпә ҡәлғәһен нығытыу, киңәйтеү, тирә-яғына күп халыҡтар ултыртып, һәр төрлө сәнәғәт эштәрен йәйелдереү. Үҙәк мәркәзде һаҡлау һәм тәртип тотоу өсөн һарай янында даими ҡораллы көс туплау. Киләсәктә дәүләттең һәр сигендә нығытмалар һалып, шул уҡ эштәрҙе башҡарырға хыялланды. Алыш-бireш эштәрен, баҙар мөнәсәбәттәрен тәрәнерәк өйрәнеү өсөн Сәмәрҡәнд, Бохара яғына вәкәләтлек ебәрергә уйланы. Сәнәғәттең һәр төрөн ырыу, йорттар араһына бүлеп бирмәксе ине. Берәүҙәр тик тәгәрмәс, арба-сана эшләһә, икенселәр тимер иретер, өсөнсөләр буҫтау һуғыр... Мәсет-мәҙрәсәләрҙә, ислам тәғлимәтенән тыш, иҫәп-

хисап, хәритә өйрәнеү, дауалау алымдарын халыҡ араһына таратыуҙы ла маҡсат итеп ҡуйҙы. Атаһы Күсем хан, ағаһы Тура хан тәҡдиме буйынса, ҡустыһы Сыуаҡ хан менән Бохарала, унан һуң Тәмәскәлә (Дамаск) уҡыны, ғилем нигеҙҙәрен үҙләштерҙе.

Ишем хан Өпә янында Тәмәскәләге кеүек бик ҙур баҙар булыуын теләне. Һатыу итеү эштәре менән шөғөлләнеү өсөн оло һыуҙарҙа йөҙөп йөрөгән ҙур кәмәләрҙе лә күҙ алдына килтерҙе.

Ибергә килгән һары һаҡалдар, үҙҙәренең слободаларынан иркен сығып йөрөй алмаһалар ҙа, үҙ-ара әйбергә әйбер, малға мал алыштырыу менән бергә, баҡыр аҡсалар ҙа ҡулланды. Ишем хан әйбер урынына алтын, көмөш, баҡыр аҡса бирелгәнен, Бохарала ла, Тәмәскәлә лә күреп тә, үҙе ҡулланып та белә ине. Атаһы Күсем уға бер киҫет (бәләкәй тоҡсай) һипмә алтын биреп ебәреп, Бохаралағы дуҫы тәңкәләргә алыштырып биргәйне.

Аҡсаһыҙ баҙар ҙа булмаҫ микән, тип уйланы. Әммә Уралдағы алтын, көмөш сыға торған ерҙәрҙе хәтерләп, күңелен тыныслandырҙы. Текә яр яғаһын өңөп, эре таштар менән барлыҡ яҡтары ҡоршап эшләнгән ер зинданға кереп, оҙаҡ ултырҙы Ишем. Моғайын, шул таш тоҡта ултырғандыр ағаһы Ғәли хан. Аҙ ғына, аҙ ғына өлгөрмәне ул ағаһын ҡотҡарырға. Билдәһеҙ, әллә бында йәнен алдылар, әллә Ҡазанға, артабан Мәскәүгә алып киттеләр. Бәлки, шарт ҡуйып, алмашҡа килтереҙәр... Шулай ҙа Мәскәү батшаһы менән әлегә солох төҙөү маҡсатҡа ярашлы булыр ине. Ун-ун биш йыл солохта йәшәп булһа, дәүләтте төҙөп-нығынып та өлгөрөр ине Ишем! Шундай уйҙар менән зиндандан сыҡты ул. Ҡәлғәнең, тирә-йүндең именлеге өсөн яуаплы Әйле батыры Тайыш өс кешене әйәртеп солтан һарайы алдына килтерҙе лә, үҙе эскә үтте.

Ҡыуаҡан ырыуынан килгән сапҡын-хәбәрселәр ине былар. Сапҡындарҙың хәбәренән солтанға барлыҡ ваҡиғалар бәйән ителде. Ышаныслы таяныстары көнсығыш табындар өсөн ҡайғырҙы ул. Айшан менән Тайшандың вафатын ауыр кисерҙе. Улы Аблайҙан, ағаһы Мәмәтҡол менән Әлейҙән хәбәр юҡлығына бошондо. Шул уҡ көндө Айшан менән Тайшан рухына ят уҡынылар. Икенсе көндө шул уҡ хәбәр менән Кесе Табын һәм Йомран Табын ҡәүемдәренән сапҡындар килде. Тимәк, Аҡ Иҙел үрләүенә Ирәмәл биләмәһе аша күскән табындар беҙҙең менән, тип ҡыуанды. Был хәбәрҙән һуң Ишем солтан Тәүкил улына бер йөҙлөк беркетеп, Иберҙәге ил-йорттоң тыныслығын белеп, ғаиләһен килтерергә бойороп, юлға сығарҙы. Өпәләге көстәрҙе туҙҙырып, мәркәзде кире ҡулға алғас, һары һаҡалдар Шимал яҡтан кире күсмәнеләрме икән Иберҙән ғәрепкә, тип уйланы ул. Көндәр бер-бер артлы үтә торҙо. Ятҡартып булһа ла әйлеләр ҙә, ҡыуаҡандар ҙа солтанға ҡайтыу кәрәклеген белдереп, хәбәр

еткерә башланы. Сәселгән тары, арпаны урыу, бесән эшләү ғаилә мәсьәләләренә ҡағылышлы кире ҡаҡҡыһыҙ дәлилдәрҙе еткерә торҙолар. Дөрөҫ һүҙгә яуап юҡ тигәндәй, яуап бирә алманы солтан әлегә. Уйланды. Тайыш менән Арҡалашты ҡайтармай тотоп булмаҫ. Улар хаҡ дәғүә ҡуя, тип фаразланы.

Тимәк, көс-ҡеүәтте бынан тупларға кәрәк. Ишем ханға көндәрҙән бер көн мең ҡәбиләһе вәкилдәре килеп, уның менән тулы фекерҙәш булыуҙарын белдерҙе. Үҙен ҡанатһыҙ ҡаласаҡ ҡарсығалай тойған ханға ҡапыл рух керҙе. Урындағы ҡәбиләырыуҙарҙың ярҙамы булмаһа, Оло Урҙа төҙөү мөмкин түгеллеген ул яҡшы төшөнә ине. Әгәр ҙә меңдәр, йәлдәктәр, ҡаңлылар менән тулы фекер тапһа, ул ваҡытта ваҡиғалар яҡшы яҡҡа үҙгәрәсәк. Көнсығыш халҡын әлегә ҡайтарып тороп булыр. Өгөт-нәсихәт менән халыҡҡа күренер өсөн уҡалы еләндәр, йөрәкһыу аттар менеп, йөҙлөктәр оҙатыуы аҫтында бер нисә ырыу йыйынына ла барып ҡайтты. Меңдәр һәм ҡаңлылар менән килешеүгә килгәс, Ишем хан әйлеләрҙе һәм ҡыуаҡандарҙы илдәренә оҙатты. Янында иң тоғро илле Ибер табындары ғына ҡалды. Күңеле тағы ла етемһерәне хандың. Әммә рух түбәнселегенә бирешмәне. Ҡәлғәгә яңы йөҙлөктәр килде. Әммә улар ҡыр эштәрен башҡарыу өсөн ун-ун биш көн һайын алмашынып торҙо. Даими йәшәргә килеүселәр әлегә күп булманы. Солтанға был мәсьәлә мөһим ине. Шулай ҙа ул ике йөҙләгән ғаиләне ҡәлғә эсенә, ҡайһыларын ситтәге буш өйҙәргә күсерә алды. Хатта менге аттарға, башҡа малтыуарға дөйөм һарай ҙа эшләй алдылар. Аҙыраҡ йән кергәндәй булды ҡәлғәгә. Әммә был ғына халыҡ уны ҡәнәғәтләндермәне.

Өпәгә халыҡтарҙы йәлеп итер өсөн тимер һуғыуҙы, ҡорал эшләүҙе, тиренән сифатлы ҡайыш етештереүҙе, дегет ҡайнатыуҙы беренсе бурыс итеп ҡуйҙы ҡыш килеүгә тиклем. Урыҫ хакимлығының алтмыш йылы эсендә урындағы тимер иретеү мейестәре күптән инде емертелеп, тимерселәре һуйып бөтөрөлгәйне. Йәш быуын был ысулды онотҡан, һандалды ла, ҡыуалдыны ла белмәй. Мәғдән сыҡҡан ерҙәр ҙә алыҫ. Күп, бик күп ине эш солтанға һәм яҡындарына.

Төрлө хәбәрҙәр йөрөнө ҡәлғә тирәләй. Үҙе Өршәк буйындағы меңдәрҙә булғанда ла ишетте был хәбәрҙе. Әлегә тиклем тыныс ҡына йәшәп яттыҡ. Болғарҙарҙағы кеүек һуйыш булмаһын тип, Иван батшаға яһаҡ түләргә ризалаштыҡ. Фәскәре күп, бик күп бит уның. Хәҙер килеп буйһоноуҙан баш тартһаҡ, утлы мылтыҡтары менән килеп атырға тотонмаҫтармы? Сәскән игенде, мал-тыуарҙы талап алмаҫтармы? Хандың ғәскәре ҡайтып китте бит. Үҙебеҙ күрҙек. Уға ышанып, ҡыйралып ҡалмабыҙмы? Беҙҙе хан ғәскәре түгел, үҙебеҙҙе үҙебеҙ һаҡларға тейешле булып сығабыҙмы?

Хандың илле меңлек ғәскәре Иберҙән ҡасан килә? Көҙгә килмәй, ҡыш, яҙ килмәй. Һүҙе хаҡ булһа, алдағы йәйҙә генә килә ала.

Шундай хәбәрҙәр ишетеп тә бошоноп ҡайтты. Әммә бирешмәне. Сапҡындар артынан ғәскәри һәм хужалыҡ эштәре тураһында фарман артынан фарман ебәрҙе. Көҙ етеүгә мең ҡәбиләһе хеҙмәт ваҡытын бер айға тиклем оҙонайтып, ике йөҙлөк ебәрҙе. Дүрт йома һайын алышына торҙолар. Шулай ҡыш үтте. Өфө воеводаһы тамам ҡыйралып, Ҡазанға, унан Мәскәүгә хәбәр еткерһә лә, Мәскәү тәхетендә батшалар алмашынып, Романовтар тәхеткә килгән осор ине. Михаил Федорович Романов 1613 йылдан уҡ батша итеп һайланһа ла, ил менән идара итмәне. Дәүләтте атаһы монах Филарет етәкләне. Был осорҙа Рәсәйҙең башҡа баҫҡынсы сәйәсәте булыу һөҙөмтәһендә улар тиҙ генә Өпәне кире яулау өсөн көстәр ебәрә алманы.

Яҙ килде. Ташҡындар баҫылғансы тирә-йүн тыныс торҙо. Әммә яҙғы йыйындар үтеү менән халыҡ араһында һәр төрлө хәбәрҙәр күбәйҙе. Ҡазан яғынан килеп, халыҡ араһында һәр төрлө ҡотҡо хәбәрҙәр таратып йөрөүсе кешеләр күбәйҙе. Уларҙың бер өлөшө урыҫ батшаһының иҫәпһеҙ-һанһыҙ ғәскәр менән Ҡазанға, унан Өпәгә юл алыуы, унан Ибергә яу менән барыуы тураһында һөйләне. Бер өлөшө урыҫ баҫҡынсыларына ҡаршы ил өсөн, дин өсөн аяуһыҙ һуғышырға, Болғарҙы азат итергә саҡырып, өндәмә уҡыны. Әммә Ишем ханға береһе лә килмәне. Урыҫ батшаһы ғәскәренең бик күп булыуы, Өпәне алғас, Ибергә китергә ҡарарҙары булыуын раҫлап һөйләп йөрөгән өс-дүрт болғарҙы тотоп солтанға килтерҙеләр. Тик береһе генә уны Ҡазандағы батша вәкиле махсус рәүештә халыҡ араһында хәбәр таратырға ебәреүен әйтте. Ә башҡалары был кешенең хәбәрен ҡабатлаусылар булып сыҡты.

Ыҡ һәм Минзәлә йылғалары янында торған хәбәрсе-сапҡындар ҙа ҙур ғәскәр килеүен дәлилләмәне. Мәскәү батшаһына еткерер өсөн солох тәҡдим итеп, Ишем хан Ҡазанға өс кешенән торған вәкәләтлек ебәрҙе. Халыҡ хәтерендә вәкилдәрҙең исемдәре һаҡланмаған. Әммә улар бер ай тигәндә икеһе бармаҡтарһыҙ, береһе ҡул суҡтарһыҙ кире килеп йығылды. Ус алырға көсө юҡ ине хандың. Ярһыны, үрһәләнде, ҡаны тамырҙарына һыймай һулҡылдай ине. Көсһөҙләгәнә әсенде. Өҫтәүенә, тирә-йүндәге халыҡтар һүлпәнәйҙе. Фарманды йә ишетмәмеш булдылар, йә иһә бөтөнләйгә яуап бирмәнеләр. Тимәк, һары һаҡалдар көс туплап тағы киләсәктәр, тип ныҡлы ҡарарға килде ул.

Халыҡта фекер айырымлығы килеп тыуып, бер-береһенә ҡаршы ике яҡ барлыҡҡа килде. Ашығыс рәүештә хан ғәскәр туплай башлаһа ла, уларҙы бер ергә йыя алманы. Һәр ырыу үҙ егеттәрен үҙ янында тотто. Ҡоралланыу ҙа, тимер һуҡҡан көнсығыштар

менән сағыштырғанда, бик түбән ине. Дөйөм ғәскәр хасил булманы. Намыҫланған, асыуы ҡабарған Ишем хан ун көн үтеүгә Иберҙән, Көнсығыш Уралдан ғәскәр килтереү ниәте менән 1617 йылдың йәйендә Өпәне ҡалдырып, кире юлға сыҡты.

Ул йылда ла килмәне һары һаҡалдар. Иберҙәге кешеләре менән Өпә шималындағы юлдарҙы ҡулландылар. Ибергә ҡорал, өҫтәмә көстәр ҙә шул юл менән барҙы. Ишем солтандың Өпә яуынан ҡайтҡанда Йәмәле, һуңғараҡ Биҙәртау, тағы һуңғараҡ Имантау (Ильмень) үңерендә күл ситендә ял иткәне, ҙур байрам ҡорғаны билдәле. Төмән, Һамар, Ҡазан воеводстволарының ярҙамы һәм ҡотҡоһо һөҙөмтәһендә ҡалмаҡтарҙың үҫәргәндәргә, бөрйәндәргә, ҡыпсаҡтарға, түңгәүерҙәргә, Урал алды табындарына һөжүме дауам итте. Иберлеләр, нуғайҙар, ҡазаҡтар ҙа был яуҙарҙан ситтә ҡалманы. Төмәндән һары һаҡалдарҙың баҫымы көсәйгәндән-көсәйҙе. Ишем солтанға азатлыҡ һуғышын алып барырға бында ла эш етерлек ине.

Киләсәктәге төп бурыс Иртыш менән Өпә (Өфө) араһындағы ерҙәрҙе азат итеү булғанлыҡтан, ваҡ ығы-зығыларҙы бөтөрөргә, төп бурысты тормошҡа ашырыу юлдарын эҙләне Ишем. Һары һаҡалдарҙы Ибер киңлегенән ҡыуып сығарыр өсөн барлыҡ халыҡтар, ханлыҡтар араһында дөйөм маҡсатҡа ярашлы Пак солох төҙөү, һәм ҡалмаҡтар менән дә, тигән төплө фекергә килде.

Остазыбыҙ Әхмәтзәки Вәлиди Туған үҙенең «Башҡорттар тарихы» исемле китабында бына нәмә яҙа: «Ишем солтан 1616 йылда Өфөнө яулап ала. Үҙенә Тубыл буйындағы иң гүзәл ер булған Аман ҡарағайҙы үҙәк итеп һайлай. Янындағы ғәскәре тик Табын ырыуынан булған. Уларҙың бер өлөшө хан менән Тубыл буйында йәшәгән. 1622 йылда Ишем хан тағы ла Ағиҙел ярына килгән. Ҡәрҙәше Ҡанай солтан да урыҫтарға ҡаршы һуғышҡан».

Ишем хан вафатынан һуң, 1630 йылдарҙа, аҙаҡ уның улы Аблай, уның улы Кесе солтандың Исәт юлы башҡорттарын һәм Ҡатай ырыуын урыҫ баҫыуынан ҡотҡарыу өсөн һаман да һуғыш алып барыуы билдәле. Уларҙың Мәүреннаһрҙағы хандар менән яҙышҡан хаттары беҙҙең заманға тиклем һаҡланған. Аблай солтандың үҙәк урҙаһы көнсығышта Ишем йылғаһы буйындағы Ҡушҡарағай исемле ерҙә, көнбайышта Башҡортостандағы Стәрлетамаҡ янындағы Торатау янында урынлаша.

Табын-Барын ҡарттарының хәтерендәге өҙөк-һурыҡ булған был ваҡиғалар башҡорт, ҡазаҡ һәм башҡа халыҡтарҙың да шул осорҙағы тарихи ваҡиғаларын аяҡҡа баҫтырыу өсөн ҙур мәғлүмәт. Оҙаҡ йөрөнө ул хәтерҙә. Берәмләп теҙелде тарих ебенә лә. Хәтерле, зиһенле ҡарттай-ҡәртнәйҙәргә гәрәбәнең һәр мәрйене өсөн олонан да оло хөрмәтебеҙ, рәхмәтебеҙ. Гүрегеҙ тыныс, йомшаҡ булһын. Беҙ һеҙҙе онотмайбыҙ!

БОЛОТТАР
ҠУЙЫРҒАНДАН ҠУЙЫРА

Сыңрап, сыңратып, торайруҡлап ҡысҡыралар ине был яҙҙа ла яманһаҙҙың ҡыҙарып ҡояш батҡан яғында торналар. Көнбайыштан, киртләс-киртләс тауҙар артынан суғырмаҡланып сыҡҡан болоттар яйлап ҡына уҡмашып, йә тетелгән йөн кеүек йоҡарып, йә таралып, бөтә офоҡто ҡаплап, нурын һүрәнләтеп иҙрәп батҡан ҡояштан эңер йотоп, йоҡоға әҙерләнгән ер менән бергә тағы ла ҡараңғылана төштө.

Алыҫтан, бик алыҫтан, ҡайҙандыр Оло Урал армытының артынан, Аҡ Иҙел, Яйыҡ, Әй йылғалары баш алған Ялпан тау, Әүәләк артындағы ер кендеге Ирәмәлдең һуҙымдары Ҡара таш, Ҡыҙҙар тораһы, Ялауҙы өҫтөнән йолҡолоп-йомарланып килгән ҡара болоттарҙы күҙәтеп, Ара тау өҫтөндә нисәмә көн инде аҒаһы Буҙаҡай, дуҫтары Насир, Аллаяр Сиран менән алмашлап һаҒауылҡарауылда тора. ТуҒаҙаҡҡа Өсөнсө көн инде алмаш килмәй. Унда, түбәндә, Яйыҡ ярындағы йәйләүҙә ни хәл булғандыр, әлегә уҒа билдәһеҙ. ҺаҒауылды ташлап китер ине – ярамай. ҺаҒауыл ташлау ҡәтғи тыйыла. Ул ҡарар аҡһаҡалдар ҡоронда ҡабул ителеп, уны ташлап китеүселәргә лә сара ҡаралған. Ул кеше, беренсенән, һаҒауыл ерен ташлаған өсөн башҡаса унда тороуҙан мәхрүм була. Ә был – халыҡ алдында ҙур мәсхәрәлек, егетһеҙлек, булдыҡһыҙлыҡ билдәһе. Ә егет булып утырып бөткән кешегә ҡыуаҡандарҙан йәрәшелгән һылыу ҡыҙы Йәмилә алдында үлемесле хурлыҡ. Ул һаҒауыл ерен ташлап киткән, тигән хәбәр бөтә йәйләүҙәргә лә тиҙ тараласаҡ. Киптереп ыҫланған ите, көлгә күмеп бешерелгән көлсәһе бөгөн бөттө. Баҡырса һауыты менән мендерелгән һыуы ла өс йотомдай Ғына ҡалды. Уның төп бурысы – йүнәлеш үткәүелдәрен күҙәтеү. Аҡкүл буйы, Ҡармыш һаҙы яҒаһын, Серәкәй һәм СаңҒалыҡ үҙәген, ике Ирәндек араһын, Аҡ тәкә тауы биләмен һәм Ҡорос кисеүе йүнәлешен күҙҙән ысҡындырмау. Шик-шөбһә булып ҙур яу күренһә, тиҙ генә, махсус ел өрмәле итеп, өйөлгән ҡоро тиҙәктәргә ут төртөү. Таш менән буралып эшләнгән был махсус усаҡ, нисәмә быуат инде үҙ тәҒәйенен үтәй. Борма-борма төтөн борҡоп бар ҒәмҒә оран тарата.

ТуҒаҙаҡ тигән исемде уҒа ҡартатаһы Амангилде биргән. Ә бына аҒаһының ысын исемен ул бер ҡасан да әйткәне юҡ. ТуҒаҙаҡ өсөн ул Аҡай. Әммә барлыҡ туғандары, ҡустылары өсөн ул Буҙ аҡай. Буҙаҡай, әле өс йәше лә тулмаған осорҙа, инәһен эҙләп ҡыштауҙан йәйләүҒә бер үҙе сығып китә лә, Оло Ирәндектең Тора Таш аҫтындағы урманына кереп аҙаша. Аҙна тирәһе ул зым-зыя юҡ була. Тик алтынсы көн тигәндә Зәйнәп ҡолҒаһы йылҒаһы шырлығында уны эттәр табып, өрөп, атаһы Иҫәнгилдегә тауыш

бирәләр. Аслыҡтан хәлһеҙләнеп, күгәүен-серәкәйҙәрҙән таланып шешенеп бөткән, инде атлар хәле лә ҡалмаған Атанайҙы ҡосаҡлап, әйәр өҫтөндә ҡайтты Иҫәнгилде Ҡаҫмаҡты йылғаһы буйында урынлашҡан йәйләүенә. Атанайҙың йәнгенәһе кескәй күкрәгендә саҡ-саҡ ҡына һуға ине. Әренләп шешенгән күҙҙәре асылмай, ҡолаҡ япраҡтары шешеп ҡалынайған, төймәләй генә ирене лә ҡабарып, һуйылған малдың үпкәһеләй бүртеп киткән.

Быны күреп 5 йәшлек Туғаҙаҡтың, ҡустыһының интегеүен күҙ алдына килтереп, йәне әсегән ине...

Хәтерендә, бөтә ағай-әнеләр, инәйҙәр, апайҙар ҙа һыҡташалар, ә ул Туғаҙаҡ, аҫтан, уларҙың бот араларынан туңҡанлап кереп, инәһенең алдында ятҡан Атанайҙың ҡулдарына иренен тейҙерә, балсыҡҡа ҡатып, ҡарайып, әсеп бөткән, серәкәй талағандан ҡабарып шешкән ерҙәрен ялап-ялап ала.

Хәлһеҙ балаһын ҡосағына алып иланы ла иланы Йәнбикә. Тик ҡәйнәһе Зарифаның:

– Ҡуй, өҙгөләнмә инде, килен. Илап баланы төҙәлтә алмаҫһың, тиҙ генә йыуындырайыҡ, дауалайыҡ, – тигән һүҙҙәренән һуң иҫенә килеп йомшаҡ кейеҙ өҫтөнә балаһын һалды. Ауһаҡты ырып эшләгән ялғашҡа йылы һыу, әрекмән-билсән иҙмәһе, яра япраҡ, кесерткән һуты, бал һалып, Атанайҙы ҡулдарында тотоп һаҡлыҡ менән генә йыуҙылар. Ҡысыныуҙан тырнап яраланып бөткән тәненә, тағы ла яра япраҡ һуты, бал һөртөп сепрәккә урап һалдылар. Тиҙ төҙәлмәне Атанай. Бөтә тәне күпсеп еүешләнеп ҡутырланы. Ҡысыуына түҙә алмай уны һәр ваҡыт соҡоп асты. Ә яра тағы ла еүешләнеп ҡутырланы. Шулай ҙа тәне яйлап булһа ла таҙарҙы. Еүеш ҡутырға киптерелгән кесерткән, яра япраҡ, билсән ыумаһы һиптеләр. Тора-бара ҡутырҙан тамам таҙарҙы. Үҫте, нығынды. Хатта тиҫтерҙәренән дә ирәберәк булып ҡалҡынып китте. Әммә бөтә битендә, муйынында, арҡа-күкрәгендә, аяҡ-ҡулдарында ҡутыр эҙҙәре күгәрә, ҡарая бireп, сыбарланып тороп ҡалды. Үҙҙәренән киңерәк, ҡалыныраҡ булғанға ла, тиҫтерҙәре уның кесе туғандарына эйәреп, «Аҡай», ә хәҙер сыбар булғанлыҡтан «Буҙ Аҡай» – «Буҙаҡай» тип исем ҡуштылар. Был ҡушамат-исем уның үҙенә лә оҡшай ине. Шуға күрә лә ул уға «Буҙаҡай» тип өндәшеүселәргә ҡаршы килмәне, һәр саҡ ризалашыуын белдереп яуап бирҙе. Тора-бара был ҡушамат-исем балаларҙы ғына түгел, ололарҙы ла яуланы. Уға барыһы ла «Буҙаҡай» тип өндәшер булды. Хатта ул үҫкәс, ҡайҙандыр ситтән килеп, ер үлсәп йөрөгән кешеләр ҙә, һәр ир енесенә өлөш сығарып яҙған туҙ-ҡағыҙға уның аҫаба башҡорт булғанлығын теркәп «Буҙаҡай» тип яҙып ҡуйҙылар. Шулай китте, шулай теркәлде Буҙаҡай исеме барлыҡ иҫәпләү, хисап ҡағыҙҙарына.

Киләсәктә Буҙаҡай исеме – Буҙаҡай – Буҙаҡаев булып башҡорт тарихына керер...

Әммә Аратау башында ҡарауыл-һаҡауылда торған Туғаҙаҡҡа әле исемдәренең ҡайҙан сығышы бик үк хәжәт түгел. Шулай ҙа ул үҙенең Туғаҙаҡ исеменең уға ҡайҙан килеп тағылғанын белә. Аҡаһыныҡы кеүек уға был исем йәбешмәгән. Ҡартатаһы Амангилде васыяты буйынса, Ғиззәтулла мулла Туғаҙаҡ тип ҡушҡан уға исемде. Атаһы Иҫәнгилде лә, ҡартатаһы Амангилде лә, оло ҡартатаһы Бейғара ла ҙур яуҙарҙа күп ҡатнашҡандар. Бейғараға хатта бик көслө, ғәйрәтле, иҫ китмәле ҡарыулы булғаны өсөн, «Ҡара кеше» тип ҡушамат таҡҡандар. Сөнки ҡара төҫ, ҡара көс барыһын да баҫҡан, барыһын да еңгән. «Ҡара кеше» тип уға ырыуҙаштары мыҫҡыллап, йә тәбиғи етешһеҙлеген күрһәтергә теләп әйтмәгән. Киреһенсә, ҡара кеше тип ғорурланып, үҙҙәрен һәр саҡ яҡларлыҡ ҡара көс, ҡара ҡеүәт барлығына ишара яһап та, ул ҡара көс артында тыныс, ышаныслы йәшәүҙәрен күңелдәре лә һиҙгән, зиһендәре лә шуны ымлаған.

Туғаҙаҡ быларҙы белә. Әммә уның бөгөнгө бурысы – Ирәндектең Шыршылы ҡаялығы башында яғылған ут төтөнөн күреп сапҡындар аша бөтә йәйләүҙәргә хәбәр бирергә. Артабан был шомдо Ҡалҡан тау башындағы һаҡауылдарға ла еткереү. Ҙур өйөм; тиҙәк төтөнө аша тиләүҙәргә, яңыраҡ килеп ер алып ултырған Ҡара-Табындарға ла еткереү мотлаҡ бурыс. Урыҫ батшаһы был ерҙәргә әле көнбайыштан килеп кереп үҙ дәүләте ҡанундарын индерә алмаһа ла, төньяҡтан ярайһы уҡ ерҙәргә ҡул һалған, имеш, тигән хәбәр бар... Үткән аҙнала атаһы Иҫәнгилденең Аратау итәгендәге «Кәптем» шишмәлеге ҡаршыһында урынлашҡан бура ҡышлауына Өпә йылғаһы башында ултырған Өпә, Һеңрән ырыуҙарынан Һиҙиәт хәҙрәт менән Ҡатыш бәһлеүән килеп тауыш һалғандар ине. «Боронғо еребеҙ буйҙарында торған Сыңға Тура һәм Иҫке Ер нығытмаларын алғандан һуң кафырҙар Иберҙә нығындылар».

Алыҫ сәфәрҙән килгән илселәрҙең хәбәре шом һалды. Илсе ҡунаҡтарҙың килеү хөрмәтенә йыйылған оло табынға ат сабып хәбәрләшеп килгән барлыҡ ҡор баштары, аҡыл әйәләре, мулла абыҙҙар йыйылды. Тайшан батыр нәҫеленән Ҡушаға абыҙ, Бороҡ улы Ҡашай менән Ҡушай бәһлеүән, инде олоғайып бөкрәйә төшкән Ият абыҙ һәм башҡалар бар ине. Түрҙә ултырған Һиҙиәт мулла башын бора биреп Аратау итәгендә эркелеп, ҡырмыҫҡа иләүе кеүек, йә таралып, йә өймәкләшеп киткән йылҡы өйөрҙәренә уларҙы иҫәпләгән кеүек күҙ йөрөтөп сыҡты ла, ҡараштарын Ирәндектең Тора Таш ҡаяһына төбәне. Олпатлылыҡ һаҡлап һәм үҙ дәрәжәһен белеп, һалмаҡ ҡына тағы ла һүҙ башланы. «...Эйе, Йыртыш һәм Тура, уның ҡушылдыҡтары буйын

яулағас, кафырҙар яйлап ҡоралдарын көньяҡ-көнбайышҡа – беҙҙең ергә борҙолар. Хәҙер улар Әй, Һыҙғы, Мәкәтә, Ялан Ҡатай, Бала Ҡатай ерҙәренә ҡулдарын тыға башланы. Ҡара Табындарҙың бер өлөшө Йыландарҙы, Ҡаңлыларҙы, Гәрәй йәнәйҙәрҙе күтәрә-беҙ, уларҙың да шеше тулған, һытылырға тора, тип, көнбайышҡа китте, – тине. – Улар яҡта ниндәй рухтыр, ниндәй ғәйрәт барҙыр, ни ғилләләр, белмәйем. Бәлки, Ҡара Табындар улар менән берегә лә алырҙар, бер йоҙроҡҡа төйнәлерҙәр. Әммә улар тере тәнебеҙҙән итебеҙҙе умырып алып киткән төҫлө булды беҙгә. Ни ҡылмаҡ кәрәк һуң? Хәҙер беҙгә төйнәлеп йыйынырға кәрәк. Сәфәребеҙҙең төп нөсхәһе был, тиеүебеҙ».

Һиҙиәт мулла, был ғәләм ни әйтер икән, тип, тирә-яҡҡа ҡаранып алды ла туҡтап ҡалды. Ҡорҙа тынлыҡ урынлашты. Ҡор хужаһы Иҫәнгилде ҙур-ҙур ағас табаҡтарға өйөлгән быулы ит өҫтөнә һарыраҡ, эре итеп төйөлгән тоҙ һибеп сыҡты ла, биленән хәнйәрен тартып алып алдына һалды. Шуны ғына көтөп ултырған ҡор ағзалары, һәр береһе хәнйәрҙәрен алып, алда ятҡан ҡарағас яныуҙарға бысаҡ беҙҙәрен баҫып тигеҙләп алдылар ҙа, ит киҫәктәрен ҡырҡып ашай башланылар. Иҫәнгилденең ике ҡатыны, ике килене ҡорға туҫтаҡ-туҫтаҡ ҡымыҙ, ағас тәгәс, сеүәтәләрҙә ҡоротло һурпа, ит манып ашар өсөн һөҙләккә тоноҡ, тәмле үлән төнәтмәһе ҡушылған тоҙлоҡ сеүәтәләре ҡуйҙылар ҙа, ҡуш яулыҡтары менән биттәрен ҡаплай-ҡаплай шым ғына сығып киттеләр. Иҫәнгилде, артына өйөп һалынып, ашъяулыҡ менән ҡапланған көлсә-бөкөрөштәрҙе ҡорҙағыларға таратып сыҡҡандан һуң, Ҡатыш бәһлеүән һүҙгә ҡушылды. «Урал тауы артындағы көнбайыш ырыуҙарыбыҙ халҡының яҙмышын беҙ белмәйбеҙ. Улар аҡ батшаға балиғ булғандан һуң, үҙ табыштарынан тыш уларға урыҫ дәүләтенә яһаҡ та түләйҙәр шикелле. Яйыҡ бормаһынан һуң уны буйлап һаҡ хеҙмәте лә алып баралар, буғай... Яһаҡ түләтеү фарманы бар, тип, беҙҙә лә бер булғар халыҡ араһында өндәүнамә алып барҙы. Тик беҙ уны аяғынан ботаҡҡа аҫып ҡуйғандан һуң, башҡалары беленмәне. Уның һөйләүе буйынса, беҙ 86 төлкө, 58 һыуһар, 47 бүре, 3 батман балдан тыш, йөк тартыу өсөн 32 йөк аты бирергә һәм ҡыурынға 8 арбаны икешәр кеше, өсәр ат менән бирергә тейешбеҙ, йәнәһе. Ә ни өсөн? Улар беҙгә кем? Беҙ үҙебеҙҙең тыуған еребеҙҙә йәшәгән өсөнмө? Беҙ бит кафыр еренә баҫҡын булып инмәгәнбеҙ. Ниндәй әхлаҡ хаҡтары бар уларҙың ни өсөндөр, кемгәлер яһаҡ түләтергә. Сирмештәр, уғыр-арҙар кафырҙарҙың башкиҫәр Строгановтарына ялланып хеҙмәт итеүҙәре лә, ялсылыҡта йөрөүҙәре лә, яһаҡ түләүҙәре лә беҙгә мәғлүм. Беҙ неҙгә кәңәш, һәм берлектәге киләсәк өсөн, ер-һыуҙы ҡурсалау үҙ мәнфәғәтебеҙҙе яҡлау саралары юлын билдәләү, фекер алышыу

өсөн килдек... Һеҙ ни әйтергегеҙ?» – тип ҡырҡа һүҙен бөтөрҙө Ҡатыш.

Ҡорҙо тағы ла тынлыҡ һәм шомлоҡ солғап алды. Өйгә кем хужа, һүҙгә лә шул хужа. Ҡорҙағыларҙың береһе лә оло һүҙ башламағас, ахыры, Иҫәнгилде үҙе һүҙ алды.

– Урыҫтар Иберҙә ныҡлы төпләнеп алды. Күп кешеләре күсте ул яҡҡа, бик күп... Унда хәҙер ҡала-нығытмалар ҡалҡып сыҡты. Ғәрептән ул ҡалаларға һәм уларҙың тирә-йүненә һаман халайыҡтары килә лә килә. Әммә беҙҙең аша түгел, һеҙҙең аша. Күрәһең, халҡы бик күптер. Урыҫ тип әйтелгән халыҡтарҙың араһында беҙҙеңсә аңлайышлы телдә һөйләшкәндәре лә бик күп. Исем-шәрифтәре лә хәҙер уларса булып бара. Күбеһе улар тәғлимәтен алған. Ата-бабаларының боронғо динен онотоп баралар. Петр тигән оло батшаларынан Һижриҙең 1107 (1701) йылдарында, беҙгә өндәүнамә һәм вәғәҙәләр бирep, улар Палавис (половец) тип атаған осо һәлберәп төшөп торған оҙон мыйыҡлы кешеләр килде. Бәғзеләренең түпәләре беҙҙеке кеүек ҡырылһа ла, унда бер остоҡ оҙон сәстәре бар ине. Бик борон беҙҙең дә ата-бабаларыбыҙ шул фиғелдә булған. Телдәре хас та беҙҙекенә оҡшаған ине. Ҙур, олуғ батшанан беҙгә һорау булып уларға ҡушылыу, ә өндәүнамәһендә ҡорал бирeү, һәм... Яҡшы мөнәсәбәт вәғәҙә ителгәс ни, беҙҙең тамырҙарыбыҙҙа ҡандарыбыҙ ташып торған саҡта дәррәү ҡуҙғалып, ул бәшәнәктәргә барып ҡушылып яуға сыҡтыҡ та киттек. Бөтә башҡорт иле яуҙа ҡатнашты, тиһәк тә, яҙыҡ булмаҫ. Бик ҙур һыу, Аҙау даръяһы буйында ҙур ҡәлғәне алдыҡ, ҡуйманыҡ. Унда беҙ ике йәй, ике ҡыш йөрөп, иҫән-һау ҡайттыҡ. Баш һалыусылар ҙа күп булды. Яу – үлемһеҙ, үлем ҡанһыҙ булмай. Әммә шуныһы дан булды: ифрат та күп ҡорал алып ҡайттыҡ. Ул ҡылыс, мылтыҡтар әле һаман беҙгә хеҙмәт итә, – Иҫәнгилде туҡтап ҡалды. – Хәҙер уларҙың батшаһы үҙгәрҙеме икән ни? Беҙгә яҡшы ғына мөнәсәбәттә ине лә һуң? Унан һуң бит ул беҙҙе тағы ла саҡырҙы. Һижриҙең 1123 (1711) лә, 1134 лә (1722) фарсы илендәге яуҙа ҡатнаштыҡ. Яуҙа беҙ половцы тип аталған ҡыпсаҡтар менән аралаш булдыҡ. Тын тигән оло һыу буйында, уның ҡушылдыҡтары Һыр, уларса Чирь, Айғыр атамалы йылғалар үҙәндәрендә көн күрәләр икән. Ғөрөфтәре лә беҙгә оҡшаш. Тик беҙ намаҙ уҡығанда уларҙың бер өлөшө суҡына, бер өлөшө үҙҙәре менән йә ҡуйындарында, йә муйындарына элеп йөрөткән ҡурсаҡтарға – үҙ аллаларына табыналар. Кәзә, һарыҡ һөтөн үҙ итәләр. Ас булһалар, хатта уларҙы ятып имәләр. Береһе тотоп тора. Бик тәүәккәл һәм башкиҫәр халыҡ. Әммә уларҙың үҙҙәре булһа ла, илдәре юҡ.

Буйһоноусылар һәм ялсы хеҙмәтсәндәр. Бер өлөшө Мәскәү кенәзендә хеҙмәттә торһа, бер өлөшөнөң шөғөлө – юлбаҫарлыҡ.

Зур йылғалар буйлап оҙон кәмәләрҙә ағып та, йөҙөп тә йөрөйҙәр. Йылғаларҙан ситтә йәшәгәндәре Мәскәү һарылары менән аралашып бөткән. Уларының шөғөлө ҡоро ерҙә юлбаҫарлыҡ ҡылыу, сит ер, сит мөлкәт талау... Әле һеҙҙең ергә ҡул һалыусылар ана шул кешеләрҙер ул. Батшаның ҙәнә мөрәжәғәтнамә яҙып, юлсы вәкилдәр ебәрергә кәрәк. Беҙ бит ҙә теләгебеҙ, ҙә ҡарарыбыҙ менән ул батша мәнфәғәтен яҡлап ҡан ҡойҙоҡ. Ни өсөн хәҙер уның кешеләре беҙгә ҡул һалырға тейеш? Аңламайым, – тип ҡорҙа ултырғандарға мөрәжәғәт иткәндәй күҙ ташланы Иҫәнгилде. Йөҙ баштары Әбдрәхмән дә, Өмәрҡул да, башҡалары ла еңелсә генә баш ҡағыуҙары ҡорҙоң Иҫәнгилде менән бер фекерҙә булыуын аңлата ине.

– Батша беҙҙе талатырға ебәрмәгәндер кешеләрен. Ул юлбаҫарҙар ҙә белдектәре буйынса эш ҡылаларҙыр, – тип һүҙгә ҡушылды Мөхәмәтйән мулла.

– Шулайҙыр, шулайҙыр, барлыҡ ҡырын эштәр күскенселәр ниәте менән эшләнәлер. Малдарҙы урлап һуйыу ҙа, төндә килеп өйҙәргә ут төртөүҙәр ҙә шулар эше бит. Әнә Нарлы тау ҡуйынындағы Аҡ ҡыр буйындағы тимер иретеү мейестәрен дә емереп ҡасыусылар шулар, буғай, – тип өҫтәне ситтә һөйәк кимереп ултырған Һағышбай.

– Тимәк, Һыҙғы, Һалйот, Әйлеләргә генә түгел, барыбыҙға ла бер фекерҙә булып бәйләнеш тотоп, ваҡиғаларға һәр саҡ әҙер булыу лазым, – тип төп фекерҙе дауам итте Иҫәнгилде. – Һеҙ ҡайтҡас Исәт ерендәге барлыҡ халайыҡтарға шуны еткереү дөрөҫ булмаҫ микән, – тип Һиҙиәт мулла менән Ҡатыш бәһлеүәнгә мөрәжәғәт итте Иҫәнгилде. – Беҙ яһаҡ түләгәнебеҙ юҡ, түләмәйбеҙ ҙә. Ни өсөн беҙ ҙә еребеҙҙә йәшәп, ҙә һыуыбыҙҙы эсеп, өҫтәүенә, күрше батшаға яу ярҙамына барып, уға тағы ла яһаҡ түләргә тейешбеҙ? Яһаҡты баш һалғандар түләй.

Ул яһаҡты беҙгә батша һалмаған. Әгәр уны батша үҙе һалған булһа, мөһөрлө мөрәжәғәтнамәһе булыр ине. Беҙгә оҙон ҡуныслы итек, арҡыры эшләпәле, ҡаранан кейенгән ағас төймәле, осло ғына һаҡаллы кешеләре килер ине. Һеҙгә бит, үҙегеҙ һөйләүегеҙ буйынса, көрәк һаҡаллы, оҙон ялбыр сәсле кешеләр килеп яһаҡ һорап йөрөйҙәр. Бишмәттәрендә лә төймә түгел, ҡаптырма. Аяҡтарында ла йә йүкә сабата, йә үксәһеҙ бөтәш тире итек.

– Юҡ, юҡ, улар батша вәкилдәре түгел. Һеҙҙән йыйылған яһаҡ батшаға барып етмәй. Уны шул ҡомһоҙ бурҙар үҙ-ара бүлешеп ашап бөтәләр. Унан тағы ла батша исеменән яһаҡ һорап йөрөй башлайҙар. Бирмәгеҙ, уларға бер һыуһар ҙа, бер төлкө лә, бер батман бал да бирелергә тейеш түгел. Уға яһаҡ түләүгә батшанан фарман да, мөрәжәғәт тә, һорау ҙа юҡ, – тине. Ә шулай ҙа тимер

иретеүҙе, ҡорал һуғыуҙы ташламағыҙ. Уны беҙ ҙә туҡтатмайбыҙ. Ҡорал һуғыуҙан башҡа көндәлек көнкүрешебеҙ ҙә бар бит әле...

Был табындың дөйөм ҡарарын Аятбай абыҙ йомғаҡланы:

– Беҙҙең дөйөм фекерҙе Иҫәнгилде ҡор башы, хужа әйтеп бирҙе. Ул турала беҙ әлек тә үҙ-ара хәбәрҙәш инек. Барлыҡ ҡышлауҙарыбыҙ ҙа, йәйләүҙәребеҙ ҙә дөйөм бер фекерҙәбеҙ. Үткән йылдың яҙында дүрт юлда осрашып фекер уртаҡлашҡайныҡ. Әле, ағай-әне, Стропанов һәм башҡа үҙ аллы баҫҡынсыларҙан башҡа беҙҙең тупһала ҡалмаҡ баҫҡынсылары ла тора бит әле. Улар, бәлки, һеҙгә – өпәйҙәргә, һеңрән һыҙғыларға барып та етмәҫ, әммә беҙгә, табындарға, әйле, ҡатайҙарға улар ҡул һуҙымында ғына торалар. Ҡалмаҡтар ҙур көс. Кафырҙарҙыҡы кеүек утлы ҡоралдары булмаһа ла, меңәрләгән атлылары бар. Улар кафырҙар кеүек йәйәүле һуғышсыны белмәй. «Атһыҙ ҡалмаҡ – байбаҡ» тигәндәр. Беҙгә Аҙау һуғышынан һәм башҡа яуҙарҙан улйа/улъя – мене итеп алынған ҡоралдарҙы ла барлап, ғәҙел өләшеп етмәгәнен еткереп һуғып, әҙер тотоу тәүге бурыстарҙың береһе булһын! Ил һаҡлау – ул ғүмер һаҡлау, тамыр һаҡлау! Ун ете-ун һигеҙе тулған һәр егеттең, ирмен тигән һәр аҙаматтың дүрт йәштән дә йәш булмаған менге ҡонаны, дүнәне булырға тейеш. Һәр аҙаматтың ил һаҡларға әҙерлеген аныҡлар өсөн йорттар өсәр кешенен бүлеп сығарырға тейеш. Һәр йортта ун бишәр әйәрле арғымаҡ көнө-төнө әҙер булыу маҡсатҡа ярашлы. Утыҙ йортта ун бишәрҙән һалғанда ла, тәүге оран өсөн дүрт йөҙлөк йыйыла түгелме? Унан башҡа тау баштарында һағауылдар, юлдарҙа бағауылдар һәм боҫконда тороусылар бар. Ҡалмаҡтар арттан, Урал тауҙарынан килмәйҙәр бит. Улар көнсығыштан, көньяҡ-көнсығыштан килер. Шуныһы яҡшы. Улар яланда ни тиклем зирәк булһалар ҙа, сауыл араһында, яланға сыҡҡан аҡ ҡуян кеүек, өс ағас араһында аҙашалар. Тауға һыбай менһә лә, тау түбән ат арҡаһында төшә алмай. Аттан төшөп, уны етәкләп ала. Күп күрҙек, күп һынаныҡ инде уларҙы. Ә беҙҙең егеттәр төндә лә бесәй кеүек, тауҙа кейек кеүек. Уларға дала ни ҙә, ҡара урман ни. Әлегә, тим, ҡалмаҡ баҫҡыны кафыр баҫҡынынан ҡурҡынысыраҡ. Кафырҙар яйлап килә, яйлап баҫа. Ә ҡалмаҡ ҡара болот кеүек. Йүнәлеш алдымы, меңәрләгәне өҫтөңә, илеңә килә лә керә. Шуға ла, яу теләмәһәк тә, беҙ хәҙергә мәжбүри яусы. – Ил алдындағы ҡурҡыныс ваҡиғаны икенсе юҫыҡҡа шулай борҙо Аят абыҙ. Ололар уны Аятбай абыҙ тип ололоҡлап йөрөтһәләр ҙә, сәнскеле телле булғанға башҡалар өсөн ул Аят абыҙ. «Эйе, эйе... хаҡ һөйләй, хаҡ» тип ҡеүәтләнеләр уның һүҙен Ҡушай бәһлеүән менән Ҡушаға йүгерек тә. Башҡа ҡәүемдәрҙә нисектер, әммә көнсығыш табындарында «Абыҙлыҡ» атамаһы, абыҙлыҡ дәрәжәһе рәсми түгел. Уны мәсет-мәҙрәсәләрҙә лә дәрәжә итеп иғлан итмәйҙәр. Абыҙлыҡ исеме, көнсығыш

табындарында иң алда ҡушамат рәүешендә тағылһа ла, тора-бара ул ҡушаматтан үҙенән-үҙе дәрәжәгә әүерелә. Ул дәрәжә аҙаҡ табыныу баҫҡысына уҡ күтәрелә. Шуның өсөн абыҙҙың дәрәжәһен, баҫҡысын уның әйәһенең зиһененә, ғилемлелегенә ҡарап баһалайҙар. Абыҙлыҡтың эйәһе, етмеш йәшендә лә ҡушаға абыҙ кеүек дини тәғлимәт эйәһе генә булыуы ихтимал. Әгәр ул абыҙ, сәйәсәт, көнкүреш тормош алымдарын көйләүсе, уны йүнәлтеүсе, алдан үҙенең генә түгел, йорттоң, ырыуҙың, хатта ҡәбиләнең дә яҙмышын күрә белеүсе булһа, ул «Хаҡ абыҙ». «Хаҡ-абыҙ» – кеше, ғаилә мөнәсәбәттәрен тоғро хәл итеүсе, кешеләрҙе, бигерәк тә балалар һәм ҡатын-ҡыҙҙар яҙмышын ҡаҡмаусы, һуҡмаусы. Хаҡ абыҙ – ул оло табип. Һәр үләндең, ағастың, ташбалсыҡтың, һәр ризыҡтың; кеше, мал тәнен дауалаусы үләндең көсөн, ғиллəһен белә. Абыҙҙың йәше мөһим түгел, абыҙҙың ғилеме мөһим. Уның нәҡ шул ғилеме, еренә, халҡы тарихына, милләтенең дини генә түгел, йәшәү рәүеше тәғлимәтенә бәйле үҫешкән зиһен хужаһын «Аҡ абыҙ», «Хаҡ абыҙ» дәрәжәһенә күтәрә. Аятбай абыҙ шундайҙарҙан ине. Күрәһең, ул бөгөн, иртәгә бороҡ хәл ителəһе мәсьәлә итеп яйлап керә башлаған урыҫ баҫҡыны түгел, ә барлыҡ ир-атты ҡырып һуйып, ҡатын-ҡыҙ, бала-сағаларҙы меңәрләп әсир итеп ала торған ҡара яу – ҡалмаҡ яуы килеүен, уға ҡаршы торорға әҙерләнеүҙе төп бурыс итеп ҡуйҙы Хаҡ абыҙ...

Туғаҙаҡты Аратау башындағы был хәтирә-уйҙары ниңәлер шомланғандан-шомландыра барҙы. Күңеле уның ниндәйҙер ғәрәсәт һиҙә кеүек. Олатаһы Амангилденең төп ултырағы Мейесле йылғаһының һаҙы ситенән һул яҡ ярҙа, шишмәлек башынан – Нарәле тауынан көнсығыштараҡ, ҙур шырлыҡ ситендә ҡояшҡа бағып ултыра. Төрлө күҙлектән ҡарағанда ла, был ер бик отошло. Артта, көнбайышта, оҙон Ҡыйҙыш армыты ел-бурандан һаҡлаһа, көньяҡтан Ҡутырҙы тауы ҡибланан өргән һыҙма елдән ышыҡлай. Алда – киң, ҡуйы шырлыҡ. Уның эсендә гәрәбәләй булып тулышҡан ҡыҙыл һәм ҡара ҡарағат, мәрйәм үләненең орлоғонан теҙелгән тиҫбеләй, һутлылыҡтан ярылып, ҡап-ҡара булып бешкән муйыл. Ә сит-ситтәрендә нәфис ҡолаҡҡа эленгән, «тамам!» тип торған алҡалай ҡып-ҡыҙыл ҡурай елəге тиһеңме, барыһы ла бар. Ә бер нисә шишмәлеге булған был шырлыҡ ашаһында Мейесле һыуының ҙур үҙәнлегендә даръялай һаҙлыҡ. Ул һаҙлыҡ үҙе бер мөғжизə. Һаҙлыҡтың эсенə, уның тәненə этəреп ингəн кеүек ҡалаҡ утрауҙары – Түбə асҡан, Ҡаҡсырҙы. Барлыҡ ихтилал һуғыштарынан һәм ауыр шахта, алтын йыуыу эштәренән ҡасып йәшәгән ҡасаҡтар һәм бүреләр көсөклəй торған утрауҙар Мәшкə һәм Ибраһим үҙҙəре бер шом һәм сер бөркөп яталар ине. Туғаҙаҡ та, ағаһы Буҙаҡай ҙа ул ерҙәрҙе бик яҡшы

белә. Олатаһы Амангилденең, уның атаһы Көсәк батыр һәм Һары Мәргән баһадирҙың етәкселегендә төньяҡта Нәйвә һәм Исәт һыуҙары буйында башҡорт еренә һорауһыҙ, килешеүһеҙ баҫҡаҡ булып кереп ултырған урыҫтарҙы, уларға эйәреп ингән диннеҙ уғыр-арҙарҙы ҡыуыу ғына түгел, Көнгөр, Өпә, Минзәлә нығытмаларын, сиркәү монастырҙарын пыр туҙҙырыуҙарын оло ғорурлыҡ һәм ҡәнәғәтлек менән һөйләгәндәрен бик яҡшы белә. Ул ваҡиғалар Һижриҙең 990-ында (1582) ла, 1026-һында ла (1616), 1073-тә лә, Буҙаҡайға бер йәш булғанда ла була. Ул осорҙа әле ҡалмаҡтар башҡорт ере сигенә килһә лә, ҡаршы һуғышырға батырсылыҡ итмәйҙәр. Беренсенән, улар Һижриҙең 1015 (1595–1605) йылдар тирәһендә башҡорттарҙың, ҡаҙаҡтарҙың, нуғайҙарҙың берекмә көсөнән Тубыл буйындағы «Елҡыуар» далаһында ҙур еңелеүгә осрап, башҡаса башҡорт иленә ҙур көс менән кереүҙән тыйылып торған ине. Уға инде бер башҡорт быуаты – 76 йыл үтмәһә лә, бер арғымаҡтың ике ғүмере йылы үткән. Йәғни 58 тапҡыр яҙ килгән. Ерҙе 58 тапҡыр ҡар япҡан. Ай-һай... Ул осорҙа батырҙар күп булған... Һары Мәргән баһадир ҡышҡы селлә менән аҡман-тоҡман башланыр алдынан Һижриҙең 1073-сө төнгө алышта үҙ атлылары менән батша һалдаттарын баҫтыра ине. Ай яҡтыһында йәйәүле һалдаттар яланда ҡуйы ҡамышлыҡҡа инеп йәшеренделәр. Ул йылда ҡыш йылы булды. Ҙур яланды ҡар менән ҡапланған, йоҡа боҙло тәрән күл тип уйламанылар. Ҡамышлыҡ эсенә боҫҡан һалдаттарҙы эҙәрлекләп, дәррәү сабышып, шул күл өҫтөнә килеп менеүҙәре булды, йөҙәрләгән һыбайлыны күтәрә алмайынса боҙ ярылып, бик күптәре Күтерле күл төбөнә батты. Көтмәгәндәге был ҙур юғалтыу 1663 йылдың башындағы иң ҙур фажиғә ине. Һары Мәргән бәһлеүән ана шулай төндә көрт аҫтындағы боҙ аҫтына бик күп яугирҙары менән батты. Ә дошманға һағауыл ҡороп, күлдең ҡаршы яҡ урман ситендә торған Көсәк батыр һәм Арыҫланбәк һуғышсылары әлегә һис был ваҡиғаны аңламай, күл уртаһындағы шау-шыуҙы тыңлап, аптырап тора бирҙеләр. Төп көс көтмәгәндә уңышһыҙ ваҡиғаға дусар булып, өҫтәүенә, ҡамыш араһындағы һалдаттар тарафынан атылғас, әлбиттә, бик әҙәре тере ҡала. Нишләйһең инде, фажиғә килеүенә алыша торған ерҙең үҙ төбәгенән алыҫ, тимәк, ул ерҙең таныш уҡ булмауы, дошмандың ҡайҙа ҡасыуы билдәһеҙлеге бер сәбәп булһа, икенсеһе – ҡыҙыу ҡанлылыҡ, ярһыулыҡ, бер ни тиклем ауанлыҡ та ине.

Һары Мәргәндең көтөлмәгән вафаты Тобольск, Төмән йүнәлешендә көрәш алып барған Абуға солтан һәм Кесе солтанға ла тиҙ арала барып етте. Был ике солтан Күсем хандың ейәндәре булып, үҙ ерҙәрен азат итеү өсөн төрлө юлдар аша урыҫ батшаһына ҡаршы көрәш алып барҙылар. Кесе солтан да, Абуға солтан

да ҡандары менән дә, йәндәре менән дә үҙ табындарына мөкиббән һәм ғәйрәтле бер шәхес булараҡ, көнсығыш Урал халҡы менән бер төптән булып, ысынбарлыҡта әле Рәсәй яулап ала алмаған дәүләт етәкселәре ине. Улар икеһе лә Һары Мәргән фажиғәһе еренә 7 көн эсендә килеп еттеләр. Әйлеләрҙең ерендә ҙур ҡор йыйылды. Был йүнәлештәге халыҡтарға Кесе солтан урыҫтарҙы артабан көнсығышҡа үткәрмәҫ өсөн әллә Йәнәй ырыуы, әллә Ҡыр йылан батыры Сәйет баһадирҙы, ә Себер юлын ҡаплар өсөн Арыҫланбәк менән Көсөк батырҙы бурыслап тәғәйенләне.

Үткән уңышһыҙлыҡ артабанғы көрәштең бәкәленә һуға. Һуғыуын һуға, әммә һүрелтмәй. Үҙаллылыҡҡа булған рух көсөн, рух әләмен Арыҫланбәк менән Көсөк батыр Себер юлында үҙ ҡулдарына алды.

Ул яуҙарҙы, әлбиттә, Туғаҙаҡ белмәй, әммә ҡартатаһы Аманғилде, уның ағалары Серәкәй һәм Мулдаш оло аталарының һөйләгәнен ул да, ағаһы Буҙаҡай ҙа, башҡа егеттәр ҙә бик яҡшы беләләр. Кис булып мал-тыуар ҡайтып, тамаҡ туйҙырғас, бөтә йәйләүҙәре менән тирмә янында торған ташлыҡҡа йыйылалар ине. Усаҡ яғыла. Кәрәк икән, ҡоштабаҡта ит килтерәләр, күнәге менән һаумал ҡымыҙын да сығарып ҡуялар. Ана шунда була ла инде яуҙар, һуғыштар тураһында ололарҙың хәтирәһе. Йәш егеттәр күңеленә ул һуғыштар, батырҙар һыны, уларҙың тормош һәм хәрби алымдары бал һалынған һутлы үлән сәйе кеүек ҡуйырҙы. Татлы ла, сарға ла хистәр уятты, ҡеүәт һәм дәрт бирҙе иңдәре бауыр күтәреп утыҡҡан ирҙәргә генә түгел, әле ҡеүәт һурып бөтмәгән егеттәргә лә, йәш ҡурпы малай-шалайҙарға ла... Шул Зөлхизә ташы янынан уҡ арғымаҡ аттарына менеп, әле күренмәгән дошман өҫтөнә төйөлөргә бөтәһе лә әҙер, бөтәһе лә түҙемһеҙлек менән килер мәлде көткән кеүектәр. Әммә эңер ҡуйырғандан-ҡуйыра барып, Арҡырсаҡ йондоҙ түпә өҫтөнә менгәс, яйлап-яйлап һәр кем үҙ тирмәһенә тарала.

Туғыҙаҡтың уй-хәтирәләре йә урғылып аҡҡан йылға, йә уның тонйорап ятҡан томбойоҡло тобаһы кеүек, ағымы беленмәһә лә, түбәнгә һурыла ла һурыла ине.

Шулай ҙа уның шомо, шөбһәләнеүе бушҡа булманы. Йыраҡта, бик йыраҡта, ситтә, һул ҡулда күгәрә биреп ятҡан Ҡомас армытындағы ырыу башлыҡтары ятҡан Айшан менән Тайшан ҡаялығы өҫтөнән төтөн күренде. Ысынмы был, әллә монар күрәмме тип, ике ҡуллап күҙҙәрен ыуып тағы ла ҡараны. Әйе, был ҡуйы төтөн ине. Ҡарағусҡыл булып алда, көнсығышта ятҡан Ирәндек тауының Тораташ ҡаялығы өҫтөнән дә борма-борма төтөн күренде. Янғын сыҡмаһын тип, таштан һалынған, әммә дүрт ҡиблаһы ла асыҡ, өҫтө шул уҡ йәймә таштар менән көмбәҙ итеп ябылған, эсенә ҡоро тиҙәк тултырылған был таш тишек

бөрмәләре кәрәк саҡта ҡуйы төтөн борҡа ине. Туғаҙаҡ ҡайынға нәҙек ҡыл арҡан менән бәйләп ҡуйылған атына йүгерҙе. Эйәрҙең артҡы тотҡаһына бәйләнгән ҡайыш муҡсаһынан тағы ла бәләкәйерәк күн кейҙермә алып, уның эсенән бысып ҡыҫҡартылған үгеҙ мөгөҙө остоғон һәм бәләкәй генә янсыҡтан ике саҡматаш алып таш бөрмәнең ел өргән тишегенән уға тултырылған тиҙәк аҫтындағы ҡоро ҡауға төкәп, саҡматаштарын сағырға тотондо. Тик ул, әллә ҡабаланыуҙан, әллә албырғауҙан – ҙур осҡон бирмәй ҙә бирмәй. Шуға ла мөгөҙ эсендәге сәнске үлән башы мамығына осҡон тейеп янып китмәй. Мөгөҙ эсендәге еңел йөн, үлән-мамыҡ янып китмәгәс, остоҡҡа төпкәрәк тығылған, тетелгән зараушан мамығы ла тоҡанмай. Асырғаланып һуға торғас, саҡмаларҙан ут сәсрәне, мөгөҙ эсе еҫләнеп, шунда уҡ яна башланы. Туғаҙаҡ уны тиҙ генә тиҙәк аҫтындағы ҡауға төкәне. Тиҙәк аҫтындағы ҡау ләүләп яна ла башланы. Тиҙҙән, бик тиҙҙән Аратау башынан да бормаланып-бормаланып ҡара төтөн күккә үрмәләне. Был төтөндө хәҙер Ҡалҡан тауындағы һағауылдар ҙа күрер. Үҙ нәүбәтендә, уны артта ятҡан Урал армыттары араһындағылар ҙа, Яйыҡ башындағылар ҙа аңғарыр. Уй таштары – Уй армыты аръяғындағыларға, ялан яҡтағыларға ла Ҡомас башындағы төтөн хәбәрҙе күптән еткергән инде. Шул уйҙары башын солғап алмашҡа кем килерен уйлап йөрөгәндә, уның янына дүрт кеше килеп, ҡыҙыу аттарынан төштөләр. Икәүһе – ун биш йәштәр самаһындағы үҫмер малайҙар, береһе – аҡһаҡ Лоҡман ҡарт, береһе ағаһы Буҙаҡай ине. Буҙаҡай мәсьәләне тиҙ төшөндөрҙө. Ҡалмаҡ яуы, Ҡабан йылғаһын аша сығып, өс йүнәлештә таралған. Бер өлөшө Өйәл буйлап килһә, икенсеһе, иң ҙуры һәм көслө төркөмө, Уй үҙәне буйлап килә, ти, өсөнсөһө Урләне йылғаһы буйында икән. Һары-Сарға батыр бөтә йәйләүҙәргә лә сапҡын ебәргән, ә үҙе әле Күмләк йылғаһы буйында, ти. Беҙҙең янға ҡуҙғалған, тип хәбәр еткерҙеләр. Арбалары тулы тоҙ булғас, әкрен киләләр, ти. Ҡалмаҡтар ҙа бик ашыҡмай икән. Ҡаҙаҡтарҙың урта йөҙ яландарында үлән бик таҡыр булып, аттары йүнләп үнжей алмаған. Беҙҙең һутлы үләнле ергә кергәс, ас аттары, йөн араһында таҙа тирегә ҡаҙалған талпандай, мул үләнгә йәбешкәндәр икән. Аттарының төҫ алыуын, ит ҡунғанын көтәләр, имеш. Тау башында хәҙер ике үҫмер менән Лоҡман ҡарт ҡына торасаҡ. Әле быҫҡыған тиҙәкте һүндереп, уның яңыһын өйөргә кәрәк. Лоҡман ҡартҡа, был йәш үҫмерҙәр менән бөрмә көмбәҙҙе лә ҡарауыллау мотлаҡ. Сөнки дошмандың алғасҡылары һәр саҡ хәбәр ебәрә торған шул төтөн бөрмәләрен емерер булдылар. Дошман алғасҡылары, ғәҙәттә егерме-утыҙ кешенән артмай. Улар төндә йөрөмәйҙәр: әллә диндәре ҡушмай, әллә төн ҡараңғыһынан, әллә ен-пәрейҙәренән ҡурҡалар. Ни булһа ла, уларға, Лоҡман

ҡартҡа, таш төтөнсәне һаҡларға ҡушылған. Бөгөндән башлап һаҡта улар өсәүләп торасаҡ. Өсөһө лә тауҙың өс ҡашында, түбәнгәрәк яҡта, иң күренмәле урында. Һәр береһенең утыҙар уғы бар. Уҡ атып таш өҫтөнә ҡуйылған йоҙроҡтай ағас төбөнә тейҙерә алған был өсәү, аҫтан-өҫкә сәп булып үрмәләгән һәр кем өсөн ҡурҡыныс ине.

Туғаҙаҡ менән Буҙаҡай Аратауҙан Кәптер ултырағына төшкәндә, унда сыр-сыу бара ине. Тирә-яҡ йәйләү-ҡышлауҙарҙан халыҡ бында йыйыла ла йыйыла. Ҡайһы береһе дөйөм йыйылыуҙы көтөп тормайынса, Ирәндек ашаһына, Уйҙың, ялан яҡҡа боролған еренә, ҙур ҡарауыл тауы буйына йыйылырға ашыҡты. Унда бөтә тирә-йүн киләсәк. Был дөйөм йыйылыу һәм дошманға ҡаршы тороу ысулдары тураһында ырыу-йорт баштары менән һөйләшеүҙе, Һары-Сарға батыр үҙе етәкләне. Бер көн дә үтмәне, ул Әгер йылғаһының Уйға ҡойған еренә килеп тә туҡтаны. Хәлбелеш алып, тағы ла йылға буйлап ете саҡрымдай күтәрелеп, Әсән йәйләүенән әҙ генә ситкәрәк нигеҙ ҡорҙо. Шунда йыйылды ла инде халыҡ боронғо Муйнаҡ батырҙың төп нигеҙенә, ә ҙур бер ҡораллы төркөмө Һанар, Өйәл йылғалары буйында ҡаҙаҡтарҙың берләшеү өсөн килеүен көтөп ҡалды. Ҡалмаҡтар ҡаҙаҡтар өсөн дә ҡан дошман. Сөнки улар үҙ илдәренән, Джунғар яҡтарынан, уйғырҙар һәм ҡытайҙар тарафынан ҡыуылғас, әле үткән быуат урталарында уҡ ҡырғыҙҙарға һәм оло йөҙ ҡаҙаҡтарына сапҡын артынан сапҡын ойоштороҙолар. Хәҙер ул замандар күптән үткән инде. Ҡаҙаҡ ырыуҙарын туҙҙыра-туҙҙыра килеп, улар башҡорт ерҙәренә еттеләр. Ҡалмаҡтарҙың ойошоу ҡануны ҡаҙаҡтарҙан да, башҡорттарҙан да башҡа ине. Ҙур ҡәбиләләр берекмәһе улар: хошауыттар, торғауыттар, дербеттәр. Әммә Нур Балхаш күленә ҡойған Или йылғаһы буйында ҡалғандары берләште. Бигерәк тә аған-Араптан-Хон-Тайша тигәндәре бөтә ҡалмаҡ ырыуҙарын берләштереүҙә ҙур маһирлыҡ күрһәтте. Тайшалыҡтары араһында ҡаты ҡанун керетелде. Бөтә ҡалмаҡтар башы булып тик бер генә Тайша тора. Тайша ойоштороусы, Тайша һәр мәсьәләлә лә хаким, Тайша үҙе хөкөм. Уға буйһонмаған, йә әмеренә саҡ-саҡ шик тыуҙырыусы башынан яҙа, йә ҡырағай ҡолан ҡойроғонда дала буйлап һөйрәлеп йөрөп өҙгөләнгән ит, һөйәк киҫәктәренә әйләнә. Тайшаның әмере һәр ҡалмаҡ өсөн шикһеҙ үтәлергә тейешле бойороҡ. Шуға ла әске тәртип ҡанундары ла тайпылышһыҙ. Бөтә тайшалыҡ, ул ирме, йәки ҡатын-ҡыҙмы, хатта балаларына саҡлы хәрби йоҙроҡҡа төйнәүле. Талауға һәр береһенең бурысы бар. Ир-ат ҡаршы яҡты үлтереү, һуйыу менән мәшғүл булһа, үҫмерҙәре, ҡарттары ла ат өҫтөндә бик маһир булғанлыҡтан, баҫып алынған мал-тыуарҙы үҙ яғына ҡыуыу менән мәшғүл. Ә ҡатын-ҡыҙҙары кейем-һалым, зиннәтле әйберҙәр,

һауыт-һаба йыя, дөрөҫөрәге, урлай, талай. Балаларының да үҙ шөғөлө бар. Кеҫә ҡутаралар, ҡайыш, ат әпсен-төпсөндәрен йыялар. Ҡыҫҡаһы, улар ойошҡан, төрнәлгән, маҡсатлы берҙәм йән эйәһе. Шуға күрә лә ҡалмаҡтар дала буйлап таралған ҡаҙаҡ ырыуҙарын берәм-берәм еңел тар-мар иттеләр. Урта йөҙ ҡаҙаҡтары Турғай һәм Ҡостанай, Аман-Ҡарағай тирәһендә башҡорттар менән йәнәш йәшәгәндәре берләшеүгә ынтылдылар. Сөнки улар тик берләшкән көс менән генә бик күп һанлы ҡалмаҡ нойондарына ҡаршы тороуҙы аңлайҙар ине. Өҫтәүенә, боронғо ҡан-кәрҙәшлек, ырыуҙар берекмәһенең бер булыуы ла күңелдәрен яҡынайтты. Был башҡорттар өсөн дә уңай. Шуға ла бәһлеүән Һары Сарға халҡы, үҙ ырыуы өсөн артыҡ уҡ хафаланманы. Бынан байтаҡ йылдар элек башҡорттар ҡалмыҡтарҙы Тубыл буйында, «Елҡыуар» далаһында ҡаҙаҡтар, ноғайҙар берлегендәге көс менән еңел генә ҡыйратҡандар ине. Һары Сарға батыр бик олоғайҙы. Шулай ҙа атаһынан ҡалған аҫ башлы ҡылысын ныҡ тота әле. Бер ғауым ваҡыт үтеүгә, аш-һыу бешеп, ҡолондарҙы бәйләп бөтөүгә, ике-өс йөҙ һуғышсы йыйылды. Улбыл була ҡалһа тип, йәйләүҙәр юл өҫтөнән өҫкәрәк күсәсәк. Һәр йортто, һәр йәйләүҙе һаҡлау өсөн дә алғыр егеттәр үҙ урындарында ҡалды. Ул ғына ла етмәгән, Асыулы күле буйынан да хәбәр килде. Ҡалмаҡтар Тиләүҙәр еренә лә, Ҡыйҙыш йылғаһы башына ла йүнәләләр икән. Аптыраны ҡор башы Иҫәнгилде лә.

Тиҙ генә ҡорға йыйылдылар. Бында инде урта ир быуынын аша атлап барған Ҡәйеп улы Байһары, Ҡоламан, зирәк Ҡортҡасыҡ, тәүәккәл Ҡарамыш, зәһәр Баязит һәм башҡалар бар. Ҡорҙоң ҡарары ҡыҫҡа булды. Башҡа сара юҡ ине. «Уткән ваҡыттарҙағы кеүек бергә төйнәлеп, бер ҡара көс булып килмәйҙәр был юлы. Әллә ғәскәри халайыҡтарынан башҡа, бөтә ғаиләләре, арбалағы кейеҙ тирмәләре менән күсенеүсе өлөшөмө был ҡалмаҡтың? Уларҙың шәреҡтән береһе артынан береһе килгәнен хәҙер инде барыһы ла белә. Байтаҡ яу, байтаҡ айҡалаш бирҙек бит инде. Ә улар туҡтамай ҙа туҡтамай...» тип уйлап аптыраштылар. Әсиргә алынғандарының ҡайһы береһе ярайһы уҡ башҡортсаға өйрәнгәс, кәрәк булыр тип, Аятбай абыҙ өйрәтеүе буйынса, уларҙан ҡалмаҡ телен дә үҙләштереүселәр бар.

Дербет, хошауыт, торғауыт тигәндәренең һәр береһенең теле оҡшаш һымаҡ булһа ла, ҡайһы бер үк әйберҙе төрлөсә атайҙар, әммә һүҙ тамырҙары бер төптән сыға. Ҡалмаҡтарҙың тарҡалып көнсығыш табын еренә төрлө ерҙән киң ҡолас булып килеүе аптыратты башҡорт аҡһаҡалдарын. Йоҙроҡҡа төйнәлеп килеп, ил эсенә кереп барлыҡ йорт, халайыҡтарҙы туҙҙырып талап үтеү өсөн килмәйҙәрҙер былар. Был өйөр ҡалмаҡтарының маҡсаттары башҡалыр. Әммә нимәлә һуң маҡсаттары? Инде бик күптәнән

башҡорт араһында йәшәп, хатта тол ҡалған башҡорт ҡатынына өйләнгән, әле Хөсәйен тип атаһалар ҙа, Отхон тигән ысын исемен онотмаған ҡалмаҡты саҡырып бурыс ҡуйҙылар ҡорҙағылар. Хөсәйен тип башҡортса исем ҡушылған Отхон, ҡалмаҡса кейенеп, хатта уларҙа күпселекте үк тәшкил иткән ала ат менеп ҡалмаҡ араһына китәсәк. Унда ул үҙен башҡорттарға әсир төшкән икенсе ҡалмаҡ кәбиләһе кешеһе булыуын һөйләйәсәк. Ҡалмаҡтарға ышанысҡа кереп, уларҙың уй-маҡсаттарын беләсәк. Отхон башҡортсаны һыу кеүек белә. Уның әсир булып алыныуына ла утыҙ йыллап ваҡыт үткән. Башҡортлашып уҡ бөткән инде ул. Көтөү көткәндә лә һағышлы һәм мөхәббәт менән сорналған башҡорт йырҙарын йырлай.

– Отхон, йырла әле ҡалмаҡса һөйөү йырҙарын, – тип һорашалар ҙа, ул йырламай.

– Ҡалмаҡса бындай моңло мөхәббәт йырҙары юҡ. Улар башҡаса. Йә яза, йә ҡан, йә ҡон менән бәйле, – тиер булды. Хөсәйен-Отхонға аҡһаҡалдар исеменән Ҡортҡасыҡ быны әйтәсәк. Әгәр Отхон ҡалмаҡтарға һатылып, улар яғына сығып, беҙҙең турала мәғлүмәт биреһә, бында уның ҡатыны ла, ике улы һәм бер ҡыҙы ла үлем язаһы аласаҡ. Был мәғлүмәтте Ҡортҡасыҡ Отхондоң үҙенә генә һәм бик ҡәтғи итеп әйтте. Әммә балаларына һәм ҡатынына был турала ләм-мим. Әлбиттә, аҡһаҡалдар ҡоро бер ваҡытта ла быны эшләмәйәсәк.

Ҡатыны Мәхүбә беҙҙең ҡыҙ бит, башҡорт ҡатыны. Уның ырыуы алдында бер ниндәй ғәйебе лә юҡ. Ире бер яуҙа шәһит булған, ә, Мәхүбә, оҙаҡ йылдар тол булып ултырҙы. Ниңәлер уны яусыламанылар. Әллә берәй әсе ғәйбәт өркөттөмө? Үҙе лә көләкәс бит, ауыҙы йырылып, һәр кемгә йылмая ла тора. Әммә Отхонға был турала киҫәтеү хәрби белешмә алымы ине. Отхонға уның улдары ҡиәфәтендә ҡалмаҡ телен белгән ике сарға егетте лә таҡтылар. Әгәр Отхон, ҡалмаҡтар яғына ауышҡанын һәм уларға белешмә биреүен һиҙһәләр, уға алдан әҙерләнгән оҙон нәҙек хәнйәрҙәре менән йыраҡтан һуғасаҡтар... Ваҡиғаһына һәм шартына ҡарап, йыраҡтан булһа ла хәнйәр ҡаҙаясаҡтар. Хөснулла ла, Фәхретдин дә ун-ун биш ҡуһай ерҙән дә яҙлыҡмай бик мәргән һәм көслө итеп бысаҡ бәрергә бик оҫта инеләр. Улар хатта һунарға барғанда ла бысаҡ бәреп йәнлек алған осраҡтары булды. Ҡыҫҡаһы, был ике егет һалдау һөңгөгә лә, хәнйәр ташлауға ла бик тә маһир инеләр. Халыҡҡа һиҙҙермәй генә таң ата башлағанда оҙаттылар уларҙы Ҡурҡасыҡ менән сая зәһәр Баязит. Әйләнеп ҡайтыр өсөн ваҡиғаға ҡарап биш көн бирҙеләр. Уй буйлап килгән был ойраттар, билдәле, беҙгә киләләр. Шуның өсөн Өйәл буйлап килгәндәренә лә, Аят йылғаһы аша килгәндәренә лә боҫкон сапҡындарҙан башҡа һәр төрлө ҡиәфәттә күҙәтеүсе шымсылар

ебәрҙеләр. Дүрт көндән һуң төндә Отхон егеттәре менән ҡайтып төштө. Аят Ҡорасан йылғаһы йүнәлешендә киткән боҫконсолар, Ҡара Табындар менән осрашып, улар аша Тиләүҙәргә имен-аман ҡайтыуҙары билдәле булды. Ә «Өйәл», «Өс тамаҡ» йүнәлештәгеләренән хәбәр булманы. Шулай ҙа уларҙың да яҙмыштарын белделәр. Уларҙы ҡалмаҡтар әсиргә алғандар. Алмашҡа ҡуй көтөүе һорайҙар икән. Ашарҙарына юҡ, ти. Хөсәйен-Отхон бик ентеклəп ҡалмаҡтарҙың теләктәрен еткерҙе. Үткән яуҙарҙан айырмалы, был юлы ҡалмаҡтар Урта йөҙ ҡаҙаҡтары менән башҡорттар араһында нығынмаҡсы икән. Ҡаҙаҡтарҙы Турғай йылғаһының ашаһына тиклем, ə башҡортто Уралдың ət үткеһеҙ урмандарына ҡыуып кереткеү маҡсат икән. Шуға ла киң ҡолас менән, əммə төбəп киләләр. Улар башҡорттарҙың тауҙар араһында ла, далала ла һибелеп Тубыл буйына тиклем ултырғандарын белəләр. Шуға ла дала ултыраҡтарын туҙҙырмай, уларҙы урап, эскə, ырыу йорттары араһына инмəкселəр. Маҡсаттары – эске йорттарҙы, йəйлəүҙəрҙе туҙҙырыу, ҡырыу. Əммə тик ир-атты ғына. Матди байлыҡты, ҡатын-ҡыҙҙы ҡалдырыу, сөнки был ерҙə улар йəшəйəсəк... Шулай бойорған уларға оло Шешен тайшалары.

Һəр ҡалмаҡ ойраты үҙ аллы хəрəкəт итергə тейеш ине. Хөсəйен ҡалмаҡ кире ҡайтып, хəл-əхүəл билдəле булғас, барлыҡ ир-ат тағы ла оло ҡорға йыйылды. Төрлө фекерҙəр күп булды. Берəүҙəр ҡалмаҡтарҙы дəррəү бында ҡаршыларға һəм сапҡысларға тигəн тəҡдим индерҙе. «Ултырған нигеҙҙə бик боронғо таштарыбыҙ бар. Атай-олатайҙарҙың əруахтары беҙгə ярҙам итер, боронғо нигеҙ бит», – тинеләр. Икенселəр Оло Ҡарауыл тауына менеп, йүнəлештəрен ҡарап торорға ла, арттан һөжүм итергə тигəн фекерҙə булды. Мыҡты Буҙаҡай, сарға Баязит, ҡыҙыулығы өсөн Тамуҡ ҡушаматы алған Байһары, ҡустыһы Янһары, иң мөһиме, ҡор башы Иҫəнгилде һəм зирəк Аятбай абыҙ өсөнсө тəҡдимдə ине. Ҡалмаҡтар əле Тубылды Уй тамағынан күпкə юғарыла кискəндəр. Бынан утыҙ-ҡырҡ йыл элек ҡыйралыш кисергəн Елҡыуар кисеүе лə һулда ята. Урыҫ исем-шəрифен, динен алып Ырымбурға, артабан Мəскəүгə йүнəлгəн ноғайҙарҙан буш ҡалған Гөмбəй, Ҡыҙыл Селек, Тимер еңгə йылғаларының башы менəн төньяҡҡараҡ тартып, Уй буйына төшөүҙəре ине ниəттəрендə.

Шешен тайшаныңың вəкил-яусылар ебəреп, урыҫ дəүлəте кешеләре менəн һөйлəшеү алып барыуы уңышлы сыҡты. Урыҫтар өсөн ҡалмаҡтарҙы башҡортҡа ла, ҡаҙаҡҡа ла һөсләүе, йəшерен рəүештə уларҙы ҡоралландырыуы ҙур уңайлыҡтар килтерəсəк. Берҙəн, ул баш бирмəгəн башҡорт илен үҙ əрмеһен ҡулланмайынса ғына ҡалмаҡ ҡылысы менəн баҫасаҡ. Был ҡаҙаҡтарҙың да

рухын һындырасаҡ. Икенсенән, ике яугир төркиҙәр берләшә алмаясаҡ. Араларына һәр саҡ урыҫтар яҡлы ҡалмаҡтар ултырасаҡ. Уларҙы бөтә Ҡаҙағстанды, Урта Азияны яулап алыу өсөн дә ҡулланыу еңел булмаҫы... Ерһеҙ, илһеҙ халыҡ ҡайҙа ҡыуһаң да барасаҡ, һис ҡаршы килмәйәсәк. Шулай фекер йөрөттө урыҫ воеводалары. Был фекерҙәрен батшаларына ла еткерҙеләр.

Ҡалмаҡтарға ҡаршы яуҙың алымын Аятбай абыҙ, Иҫәнгилде, уның улдары Буҙаҡай, Туғаҙаҡ тәҡдимдәрен күпселек хупланы. «Ҡалмаҡтарға ойошоп, ял итеп, аттарын көрәйтеп алырға ирек бирмәҫкә. Үҙебеҙгә өҫтәренә ябырылырға». Шулай ҡарар иттеләр. Яуға сығырға ике көнлөк әҙерлек иғлан иттеләр. Китте ғауғалы йыйылыуҙар, бер йоҙроҡҡа төйөлөүҙәр. Йыраҡ яу түгел. Етмеш-йөҙ саҡрым булыр. Артмаҡ аттар ҙа, ауыр арбалар ҙа кәрәкмәй. Һәр кем үҙенең яу атында. Тик ниндәй һөңгө алыу тураһында бер аҙ бәхәс сыҡты. Берәүҙәр, осло ҡыҫҡа халдау һөңгө отошло була, тиһәләр, икенселәре ҡармау йәки ҡаяу һөңгөгә өҫтөнлөк бирәләр. Яуҙың төп өлөшө кинәт ташланыу, кинәт яҡтайыу түгел бит, тинеләр. Яуҙың төп алымы «Тоҡ» буласаҡ. Йәки ҡалмаҡтар туҡталған ерҙә уларға әҙ көс менән һөжүм итеп ҡуҙғытырға ла, әҙ генә ҡаршылыҡ күрһәтә-күрһәтә ҡасыу сәхнәһен уйнарға кәрәк. Улар шунда уҡ бөтәһе лә аттарына менеп ҡыуа төшәсәктәр. Шуға ла йыраҡ ҡасырға ярамай. Үсекләшкәндәй, бер ҡаса, бер ата-ата яҡтайырға кәрәк. Уларҙың көсө юл буйлап һуҙыласаҡ. Сөнки берәүҙәре аттарына сапсан ғына менеп ҡыуа төшһә, икенселәре яйыраҡ ҡуҙғаласаҡ. Ҡалмаҡтарҙың әле беҙҙең тәбиғәт һәм ғөрөф осорона һуғыш алымдары ҡулайлашып етмәгән булһа кәрәк. Аятбай абыҙ ҙа, Амангилде ҡарт та, Иҫәнгилде ҡор башы ла уларҙың яуға сабыу ысулдарын фекерләп өйрәнгәйнеләр. Ҡалмаҡтар, ҡапыл дошман килеп сығып пәйҙә булғанда, һалҡын ҡан менән артыҡ ҡалбырламай яйлаңҡырап бер төп, бер йоҙроҡ булып төйнәлмәй, теҙелмәй. Күп осраҡта етәкселәрен дә тыңлап тормай, шунда уҡ аттарына менеп, дау килеп ҡысҡырышып, дошмандарына ташланалар. Әлегә тиклем башҡорттар менән бәрелештәрҙең күбеһендә улар еңелделәр. Еңгән осраҡтарында тик күпселекте тәшкил иткәндә генә еңеүгә өлгәшә алдылар. Ә башҡорттар улар ҡапыл килеп ябырылғанда ла артыҡ сәбәләнмәне. Иң алда бер ергә төйнәлделәр, теҙелделәр. Унан йөҙ башының оранын тыңланылар. Әммә был хәрәкәттәр һәм әмерҙәр тиҙ, бик тиҙ эшләнә ине. Һуғыш яйлауҙы көтмәй. Унан һуң башҡорттарҙа Майҡы бей осоронан уҡ килгән унлыҡ, иллелек, йөҙлөк ҡағиҙәһе йәшәне. Бер-береңдең арҡаһын һаҡлау – йөҙгә-йөҙ килеп бәрелешкәндә төп ҡағиҙәләрҙең береһе булды. Төрлө яу ысулы ҡулландылар. Дошманды тоҡҡа индереү, бүлгеләү, көстәрен һуҙыу... Бөгөн дә шул бурыс төп алым буласаҡ. Иң

мәһиме – уларҙы дүрт сәкрым ерҙә артта ҡалған урманға индереү. Ҡыуғынсылар урманға инһә, уларға ике яҡтан боҫконда торған Буҙаҡайҙың һәм Ҡушағаның атлылары ябырыласаҡ. Урманға етмәгәндәренә лә түбәлектәр артында торған һыбайлылар ташланасаҡ. Эш нәҡ Иҫәнгилде менән Аятбай абыҙ тәҡдиме буйынса килеп сығасаҡ. Көндөҙ үк юлға сыҡҡан барын, ҡыуаҡан, тиләү, ҡара табындар Үрләде урманында туҡтанылар. Кис һамар бейеклегенә менеп Ҡорасан йылғаһы буйында ҙур табор булып урынлашҡан ҡалмаҡтарҙың усаҡ уттарын күҙәттеләр. Бер-ике боҫконсоно ҡалмаҡ таборына үк ебәрҙеләр. Ялан ҡараңғылығы уларҙы ышаныслы һаҡланы. Сынтимер менән Әмержан был бурысты бик яҡшы башҡарҙы. Таң беленә башлағанда улар имен-аман үҙ туҡталыштарына әйләнеп ҡайтып, ғәжәйеп шикле күренгән хәл-әхүәлде йөҙ баштарына еткерҙеләр. Тиҙ генә тағы ла ҡор йыйылды. Сынтимер менән Әмержан төркөмө төн ҡараңғылығында ҡалмаҡтарҙың арбалары янына үк шыуышып барып еткәндәр. Ниңәлер тирмәләре бөтә һүтелеп, арбаларына тейәлгән. Аттары ла тышалмаған. Барыһы ла теҙгендәренән арбаларына бәйләнгән. Эйәрле бер ат та күренмәй. Ситтә, яланда ла ат бышҡырғаны ла, кешнәгәне лә ишетелмәй. Бөтәһе лә – кем арба аҫтында, кем арба өҫтөндә хырылдай. Һөңгө тоҡан дүрт ҡалмаҡ ҡына арбаларҙы уратып һағауылда йөрөй. Тимәк, туҡталыштарының һәр ҡиблаһында берәр һаҡсы йөрөп тора. Һәр береһе үҙенән уңдағы менән дә, һулдағы менән дә осрашып һөйләшмәйенсә, ҡулдарын ғына күтәреп бер-береһен сәләмләйҙәр ҙә, тағы ла үҙ йүнәлештәрендә хәрәкәт итәләр. Һәр ике һаҡсы осрашып айырылған ер бер ни тиклем ваҡытҡа асыҡ ҡала. Бына шул асыҡлыҡтан файҙаланып Сынтимер урҙа эсенә инде. Сөнки ҡалмаҡтар арбаларын түңәрәкләп, бер-береһенә төкәп тигәндәй ҡуйып, ҙур ғына урҙа эшләп, уның эсендә лә асыҡ һауала хырылдашып йоҡлайҙар. Сынтимер ятҡан килеш арбаларҙы сама менән иҫәпләп сыҡты. Ун тапҡыр тәнендәге бармаҡтары һаны ине арбалар.

Артта шикле тауыштар килгән кеүек булғас, ул кире, сығыу йүнәлешендә шыуышты. Һаҡлыҡ өсөн ян-яғына ҡаранһа ла, һөңгөлө ҡалмаҡты күрмәне. Артта боҫоп ҡалған Сабырҙыны һәм Нәғимйәнде тиҙерәк табыу өсөн алға шыуҙы ла шыуҙы. Шул саҡ ул ваҡ ҡырсындың бер туҡтауһыҙ ҡыбырлауын күреп, шул урынға шыуҙы. Килеп етһә, ни күҙе менән күрһен: Сабырҙы менән Нәғимйән бәйле кеше янында ултыралар. Теге кеше әйләнә лә тулғана, аяҡтары менән тибешә. Тиҙ төшөндө Сынтимер хәл-әхүәлде. Һағауыл ҡалмаҡ һөңгөһөн һалып, ул-былды белмәй Сабырҙы менән Нәғимйәндең янына килеп хәжәткә ултырған. Шул арала әҙер табышты йығып, ауыҙына тиҙ генә түбәтәй тығып,

ҡайыш менән ҡулдарын һәм билғау менән күҙен бәйләп һалып та ҡуялар. Ҡалмаҡты һөйрәп тиҙ генә ҡайтыу яҡҡа йүнәлделәр. Аттары бәйле торған ҡыуаҡта уны ҡулдары бәйле көйө әйәргә мендерҙеләр ҙә, Сабырлы үҙе атҡа арттан менгәшеп, ҡайтыу яҡҡа киттеләр. Бара торғас, ҡалмаҡ нисектер ауыҙындағы түбәтәйҙе теле менән төртөп төшөрөп, үҙ телендә баҡыра башланы. Шунда уҡ арттан суғырмаҡ дәү йоҙроҡ яңағына әләгеүҙән ул ҡысҡырыуҙан туҡтаны. Улар артынан һис бер кем ҡыуа төшмәне. Йыраҡ китеп өлгөргәндәр ине ҡалмаҡ урҙаһынан.

Йөҙ башы Иҫәнгилде ғүмере ағышының үткән ун йыллыҡтарында күп яуҙарҙа ҡатнашты. Уға күп тапҡыр дошман менән ҡылыҫҡа ҡылыс, боғаҙға боғаҙ килеп алышырға тура килде. Иң алда кем менән, ниндәй көс менән һуғышасағыңды белеү мотлаҡ. Дошмандың ҡоралланыуы, ҡайҙа урынлашыуы, уның йәйәүлеме, аттамы булыуы, яратҡан һуғыш алымы, маҡсаты, урындағы ерһыуҙың уға ҡулаймы, әллә киреме икәнен белеү ҙә бик мөһим. Иҫәнгилде һуғыш алымдарын күп өйрәнде. Өйрәнде, тип әйтеү әҙ. Ул һуғыштың төрлө алымдарын үҙе уйлап тапты, йәштәргә өйрәтте, уларҙы ысынбарлыҡта ҡулланды. Ҡаршы яҡтың ғөрөф-ғәҙәтен, телен өйрәнеүҙе лә үҙенә ҙур бурыс итеп ҡуйҙы.

Зиһене үткер, хәтере бик яҡшы ине Иҫәнгилденең. Үткән ҡырҡ-илле йыл ҡалмаҡтар менән бер туҡтауһыҙ һуғыш, бер туҡтауһыҙ бәрелештәрҙә үтте. Ҡалмаҡтарҙың төп маҡсаты – башҡорттарҙы ҡырыу, уларҙың ерҙәрен баҫып алыу, Уралға хужа булыу. Рәсәй батшалығы ике йөҙлө сәйәсәт алып барҙы. Һүҙҙә ҡалмаҡтарҙың башҡорттарға һөжүмен хупламаған кеүек булһа ла, ысынбарлыҡта ул уларға йәшерен генә һуғыш ҡоралдары бирҙе, һөсләтте лә. Башҡорттарҙың Рәсәй мәнфәғәтен яҡлап һәм наҡлап Аҙау һуғышында, шведтар менән булған төньяҡ һуғыштарында Иҫәнгилде ерҙәштәре менән ярһыу һуғышты. Аҙау һуғышында ҡорҙашы Алдар Иҫәнгилдин менән төрөктәр яғынан батыр булып сыҡҡан Сәркәш, Ҡаф кешеһе һуғышын да күрҙе. Алдар Сәркәште еңде. Быныҡ өсөн Петр I батша һәм уның янаралы башҡорттарға ут төкөрә торған мылтыҡтар таратып бирҙеләр. Уныҡ менән ҡулланырға ла өйрәттеләр. Был ваҡиғалар күптәнге хәтирәләр. Ә бөгөн, ул хәҙер үк, әсир ҡалмаҡтан тарғауыт һөйләшендә һорау аласаҡ.

Сынтимер менән Сабырлы ҡалмаҡты аттан һөйрәп төшөрҙөләр ҙә, Иҫәнгилде менән Аятбай алдына йөгөнләтеп ултырттылар. Күҙен һәм ҡулдарын системәр. Ҡалмаҡ ике усын бергә ҡуйып бите алдына килтерҙе лә, бер туҡтауһыҙ Иҫәнгилде менән Аятбайға баш эйергә кереште. Иҫәнгилде һул ҡулы менән ҡылысының тотҡаһы башындағы әпесен усына керетеп тотоп, ҡамсы тотҡан уң ҡулы менән ҡалмаҡҡа торорға ымланы. Ул яй ғына торҙо. Әммә

ҡулдары һаман да кеселекләнеп табыныу ишараһында, ә ике усы ауыҙы тирәһендә бергә ине. Был күренешкә шаһит булған тирә-йүн, Аятбайҙың ҡул һелтәүенә буйһоноп ситкә китте. Иҫәнгилде ҡалмаҡҡа яҡын уҡ килеп, ҡалмаҡтарҙың ҡайһы һөйләшендәлер һорауҙар бирҙе. Ҡалмаҡ ҡабалана-ҡабалана ниҙер мығырларға, унан йәнүб менән ғәреп йүнәлешен күрһәтеп, бармаҡтарын тарбайтып, ниҙер күрһәтә-күрһәтә һөйләргә кереште. Иҫәнгилде уға һорауҙар бирҙе. Ҡалмаҡ уның һәр һорауына тәфсирләп яуап бирҙе. Ысынбарлыҡта нисек булғандыр, әммә һорау алғанды ҡарап тороусыларға ул шулай күренә ине.

Ярайһы уҡ яҡтырҙы. Ҡояш әле алыҫта, ер менән күк тоташҡан урындан килеп сыҡмаған. Әммә уларҙың бергә тегелеп ямалған йөйөнә ҡарағуҫкыл ептәрен үргән дә үргән. Ул ептәр һәр мәл һайын ҡалыная ла ҡалыная. Хатта болоттоң йоҡа, нәҙек еренән үтә сығып, еүеш зәңгәр офоҡҡа алһыу нур суҡтарын таға. Ул суҡтар тирә-йүнгә яҡтылыҡ таратып киңәйә лә киңәйә. Иҫәнгилде ҡалмаҡҡа киҫкен генә ниндәйҙер әмерҙәр бирҙе. Ә ул, ризалығын белдереп, башын һелкте лә һелкте. Унан һуң Иҫәнгилде барлыҡ йөҙ һәм иллелек башлыҡтарын саҡырырға бойорҙо. Егерме биш-егерме ете кеше һә тигәнсе йүгерешеп килделәр. Ҡалмаҡтың һөйләүе буйынса, хәл былай була. Убуша ҡалмаҡ Иҫәнгилдегә былай тип һөйләй: «Оло Аюка тайша барлыҡ далаға таралған ҡалмаҡ тайшаларын Үр һәм Ҡыҙыл йылғаларының Яйыҡҡа ҡойған аралығына ойошорға ҡушҡан. Сөнки шул аралыҡта Ҡыпсаҡтар, Бөрйәндәр, Таңғауыр, Үҫәргәндәр берләшеп, Дуғар һәм Серен тайшаның меңлектәрен Яйыҡ киҫеүендә бүлгеләп, сапҡыслап далаға таратҡандар икән. Шуға ла ул был хәбәрҙе алыу менән, башҡорттарҙан үс алыу ниәтендә, уларға ҡаршы төйнәлергә әмер ҡылған. Яйыҡ башына яу сабырға әҙерләнгән Хо Орлуҡ тайшаның хәләфе Мунсаҡ тайшаның ваҡытлыса бөтә ылауҙарын ҡалдырып, ғәскәри атлылары менән тиҙ генә көньяҡҡа китеүе булған. Ылауҙар янында бисә, бала-сағалары, ҡарауылсылар һәм мал-тыуар көтөүселәре генә ҡалған икән...»

– Уландарым, ырыуҙаштарым, ағай-эне ҡандаштарым! Тамъян-Түңгәүер, Бөрйән-Ҡыпсаҡ, Үҫәргән туғандарыбыҙ үҙҙәрен генә һаҡламайынса, дошмандың көстәрен үҙҙәренә ҡаршы алып, беҙгә лә ҙур ярҙам күрһәтәләр. Дошман беҙгә аңғармаҫтан арҡаға күп тапҡыр бысаҡ ҡаҙаны. Бирешмәнек. Еребеҙҙе әлегә һаҡлай алдыҡ. Әммә һуңғы илле йылда беҙ Шәреҡ яҡтан, Тубылдан бында тиклем һикһән саҡрым ер, тауҙарға сигендек. Тоҙло, көйшәмле, тарылыҡ, арпалыҡ ҡара туфыраҡты йуғаттыҡ... (юғалттыҡ, диалект һүҙе) Ике көс яйлап баҫа. Тубыл ярындағы Арал утырағынан Муйнаҡ баһадирыбыҙ тоҡомдары ла бире күсергә мәжбүр булды. Ҡалмаҡтар беҙгә шәреҡ-йәнүбтән (көнсығыш-көньяҡ) ябы-

рылһа, урыҫтар шимал-ғәребтән (төньяҡ-көнбайыш) баҫалар. Шуға ла беҙ Тубылдан Уй, Яйыҡ, Мейесле баштарына күстек. Әммә ваҡытлыса ҡалдырған ерҙәр мәңге беҙҙеке буласаҡ. Иманыбыҙ камил, – тип доға ҡылды Иҫәнгилде. Уға ҡушылып йөҙлөктәр барыһы ла тубыҡланып доға ҡылды. Унан тауышын әкренәйтә биреп дауам итте. – Ҡалмаҡтар кисә кис бөтә мал-тыуарын, ылау арбаларын ҡалдырып, Ур һәм Ҡыҙыл йылғалары тамағына киткәндәр. Беҙҙең мөлкәтте, байлыҡтарҙы күп урланылар, таланылар. Йыш ҡына Бохараға алмашҡа ебәрелгән алтын янсыҡтарыбыҙ ҙа улар ҡулына күсә. Бөгөн беҙгә уңайлы мәл. Улар беҙҙең алда ғына, Ҡорасан буйында. Мал-тыуарҙарыбыҙҙы кире ҡайтарайыҡ. Һарыҡ көтөүҙәре менән бисә-сәсәләрен далаға ебәрербеҙ. Әре мөгөҙлө һәм йомро тояҡлыларҙы үҙебеҙгә ҡыуабыҙ. Унда, ылауҙары янында һаҡҡа ҡалған 150–200 яугирҙары бар. Уларҙы ҡоралланы. Ҡаршы һуғышһалар, аяу юҡ! Һуғышмаһалар, ҡоралдарын биреп, беҙгә мал ҡыуышһын, аҙаҡ бесән сабырға өйрәтербеҙ. Төҙөк арба-ылауҙарҙы алырға. Бала-сағаларына ҡорал күтәрмәҫкә. Тыңлауһыҙ, ҡаршылашыусы бисәләре ҡамсы татыһын. Ҡалмаҡ далала әсе ҡатыҡһыҙ һис бер аш һәм әсемлек әсмәй. Һыуға ла әсе ҡатыҡ һалып, айран яһап әсә. Шуға ла иң тәүҙә ығы-зығы алышта тире тирһыҡтарына иғтибар итергә. Уны йә бысаҡ, ҡылыс менән ярырға, йә үҙебеҙгә атҡа, арбаға һалыу отошло. Әммә әсмәҫкә. Уларҙың ҡымыҙҙары беҙҙеке кеүек түгел. Айырым болғар шарттары булмағанлыҡтан, бейә һөтөн дә, һыйыр, кәҙә, һарыҡ һөтөн дә бергә ҡушалар. Уға йә иҫертергә, йә дошманды маҡтап-ҡуптап эсереп үлтерергә тиле үлән һутын йә орлоғон ҡушалар. Һаҡ булыу лазым! Быны һәр һуғышсы белергә тейеш. Ҡаҡлап киптерелгән иттәренә лә йылан ағыуын тамсылатып һибеп, тапһалар кесерткән япрағына төрөп, нәҙек ҡайыш менән бәйләп һаҡлайҙар. Ул иҫкермәй ҙә, еҫләнмәй ҙә. Ас саҡта ундай итте ашағы килеп тора. Еҫе лә һарымһаҡ кеүегерәк. Ә хәҙер тиҙ генә аттарға... Ҡуҙғала башлаған урҙаны ҡамап тотоп буйһондорорға. Әгәр түңәрәкләп ҡуйылған арбалар ҡуҙғалмаһа, көтөргә. Сөнки уларға арбалар түңәрәгендә йөрөп һуғышыу, ҡаршылыҡ күрһәтеү өсөн еңел буласаҡ. Һәр атты үҙ ҡамытына, үҙ арбаһына екһендәр, унан юлға һуҙылһындар... Нәҡ шул саҡта беҙгә уларҙы өҙгөлөү еңел булыр. Шуны белең. Был юлы мин һеҙгә ҡеүәт өрөп алдан бармам. Бисәләр һуғышына алдан барыу абыҙға ла, миңә лә гонаһ кеүек. Һәр йөҙ башы дөйөм күрһәтмәне тотоп, йөҙлөк өсөн генә үҙ ҡарарын сығарһын. Арбалар һаны, Сынтимер иҫәпләүе буйынса, ун тапҡыр бармаҡтар һаны булғас, уны сама менән унға бүлеү маҡсатҡа уңыш килтерер. Беҙҙең йөҙлөктәр унан күберәк. Шуға күрә бөтәгеҙ ҙә болашҡа инмәй. Шыбаға тотошоғоҙ. Ун йөҙлөк керһен болашҡа. Һәр береһенә егермешәр арба тура килә.

Болашҡа инмәгәндәр түгелгән-сәселгәнде жыйһын. Алғасҡы булып иң кәме ике йөҙлөк 5–7 саҡрымда алда һағауылда булһын. Улья-табыш йыйыу бүлеген йөҙ баштары Әбдрәхмән, Өмәрҡул ҡараһын. Ут таба торған ышҡыуыстарын да ҡарарға кәрәк. Нисек икән? Күп һанлы халыҡҡа ит, һурпа бешерә торған ҡаҙандарын иң алда алырға кәрәк. Уны улар ҡытайҙарҙан алған булһа кәрәк. Ҡаҙаҡтарҙа ул юҡ. Унан... Яраларына ниндәй үлән ябалар, һибәләр икән? Шуны асыҡларға кәрәк. Уларҙың бисәләренең араһында табиплыҡ менән шөғөлләнеүсе сихырсылары күп була. Уларҙы үлтерергә лә, ҡамсы менән туҡмарға ла ярамай. Улары буйһоноусан түгел, үҙ рухтары, үҙ тәғлимәттәре көслө. Уларын тирегә төрөп, бәйләп, ярлап алып ҡайтыу кәрәк үҙебеҙгә. Табиптары араһында йәштәре лә була. Беҙгә шулары ҡиммәтерәк...

Көркәк армыты менән Ҡырҡты араһында ҡәбилә-ара һағауыл сапҡындар тора. Әгәр Бөрйән-ҡыпсаҡтар яғынан Күбәләк-Тиләүгә һәм беҙгә, Барын, Ҡара Табындарға ярҙам һорап хәбәр булһа, Әбдрәхман менән Өмәрҡул йөҙлөктәре йорт һаҡлап, бында ҡала. Ә беҙ Ҡырҡты, Ирәндектең ҡояш алдына сабабыҙ. Әгәр Ҡыпсаҡ-бөрйәндәрҙән хәбәр булмаһа, тимәк, улар «дундук»тарҙы тар-мар иткән. Йә булмаһа улар һуғыштан яйлап, Һаҡмар тамағына һәм унан ары Һамар яғына киткән булып сыға. Әсир ҡалмаҡ Убуша ылауҙарға иртә менән үк юлға сығырға һәм тауҙарға – Уралға яҡын килмәҫкә, дала менән Яйыҡтың тик һул яры менән барырға ҡушылған, – тине.

– Тимәк, ҡалмаҡтар беҙҙең Үҫәргән, Бөрйәндәр менән ҡылыс сабышмайынса Һамар яҡҡа китеүҙәре бик ихтимал, – тип һүҙгә ҡушылды Аятбай абыҙ ҙа. – Әгәр шулай икән, бында ҙур шөбһә ята. Ул урыҫ батшаһы менән беҙгә ҡаршы ғаҡыт (килешеү) төҙөмәй микән? Ул ҡалмаҡтарҙы икенсе берәй яуға һөсләмәй микән? Борон-борондан бит уларҙың алымы – бер халыҡты икенсеһенә һөсләү, унан бүлгеләү... Ай-һа-а-ай... Шулай булыуы бик тә мөмкин.

Ҡалмаҡтар әлегә ҙур ике төрөмдә йәшәйҙәр. Берәүҙәре беҙҙән көньяҡтаныраҡ үткәндәре Тын менән Яйыҡ араһында тигән хәбәр алған инек Ҡәйеп хандан. Бөгөн дә хәл ҡатмарлы беҙҙең өсөн. Юрматынан, Туҡ, Соран яҡтарынан сәләм килмәйенсә беҙ хәләхүәлде асыҡ белә алмабыҙ. Үткән йылдары уларҙың Аюка хандарының бисәләре үҙ-ара ыҙғыш сығарып, береһе икенсеһенең ҡорһағын яра. Быға үс итеп, үлгән бисәһенең улы Санжи Джаба атаһына ҡаршы ҡылыс күтәрә. Әммә хәл үлешкә-һуйышҡа барып етмәгән. Атаһы үҙе улын үлтертергә булғас, Санжи инәһенең ырыуы халҡын алып кире Жунғар еренә ҡайта. Ҡапыл бер төптән, бер ғәскәри көс булып килгәс, әлек беҙ уларға ҡаршы ныҡ тора ал-

маныҡ. Уныһын олораҡтар хәтерләйҙер. Тубыл буйында бик күп малды, зиннәтле мөлкәтте талап алып киттеләр. Беҙ ул ваҡытта үҙ олоҫобоҙҙа төрлөбөҙ төрлө ерҙә булғанлыҡтан, тиҙ генә йыйнала алманыҡ. Аҙаҡ йыйналып, арттарынан ҡыуһаҡ та етешә алманыҡ. Биш-алты көндә 200 саҡрымдай ер киткәндәр. Шуныһы ауыр: улар бөгөн беҙҙең менән бергә урыҫҡа ҡаршы күтәрелергә һүҙ бирәләр. Ә иртәгәһенә беҙгә арҡалаш булған нуғайҙарға, ҡаҙаҡтарға йә беҙгә һөжүм итәләр. Бик мәкерле. Ул халыҡтың бик йыраҡта, шәреҡтә, иле булһа ла, ере юҡ. Шуға ла улар ер даулап халайыҡтар аша беҙгә килеп еткәндәр. Төп маҡсаттары – ерле булыу. Ерле булһалар, яйлап илле лә булыуҙарына ышаналар. Балаҡайҙарым! Бауырҙаштарым! Беҙҙе аяманылар бит. Ҡарғаның ояһын, мамыҡтарын туҙырып боҙһаң ғына башҡаса ул тирәгә оя ҡорорға килмәй. Бында ла шул! Еребеҙҙе, Уралыбыҙҙы сит бауырға бирмәйбеҙ! Беҙ уны мәңге һаҡланыҡ, яҡланыҡ. Хәҙер үк аттарыбыҙға менәбеҙ ҙә ҡарғалар ояһын туҙырырға ташланабыҙ. Был беҙҙең аҡһаҡалдар ҡороноң фарманы...

Аятбай абыҙҙың ярайһы уҡ оҙонға һуҙылған өндәүнамәһенән, ә ысынбарлыҡта – фарманынан һуң, ҡоймалай булып алда торғандар ҡылыс, хәнйәр тотҡаларын тимер йәүшәндәренә тейеп өйкәлгән, сыйылған, ышҡылған тауыштар сығарып, ҡайындарға бәйле торған аттарына йүгерҙеләр. Инде йөҙ йыл буйы башҡорт далаһын, башҡорт тауҙарын һәр саҡ шомда, һәр саҡ һаҡта тороуға мәжбүр иткән был илбаҫарҙар исемен ишетеү менән үк ҡандары тамырҙарында һулҡылдай башлаған Буҙаҡай менән Туғаҙаҡ кеүектәр күптәнән инде ярһыу дүнәндәре өҫтөндә бейейҙәр ине. Йәше инде етмеште арҡалауына ҡарамаҫтан, әлегә һүҙ барғанда өндәшмәйерәк торған Амангилде, барыһына ла, сафта үҙ урындарын алыр өсөн, оран-фарман ҡысҡырҙы.

Амангилде ҡарттар ҡоронда иң ололарҙың һәм йоғонтололарҙың береһе. Атаһы уның Бейғара. Ҡара кеше, йәки Көсөк батыр. Үҙ ваҡытында ул, Амангилде, атаһы һәм уның яуҙаштары менән бергә Төмән ҡалаһына, уның тирә-йүнендәге ҡәлғәләргә лә байтаҡ һөжүм итеп емерҙеләр. Ләкин урыҫтарҙы ҡыуып бөтөрөп булманы. Улар көнбайыштан килделәр ҙә килделәр. Килделәр ҙә, тағы ла төҙөнөләр. Беҙҙең күп ултыраҡтарыбыҙҙы яндырҙылар, мал-тыуарҙы, бигерәк тә йылҡыларҙы сәнстеләр, ҡылыс менән саптылар. Ә эре мөгөҙлөләрҙе һәм һарыҡ-кәҙәне алып китер булдылар. Уларҙың иң яратҡан һөжүм алымы – төндә йорттарға, аҙбар-ҡаралтыға ут төртөү. Төндә өйөңә ут төртөп, кешеләргә ҙур ҡурҡыу, шөһбә һалғас, халыҡ ут һүндереү менән мәшғүл булғанда, ул яһилдар ҡоралһыҙ, ғәйепһеҙ йән эйәләрен сапҡысларға керешәләр. Иң яһил, иң намыҫһыҙ, иң ҡанлы һуғыш алымы был. Амангилде шулай фекерләй ине. Шуның өсөн дә уның күңелендә

урыҫ ни ҙә, ҡалмаҡ ни – икеһе лә баҫҡынсы, икеһе лә күскенсе. Икеһе лә беҙҙең ергә болашалар, дошмандар...

Барлыҡ ҡәүем, барлыҡ ғәм Иҫәнгилде менән Аятбай абыҙ нимә һөйләһәләр ҙә, Амангилденең фекере менән килешелгән, уның әмерен, уның вәғәзен еткереүҙәрен беләләр.

Тиҙ арала барлыҡ ғәскәр ат өҫтөндә ине. Һәр йөҙлөк үҙ урынын ала килде, ғәскәри сылбыр оҙоная барҙы. Аттарҙы яу алдынан арытмаҫ өсөн һәр йөҙлөк башы үҙ тәғәйененә ҡәтғи күрһәтмә бирҙе. Тыныс, әммә ынтылыш менән барырға. Аттарҙы ярһытмаҫҡа... Шулай тыныс барҙылар улар дүрт-биш саҡрым ерҙе.

Бына бер ваҡыт Тамъян ырыуының шул ҡалмаҡ баҫыуынан янтайып ун йыл тирәһе элек ташлап киткән Сермән ултырағы яғынан алғасҡылар сабып килеп, алда барған йөҙлөк янына туҡтанылар. Былары боҫконда һәм шымсылда булған Сынтимер менән Әмиржандың егеттәре ине. Улар ҡалмаҡ урҙаһының ултыраҡтарынан ҡуҙғалып, инде ике саҡрымдай сылбырға һуҙылыуҙарын, алты өйөр йылҡының, 2 көтөү эре мөгөҙлөнөң һәм 3 көтөү ҡуйҙың алдараҡ ҡуҙғалып китеүҙәрен хәбәр иттеләр.

Был хәбәр билдәле булғас, тағы ла йөҙлөктәрҙе йыйҙылар. Ҡояш ярайһы уҡ күтәрелеп тә өлгөрҙө. Урлəне һәм Һамар ҡалҡыулығы араһын, уларҙан аша Ҡорасан йылғаһы үҙәндәрен шыйыҡ томан баҫты. Шыйыҡ булһа ла, ҡуйы булһа ла томан томан инде ул. Күрем ерҙе күремһеҙ итә. Күремһеҙ булһаң хәрәкәтһеҙ ҙә ҡалаһың. Барған йүнәлешеңде лә юғалтыуың ихтимал...

– Томан оҙаҡ ятһа ла, ятмаһа ла ул ҡалмаҡтар өсөн бик хәүефле күренеш, – тип фекер йөрөттө Амангилде менән Иҫәнгилденең йөҙ башлыҡтары. Улар томанлы көндәргә өйрәнмәгән. Улар ҡоро дала кешеләре. Күп ерҙәрҙе иңләгән, күп даръяларҙы тоғро ҡара аты менән бергә кискән Амангилде ер хәритәһен бик яҡшы белә. Ҙур йә бәләкәй булған һәр яуҙа буласаҡ айҡалаш еренең хәритәһен белеү, еңеүгә өҫтөнлөк килтерә. Сөнки ер хәритәһе ғәскәрҙең ҡайһы өлөшөн ҡайҙа ҡуйыу кәрәклеген үҙе әйтә.

Әлбиттә, еңеүгә зар һәм зиһене үткер булған хәрби етәксегә. Амангилде үҙе һәм янындағы хәләфтәре нәҡ тә шундайҙарҙан ине. Йөҙлөк, иллелек, унлыҡ баштарын ҡуйырҙан алда, дөрөҫөрәге, ул кешенең биләнәсәк вазифаға яраҡлы булыу-булмауы аҡһаҡалдар ҡорона сыҡҡанға тиклем өйрәнелде. Буласаҡ етәксе тәбиғи булмышынан тыш, өҫтәмә рәүештә башҡаларҙан айырылып торған түбәндәге сифаттарға эйә булырға тейеш ине: батырлыҡ, зирәклек, ғәҙеллек, ҡырҡыулыҡ, тиҙ һәм дөрөҫ ҡарар ҡабул итә белеү, олоно ололау, кесене өйрәтә белеү, талапсанлыҡ, үҙ һүҙендә тора белеүсәнлек, намыҫлылыҡ, көс, ғәйрәт вә ҡеүәтлелек булһа. Һүҙ оҫталығы, ҡорал менән оҫта эш итә белеүе, абруйы ла ныҡ иҫтә тотолдо. Ундай сифаттарҙы Аллаһы Тәғәлә һәр кемгә

мул итеп бирмәгәнлектән, ул сифаттар һәр ваҡыт алмашынып торған аҡһаҡалдар ҡоро ағзалары һәм атай-инәй, ҡартатай-ҡартинәйҙәр тарафынан балаларға, бигерәк тә малайҙарға өс-дүрт йәшенән башлап өйрәтелә ине.

Петр батшаның башҡорттарҙы үҙ өндәүнамәһе менән сақырып, уның төньяҡ һуғыштарында, Аҙау һәм башҡа һуғыштарында ҡатнашып дан ҡаҙанғаны өсөн тотҡаһы алтын-көмөш менән семәрләнгән ҡылыс, тимере өҫтөнән көмөш менән ялатылған торҡа, еҙ өҙәңгеләр, суҡлы, семәрле балаҫлы әйәр менән бүләкләнгән Амангилде улы Иҫәнгилде һәм башҡалар ҙа был ерҙең хәритәһен бик яҡшы беләләр.

Алғасҡылар хәбәренән һуң йыйылған фекер алышыуҙа түбәндәге ҡарар ҡабул ителде.

– Мал-тыуарҙы тиҙләтеп йыраҡ алып китмәһендәр һәм ҡаҙаҡтар алып ҡуймаһын өсөн уны ылауҙарҙан айырырға ла, тура Көркәк, Ҡырҡты тауҙары яғына ҡыуырға. Һаҡсыларын юҡ итергә, ә көтөүселәрен мәжбүрилеккә төшөрөргә... Әгәр буйһонмаһалар, баҡыйлыҡҡа оҙатырға... – тине Амангилде.

– Башҡаса сара юҡ, – тип дәлилләне Аятбай абыҙ.

– Быға беҙҙең өс йөҙләгәбөҙ етә. Иң алда өсйөҙләктең дөйөм көсө менән көтөүҙәрҙе һаҡлаусыларҙы юҡ итергә, – тип дауам итте Иҫәнгилде. – Унан һуң өс-дүрт унлыҡ яралыларға ярҙам итеү, уларҙы алып ҡайтыуҙы ойоштороһон. Ҡалған ике йөҙлөк малтыуарҙы тауҙарға ҡыуыу, әгәр ҡамасаулыҡ булмаһа, тура үҙебеҙҙең олоҫҡа әйҙәр кәрәк. Был мөһим эш...»

– Был эште Серәкәй, Мулдаш, Әмиржан йөҙлөктәре башҡарһын. Ә ҡалғандар ылауҙарҙы бүлгесләргә, үҙебеҙгә алырға. Арбаларын ватмаҫҡа, аттарҙы сапмаҫҡа, ҡамыт эпсен-төпсөндәрен ҡырҡмаҫҡа...

Ә хәҙер алға! Илебеҙ, еребеҙ өсөн! – тип ярһып ҡысҡырҙы Иҫәнгилде. Уның көр, көслө ауазы барыһына ла бойороҡ булып ишетелде. «Алға! Алға! Алға!» тип унарлаған йөҙлөктәр элә-тереп алды. Йөҙәрләгән аттарҙың кинәт алға ынтылыуҙарынан ҡырҡма тояҡтары аҫтынан кәҫтәр, ваҡ таштар артҡа һибелде. Ынтылыш оҙаҡҡа ла барманы. Ваҡ-ваҡ түбәлектәрҙе, ике-өс уяҙлыҡтарҙы үтеү менән оҙон ғына арҡалыҡҡа һуҙылған ылауҙар күренде.

Байһарының, Янһарының, Сынтимер менән Әмиржандың артынан аҙау тештәре тамам нығынып, инде утыҡҡан 30 йәшлек Буҙаҡай менән 26 йәшлек Туғаҙаҡтың да йөҙлөктәре сая ҡыҫҡырып, оран һалып берҙәм сабалар ине. Мең михнәтте: һыуһыҙ, тояҡ көйҙөрөрлөк эҫе сүллекте лә, диңгеҙ буйындағы ҡойма дауылды ла, бер бөртөк үлән ҡабам тип ике аршиндай ҡарҙы тибеп ҡыш сыҡҡан, әммә ялын да, ҡарта майын да ташламаған һуғыш аты –

ҡарыуҙы ҡара йүгеректе менгән Амангилде лә, һыр бирмәҫ, намыҫсан бурыл ҡонанға менгән Аятбай ҙа, һөйләшеп ҡуйылғандай, икеһе бер юлы сыңлатып ҡылыстарын ҡындарынан һурып сығарҙылар.

Оҙон арҡалыҡҡа менеп еткән ылауҙарҙы һаҡлар өсөн ҡалдырылған йөҙ иллеләгән һуғышсы ҡалмаҡтар, түбәндә, эле уйһыулыҡта болашмаҡ сабышып килгән бер нисә атлы йөҙләккә аптырап, ни эшләргә лә белмәй ҡарап торғандан һуң, уларҙы шом, кинәт ҡурҡыу тойғоһо баҫты. Улар йөҙләктәргә ҡаршы сығырға ла, ылауҙарын һаҡлап ни рәүештә дошмандарына ҡаршы сығыуҙы ла белмәнеләр. Ғәҙәттә, йыйналып, бер йоҙроҡ булып аңғармаҫтан баҫырға өйрәнгән был ҡалмаҡтар, «башҡурт» тип аталған халайыҡ иле сигенә килеп еткәс йыш ҡына үҙҙәре быға дусар булдылар. Ҡалмаҡ – дала балаһы. Ул тауҙарҙы, бигерәк тә урманлы тауҙарҙы үҙ итмәй. Уға Уралдың ҡалын урмандары ла дала кеүек үҙ түгел. Оран һалып, даулап, шул орандарынан үҙҙәре дәрт алып, ҡурҡыныс ағым булып килгән башҡорттар ҡалмаҡтарҙы үлем сигенә тере көйөнсә ҡуйҙы. Иң алда улар үҙ-ара сыуалыштылар, ылауҙары буйлап алға ла, артҡа ла сабауылланылар. Ә яу инде арҡалыҡ уртаһына етеп килә ине. Ҡарауыл һаҡсыларҙан, дөйөм ылау хәрәкәтенән һул яҡҡа иң алда өсәуһе айырылып сығып ҡасты. Уларға эйәреп тағы ла егермеләгән-утыҙлағаны бүленеп сығып сапты. Уларҙы туҡтатыр өсөн бер нисәуһе арлы-бирле сабауыллаһа ла, хәл үҙгәрмәне. Елдә йыйнаҡ ерҙән ситкә осҡан мамыҡтар кеүек таралып, далаға дөйөм ҡасыу бөтә ҡурғауҙы солғап алды. Кем ҡайһы яҡҡа теләй, шул яҡҡа далаға һирпелде. Ҡурғауһыҙ-ҡурсалауһыҙ ҡалған оҙон ылау эсендә лә сыуалыштар башланды. Кемдер арбалары менән йән-фарман алға, далаға ҡаса, ҡайһылары сәсрәгән осҡондай ситкә, ян-яҡҡа һибелде. Әммә арттан, өҫтәренә баҫып, ҡыйҡылап ылауҙың ике яғынан сапҡан Амангилде атлыларын күргәс, күбеһе аттарын туҡтатты ла, уларҙың теҙгендәрен тотоп ергә ятты. Ҡалғандары йә арба көмбәҙе эсенә, йә арба япҡағына тартылған ҡаты тире аҫтына ингәндәр ине. Былары баш һалыуҙы белгерткән алым булды. Сөнки көнсығыш халҡында ул осорҙа ғәреп илдәрендәге кеүек бирелеүҙең билдәһе булған ике ҡулды күтәреү йолаһы юҡ ине. Ергә ятыу буйһоноуҙы аңлата. Шуға күрә лә Байһары, Янһары йөҙләктәре далаға һибелгәндәрҙе тәүбәгә килтерергә кереште. Ҡояш көн уртаһына еткәндә Ҡорасан буйы тып-тыныс булып ҡалды. Малтыуарҙы әйҙәргә тәғәйенләнгән Серәкәй, Мулдаш һәм Әмиржан йөҙләктәре лә үҙ бурыстарын үтәп, өйөр-өйөр малдарҙы тыныс ҡына Урлән ҡалҡыулығына табан ҡыуалар ине инде. Өс көн тигәндә ҡалмаҡтарҙың көньяҡ Урал алды далаларында йәшәгән халыҡтарҙан талап алынған мал-тыуарҙың бөтәһе лә имен-аман

көнсығыш Табын ҡәбиләһе ырыуҙары араһында өләшеп алынды. Ситтән алған хайуандарҙан күсә килгән ғәҙәттәге үләт, малтыуарға теймәне. Яу ғәҙеллек, азатлыҡ даулаған яу булды. Шуға күрә лә уны «Хаҡ яу» тип баһаланы һуңынан Аятбай абыҙ.

Ҡулға төшкән әсир ҡалмаҡ ҡатын-ҡыҙҙарын, балаларын йәйләүҙәргә таратып биреүҙе Амангилде кәтғи тыйҙы. Әммә үҙҙәре теләгәндәрҙе балаларынан айырмайынса ырыуға ҡалдырыуҙы ла тыйманы. Ҡайһы бер осҡор егеттәрҙең ҡалмаҡ ҡыҙҙарының иң-баштарына ҡул һалыуҙарын да күрмәмешкә һалыштылар. Сөнки ҡыҙҙың ҡул башына уң ҡулыңды һалыу, йола буйынса, ул ҡыҙ минең кәләш, йә булмаһа минең кәләш буласаҡ тигәнде белдерә ине. Күҙе төшкән икән һәм ризалар икән, әйҙә, бергә булһындар. Унан һуң яңы ҡан өҫтәлеүҙең дә зыяны юҡ, буғай, тип фараз итте ҡор башы Амангилде. Ҡалмаҡтарҙан яулап алынған был халыҡтың күп өлөшө Табындарға кәрәкмәй ине. Сит дин, сит йола, сит еҫ сирҡандырҙы. Шуның өсөн дә уларға шул уҡ Ҡорасан йылғаһынан шәреҡтәрәк урман ситендә ер өйҙәр ҡаҙып, ғәҙәттәре буйынса, сит-ситенән ур өйөп урынлаштырҙылар. Һуйып ашар өсөн бер өйөр ҡуй ҡалдырҙылар. Әммә бер ат та бирмәнеләр. Әгәр ат бирһәк, бер ҡыйыу ҡалмаҡ ҡатыны үҙ тайшаларына әсирлектәре тураһында хәбәр еткерер, тип шикләнделәр.

Тиҙҙән үҙ йәйләүҙәренә, Көркәк, Ҡурташ, Рәҫтәк, Әүәләк, Уйташ, Ирәндек, Ҡомас буйҙарына ҡайтҡас та сапҡындар аша ҡалмаҡтарҙың Сивен Рабтан тигән тайшалары Илек йылғаһы буйына барлыҡ тигәндәй ғәскәри халҡын йыйып, йәнүбкә, Һырдаръя яғына йүнәлергә маҡсат итеүен белдерҙеләр. Был башҡорт иленә тыныслыҡ килеүе мөмкинлегенә билдә ине. Был хәбәр әсир ҡалмаҡтарға бик ауыр тәьҫир итте. Ҡасыу уйҙарынан улар төңөлдөләр кеүек. Ҡалмаҡ әсирҙәренә күҙ-ҡолаҡ булып сиратлап хеҙмәт алып барған иллелектәр уларҙың кәйефтәрен ырыу башлыҡтарына түкмәй-сәсмәй еткереп торҙолар. Киләсәктә уларҙың яҙмыштарын хәл итеү аҡһаҡалдар ҡороноң бурысы булды. Берәүҙәре ул ҡатын-ҡыҙҙарҙы ырыу-ара бүлешеп алып, ислам тәғлимәтенә килтереүҙе хуп күрҙе. Әммә муллалар ислам динен сит-ят кешеләргә көслəп тағыуҙы тыйҙы.

Икенселәре уларҙы яҙмыштарын ҡулдарына тоттороп, иреккә, далаға ебәреүҙе тәҡдим итте. Лəкин уларҙың Илеккә етеп хәбәр еткереүҙәренә шөбһәләнделәр. Өсөнсөләре уларҙы ҡаҙаҡтарға биреүҙе дөрөҫ тип тапты.

Аҡһаҡалдар ҡоронда был мәсьәләне оҙаҡ тикшергәндән һуң, ул һорауҙы ҡалмаҡтарҙың үҙҙәренең теләгенә ҡалдырырға тигән ҡарар ҡабул ителде. Ҡаҙаҡ ҡаны Әбделхәйер әсирҙәрҙе һорап ҡат-ҡат вәкил ебәрһә лә, башҡорттар уны Әбделхәйер теләгенә ярашлы эшләмәне.

Ә ҡалмаҡтарҙың теләге үҙ тайшаларын әҙләп табыу ине. Теләгәндәре һәм кәләш булғандары башҡорттар араһында ҡалып ерләште. Киткәндәре оҙон юлға сыҡһа ла юлда уларҙы Кесе йөҙ ҡаҙаҡтары үҙҙәренә әсирлеккә лә, бисәлеккә лә алдылар, ә балаларын көтөү көтөргә ҡуштылар. Башҡорт еренә хужа булып килергә ниәтләнгән ҡалмаҡтарҙың яҙмышы әсе булды. Ҡалмаҡ яуы баҫылғас, ил әҙ-мәҙ тыныслыҡ осоро кисерҙе. Ырыу-ара бәйләнештәр алыш-биреш, сауҙа көсәйҙе. Мал-тыуар бихисап артты, бала-саға үҫеп, яңы быуын утыҡты. Әммә көнсығыш башҡорт иленең азатлығына төньяҡ-көнбайыштан көсәйә килгән урыҫ дәүләте ҡулын ярайһы уҡ тыҡҡайны. Боронғо Исәт ҡалаһын баҫып алып, уны төп баҫҡыс яһап, унан Ибергә һикерҙеләр. Башҡорттарҙың төньяҡ һәм төньяҡ-көнбайыш ырыуҙарын үҙҙәренә балиғ итеп, яһаҡ та билдәләп ҡуйҙылар. Әммә көньяҡ һәм көньяҡ-көнсығыш башҡорттарына әле урыҫ хакимлығы килеп етмәне. Шулай ҙа урыҫ дәүләте матди яҡтан ярҙам итеп, уларҙы ситтә алып барған һуғыштарында ҡатнашыр өсөн саҡырып мөрәжәғәт итә килде. Ҡалмаҡтар менән ҡаҙаҡтарҙың һуғышы дауам итеүе урыҫ дәүләтенең Урта Азияға кереүенә ҡамасаулай ине. Сөнки һәр саҡ һуғыш өсөн төйнәлгән өс халыҡ теләһә ни ваҡытта ла берләшеүҙәре һәм рус донъяһына көслө һуғыуҙары мөмкин тип фаразланылар батшалыҡта. Киләсәктә улар башҡорт ерҙәрен төньяҡ-көнбайыштан һәм көньяҡ-көнсығыштан ҡәлғәләр, нығытмалар менән урап алырға ниәт ҡылдылар.

Башҡорттарҙың төрлө күтәрелеше, ҙур яуҙары осоронда дөйөм хәрби етәкселек һәм буйһонған атама хандары булһа ла, тыныс осорҙа уларҙың ырыуҙарын берләштергән дөйөм хакимлыҡ ептәре һүтелә ине.

Урыҫ батшалығына балиғ булған олоҫтарында ла ул балиғлыҡ иҫәптә бар һанда юҡ булды. Сөнки урыс дәүләтенең идаралығы Башҡортостандан алыҫта, Ҡазан хәрби олоҫлоғонда булып, вәкилдәре лә йылына бер-ике тапҡыр үтер булды. Урыҫ дәүләтенең иң ҙур сәйәсәте булып, Башҡорт илен баҫып алыу өсөн урта өлкәләрҙән рус милләтле халыҡтарҙы төрлө юл менән күсереү торҙо.


Урындағы ерле халыҡты ҡул аҫтында тотоу, һәм килгән урыс крәҫтиәндәре менән дә етәкселекте тотоу өсөн идаралыҡ баҫҡыстарын камиллаштырҙылар. Урыҫ идаралығы вәкилдәре, үҙҙәренең шымсылары, башҡорттар араһында йөрөгән татар руханиҙары һәм сауҙагәрҙәре аша башҡорт халҡы араһында булған үҙидаралыҡты һәм ғәскәри төҙөлөштө, уның күләмен һәм һәр төрлө кимәлен күҙәтеү аҫтында тоттолар. Әле бөгөнгө ваҡиғаларҙан элек үк Ҡазан хәрби олоҫлоғо-воеводаһы Апраксин батшаға бындай төшөнсәле хат ебәрҙе: «Был мәлгүн башҡорттар күмәк,

һуғышсан һәм ғәскәри бер милләт. Әммә Дон казактарындағы кеүек бөтә башҡорттар таныған дөйөм бер атамандары тыныс осорҙа юҡ. Шуға ла эштәре тураһында мөрәжәғәт итерлек дөйөм үҙәктәре лә юҡ. Һәр ырыуҙың үҙ идаралығы. Дөйөм милләттәре мәнфәғәтен Майҙан тип аталған дөйөм йыйындарында ҡабул итәләр...»

Ҡазан генерал-губернаторының был яҙма белдереүе шымсылар тарафынан уға, нигеҙҙә, дөрөҫ еткерелгән ине.

Ҡазандың хәрби олоҫо воеводаһы Апраксиндың яҙған был хаты батшаны һәм уның ярандарын тәрән уйға һалды. Көнсығышта хәҙер Петербург өсөн башҡорттарҙан башҡа ойошҡан бер көс тә юҡ. Урал алдында һәм артында ғәскәр ойошторорға һәләтле бер ҡәүем дә беленмәй. Башҡорттар араһына ебәрелгән шымсылар был турала хәбәр итеп кенә торалар. Ул яҡ, Таш тау, башҡорттар әйтмешләй, Урал тау мәғдәнгә бик бай булыу тураһында хәбәр килә. Улар, башҡорттар, алтын менән Бохара, Сәмәрҡәнд яғы менән сауҙа итә икән. Тимер, баҡыр иретәләр. Мәғдәнле ерҙәрендә асыҡ та, үҙе йомро, үҙе ябыҡ таш мейестәре лә бар икән.

Тимәк, уларҙың бөтә еренең хәритәһен эшләргә, шул хәритәлә мәғдәнле ерҙәрен билдәләргә кәрәк тигән фекергә килде батша һәм уның һанаттары.



ХӘТЕРҘӘ ҠАЛҒАНДАР

«Буғай васыятнамәһе» тигән эпик әҫәрҙең беҙҙең Барын-Табын ырыуы халҡы араһында телдән телгә күсеп йөрөгәнен бала саҡтан уҡ ишетһәм дә, уны тулыһынса белгән кешене 1970 йылдарға тиклем осратҡаным булманы. Уның айырым хикәйәттәрен өҙөк-һурыҡ белһәм дә, бер ваҡиғаға төрнәп һөйләп биреүсе юҡ ине. Беҙҙең төбәк тарихының теүәл бер билдәһеҙ осорон яҡтыртҡан был риүәйәт шиғри формаламы, әллә хикәйәтме икәнен дә белеү төбәлмәгән зиһенгә еңел түгел.

Берәүҙәр уның шиғри формаһын әйтә ине. Мәҫәлән, уның «Ҡасҡындар бәйете» тигән өлөшөн мин 1967 йылда уҡ Учалы районы Мулдаш ауылы аҡһаҡалы Ураҙаев Хаммат бабайҙың һамаҡлап йырлауын тулы, һүҙмә-һүҙ яҙып алып, ул осорҙа «Ураҡ һәм сүкеш» район гәзитендә (1967 йыл, 8 апрель) тәүләп баҫып сығарыуым үҙ ерен һәм тарихын һөйөүселәргә ҙур кинәнес булғандыр. Ул ваҡытта ерҙәшем, райондашым Рәүеф Насиров, шул гәзит мөхәррире булып, тәүге яҙмама шәһит булып, 1994 йыл сыҡҡан «Ата-бабам баҡҡан ер» китабында ҡулланды.

«Ҡасҡындар бәйетенә» байтаҡ авторҙар мөрәжәғәт итеп ҡараһа ла, мин Хаммат бабайҙан яҙып алған тексҡа бер генә лә һүҙ өҫтәй алманылар. Был бәйетте мин республиканың телевидениеһы, радиоһы аша ла башҡарыуыма халыҡ үҙе шаһит.

Шуныһы үкенеслерәк: ҡасҡын байҙарҙың эҙенән төшкән авторҙар был эпик әҫәрҙең төп ваҡиғаһын аңлай алмай, икенсе юҫыҡта эҙләнделәр. Әҫәрҙе, ғөмүмән, белмәгән, мәғәнәһен дә аңламаған кешеләр саҡ-саҡ уны һаҡлап йөрөтөүселәр дәрәжәһенә күтәрелмәнеләр. Ә Хаммат Ураҙаев, Хәжиәхмәт Ғәбитов, Кәрим Сәғитов бабайҙар, ҡартатайым Сәлимгәрәй кеүек төп һаҡлаусылар иҫкә лә алынманы. 1930 йыл 47 йәшлек ир уртаһы Сәлимгәрәйҙе бик етеш йәшәгәне өсөн ун йылға Соликамсктың

төньяғына һөргөнгә ебәрәләр. Етмеш йәшлек атаһы Яппар-Хажи ҙа Себергә – Иркутск өлкәһенә оҙатыла.

Яппар-Хажи – Мәккәгә хажға барған хажи. Зәйнулла ишан менән тығыҙ бәйләнештә була. Зәйнулла ишан Троицкийҙан ауылына ҡайтып киткән сағында Ҡорама ауылында йәшәгән Яппар-Хажи Ҡорамшинға кермәй үтмәгән. Олатайҙарым – аталы-уллы Ҡорамшиндарҙы 1930 йылдың 9 мартында ҡулға алып, ике санала өс милиционер ҡарауылы аҫтында Белорет төрмәһенә килтереп ябалар. Утыҙынсы йылдың уҡ йылы июнь көнөндә бөтә яҡын-тирә райондарынан йыйылған кулактарҙы ылауҙа көслө һаҡ аҫтында Мейәс станцияһына поезға алып китәләр. Ылау Ҡорамаға төш ваҡыты килеп керә. Өйҙәре янына еткәс, ҡартатайымдар милиционерҙарҙан кереп хушлашып сығырға һорай. Алдан әйтеп, һөсләтеп ҡуйылған халыҡ, бисә-сәсә, бала-саға лар йыйылып, кулактарҙы битәрләйҙәр, һүгенәләр, таш аталар, егәрле булып яҡшыраҡ йәшәгәндәре өсөн лағнәт оралар. Ҡартатайымдар ҡапҡа эсенә кергәс, барлыҡ мал-тыуар алынғанлығын, өй эсендә бер генә лә әйбер юҡлығын, ғаилә ағзаларының ҡайҙалыр һөрөлгәнлеген аңлайҙар. Яппар-Хажи ҡартатайым ҡарағастан буралған ун ике келәтенең бер мөйөшөнән һурып иҫке китаптар сығара ла, үҙенән бер аҙым да ҡалмай йөрөгән ҡаҙаҡ милләтле милиционерҙан төргәкте үҙе менән алырға рөхсәт һорай. Китаптар ғәрәп хәрефтәре менән яҙылғанына инанғас, рөхсәт була. Кулактарҙы тар-мар итеүсе кешеләр күҙенән йәшеренеп, 17 йәшлек инәйем Хәтимә атаһы Сәлимгәрәйҙе буш өйөнән төрткөләп сығарып, арбаға көслəп ултыртҡандарын ҡарап тора. 47 йәшлек оҙон буйлы, бәһлеүән кәүҙәле Сәлимгәрәй ситән ярығы аша был вәхшилекте күҙәтеүсе ҡыҙын күрҙеме икән? Олатаһы Яппар-Хажиҙы Иркутск, унан һуң Кемерово шахталарына ебәрәләр. Улын, Сәлимгәрәйҙе, Соликамск ҡалаһына оҙаталар. Бер нисә йыл үтеүгә Кемерово шахталарына өҫтәмә эшсе көсө килә. Улар араһында 1880 йылғы 1931 йылда раскулачивать ителгән Һөләймән ауылы кешеһе Сабитов Ғабат Сабат улы ла була. Әсеһен дә, ауырыуын да бергә кисерәләр ерҙәштәр. Ғабат Сабат улы һуңғараҡ нисектер ҡатынын, балаларын алдырта. Һөргөн йылы 5 йыл үткәс тә «Поселениела» була ул. Ғабаттың 1913 йылғы ҡыҙы ла килеп, шунда Кемерово өлкәһендә ғүмерен үткәрә.

1953 йылдарҙа беҙҙең ғаилә Һөләймән ауылында шул Ғабат байҙың өйөндә йәшәне. Ата-әсәм уҡытыусы булыу сәбәпле, уларҙы йыш ҡына бер мәктәптән икенсе мәктәпкә күсереп йөрөтөр булдылар. Хәйер, ул яҙмыш бөтә уҡытыусыларҙың да бер төрлө ине. Шул йылдарҙа атаһының, Ғабат Сабатовтың, өйөн күргә тип, Кемерово яғынан беҙгә бер апай килде. Күрәһең, инәйем менән бер-береһен электән белгәндәрҙер. Ҡосаҡлашып күреш-

теләр, илаштылар ҙа илаштылар. Апай килеп киткәс, бер-ике көн дә тормай, Ҡорама ауылында йәшәгән ҡартатайым Сәлимгәрәй килеп төштө. Байтаҡ йылдар үткәс кенә төшөндөм мин. Яппар-Хажи ҡартатай сит ерҙә вафатынан алда, аманатын балаларына, ейәндәренә еткерер өсөн, Арғаяш районы Байғазымы йә Табынмы ауылы кешеһенә барып ҡайтарыуын Ғабат Сабатовҡа әйтә. Әгәр ҡайтырға насип булһа, шул хәбәрҙе балаларға, ейәндәргә еткереүен үтенә. Улы Сәлимгәрәйгә атаһы аманаты тураһында инәйем хәбәр итеп, ул шул уҡ көндәрҙә юлға сыға. Әммә бер кемде лә таба алмай ҡайтҡан, тип һөйләнеләр. Аманат юғала. Ҡурҡҡандарҙыр. Яппар-Хажиҙың Хәлимә исемле ҡыҙы Булат ауылы Ғәбитовтарҙа тормошта булып, нәҫелдәре ғүмер буйы Златоуст, Мейәс заводтарында бил бөгөп, ул йылдарҙа Мейәс ҡалаһында йәшәйҙәр ине. Нисек булғандыр, аманаттың бер өлөшө Хәлимә әбейгә килеп әләгә. Күрәһең, ҡартатайым уны һеңлеһенә ҡалдырғандыр. Ул барын-табындарҙың бер тармағының шәжәрәһе һәм боронғо олаталары Буғайға арналған «Буғай васыятнамәһе» була. Васыятнамә Силәбе, Мейәс, Сыбаркүл ҡала һәм райондарында ҡулдан ҡулға йөрөгән булһа кәрәк ул йылдарҙа. Шулай ҙа Булат ауылынан Хәжиәхмәт бабайҙы урап үтмәгәндер, тип уйлайым.

1971 йылдың һалҡын иртә яҙы. Ул йылдарҙа Учалы районының төньяғын биләп торған ҙур ауыл хужалығында эшләй инем. Кис. Эш бүлмәһенә ҡыҫҡа ғына итеп ҡырҡылған аҡ һаҡаллы һәм мыйыҡлы, сал сәсле, төпөш, ҡалын кәүҙәле, аҡ йөҙлө оло кеше килеп керҙе. Йөҙө таныш. Сырамытып таныным. Хәжиәхмәт бабай Ғәбитов. Ғөрөф-ғәҙәт буйынса өйгә саҡырҙым. Аш алдында һалмаҡ ҡына барған һөйләшеү тәрәнәйгәндән-тәрәнәйеп, тарих төпкөлөнә барып тоташты. Буғай хаким тураһында яҙған хәлваҡиғаларҙы бик ентекләп, ләззәтләнеп, ҙур рух көсө һәм үҙе үк шул ваҡиғалар эсендә ҡатнашҡандай һөйләй ҙә, һамаҡлап шул юлдарын да теҙә ине. Ҡабаланып яҙырға тотондом.

– Тыңла, ҡоҙа, тыңла, гел яҙыу буламы, – тип ниңәлер мине тыйғандай була.

Күрәһең, ауыҙ-тел ижады, риүәйәттәргә ул шул тиклем бирелгән, яҙып алыуҙы тиңһенмәй, тып-тыныс тыңлап ултырыуҙы хуп күрә. Өҙөк-һурыҡ яҙып ала алһам да, аҙаҡ төп яҙмалар юғалды. Шуға ла «Буғай васыятнамәһен» хикәйәт итеүҙән башҡа сара ҡалмаған кеүек. Хәжиәхмәт бабай, Буғай хаким заманын үткәреп, Айшан менән Тайшандың яу артынан яу сабыуын «Ҡыя-Түр», «Мейесле» заводтарын төҙөү ваҡиғаларын, ауылдарҙы күсереү, ыҙғыш-талаш, үҙҙәренең булат ҡоросон эшләүсе Булат тимерсенең нәҫелдәре булыуын айырым бер ғорурлыҡ менән һөйләй ине. Булат ҡоросон эшләүсе тимерсе Булат булыуын, уның ҡорос

һуғыу алымдарын инженер Павел Петрович Аносов яҙып ҡалдырыуы тураһында мин элек тә халыҡ араһында ишеткеләй инем. Ҡорама ауылы аҡһаҡалы Кәрим бабай Сәғитовтың да Златоустҡа арналған бәйете лә «Буғай васыятнамәһенең» халыҡ тарафынан дауам иттерелгән өлөшө булды, ахырыһы. Сөнки унда ла нәҡ тә шул осор ваҡиғалар сағылышы дауамы. Рәсәй дәүләт органдары тарафынан 1828 йылда сығарылған айырым ҡарар менән: «Переселить башкирские деревни из этих родных мест в отвращение связей... с мастеровыми и похищения золота».

Был турала Үҙәк тарих архивының 37-се фондының 11-се яҙмаһында 289-сы эштең беренсе битендә яҙылған. Был указда һүҙ Буғай хаким фарманын тормошҡа ашырып, мәғдәнгә яҡын күсерелеп, тимер ҡорос һуҡҡан, алтын йыуған, биҙәр таштар йыйып ҡулланған тораҡтар – ауылдар халҡын ул ерҙәрҙән ҡыуыу тураһында бара.

Бөгөнгө көндә Башҡортостандың көнсығыш, төньяҡ-көнсығыш сигендә, әммә Силәбе өлкәһенең Сыбаркүл, Уй райондарында ҡалған Булат, Үтәй (Төхмәт-Никольск), Тимер, Ялтыр, беҙҙең райондағы яндырылған бик күп ауылдар, шул иҫәптән Үтәш, Мостай һ. б. бөгөнгө көн шулар араһында берҙән-бер тереһе – Кәрим ауылы.

Хәжиәхмәт Фәбитов бабайҙан ишеткән «Васыятнамә» һыр йылғаһы ла, Памирҙағы Ҡорама тауҙары ла, Арал, Иртыш, Тубыл, Турғай һәм башҡа бик күп ер хәритәһе исемдәре яңғырай ине. Ҡайһы бер исемдәр бәйет һамағына шул тиклем һеңгән, һүҙҙәрен моңонан айырып алғыһыҙ ишетелде. Өҙөк-һурыҡ яҙып алынған эпостың төрлө куплеты төрлө ваҡытты, ваҡиғаларҙы сағылдырып, дөйөм бер сюжет булдырмаһа ла, уларҙы килтермәү мөмкин түгелдер.

Күренеп тора, төп сюжеттың армыттары ғына был. Әҫәрҙең Уралы, Умырау һөйәге бабайҙар менән бергә юғалды...

Ҡара Ғәзиз туғаным,
Эс-бауырым, үҙәгем.
Тыңла һүҙем нарыҡлап.
Илгә баҫҡын килде бит,
Ник ятаһың наланлап,
Тик ятаһың назарлап? –

тигән һүҙҙәрендә Табын еренә яу-баҫҡын килгәс, Ҡара Ғәзиз балалары – ҡара-табындарға туранан-тура мөрәжәғәт, үпкәләү түгелме?

Фарсы һүҙҙәре ҡушылып китеүе лә тарихыбыҙға бер ишара! Әгәр «нарыҡлау» – «баһа биреү» тип аңлаһаҡ, «наланлап» тигә-

не – «илап, һыңҡылдап, ыңғырашып, ялбарып һорау» мәғәнәһен аңлаталыр. Ә «назарлап» һүҙе ҡарап тороу, һыуыныу, бер ни ғәмәлһеҙлек булыр.

Йәмәлегә һуғылып,
Тулҡынын ҡағып, һелкенеп,
Ҡосағына сағырып,
Упайып көткән күҙҙәр бар,
Тонйорап яткан күлдәр бар... эй,
Көтөп тә яткан ерҙәр бар...
Күҙәтеп торған ҡаштар бар,
Ак, ҡыҙыл, күк, йәшел таштар бар.
Һыуы төбөндә һарғайып,
Ак таштарҙы һарылап,
Һипмә лә һипмә алтын бар,
Һипмә лә һипмә алтын бар... эй...
Биҙәр тауҙың таштары,
Һылыу ҡыҙҙың ҡаштары.
Беләү өсөн йәшәһе,
Гәүһәр, ғәлсәр, зөбәржәт.
Мәктәп әйтәм мөнәжәт, эй,
Мәктәп әйтәм мөнәжәт.
Ҡыу алдаһы – ҡыу алды.
Ап-ҡаҡояш юғалды.
Сәсрәп киткән сәсмә лә
Ҡеүәт тә ҡарыу ай бирҙе.
Ғәйрәт тә көстө кем алды,
Ғәйрәт тә көстө кем алды.
(ғәм – печаль, скорбь, забота)
Эй, Уралым, Уралым,
Эй, Уралым, Уралым.
Ҡыя ла Түрле тауында,
Һүләйәлә, Ҡауылда
Тимер иретер нары бар, эй,
Ҡорос та һуғыр тимер бар.

Уҡыусым! Иғтибарһыҙ йә үткәнеңә ихтирамһыҙ булһаң, аңламаҫһың. Өлгөргәндәрҙе яҙып алып уҡыҫаҫ, тәү башта үҙем дә аңламаным.

Тулҡын ҡағып һелкенеп,
Йәмәлегә һуғылып...

Бик ҙур ҡитға-тауға һуғылып ятҡан даръямы? Юҡ. Эпос үҙе үк әйтә. Күл, ти. Тимәк, Йәмәле – тау! Ә ҡайҙа? Кем белә? Кем хәтеренән юйылмаған Йәмәле тауы? Ҡайҙа ул?

Ә көтөп ятҡан ерҙәр? Кемде, ҡайһы халыҡ ере үҙ хужаларын көтөп ята? Минеңсә, Табынлы халҡын үҙ ергенәләре көтөп ятҡандыр.

«Күҙәтеп торған ҡаштар бар». Һылыу ҡыҙҙың фиғеле күҙ алдына килә. Шул тиклем матур ул. «Аҡ, ҡыҙыл, күк, йәшел таштар бар». Йәмәле тауындамы?

Тағы ла аптырарлыҡ юлдар бар:

Биҙәр тауҙың таштары,
Беләү өсөн йәшмәһе,
Гәүһәр, ғәлсәр, зөбәржәт...»

Минеңсә, Уралдың бер үк армытының тауҙары тураһында һүҙ бара. Биҙәр тауҙы кем белә? Мейәс ҡалаһында йәшәгән олораҡ башҡорт ағайҙарынан да һораштырҙым. Белмәнеләр. Ваҡытында ҡыҙыҡһынмағас ни, тиеүселәр булды. Төрлө фараздар бар... Әммә улар тураһында һуңғараҡ яҙылыр, сөнки хат еткән ергә хаттар ебәрелгән һорауҙар менән.

«Ҡыу алдаһы – ҡыу алды.
Ап-аҡ кояш юғалды.
Ҡеүәт тәҡарыу «Ай» бирҙе...»

Хәжиәхмәт бабайҙан был юлдарҙың мәғәнәһен һорағас та, уйланып ултырып, былай тине:

– «Ҡыу алдаһы – ҡыу алды» тигән һүҙ ул «ҡыуалды» – «кувалда»ның тигеҙ һуҡма ере «алда» тип атала, – тине.

Ысынлап та, алда йөрөй бит. Ҡояш кеүек ап-аҡ булып ҡыҙған тимерҙе ҡыуалта, ҡыу итә һуҡҡан һайын. Шуға ла «ап-аҡ ҡояш юғалды», ти.

«Ҡеүәт тә ҡарыу Ай бирҙе» тигән һүҙҙәр – ул «көслөлөктө, эй, бирҙе» түгел, ә «Ай бирҙе» ти. Айға табынып, унан ҡеүәт һәм ҡарыу – ғәйрәт алыу. Тимәк, айға мөрәжәғәт иткәс, эпостың ғүмере ислам дине менән тәңрелектең алышҡан осорон тасуир итә түгелме?

Тағы ла түбәндәге юлдар:

«Эй, Уралым, Уралым,
Эй, Уралым, Уралым.
Ҡыя ла Түрле тауында,
Һүләйгәлә, Ҡауылда
Тимер иретер нары бар, эй,
Ҡорос та һуғыр тимер бар.

Ҡыя-Түр тауы. Әйе. Әҙләһәң, табаһың. Шул ерҙә мин Мейәс тарихсыһы Владимир Григорьевич Федорищевтың 1997 йыл Мейәс ҡалаһында сыҡҡан «Язык земли Миасской» тигән китабын асам һәм Златоуст ҡалаһының исеме тураһында уҡыйбыҙ.

Златоуст – город областного подчинения. Среди краеведов, топонимистов распространены всевозможные легенды, предположения о происхождении топонима «Златоуст». В архиве имеется документ – контракт на строительство завода с 1751 года. Завод по тому контракту велено именовать Златоустовским. Но в то же время, пишет автор в книге В. Е. Бокова «Описание Златоустовского Свято-Троицкого собора дано подтверждение, что... «В непроходимых лесных дебрях, в кручах Уральских гор, благодаря обилию железных и медных руд, в 1754 году был основан жителем города «Косо-Тур» на реке Ай.

В 1765 году построена церковь во имя трех святителей: Григория Богослова, Василия Великого и Иоанна Златоуста, живших около 347 – 407 г. г. до н. э.

Но как оказалось, имя Константинопольских отцов церкви христианства на Южном Урале? Все же завод был переименован...» – тип бөтөрә һүҙен В. Г. Федорищев. Аңлашылмай: Иоанн Златоуст исеме биреләсәк сиркәү 1765 йыл төҙөлгәс, исеме уның һуңғараҡ берәй христиан диненә арналған байрамда бирелгән, был бәхәсһеҙ. Ә ни өсөн бик күптәнән мең йыллыҡтыҡтың башында әллә ҡайҙа, Византияла (йәшәгәнме, ул да фараз) йәшәгән әллә ул католик, протестант, әллә лютеран, әллә грек динле кеше исеме бирелә.

Бында бик ентекләп завод төҙөү туралағы Ырымбур губерна канцелярияһының 1755 йылғы контрактты уҡырға ине. Әммә ул төп нөсхәһеме икән? Урындағы халыҡ өсөн ул – Алтын Тамаҡ – «Золотоусть». Мосолов килгәнгә тиклем үк Әтлән – Мейесленең һул ҡушылдығы, Ирәмәл, Мейесле үҙе, Әйле ҡушылдыҡтарының үҙәндәре башҡорттоң алтын йыуыу ерҙәре була. Быны тарих та, тарихсы ла инҡар итә алмай. Золотоустьела – Алтын Тамаҡ торағында Ҡыя-Тур буйында төҙөлә лә инде «Ҡосотур» заводы. 1765 – 70 йылдар араһында ул сиркәү исеме менән Золотоусть түгел, ә Златоуст булып китә.

Бына шул Ҡыя-Тур тауы исеме сағылыш таба ла инде «Буғай васыятнамәһендә». Һүләйә һәм Ҡауылды тауҙарына килһәк, береһе хәҙер – Сулея, икенсеһе – Ҡауылды. Владимир Григорьевич Федорищев былай тип яҙа: «Кавеленская, гора Кавелинские. Расположена севернее поселка Ленинска. В районе горы имеются захоронения сарматов, живших здесь в VI – IV веках до нашей эры. В 1865 году первым произвел раскопки их Руфь Гаврилович Игнатьев, историк, этнограф, археолог». Федорищев Ҡауылдыны

Мейәс ярҙарына терәп ҡуйһа ла, нигеҙҙә, мәғлүмәте дөрөҫ. Тик уның тау исемен урыҫ старателе Кавелинға бәйләүе нигеҙһеҙ.

Инде «Буғай васыятнамәһенең» аҙаҡҡы өлөшө тип фаразланған «Ҡасҡын бәйетенә» киләйек. Эйе. Был әҫәрҙе Ураҙаев Хаммат бабайҙан яҙып алып баҫтырып сығарғас, беҙҙең район гәзитен бер ҡасан да уҡып белмәгән, тормошо менән дә һәр саҡ йә Мейәс ҡалаһы, йә Силәбе өлкәһе Булат ауылы менән бәйле Хәжиәхмәт ҡарт «Буғай васыятнамәһенең» беҙ «Ҡасҡын» тип йөрөткән эпосты өс-дүрт тынала ҡушып һөйләне.

Әммә улар шуныһы менән ҡиммәт: беҙ йәшәгән ерҙең атамалары, риүәйәттәргә бәйле ер исемдәре сағыла, ваҡиғаларҙы әҙме-күпме аяҡҡа баҫтырырға ярҙам итә. Ә ваҡиғалар – тарихыбыҙ ярсығы.

Аймаҡ-аймаҡ ойошоп,
Урал һыртына һыйышып,
Ләззәтләнеп һемереп
Тәңребирҙе шишмәһен,
Һырышып яткан ил беҙ, беҙ, беҙ.
Уй һыуы ла, Өйәл дә
Тубылға ҡушылып ҙур булды.
Бергә йәшәп халҡ ҡороп,
Халҡыбыҙҙы ҡор иттек.
Халҡыбыҙҙы ҡор иттек, эй,
Тубылға ҡушылып, ҙур иттек.
Тубылға ҡушылып, ҙур иттек.
Тайшан да улым, торсо, тор әле.
Айшанды ла алып кил әле.
Тура ғына күҙемә бағығыҙ,
Һырға итеп шуны тағығыҙ,
Бар халыҡҡа оран һалығыҙ... Эй!
Бар халыҡҡа оран һалығыҙ!
Әйтең илгә юлын һандаллап.
Фәрәт менән килгән Ҡәүем бар.
Һаҙаран әйтәм һеҙгә хәфнәһеҙ.
Ҡырғыҙ ишле хәслә́т бер, тиеп, эй...
Ҡырғыҙ ишле хәслә́т бер, тиеп.
Сөкор төбө мәгдәнле,
Мәгдән таптан тимерле,
Тимер һуҡҡан ҡораллы,
Йөйөп табып донъя күргән
Шундай халыҡ шәүкәтле, эй,
Шундай халыҡ шәүкәтле.

Тәмен татып һыуының,
Йәмен тойоп еренең,
Һеңешеп киткән тамырыбыҙ
Илем дә тиеп тупраҡҡа, эй,
Илем дә тиеп тупраҡҡа
Уралып үҫтек тамырына
Һутлы үлән, сәскәнең.
Ҡара тимер ҡаяға...
Ғүмер үтмәй заяға, эй,
Ғүмер ҙә үтмәй заяға.

Минең 1967 йылдағы яҙыуҙарымды файҙаланып, «Ҡасҡын бәйете» китаптар битендә сағылыуын хәтерләткәйнем. Ҡайһы бер автор, бәйеткә ныҡлабыраҡ тотонорға теләп, үҙ хөкөмөн сығарҙы. Хәҙер инде ҡырҡ йыл үткәс, әлек яҙғандарымды тулыһынса биреү лазым, тип таптым.

Иҙел башы Ир-Әмәл тау,
Иҙел башы Ир-Әмәл тау,
Яйыҡ башы Ялпан тай,
Әйҙең башы Һары һаҙ,
Уйҙың башы Ҡара-Таш, эй.
Мейесле башы Нарлы тау.

Был һүҙҙәр «Буғай васыятнамәһе»нең башы булырға тейеш...

Эй, Уралым, Уралым,
Эй, Уралым, Уралым,
Был ҡитғала Урал тигән тауҙар бар,
Уңғыл да Суңғыл булһа ла,
Йәйләй торған ере бар, ау,
Йәйләй ҙә торған ере бар...
Урал тигән тауында
Һәр бер януары бар:
Айыу, төлкөләре бар,
Кейек, боландары бар.
Ҡалды ла беҙҙең тыуған Уралыбыҙ, эй,
Ҡалды ла беҙҙең тыуған Уралыбыҙ.
Сәрнәкәү тигән тауы бар,
Сәрнәкәү тигән тауы бар.
Ҡырмыҫҡалы тигән күле бар.
Эҫелеккә уның балығы бар.
Дарыулыҡҡа уның һөлөгө бар.
Ҡалды ла беҙҙең уйнап-көлөп йөрөгән еребеҙ...
Йылға буйы емешле.

Тирәһе алтын-көмөшлө.
Һыуҙарын эсһәң, бал кеүек.
Уралып яткан ерҙәре
Барыһы улар хан кеүек.
Тыуыу менән көн төшөр.
Иртә бешер еләге.
Айыу ҡойоһоноң үҙәге.
Таш ҡойоһоноң тамағы.
Ямансура үҙәне... Эй,
Ямансура үҙәне.
Яҙ ғына малдың ятышы.
Көҙ генә малдың көйөшө.
Калды ла беҙҙең тыуған илебеҙ, эй,
Калды ла беҙҙең йөрөгән еребеҙ...
Бауыры тейһә, мал сумыр,
Ике ягы иң тумар.
Мейесле беҙҙән ҡала әле.
Мейесленең киң яланы.
Хөкөм сыҡты ҡыуалап,
Алтын сыҡты йыуылып.
Калды ла беҙҙең илебеҙ, ау,
Калды ла беҙҙең еребеҙ, ау.
Сабыу-сабыу сапҡанын,
Беҙгә ҡаршы атканын.
Тимер ҡалҡан алға алып,
Ук-йәйәне ҡулға алып,
Баҫҡын башын киҫтек беҙ.
Хөкөм сыҡҡас, киттек беҙ.
Сыңыр-сыңыр сыңлатып,
Мөңөр-мөңөр мөңрәтеп,
Ҡатын-ҡыҙҙы һыҡыратып,
Бала-саға сыҡыратып,
Илебеҙҙән киттек беҙ,
Еребеҙҙән киттек беҙ,
Еребеҙҙән киттек беҙ.
Әле улай һөйҙәшеп,
Әле былай һөйҙәшеп,
Сыйырсыҡтай эркелешеп,
Кара ҡаҙҙай теҙелешеп,
Аргымактай ат менеп,
Ҡамсыны ҡулға алып,
Дуҫ-иштәрҙе янға алып,
Һымырашып яткан ил инек беҙ.

Ҡалды ла беҙҙең тыуған еребеҙ,
Ҡалды ла беҙҙең һөйгән илебеҙ.
Эй, Мейесте лә Мейесте.
Мейестенең дә һыуын кем эсте?
Тукһанға еткән ҡарт бар ине.
Тукһанға еткән Әбләкәй ҡарт
Туңҡайып ятып шул эсте,
Туңҡайып ятып шул эсте.

Алдағы ҡайһы бер дүрт юллыҡтарҙа фарсы, ғәрәп һүҙҙәре күп ҡулланылыуы сәбәпле, аңлау ауырлаша. Буғай хакимдың, улдарына арнап, «әйтең илгә юлын һандаллап» тигәне «асыҡ итеп, биҙәп, аңлатып» тигәнде төшөндөрә. «Ғәрәт менән килгән кәрем бар» тигәнен «талау өсөн, баҫыу өсөн» тип аңларға кәрәк. Ә «һазаран әйтәм һеҙгә хәфнәһеҙ» – «мең тапҡыр әйтәм, йәшермәй, айырып әйтәм тигән мәғәнәләләр. «Ҡырғыҙ ише хәсләт бер» тип ишаралауы – «ҡырғыҙ-ҡаҙаҡтар беҙгә яҡын, беҙҙең кеүек булмыштары, ул халыҡ сит түгел» тип әйтеүе Буғайҙың.

Ҡоралын тоткан – таш киҫкән.
Әмәлен таҡкан – һыу кискән.
Туралып яткан ҡаҙыны
Күңеле ҡушһа, шул йоткан, –

Тигән һүҙҙәрендә лә ҙур мәғәнә ята.

Эпостың тулы йөкмәткеһе табылһа, ул осор ваҡиғаларын тулыраҡ асыҡлар өсөн нигеҙ булыр ине лә...

Әлегә ул юҡ. Әммә эҙләнеүҙе дауам итәйек. Ул бөтәбеҙгә лә бурыс булып торһон. Ә үҙебеҙ фекеребеҙ менән Буғай хаким янына барайыҡ һәм шул осорҙо һүҙ аша тасуирларға тотонайыҡ.

Һәр халыҡ үҙ тарихын үҙе яҙырға тейеш.
Ризаитдин Фәхретдин

ҮҘ ТАРИХЫМ АСЫЛЫ

Һәр кеше үҙенең кем икәнлеген белергә бурыслы. Тарихи тамырҙарың ҡайһы олонға барып тоташыуын белеү өсөн һин, исмаһам, аҙмы-күпме шәжәрәңде белергә тейешһең.

Әгәр ҙә һин үҙеңдең ҡайһы ергә барып тоташҡан тамырҙарыңды белһәң, ереңә, илеңә ҡарата һөйөүең артыр, үҙеңде шул ерҙең хужаһы итеп тоясаҡһың. Мин хужа был ергә, беҙ хужа тигән дөйөм тойғо барлыҡҡа килер. Дөйөм тойғо дөйөм олонға тоташ-

тырыр. Ә олоноң бөтә тамырҙары менән тыуған ереңә ереккән, сырмалған, сатырман йәбешкән, ҡәҙерле уҡыусым!

Ҡәбилә, ырыу тарихын ғына түгел, ә бөтә башҡорт халҡының тарихын юлъяҙмасылары, йә тарихсылары яҙып ҡалдырғанын ғына уҡыныҡ.

Тик һуңғы егерме йыл эсендә үҙебеҙҙең башҡорт тарихсылары халҡыбыҙҙың үткән тормошон шәжәрәләргә, ауыҙ-тел ижадына, эпик ҡомартҡыларға, археологик табыштарға таянып, саҡ-саҡ, бик аҙын ғына аяҡҡа баҫтыра башланы. Әммә дөйөм тарих һәр ҡәбиләнең, ырыуҙың тарихына таянырға тейеш. Осмот-осмот булып һаҡланып ҡалған айырым ҡәрҙәштәребеҙҙең шәжәрәләре лә бик күпте һөйләй ала.

Ер-һыу атамалары, ҡартатай-ҡәртнәйҙәр хәтирәһе, йырҙар, эпостар – береһе лә күктән төшмәгән. Барыһы ла ысынбарлыҡты сағылдыра, булған хәл-ваҡиғаларҙы раҫлай. Быуындан быуынға яҙма булып килгән ҡомартҡылар, тартып алынып юҡ ителеп, яндырылып, ергә күмелеп бик күп тарих биттәре юҡҡа сыҡҡан. Әммә шул ҡомартҡыларҙың киләсәктә бик тә кәрәк булыуын төҫмөрләгән ҡартатай-ҡәртнәйҙәребеҙ тарафынан ҡайһы бер күсермә шәжәрәләр беҙгә килеп еткән. Халыҡ хәтерендә һаҡланған хәтирәләр көнсығыш табындар тарихына ла бәйле. Риүәйәттәрҙә һөйләнгән ваҡиғалар, һис шикһеҙ, нигеҙле, үҙгәрһә, йылдары, ҡайһы бер исем-атамалары ғына үҙгәреүе ихтимал.

Әлегә тиклем беҙҙең көнсығыш табындарының тарихы фәнни-тарихи күҙлектән ентекле тикшерелгәне юҡ. Башҡортостандың айырым ил булып Рәсәй империяһы тарафынан танылырға мәжбүр ителгән ваҡиғалар нәҡ тә беҙҙең ерҙә, беҙҙең төбәктә бара. Быға дәлил булып 1661–1664 йылдарҙа Һары Мәргән һәм Арыҫланбәк етәкселегендәге Исәт һәм Мейәс йылғалары буйындағы Рәсәй дәүләте баҫыуына ҡаршы һуғыштар, 1681–1684, 1704–1708, 1735–1740 йылдарҙағы һәм унан һуң булған ихтилалдар тора.

Башҡорт халҡының үҙ илен-ерен, йортон, ғаиләһен һаҡлап бик күп тапҡырҙар яуға күтәрелгәнен иҫтә тотоп, әлек Өфөлә йәшәгән рус тарихсыһы В. А. Ефремов былай тип яҙа: «Башкирия сделалась центром борьбы с Русью мусульманского мира, вынужденного отступить с Волги».

1730–1740 йылдарҙа яҙылған был яҙыу йәнтәйәгебеҙ Өфө өйәҙе Ырымбур губернаһы тип аталыуға ҡарамаҫтан, Башкирия тип айырым ил булыуыбыҙҙы нарыҡлай һәм уның Рәсәйҙә мосолман донъяһының үҙаллылығы өсөн көрәштең үҙәге булыуын да дәлилләй.

Беҙҙең төбәк халҡы Рәсәйҙең тау сәнәғәте барлыҡҡа килеүенә һәм уның үҫеүенә төп өлөш индерә. Әлегә тиклем урыҫ тарихында

беҙҙеңъ тарих сағылманы тиерлек. Бынан тыш, Рәсәйҙеңъ федератив нигеҙҙә ҡоролоуына башҡорт халҡының остазы Әхмәтзәки Вәлиди әшмәкәрлегенең йоғонтоһо ҙур.

Рәсәй һәр һуғышы өсөн башҡорттарҙан, йә боронғо ҡыпсаҡ-казактарҙан ғәскәр төҙөгән. Ниңә ул башҡа халыҡтан айырым ғәскәр төҙөмәгән? Был факт яҡшы түгел, бик насар, минеңсә. Сөнки милли генофондтың иң аҫылы, батыры, һауы, көслөһө юҡ ителгән. Киң күкрәкле, яҫы яурынлы батырҙар ҡорбан булғас, үлмәй ҡалған йәки яуға бармаған ҡурҡаҡтарҙан, ваҡтарҙан ҡалған нәҫелме әллә беҙ? Рух яғы ла бик-бик күптәребеҙҙең самалы бит. Хатта тыуған ерендә үҙ ер өлөшөн алып, яҙҙырып ҡуйырға ла аңы ла, эске ҡеүәте лә етмәй ҡайһы берәүҙең. Ерһеҙ ҡалһаң, илһеҙ ҡалаһың, үҙ ерең булмаһа, Башҡортостан Республикаһы булыуы ла шикле киләсәктә.

* * *

Көнсығыш Табын ҡәүеменең Табын Барын ырыуы тураһында яҙғанға тиклем шуға иғтибар итәйек: ғалим тарихсылар урыҫ сығанаҡтарына эйәреп, ни өсөндөр дөйөм Табын ҡәбиләһенең нигеҙе Ҡара Табын ырыуы, табын этнонимының төп сығанағы булып тора, тип дәлилләй. Был, нигеҙҙә, дөрөҫ түгел.

Ҡара Табын ырыуы шәжәрәләренең бер ботағы башҡорт шәжәрәләре китабында баҫылып сығыуы, уны Табын ҡәбиләһенең баш ырыуы тип таныуға нигеҙ була алмай. Барындарҙың шәжәрәһендә Ҡара Табын Табын ҡағандан алтынсы быуында тора. Ысын исеме Ҡара Ғәзиз. Ә Ҡара Шәйех иһә – Барын, Табын ҡағанға бер быуын яҡын яҙыла. Шәжәрә төҙөп ҡалдырыусылар, нимәй генә ҡәбилә, ырыу вәкилдәре булыуҙарына ҡарамаҫтан, үҙҙәренең ырыу башын йә ханға, йә билдәле хәрбигә алып барып ялғарға тырыша.

Башҡортостан «Китап» нәшриәтендә 2002 йылда рус телендә «Башкирские родословные» китабы сыҡты. Бында Ҡара Табын ырыуынан Мөхәммәтғәли Соҡорой, Мөхәммәтғәли Кейеков һәм Ғарифулла Кейеков тарафынан бирелгән шәжәрәләр килтерелә. Барлыҡ Табын ырыуы ла үҙенең башы итеп Майҡы бейҙе таный. Әммә шуныһы ҡыҙыҡ, үрҙә күрһәтелгән авторҙар, Әҙәм пәйғәмбәр башҡорт, тип яҙып ҡуя.

Был шәжәрәлә Байҡы бей – Майҡы бейҙең алты улы күрһәтелә. Әммә Ҡараса – Ҡара Ғәзиз – Ҡара Табын береһендә Алсаҡ бейҙең улы, Абдулхәйер Болғаир балаһы, ә икенсе сығанағында Иләк бейҙең улы, тип күрһәтелә. Быныһы – бер. Ҡайһыһы яңылыш икәнен белеп булмай. Дөрөҫләр өсөн Сулман, Ҡара Табын, Илеш, Тәтешле яҡтарына күсенеп китмәйенсә һаман да йә Исәт,

йә Мейәс һыуының уртаһында көн иткән ҡара табындарҙың шәжәрәһе әлегә билдәле түгел.

1740 йылдар тирәһенән хәҙерге Силәбе өлкәһе Арғаяш районы ерендә йәшәгән бер тармаҡтың шәжәрәһе бар. Әммә ул әллә ҡара табындарҙыҡы, әллә барындарҙыҡы, әлегә билдәһеҙ. Һәм өҫкө яғы ҡайҙа барып етеүен дә белмәйбеҙ. Әммә Әлиш батыр исеме күренә.

Табын-тиләүҙәр менән барын-табындар араһына килешеү менән Буғай хаким осоронда (1600 йылдарҙа) Мейәс йылғаһының урта ағымының төньяғынан Исәт буйҙарынан килеп урынлашҡан ҡара табындарҙың да боронғо шәжәрәләре билдәле түгел. Ул, барындар араһында һибелеп, Златоуст һәм Мейәс ҡалаларынан Учалыға тиклем йәшәгән ҡара табындарҙа ла һиҙелмәй. Хәйер, хәҙер халыҡ ҡатнашып бөтөп, кемдең кем икәнлеген дә күбеһе белмәй. Әлбиттә, тарих өсөн белеү яҙыҡ булмаҫ ине.

Тағы ла шуны һыҙыҡ өҫтөнә алыу кәрәктер. Китапта килтерелгән Майҡы бейҙең ата-бабалары һәм кесе уландары араһында Табын исемле кеше күренмәй. Ҡараса, Ҡара Фәзиз тигәне аңлашылһа, Ҡара Табын тигәне аңлашылмай. Ниңә Табын? Ҡайҙан килеп сыҡты? Нәҫел-нәсәбендә Табын тигән исем күренмәй бит. Ҡара табындар тураһында бер башлағас, тарихи дөрөҫлөктө билдәләп үтеү кәрәктер. Тарихтан, шәжәрәләрҙән күренеүенсә, түбәндәге яҙмалар ҙа беҙҙең өсөн бик ҡиммәт, сөнки шуға ҡарап үҙ тарихыбыҙҙы юллай алабыҙ.

Шәжәрәлә ярайһы уҡ үҙгәрештәр күрһәтелә. Һуңғыһында Ҡара Табындың атаһы Болғаир – Абдулхәйер, Алсаҡ бей улы түгел, ә туранан-тура Майҡы бейҙең улы итеп күрһәтелә. «...У Бекатун-бабая были сыны по имени 1. Айли. 2. Юрми. 3. Байлар. 4. Байкы-Майкы-бий. Во время Чингиз хана они переселились из земли под названием Айли с дальнего берега Амударьи на берега реки Миач (Миасс). Прожив здесь лет девяносто, Бекатун-бабай здесь и скончался... «Мөхәммәтғәли Соҡоройҙоң һөйләүе буйынса, былай килеп сыға: «Говорят, что мой благородный предок обитал на берегах Тобола, Иртыша. Наш предок – путешественник, перешел к горе, называемой Урал. Он поселился у Миача (Миасса) и постоянно жил на северных берегах реки. Жители этих мест посчитали, что это будет им в тягость и стали прогонять их всех, когда эти (переселенцы) попросили, наконец, земли.

...Много они странствовали в поисках земли, исходили землю Булгара вдоль и поперек. Оставили они за спиной и гору Урал, оставили за спиной и реку Миач (Миасс)... Добрался он до Чусовой, добрался и до Чулмана (Камы)». Сулман йылғаһы буйында Абдал бейҙең улы тыуа. Уға Сулман тип исем ҡушалар. Был сама менән 1320–1330 йылдарға тура килә.

Әхмәт шәйехтең балаларын Ирәкте тип атағандар. Ирәкте һүҙенә сик мәғәнәһе бирелә, йәғни сиктән үтмә, сиктә йәшә, сигеңде бел, йәнәһе.


Абдал бей Оса, Минзәлә тирәһендә нығына. Күрәһең, уға болғарҙар тыныслыҡ бирмәй һәм ул кире Барҙым еренә, хәҙерге Пермь өлкәһенә, күсә. Шунда мәрхүм була.

Сулман бейҙең алтынсы быуыны булған Иҫән хан мәғлүмәттәрҙең береһендә сама менән 1540 йылдарҙа Исәт менән Мейәс араһын ҡалдырып, көнбайышҡа, боронғо ҡанбабаларының артынан үҙ иләүе менән күсенеп китә. Унда ул 1550 йылдарҙа Ҡазан ханы менән бәхәскә инеп, уның вәкиле Суртмаҡты үлтерергә мәжбүр була. Унан һуң ҡалтайға баҫып Мәскәүгә бара ла, батша Ивандан халҡы, ере менән дәүләтенә ҡушырға һорай. Икенсе сығанаҡтарҙа Иҫән хан урыҫ хакимиәтенә буйһонор өсөн Ҡазан ҡалаһына бара. Яһаҡҡа бал, ҡама, һыуһар, тейен тирәһе тәҡдим итә, имеш. Ҡара табындарҙың Иҫән хандан һуң да Һары Мәргән ихтилалы осоронда ла, һуңғараҡ та өйкөм-өйкөм булып көнбайышҡа күсеп китеүҙәрен тарих белә.

Быны ҡара табындарҙың хәтере бөгөн дә иҫләй. 2007 йылдың октябрь айында Дәүләкән районының бер ауылында булған ҡара табындарҙың шәжәрә байрамын күрһәттеләр. Унда улар Урал алдынан, Көнсығыш Уралдан, Мейәс буйҙарынан 1773 йылдарҙа килеүҙәрен нарыҡланы. Исәт менән Мейәс һыуы араһындағы «ҡара»лар барлыҡ ихтилалда ла әүҙем ҡатнашмай. Мәскәү хакимы Көньяҡ Урал аша үтә алмағас, урта Урал менән Ибер – Себер киңлектәренә сыҡҡас, Исәт буйында Ҡара Табын ерен үҙләштерә башлай. Шул осорҙа уларҙың бер өлөшө йә ҡотҡоға, өндәүгә, йә ҡурҡытыуға бирелеп, тағы ла ҡайһы бер нәҫелдәре көнбайышҡа юллана. Уларҙың нәҫелдәре хәҙер Минзәлә, Туймазы, Дәүләкән, Илеш, Тәтешле, Барҙы, Бирмә (Пермь) биләмәләренә һибелгән.

Ҡалған өлөшө 1608 йылдан буйһоноуҙарын белдереп, яһаҡ түләй башлай. Ләкин күбеһе баш һалыуҙан баш тарта. Тарих фәндәре кандидаты Әлим Зарипов үҙенең «Эй, Яйыҡ йорт, Яйыҡ йорт» китабында, мәҫәлән, 1635 йылда 14000 йорттоң 2217-һе генә урыҫ хакимлығын ҡабул итеүен яҙа. Ҡара табындарҙың бер өлөшө урыҫ экспанцияһынан яһтайып, барындар менән йәнәшкә Мейәс, Уй башына күсенә. Бүре солтан, Ҡалҡаман батыр етәкселегендәге ҙур бер өлөшө Буғай түбәһе, Тәңребирҙе тауы итәгендә үткән ҡоролтай ҡарауы буйынса барындар менән тиләүҙәр араһынан ер һорап, шунда күсенә. Илселек ҡыйсымы, Илсе һыҙмаһы уларға төньяҡтан сик була. Бөгөнгө көндә улар Учалы районы уртаһында һигеҙ-туғыҙ ауыл самаһы.


Һуңғы йылдарҙа һәр ауыл үҙенең шәжәрә байрамын үткәрҙе. Халыҡтың хәтере әле юйылмаған, ҡайһы ауыл кем тоҡомо икәнен



белә. Шулай ҙа боронғо бүленештең атамаларын белеү ҙә кәрәк. Һәр ырыу, олоҫ, йортҡа, түбәгә, аймаҡтарға бүленгән. Аймаҡта, мәҫәлән, ҡаны буйынса яҡын кешеләр, ғаиләләр береген ултырған (ике, өс, дүрт туғандар). Унан алыҫыраҡтар түбә менән берләшкән, йәки бер нисә аймаҡ бер түбәне тәшкил иткән. Ә түбәлә нисә йорт булған? Бер нисә түбә, күрәһең, йортто берләштергән. Властар йорт иҫәбе менән ырыуҙың ҙурлығын, бәләкәйлеген белгән.

Йорттар олоҫҡа берләштерелгән. Мәҫәлән, Туңғатар олоҫона районыбыҙҙың төньяғында ятҡан ауылдар кергән. Бер нисә олоҫто берләштергәне өйәҙ булыр. Бөгөнгө көндә беҙҙең районда йәшәгән ҡара табындарҙың араһында ревизияларға йәки башҡа яҙма сығанаҡтарҙа күрһәтелгән йорт, түбә, аймаҡ исемдәре осрамай. Осрамауында ла нигеҙ бар, сөнки йорт, йәки йорттар башы Бүре солтан Мейәстең үре яғындағыларҙан тулыһынса айырылып килгән һәм унда ҡалған нәҫел-нәсәптәре юҡ кимәлендә. Айырым фамилияларының ҡан аралашыуы барҙыр, әммә ул боронғо бәйләнеш түгел. Ҡара табындарҙың Күкйөрәк-Табын, Ҡыпсаҡ-Табын, Мәсөл-Табын, Аҡшүраз-Табын тигән йорттары, түбәләре билдәле. Әммә ҡара табындарҙа ундай исемдәр осрамай.

Әммә Бүре аймағы исеме бар. Былары Бүре Солтан тамыры булыуы ихтимал. Ә Ҡалҡаман батыр нәҫелдәре кемдәр? Улар менән дә бит бергә йәшәйбеҙ. Үрҙә билдәләп китеүем буйынса, ҡара табындарҙың бер өлөшө, бигерәк тә күп ергә, мал-тыуарға хужа булған йорт башлыҡтары, башҡа ырыу башҡорттарының азатлыҡ өсөн алып барған көрәштәрендә империя яҡлы булып үҙ халҡына ҡаршы көрәшә. Улар араһында беҙ Таймас тархан Шәи-



мовты, Ҡыҙрас Муллаҡаевты һәм башҡаларҙы беләбеҙ. Дөрөҫмө, түгелме, ҡайһы бер сығанаҡтар почта комиссары Мәндей Төпәевты ла Ҡара Табын ырыуы кешеһе итеп яҙа. Ә беҙ Төпәй ауылын да, Төпәевтарҙы ла Барын Табын ырыуы кешеләре тип иҫәпләйбеҙ. Уны Ҡара Табын олоҫо старшинаһы тип яҙыу тик 1735—1740 йылдарҙа империяға ҡаршы көрәшенән һуң барындарҙы административ бүленешкә тоғро Ҡара Табын ырыуы исеме менән Кара-Табынская волость тип яҙыуҙарынан башлана. Сөнки ихтилалда әүҙем ҡатнашҡан барындар, ҡыуаҡандар, әйлеләр, ҡатайҙар ерен тартып алыу өсөн указ сыға.

Көҙәй, Әйле, Ҡыуаҡан, Ҡатай, Барын, Тиләү, Күбәләк ырыуҙары ере 1740 йылдарға тулыһынса империя тарафынан баҫып алынғас, Исәт, Мейәс һыуы буйындағы ҡараларҙың байҙары Рәсәйгә тоғро хеҙмәттәре өсөн тархан, старшина һәм башҡа дәрәжә биреп ҡупрайтыла. Башҡа ырыу халыҡтары «вирнай» булмағас, уларҙың ерҙәрендә тәүге осорҙа хакимиәт идаралығы ла төҙөлмәй. Бөтәһе лә Ҡара Табын олоҫона ҡарай. Олоҫ (волость) үҙәге булып иң алда шәимдәрҙең төп ере Ялтыр ауылы була. Олоҫ, бик ҙур булғанлыҡтан, бүлгеләнә. Әммә һәр олоҫ башына Рәсәйҙең сит ерҙәрҙә алып барылған яуҙарында батырлыҡ күрһәтеп, хәрби чин-баҫҡыс алыусы ырыу вәкиле, йә вирнай Ҡара Табын кешеһе ҡуйыла. Урыҫ ревизиялары яҙмаларында күберәк «Ҡара-Табынской волости» тигән аныҡлыҡ күп осрай. Бындай яҙыуҙар ҡайһы бер ғалим тарихсылар өсөн Ҡара Табын ырыуы табын этнонимының төп сығанағы булып тора тигән һығымта яһарға нигеҙ булғандыр. Әммә шәжәрәләр улай һөйләмәй.

* * *

Ырыуҙарҙың этник сығышын билдәләгәндә шәжәрәләр төп таныҡлыҡ булып тора. Бөгөнгө көндә булған барлыҡ фамилияларҙың тамыр-тармағын байҡау мөмкин дә түгелдер. Әммә төп олоно, ҙур ботаҡтары булыуы, үҙе бөтөн ырыуҙың шәжәрәһе тигән һүҙ. Оло ботаҡтарҙың айырсаларын, япраҡтарын ҡайһы ергә бәйләү – һәр аймаҡтың үҙ бурысы. Тарихсылар Барын ырыуының төп сығышы монголдар тип күптәнән фәнни фекер нығытып ҡуйған инде. Әммә беҙ, үҙебеҙ, барындар, быныҡ менән һис килешә алмайбыҙ. Өндәшмәй генә килешер инек, әгәр күсермә булһа ла, төп шәжәрә олоно булмаһа. Ул бар. Ул беҙҙең ҡулда. Шуның өсөн дә монгол түгеллегебеҙҙе раҫлап, нарыҡлауҙарҙы төҙәтер өсөн, шул ҡулъяҙманы билғау итеп тотоп, майҙанға көрәшергә сығам. Белеп торам еңәсәгемде. Киреһен раҫлар өсөн һеҙгә Ҡытай, Уйғыр, Монгол, Төрөк, Ҡырым, Ҡырғыҙ, Ҡаҙаҡ илдәре архивтарын ҡутарыу кәрәк. Ҡутарһағыҙ ҙа, дәлилегеҙ тап килмәҫ. Сөнки Сәхәүетдин мулла, Ҡужахмәт хужа, Исхаҡ һәм Ғосман мулла вариҫтарына аманат ҡалдырған. Барын-табындарҙың был шәжәрә башын Сәхәүетдин мулла васыят иткән. Әлбиттә, уға уның боронғо ата-олаталары мираҫ иткән.

Миндә һаҡланған шәжәрә күсермәһе Сәхәүетдиндең улы Яппархажи тарафынан һаҡлана. Яппархажи 1930 йылда раскулачивать ителгәс, яҙмаларын үҙе менән алыу мөмкинлеген таба. Үҙе Кемерово өлкәһендә шахта эштәрендә үлеп ҡала. Ҡулъяҙманы Арғаяш районы кешеһенә бирep ҡайтара. Ҡулъяҙма-аманат Силәбе өлкәһе Уй районы Булат ауылында тормошта булған Зөһрә исемле ҡыҙына килеп әләгә. Зөһрә – инәйемдең атаһы Сәлимгәрәйҙең бер туған һеңлеһе.

Сәхәүетдин Ҡорамшин миңә дүртенсе быуын ҡартатай була. Төп Ҡорама ауылы Муллатау тигән ҙур булмаған тауҙы урап ултыра. Шул Муллатау башында, иғтибар итеп ҡараһаң, Сәхәүетдин ҡартатайҙың (Ҡорамша уның атаһы) ҙур йортоноң нигеҙ урыны әле лә билдәле. Ҡорама – Ҡорамша – Сәхәүетдин муллаларҙың мәсете Муллатауҙың көнбайыш иңкешендә оло урамға ҡарап ултыра ине.


Революциянан һуң, манараһы бысып төшөрөлөп, клуб яһала. Мәсет-клубҡа ҡаршы, хәҙерге балалар баҡсаһы урынында, Сәхәүетдин мулланың улы Яппархажиҙың урам яҡҡа алты тәҙрәһе булған, тимер башлы, верандалы ҙур йорт торҙо. Ул ауылдың мәктәбе ине. Яппархажиҙың урҙаһында 12 ҡарағас келәте, таш һарайы, ҙур мөгәзәйе булды. Хәҙер өйө лә, мәсете лә, келәттәре лә күптәнән юҡ инде, тик мөгәзәйе генә телһеҙ шаһит булып хужаһыҙ ултыра. Яппархажиҙың өйө йәнәшендә улы Сәлимгәрәйҙең йорто була. Уны боҙоп, ҡайҙалыр келәт-һарай эшләйҙәр. Һуғыштан дүрт-биш

яра алып ҡайтҡан атайым ҡайныһының йорто урынына 1949 йылда ҙур йорт һалды. Беҙ шул өйҙә үҫтек, утыҡтыҡ, бауыр күтәрҙек, шунан таралдыҡ. Хәҙер ул йорт та юҡ. Был юлдарҙың авторы фатихаһы менән урынына мәсет төҙөлдө. Сәхәүетдин мулланың да донъяһы ҡалын булғандыр, сөнки йорттарының урыны бик ҙурға оҡшай.

Шәжәрәнең түбәнге өлөштәренә аңлатма-ваҡиғаларҙы яҙғанға тиклем, ғөмүмән, Барын ырыуының үткәненә, шәжәрәһенә ҡарап фекер йөрөтәйек. Килешһәләр ҙә, килешмәһәләр ҙә, үҙебеҙ тураһында үҙебеҙ яҙайыҡ әле. Башҡорт шәжәрәләре китабында Көнсығыш Табын ырыуҙарының шәжәрәләре килтерелмәй. Сөнки академик Кузеевтың ҡулында беҙ килтергән шәжәрә булмаған. Унда тик көнбайышта йәшәгән ҡара табындарҙың һәм Ағиҙел буйында йәшәгән йомран табындарҙың шәжәрәләре бар. Йомран табындарҙың шәжәрәһендәге кеше исемдәрен районыбыҙ тарихы менән бәйләмәйем, әммә ундағы Һөйөндөк, Ҡунаҡбай, Юлдаш, Атаяҡ, Ҡәйепҡол, Ҡолош исемдәре нисектер күңелде һағайта. Ҡара табындарҙың шәжәрәһенән айырмалы рәүештә, Сәхәүетдин мулланан ҡалған яҙма буйынса, барындар үҙҙәренең төп ҡарттатаһы тип туранан-тура Табын ҡағанды күрһәтә.

Табындан һуң Томан ҡаған – Томанлы йәки Томансы. Ҡәүем башы Табындың башҡа улдары күрһәтелмәй. Томанлы – Томансы бөгөнгө Төмән (Тюмень) ҡалаһы ерен күрһәтә. Быны ла инҡар итеп булмаҫ.

Айырмалыҡтың тағы ла бер ере бар. Унда Табын да, Томан да ҡаған тип күрһәтелә. Майҡы бей ҡаған түгел. Тарих фәндәре докторы мәрхүм Рим Янғужин Майҡы бейҙе Сыңғыҙхан ғәскәренең бер өлөшөнөң етәксеһе тип яҙа. Мөхәммәтғәли Кейеков, табындарҙы Иртыш буйынан күсенеп килгән, тип билдәләй шәжәрәлә. 1960 йылда сыҡҡан «Башҡорт шәжәрәләре»ндә Майҡы бейҙең оло улы Сура бей, Солтан бей һәм Сәхәүетдин мулла шәжәрәһендәге Иләк бей ҙә күрһәтелә. Әммә Алсаҡ бей Иләк бейҙең улы итеп бирелә. Ҡара табын Алсаҡ бей улы Болғаир улы булып күренә. Ә барын Ҡара шәйех туранан-тура Алсаҡ бей улы. Шәжәрәнән күренеүенсә, Ҡара Табындың атаһы Болғаир бей менән Ҡара Барын, Ҡара шәйех – бер туғандар. Майҡы бей тураһында мәғлүмәттәрҙе 1600 йылдар самаһында билдәле «Сыңғыҙнамә» тигән әҫәрҙән, шәжәрә төҙөүселәр иҫтәлегенән, тарихи ҡомартҡыларҙан һәм ауыҙ-тел ижады аша ялпы-йолпо беҙгә килеп еткән осмоттарҙың бер нисәһенә туҡталайыҡ. «Майҡы бей Көньяҡ Уралдың Миндиаҡ – Атаяҡ дирәсендә мәҡам ҡороб, Ҡарабалыҡлы күле буйында туҡдап, Дүрге яҡта ҙәйне бөтөрҙө». Кемдәлер икенсе фекер булһа ла, бәхәс итмәйек. Әммә Миндиаҡ – Миндәк, Атаяҡ – Ата-яҡ (хәҙер яңылыш йөрөтөлгән



Алтыаяҡ), Ҡарабалыҡлы күле – Һөйөндөк күле, ә Дүргеяҡ Турғаяҡ күле түгелме?

«Ҡара Табын аймағы Майҡы бейҙән таралмыштыр. Майҡы би Сыңғыҙхан дәүерләрендә Урал тауының Миәдәк тигән урынында булыб, Мийәс йылғасы буйында мәҡам иткән; ул Чынғыз ханға бүләк алыб барыб, аның белән юлдаш булыб, Чынғызхан белән бер арбада ултырыб йөрөгән. Аты Уйшин Майҡы би тигәндәр» (Әли Кииков).

Мидиаҡ тигән ауыл Силәбе өлкәһе Арғаяш районында күл ситендә ултыра. Әллә шул ерҙәр иҫләнәме? Ә боронғо легендалар табындарҙың ата-олатайҙарының ҡасандыр Алтайҙа йәшәүе хаҡында хәбәр итә. Р. Кузеевтың яҙыуынса, табындарҙың сығышы төрки ырыуҙарына барып тоташа. Башҡорт шәжәрәләрендә Майҡы бейҙең ата-бабаһы Төмән булыуы хаҡында әйтелә. «Приход табынцев в Европу предгорья Урала, поселение их в Южном Урале связано с монгольским нашествием» (Р. Кузеев).

«...Но это не совсем так. Табынцы еще очень-очень далеко до нашествия монголов жили на отрогах восточного и западного Урала до реки Сулман и до берегов Чусовой на Севере. Табынцы, его роды, племена кочевали между Алтайем и Уралом, но оказалось так, что при начале монгольского нашествия основные родоплеменные образования, наиболее мощные союзы табынцев находились на второй их родине Алтае.

Чингисхан, встретив воинственные передовые Орды – роды Табынцев, вошел с ним в Союз. Родоначальник Табынцев Майкы

бей был в Союзе с Чингисханом, воевали они совместно, но были случаи, особенно при приближении Орды к Уралу соединения Майкы бея, вступали в открытую войну против Чингисхана. Не потому ли что Чингисхан не дошел до Руси? Дорога Чингисхана до границ русских князей была довольно долгой, т. е. они задержались и вынуждены были остановиться, а потом повернуться с предгорий Урала», – тип яҙа икенсе ғалим.

Тағы ла бер иҫкәрмәне килтерәйек: «...Упоминание о повозке (телеге), на которой Майкы бий ездил вместе с Чингисханом может иметь буквально и переносной смысл. Известно, что монголы перевозили свои кибитки на телегах. С другой стороны, эта фраза может означать, что бий табынцев Майкы, вошел в Союз с монголами и был одним из наместников Чингисхана в Башкирии» (Р. Кузеев, академик).

Әлим Зарипов был вакиғаны, «Сыңғыҙнамә»не уҡып, шулай яҙа: «Майҡы бей 9 ырыуҙан 10 бейҙе әйәртеп, Сыңғыҙханды эҙләп китә һәм уны барып тапҡас, 9 бейҙе арбаға егеп, Сыңғыҙхан менән йәнәшә ултырып, ставкаһына йүнәлә... Һуңынан Сыңғыҙхан ошо 10 бейҙең һәр ҡайһыһына тамға, ҡош, ағас, оран бирә. «Чынғыз хан әйде, Ай Уйшын Майҡы бей! Синең агачың ҡарагач, ҡошоң ҡарағош, ораның Салауат булсын, тамғаң себерке булсын, диде», – тиелә.

* * *

Хәҙер инде халыҡ араһында йөрөгән риүәйәттәрҙән хәтернамә килтерәйек. Башҡа яҙмаларҙа был вакиғалар ҡасандыр сағылғанмы, юҡмы, билдәһеҙ. Беҙгә ҡиммәте шул, ниндәй генә биҙәүҙәр, үҙгәртеүҙәр аша килеп етмәһен, уларҙың төбөндә ысынбарлыҡ ята, тарих ята. Беҙ бынан Табын ҡәүеменең Сыңғыҙхан менән төрлө мөнәсәбәттә булғанын төҫмөрләйбеҙ – еңеүсе лә, еңелеүсе лә. Шәжәрәгә ҡарап, беҙ шуны аңлайбыҙ: Майҡы бейҙең атаһы Төмән бей булғас, ул Сыңғыҙхандың атаһы Есеүкәй менән бер осорҙа йәшәгән. Тик шуныһы уйландыра, Майҡы бей туранантура Томан ҡағандың улы булғанмы икән?

Томан ҡаған менән Майҡы бей араһында бер нисә быуын булыуы ла ихтимал. Әлегә ҡул аҫтымда бындай мәғлүмәт юҡ. Табын ҡағанатының ҡояшы һүрелеберәк байыуға ыңғайлаған осорондa йәшәгән булһа кәрәк Майҡы бей. Әммә икеһе лә бик ҙур хәритә аралығында. Есеүкәй улы Темучин Онон йылғаһы буйында ҡеүәт туплағанда, Майҡы бей, Томан ҡағанаты вариҫы булараҡ, Иртыш, Арал, Урал буйҙарында хакимлыҡ иткән.

«...Тубыл, Урал буйҙарына көнсығыштан бик ҙур ҡара яу килгән, ти. Тубыл буйында беҙҙекеләр менән бик ҡаты алыш булып, ҡара яу кире киткән. Байҡы батыр жыйын жыйып байрам иткәндә,

ҡара яу тағы ла килеп баҫҡан. Беҙҙекеләр Уралға кергән. Тегеләрҙең арбалары ҙур, үҙе йомро икән. Арбаларының ағас үҙәктәре шағыр ҙа шоғор тирә-яҡты баҫып килә икән. Арбалары тауурман араһына ни һыймай, ни борола алмай. Тауҙа һыбай йөрөй белмәгәс, һуғышсылары йығылып, уҡтарын юғалтып бөткән, ти. Уҡ баштары булмағас, тупаҡ уҡ менән аталар икән. Ә ул йә осмай, йә сәселмәй. Байҡы батырҙың һуғышсылары әйҙә тегеләрҙе ҡырырға тотонмаһынмы? Тубылдың аръяғына ҡаҙәр баҫтырғандар. Шунан тегеләрҙең башлығы Байҡы бейҙе Арал күленең янына Аҡҡоланмы, Ҡуянҡолаҡмы тигән ергә ҡунаҡҡа саҡырған. Бөтә ғәскәре менән сиреү булып барған Байҡы батыр.

Табында ултырғанда ҡара яуҙың башлығы бер тубылғы һораған. Байҡы батырға тубылғыны тоттороп: «Һындыр», – тигән. Байҡы батыр тубылғыны һындырып, аяҡ аҫтына ырғытҡас, теге баш тағы ла ун бер тубылғы һораған. Ун бер тубылғыны һындырыуы ҡыйын икән. Шуны ҡарап ултырған ҡара яу башы: «Бергә булайыҡ. Берҙәм булһаҡ, беҙҙе һындыра алмаҫтар», – тигән. Байҡы батыр риза булып, уға күк ат биргән. Шунан һуң теге: «Яуҙа бер-беребеҙҙе табыр өсөн һәр берегеҙгә билдә бирәйем», – тип, билдә өләшеп сыҡҡан, ти. Байҡы батырға бере һе лә һындыра алмаған тубылғы һеперткеһен бүләк иткән, ти».

Шуныһын асыҡ хәтерләйем, был риүәйәтте Һөләймән ауылы аҡһаҡалы Әхмәтов Мостафа бабай һөйләгәйне. Был аҡһаҡал зирәк зиһенле ине. Аҡмулла менән аралашҡан кеше. Аҡмулла тураһындағы хәтирәләре менән ерҙәшебеҙ Рәүеф Насиров менән уртаҡлашып, уларҙы баҫмаларҙа күрҙек. Ул ваҡытта беҙ Байҡы батырҙың кем икәнен дә һәм ниндәй яу тураһында хәбәр барғанын да төшөнмәгәнбеҙ. Баҡһаң, Байҡы батыр – Майҡы бей. Башҡорттар менән, атап әйткәндә, Табын конфедерацияһы ҡораллы көстәре менән, Сыңғыҙхан сиреүҙәренең 14 йыл барған һуғыштары хәтирәһе икән. Мостафа бабайҙың Арал күле буйындағы Аҡҡолан тигән ер Ҡолан башы тигән ер. Ҡолан башы тигән ер Һырдаръя йылғаһы ярҙары буйлап һуҙылған тауҙар икән. Был турала остазыбыҙ Ә. Вәлиди үҙенең Төркиәлә нәшер ителгән «Төрек, татар тарихы» исемле китабында яҙа: «Чынгыз фотухатын йиренә йиткереп, 1223 ел Бохараға килеп ҡыш үткәрде. Шул уҡ «1223 йылда яҙ көнө ул Сыр-Дәрья буйлап юғары менеп Ҡулан башы дигән урынға һунарға килде. Жужый ул ваҡыт хәҙерге казакъ сахрасында Иртыш яҡларында тора ине. Ул да, башҡа балалары да Чынгызның янына жыелдылар. Жужый атасына һәдия итеп екерме мен ҡадәр аҡ ат алып килде. Монда ҡоролтай булды, ханға хыянәт иткән уйғур бикләрен хөкем иттеләр. Чынгыз бөтен жәйне биредә үткәрде». Бында тағы ла бер һөйләмде өҫтәргә кәрәк. Мостафа бабай: «Ҡара яу башына ҡунаҡҡа барғанда йола буйынса

бүләк алып барылған. Байҡы батыр бер мең аҡ ат бүләк иткән», – тигәнен дә өҫтәп, ҡалғанын фекергә йомғаҡ яһарға ҡалдырайыҡ.

Бөгөн Сыңғыҙхандың ни өсөн Урал аша үтмәүе тураһында төрлө фараз йөрөтәләр. Ә ул ябай күренә. Сыңғыҙхандың оло улы Жужый етәкселегендәге төмәндәр Табын берләшмәһе булған башҡорт һуғышсылары менән бәрелешә-бәрелешә йылдар үткән. Сыңғыҙ үҙе, Хорезмдың шахы Ғәләәтдин үлгәс, уның улы Йәләләтдин менән һуғышырға тотона. Уралды аша үтә алмаған Жужый, күрәһең, атаһы менән кәңәш ҡорғандан һуң, килешеү өсөн, төп башҡорт бейе Майҡыны һәм уның төмән баштарын саҡырып, Ҡолан башында ҙур ҡоролтай үткәрә. Тағы ла шуны иҫтә тоторға кәрәк. Һөйләшеү, килешеү өсөн үҙ-ара еңел аңлаша торған тел кәрәк. Бер-береңде бөтөнләйгә аңламаһаң, килешеүҙе нескәлектәренә тиклем нисек еткереп була? Юҡ, улар, һис шикһеҙ, дөйөм телдә, боронғо төрки телендә һөйләшкән һәм бик еңел аңлашҡан.

Ҡыпсаҡ теленең тармағын да тәшкил итмәгән монгол теле Майҡы бейгә һәм башҡаларға аңлашылмаҫ ине. Өҫтәүенә, был осорҙа, күрәһең, төркиҙәр араһында ислам тәғлимәтен таратыу ярайһы уҡ ҡыҙыу барған, тип аңларға кәрәк. Һиндостан, Ҡытай йоғонтоһо аҫтында көньяҡ мунғалдар будда диненә әүҙем булһа, төркиҙәргә будда ят тәғлимәт булған. Төп теманан ситкәрәк китеп булһа ла, тағы бер ысынбарлыҡҡа иғтибар йүнәлтәйек. Боронғо риүәйәттәр буйынса, башҡорттоң ата-бабаларын Уралға аҡ бүре әйәртеп алып килгән, имеш. Шуға ла халыҡтың төп инаныу билгеһе бүре иҫәпләнеп, үҙҙәренең әләмдәренә бүре башы төшөргәндәр. Төркиҙәрҙең ҙур бер өлөшө Сыңғыҙханға тиклем үк Һунғарға (Венгрияға) күсенә. Бер өлөшө ғағауздар ерендә, бер өлөшө Ҡырым, Тын, Ҡобан буйҙарында төпләнә. Урыҫ кенәзлектәре менән бер туҡтамай һуғышып торалар. Мәскәү кенәзлегенән яйлап ҙур дәүләт барлыҡҡа килгәс, һарай эсендәге бәхәс, үлтереш, ғауғаларҙан батшалар дәүләтте һәм үҙҙәрен наҡлар өсөн опричнина булдыра. Опричниктар күбеһе ялланған боронғо половецтар, бәшәнәк ҡыпсаҡтар була. Өс быуат ярым үтһә лә, инде христианлашҡан, телдәре лә славянлаша барған дала төркиҙәре Сыңғыҙхан биргән билдәләрҙе һәм төп тотемдарҙы онотмай әле әйәр аҫтына һалынған кейеҙ серге япмаһында алғы яҡҡа бүре башы һүрәтен эшләгән. Ә япҡыстың артҡы яғына йә неперткенең үҙен бәйләгәндәр, йә уның һүрәтен генә киндер туҡымаға буяу менән төшөргәндәр. Опричниктарҙың батша һарайына яҡындары даими хеҙмәттә булһа ла, ялланғандары һәр саҡ алмашынып торған. Бынан башҡа Сыңғыҙхандың табындарға биргән ораны – салауаты ла тап шул саҡта ялланып, урыҫ дәүләтендә хеҙмәт иткән боронғо төркиҙәрҙән күсә башлаған. Салауат – ул күмәкләшеп ҡысҡырып, бер-береңә дәрт биреү, әйҙәү, рухландырыу. Ул әйҙәүгә

ниндәйҙер бер эшлекле мәғәнә һалыу һәм шуға күмәк ҡәүемдең ҡушылыуы, башҡарыуы. Ул ваҡытта салауат әйтеүҙең бер төрө һуғыш ваҡытында хәрби алымды ҡысҡырып аңлатыу, шул мәғәнәгә бөтәһенә лә ҡушылыу мотлаҡ була. Ура! ал, ура... Ура тигән оран дошманға аңлашылмаған. Әммә ура һүҙе һуғышҡа ташланыусыларға көс-ҡеүәт биргән. Быны урыҫ кенәздәре лә, һуңғараҡ батша яугирҙары ла мәғәнәһен аңламаған. Әммә бер-береһенә дәрт биреүсе ауаздың файҙаһын күреп, әкренләп улар ҙа оранды үҙләштергән. Ул бөгөн дә ҡулланыла, тик уның төп мәғәнәһен бөгөнгө урыҫ генералы ла, һалдаты ла белмәй. Беҙҙә салауат әйтеү, аят мәжлестәрендә өгөт-нәсихәтле шиғри юлдарҙы көйгә һалып күмәклəп йырлау әле лә башҡарыла.

* * *

Хәҙер инде барындар шәжәрәһенә кире ҡайтайыҡ. Төп фекерем барындар монгол түгел, ә төрки халыҡ булыуын иҫбат итеү. Барындар ҡырымдарҙа, ҡырғыҙҙарҙа, уйғырҙарҙа һәм ғағауздарҙа булыуы ихтимал. Барындар исеме ҡушылған ҡәүемдәр береһе лә монгол түгел, бөтәһе лә төрки халыҡ, телдәре һәм диндәре лә.

Икенсенән, шәжәрәләге исемдәргә иғтибар итәйек. Табын, Томан исемдәре беҙгә аңлашыла. Майҡы һүҙе бер ни һағайтһа ла, төрки тамырлы һүҙ икәне аңлашыла. Ҡайһы бер шәжәрәлә ул Байҡы тип тә бирелә. Байҡау һүҙенән алынһа, ул ҡарап тороу, тикшереү мәғәнәһен аңлата. Шәжәрәләге Тоғо, Муңғаҡ, Буға һүҙҙәре генә хәҙер һүҙ әйләнешенән сыҡҡан тиерлек.

Мунғаҡ – боронғо төрки һүҙе. Му – һыйыр баҡырған тауышты белдергән һүҙ. Сәхәүетдин мулла уның исеме янына Мөңөрәү шәйех тип яҙып ҡуйған. Бала саҡта уҡ Мунғаҡ тип исем ҡушҡас, күрәһең, ул илаҡ булғандыр.

Лəкин Мунғаҡтың икенсе мәғәнәһе лә бар кеүек. Мунғаҡ – Мунаҡ, муналыу – боталған, әрселгән, шыма, таҙа, юнылған. Мәҫәлән, мунаҡ һыйғыр, мунаҡ ҡороҡ. Мунда һүҙе лә шуға яҡын. Аттың ялы япмаған ҡулбашы өҫтө мунда була. Ябылмаған, асыҡ. Уны тауға ҡарата ла ҡулланалар ине. Тауҙың асыҡ бейек урынын тау мундаһы, тине ололар. Дөйөмләштерелгән әҙәби тел уны һүҙ әйләнешенән төшөрөп ҡалдырҙы. Буға, Буғай исеме лә ике мәғәнәлә. Буға – ул йондоҙ исеме. Ул Ҡуҙы һәм Игеҙәктәр йондоҙлоҡтары менән бергә, дөрөҫөрәге, шулар уртаһында урынлашҡан. Лəкин шәжәрәлә Буғай тип бирелгән, һуңғыһында алты быуын алдағы ҡарттаһы Хажи Буға ғына. Уның төп мәғәнәһе боронғо төрки телендә бик ҙур, ғәйрәтле, көслө тигәнде аңлатҡан. Буғай үгеҙ... Шул һүҙ генә лә был исемгә баһа бирә лә ҡуя кеүек. Урыҫтар ҙа беҙҙән отоп алып, ҙурҙы, көслөнө буғай, ти.

Майҡы бей!.. Ҡалмаҡ мунғалдарҙа бей һүҙе юҡ. Бей тик төрки халыҡтарҙа була торған атама. Бей – ул хужа, ырыуҙың затлы кешеһе, остаз, башлыҡ. Майҡы бейҙең Кейековтар яҙған һәм күрһәткән шәжәрәлә уландары бер яҙмала дүртәү, береһендә алтау күрһәтелә. Юлдаш бей, Яҡшы бей, Бүҙәнә бей, Ябансы бей, Иләк бей, Алсаҡ бей. Әммә Сәхәүетдин мулла уның ике генә улын күрһәтә, Ҡара Ғәзиздең нәҫел-нәсәбен дауам итмәй. Үрҙә күрһәтелгән исемдәр ҙә төркилекте дәлилләй кеүек. Майҡы бейҙең кесе улының исеме лә өс төрлө яҙыла. Аланса, Алча һәм Алчаҡ (Алсаҡ). Уның улы Ҡара шәйех. Ә Ҡара шәйех – ул төрки. Башҡорттар – тәбиғәт балалары, тип юҡҡа ғына яҙмағандар. Тәбиғәттә ҡара буяу иң көслө төҫ. Ул барыһын да баҫа, үҙ төҫөнә индерә. Шуға ла исемдәрҙә лә ул йыш ҡулланылған. Ҡара – ул билдә, сифат. Ҡара шәйех, ҡара яу... Тоғошар тигән исем дә беҙҙе аптырашта ҡалдырмаһын. Тоғо – йыш, ҡалын, беше, тыңҡысланған, һәлмәкле, тултырылған мәғәнәлә.

Миңә Исмәт Зат улы менән танышырға тура килде. «Һин татармы, ҡырым татарымы?» – тип һорашаң, асыуланыр ине. Ленинградта аспирантура бөткән, фән кандидаты. Төркиәлә йәшәй. Һүҙҙән һүҙ сығып китеп, үҙемде, Табын ҡәбиләһе Барын ырыуы кешеһе, тигәс, ҡапыл ул мине ҡосаҡлап алды. «Мин дә барын бит, Ҡырым барыны! Унда беҙҙең утыҙлаған ауылыбыҙ бар», – тине. Күп саҡырҙы мине. Эш тип, бушап булманы. Бик үкенесле, әлбиттә.

– Барын Ҡырым ханына ҡунаҡҡа йөрөгән, табындаш булғандар. Түрҙәге тәхеттә бер ваҡыт хан ултырһа, унан Барын ултырған, – тине. Тимәк, Барын Ҡара Шәйех Дон, Тын, Днепр араһында Ҡырымда ла хакимлыҡ иткән булһа, сама менән 1260 йылдарға тура килеүе күҙаллана. Ул осорҙағы ырыу ҡәүемдәрҙең үҙ-ара бик бәйләнешеп, аралашып йәшәүе, бигерәк тә Алтай, Саян, Һинған йәки Ханғай, Төньяҡ Магулстандағы байтаҡ ырыуҙарҙың төркиме, әллә мунғал сығышлымы икәнен белеүе ауыр. Шулай ҙа тәбиғәт ҡанундары төрки тамырлыларҙы үҙ төркиҙәренә, ә монголдарҙы үҙ мунғалдарына берләштереп, бөгөнгө көндә шул ҡағиҙә менән йәшәйбеҙҙер. П. И. Рычков ҡалмаҡтарҙың бер тармағы торғауыттар тураһында яҙғанда, уларҙың йәшәү урынын билдәләй: «...коего границы: к востоку Китайское государство, к западу узбеки, к северу степи мунгальские».

Ә Карамзин «Предания веков» тигән китабында: «...вслед за братом Андреем поехал в стан могольский, где Батый, приняв их ласкою... » – тип яҙа. Күреүегеҙсә, ике тарихсы монгол һүҙен ике төрлө яҙа. Тимәк, беҙҙең ата-олатайҙарҙың мунғал һәм мағул тип һөйләүҙәре дөрөҫкә сыға. Тик улар мағул һүҙен төрки теллеләргә, ә мунғалды бөгөнгө монгол тип атап йөрөткән халыҡҡа төбәгән. Мағулдарҙың төрки булыуҙарына тағы ла бер дәлил. Әхмәтзәки

Вәлиди Төркиәлә сыҡҡан «Төрек, татар тарихы» китабында бына ни яҙа: «Татар сүзе асылында Маҕул кабиләләренең исеме иде. Чынгыздан әлгәре «татар» исеме бу көн «магул» дип аталған кабиләләрнең бер ничәләренә исем булып та йүри иде». Һорау тыуа. Татарҙар кем? Билдәле, улар төркиҙәр. Шулай булғас, ҡайһы бер ғалимдарҙың фекеренән айырмалы рәүештә, көнсығышта йәшәгән төркиҙәрҙе маҕул төркиҙәре тип атарға тулы хоҡуҡ бар. Бөтә ҡыпсаҡ телле төркиҙәр, шул иҫәптән барындар ҙа монгол (мунғал) түгел, ә маҕул төркиҙәр. Тик маҕул һүҙе күп осраҡта ҡулланыуҙан төшөп ҡалған.

Табын-барындарҙың Туңғатар ауылы кешеһе Мырҙахан хәлфәнән мираҫ булып ҡалған шәжәрәһе Сәхәүетдин Ҡорамшин мулланыҡынан аҙ ғына айырмалы. Ҡарамышев Мырҙахан Турғайҙың улдарын Ҡәмбәр, Күкәм, Тәңребирҙе итеп күрһәтә.

Ә Сәхәүетдин мулла Турғайҙың Хужабирҙе, Хупбирҙе (игеҙәктәр), Иҫәнбәт (быныһы икенсе инәйҙән) һәм Кембирҙе тигән дүрт улын күрһәтә. Хужабирҙенең балалары күрһәтелмәй. Хупбирҙенән дүрт ул: Тәңребирҙе, Дуҫбирҙе, ике игеҙ ул Кискилде һәм Ҡушкилде. Сәхәүетдин мулла һәм унан һуңғылар тик үҙ тармағын ғына күсергәнгә оҡшай. Һис шикһеҙ, был шәжәрә бик киң булғандыр... Артабан төп ҡартатай Буғай солтан күренә. Әммә кемдең улы булыуы аңлайышһыҙ. Кискилде улымы, әллә Ҡушкилденекеме? Буғайға ул аңлатма биреп китә.

Буғайҙың инәһе яуҙан ярлап алып ҡайтылған була. Оҙаҡ бала күрә алмай йөрөй. Балаға ҡалһа, ат менә лә саба икән. «Ҡыһыр» тигән ҡушамат та биргәндәр икән үҙенә. Йәше бер аҙымаҡ ғүмеренә тиңләшкәндә генә Буғайҙы тапҡан, имеш. Улына исемде лә үҙе ҡушҡан, ти. Буғай хакимдың өс улы һәм ике ҡатыны күрһәтелә. Оло ҡатынынан – бер ул. Ҡаҙаҡтарҙан килтерелгән Юлдус Айшан һәм Тайшанды Буғайға бүләк иткән. Мырҙахан хәлфәнең күсермәһендә Айшан менән Тайшандың нәҫел-нәсәбе яҙылмағанлыҡтан, беҙ уларҙың бер өлөшөн бирәйек, сөнки бөтә халыҡтың тамырын яҙып бөтөрөү мөмкин түгел, кем үҙ тамырын нисек яҙған, шул килеш бирергә тырышайыҡ. Башта Тайшан тамырын асып ҡарайыҡ.

Буғай хакимдың күбәләктәрҙән алған Аҡсискә (Аҡсәскә) исемле ҡатынынан бер генә ул – Йомакилде күрһәтелә. Йомакилде көнбайыштан Урал аша үтергә тырышҡан урыҫ воеводалары менән Ләмәҙтамаҡ тирәләрендәге һуғышта ҡаты яра алып ҡайтып, үҙ йәйләүендә, үҙ тирмәһендә йән бирә. Ҡәбере Ураҙ ауылы ҡаршыһындағы Айынташ йәйләүендә, йә Яйыҡтың уң ярындағы ултырағында, хәҙерге Учалы – Белорет юлы өҫтөндәге Батшалыҡ түбәһендә булырға тейеш. Шулай һөйләй торғандар ине ҡарттар, ҡәртнәйҙәр. Сөнки ул ерҙәр, Тәңребирҙе буйында

ойоштороло̆ан биш ырыу ҡоролтайы ҡарары менән ҡара табындарҙа бирелгәнсе Барын-Табын ерҙәре була.

Йомакилденең туғыҙ улы күрһәтелә. Оло улы – Талыш. Ул ер хәҙер Талышман тип атала. Талыш атаһының ере – Батшалыҡ түбәһенә ҡаршы бик матур шишмәле тау бөгәжәһе. Ултырып йәшәргә бик уңайлы урын. Әлегә тиклем унда колхоздың ялан батырҙарының төйәге булды. Талыш ҡалмаҡтар менән һуғышта үлә. Фәҙәттә, көнсығыштан йә көньяҡтан килгән дошман, был юлы төньяҡтан аңғармаҫтан килеп баҫа. Ҡырҡасты урманының көнсығышында, Кәтерин юлы үткән ерҙә, ҡалмаҡтар күп булыуы менән еңеүгә өлгәшә. Хәҙер ул ерҙе Яулығас, тиҙәр. Дөрөҫ исеме – Яулы ағас. Йомакилденең Өмәркүл исемле улының Яйыҡ тигән улы була, әммә уның улы Ҡотлогилденән башҡа эҙҙәре яҙыуҙа юҡ.

Тайшандың, күбәләктәрҙән алған Тәңкәле исемле бик матур ҡатынынан биш ул тыуа: Аят, Сапҡын, Бороҡ, Ҡужай, Ҡолаҡсын. Әммә Ҡужай тигәне йә иртә үлгәндер, йә башҡа бер сәбәбе булғандыр. Сөнки уның исеме өҙөк-һурыҡ һыҙыҡ менән генә уратылған.

Исеме билдәле булмаған тағы бер ҡатынынан Аят һәм Ҡолаҡсын тыуа. Малайҙарҙың исеменә ҡарағанда, улар ҡаҙаҡтарҙан йә урлап, йә баҫып алған ҡатындан тыуғандыр кеүек.


Исемдәр атамаһына килгәндә, бер үҙенсәлеккә иғтибар итәйек. Сапҡын исеме аңлашыла. Хәбәр килтереүсе, изгелек эшләүсе. Бороҡ тигән һүҙҙе күптәрегеҙ аңламайҙыр. «Хәсән ағайыңа көрәген бороҡ алып барып бир... Һеҙҙе ҡунаҡҡа саҡырам, бороҡ килегеҙ, сәбәп тапмағыҙ», тиҙәр. Шундай осраҡта һәм мәғәнәлә ҡулланыла беҙҙә бороҡ һүҙе. Күрәһең, уны кешегә ҡушҡанда яҡшыға юрап, бик яуаплы, үҙ һүҙендә тора торған кеше итеп күргеләре килгәндер.

Бороҡтоң дүрт улы булған. Ҡашаға ислам тәғлимәтен алһа ла, башҡалар кеүек үк тәңреселектең дә ыңғай яҡтарын инҡар итмәгәндер, буйһонғандыр, ололағандыр. Ҡашаға, боронғо атабабаһы йолаһы буйынса, муйынында еректән эшләнгән ир енесе йөрөткән. Беҙгә ул Ибн Фаҙландың әле 922 йылда уҡ башҡорттар тураһындағы яҙмаһын дәлилләй кеүек. Башҡорттоң аңы, философияһы ла ябай һәм дөрөҫ. Ул тормош башланғысын ерҙән эҙләгән. Тик ул Тәңренең, Алланың яҡлауын, һаҡлауын ғына һораған. Бөгөнгө кешенең дә эске рухы шундай.

* * *

Казактар өсөн Тубыл йылғаһынан алып һәр ревизия һайын киңлеге йә 35, йә 25, йә 15 саҡрым аралыҡта башҡорт ерҙәрен тартып ала-ала, ер сиге бөгөнгө Учалы районына килеп еткән.

Талап алынған ерҙәргә Новгород, Сарапул, Мәскәү янынан крепостной крәҫтиәндәрҙе килтереп ултыртҡандар. Ергә нығынһындар өсөн крепостнойлыҡтан ҡотҡарып, уларға казак статусы бирелгән. Был казактар сик буйын һаҡлау буйынса хәрби хеҙмәт менән бергә игенселек, малсылыҡ менән шөғөлләнергә, башҡорттар кеүек үк Ырымбур дистанцияһын аҙыҡ-түлек менән тәьмин итергә бурыслы булған. Хеҙмәт өсөн дәүләт уларға аҡса түләмәй. Ике бурысты үтәү ауыр булғанлыҡтан, улар бер нисә тапҡыр баш күтәрә. Ҡайһы берҙәре башҡорттар менән бергә 1735–1740 йылдарҙағы ихтилалда ҡатнаша. Улар араһында ҡаршылыҡ тыуа. Бер өлөшөн Ырымбур властары үҙ яҡтарына ауҙарырға өлгәшә. Әммә бер өлөшө ихтилалда ярайһы уҡ әүҙем ҡатнаша. Ихтилалсы казак станицаларына ҡурҡыу һалыр өсөн дар ағастары эшләнә. Әммә ҙур язаларға барып етмәй. Кемгә аҡса бирелеп, кемделер ғәфү итеп, һалымдан бушатып, батша хөкүмәте уларҙы үҙ яғына ауҙара. Әммә ихтилалда ҡатнашҡандар ситкә тибелә, ҡыйырһытыла, башҡорттар менән дистанцияларға хеҙмәткә ебәрелә. Ҡыйырһытылған казактарҙың ҡайһы береһе башҡорттар араһына күсенеп йәшәүҙән дә баш тартмай. Барындарҙың Уй районында әле лә русса һәм бо-



ронғоса башҡортса аталып йөрөгән ауылдары бихисап: Ҡолаҡты, Ҡарағас түбә, Ҡарағас күпер, Әгер, Ҡалмаҡар, Бөгәжә, Таҡмас, Булат, Һанар, Бәшәр, Ҡуңғырау...

Хәҙер халыҡтың хәтерендә лә ҡалмаған Ҡалмаҡар ауылы тураһында бер мәғлүмәт бирәйек. Ғүмер буйына инженер-металлург булып эшләп, һуңынан Өфөлә йәшәгән Риза Басир улы Исхаҡов, сығышы буйынса Мулдаҡай ауылыныҡы булһа ла, ата-олатаһы Кәримдә мулла булып торғас, шунда үҫә. Ул – инәйемдең ике туған ағаһы. Риза бабай беҙгә Исхаҡовтар тоҡомоноң шәжәрәһен ҡалдырған. Уны ул 83 йәшендә Өфөлә яҙған. «...После смерти второй жены Сабиры дед мой Закир женился на девушке Махуп из деревни Калмакар. Она родила деду Закиру мулле еще одного сына Анувара, 13-го ребенка в семье моего деда, о котором мне сегодня ничего неизвестно».

Ҡалмаҡар ауылы ҡайҙа урынлашҡан булған? Минеңсә, хәҙерге Сәфәр ауылы өҫтөндә, йә булмаһа Ҡалмаҡар тауы үңерендә. Әммә янында боронғо шишмәлек булырға тейеш. Ҡалмаҡар тауы буйында хәҙерге Сәфәр ауылы ултыра.

Ҡужай торағының тәүге урындарының береһе Һанар менән Өйәл йылғаһының яҡын килгән ерендәрәк була, күрәһең. Бер ҡоролоҡ йылында Ҡужай шишмәһе һайыға. Халыҡтың бер өлөшө Һанар шишмәһенә, бер өлөшө Өйәл шишмәһенә күсеп ултыра. Ҡужайҙарҙың Пласт ҡалаһы менән Ҡолаҡты араһында Ҡушай шишмәһе һәм йылғасығы буйында ла ултырыуҙарын ҡарттайым Сәлимгәрәй һөйләй торғайны. Ҡашаға тауы итәгендә ҡышлауҙары булыуы билдәле. Унан һуң, күрәһең, хәҙерге Ҡорама менән Туңғатар араһындағы Ҡужай тауы, Ҡужай шишмәһе буйында оҙаҡ йәшәгәндәр. Казактар һәр ваҡыт үрт һалып ҡасыр булған. Ҡарауыллап тотоп яза биргәндәр, тау үңерендәге арҡалыҡта ике арбаның тәртәһенә элгәндәр. Сөнки тотолған башҡортто казактар ҙа шулай ике тәртәгә элер булған. Ул ваҡытта Ҡарт Муйнаҡ та, Туңғатар ҙа, Ҡорама ла булмай әле. Аралар, түбәләр аймаҡ-аймаҡ булып бер ергә, Ырымбур губернаһы булдырылғас, хәрби губернатор указы буйынса, 1843 йылда урам булып, өйҙәр бер-береһенә ҡаршы ултыртыла башлаған. Әммә һәр ғаилә ауыл яһағанда үҙ аймағын һаҡлаған.

Ҡужай ауылы Ҡужай тауын ҡалдырып, Бөркөтоя тауының көнбайышына Уй йылғаһының һулаҡай ярына күсеп ултыра. Был турала Сәхәүетдин ҡарт: «Оло зыяратҡа яҡын күскәндәр», – тип яҙып ҡалдырған. Оло зыярат 1955 йылға тиклем булды. Сиҙәм ерҙәрҙе күтәреү сәйәсәте менән беҙҙең төбәктә машина-трактор станцияһы төҙөлөргә ҡарар ителеп, Ирәндек колхозы, МТС өсөн хәҙерге Комсомольск ҡасабаһы урынын бирҙе. 6 колхозды

(«Ирәндек», «Молотов», «Новый путь», «Салауат», «Авангард» һәм «18-се партсъезд») ҡушып, «Поляковка» совхозы яһалды.

Ул зыяратты мин хәтерләйем. Тиҫтәгә яҡын йыуан ҡарт ҡайындар, сереп, һынып ятҡан олондар, йыуан-йыуан төптәр күҙ алдымда. Зыярат ҙур ине, оҙон-оҙон ҡәбер таштары һерәйешеп торор ине. Һәр замандың вәхшиҙәре була. Урын, ер етмәгәнме ни? Иманһыҙ кешеләрҙең иманһыҙ ҡарары буйынса, шул зыяратты бульдозерҙар менән гөрөп, ҡәберлек таштарын ҡутарып, тигеҙләп, урынына йорттар һалыр өсөн урын әҙерләнде.

1767 йылдарҙа Алтынтамаҡ заводының баҡыр иретеү рудниктарында эшләтер өсөн Тамбов һәм башҡа ерҙәрҙән крепостной эшселәр килтерелә. Тәүҙә улар 1755 йыл төҙөлгән Кәрәге йылғаһы буйындағы Кирәбе руднигында һөргөн-каторгала эшләй. Унан 1780–1790 йылдарҙа башҡорттарҙың борон мәғдән иретеп эшләгән Кинйәкәй (Вознесенка) руднигы асылғас, ике урыҫ ауылы барлыҡҡа килә: Вознесенка һәм Поляковка. Быға түбәндәге ваҡиға сәбәп. 1769 йылда Тула ҡалаһының бай купецы Ларион Иван улы Лугнин Златоуст ҡалаһын һәм заводын шул уҡ Тула ҡалаһы купецы Василий Мосоловтан һатып ала.

1735–1740 йылдарҙағы ихтилалда ҡара табындарҙан Шәйем балалары үҙҙәренең кешеләре менән ике йөҙлөлөк күрһәтә. Урыҫ командаһы килһә, бик әүҙем ярҙам итә. Хәритә өйрәтәләр, ихтилалда ҡатнашҡан яугирҙарҙы тотошалар, ауылдарҙы яндырышалар. Йосоп батыр, Төлкөсура, Бәпәнә абыҙ ғәскәрҙәре килһә, карателдәргә ярҙамға киләләр. Киләсәктә ҡайһы берҙәре бөтөнләйгә батша властары яҡлы булып, үҙ халҡына ҡаршы сыға. Ике йөҙлөлөк күрһәтеп, тарханлыҡ дәрәжәһен алыусылар бар. Восстаниела төп көс булып торған Табын Барын, Ҡыуаҡан ерен Таймас тархан Шәимов батшаның 1739 йыл 20 августағы «бунтовчищьи ерҙәрҙе алыу» тураһындағы указына ярашлы үҙләштерә. Хәҙерге Мейәс ҡалаһы ултырған ерҙе, Мейәс йылғаһының үрен, Уй, Яйыҡ башын (райондың Уральск ҡасабаһына тиклем) үҙ олоҫона ҡуша, Кара-Табынская волость Ҡара Табын ерҙәре булып китә. Шул уҡ ваҡытта был ерҙәргә ошо уҡ указ нигеҙендә килмешәк мишәрҙәр, татарҙар, сыуаштар болаша башлай. Губерна тарафынан уларға бирелгән ерҙәр Ҡолгилде Ҡарамышев ерҙәре була. Ике-өс йыл тартҡылашҡандан һуң Барын ырыуы вәкиле Ҡолгилде Ҡарамышев яһаҡ татарҙарына Юшалы күлен һәм уның тирәяғынан ер бирергә мәжбүр була. Сыуаш старшинаһы Илтабан Штапанов, сотник Миңлебай Ишмәнов, Йосоп һәм Әйет Баймәтовтар, Рысай Банещев, Алексей Илмаев, яһаҡ татарҙары Йосоп Нәҙермәтов, Баҡый Альметьев, Биктимер Уразмәтов Исәт провинцияһы канцеляриянан башҡорт ерҙәрен башҡорт ихтилалсылары Аҡҡужа батыр Ҡоломбәтов, Йосоп батыр Арыҡов

ерҙәренән өҫтәмә ер һорай. Был хәл 1750 йылдың 20 ғинуарында була. Әммә ялыу яҙыусылар Ҡолгилденең дә, Ҡотлобайҙың да властарға ҡаршы көрәшен нығыҡ иҫбатлай алмаған. Шулай ҙа шул уҡ ялыу яҙғандарҙан һаҡлатып, Мулдаш (хәҙерге Өргөн) үрендәге ер зинданға икеһен дә биклəп ҡуйғандар.

Һөҙөмтәлә, Мулдаш үренə һуғылып ятҡан Өргөн күле, Асыулы һəм Ҡарағай күлдəре тирə-яғы менəн 89 мең дисəтинə ер күскенселəргə бүленə. Шул урында йəшəгəн башҡорттар ситкə китмəй, үҙ ерҙəрендə ҡала. Уларҙың араһындағы «вирнай»ҙар оҙаҡ ғауғалашҡандан һуң аҫабалыҡ хоҡуҡтарын тергеҙə, бигерəк тə яу сапҡындары, линейный хеҙмəттə булып, хəрби чин алғандары һəм матди байлыҡҡа хужа булғандары. Был йылдарҙа бүлгеслəнмəй, башҡа халыҡтарға бирелмəй торған ер – Илселек һыҙмаһы – бөтөнлəйгə бөтөрөлə, халҡы, нигеҙҙə, ерһеҙ ҡала һəм типтəрҙəр дəфтəренə элəгə. Шулай итеп, Учалы районында типтəрҙəр өс, хатта дүрт тамырға бүленə. Башҡорт типтəрҙəре, татар типтəрҙəре, сыуаш типтəрҙəре, хатта удмурт, мордва ҡанлылары ла бар.

Шулай, ерем-илем, тип империяға ҡаршы һуғыша торғас, барындар ерен ҡара табындар ҙа, килмешəктəр ҙə талап алып бөтə, үҙҙəре ус аяһындай ғына ерҙə тороп ҡала. Әммə был ер өсөн үҙара ғауғалашыуҙың өҫтө генə, асылы төптə. Уны ер хужалары ла, килмешəктəр ҙə белмəй. Йосоп, Аҡҡужа, Төлкөсура, Бəпəнə батырҙар яуынан һуң властар 1743 йылда геодезистар ебəреп, беҙҙең төбəкте тəүлəп хəритəгə төшөрөп ала. Быны ҙур һаҡлыҡ һəм ярым йəшерен, алдау, бүлəк таратыу, һəр төрлө вəғəҙəлəр менəн башҡаралар. Сағыштырһаң, хəйлəһеҙ, бер ҡатлы, тиҙ ышана торған башҡортто, бөгөнгө һайлауҙар алдынан алдаштырған кеүек, алдаштырғандарҙыр. Ысынбарлыҡта был хəритə төҙөү бөтə башҡорт халҡы өсөн иң фажиғəле һөҙөмтələргə килтергəн ваҡиға була. Тик ундай алымдарҙың киləсəктəге һөҙөмтəһен элек тə, хəҙер ҙə төҫмөрлəй алыусылар күп түгел. Хəритə төҙөлгəс, ысын-ысындан оккупация башлана.

Мосоловтар, мəҫəлəн, Əйле, Ҡыуаҡан, Барын ырыуҙарының ере осрашҡан Ҡыятүр буйынан 70 мең дисəтинə ерҙе, нигеҙҙə, тартып ала. Унан һуңғы заводчик, шул уҡ Тула купецы Лугнин Мейəс, Силəбе юлын, йəнəһе, һатып ала һəм ни бары 300 һум аҡса түлəй. Унан һуң Берг-Коллегияға хат яҙып, Златоуст заводынан һəр яҡҡа етмеш саҡрым ерҙəрҙе Ағиҙел йылғаһының башына тиклем, Силəбегə еткəнсе Ҡыуаҡан, Əйле ерҙəрен үҙенə шəхси милек итеп теркəп ҡуя. Ағиҙел башына тиклем булғас, Байһаҡал, Ҡарағужа ерҙəре лə Лугниндыҡы була. Учалы районы ере Лугниндың шəхси ере тип иҫəплəнə документта. Әммə быны халыҡ белмəй. Үҙ ерендə түгел, ə Лугниндың ерендə йəшəгəн булып сыға олатайҙар...

* * *

Бөгөн дә шулай. Йә агрофирмалар, йә предприятиелар, башҡа эш урыны булдырыусы сәнәғәт берекмәләре төҙөү юлы менән 40 йылға башҡорт ере дәүләт тарафынан сит кешеләргә арендаға бирелә. Ер ҙур компанияларға, берекмәләргә арендаға бирелеп бөткәс, төҙөлөш һәм артабанғы үҫеш өсөн инвестиция тип аталған бурыстарға батҡас, Башҡорт иле киләсәктә булырмы? Ул үҙенең юридик көсөн, хоҡуғын юғалтасаҡ түгелме? Дәүләт кенәһе тик һалым йыйыу структураһына әйләнер. Кем көслө, шул хужа. Был тәбиғәт ҡануны. Әле лә бик-бик сикләнгән «үҙаллылыҡ» бөтөнләйгә бөтәсәк. Конституция буш ҡағыҙ булып ҡалыр. Оккупацияның алымдары Рәсәйҙә сикле федерацияны бөтөрөп, авторитар дәүләт яһаясаҡ. Бөгөнгө көн маҡтаған инвестицияларҙың һөҙөмтәһе шул буласаҡ. Бына шулай. Был тирәлә беҙ иҡтисади ҡанундарҙың хоҡуҡ ҡанундарын барлыҡҡа килтереүенә шаһит булыуыбыҙ ихтимал. Шул 1740–1743 йылдарҙағы ер өйрәнеүҙәр хәритәһе нигеҙендә башлана ла инде башҡорт ерен баҫып алыу, Ырымбур хәрби линияһын, ҡәлғәләр, ҡалалар төҙөү...

Бөгөнгө уҡыусы минең менән ризалашмауы мөмкин. Һиҙеп торам. Ни бысағыма кәрәкме ул һинең ерең! Эш булһын, аҡса булһын, яҡын-тирәләге ҡалалар беҙгә ҡамасаулаймы ни? Беҙ бит бер илдә йәшәйбеҙ... һәм башҡа, һәм башҡа бик күп дәлилдәр килтерер. Ризамын мин дә һеҙҙең менән. Әммә йылҡының сусҡаға әйләнгәнен тормошта күргәнең бармы? Икәһе лә бер ҡапҡа эсендә, бер һарайҙа тора. Икәһен дә бер үк хужа ашата. Әммә йылҡы арбаға, санаға егелеп, хужаға ла, үҙенә лә, сусҡаға ла ем, бесән эшләй.

Ереңдең ҡеүәтенең 70% китеп тороуы тәбиғиме? Икенсе миҫал. Арыштың бойҙайға, бойҙайҙың һолоға әүерелгәнен күргәнегеҙ бармы? Ғалимдар тырыша, әлбиттә. Килеп сыҡмай бит. Ә ул, ғөмүмән, кәрәкме? Кеше организмы быуаттар буйы шул бөртөклөләргә күнеккән. Икенсе бөртөклөнө яһалма эшләү тәбиғиме?

Өсөнсө фекер. Әгәр ат – сусҡаға, бойҙай һолоға әүерелһә, ул тәбиғәттә йәшәй алырмы? Үҙенән-үҙе үләсәк түгелме? Ул генетика ҡанунына тура килмәй. Яһалма кеше эшләп тә ҡарайҙар бит. Ул дөрөҫмө? Ул үҙен тулы кеше итеп тойормо?

Хәҙерге сәйәсәт дәүләт структураһын, ҡоролошон, системаһын емереү өсөн эшләмәй. Ул милләттәрҙе бөтөрөү юлын ҡыуа. Иң алда телде бөтөрөү күҙаллана. Телде бөтөрһәң, милли рух үлә. Рух үлгәс, милләт тә үлә. Паспортҡа милләтеңде яҙыуҙы алып ташлау ҙа шул алымдарҙың береһе. Үҙ телен белмәй йәшәгән ҡала балалары киләсәктә милләт вәкиле булмаясаҡ. Дөрөҫөн әйткәндә, улар бөгөн үк юғалған. Милләт балалары ауылдарҙа ғына тороп ҡалған. Уҡытыусыларҙың бик күптәре шулай уҡ түбән баҫҡыста.

Араларында ундан етеһе тулы мәғәнәһе менән уҡытыусылар ғына, китап уҡытыусылар, йәки предметниктар. Тик ҡалған өсәүһе генә мөғәллимдәр – педагогтар. Дәүләттең үҫеш йүнәлеше, үҙ аллы фекер йөрөтөүсе педагогтарҙы икенсе юлға баҫырға, үҙ һүкмағын ташларға мәжбүр итте. Көнө-төнө араҡы, секс, үлтереш ҡарап үҫеп килгән балаларҙы ысын мөғәллимдәргә уҡытыу бик-бик ауыр. Шуға ла мәктәптәрҙә күбеһенсә предметниктар ғына ҡалғанға оҡшай. Уларға әшләүе еңелерәк. Әммә был психологтар, социологтар һорауы...

Дүртенсе фекер. Яланға, туғайға барҙың. Туп-тулы сәскә! Шундай матурҙар, бер-береһенә терәлеп, тығыҙ булып үҫкәндәр. Ҡайҙа барма, шул уҡ бер төрлө үлән, шул уҡ сәскә. Башҡа бер төрлө үлән дә юҡ. Һәм йыл һайын, ғүмер буйы шулай. Хатта шул үләндәрҙең, сәскәнең һеркәләре менән аталанған һирәк кенә башҡа сәскә лә шул болон хужаһы сәскәһенә оҡшап баш ҡоҫҡан. Әммә бик зәғиф, төҫө лә, хуш еҫе лә юҡ. Ялҡытҡысмы? Һөҙөмтәһе нәмә? Мал-тереклек ашаһа ла, туймай, туйһа ла, һимермәй. Составында тик бер төрлө матдә булғас, организм ауырыуға һалыша. Киләсәктә үлә. Сәскәләр ҙә ерҙең тик бер төрлө матдәһен – ашламаһын алғас, ер ярлыланды һәм бер төрлө матур сәскәләрең дә шиңде. Тормошта ла, тәбиғәттә лә шуның кеүегерәк. Берәүгә лә ирек, үҙ аллы үҫергә шарт бирмәй: русское поле, русская вода, русский воздух, русский лес, русские пельмени, русская водка, русский хлеб, русская картошка, русское небо һәм тағы ла әллә нәмәләргә тиклем бөтә русское булып бөткәс, ни уйларһың? Башҡа халыҡҡа бер нәмә лә ҡалманы түгелме? Әгәр туғайҙа тик «русские цветы» булмай, мең төрлө башҡа ла сәскәләр булһа, ергә лә, тәнгә лә, рухҡа ла мең ләззәт. Ана шул дәүләт рухы, дух покорения, дух самовозвышения, подавления эшләткән дә инде Лугнинды хужа итеп. Лугниндың кешеләре, хужа Ҡужайҙарҙың еренә баҫып килеп ултырғас, улар Бөркөтоя тауының көнбайышын ҡалдырып, Уй йылғаһының башынараҡ, үҙҙәренең йәйләүе Ямаҙыға яҡыныраҡ күсенә. Карателдәр ауылдарын яндырып, Мосолов, Лугниндарҙан үҙ ерҙәренән ҡыуылған ҡыуаҡандарҙың ике ауылына ер бирep, береһен үҙҙәренән үргә, береһен түбәнгәрәк ултыртып, Аҙнаш һәм Шәрип ауылдары нигеҙләнә.

Тайшандың нәҫелендә Ҡужай тигән кеше икәү күренә. Әммә тәүгеһен, Тайшандың туранан-тура ейәне булып күренгәнен, Сәхәүетдин мулла оҙон һыҙыҡтар менән уратып ҡуйған. Тоҡомо ла күренмәй һәм ул күпкә оло хәҙерге Ҡужайҙан. Иртә үлгәнме, яуҙа шаһит булғанмы, билдәһеҙ. Әллә икенсе тоҡоммо, бынығы ла билгеһеҙ. Тик Бороҡтоң улы Ҡушайҙан Ҡунай, унан тағы ла Ҡужай тыуа. Әйтергә кәрәк, шәжәрәнән төҫмөрләү, ә ҡайһы береһенең яҙып ҡалдырылыу һөҙөмтәһендә Турғайҙың балалары ара-

һында игеҙәк малайҙарҙың йыш булыуы күренә. Хужабирҙе менән Хупбирҙе улдары Кискилде һәм Ҡушкилде, Ҡушаға, Ҡашаға, Ҡашай, Ҡушай, Ҡунай, Ҡужай, Бурама, Ҡорама. Был генетик күсәгилештә һәм, ғәҙәт буйынса, атайға-улға, бер туғандарға оҡшаш исем ҡушыу йолаһы булыуы ла ихтимал.

Рәүеф Насиров үҙенең китабында, архив документтарына таянып, 1735–1740 йылғы ихтилалдарға бәйләп, Ҡунай Тайшанов, Ҡужай Тайшанов, тип яҙа. Әммә Ҡужай исемен ул яңылыш яҙа кеүек. Ҡужай Тайшанов архив документтарында бармы икән? Ҡунай Тайшановтың 1740 йылда Азов – Ҡырым һуғышында ҡатнашыуы билдәле. Ҡунай ошо һуғышта ҡатнашҡас, уға кәм тигәндә 25 йәш була. Тимәк, ул Алдар Иҫәнгилдин менән бергә була. Тимәк, Ҡунай, Алдар батырҙың Сәркәш батыры менән алышын үҙ күҙе менән күргән Барын башҡорто!

Яҙмаларымдан Ҡорамшин Сәхәүетдиндең 1831 йылғы булыуы асыҡланды. Ҡунай Тайшановҡа биш быуын. Һәр быуынға 30 йыл бирһәк, Ҡунай 1681 йылғы булып сыға. Тимәк, уға Азов һуғышында 29 йәш, ә Йосоп батыр менән бергә һуғышып йөрөгәнендә 55 йәш була.

Ҡунай исеме халыҡ телендә бөгөн дә йәшәй. Ҡорама ауылынан Поляковка ауылына барған тура юлдан үткәндә Ҡунай үрен төшәбеҙ. Уң яҡта, түбәндә Ҡунай шишмәлегенән Ҡунай йылғаһы ағып сыға. Ул Ҡунай шары әсенән ағып үтеп, һипмә алтын бөртөктәрен йыуа-йыуа, Уй йылғаһына һул яҡтан ҡоя. Ҡунай йылғаһының Ҡомас тауы итәгендә, шишмәнән йыраҡ та түгел, каратeлдәр тарафынан һуңғы нигеҙенә тиклем яндырылған Ҡунай ауылының нигеҙе әле лә төҫмөрләнә. Ҡар яуып, көндәр һыуынғас, төндә килеп баҫа каратeлдәр ихтилалсы йөҙ башы Ҡунай ауылын. Өйҙәргә ҡрт һалалар. Аҙ ғына һандағы ир заттары сәнсеп үлтерелә. Йәш үҫмерҙәрҙе, йәш ҡатын-ҡыҙҙарҙы ла сапҡыслайҙар. Тере ҡалған ҡарт-ҡоро, йәш балаларҙы алып, ҡараңғы һалҡын ҡыш төнөндә ҡарға бата-сума Ҡунай шишмәһе шарына, Ҡомас тауы яҡҡа ҡаса.

Рәсәй өсөн ҡан түккән, уның оло яуҙарында ҡатнашҡан йөҙ башы Ҡунайҙың иле-ере, халыҡ мәнфәғәте өсөн көрәше шулай тамамлана. Янып, күмергә әйләнгән ҡапҡа бағанаһына Ҡунайҙың мәйетен аҫып китәләр. Төндә уттан ҡурҡып ҡасҡан йылҡыларҙы, һыйыр-башмаҡтарҙы, һарыҡтарҙы баҫтырып, ҡылыс менән сабалар, һуялар, һөңгө менән сәнсеп үлтереп бөтәләр. Ауылдың эттәре бер ергә йыйылып, ҡараңғы төндә бер тауыштан олой башлағас ҡына туҡтай йәлләттәр. Ерҙәшебеҙ Рәүеф Насиров, үҙенең «Уралым батырҙары» тигән китабында архив яҙыуҙарына таянып, түбәндәгеләрҙе яҙа: «...Апрель айында 1500 ҡораллынан торған ғәскәр Урал тауына Сыбаркүл тирәһенә походҡа сыға һәм юлда

кемде осрата, шуны тураҡлай... Табын олоҫоноң ауылдарын, ундағы 300 тирмәне юҡ итә. Ауылда тороп ҡалған арыҡ 70 бейәне, 50 һыйырҙы, 100-ләгән һарыҡты сәнскеләп китәләр» (117-се бит). Был хәҙер ғалим тип аталған һәм бөтә башҡорт әше һәм тау идаралығы начальнигы В. Н. Татищевҡа буйһонған полковник И. С. Арсеньевтың йәлләттәре әше була. Быны беҙгә Берлинды, Рейхстагты алыуҙа ҡатнашҡан ордендар кавалеры, Ҡунайҙың тоҡомо Ҡорамшин Һарун Нурый улы малай саҡта һөйләй торған ине. Мин уҡып сығып, етәксе вазифаһында эшләгәнемдә лә (1973 йылда) тағы ла һөйләттем шул ваҡиғаны һорап. Һарун бабай бер нисә йылдан Әтләп ауылында мәрхүм булды.

Тарих фәндәре докторы Әнүәр Әсфәндиәров үҙенең «История сел и деревень» китабында, Ырымбур губернаһының Троицк өйәҙендә (ул өйәҙгә беҙ ҙә ингәнбеҙ) тик 1740 йылда карателдәр тарафынан 573 ауыл (түбә), 3899 йорт нигеҙенә тиклем, келәттәр, һарайҙар яндырылған, тип күрһәтә. Тарих фәндәре докторы быны архив материалдарына таянып яҙа. Ләкин ул архив материалдары урыҫ армияһы офицерҙарының күрһәтеүе буйынсалыр бит. Янып бөткәс, иҫәпләп йөрөнөләрме? Әллә түрәләренә яҡшы булыр өсөн һауанан алып бирҙеләрме? Ауыл-түбәләр һаны дөрөҫтөр. Хәҙерге Туңғатар, Поляковка ауыл советы ерҙәрендә генә егерменән артыҡ ауыл ҡара күмергә әйләндерелгәне билдәле. Ихтимал, бында бөтәһе лә инмәгәндер. Бәлки, янмай ҡалған «вирнай» ауылдар ҙа барҙыр, әммә улар исемлеге түбәндә яҙыласаҡ ауылдар араһында юҡ. 1. Яратҡол (Ҡорама аръяғы). 2. Сабырлы, аҙаҡ Бәшәр. 3. Иҡсан, Аят (Бурама арты). 4. Бурама. 5. Ҡаһым (Ҡаһым шишмәһе). 6. Әкембәт. 7. Мостай (Мостай шишмәһе, тауы). 8. Ҡунай. 9. Ҡужай. 10. Үтәш (шары, йылғаһы, ям-почта ыҙмаһы була). 11. Тамъян (Ҡомас тауы итәгендә. Шишмәлек). 12. Көйөк (Көйөк шишмәһе. Шар буйы). 13. Бәләкәс (Бәләкәй) һ. б.

Бикәс – Бәләкәй – Бәләкәү – Пәләкәү – Поляковка... Бына нисә исем йәбештергәнбеҙ бер ауылға. Эйе. Ҡыҙыҡ кеүек, әммә раҫ. Беҙҙең олатайҙар Поляков тигән билдәле шәхесте, ауылға исем биреҙәй кешене белмәй. Ул фамилия Мосолов, Лугниндар тураһындағы яҙмаларҙа ла юҡ. Тирә-йүндә лә Поляковка тигән ауыл беленмәй. Поляков тигән фамилиялы күскенсе, кочевник та был ауылда йәшәмәгән. Халҡыбыҙға, кочевник, тип, көлөңкөрәп, мыҫҡыллау ауазы менән урыҫ тарихсылары тарафынан ҡушылған был исемде, минеңсә, уларҙың үҙҙәренә ҡушырға кәрәк. Новгород, Псковтан Сахалинға тиклем күсенеп барған кешеләр ысын кочевник булалыр. Донъя көтөү өсөн матур йәй көнөндә малтыуары менән үҙ ултырағынан 5–10 саҡрымға күсеп йәй үткәргән халҡым ултыраҡ тормош менән йәшәгән тигән һығымта сығарыуға миңә тулыһынса хоҡуҡ бирә.

Ә ололар хәтере былай. 1958–1959 йылдарҙа, ул ваҡыттың ҡушыуы буйынса, урта белем алғас, ике йыл эшләргә тейеш инем. Эшләнем. Йылҡы көттөм. Минең менән ололар, атайым менән ҡорҙаш кешеләр эшләне. Береһе Ғөмәров Мәүлитбай Ҡарт Муйнаҡ ауылынан, икенсеһе Ҡәйепов Ғабдрахман – ауылдашым. Бер көн фарман булып, Поляковка ауылына йылҡы ҡыуырға ҡуштылар. Юл өйрәттеләр. Аҡҡыр аша ҡыу, Аҡҡыр тауына менһәң, Бәләкәй аҫта күренеп тора, тинеләр. Аҡҡыр тауын да, Бәләкәй ауылын да белмәй инем. Ҡабатлап һораным. Ентекләп өйрәттеләр. Баҡһаң, хәҙер Ҡаран, боронғо Ҡаҫмаҡты йылғаһын сыҡҡас ятҡан тау Аҡҡыр, ә аҫта Поляковка ята икән. Аҙаҡ Мәүлитбай бабайҙан төпсөнөп һорағас, бер ултырышта түбәндәгеләрҙе һөйләне:

– Борон, әле урыҫ ауылы булғанға тиклем, атаһы үлеп ҡалып, ерҙәренә икенсе кешеләр килгәс, Яйыҡ буйынан ғаиләһе, ағайэнеһе менән Бәләкәс (Бәләкәй) тигән кеше килеп ултыра. Ултырған ере – хәҙерге мәктәп урамы. Унда бик көслө ике шишмәлек бар. Исеме Бәләкәй булһа ла, үҙе бик ирәбе кеше була. Әллә нисә яуҙа ҡатнаша. Ауылының исеме лә Бәләкәй була. Шул ауылды урыҫтар үртәй. Бәләкәй яуҙа үлеп ҡала. Халҡы Урал итәгенә ҡаса. Хәҙерге Бәләкәй ауылы халҡы – шул тоҡом. Аҙаҡ улар ҡыуаҡандарҙы кереткән, арҡыры урам итеп ултырта. Шуға ла ул ауыл ике-өс исемле.

Бына шундай тарих һөйләгән ине Мәүлитбай Ғөмәров. Дөрөҫмө, түгелме, ә уға беҙ түгел, тарих хаким. Ә шулай ҙа тарих та, шәжәрә лә быны дөрөҫләй булһа кәрәк. Бәләкәй ауыл – Әпсәләм – Этимгән. Кем Барын, кем Ҡыуаҡан ырыуы кешеһе.

* * *

Ә беҙ шәжәрәгә ҡайтайыҡ. Тарих юллайыҡ. Буғай хаким Күбәләк ырыуынан Аҡсискә исемле ҡатын алып, яҙмала уларҙың бер генә улдары Йомакилде күрһәтелә. Аҡсискә үҙ яғына тартыпмы, Йомакилдегә Айынташ, Ҡараһыйыр, Көнтөшмәҫ, Остобейек итәктәрен, Яйыҡ буйының шул тауҙар тирәһендәге ерҙәрҙе бүлдерә. Атаһы Буғай хаким вафатынан һуң яуҙа алған яранан Йомакилде лә мәрхүм була. Йомакилденең ҡустылары Айшан һәм Тайшан үҙ-ара һөйләшеп, Йомакилденең еренә барындар, ҡыуаҡандар, тиләүҙәр, күбәләктәр менән арҡалаш булып, ил, ер өсөн бергә көрәшкән Ҡара Табын ырыуының Бүре солтан, Ҡалҡаман батыр кешеләрен кереткән һыйындыра.

Йомакилденең биш улы ҡала. Бикжан, Абдрахман, Өмәркүл, Биләркүл һәм иң кеселәре Бикәс (Бәләкәс). Күрәһең, Буғай улы Йомакилде үлеп, уның еренә Тәңребирҙе йыйыны ҡарары менән

ҡара табындарҙы кереткәс, ул ерҙән барлыҡ барындар күсенеп китмәй. Күптәре шунда төпләнеп, үҙ ерҙәрендә мәңгегә ҡала. Хатта «бунтовчищьи земли» тартып алынып, тәүге осорҙа дөйөм Ҡара Табын олоҫо тип, тархан Таймас Шәимовҡа бирелһә лә. Әсфәндиәровтың «История сел и деревень» китабында Ураҙ Ҡорама улы Ҡәйепов исемен дәлилләп, Ураҙ ауылында 1700 йылдарҙа һәм унан һуң да Ураҙҙың йәшәүен билдәләй.

Ҡорама ауылы кешеһе Йомабай Мостафин һәм уның ҡарттары яҙып ҡалдырған шәжәрә буйынса, түбәндәгеләр билдәле: Ҡайып – Муйнаҡ – Ҡорама улы Ураҙ.

«Бунтовчищьи» ерҙе алырға өлгәшкән Миңлебай Ишмәков тораҡҡа үҙ исемен биреп яҙҙырһа ла, ауылға Миңлебай исеме йәбешмәй. Ул бөгөн дә Ураҙ Ҡорама улы Ҡәйеповтың исемен йөрөтә. Һәм ул ерҙә Ураҙҙың башҡа балалары, барын табындарҙың нәҫелдәре бөгөн дә бар. Йомакилденең улы Бәләкәй Айынташ ерҙәрен ҡалдырып, ағалары Тайшан һәм Айшан еренә килеп, Бәләкәй тигән ауыл нигеҙләй. Ауыл яндырылғас, кешеләре таралғас, был ергә крепостной крәҫтиәндәрҙе, тотҡонда һәм һөргөндә тотолған быҙаулы ҡасаҡтарҙы, староверҙарҙы килтереп урынлаштырып, ер ҡаҙыу, мәғдән сығарыу эшенә ҡушалар. Урындағы халыҡ Бәләкәү ере тип һөйләнгәс, Поляковка була ла китә. Ысынлап та, урыҫ кешеһе барлыҡ нәмәне үҙ мәнфәғәтенә, үҙ теленә боррға бик оҫта. Был уларҙың ҡанында. Шуға ла күп рух көсө барҙыр уларҙа.

– Исемең кем? – тип һорауына:

– Ҡасим, – тип яуаплаһаң:

– А-а-а, Касимка, Коля, Николай, – тип исем биреп тә куя.

Һин теләйһеңме, теләмәйһеңме, унда уның эше юҡ. Иң мөһиме – урыҫса булһын.

Хәҙер тағы ла Ҡужайға кире ҡайтайыҡ та, урындағы тарихтың бер оло ваҡиғаһына туҡталайыҡ. Ҡужай Тайшанов булып йөрөһә лә, унан һуңғылары ике быуын Ҡужаев булып китә. Ҡужайҙың тыуған йылы – 1712 йыл. Һәр бер быуын тик үҙ йүнәлешен яҙғанға күрә, бөтәһендә лә берәр бала күрһәтелә минең күсермәлә. Күрәһең, әлек һаҡланған төп нөсхәләрҙә ул тулы булғандыр. Яппархажи шәжәрәне Арғаяш кешеһенә тулыһы менән бирҙеме, әллә Себер шарттарында мөмкинлек булмай ҡабалан-ҡабалан үҙ тамырын ғына яҙып бирә алдымы? Сөнки ҡыҙы Зөһрәгә ул минең күсермә кеүек килеп еткән. 1712 йылда әле беҙҙең башҡорт бик иркен йәшәгән. Ерҙәре Урал тауҙары араһынан көнсығыш далаларға, Тубылға тиклем йәйелгән. Ҡужай, атаһы Ҡунай, олатаһы Ҡушай ялан яҡта көн күргән. Уларҙың ултырағы ниндәйҙер тоҙло күл буйында була. Ҡалмаҡтар килеп сыҡҡас, улар Урал тауҙарына һыйынырға мәжбүр була. Күп, бик күп тапҡыр һуғыша улар ҡал-

маҡтар менән. Еңеү, еңелеү күсеп торған. Ҡалмаҡтарға ил, ер кәрәк булған. Улар башҡортто ҡырып бөтөрөп, ергә хужа булмаҡсы булған.

Тоҙ күленән йыраҡлашҡас, Ҡушай балалары менән Асы яланы тирәһенә килә. Сөнки бында тоҙ була. Ялан яҡтан бире күскәндә төп ултырағы хәҙерге Уй районы Саңғыл тигән ерҙә туҡтайҙар. Уландарын бире урынлаштыра. Бөгөн Бурама тауы тип аталған ер шул Ҡужай улы Бурама ултырағынан ҡалған. Бурама тауы Ҡарауыл тауы ла булып хеҙмәт иткән. Хәҙерге Силәбе өлкәһе менән Башҡортостан сигендә ҙур ялан уртаһында Кеҙә тигән тау ҡалҡып тора. Барлыҡ ер ус төбөндәгеләй күренә тирә-яҡҡа унар саҡрымға. Борон ул урман менән ҡапланған булған. Беҙҙекеләр ҡалмыҡтарҙы Кеҙәлә бик нык кеҙәләгәндәр, тип һөйләгәндәрен ишетһәм дә, кеҙә һүҙенең мәғәнәһен белмәй инем. Кеҙәләү – бик уҫал бейәнең алғы уң, йә һул аяғының сасағы аҫтынан, йәки бәкәленән бәйләп, тубығын бөкләтеп муйынына элеп ҡуйыу. Бер ергә китә алмай, тик тора, ярҙамһыҙ. Күрәһең, ҡалмаҡтарҙы кеҙәләү – уларҙы ҡоралһыҙландырыу, ҡырыу, әсир алыу, тип аңларға кәрәктер. Ҡужайҙың ҡарттаһы Ҡашайҙың шул ерҙә лә ултырағы булған. Сөнки Ҡашай шишмәһе бар, хәҙер ул Силәбе өлкәһе ерендә.

Ҡушай, Ҡужай балалары йәйләүгә Уй таш тауы менән Һарытүр, Әңкә буйына сығыр булған. Әммә тоҙһорағаң йылҡы һәр саҡ тоҙға, Асы йылғаһы яланындағы таҡырлыҡтарға ҡасып киткән. Мал артынан хужалар ҙа килергә мәжбүр булған. Бурама олатай Ҡомас тауынан Асы йылғаға ҡойған йылғасыҡта, бәләкәй генә күл яныңдағы тау башына 1785 йылдар самаһында йорт һалып, Ҡорама тигән улын ғаиләһе менән урынлаштыра. Күл буйына Айшан балалары ла йыйыла. Әммә һәр береһе аймаҡ-аймаҡ булып урынлаша. Ә күл буйындағы түбәлә, хәҙер Күпер түбә тигән ерҙә, Айшан балалары әлек тә йәшәгән.

Сит ерҙә яуҙа, йәки алыш-биреш эшендә күп йөрөгән Ҡужай һәм Бурама балаларына уҡыу-яҙыу, хисап белеү кеүек тәүге белемде киттән уҡытыусы яллап уҡытҡандар. Ҡорама ҡарттай ҙа зиһенле улы Ҡорамшаны ҡайҙалыр киттә уҡытып ҡайтарған. Рәсми рәүештә уға имамлыҡ, муллалыҡ дәрәжәһе бирелеп, был тирәлә иң абруйлы имам һаналған. Ҡорамша имам ғәҙел, ғөрөф-ғәҙәтте лә ислам тәғлимәте ҡанундарын берҙәй ялғап, тормош ҡушыуы буйынса хөкөм сығарған. Ул ваҡытта халыҡ үҙ-ара мөнәсәбәттәр һорауын шәриғәт, ғөрөф-ғәҙәт ҡануны менән хөкөм иткән.

Колониаль сәйәсәт ҡылған властарға ҡаршы көрәшкән, йә «вирнай»ҙар тарафынан шикәйәт яҙыу һөҙөмтәһендә ҡулға алынған кешеләр үҙ хөкөм менән хөкөм ителгән. Сөнки әле ул ваҡытта төрмәләр булмаған. Урыҫ хөкөмөн хөкөм итеп танымағандар. Хөкөмгә үҙ ырыу әсе ҡанундарын боҙған кешеләр генә дусар бул-

ған. Ҡолаҡты торағынан Ғәбделвәли тигән мулла етем ҡалған мәрйә ҡыҙын аҫрап үҫтерә лә, башҡорттар менән бергә казак булып йөрөгән урыҫ егетенә кейәүгә бирә. Был ҡыҙ менән башҡортса яҡшы белгән урыҫ казагы, атай-инәй тип, Ғәбделвәли мулланы абыстайы менән бик ихтирам итеп, үҙ ата-инәһендәй күреп, килеп йөрөгән. Уларҙың улдары тыуып, һәр саҡ ҡарттай-ҡартнәйҙәре менән йәшәгән. Сөнки Өстамаҡ (Троицк) тирәһендә ер алып, йорт төҙөр өсөн йәш казак ҡатынын алып киткән. Күпме үткәндер, әммә казак станицаһында йорт төҙөлөп бөтөүгә, ҡаҙаҡтар һөжүм итеп, шул һуғышта йәш казак үлеп ҡала. Етем ҡалған башҡорт мәрйәһе ата-инәһенән һорап, улын алып китә. Байтаҡ йылдар үтә. Ғәбделвәли шаҡтай ҡартая. Көндәрҙән бер көн башҡортса һөйләшкән урыҫ егете килеп инә. Таныта үҙен. Илашалар. Был аҫрау ҡыҙҙарының улы булып сыға. Бергә йәшәй башлайҙар. Шулай йәшәй-йәшәй был үҫмер бер ғәҙәт ала: төндәрен сығып китә, юҡ була, тик бер-ике көндән генә кире ҡайта. Халыҡтың мал-тыуары юғала башлай. Ике тапҡыр яртышар өйөр йылҡы юғала. Ҡарауыл ҡуйып, аңдып тоталар. Даланан килгән ҡаҙаҡтар менән осрашып, һәр саҡ ҡайҙа, кемдеке, күпме йылҡы йөрөүен һәм башҡа хәбәрҙәрҙе һөйләп торор булған был егет. Хәбәр властарға етеп, үҫмерҙе алып китәләр. Троицкиҙа уны казак суды менән хөкөм итеү ҡарала. Хөкөмдең ҡарары ике төрлө билдәләнә. Йә 200 ҡамсы биреп, аяғынан баш түбән аҫып ҡуйыу, йә башын өҙә сабыу. Быны ишеткән Ғәбделвәли мулла Ҡорамша муллаға килә.

– Әйҙә, барайыҡ, һорап алайыҡ, һин үҙең хөкөм итерһең. Бөтә мәхәлләне йыяйыҡ, – ти. Баралар, бүләктәр биреп, үҫмерҙе һорап алыуға ирешәләр. Юлда һораша-һораша шуны төшөнәләр. Атаһы үлгәс, был баланы инәһе менән бергә ҡаҙаҡтар әсир итеп алып китә. Ярайһы уҡ ҡаҙаҡ телен дә өйрәнеп алғас, был үҫмергә ҡаҙаҡ хакимы шарт ҡуя: «Әгәр ҙә мәгәр беҙгә һеҙҙең яҡтан биш йөҙ баш йылҡы ҡыуырға табышып бирмәһәң, инәйеңде үлтерәбеҙ. Бер ай ваҡыт. Бер көн һуңлаһаң, инәйең булмаҫ», – тигәндәр. Шуға ла ул һәр саҡ хәбәр биреп торған икән. Ҡайтҡас, халыҡты йыйғандар. Халыҡ араһында малдары юғалған күп кенә кеше ҡатнашҡан. Мәсьәләнең асылын һөйләп биргәндәр. Казак судының да хөкөмөн тыңлағандар.

Халыҡ бер тауыштан хөкөмсө итеп Ҡорамша имамды һайлаған. Төрлөһө төрлө ҡарар талап иткән. Ҡамсы менән һуғыуға туҡтағандар.

– Нисә ҡамсы, хәҙрәт? – тип һораған ҡазый.

– Бында ике хикмәт бар, йәмәғәт, – тигән имам. – Хаҡлыҡ та бар, ғәҙеллек тә бар. Әммә кешене ғәҙеллек өсөн язаға тарттырмайҙар. Ул инәһенең ғүмере өсөн мәжбүр ителгән, инәһен яҡла-

ған. Инәһен яҡламағандарҙы, яҡлай алмағандарҙы һуҡтырыу кәрәк. Ә хаҡлыҡ өсөн берҙе, – тип суҡ бармағын күрһәткән. – Урлашыуы хаҡ. Хаҡлыҡҡа бер яза, – тигән.

Бер һуҡҡандар. Шунан халыҡ бөтәһе лә ул үҫмерҙе ғәфү итеп, бергә донъя ҡороп киткәндәр. Бына шулай Ҡорамша мулланың хөкөмөн кешеләр үҙҙәре үк хуплаған. Бынан башҡа ла бик күп сетерекле һорауҙарҙы еңел һәм ғәҙел сискән.

* * *

Алда яҙыласаҡ ваҡиғаларҙың тарихҡа тап килеү-килмәүен төҫмөрләү өсөн, башта был хикәйәттә күренәсәк кешеләрҙең йәшәү осорон сағылдырып китәйек. Башҡорттар менән идара итеү өсөн 1795 йылда кантонлыҡ һәм хәрби хеҙмәт бурысы керетелә. Әйтергә кәрәк, был алым беҙҙең төбәк халҡы өсөн, нигеҙҙә, үҙ тарихтарында беренсе урыҫ дәүләт баҫҡысы була. Әлегә тиклем йәшәп килгән олоҫтар халыҡты буйһондороп, бөтәһен дә ҡулда тотоуҙы тәьмин итмәй. Кантон системаһы керетелеүе тураһында ҡарар иғлан ителһә лә, йөкләмәләре, бурыстары, урындағы хакимиәт баҫҡыстары шарттарға ярашлы камил булмай әле.

Ул, күрәһең, тағы ла йыл ярым, ике йылға һуҙыла. Юлдарҙың, бәйләнештең насар булыуы өҫтөнә кантон начальнигы итеп ҡуйыр кешеләрҙе лә табырға кәрәк була. Рәсәйҙең баҫҡаҡ һуғыштарында батырлыҡ күрһәткән, ағай-әнәһе «вирнай»ҙар рәтендә, йәки ғәйебен танып, властар алдында Ҡөрьән үбеп ант иткән кешеләр. Шундай талаптарға яуап биргән кеше Ҡорама Муйнаҡов була. Ҡорама Муйнаҡов беҙҙең ырыу кешеһе лә һәм беҙ йәшәгән төбәк кешеһе лә түгел, әгәр документтар буйынса уйлаһаҡ. Ҡайһы бер авторҙар Этимгән менән Итжыймаҫты бутайҙар. Ҡорама кантондың ҡыҫҡаса шәжәрәһе түбәндәгесә: Итжыймаҫ – Рәсүл тархан – Муйнаҡ Рәсүлев – Ҡорама Муйнаҡов.

Ҡорама кантон Муйнаҡовтың тыуған һәм үлгән йылдары билдәле. Ул 1760–1828 йылдарҙа йәки 68 йыл йәшәй. Муйнаҡ Рәсүлев – пугачевсы. 1773–1774 йылдарҙа уға 33–34 йәш була. Әммә восстаниенан ситләшә. Уны хәҙерге Мейәс ҡалаһы ултырған Илмәнтау итәгендә ҡамсы менән һуғып, шыртҡа килтерәләр. Восстаниела ҡатнашҡан меңәр кеше бында шыртҡа, иманға килтерелгән. Шуның өсөн уны Имантау тип тә йөрөткәндәр. Арғаяш районының ҡайһы бер оло кешеләре уны әле лә, Имантау, ти. Ҡорама кантондың атаһы Ҡара Табын олоҫо старшинаһы Муйнаҡ Рәсүлевтең властар алдында ике йөҙлөлөк күрһәтеүе тураһында түбәндәге документ раҫлай.

Высокородному и высокопревосходительному господину генерал-поручику, кавалеру и оренбургскому губернатору Ивану Андреевичу Рейнсдорпу от полковника и Верхояицкой дистанции коменданта Ступишина.

28 февраля 1774 г.

Рапорт.

«...А по отбытии ево. На другой день, прибыв к здешней крепости ведомства Исецкой правницы разных волостей башкирские старшины: Кубеляцкой – Баим тархан Кедряев, Телевской – Муса тархан Килкин, Кара-Табынской – старшинский сын Муйнак Рясулев ... чрез высланного к ним толмача спрошены были – для чего они крепости прибыли.

На что объявили, что де имеют нужду к доверенности попрежнему в подданство ея императорскому величеству из доказательством письменным... потому что мы де должны были ему, господину генерал-поручику, в наших погрешениях раскаяния принести...»

ЦГДА, ф. 1100, д. 7, лл. 147–150, № 60.

Ступишиндың яҙыуы буйынса, бынан бер нисә көн алдан ғына Үрге Яйыҡ крепосында генерал-поручик Иван Александрович Деколоног булған. Байым, Муса һәм Муйнаҡ уға килергә өлгөрмәй ҡала. Бына шул Муйнаҡтың улы була ла инде Ҡорама. Ҡораманың ҡарттаһы Рәсүл Итжыймаҫов та восстаниеға бер ваҡыт ҡушыла. Әммә ихтилалсы булып оҙаҡ ҡалмай. Күрәһең, Пугачев Белорет, Үрге Яйыҡ тирәһендә булғанда, ул да ҡушылыу сәхнәһендә уйнай. Сөнки Пугачев һәм уның көрәштәштәре яуға күтәрелмәй «вирнай»лыҡ күрһәткән старшиналарға бер генә хөкөм сығарған.

Белорет ҡалаһының ултырған урыны Байым тархан Ҡыҙраевтың ере булып, уның тирмәләре бөгөнгө көн универмаг, ресторан ултырған ерҙә. «Аҡ Иҙелдең һул ярында бейек ҡая өҫтөндә теҙелешеп торғандар», – тип һөйләр ине Мофассал бабай Байһарин. Ул сығышы менән Бәләкәй Ҡаҙаҡҡол ауылы кешеһе булып, комбриг Муса Мортазинда адъютант булып хеҙмәт итә. Комбриг ҡулға алынғас, уны ла ҡулға алалар. Егерме йыл самаһы ултырып сыға. Байым тархан үҙе хәҙерге Әбйәлил районы Байым ауылы кешеһе.

Бил арыт (Белорет) йәйләүенә барыр булһаң, төп Урал армытын билләп, аша төшөр кәрәк. Тау ул саҡта бик текә, ә юлы борма-борма булып менгән. Йөк һөйрәткән аттарҙың да, артмаҡ аҫҡан йәйәүленең дә хәлен алған тау. Билдәре арыған, бил арытҡыс булған. Ысынлап та, көнсығыштан килгәндә Ҡаҙаҡҡол яғынан да, Байым яғынан да Уралды меңһәң, Бил арыт йәйләүе ере түбәндә,

тауҙар менән уратып алынған ҡаҙан төбөндә ятҡан кеүек. Шул Байым тархан Ҡыҙраев ерендә ултыра ла инде Белорет ҡалаһы. «Ҡала исемен ниңә шулай атағандар?» – тигән һорауға, Мофассал бабай үҙенсә ҡыҫҡа ғына яуап бирер ҙә ҡуйыр ине: «Ул ҡалаға килгәндә, аттарҙың билдәре арыған».

Пугачев Троицк яғына, унан Һатҡы йүнәлешенә китеү менән, алтмышҡа етә килгән Рәсүл үҙ урынына кире ҡайта. Уның тыуған йылы 1715 йылдар тирәһе. Рәсәйҙең Пруссия менән алып барған ете йыллыҡ һуғышында ҡатнаша. Батырлыҡ күрһәтә. Ҡайтҡас, тархан исеме бирелә. Рәсүл тархандың тиҙ генә «вирнай»ҙар араһына ҡайтыуы, улы Муйнаҡ Рәсүлевте Иман тауында ҡатыраҡ язанан ҡотҡарған булһа кәрәк.

Атай ҡарап торғанда иламайҙар, тигән әйтем шул осорҙан ҡалған булһа кәрәк. Иман тауындағы шыртҡа килтереү язаһына Рәсүл тархан Итжыймаҫовты ла килтергәндәр. Шунда ул улы Муйнаҡҡа ҡысҡыра, имеш:

– Илама, атай ҡарап торғанда иламайҙар, – тип. Ҡорама кантон ана шул илай яҙған Муйнаҡтың улы була инде.

Документтарҙа бөгөнгө Учалы районындағы Барын Табын ауылдарының исемен килтергәндә, төп ауылдар итеп Ҡужай, Ҡорама, Туңғатар, Ҡарт Муйнаҡ, Малай Муйнаҡ күрһәтелә. Шуның менән бергә барындарҙың был ауылын Ҡара Табын олоҫо кешеһе Муйнаҡ Рәсүлев нигеҙләгән һәм уның исемен йөрөтә, тип яҙыла. Шунда уҡ Муйнаҡтың ете улының исеме бирелә. Әйтергә кәрәк, ул исемдәргә таянылған фамилиялар Муйнаҡта һәм шул тирәләге ауылдарҙа бихисап. Ул кешеләр барындар түгел, ҡара табындар. Ысынбарлыҡта төп Муйнаҡтың Муйнаҡ Рәсүлевкә бер ҡыҫылышы ла юҡ. Ул бөтөнләйгә икенсе шәхес. Барын ырыуы Айшан, Тайшан нәҫеле ул Муйнаҡ батыр. Ҡашҡа Тәкәнең ағай-әнеһе шул тоҡом. Ул тоҡомдар әле лә бар Ҡарт Муйнаҡта. Атап әйтһәк, Фөмәровтар, Ишниязовтар, Яуымбаевтар... Муйнаҡ батырҙың улдары Малай Муйнаҡта, янындағы Дауыт ауылында, Буранғолда... Муйнаҡ бәһлеүәндең атаһы – Буғай хаким. Бер туған ҡустылары Йомакилде, Айшан һәм Тайшан. Бына ни өсөн Ҡарт Муйнаҡты (хәҙергеһенә Муйнаҡ Рәсүлев исеме бирелгән) Ҡораманы, Туңғатар, Ҡужай кеүек ауылдарҙы бер төп итеп ҡарарға кәрәк.

Муйнаҡ баһадирҙың да ултырағы ялан яҡта була. Ирәндек тауы ла – уның төп йәйләү ере. Муйнаҡ батыр балаларының һуңғы ултырағы – Иҫке йорт. Халыҡ ул ерҙе бөгөн дә шул исем менән йөрөтә. Муйнаҡ бәһлеүәндең улы түгел Ҡорама кантон. Йәшәгән осоро ла Муйнаҡ Рәсүлев йәшәгән ваҡыттарҙан, кәм тигәндә, бер быуат ярым алда була. Уларҙың нәҫел ептәре лә башҡаса. Ҡашҡа Тәкә тигән бәһлеүән шул Муйнаҡ батырҙың туранан-тура вариҫы. Халыҡ ижадындағы Ҡашҡа Тәкә риүәйәте ҡалмаҡтар менән баш-

ҡорттарҙың тукһан йыл самаһы барған һуғыш ваҡиғаларының береһен тасуирлай. Һеҙҙең, бәлки, ололарҙан: «Эй, башҡортомдоң ҡашҡаһы», – тигән рухландырыусы ауаз ишеткәнегеҙ барҙыр.

Миңә Ҡорамшин Һарун һәм Ғаттар бабайҙарым һөйләгәне түбәндәгесә. Муйнаҡ батырҙың ҡустыһы Үтәғолдоң Ырыҫҡол тигән улы була. Уларҙың туҡал ҡара һыйыры игеҙ үгеҙ килтерә. Бығауҙарҙың береһе үҙәт кенә булғас, бәләкәй Ырыҫҡол уны күтәреп көн һайын Уй йылғаһының ҡаршы ярына утлауға сығарып, кис кире алып ҡайта. Шулай яҙҙан көҙ еткән. Һарайҙа ҡыш сыҡҡан үгеҙ, яҙ килгәс, тағы ла һыу аша үтмәй икән. Ырыҫҡол уны тағы ла яҙҙан көҙгә тиклем һыу аша күтәреп сығарып йөрөгән. Өс йыл үтеп, әҙәмек бығау ҙур ҡыуғыр үгеҙгә әйләнһә лә, Ырыҫҡол уны елкәһенә һалып, Уй аша арлы-бирле йөрөткән. Дүртенсе йылына Уй ҡаршыһында торған ҙур Ҡарауыл тауы башынан һаҡсылар йүгерешеп төшөп, ялан яҡтан ҙур яу килеүен хәбәр итә. Икенсе көндө ҡалмаҡтарҙан Үтәғолға вәкил килә. Ул биремтә алыу ғына түгел, башҡорттарҙың был ерҙән күсеп китеү талабын ҡуя. Үтәғол уға: «Минең бөтә Ирәндекте ябырҙай төмәндәрем тора, башығыҙ һау саҡта ҡасып ҡотолоғоҙ», – ти. Шул ваҡыт Үтәғол улы Ырыҫҡолдо, уның йәнәшендә йөрөгән бүкән кеүек төплө унлаған егеттә саҡыра. Егеттәрҙең бөтәһендә лә йыуан муйылдан эшләнгән ян бар икән. Атаһы улына, анау торған атҡа ат әле, улым, тиеүенә, Ырыҫҡол тәтеһенә уҡ һалып, йөҙ ҡуһай ерҙә бәйле торған ҡалмаҡ атына атып та ебәрә, ат йығылып та китә. Барып ҡараһалар, Ырыҫҡолдоң уғы ҡалмаҡ атын үтә сыҡҡан, имеш. Аптыраған ҡалмаҡ Ырыҫҡолдоң янын алып, керешен тартып ҡараһа ла, ая оҙонлоғо ла тарта алмай. Боронғо йола буйынса, яу алдынан ике яҡтың да батырҙарының көрәшен ҡарарға булалар.

Үтәғол, ҡалмаҡ киткәс, улын саҡырып ала ла: «Көсөңдө тағы нисек һынағаның бар?» – тип һорай. «Һыуҙа үҫкән йыуан муйылды тотҡан инем, бармаҡ араһынан һүле аҡты», – тигән. Атаһы Ырыҫҡолға иртәгә ҡалмаҡ батыры менән көрәшәсәген әйткән.

Ҡояш күтәрелгәс, ике яҡ һуғышсылары ла Оло Ҡарауыл тауы итәгенә килеп, бер-береһенә ҡаршы туҡтаған. Ырыҫҡол беләктәрен төрөп, алғы майҙанға сығып баҫҡас, дүрт ҡалмаҡ ҡыл арҡандар менән бәйле бик ҙур ҡалмаҡты көскә-көскә тотоп, алға сығарып, йыуан ҡайынға бәйләп ултыртып куйҙылар, ти. Ҡалмаҡ, ғәйрәтләнеп, түҙә алмай кәҫтәрҙе ҡулы менән ҡутарып бәреп ултыра икән. Ике яҡтан да ишара булғас, ҡалмаҡты сисеп ебәрәләр. Бына улар бер-береһенә яҡын килеп, күҙҙәре менән самалашҡас, тотоношоп китәләр. Ҡалмаҡ батыры ҡаты һарыҡ тиреһенән әтмәләштерелгән ҡаты тун кейгән, ә бөтә тәне май менән шымартылып һыланған икән.

Бер ҙә бер-береһен ала алмайҙар, ти. Яҡында ҡарап торған атаһына Ырыҫҡол: «Нишләп тораһың, килеп миңә һуғып ебәр», – тип ҡысҡыра. Үтәғол ҡарт йүгереп килеп улының арҡаһына ҡамсы менән арҡыс-торҡос бер нисә тапҡыр яныҫас, Ырыҫҡол йәнләнеп китә. Баҡһаң, ул ҡыҙыша алмай йөрөгән икән. Уның ҡалмаҡты майҡап тотоп алыуынан туны йыртылып китә. Шул ваҡытта Ырыҫҡол ҡалмаҡ бәһлеүәнен күтәреп алып, баш осонда бер нисә әйләндерә лә, ергә бәрә.

Ҡалмаҡ батырының ике ҡабырғаһы Ырыҫҡолдоң ике ҡулында тороп ҡала. Быны күргән ҡалмаҡтар аттарына менеп, кире ҡаса. Башҡорттар уларҙы йыраҡ ерҙәргә тиклем баҫтырып бара. Бик күп әсир, һарыҡ көтөүҙәре ҡала. Ирәндек тауының ҡаршыһындағы тау итәгендә майҙан була, байрам итәләр. Ул тау бөгөн дә Ҡыуандыҡ тауы. Ә ҡалмаҡтарҙың шарты үтәлмәгән тау, боронғо Оло Ҡарауыл тауы, шул осорҙан Шартым тауы тип аталып йөрөтөлә. Шул йылдар тирәһендә ҡаҙаҡтар ярҙам һорап килә. Башҡорттар уларға ярҙамға киткәс, ҡалмаҡтар аңғармаҫтан тағы килеп баҫа. Ырыҫҡол бында ҡалған була. Аҙ ғына кешеләре менән бик оҙаҡ һуғыша ул. Уны боғалаҡ ташлап тотоп, ике дөйә менән ике яҡҡа тарттырып, бәйләп алып китәләр. Яуҙан ҡайтып килгән башҡорттарға осрамаҫ өсөн, улар иң алда шималға китә. Туҡтаған ерҙә беҙҙекеләр күреп белер тип, киткән юлға ҙур таштар өйәләр. Ана шунан ҡалған да инде Ҡашҡа Тәкә ташы. Ырыҫҡолдоң башында маңлайынан елкәһенә тиклем бер һыҙат сәс үҫмәгән. Таҙ булған. Шуға ла уға Ҡашҡа Тәкә тигән ҡушамат тағылған. Ә бөтә Ҡарт Муйнаҡ ауылын ирештереп, әле лә йә Таҙ, йә Муйнаҡ тип йөрөтәләр. Йәнәһе, әт көсөгө була инде. Хәҙерге Учалы – Мейәс автомобиль юлында, Кәрим ауылын үтеп, тимер юл киҫешенә келтә боролған ерҙә, юлдың уң яғында Ҡашҡа Тәкә ташы тигән бер-береһенең өҫтөнә өйөлгән таштар ятыр ине. Хәҙерге кеше һис күтәрә алмаҫлыҡ был таш өйөмөн Ҡашҡа Тәкә күтәреп бер-береһенә өйгән, тип һөйләй торғайны Ғаттар Ҡорамшин бабай һәм башҡа ололар. Ләкин юл эшләгәндә тракторҙар емереп бөтөрҙө. Хәҙер ике-өс ташы тарҡау-тарҡау ята. Муйнаҡ Рәсүл улы Ҡашҡа Тәкә батыр һәм олатаһы Муйнаҡ бәһлеүәндән, кәм тигәндә, 150 йыл һуң йәшәгән шәхес.

Кәрим ауылына яҡын булһа ла, Ҡашҡа Тәкә ташын һәм уның тарихын Кәрим ауылының ҡарттары белмәне. Сөнки улар был ергә, Төпәй менән Ҡостанай араһына 1830 йылдарҙа ғына килеп төпләнә. «В 1828 году Департамент горных и соляных дел потребовал переселить башкирские деревни из этих мест «в отвращение связей с мастеровыми и похищения золота». Три башкирские деревни Каскипова, Токтарова и Карымова были переселены со своих родных мест на расстояние 100 верст. Две

первые деревни переселились на речку Зюм, а последняя в Барын-Табынскую волость. (Г. Ф. Гудков. Из истории Южноуральских заводов...)

Ә Барын кешеләре Төпәевтәр, Бүләковтар, Мәсәлимовтар, Низам бабай Фәбдинов, Фәлимйән Йомабаев һәм башҡалар боролмалағы Ҡашҡа Тәкә ташын белеп һөйләй ине.

* * *

Ҡорама кантон уҡый ҙа, яҙа ла белмәгән. 1798 йылдарға ғына кантон начальнигы вазифаһын алған. Ҡорама Муйнаҡов нисек итеп буп-буш ергә килеп ауыл нигеҙләгән? Ревизия яҙмалары дөрөҫ түгел. Бурама улы Ҡорама Ҡужаев күптәнән инде хәҙерге Мулла тауы башына ҡарағас йорт һалған була. Уның кешеләре һәм ярҙамсылары күл буйында йә кәҫ өйҙәрҙә, йә ер өйҙәрҙә көн күргән. Көслө шишмә тирәһендә Айшан балалары ла көн күргән. 1793 йыл башланған һәм артабан да үткәрелгән ревизиялар һәр ауылға исем биреүҙе талап иткән. Ҡорама ауылы ҡайһы Ҡорамаҡының исемен йөрөтә? Ҡорама Ҡужаевтыҡынмы, әллә Ҡорама Муйнаҡовтыҡынмы? Беҙгә фаразларға ҡала. Ҡорама кантондың йорто шунда булған, нигеҙе шул, тип ауылдың бер оло кешеһе лә бер ваҡытта ла әйтә лә, күрһәтә лә алманы.

Күрәһең, ул бында бөтөнләйгә йәшәмәгән. Ә Ҡорама, улдары Ҡорамша, Ҡужаевтың ейәне Сәхәүетдин Ҡорамшиндың йорт урыны нигеҙе бөгөн дә билгеле. Уның нисек итеп мәсеткә килгәне иҫтәлеге лә ҡалған. Мәсете йортонан йөҙ-йөҙ илле ҡуһай самаһы. Ҡар яуһа, юлын көрәп, тап-таҡыр итеп юл эшләгәндәр. Ҙур байрамдарҙа йортонан мәсеткә тиклем кейеҙ, балаҫ түшәгәндәр. Елән кейеп, ситек менән барған, имеш, мәсеткә. Был йола Ҡорама улы Ҡорамша, уның улы Сәхәүетдин мулла ваҡытында ла дауам иткән. Ололар ул турала һәр саҡ хәтерләп һөйләнеләр. Ләкин беҙ Ҡорама Муйнаҡовтың, ауыл ҙурайғас, бында килеп йәшәгәндер, тигән фекерҙе ташламайыҡ. Сәбәбе бар.

Ҡорама Муйнаҡов Ҡарабаш торағынан Ҡауылды тауы итәгенә килгән Кәрим ауылының кешеһе Төхмәт Үтәевте писарь итеп ала. Властарға ла бик уңайлы. Беренсенән, бик «вирнай», урыҫса белә. Арифметикаһы, хисабы бар. 1812 йылғы һуғышта 18-се полкта һуғышҡан. Һуғышҡа киткәндә 23 йәштә инем, тип хәтерләгән. Уны Ҡорама Муйнаҡовҡа властар тәҡдим иткән. Ни тиһәң дә, муйнаҡтар аҙмы-күпме ихтилалда буталған кешеләр. Төхмәткә Ҡорама өҫтөнән күҙ-ҡолаҡ булыу вазифаһы ла йөкмәтелә. Төхмәт Үтәев кантон писары ла, бер үк ваҡытта үҙ олоҫонда Туҡтар, Кәрим, Ҡасҡын, Үмәр ауылдарының старшинаһы ла була. Буйға һомғол, йәш, бик таҙа Ҡорамша мулла Төпәй ауылынан кәләш

алған була. Абыстайы төçкә бик тә һылыу икән. Уға һоҡланмаған кеше булмаған.

Байҙар, кантон үҙе һәм уның тирәһендәгеләр Ҡорамша имам менән йөрөшкән, ҡунаҡ булышҡан. Кантонға дәүләт тарафынан бирелгән хоҡуҡтар булһа ла, уҡый-яҙа белмәгәс, хакимлыҡ ҡылыу ауырға төшкән. Өçтәүенә, аçтыртын, ялағай, ҡара күңелле писарь Төхмәт, губернаға ҡағыҙҙарҙы үҙе ни теләй, шулай яҙып ебәрер булған. Кантонды бер нисә тапҡыр губернаға саҡырып, ҙур ризаһыҙлыҡ белдереп ҡайтарғандар. Төхмәттең был ҡылығын һиҙенгән кантон киләсәктә һәр ҡағыҙҙы Ҡорамша мулланан уҡытып ебәрә башлаған. Һөҙөмтәлә, рухи хаким булған Ҡорамша, кантон башы Ҡорама Муйнаҡов һәм писары Төхмәт, уның кешеләре араһында дошманлыҡ тыуа. Шулай ҙа Ҡорамша менән Төхмәт асыҡтан-асыҡ дошманлашмаған. Имамға кемгәлер дошман булырға ярамаған, үҙе лә хуш күңелле генә кеше булған. Ә Төхмәт тештәрен ҡыçып түҙгән, уның абруйы ла, дәрәжәһе лә түбән. Шуға ла ваҡытын көткән ул. Өçтәүенә, Төхмәт Ҡорамша мулланың һылыу ҡатыны Төпәйевтар ҡыҙы Ғәйшәгә ғашиҡ булып йөрөгән. Ул осорҙа Златоуст, Мейәс заводтары, рудниктары Мосолов, Лугнин, Кнауф осорҙарын үткәреп, дәүләттең ассигнация банкыһына буйһонған, ҡаҙнаныҡы булып иçәпләнгән. Туҡтар, Үмәр, Кәрим, Ҡасҡын ауылдары янында бай алтын ерҙәре барлығы беленгәс, ул ерҙәрҙе арендалыҡтан бөтөнләйгә дәүләт ҡаҙнаһына алыу бурысы ҡуйыла. Ул ерҙәр башҡорттарҙың аçаба ере булғанлыҡтан, Ҡорама кантон һәм Ҡорамша мулла менән ҡаҙна араһында тартҡылаш көсәйгәндән-көсәйә. Был ваҡиғаларҙың уртаһында Төхмәт тә ҡайнай. Ҡаҙна вәкилдәре Төхмәткә йәшерен рәүештә ҙур ғына ришәүәт биреп, ерҙе Төхмәт Үтәев аша үҙҙәренә яҙҙырыуға өлгәшә.

Төхмәттең үҙ халҡы ерҙәрен йәшерен рәүештә һатып ебәреүе һөҙөмтәһендә, 1828 йылда Тау һәм Тоҙ департаменты шул тирәләге әреле-ваҡлы ауылдарҙы ҡаҙна еренән йөҙ саҡрым ергә күсереп ултыртыуҙы талап итә. Быға указ сыға. Туҡтар һәм Ҡасҡын халҡы хәҙерге Ҡыйғы районы яғына күсенеп китергә мәжбүр була. Кәрим ауылын барындар Төпәй һәм Ҡостанай урталарына ала, ә Үмәр боронғо Саңғыл (Сәңгел), Сыуалты тауы буйына күсә. Ул ерҙәр казачествоға баçып алына башлағас, Үмәр халҡы хәҙерге Үмәр тауы яғаһына килеп урынлаша. Әммә Ҡараһаҡал ихтилалы осоронда көл-күмер булғансы яндырыла. Төхмәт Үтәев Ҡауылды буйындағы ерҙәрҙе ҡаҙнаға һатҡас, үҙенә барын табындарҙың Сәңгел буйҙарын ҡағыҙҙа яҙҙырып, губерна чиновниктары тарафынан раçлатып ҡуя. Саңғылмы йәки Сәңгелме тигән ер хәҙерге Силәбе өлкәһе Уй районы Төхмәт-Никольское ауылдарынан көнсығышта Троицк йүнәлешендә Өйәл һыуына яҡын йәйрәп ята. Башҡорттарҙың үҙ ҡанундары буйынса, бер ырыу ере икенсе

ырыуға күсерелеүе бер ниндәй ҙә ҡарарға һыймаған. Ундай ер биреү, ер бүлеү мәсьәләһе ике йәки өс ырыу халҡының дөйөм йыйынында хәл ителгән. Быға, әлбиттә, Ҡорама Муйнаҡовтың белемһеҙ булыуы һәм даими рәүештә кантон үҙәгендә йәшәмәүе лә ҙур роль уйнағандыр. Төхмәтте халыҡ яратмай, хатта күрә алмай. Уны эштән бушатып ебәрергә кантондың да мөмкинлеге булмайҙыр, сөнки Төхмәтте губерна һәм ҡаҙна кешеләре яҡлауға ала. Ҡорама кантон һәм Ҡорамша мулла Ҡужаев өҫтөнән ялыу өҫтөнән ялыу яҙҙырта.

1816 йылда башҡорт еренә нәүбәттәге ревизия үтә. Ерҙәр тағы ла үлсәнә, хәритәгә төшөрөлә. Беҙҙең төбәктәге ер ревизияларының төп маҡсаты урыҫ слободаларына, казактарға, ҡаҙнаға ер алыу, ер бүлеү була. Шул ниәт менән землемер килә. Губерна тарафынан урындағы кантондарға, хеҙмәткәрҙәренә, ер үлсәүселәргә һәр төрлө ярҙам күрһәтеү ҡушыла. Ер үлсәү төркөмө вәкиле Ҡорама кантонға ҡағыҙ тотторғас, ул уны Төхмәткә бирә. Вәкилдәр сыҡҡас, Төхмәт Ҡорамаға былай ти:

– Был буш ҡағыҙ. Былар губерна тарафынан ебәрелмәгән. Былар беҙҙең ерҙә алтын эҙләргә рөхсәт һорай, – ти.

Ер үлсәүселәр йөрөргә ат, йәшәр өсөн йорт, аҙыҡ-түлек һорайҙалар ҙа, Ҡорама кантон ҡырт киҫә. Ат та, аҙыҡ-түлек тә бирмәҫкә. Кантондың идаралығы, йорто хәҙерге Күпер түбә итәгендә юл буйында ултырған. Землемерҙар, асыуҙары килеп, кантон ере сиген Ҡолаҡты, хәҙерге Ларино ауылы аръяғынан Ҡорама кантондың идаралығы һәм өйө уртаһы менән Мейәс заводы ерҙәренә төньяҡҡа үткәрә. Шау-шыу ҡуба. Халыҡ, линейный хеҙмәттә йөрөгән казак башҡорттар араһында ризаһыҙлыҡ көсәйә. Эш һуғышҡа тиклем етә. Әммә төп ғәйепте Ҡорама Муйнаҡовҡа яғалар. Бик ҙур ер юғалтылғас, Ырымбур губернаһына вәкилдәр ебәрәләр. Барындарҙан Ырымбур губернаторына вәкил булып Ильястың, Ишнияздың, Таһирҙың, Сәлихтең ҡарттаһы сотник Бәшәретдин һәм Туңғатар Ҡурҡасыҡов нәҫеле Ҡаһым улы, йөҙ башы Йәҙегәр бара. Землемерҙар тағы ла килә. Хәҙер инде уларҙы Бәшәретдин менән Йәҙегәр алып йөрөй. Һарыҡ һуялар, ҡымыҙ эсерәләр. Шунан һуң землемерҙар Абдулла Даушевҡа бирелгән Ахун еренән, Фомино осонан тура Ҡолаҡты, Ларионаның бер саҡрым көнбайышынан, үҙәктәге ҙур, оҙон Ҡара шарҙы эскә ҡалдырып, Тәңребирҙе-Шәүкәнде тауына, артабан Мейәс заводы еренә сик ҡуя.

– Бәшәретдину, Йәҙегәру, землемер, много землю дай, – тигән һүҙҙәрен иҫенә төшөрөп, Туңғатар ауылы кешеһе Бөйөк Ватан һуғышы яугиры, ордендар кавалеры Аҡҡужин Жәүәт ағай һөйләп ултырҙы. Ул бөгөн дә иҫән-һау. Алда ла Тәңре уға һаулыҡ бирһен!

Төхмәт Үтәев сығарған шул ғауғаларҙан һуң Ҡорама Муйнаҡовты кантонлыҡтан бушаталар. Уның урынынаТөхмәт Үтәевте кантон начальнигы итеп тәғәйенләйҙәр. Халыҡтың асыуынан ҡурҡып, ул кантон үҙәген Сыуалты буйына, барындарҙан алған ергә, Үтәй ҡарттаһы утырағына күсерә. Ул ерҙәр казактарға тартып алынған була. Төхмәттең һорауы буйынса, кантонлыҡҡа бер нисә казак слободаһын да күсерәләр. Сөнки казак хеҙмәте дөйөм була, әммә көтөүлек, иген сәсеү урындары айырым бүленгән була. Кантон үҙәге булып киткән тораҡҡа ул үҙ исемен яҙҙыра. Шулай итеп Сәңгел, Сыуалты ултыраҡтарында Төхмәт ауылы барлыҡҡа килә. Бөгөн ул Силәбе өлкәһе Уй районы Никольское ауылы. Төхмәттең үҙ кантонлығына бер нисә казак станицаһын алыуы казактар араһында ризаһыҙлыҡ тыуҙыра. Сөнки улар Карагайский Уҡлы Ҡарағай атаманына буйһондоролған була. Башҡорттар линия хеҙмәтенә ҡыш көнө йөрөмәгән. Төхмәт кантон командаһындағы казактар ҙа башҡорттар кеүек яҙҙан көҙгә тиклем хеҙмәттә булған. Атаман ҡарамағындағылар ҡыш линия хеҙмәтенә барып ята ла яҙ ҡайта. Иген сәсәләр, бесән әшләйҙәр, донъя ҡалынайталар. Башҡорттар бынан мәхрүм була. Шуның өсөн дә Төхмәт командаһындағы казактар йә ҡыш хеҙмәтенә күсереүҙе, йә атаман ҡарамағына кире күсеүҙе талап итә. Төхмәт кантон осоронда халыҡҡа һалым һалыу ҙа һәм уны йыйып алыу ҙа бер ҙур ваҡиғаға әйләнә. Һалым йыйырға ул үҙ кешеләрен генә билдәләгән. Етемдәрҙе, ҡарттарҙы, ғәриптәрҙе, яңғыҙаҡтарҙы, хеҙмәттәгеләрҙең исемшәрифен уҡып, һәр йыл ауылдарҙа йыйындар үткәрелеп, Ҡорамша мулла ҡысҡырып уҡып барған, ә халыҡ йә тәстиҡ итергә, йә һалымда ҡалдырыуҙы хәл иткән. Һалымдың дәүмәле кеше һанына түгел, ә һалым түләй ала торғандар һанына ҡарап билдәләнгән. Төхмәт кантон булып ултырғас, һалым дәүмәле кеше һанына ҡарап үҙгәртелгән. Ул берәүҙе лә һалымдан ҡотҡармаған. Түләй алмағандар яҙҙан көҙгә тиклем Төхмәт кантонда ер һөргән, иген сәскән, мал көткән. Кешеләрҙе ул Златоуст каторжандары кеүек таяҡ һәм сыбыҡ менән һуҡтырған. Көҙ еткәс, дәүләткә тигән булып, халыҡтан бик күп ашлыҡ, мал-тыуар талап алған.

Йылдар һәм ваҡиғаларҙы самалар өсөн әле һөйләгән өс кешенең йәшәү ваҡыттарын яҙып үтеү файҙалы булыр.

1. Муйнаҡ улы Ҡорама Муйнаҡов 1760 йылда тыуа, үлеме – 1828 йыл. 68 йәштә донъя ҡуя. Ҡайҙа донъя ҡуйыуы һәм ҡәбере лә билдәһеҙ. Кантонлыҡ осоро 1796–1819 йылдар йәки 23 йыл.

2. Ҡужаев Ҡорамша Ҡорама улы. Мулла. Имамлыҡ дәрәжәһе ала. Тыуған йылы – 1794, үлеме – 1835. 38 йәштә үлтерелә.

3. Төхмәт Үтәев. 1791 йылда тыуа. Кантонлыҡ осоро – 1819–1832 йылдар. Нисәнсе йыл, ҡайҙа үлгәне билдәһеҙ. 1832 йылда Себергә ғүмерлек каторгаға ебәрелә. Хәрби һәм дворянлыҡ дәрәжәһенән мәхрүм ителә.

Ырымбур губернаторына һәм батша Николай I төпәйҙәрҙең береһе ҙур шикәйәт яҙа. Ям юлы комиссары Мәндей Төпәев булырға тейеш. Тикшереүҙәр үтә. Көндәрҙән бер көн Төхмәт кантон ғашиҡ булып йөрөгән Ғәйшә абыстайы менән Ҡорамша мулланы ҙур дини байрамға Төхмәт ауылына саҡыра. Аш ашалып, ғибәҙәт үткәс, Ҡорамша имам күсәре һәм абыстайы менән ҡайтырға йыйынһа ла, Төхмәт, ай-вайҙарына ҡарамай, йоҡлап ҡалырға саҡыра. Төхмәт менән Ҡорама ауылы араһы 40 саҡрым самаһы. Көн кискә ауыша. Ҡорамша мулла мәсеттә икенде намаҙын үткәргәс, юлға сығырға ниәтләп, аттарын ектерә.

Икенде намаҙын уҡып, сәждәгә китеп алға эйелгән саҡта, Төхмәттең яллаған кешеһе арттан Ҡорамша мулланы һуя. Ул шунда йән бирә. Был хәл 1832 йылдың яҙ йәки йәй ваҡыты була. Төхмәттең ниәте Ҡорамша мулланы юҡ итеү, абыстайын үҙенә алыу була. Иренең үлтерелеүен һиҙгән абыстай күсеренә ҡоралын алып, тиҙ генә аттарын бороп, ҡасырға ҡуша. Ҡушлап егелгән ҡара туры аттар йорт йәнәшендәге мал кәртәһендә торған була. Күсер менән Ғәйшә йүгереп килеп арбаға ултырыуға, кәртә ҡапҡаһы ябыла. Ләкин ярһыу аттар уны гөрә һуғып, емереп сығып, ҡайтыу яҡҡа саба. Ауыл янында шишмә башынан бер бәләкәй генә йылға ағып сығып, юл үткән ерендә бейек кенә яры бар икән. Шул ярҙа Төхмәттең һыбайлылары килеп етешә. Юл тар булғанлыҡтан, алға сыға алмайҙар. Ғәйшә күсерҙең һөңгөһөн һурып алып, арбаға баҫа ла, килеп еткән береһен һөңгө менән яралай. Яралы аты менән һыуға ҡолап төшә, имеш.

– Тығын шунда, – тип ҡысҡыра Ғәйшә. Шунан бирле йылғаның исеме Тығын булып ҡалған. Олораҡ урыҫтар ул йылғаны хәҙер Таганка, тип йөрөтһәләр, йәштәре бөтөнләйгә исемен белмәй.

Төхмәтте Ҡорамша имамды үлтереүҙе ойоштороуҙа һәм башҡа яуызлыҡтары өсөн ялсыһы менән бергә мәңгелеккә һөргөнгә ебәрәләр. Әлек үткән шау-шыуҙар барышында Төхмәт: «Сыуалты ҡуҙғалмаһа, мин ҡуҙғалмам», – тигән. Сыуалты – Төхмәт ауылы янындағы тау исеме. Шуғалыр ҙа халыҡ араһында әлегә тиклем: «Сыуалты һаман ултыра, ә Төхмәт юҡ... Сыуалты менән яғалашмағыҙ», – тигән әйтем тороп ҡалған. Тауҙай көс менән көрәшмә, еңелерһең, тигәнде аңлаталыр.

Ҡушай, Ҡунай, Ҡужай, Бурама, Ҡорама балалары араһында йырсылар күп була. Шуларҙың береһе Ибенейхажи йырлағанда башында түбәтәйе лә зымбырлап бейеп торған, тигән хәбәрҙе минең дә ишеткәнем булды. Төхмәттең яуызлығын һүрәтләүсе Төхмәт кантон тигән йыр беҙҙең төбәктә сыҡҡан:

Бәләкәй генә күлдең, ай, эсенән
Күгәл генә өйрәк атырмын.
Дәгүәләшмә, егет, минең менән,
Бала-сағаң менән һатырмын.

Урап-урап ҡына ат сабырға
Сәңгел генә тигән ер ҡайҙа?
Ҡылыс менән сыбыҡ ҡулдарында,
Төхмәт кеүек яуыз ир ҡайҙа?

Киҫеп кенә алып ит ырғыттым
Тағараҡҡа ҡунған бөркөткә.
Төхмәт кантон эше Палатала,
Башы китһә икән Иркутка.

Был йырҙың тарихи ваҡиғаларҙы тасуирлаған һүҙҙәре күп ине, әммә инәйем мәрхүмдең яҙыуҙары менән юғалып бөткән.

* * *

Тайшан балаларының тарихы бик ҡатмарлы ла, фажиғәле лә. Байлыҡ-муллыҡ күргәндәре лә, Себергә һөрөлгәндәре лә, офицерҙар ҙа бар. Ҡорамшин Әбдрәшит Сәхәүетдин улы иһә Рәсәйҙең Дәүләт Думаһында депутат була.

Улар яҙмышы үҙе бер оло тарих, ҙур роман өсөн булмыш һәм мәғлүмәт. Тайшан балаларынан Ҡорамшин Сәхәүетдин Ҡорамша улына ҡағылышлы түбәндәге мәғлүмәттәр бар. Аҫаба башҡорт булараҡ, борондан атанан улға күсә килгән йола буйынса, йәйләү ерҙәренең бер осо хәҙерге Транссебер тимер юлы буйындағы Һыраҫтанда (Сыростан) була. Шул ерҙә уның тирмәләре лә ултыра. Нисек итеп Сәхәүетдин һәм уның ата-олаталары Мосоловтарға, Лугнин, Кнауфтарға ерҙәрен бирмәй һаҡлап ҡала алды икән? Үҙе бер мөғжизә! Златоуст – Мейәс – Силәбе – Ҡурған тимер юлын эшләр булғас, Сәхәүетдингә землемерҙар килә. Ер һорайҙар. Сәхәүетдин риза булмай. Икенсе килгәндәрендә ғәрәп хәрефтәре менән яҙылған ҡағыҙ күрһәтәләр. Унда ҡуртымға тип, бер йылға йәйләүенән бер саҡрым өҫтә ер һыҙмаһын һорайҙар. Хаҡын килешәләр. 12 бейә, 3 бот шәкәр, 5 ҡаҙаҡ сәй. Икенсе көндө урыҫ телендә яҙылған ҡағыҙҙы килтереп, ҡул һалдырып алалар. Сәхәүетдин, күрәһең, урыҫ хәрефен танымаған, уҡымаған. Урыҫтар менән килгән бер татар уны кисәге ҡағыҙ урыҫса яҙылған, тип ышандырған. Урыҫ ҡағыҙындағы яҙыуҙы тәржемәләп һөйләп тә, уҡып та биргән. Көҙ алдынан ҡораллы кешеләр килеп, Сәхәүетдин Ҡорамшинды мәңгегә алынған ер килешеүе нигеҙендә Һыраҫтан йәйләүенән ҡыуа. Шулай итеп, Бәләкәй Урал һыртында ятҡан ерҙәр тулыһынса урыҫ ерҙәре булып китә.

Бәләкәй Уралдағы ерен алдыҡ юл менән алдылар, тип йөрөп, яҙып ҡараһа ла, эш сығара алмай Сәхәүетдин. Ул ерҙәр Златоуст заводы ерҙәре булыуы тураһында яуап ҡағыҙы ала. Күрәһең, ул

ерҙәр Тайшан ваҡытынан уҡ нәҫелдән нәҫелгә күсеп килгәндер. Сөнки Тайшанға етенсе быуын булған Ҡораманың, үлтерелгән Ҡорамша менән бер туған Ҡуштыуған тураһында Мейәс тарихсыһы Владимир Григорьевич Федорищев үҙенең «Язык земли Миасской» тигән китабында топонимика буйынса тикшеренә лә, бер тау исеменә ҡағылышлы аңлатма бирә: «Кормина, сопка находится на левом берегу речки Куштумги в Малом Уральском хребте. Названа по фамилии жителя бывшей деревни Куштумги Кормина» (28-се бит).

Элегерәк Поляковка йәки Вознесенка ауылына барһаң, һорайҙар ине: «Ты из Корминой что ли?», йәки «Куда ездил? В Кормино?» – тип һорайҙар ине. Поляковка һәм Вознесенка Златоуст заводына беркетелгән крепостнойҙар ауылы. Күрәһең, ата-бабаларынан уларға Бәләкәй Уралдағы Кормино ерҙәре таныш булған. Ә Ҡуштыуған Ҡорама улы шәжәрәлә бар. Тик ул китапта яҙылғанса, Ҡуштумги түгел, Ҡуштыуған.

Тағы ла бер сифатын билдәләп китер кәрәк ҡарттайҙарҙың. Ул – рухлыҡ. Ҡулға алынып, барлыҡ донъя мөлкәтенән ҡолаҡ ҡағып, ҡыуылып киткәндә лә шул яҙыуҙарҙы һәм иҫке китаптарҙы үҙе менән Себергә һөргөнгә алып китеү, унда һаҡлау һәм ҡайтыу мөмкинлеге булмаҫын белгәс, юлын табып, аманат итеп илгә ҡайтарыу – үҙе бик ҙур батырлыҡ. Хәҙер үҙегеҙҙе Яппархажи урынына ҡуйып ҡарағыҙ. Ғаилә туҙҙырылған, мал-мөлкәт тартып алынған. Үҙе ҡулға алынған, һөргөнгә оҙатылған. Шул ваҡытта ла ул тарихынан ваз кисмәгән, ата-олаталарының аманатына тоғро ҡалып, шәжәрәһен һаҡлай алған. Ниндәй ҙур рухлыҡ аңлай белгән кешегә.

Буғай хакимдың вариҫы Тайшандың нәҫел ебен ҡыҫҡа ғына яҙып тамамлап, шуны билдәләргә кәрәк. Беҙгә еткән күсермә бик ярлы. Уның икенсе улы Сапҡындың, өсөнсө улы Ҡужайҙың, Ҡолаҡсындың һәм башҡа ейәндәренең балалары күрһәтелмәгән. Ә ул булған. Һис шикһеҙ, тулы, ҙур шәжәрә булған.

Ҡушаға, Ҡашаға, Ҡашай балалары юҡ. Башҡаларының берәр генә балаһы күрһәтелә. Ҡайҙа ул ейәндәренең ейәндәре? Беләм, улар минең менән йәнәш йөрөй. Тик оло ҡарттайҙарының кем булыуын үҙҙәре лә, мин дә белмәйем. Бәй өҙөлһә, ялғап булмай, тик төйөн генә барлыҡҡа килә. Шулай ҙа ҡолаҡ төбөндә ҡалған бер сыңлауҙы әйтмәй булмай. Тайшан ейәне Ҡашайҙың ере хәҙерге Силәбе өлкәһе Уйҫк, Фомино тирәһендә булһа кәрәк. Сөнки шул тирәлә Кашай, Кашайка тигән ер һәм тау бар. Ҡашайҙың балалары Һәйтәктә, Илселә, Учалы ауылында булырға тейеш. Хәҙерге Сәфәр ауылының Ҡуяндар аймағы тирәһендә лә шул тамыр, шул һыу аға, буғай. Ә Ҡашайҙың ағаһы Ҡашағаның йыуан ботаҡтарының нәҫел-нәсәбе Түләктә булыуы мәғлүм. Был мәғлүмәттәрҙе ғүмерен мөғәллимлеккә бағышлаған Рәсәй Федерацияһы-

ның атҡаҙанған уҡытыусыһы Ҡужай ауылы кешеһе Ҡорамшин Шәрифулла Сафиулла ағай еткерҙе. Ул 1914 йылғы ине. Үҙебеҙ тураһында үҙебеҙ яҙырға булғас, Буғай хакимдың тағы ла бер улы Айшан һәм уның балалары тураһында яҙыу кәрәктер. Сөнки еп өҙөлдө тигәндә, беҙ һөйләп, яҙып ҡалдырмаһаҡ, киләсәк быуын өсөн бер кем тарафынан да, бер ҡасан да билдәле булмаясаҡ.

Сәхәүетдин мулла Айшан менән Алҡалынан тыуған алты улды күрһәтә. Әммә алтынсы ул Аралды ситкәрәк яҙа, ә биш ул бергә яҙыла. 1. Көйөк. 2. Ҡайыҡ. 3. Ҡәйеп. 4. Өмөкәй. 5. Саңҡы. Күрәһең, Арал икенсе ҡатындан тыуғандыр, әммә уның өс быуын балалары күрһәтелә: Тәнәй – Тәпәй – Аҡынсыҡ.

Айшан нәҫелдәре башҡаса яҙылмаған. Дөрөҫөрәге, яҙылып та күсереп алынмаған. Ләкин икенсе яҙыуҙа уның дауамы булып сыҡты. Шәжәрәнең эстәлеген тикшереүгә тиклем үҙемдең бер нисә фаразды яҙып үтәйем.

Бында Айшандың ике генә улы күрһәтелә. Әммә икеһенең дә нәҫел-нәсәбе бөгөнгө көн Ҡорама ауылында йәшәгән халыҡтарға барып ялғана. Шәжәрә ярайһы уҡ ҙур ғына, әммә беҙ уның тарихи ваҡиғаларға бәйле урынын ғына күрһәтеп үтәйек.

Был шәжәрә һәм уның дауамы Ҡорама ауылынан Йомабай Мостафин тигән олатайҙан ҡалған. Шәжәрә буйынса Муйнаҡ Рәсүл улы түгел, ә Ҡәйеп улы. Ә. Әсфәндиәров китабында Муйнаҡтың атаһы Рәсүл, ә Ҡорама китаптағыса Муйнаҡ улы итеп күрһәтелә. Икеһе лә Барын-Табын улдары. Ә китап, тимәк, архив материалдары, Муйнаҡты һәм атаһы Рәсүлде Ҡара Табын волосы старшинаһы итеп яҙа. Архивтағы документтар ревизия һөҙөмтәләре буйынса яҙылған.


Ә Сәхәүетдин, Яппархажи шәжәрәһе буйынса, Айшан улы Ҡәйептең бөтөнләйгә Муйнаҡ тигән улы юҡ. Тимәк, Ҡорама ла юҡ. Әнүәр Әсфәндиәров китабында Муйнаҡ улы Ҡураманың балалары: Ишнияз, Уразай һәм Сәхәүетдин. Йомабай Мостафин шәжәрәһендә Муйнаҡ улы Ҡураманың балалары: Шаһинияз һәм Шаһигәрәй. Сәхәүетдин Ҡорамшин буйынса Бурама улдары Ҡураманың улы Ҡорамша һәм Ҡуштыуған.


Алдағы ике яҙма ревизияла дөрөҫ яҙҙырмау йәки аҙаҡтан ер мәсьәләләре буйынса еңеллек эҙләп, Ҡара Табын волосы старшинаһына зат булырға тырышып ятҡан ғына яҙмалар. Ни тиһәң дә, һәр бер ихтилалдың уртаһында йөрөгән барын табындар административ бүленеш исемен дә юғалтып, Ҡара Табын волосына индерелеп яҙыла. Барын табындарҙың ерҙәрен алырға указ сыҡҡас, Ҡара Табын Муйнағына һыйыныу ғына булғанға оҡшай.

Тимәк, Ҡорама ауылын кантон башы Рәсүлев Ҡорама Муйнаҡ улы нигеҙләмәгән. Ауылды нигеҙләгән кешеләр икеһе лә бербереһенә ағай-эне, икеһе лә ерле һәм Барын ырыуынан.

Әнүәр Әсфәндиәров «История сел и деревень» китабында «В 6 верстах от д. Тунгатарово возникла новая деревня Курамино», – тип яҙа. Тимәк, ауылдың иҫкәһе лә булған. Ғөмүмән, бөгөн беҙ күҙ алдына килтергән ауылдар 1843 йылдан һуң барлыҡҡа килә. Уға тиклем, өйҙәр бер-береһенә ҡаршы ултырып, урам яһау булмай. Был тарихи ысынбарлыҡ. Түбә-түбә булып ойошҡан аймаҡтарҙы бергә йыйып ултыртыу нәҡ 1843 йылда сыҡҡан указдан һуң ғына башлана. Мәҫәлән, Ҡораманың бер аймағы Ҡаратал әсендәге шишмәлек һәм түбәлек өҫтөндә була. Был бәхәсһеҙ. Ул шарлыҡ сиҙәм ерҙәрҙе күтәреү осоронда бөтөрөлдө. Шишмәһе ҡороно, икенсе юл алды.


Ҡорама кантондың Ә. Әсфәндиәров китабындағы шәжәрәһе түбәндәгесә:





Был шәжәрә һуңғы 10-сы ревизиянан һуң яҙылған. Сөнки яҙмала Мәккәгә барып хаж ҡылып, хажи исеме алып, Яппархажи булып киткән кеше бар. Яҙмала Абдуляппар тип яҙылған. Тимәк, ул хажға барғанға тиклем булған. Яппархажи-Абдуляппар Ҡорамшин хажға беренсе тапҡыр 1900–1901 йылдарҙа бара һәм үҙе менән Мулдаҡай ауылынан Исхаҡов Әлтәф байҙың улдары 36 йәшлек Шакирҙы һәм 33 йәшлек Закирҙы ала. Абдуляппар хажға 1920 йылда тағы ла барған. Ҡорама Муйнаҡовтың Сәхәүетдин тигән улы булмай. Сәхәүетдин – Ҡорамша улы. Ә Сәхәүетдин улы Яппархажиҙан 8 бала булып, өсөнсө балаһы Сәлимгәрәйҙең кесе ҡыҙының улы, шул юлдар авторы булыр.


Һәр нәмәнең алдын да, артын да әйләндереп ҡарайҙар, әгәр ҙә ул таныш әйбер булмаһа. Ҡорама кантондың Ҡара Табын ырыуы кешеһе түгеллегенә сәбәп бар. Беҙ Итжыймаҫтың һәм уның улы старшина Рәсүлдең ысынбарлыҡта ҡайһы ырыу кешеһе икәнен белмәйбеҙ. Тик Ҡара Табын олоҫо старшинаһы булыуын беләбеҙ. Ҡара Табын олоҫона Ҡыуаҡан, Ҡатай, Әйле һәм башҡа ырыу кешеһен дә (әгәр ул «вирнай» икән) ҡуйыуҙары бик мөмкин. Һәм ул



шулай әшләнгән дә. Рәсми вазифаһына ҡарап, ул кеше үҙ тамырын, үҙ ҡаны юлын юғалтмай бит. Ҡара Табын олоҫо старшинаһы булһа ла, ул, мәҫәлән, Ҡатай, Әй, йә башҡа ырыу вәкиле булып ҡала. Шуның кеүек, Рәсүл Муйнаҡов та Ҡара Табын ырыуы кешеһе түгел, тик Ҡара Табын олоҫонда старшина булып хеҙмәт иткән кешегә оҡшай. Быға дәлилдәр бар. Беренсенән, оло ҡартталары Муйнаҡ батыр исеме ҡушылған Муйнаҡ, үҙ ырыуҙаштары араһына ҡайтып, яңы ауыл нигеҙләгән. Аҙ ғына ситтә, көнсығышта Уй һыуы аръяғында, түбә-түбә булып ултырған Муйнаҡ батыр затзәүерҙәре. Муйнаҡ Рәсүл улы нигеҙләгән ултыраҡҡа 1843 йылда Ырымбур губернаторы йорттарҙы урам итеп, бер-береһенә ҡаршы һалырға тигән указынан һуң, күсеп ултырып, хәҙерге ауыл хасил булған. Күсеп ултырған ерҙе ауыл халҡы әле лә, Иҫке йорт, ти. Муйнаҡ ауылы халҡы үҙҙәре лә һәм ғалимдар ҙа уларҙы, Барын-Табын ырыуы халҡы, тип таный. Рәсүл сама менән 1700–1701 йылдарҙа тыуған булырға тейеш. Улы Муйнаҡ 1730 йылғы самаһы. Сөнки ул Пугачев яуына ҡушылып китә. Йәш старшина Муйнаҡ Пугачевтың Троицк, Ҡуңгерәү янында булған һуғыштарында ҡатнашып, Пугачев Златоуст, Һатҡы заводтары яғына Салауат Юлаев менән осрашыр өсөн йүнәлгәс, күрәһең, байтаҡ кешеләр үҙ ауылдарына таралышҡан булһа кәрәк. Старшина Муйнаҡтың да ихтилалда артабан ҡатнашыуы күренмәй. Күрәһең, ҡайтҡас, ул тағы ла «вирнай» булып киткәндер, сөнки улы Ҡораманы властар киләсәктә кантон начальнигы итеп үрләтмәҫ ине.

Итжыймаҫ та, Рәсүл дә, Муйнаҡ та ихтилалдарҙа ҡатнашҡаны өсөн ерҙәре баҫып алынып, урыҫ административ бүленешенән мәхрүм булғас, олоҫтары «Кара-Табынская» тип аталып киткән өсөн генә лә Ҡара Табынлы булып китеүҙәре бик тә мөмкин. Сөнки властар барындарҙы 1812 йылғы һуғышҡа тиклем барлыҡ етәксе баҫҡыстарынан ситтәрәк тоторға тырышҡан. 1800 йылдан һуң барындарҙан Рәсәй тарихына кереп ҡалған ике генә шәхес күренә. Береһе – Көсөкөв Мөхәммәтҡолой (Ҡолой кантон), ә икенсеһе – Бүҙәкәев кантон (Мөхәмәтйән Йыражбай улы). Барындарҙың Итимгән тигән кешеһе барлығы билдәле. Мәүлит бабай Ғөмәровтың Итжыймаҫ менән Итимгән, аҙаҡ халыҡ тарафынан көлөңкөрәп әйләндерелгән Этиммәҫ менән Этимгән бер туғандар, тиеүе дөрөҫ кеүек. Нәҫел-нәсәптәре үҙҙәрен барын һанай. Ә районыбыҙҙағы Рәсүл ауылы халҡы үҙҙәрен төплө ҡара табын тип раҫлай.

Беҙҙең ҡул аҫтыбыҙҙа булған шәжәрәгә килеп теркәлеүсе яҙмалар әлегә бөгөнгө ҡыуаҡандарҙа ла, тиләү-күбәләктәрҙә лә осрағаны беленмәй. Ҡыуаҡандар, әгәр табындарға бәйле булһа, нәҫел-нәсәптәренең бик боронғо осоролор, бәлки. Сәхәүетдин Ҡорамшин яҙмаһында ҡабатланыр тигән өмөттә Ҡыуаҡан ырыуы кешеһе Зәйнулла ишан Рәсүлевтең дә Сыңғыҙхан осорона уҡ еткән шәжәрә исемдәрен ҡарап сыҡтым. Шәжәрәлә: ... Манғут бән,



һеркә бән, Шихмыс Мөнтәй бән, Ҡаңлы бән... һәм Туҡһан бей... Бында тик Туҡһан бей генә тип әйтелә. Сәхәүетдин Ҡорамшин яҙмаһында башҡаса. Табын ҡаған – Табынлы, Томан ҡаған – Томансы, Майҡы бей – Байҡы бей. Кейековтың шәжәрәһендә артабан Алча бей, Сәхәүетдиндә – Алсаҡ бей. Унан килә Ҡара шәйех йәки Барун – Барын. Шәйех – дини дәрәжә. Тимәк, Барын ислам тәғлимәтле булған.

Халыҡтарҙың ниндәй дини тәғлимәт тотҡанын һөҙөп кенә ҡарап сыҡҡанда ла, бер ысынбарлыҡ асыҡлана. Ҡыпсаҡ теле берләшмәһенә ҡараған халыҡтар бөтәһе лә ислам тәғлимәтен алған. Бүрәт тә, монгол да, ҡытай һәм япон да ислам динен ҡабул итмәгән бит. Төрки тамырлы, ҡыпсаҡ телле халыҡтар ислам тәғлимәтен алған. Тимәк, ул ниндәйҙер бер тарихи ҡанунға буйһонған. Тимәк, беҙҙең бик боронғо ҡарттайҙарыбыҙ бер ниндәй ҙә монгол түгел, ә төплө, тамырлы төрки халыҡ. Ҡара шәйех – барын. Беҙҙең башланғысыбыҙ – Барын шәйех. Ә унан алдағылар: Алсаҡ бей, Майҡы бей, Томан ҡаған, Табын ҡаған.


Шәжәрәлә шәйехтәр тағы ла өс быуын ҡабатлана, хажға барған Буға хажи килеп сыға. Ибнихажи, Мирхажи күренә. Башҡаса Яппархажиға тиклем шәйехтәр ҙә, хажиҙар ҙа күренмәй. Рәүеф Насиров Туңғатар ауылы кешеһе, табип Әкрәм Ҡарамышев ғаиләһенән һәм әле 1900 йылдарҙа уҡ Госман мулланан ҡалған яҙма шәжәрәнең күсермәһен баҫтырып сығарғайны. Шәжәрәләр сағыштырмаса тура килә. Айырма тик шунда: Сәхәүетдин мулла Алсаҡ бейҙең өсөнсө улы Әхмәт шәйехте лә яҙа, Ҡотлоғ шәйехтең ике улы Ҡарашар һәм Тоғошарҙы күрһәтә. Муңғаҡ шәйехкә ҡушамат итеп Мөңөрәү шәйех, ҡатынының исемен Торғауыт тип өҫтәй.

Жәнсәм – Йәнсәм, әммә Йәнәсәй тигәне яңы өҫтәлгәнгә оҡшай. Асанби – Әсән бей. Әммә Турғай олатайҙан һуң бер уратма әсендә икешәр оҡшаш исемдәр күбәйә. Күрәһең, улары игеҙ балаларҙыр, сөнки ҡайһы берҙәренең игеҙ булыуы күрһәтелгән.

Турғайҙың ейәне Тәңребирҙенең дүрт улы яҙыла: Туҡтаһан, Тәнәйбирҙе, Юҡбирҙе һәм Жусбирҙе. Һуңғыларының улдары өсәү: Әҡембәт, Ҡырлас һәм Һары (Һарығол). Бына шул Һарығолдан башлана ла инде хәҙерге Сәғитовтар, Бәхтиәровтар, Ишниязовтар, Ильясовтар, Таһировтар, Сәлиховтар, Мортазиндар... Атайым миңә яҙҙырып ҡалдырған шәжәрә лә ҙур ине. Һуғыштан һуң Кәрим бабай Сәғитов, атайым Мөжәүир Ильясов, Сәлих бабай Ишниязовҡа барып, ата-олаталарын теүәллән йөрөнө. Ул саҡта Фәҙелшә бабай Бәхтиәров, Һыңар аяҡлы Сәйет, Ҡотой бабай Таһировтар иҫән-һау ине. Барлас, Бурай бей, Сарға һәм Һары (Сары) тигәндәре ҡолаҡ төбөндә. Бәлки, Һары иҫтә лә ҡалмаҫ ине, әммә атайым байрамдарҙа, йә табында йомшарыңҡырап алғанда, миңә һәр саҡ Һары тип өндәшер булды. Һарының алдынан бер ниндәй ҙә ныҙыҡ менән тоташтырылмаған, тик үҙ-ара бәйләнешле Ҡайыш һәм Шәүкән бар. Был ике кешенең төп тармаҡҡа ялғаныуын әллә үҙ ваҡытында мин, әллә атайым яҙып еткермәгән. Ә, бәлки, билдәһеҙ олатайҙарҙыр. Тармаҡтары кемдәр?

Оло тарихсылар Гумилев, Руденко һәм башҡаларҙың яҙыураҫлауы буйынса, Уралдан алып Алтай тауҙарына тиклем Табын ҡәбиләһенең ун ике ырыуы ҡеүәтле дәүләт ойоштороп йәшәгән. Мөхәммәтсәлим Өмөтбаев Табын батшалығының башы Төмән бей булған тип яҙһа, Сәхәүетдин мулла уға өҫтәп Табын ҡағанды яҙа. Упйот йылғаһы буйындағы Барын ере, Барын ауылы, ырыу исемен йөрөткән. Табын конфедерацияһына ингән Барын олатаһы Майҡы бейҙең вафатынан һуң атаһы Алсаҡ бей менән Батый хан ғәскәре берләшмәһендә бөтә Европа аша Урта диңгеҙгә еткәнгә оҡшай. Сөнки австро-германдар титулы барон һүҙен үҙҙәренә ҡушып, барун булып китеүгә ишара түгелме? Барун нәҫелдәренең Фағауз һәм Ҡырым төркиҙәре араһында барлығы билдәле. Барындарҙың төп табындар менән көнсығышҡа китмәй урында ҡалғандары Сынғыҙхан менән Джамуха (Йәмекә) сәсәнхан араһындағы көрәш осоронда Ете йылға буйына күсенгән һәм ҡырғыҙҙарға ҡушылған. Барын ырыуы ҡырғыҙ халҡын да тәшкил итә. Был турала тарих фәндәре докторы Р. З. Янғужин яҙа («Башҡорт ҡәбиләләре тарихынан», 84-се бит). Барындан һигеҙенсе быуын булған дөйөм ҡарттайыбыҙ Турғай Ҡаҙағстан далаларында, олаталары менән Батый хан яуынан һуң кире ҡайтҡанда ултыраҡ булып һибелеп ҡалғандыр. Ҡайһы бер авторҙар табынтиләүҙәрҙең, күбәләктәрҙең, барындарҙың Бөгөлмә ҡалҡыулығында йәшәүҙәрен күрһәтә.

Күрәһең, улар көнбайышҡа яһалған яуҙан ҡайтҡан ҡәрҙәштәребеҙҙең вариҫтарылыр, Туймазы, Дүртөйлө, Минзәлә, Саҡмағош, Дәүләкән һәм башҡа көнбайыш райондарында йәшәүсе халыҡ шул ҡан нәҫелелер.



Күптәребеҙ далаға һибелгән. Шуға ла бөгөнгө ҡаҙаҡ та, ҡарағалпаҡ та, үзбәк тә, ҡайһы бер Кавказ халҡы, мәҫәлән, ҡумыҡтар, ҡарасәйҙәр, балҡарҙар ҙа эске донъялары менән беҙгә тартым. Был халыҡтар урыҫ тарихында гундар, һуңғараҡ ҡомандар тип дөйөмләштереп яҙыла килде.

Яҙмамдың һуңын мин дәүеребеҙҙең оло тарихи ҡарттаһы Лев Николаевич Гумилевтың һығымтаһы менән бөтөрөр инем. «...Война с куманами у монголов затянулась надолго потому, что между ними существовал этнический барьер – Великая Венгрия, ныне именуемая Башкирией. Эта страна располагалась на Урале и реке Белая, которую башкиры называли Ак-Идель. Монголо-башкирская война тянулась 14 лет, то есть значительно дольше, чем война с Хорезмийским султанатом и Великий Западный поход. Столько же сопротивлялись монголам только чжурчжени Империи Цзинь, пассионарность которой не уступала монгольской; но результаты башкирской и чжурчженьской кампаний были различны. Башкиры неоднократно выигрывали сражения, и на-

конец, заключили договор о дружбе и союзе, после чего монголы объединились с башкирами для дальнейших завоеваний».

Л. Н. Гумилевтың «Этногенез и биосфера Земли» тигән ҙур һәм күп яҡлы хеҙмәтендә ул осор ентекле тасуир ителә. Был ваҡиғаларҙы яҙыусы Ғәзим Шафиҡов та үҙенең «Тень Чингисхана» тигән китабында яҙа. Ул ваҡыттағы ҡатмарлы сәйәси ваҡиғалар, Майҡы бейҙе алмаштырған Мөйтән бей иҫтәлеген һаҡлаған үҫәргәндәр хәтерендә лә изге ҡомартҡы.

Күрәһең, был ваҡиғалар барындарҙың хәтерендәге Аҡҡолан, ә Әхмәтзәки Вәлиди яҙған Ҡолан башы тигән ерҙә Сыңғыҙхан менән Майҡы һәм башҡа башҡорт бейҙәренең осрашыуының хәтирәһелер. Аҡҡолан Арал күленә яҡын, Һырдаръяның бейек бер яр башы булырға тейеш. Әлегә хәтирәләремдең бер бәләкәй генә өлөшө тамам, хөрмәтле уҡыусым.

ОЛАТАЙҘАР ТОТҠАН ҠОРАЛДАР

Башҡортомдоң тотҡан төп ҡоралы –
Кәкре ҡылыс менән уҡ икән.
Эй... был имперҙе бөтә айҡап сыҡтым,
Башҡортомдан батыры юҡ икән.

«Мәхәмәтколой» йырынан

Һыуға сарсаған кешенең ташлы соҡор төбөнән һыу табып эсеүе – тәненә ләззәт! Онотолоп барған боронғо мираҫыбыҙҙы тергеҙеү иһә – рух һәм хәтер зиннәте! Шул рух менән солғанған хәтер күгендә күптәнән аҡ болоттар йөҙә ине. Ниһайәт, хәтер юйылмаҫ борон ошо мираҫты халҡыма еткерергә форсат тейҙе.

Мин әле күп ҡәрҙәштәребеҙ белмәгән боронғо яу ҡоралдары тураһында һөйләмәксемен. Киләсәк быуынға халҡыбыҙҙың тарихын, тел, рух байлығы өсөн был яу ҡоралдарын, уларҙың атамаларын белеү кәрәк, тип иҫәпләйем.

Рухи инаныу, күңел байлығы, сәләмәт тормош өсөн боронғо ата-олатайҙарҙың мираҫы нигеҙендә, бәлки, яңы милли уйындар, ярыштар ойошторолор. Сәпкә уҡ атыу, һалдау һөңгөнө һыбай һәм йәйәүле килеш тә дөрөҫ һәм мәргән ташлау тарихты танып белеү даирәһен киңәйтер. Аңлы рәүештәме, йәки үткән мең йыллыҡтар ауазын генетик йәһәттән йәдкәр итеп, ҡан, йән тауышына буйһонопмо, ауыл малайҙары бөгөн дә ҡылыс алышы уйнай. Тик был уйындарҙы ҙур спорт баҫҡысына күтәреп, ҡанбабаларса һалдау ташлау, сәпкә уҡ атыу кеүек милли исемдәр биреп, киң даирәлә тергеҙеү кәрәктер. Боронғо яу ҡоралдарының башҡортса-төркисә атамалары булыуы ла уларҙың нәғеҙ беҙҙеке, башҡорттоҡо, ғүмүмән, төрки халҡыныҡы икәнлеген раҫлай.

Ҡорал, йәшәүҙе һәм йәшәү киңлеген тәьмин иткән. Тәүтормош дәүерендә кеше ҡорал итеп ҡулына таш алған. Меңәр йылдар үтеп, аҡылға ултыра башлағас, ул һаҡланыу һәм һөжүм итеү өсөн ҡулына ағас суҡмар алған. Шул осорҙан Суҡмар осоро башланған. Артабан олатайҙарыбыҙ мәғдән иреткән, үҙ милли булмышына хас ҡоралдарын яһаған. Күп осраҡта уларға тәбиғәт үҙе өлгө булған. Шул тәбиғәт өлгөһө башлаған да инде Суҡмар осорон.

Һаҡланыу – һәр йән эйәһенең төп ҡоралы. Көрәшеү – һәр йән эйәһенең һаҡланыу алымы. Кеше, кеше булып ике аяғына баҫырҙан алда уҡ, ҡорал тотҡан ике ҡулына. Ул башта таш менән һуғып, дошманынан һаҡланған. Миллионлаған йылдар үткәс, башына фекер ултыра башлағас, ул аңлы рәүештә таш менән һуғып ҡоштарҙы, ваҡ йәнлектәрҙе аулаған. Тамам ике аяғына баҫҡас, ул икенсе ҡорал тапҡан. Һаҡланыу өсөн дә, һөжүм итеү өсөн дә төбө-тамыры менән ҡутарып, ҡулына ағасты алған. Шул осорҙан башланған да инде Суҡмар осоро.

Суҡмар


Суҡмар – иң боронғо ҡорал. Уның йәше миллион йылдар менән иҫәпләнә. Иң оҙаҡ йәшәгән ҡорал ул! Хатта төрлө осраҡтарҙа бөгөнгө көндәрҙә лә үҙ тәғәйенләнешен юғалтмаған. Суҡмар һаҡлаған, суҡмар яҡлаған, суҡмар аҙыҡ табышҡан.

Төбөр суҡмар

Суҡмар ҡоралын, төп суҡмарҙы, ике өлөшкә һәм дүрт төргә бүлергә мөмкин. Боронғо суҡмарҙар – төбөр суҡмар һәм ҡулай суҡмар. Төбөр суҡмар имән йә ҡайын төбөрө булһа, һабы уның һуҡмарға үҫешкән ағас олоно була. Ә ҡулай суҡмарҙы баҡыр йә тимерҙән, баҡыр һәм ҡурғаштан (олово) эшләгәндәр. Ҡулай суҡмарҙың һап ҡуя торған ере ике төрлө булған. Беренсеһе, «ҡулай» – бронза (ҡайһы ваҡыт ҡулайҙы еңелләштереп «ҡула» тип кенә йөрөткәндәр) суҡмар эсенә тәрән генә, сама менән бер ая, унан артығыраҡ тишек ҡалдырып ҡойғандар. Ҡаҡ һап шул тишеккә ҡағып, йә бороп керетеп ҡуйылған.

Һуңғараҡ ҡулай суҡмарға төрбә рәүешендә һап урыны ҡойоп өйрәнгәндәр. Был осраҡта суҡмар һабы суҡтың эсенә тәрән кермәгән. Төрбәнең оҙонлоғо бер ая, ая ярым булған. Суҡмар дүрт-биш өлөштән торған. Суҡ, төрбә, һап, тотҡа һәм мүлдергә. Суҡмарҙың һуңғараҡ эшләнгәндәре икәү: күкәй суҡмар һәм тимер суҡмар (йәки палица).

Торонбаш, төтөнбаш, торон суҡмар, нигеҙҙә, төркиҙәрҙә булған. Уны һуңғараҡ көнбайыш илдәре һуғышсылары ла йөрөткән. Көнбайыш илдәр һәм урыҫ кенәзлектәре һаҡланыр


Һупалаҡ киҫтән
суҡ
һап
сылбыр
әпес
һупалаҡ
мүлдергә
Ҡүкәй киҫтән
ҡайыш
сынйыр
имсәк
күкәй
баш әпес
Ҡулай киҫтән
ҡайыш
ҡолаҡ
ҡулай
тотҡа
әпес
ҡайыш
Лыпын киҫтән
сылбыр
лыпын
суҡ
Ҡулай суҡмарҙар
үтмә төптән
төптән
имсәк
күкәй суҡ
Күкәй суҡмар
ҡайыш урама
Палица
әпес
ҡайыш
мүлдергә
Төбөр суҡмар
күн
тотҡа
һап
соңҡалаҡ
төш
имсәк
тотҡа
урама
тотҡа
төрбә
һап
соңҡалаҡ
имсәк
мүлдергә

өсөн диуарҙар, нығытмалар – ҡорамдар төҙөгәс, уларҙы алғанда торон суҡмарҙың кәрәклеге асыҡланған. Елде файҙаланып, диуарҙағы һуғышсыларҙы төтөн менән ҡапларға, нығытмаларҙы яндырырға кәрәк булған.

Шул маҡсаттан төркиҙәр күкәй суҡмарҙың эсен ҡыуыш итеп ҡойған. Дәүмәле бер ни тиклем ҙур булһа ла, эсе төрбә ҡыуыш булғас, суҡтың ауырлығы бер сама була. Суҡтың буш ҡыуышы эсенә – төптәнгә, етен, киндер һабаҡтарын дегет, ыҫмала менән буяп тыҡҡандар ҙа ут төрткәндәр. Төндә ул ғәскәр урынлашҡан ерҙе яҡтыртҡан, юл күрһәткән. Диуарҙарға үрмәләгәндә өҫтә торған дошман һуғышсыһына еҫе, төтөнө ҡамасаулаған. Ағас диуарҙарҙы яндырған. Уның менән һелтәгәндә эҫе ыҫмала дошманының кейеменә, тәненә, битенә, күҙенә тейеп көйҙөргән.

Күкәй суҡмарҙы күреп, көнбайыштар, шул уҡ иҫәптән урыҫтар ҙа уны эшләй, ләкин уларҙың суҡмары бөрөшкән ромб рәүешендә, тыштан имсәктәр түгел, ә оҙон ҡырлы булған.

Суҡмар яҡындан тороп һуғышыу ҡоралына инә. Тормош, йәшәйеш өсөн көрәш шарттарында суҡмарҙың урыны төрлөсә була. Суҡмар менән һуғып бүре, айыу, юлбарыҫ, ҡыр аттарын алғандар. Көндәлек тормошта суҡмар менән ҡорбанға йәшенеп тороп, ә баҫҡаҡлағанда ҡыуып етеп һуҡҡандар. Әле башҡа ҡоралдар уйлап табылмаған осорҙа ике төркөм кешеләр һуғышҡанда бер-береһен таштар, суҡмарҙар менән һуғып йәрәхәтләгәндәр, үлтергәндәр.

Меңәрләгән йылдар үткән. Кеше ат тотоп, өйрәтеп, менеп алған. Кеше, суҡмарҙан тыш, һөңгө, һалдау, уҡ, ян-йәйә уйлап тапҡан. Һуңынан ҡылыс барлыҡҡа килгән. Ә суҡмар тормошта ла, һуғышта ла үҙ урынын юғалтмаған. Күп халыҡтар суҡмар аҫтында буйһондоролған, йәшәгән, дәүләттәр, империялар барлыҡҡа килгән. Ә ул һаман башҡарыусы ҡорал булып ҡала биргән. Суҡмар менән, нигеҙҙә, боронғо төрки халыҡтары ҡоралланған. Ул – боронғо Атилла, Төмән ҡағанаты, Ҡытай империяһы, Сыңғыҙхан һәм унан һуңғы дәүләттәр әрмеләренең ҡоралы. Суҡмар, ғәҙәттә, ҡайын, имән, башҡа төрлө ҡаты ағас ороһо, төбөрө. Ороноң йә төбөрҙөң йомро булыуы һәм һабы ағас олоно булыуы шарт. Түңәрәк дәүмәленең арҡырыһы 17 сантиметр, йәки 6–7 илегә саҡлы була. Бер иле 2 – 2,5 сантиметрға тура килә. Йомро өлөшө суҡ тип атала. Урыҫ телендә дубинка – дуб – имәндән алынған. Исеме боронғо төрки теленән «соп» үҙгәртелеп, «суҡ» – «һуҡ»тан алынғандыр. Һабының оҙонлоғо аршын ярым, йә унан әҙ генә оҙонораҡ булған. Һабының йыуанлығы ике-өс иле самаһы. Һуғышҡан саҡта ҡулдан ысҡынып китмәҫ өсөн, һабының осон йә киртеп, йә тишеп, ҡалын ҡайыштан мүлдергә бәйләгәндәр. Суҡмар һабын тотоп, мүлдергәне кейеп һелтәгәндә, ул ҡулдан ысҡынмаған. Күп кешеләр менән яҡындан тороп һуғышҡанда

көслө яугирҙар ике ҡулына ике суҡмар кейеп һуғышҡан. Батырға иш бир, ике ҡулына суҡмар бир, тигән боронғолар. Әммә уның шарты булған. Бәрелештә ҡаршы яҡта һөңгөсөләр булмаһа, йәйәүлеләр бәрелешендә, суҡмар һуғышы отошло сыҡҡан. Был ваҡытта уң ҡулдағы суҡмар һабы һул ҡулдағы суҡмар һабынан оҙонораҡ була. Йөҙәрләгән йылдар үтеү менән, суҡмар менән һуғышыу һоло ла камиллаша барған. Бөгөнгө көндә Ҡытайҙағы ҡыҫҡа таяҡтар менән һуғышыу – ҡулға ике суҡмар тотоп һуғышыуҙың бер сағылышы. Ваҡыт үтеү менән суҡмар төрлө-төрлө рәүеш-форма алған. Кешеләр ҡулай – бронза иретергә өйрәнгәс, һары балсыҡтан өшәләк эшләп, шуға иретмәне ҡойоп, төрлө-төрлө рәүешле суҡмар ҡойғандар. Нигеҙҙә, ул түңәрәк, йәки оҙонсараҡ рәүешен алып, ағас һап өсөн тишек ҡалдырылған. Быныҡ өсөн өшәләк эсенә балсыҡтан, таштан оҙонса таяҡ формаһын эшләгәндәр. Иретмә өшәләк эсендә һыуынғас, балсыҡ ҡойолоп төшкән һәм буласаҡ суҡмарҙа һап урыны – тишек ҡалған. Суҡмарҙа имсәктәр барлыҡҡа килһен өсөн, балсыҡ иҙмәһенең эсенә ҡалаҡ һабы йыуанлығындай төртмәләр төрткәндәр. Суҡмар имсәктәре оҙон булған һайын һирәгерәк була. Ғәҙәттә, 28 – 40 имсәк.

Суҡмарҙы ла төрлө-төрлө итеп эшләй ҙә, ҡоя ла башлайҙар. Ҡурғандарҙан ҡырлы-ҡырлы пирамида рәүешендәге суҡмарҙар табылыуы билдәле. Әммә, нигеҙҙә, суҡмарҙар йә тимер ҡаҙауҙар ҡағылған ағас төбө, ороһо, йә ҡулай, йә күкәй-шар. Эсенә ҡурғаш ҡойолған. Һап өсөн ҡулайҙа тишек ҡалдырылған. Ауырлығы ярты ҡаҙаҡтан алып ике ҡаҙаҡҡа тиклем. Һабының оҙонлоғо суҡмарҙың оҙонлоғона ҡарап эшләнгән. Урыҫ яҙмаларында суҡмар булава тип тә яҙылып иҫкә алына. Урыҫ телендә «булав» тигән һүҙ юҡ. Был һүҙҙе улар боронғо төрки, фарсы, хазар, бәжәнәк йә мадъярҙарҙан алған булһа кәрәк. Христианлашҡан төркиҙәр – бәжәнәктәр, йәки казактарҙың ҡоронда, атамандың ҡулында булава була. Булава – ул башлыҡ булыуҙың билдәһе. Уның менән яҡындан көслө итеп дошмандың башына, яңағына, ҡулбашына һуғып, сафтан сығарғандар. Византиялылар, румдар, германдар, урыҫтар, тимер ҡойорға өйрәнгәс, һуғышсыларына шлем ҡойоп кейҙергәндәр. Атилла, төрки ҡағанат һуғышсылары шлемды – торҡаны киң ҡулланһалар ҙа, Сыңғыҙхан ғәскәрендә торҡа киң ҡулланыу тапмаған. Көнбайыш йә урыҫ һуғышсыһының башына суҡмар менән һуғып, «ошеломить» иткәндәр. Шлемдарын яра һуҡҡандар, иҫәңгерәткәндәр, сафтан сығарғандар. Шунан ҡалған урыҫҡа «ошеломить» һүҙе. Дошман оҙон, киң, ике яҡлы ҡылыс күтәреп һелтәнгәнсе, оҙон һаплы еңел суҡмар уның башын онтаған.

Суҡмарҙың икенсе төрө – киҫтән. Урыҫ сығанаҡтарында уны «кистень» тиҙәр. Киҫтән дә – боронғо төп беҙҙең башҡорт

ҡоралы. Киҫтәнде урыҫ һәм башҡа дәүләт һуғышсылары ла ҡулланған. Әммә улар уны төркиҙәрҙән, мадъярҙарҙан, хазарҙарҙан күреп эшләгән.

Киҫтән – йоҙроҡ тиклем йәки унан бәләкәйерәк йомро ҡулай, тимер һупалаҡ. Ҡайыш йәки сылбыр тағыр өсөн тишекле ҡолағы бар. Ҡалын ҡайыш йәки ваҡ сынйыр тағылған имсәкле һупалаҡ, ҡаҡ, ныҡлы һапҡа ысҡынмаҫлыҡ итеп бәйләнә.

Һупалаҡтың ауырлығы уртаса ярты ҡаҙаҡ, 200 – 300 грамм. Ике аршин йәки унан ҡыҫҡараҡ ҡаҡ һаптың осона имсәкле һупалаҡ бәйләнә. Ҡайыштың бер осо һупалаҡтың ҡолағына бәйләнә, икенсе осо һапҡа ныҡ итеп беркетелә. Ҡайыштың, сынйырҙың оҙонлоғо – ярты йәки бер аршин самаһы. Уның оҙонлоғо һупалаҡтың ауырлығына ҡарап билдәләнә. Һаптың осона суҡмарҙағы кеүек мүлдергә эшләнә. Киҫтәндең һабы менән бергә дөйөм оҙонлоғо ике-ике ярым аршинға саҡлы булған. Киҫтән – һыбайлы ҡоралы. Әгәр һуғышсы үҙе ярты метрҙаса алға эйелһә, ҡылыс тотоп килгән ҡаршы һуғышсыны яҡын ебәрмәйсә, йыраҡтан яралаған, үлтергән. Әгәр суҡмар һуғышында һуғышсы өҫтән аҫҡа һуҡһа, киҫтән менән юғарынан, баш осонан өйөрөп һуҡҡан. Дошманының йә башын, яурынын, ҡылыс тотҡан ҡулын, атының башын яралаған, сафтан сығарған. Өйөрөп һуҡҡан киҫтән бик ҡурҡыныс ҡорал иҫәпләнгән. Әммә ул төп ҡорал хеҙмәтен үтәмәгән. Ул ярҙамсыл ҡорал булып торған. Тик киҫтән тотоп ҡына һуғышҡа кермәгәндәр.

Һәр ҡоралдың ҡулланылышын дошмандың атлымы, йәйәүләме, йәки һуғыштың яландамы, тауҙамы булыуы билдәләнгән. Киҫтәнде киң яланда, сабышып йөрөп, ҡыуалашып алышҡанда йышыраҡ ҡулланғандар. Йөҙгә-йөҙ килеп, бик күп ғәскәр буталып һуғышҡанда киҫтән, әлбиттә, уңайһыҙ. Шуның өсөн дә ул ярҙамсы ҡорал рәтендә торған. Әммә дошман ҡаса, арттан етеп, һуғып төшөрөү өсөн унан да уңайлы ҡорал булмаған.


Суҡмар ҙа, киҫтән дә – боронғо ҡорал. Аҙағыраҡ, XV–XVI быуаттарҙа, улар һуғыш ҡырында ҡулланылышын юғалтҡан.

Быуаттар үтеү менән һуғыш алымдары ла, ҡоралдар ҙа камиллашҡан, яңылары барлыҡҡа килгән. Иң көслө ҡоралдарҙың береһе – һөңгө барлыҡҡа килгән.


Һөңгө

Һөңгө лә төрки халыҡтарының ҡоралы. Тәғәйенләнеше – дошманға сәнсеү, ҡаҙау, ауыр яра һалыу, үлтереү. Шуның менән бергә, ул, нигеҙҙә, һаҡланыу түгел, ә ташланыу ҡоралы (оружие нападения). Оҙон һөңгөләрен алға тоҫҡап, ҡара һөрөм туҙырып, йән-фарман өҫтөнә сабып килгән меңәрләгән атлыға йәйәүле ғәскәргә ҡаршы тороу ҡурҡыныс була. Ҡыйҡыулап, оран һалып,


Беҙ һеңге




Мейеҙ һеңге




Ҡармау йеки ҡаяу һеңге



Урыҫ һеңгеһе



Һалдау һеңге



Бысаҡ һеңге



ҡысҡырышып сабып килеп дошман өҫтөнә менгәс, әлбиттә, йәйәүле ғәскәрҙең алғы сафтары ҡаушап ҡалған. Етмәһә, оҙон ҡылыс тотҡан көнбайыш һуғышсыһын һөңгө менән йыраҡтан, өҫтән сәнсеү ҙә өҫтөнлөк биргән. Дошманды өйөрөп бүлгесләргә, ян-яҡтан урап алырға, «тоҡ» эсенә әүрәтеп керетергә, көслө итеп «ура», «ура», «урат» тип оран һалыу ҡаршы яҡтың ихтыярын һындырған.

Һөңгөләр

Һөңгөләр үҙҙәренең ҡулланылышы менән биш төргә бүленгән:

1. Беҙ һөңгө.
2. Бысаҡ һөңгө.
3. Ҡармау йәки ҡаяу һөңгө.
4. Һалдау һөңгө.
5. Мөйөҙ һөңгө.

Беҙ һөңгө

Һөңгөләрҙең биш төрлөһөнең дә ҡулланылышы төрлөсә. Беҙ һөңгө, һис шикһеҙ, атлы һуғышсы ҡоралы. Һөңгө, беҙ һөңгө түбәндәге өлөштәрҙән торған.

Һап. Оҙонлоғо 2 метр 70 сантиметр самаһы. Башаҡ – 30 сантиметр. Башаҡ ике өлөштән тора. Һап кереп ултыра торған өлөшө «урҙа» тип аталған. Ун-ун биш сантиметр. Башаҡ осо – «сәске». Сәске оҙонлоғо 20 сантиметр. Ике ая самаһы. Һаптың осон, терәп сәнсеү уңайлы булһын өсөн, йомролап та эшләгәндәр. Йомроно йә тишеп, йә муйынына ныҡлы ҡайыштан мүлдергә бәйләгәндәр. Ул ҡул һыйышлы була. Мүлдергә һөңгөнө ҡулдан ысҡындырмаҫ өсөн дә, көсәнеп сәсеү өсөн дә хеҙмәт иткән. Ҡыҫҡа мүлдергәне «беләҙек мүлдергәһе» тип тә атағандар. Сөнки һөңгө, һуғыш булмағанда, оҙон юлда барғанда һыбайлының һул ҡулының ҡалаҡ һөйәге буйлап текә торған. Мүлдергә һул үксәгә әләктереп, өҙәңгегә ҡуша кейелгән. Һөңгө һабының осонан аршын самаһы ерҙән икенсе оҙон мүлдергә бәйләнгән. Ул үрелгән ҡайыш дүңгәләгендә аҫҡа ла, өҫкә лә шыуып торған. Был оҙон мүлдергә һул ҡулдың ҡулбашына кейелгән. Шулай итеп, һөңгө, ныбайлы әйәрҙә ултырғанында, һул яҡтан арттан текә торған һәм ул әллә ни ҡамасаулыҡ килтермәгән.

Һуғышсының һул яғында ҡоралдарҙың күбеһе урынлашҡан, сөнки уң ҡул һәр саҡ буш, азат булырға тейеш булған. Сөнки кәрәк ваҡытта һөңгөнө лә алырға, ҡылысты ла ҡындан һурырға, һаҙаҡ менән уҡтарҙы ла тартып алырға уң ҡулдың буш булыуы

шарт. Һул ҡул ат теҙгенен дә тотҡан, ҡоралдарҙың да тейешле кимәлдә һәм үҙ урынында булыуын тәьмин иткән.

Бысаҡ һөңгө

Һөңгөләрҙең боронғорағы, әлбиттә, бысаҡ һөңгө. Тимер кейем, ҡылыстан, бысаҡ һөңгөнән генә һаҡлай алған. Бысаҡ һөңгөнөң дә, беҙ һөңгөнөң дә тағы ла бик үҙенсәлекле бер өлөшө бар. Ул – сасаҡтар. Сасаҡтар, ғәҙәттә, ат ҡойроғонан эшләнә. Уны йылҡы һуйғандан һуң тиреһенән айырып алып эшкәртеп, еңеллəп, тарап, ҡайыш менән ныҡлы итеп һөңгөнөң урҙаһына бәйләгәндәр.

Тәү ҡарамаҡҡа сасаҡтың һөңгөлә тороуы файҙаһыҙ кеүек күренһә лә, ысынбарлыҡта уның әһәмиәте ҙур булған. Походта, юлда һөңгө һуғышсының һул ҡул артынан текә барғанда сасаҡ елберләп, дәрт, көс, рух биреп барыусы. Ә дошман өҫтөнә ташланғанда, сасаҡ түбәндәге алымдарҙы башҡарған. Дошман һыбайлыһы менән ҡара-ҡаршы килеп сәнсешеү алышы башланғас, һөңгө осондағы сасаҡ елберләп, уның тоҫҡалған күҙен ҡаплап, сәнсеү, күҙәтеү ерен яңылыштырған. Һөҙөмтәлә, ул уҡталған еренә сәнсә алмаған. Быныһы бер. Икенсенән, сасаҡ, елберләп, дошман атын өркөткән, ул ситкә ҡайпылған. Һөҙөмтәһе бер: дошман тағы сәнсә алмаған. Был алымдарҙан азат булған төрки һуғышсыһы дошманын еңел генә сәнсеп төшөрөп, икенсеһенә ташланырға мөмкинселек алған.

Бысаҡ һөңгө һапҡа, күп осраҡта урҙаға кереп ултырмаған. Киреһенсә, һап осонан ялпаҡлап бер ни тиклем юнланып, бысаҡ һабының төйтәһе төкәлер урын өңөлөп, шуға беркетеп бәйләнер булған. Сасаҡ бауы ла был урында бысаҡ һабын нығытыуға ҡулланылған.

Ҡармау йәки ҡаяу һөңгө

Ҡаяу йәки ҡармау һөңгө башҡа һөңгөләрҙән үҙенең башағы менән айырылған. Ҡаяуҙың башағы киң, муйыл, ерек япрағын хәтерләткән. Ул бик ҙур яра һалған. Ғәҙәттә, ҡаяу һөңгө менән сәселгән ат, дөйә, кеше тиҙ йән биргән. Ҡаяу һөңгөнөң һабы ла бер ни тиклем оҙон һәм йыуаныраҡ булған. Беҙҙең Учалы районында Кинйәкәй ауылына урыҫтар крепостной баҫҡаҡ булып килеп ултырғас, Вознесенка тип үҙгәртелгән. Шул ауылда башҡортто ихтирам иткән Василий Захаров исемле бик оҫта

һунарсы йәшәне. Хәҙер мәрхүм. 1977–1978 йылдарҙа миңә уның менән ултырҙаш булырға тура килде. Үткәндәр, һунар, тарих тураһында байтаҡ һөйләшеп ултырырға насип булды. «Хочешь, Спартак, я тебе покажу русское копье?» – тине. Бик теләп ризалығымды белдерҙем.

Ул өйгә соландан оҙон һаплы һөңгө керетте. Ысын һөңгө! Иҫ китмәле! Һабын ул үҙе эшләп башаҡҡа ултыртҡан. Төҙ, кипкән, ныҡ! Әрселгән, ыҫҡа тотоп, ҡара-көрәнәйтелгән һабы. Күренеп тора: башағы бик иҫке, әммә уның ике яғын да сарға тотоп, Василий ағай үткерләгән. Башаҡ беҙе яп-ялтыр. Ул башаҡ килеп керер булһа тәнеңә... Ҡурҡыныс ҡорал! Һүрәтен бирәм.

Урыҫ һөңгөһө

Ҡулланыу ҡоралы булмағас, урыҫ һөңгөһөнөң ҡармауы ла, мүлдергәләре лә юҡ ине. Башағы йәбешкән ромб кеүек, һабы урҙаһына кереп ултыра. Һабының йыуанлығы ҡалын тотам. Башағына ҡарағанда, был ысынлап та көнбайыш халҡы ҡоралылыр. Василий ағайҙан күпме һорамам да, һөңгөнө ул бирмәне. «Нет, Спартак, это реликвия, это память прадеда», – тиер ине. Ҡармау һәм урыҫ һөңгөһө башағының үткерләнгән ере «беҙ» тип атала.

Һалдау һөңгө

Һалдау һөңгө – бәреп сәнсеү ҡоралы. Уның менән 15 – 20 аҙымдағы дошманды, йәнлекте, мышыны, кәзәне, ҡыр атын, бүрене йәрәхәтләгәндәр. Фәҙәттә уның менән йәшенеп тороп йәки баҫтырып ҡыуып етешеп тә сәскәндәр. Һалдау һөңгө һаҡланыу ҡоралы түгел. Ул – һөжүм итеү, ташланыу, баҫҡаҡлау ҡоралы. Башағы түңәрәк, йәки бер аҙ ике яҡлап та һуҡмалы, әммә ҡырлытешле. Башаҡ тәңгә кергәс тә һурылмаған, тартып алған саҡта ла ҙур йыртыҡ яра ҡалдырған. Оҙонлоғо ике аршин самаһы. Һөңгө һабының йыуанлығы яҡынса 2 – 3 см, йәки ике иле.

Һунарсы йәки һуғышсы һалдау һөңгөнө бер нисәү йөрөткән. Хәҙерге ваҡытта һалдау һөңгө менән тик әре балыҡты ғына сыраҡ яндырып, төндә сәнсеп алалар.

Мөйөҙ һөңгө

Һалдау һөңгөнән айырмалы рәүештә, мөйөҙ һөңгө ташланыу ҡоралы түгел (не оржие нападения), ә һаҡланыу ҡоралы. Бик боронғо ваҡытта оҙон һаплы мөйөҙ менән ташланыусыларға ҡаршы «мөгөҙ» ҡуйғандар. Был бигерәк тә атлыларға ҡаршы ҡулланылған.

Был осраҡта мөйөҙ һөңгө оҙон һаплы, йыуан ҡайыш мүлдергәле һәм һабының осо осло булып, ул ергә ҡаҙалған, ә мөйөҙҙәре 30 – 40 градусҡа алға ҡарап торған. Оҫта һунарсылар уны айыуға ҡаршы ҡулланған. Әммә был осраҡта мөгөҙ һөңгөһөнөң һабы ике аршиндан артмаған. Урыҫтар мөгөҙ һөңгөнө бөгөн дә «рогатина» тип беләләр.

Тормошта берәй ҡаршылыҡ күрһәтһәләр, «поставили рогатку» тигәнерәк әйтемдәре лә бар бит. Мөйөҙ һөңгө менән атайолатайҙар Урал тауҙары урмандарында әҙ айыу алмаған. Айыу кешегә күберәк алты осраҡта ташлана:

1. Өңдән үсектереп сығарғанда.
2. Емтек ашағанда ҡамасаулағанда.
3. Балаһын ҡурсалап (был осраҡта тик инә айыу ташлана).
4. Яралы айыу.
5. Йәрәшкән ваҡытына тура килһәң (был июнь аҙағы, июль баштарына тура килә).
6. Әгәр айыу тоҙаҡта йә ҡапҡанда булһа.

Борон батшаның айырым указы менән башҡортҡа тимерлек, һалҡын һәм утлы ҡорал тоторға ҡәтғи тыйылған. Бына шул ваҡыттарҙа ла инде башҡорт һунарсылары төрлө ҡул ҡоралдарын йәшереп эшләргә мәжбүр булғандар. Шулар иҫәбенә мөйөҙ һөңгө лә ингән.

Нисек кенә булмаһын, башҡорт тарихының символы булырҙай ҡорал – һөңгө. Уның башҡорт йыр поэзияһында һәм ауыҙ-тел ижадында сағыу төҫ алыуы осраҡлы түгел. Зефиров «Йәнтүрә хикәйәһе»ндә башҡорт һуғышсыларының һөңгө менән француздарға ҡаршы алышын бик сағыу тасуирлай.

Боронғо ваҡыт һөңгө башын, уҡ башағын, айбалтаны, өҙәңгене һ. б. башҡорт үҙе ҡойған. Бының археологик ҡаҙылмалар ҙа раҫлай. Башҡорттоң үҙ ерендә металл эшкәртеүен, металл табыуын академик Нияз ағай Мәжитов үҙенең «История Башкортостана с древнейших времен до XVI века» тигән китабында бик төплө дәлилдәр менән раҫлап яҙып сыҡҡан ине.


Ҡылыстар

Боронғо ҡоралдарҙың иң оҙаҡ ҡулланылғаны ҡылыстыр. Уның «эштә» ҡулланылышы боронғо быуаттарҙан алып 1945 йылдарға саһа һәм ҡайһы бер илдәрҙә һуңғы осорғаса дауам итте. Бөгөнгө көндә ул күп илдәрҙә ғәскәри тантаналарҙа, ҡунаҡ ҡаршы алыуҙарҙа, оҙатыуҙа күрәбеҙ.

Әхлаҡи күҙлектән ҡарағанда, ҡунаҡты һалҡын ҡорал менән, ғөмүмән, утлы ҡоралды сыңҡылдатып, бер күтәреп, төшөрөп, ымлап, нәмәгәлер көҫәп, ғәйрәтеңде күрһәтеп ҡаршы алыуҙар, оҙатыуҙар дәүләттең ихтирамын күрһәтмәй, минеңсә, ҡунаҡҡа!

Икмәк-тоҙ менән ҡаршы алыу һәм оҙатыу – иң ихлас күңел ихтирамлыр.

Төрлө илдәр ҡылыс төрҙәрен төрлөсә атай. Хәйер, бөтә ҡылыстар ҙа ҡылыс (сабля) тип аталмай. Урыҫ, башҡорт телендә улар исемлеге түбәндәгесә. Башҡортса: ҡылыс, шешке, ятаған. Урыҫтарҙа: меч, шпага, сабля. Һәр ҡоралдың тәғәйенләнеүен, үҙенсәлеген һәм ҡулланылышын яҙғанға тиклем, бер нисә һүҙ – исемдәре тураһында.



Һеҙ олатай-өләсәйҙәрҙең ҡылдан нәҙек, ҡылыстан үткер сират күперен сыҡһаң, ожмахҡа керәһең, тигән һүҙҙәрен ишеткәнегеҙ барҙыр. «Ҡыл» һүҙендә ҡылыс, ә «ҡылыс» һүҙендә ҡыл бар. Билдәле, был беҙҙең төрки һүҙе. Әммә урыҫтар ҡылысты сабля ла, шашка ла, ти. Минеңсә, был ике һүҙ урыҫтарға беҙҙән, төркиҙәрҙән, кергән.

Йәйле-көҙлө, ашарға тәкә салыр булһа, атайым: «Малайҙар, сей ботаҡтан оҙон итеп шеш эшләгеҙ», – тип ҡушыр ине. Беҙ, уның ҡушыуын үтәп, оҙонлоғо ике-өс сирек самаһы сей, төҙ ҡайын ботағын әрсеп, осло итеп ослап килтереүгә, ул тәкәне һуйып, түш итен тиреһе менән тыш бейәләйендәй итеп киҫеп алып бирер ине. Шеш бит – осло ботаҡ, ә ите – шешлек! Шешке – шашка. Сәнсеү ҡоралы. Тимәк, урыҫ теленә был һүҙ ҙә беҙҙән кергән. Сабля һүҙе лә сап, сабыу, сабып ебәреү, итте сабып алыу мәғәнәһенә ялғау өҫтәлеп, үҙләштерелеп ингән. Сөнки урыҫ теленең аңлатмалы һүҙлегендә «сабля» һүҙенең аңлатмаһы юҡ.

Ятаған – төрөк ҡылысы. Исеме лә беҙҙә бик үк ныҡ тараламаған. Ә «меч», «шпага» һүҙҙәренә болашып булмай. Сөнки улар исемдәре менән дә, сығыштары һәм ҡулланылышы буйынса ла боронғо грек, Византия, Герман һәм сакстар ҡоралы. Боронғо римляндарҙа гладиаторҙар амфитеатрҙарҙа меңәрләгән кешеләр күҙәтеүе аҫтында бер аршин самаһы оҙонлоғонда ҡыҫҡа мечтар менән бер-береһен үлтергән. Барлыҡ һүрәттәре, тарихи яҙма мәғлүмәттәре, ташъяҙмалары быны дәлилләй.

Ҡылыстар менән алыш алымдарын беҙгә күберәк атайым Мөжәүир Ильясов һөйләп ҡалдырҙы. Күрәһең, мөғәллим кешегә малайҙарҙы әүрәтергә кәрәк булғандыр инде. Яҙ булһа, бөтә класс малайҙарына талдан юнып ҡылыс эшләп бирә лә (олораҡтары үҙҙәре эшләй) ҡылыс һуғышы алымдарын өйрәтә торғайны.

1930 йылда ул Ҡыҙыл Армияға саҡырыла. Украинала, Урта Азияла казак атлы корпусында хеҙмәт итә. Иң башта ябай ҡылыссы, эскадрон командиры ярҙамсыһы. Дәрәжәләре бәләкәй командирҙар мәктәбендә ул замандағы ҡоралдарҙы өйрәтеү уҡытыусыһы. Ҡылыс һуғышы алымдары, винтовка, максим пулеметы. Уның һөйләүҙәре буйынса, бөтәһе алты төрлө ҡылыс бар. Шуларҙың дүртәүһе – төрки, казак халыҡтарыныҡы. Төп ҡылыс – тартым, йәки тартма ҡылыс. Ни өсөн тартым? Сөнки ул ҡылыс, нигеҙҙә, дошманды сабырға, киҫергә тәғәйенләнгән. Ҡылыс менән сапҡанда үҙеңә тартып сапҡандар. Фәҙәттә, тартып сапһаң, ул яра сапҡан.

Ҡылыстарҙың икенсе төрө – һуҡма ҡылыс. Ул тартым ҡылыстан саҡ ҡына оҙонораҡ һәм ауырыраҡ. Сөнки уның башында оҙонлоғо 20 – 25 см тирәһе киңәйтелгән ере була. Ауырлығы, һәлмәклеге менән дошман ҡулындағы ҡылысты тайпылдыра һуғырға ярҙам иткән. Һуҡма ҡылыстың һуҡмаһы ябай ҡылыҫҡа ҡарағанда көслөрәк булған. Ләкин һәр нәмәнең самаһы була. Ауырлығы йыш һелтәүгә бер аҙ ҡамасаулаһа ла, меч тотҡан көнбайыш һуғышсыһынан өҫтөнлөгө булған. Сөнки ул, беренсенән, мечтан еңел, икенсенән, оҙонлоҡтары бер иш. Тартым сабыуға ла, һуҡма сабыуға ла һәм сәнсеүгә лә ҡулайлашҡан.

Билдәремде минең шул талдыра –
Туғай башлы ҡылыс бәйләһәм.
Аҡ ҡорбандар инәп салыр инем,
Тыуған ергә ҡайтып йәйләһәм.

Һуғышыу өсөн дә, атта йөрөгәндә лә иң уңайлыһы һәм еңеле – шешке. Шешке тар, тартым ҡылысынан әҙ генә ҡыҫҡараҡ, бик осло, өҫкә кәкрелеге ятаған менән ҡылыс араһында. Осо бик осло, осоноң аҫҡы ла, өҫкө лә беҙе үткерләнә. Һуғышсы шешке менән көйәк (кольчуга) аша сәнсә алған. Фәйрәт менән сапҡанда, көйәк дүңгәләген дә ҡырҡҡан. Еңеллеге лә өҫтөнлөк биргән.

Тимерлектә шешке һуҡканда уны ҡыҙҙырыуҙың айырым шарттары булған. Ҡорос етерлек кимәлдә ҡыҙҙымы-юҡмы икәнен тик бик оҫта тимерсе генә белгән. Фәҙәттә, аяҙ көндәге ҡояш төҫөнә еткергәнсе ҡыҙҙырғандар. Таш күмер булмаған. Шуға ла күмерҙе ҡарағастан, ул булмаһа, ҡайындан яндырғандар. Тимерлектә шешке һуғыу йырҙа ла сағылыш тапҡан.

Ҡоростан шешке һуҡтырҙым,
Карағастан булды күмере.
Фәбделдең улы Искәндәрҙең
Ҡыҫҡа ғына булды ғүмере.

Беҙгә әҙ билдәле һәм әҙ ҡулланылыш тапҡан ҡылыс – ятаған. Уның менән Госман империяһы һыбайлылары ҡоралланған. Ятаған – иң кәкре ҡылыс. Шешкенән киң, әммә иң ҡыҫҡа ҡылыс. Ятаған менән Кавказ халҡы ла ҡоралланған.

Ятаған менән бик оҫта ҡулланыу талап ителгән булһа кәрәк. Уның ныҡ кәкрелеге лә һелтәнгәндә дошманы ҡулындағы ҡылысты бәргесләргә ярҙам иткән булһа кәрәк. Еңел булғас, уның менән һелтәнеү ҙә күберәк булған. Тимәк, яралау мөмкинлеге лә артҡан. Шешке һығылмалы, эйелмәле булһа, ятаған уйнап тормаған, тимәк, тимере лә ҡалын булған.

Көнбайыш илдәре һуғышсылары ла ульяға алған ҡылыс, шешке, ятаған тотһалар ҙа, уларҙың үҙ ҡоралдары – шпага һәм меч. Шпага тар, оҙон, осло, тик сәнсеү ҡоралы. Уның менән сабып булмай. Осонан алып ярты аршин самаһы ике яғы ла үткерләнә. Фәҙәттә, йәйәүле ғәскәр ҡоралы, ә хәҙер спорт аренаһында ҡулланалар.

Меч – көнбайыш илдәрҙең һәм Рәсәй һуғышсыларының төп ҡоралы. Оҙон, киң, ике яғы ла үткер һәм осло. Уны ике ҡуллап һелтәгәндәр. Меч сапҡан, сәнскән. Меч та, нигеҙҙә, йәйәүле һуғышсы ҡоралы. Атта ул ҡулланылыш таба алмаған. Һыбайлы өсөн шешке, ҡылыс – төп ҡорал. Шулай ҙа меч рәүешендәге ҡылыстар көньяҡ Себер, көньяҡ Урал убаларынан археологик ҡаҙылмалар араһында ла осраған. Ә кәкре ҡылыстар Дәшт-Ҡыпсаҡ иле далаларындағы убаларҙа – Ҡобан, Тын, Днепр, Оло Иҙел ерҙәрендә осрай.

Беҙҙең ерҙәге убаларҙа меч кеүек ҡылыстарҙың осрауы йә яуҙарҙа улья – трофей итеп алынған, йәки халыҡтарҙың үҙ-ара ҡыҙыу алыш-биреш итеү һөҙөмтәһелер. Кәкре тартма йәки һуҡма ҡылыстар урыҫ, Византия ғәскәрҙәрендә лә булған, әммә улар йә трофей, йә алыш-биреш һөҙөмтәһендә кергәндер, тип фаразларға кәрәктер. Шулай ҙа мечтың да төрлөһө булған. Ҡыҫҡа мечь – ул гладиаторҙарҙыҡы. Мечь – ҡара-ҡаршы һуғыш ҡоралы. Палаш та саба, сәнсә торған ҡул ҡоралы. Әммә ул мечтан байтаҡ-ҡа оҙон, киң, нигеҙҙә, палаш менән ике ҡуллап һелтәнгәндәр. Уның тотҡаһы ла оҙон, ике ус тотмалы булған. Палашты ҡылыс кеүек билгә тағып йөрөмәгәндәр. Уның ҡыны ла оҙон, киң булыуы сәбәпле, арҡаға аҫып йөрөгәндәр. Палаш менән сакстар, нормандар, римлеләр ҡоралланған, һәм ул тик йәйәүле ғәскәр тарафынан ҡулланылған.

Хәнйәрҙәр

Көнкүреш ҡулланылышта, һунарҙа, һуғыш осрағында һәр халыҡтың үҙенә хас йөрөткән ҡоралы – хәнйәр булған. Хәнйәр, әгәр ҡылыс та булһа, ҡыны менән, ир-егеттең биленә уң яҡтан

тағылып йөрөтөлгән. Ҡыныныңҡ ҡайыш әлмәге бил ҡайышына кейҙерелгән булһа, тотҡаһы һәр саҡ уң ҡул усына ятышлы ғына текә торған. Күп осраҡта һунарсылар, һуғышсылар, уғрылар һәм ҡараҡтар ике хәнйәр йөрөтөр булған. Береһе билдә – ҡында, икенсеһен йомшаҡ ҡайыш, күн йә туҙға урап, итек ҡунысына тыҡҡандар. Күп ҡырҡыу ваҡиғаларҙа һунарсыны, һуғышсыны шул ҡуныстағы хәнйәр ҡотҡарған да инде. Сөнки уны ятҡан килеш дошманыңа һиҙҙермәй тартып алырға мөмкин булған. Ғөмүмән, ул һаҡ ҡоралы вазифаһын үтәгән.

Ҡуныстағы хәнйәр, ғәҙәттә, кәкре үк булмаған, сөнки тартып алған саҡта үтә кәкре тотҡарлыҡлы сыҡҡан.


Хәнйәр – ташланыу, һаҡланыу, ҡулланыу ҡоралы. Тормошта ул мал һуйғанда, ит, икмәк, башҡа нәмә киҫкәндә ҡулланылған. Шуның менән бергә, ул ирмен тигән ир-егеттең биҙәнеү, ғорурланыу, уға күркәмлек, минлек өҫтәп торған терәге лә, ярҙамсыһы ла, ышанысы ла булған. Хәнйәрҙең тотҡаһын, ҡынын көмөш, еҙ, һәр төрлө ҡайыш менән селтәрләп, ишеп, матурлағандар, бәләкәй суҡтар, мүлдергәләр таҡҡандар. Ҡынына, һабына хатта алтын бөртөктәре лә йәбештергәндәр.

Минең белеүемсә, нигеҙҙә алты төрлө хәнйәр бар:

1. Башҡорт хәнйәре.
2. Сиған хәнйәре.
3. Ҡаф хәнйәре.
4. Үзбәк хәнйәре.
5. Төрөк-фарсы хәнйәре.
6. Урыҫ әрмеһе ҡоралдарының штыктары.

Башҡорт хәнйәренең һабы башлыса тамыр, йәки мышы мөгөҙө айырсағын игәп эшләнгән. Уға турғай, йылан, шәшке башы фиғелен биргәндәр. Ул сағыштырмаса киң – 3,5 см самаһы. Бысаҡтың осо аҫ яҡтан өҫкә тартылһа, киреһенсә, өҫ яғы аҫҡа иңкәйеп ослана. Һап тотҡаһы шымартылған еҙ бармаҡса алға ла, артҡа ла иңкеш. Турғай башы – әпесе – үтмәле тишек. Уға ҡалын ҡайыштан мүлдергә бәйләнгән. Ул суҡса менән бөтә. Оҙонлоғо – 22 – 26 см. Башҡорт хәнйәренең икенсе төрөнөң оҙонлоғо 22 – 24 см. Әммә ул күпкә тар. Киңлеге 2,5 см-ҙан артмай. Осо кәкре үк түгел, осло. Мин күргән ундай хәнйәрҙәрҙең күбеһенең һабы ҡыр кәзәһенең тояғынан яһалған ине. Шуларҙың береһен һаҡлау күңелемә назим.

Күңелгә ҡурҡыныс һәм сирҡаныс һалғаны – сиған бысағы. Ул бик үткер, бик тар һәм ярайһы оҙон: 23 – 26 см-ға етә. Тәнгә үҙенән-үҙе керәм, батам, тип торған кеүек. Һабы – сусҡа, йәки һарыҡ тояғының ҡаҡ һөйәге. Бик йоҡа күн менән уралған. Тотҡаһы, арҡырыһы тимерҙән, алюминийҙан игәп эшләнгән. Ҡыны юҡ, һәр саҡ туҙ, ҡайыш менән уратып, ҡуныста йөрөтәләр.



1. Турғай башлы, һөйәк һаплы башҡорт хәнйәре.
2. Кәзә тояҡ һаплы сәске-ҡырҡма башҡорт хәнйәре.
3. Сиған хәнйәре. Сәнске.
4. Ҡаф хәнйәре.
5. Штык (автомат АК). Мосин штык-винтовкаһы.
6. Төрөк-фарсы хәнйәре. Шәшке башлы.
7. Үзбәк хәнйәре.

Ҡаф хәнйәре

Ул, нигеҙҙә, Кавказ халҡының боронғо хәнйәре. Тимере ҡалын, башҡа бысаҡтарға ҡарағанда ауыр. Осо арҡа яғынан 3 – 4 см игәүле. Һабы аҫҡа, бысағы өҫкә кәкрерәк. Бик үк йыуан булмаған һөйәктәрҙе яра сабып була. Ҡыны ла кәкрерәк, һәр төрлө орнаментлы, биҙәүле. Бысаҡ тимере ҡалын, киңлеге 4,5 – 5 см-ға етә. Һабы менән бысағы тотош тимер, ләкин һап ике яҡлап өрөк йә башҡа ҡаты ағас менән синәлгән. Ҡул шыумаҫҡа, тотҡа аҫҡы яғынан ғына сығып тора. Бысаҡтың өҫкө яғындағы игәүе һөйәк бысырға тәғәйенләнгән. Ҡайһы саҡта бығауҙы ла игәп өҙгәндәр. Бысаҡ ярайһы үк кәкре, шуға ла ҡыны киң.

Үзбәк хәнйәре

Үзбәк хәнйәре тышкы яктан ғәҙәти аш-һыу бысағынан әллә ни айырылмай. Төп үҙенсәлеге шул: һабы еңел ағастан, һөйәктән эшләнеп, бысаҡ өлөшөнән һап өлөшө байтаҡҡа еңел. Ит, емеш-еләк һәм башҡа нәмәләр турарға бик ҡулай. Тотҡаһы аҫҡы яктан ғына. Ғәҙәттә, ул киң түгел, әммә бик тә ҡаты ҡара ҡоростан эшләнә. Уны үткерләү еңел түгел. Ә бер үткерләп алһаң, оҙаҡ ваҡыт тупаҫланмай. Үзбәк хәнйәре, киҫеү, сәнсеү менән бергә, йыраҡтан, 20 – 25 метр йәки 10–12 һуҡай ерҙән бәреп сәнсеү, яралау өсөн дә ҡулланылған. Уның бысаҡ өлөшө, һап өлөшөнән ике тапҡыр ауыр булыуы хәнйәр менән дошманға көслө итеп бәргәндә һәр саҡ алдан йөрөргә булышлыҡ иткән. Ләкин хәнйәр менән бәреп сәнсеү бик ҙур оҫталыҡ һәм мәргәнлек талап иткән.

Штык

Сергей Иванович Ожегов үҙенең «Толковый словарь русского языка» китабында штыкка ошондай аңлатмай бирә: «Штык – колющее оружие, прикрепляемое на конец ствола винтовки, ружья. Граненый штык. Клинковый штык. Отъемный и неотъемный штык». Граненый штык – ҡырлы штык – ул боронғо төркиҙәрҙең беҙ һөңгөһөнөң – һалдау һөңгөһөнөң өлгөһө. Оҙонлоғо 50 – 55 см. Бик осло. Һыҙма мылтыҡтың осона кейҙерелә. Кәрәк саҡта мылтыҡ көбәге буйлап киреғә ҡуйыла. Ҡул һуғышының төп ҡоралы. Нигеҙҙә, Мосин винтовкаһы менән бергә була. Әммә һуңғы осорҙа, бигерәк тә 1945 йылдан һуң, Калашников автоматы сыҡҡас, уға штык итеп клинковый штык ҡуялар. Был штык Симонов винтовкаһына ла ҡулайлаштырыла.

Клинковый штык – үзбәк хәнйәренең баҫмаһы, әммә осо бер яктан тартыңҡырап түгел, ә ике яктан да тигеҙ итеп уртаса ослана. Көбәктән алмалы. Кәрәк саҡта ҡынына тығып билгә лә элә һең. Клинковый штык – урыҫ хәнйәре. Әрмелә беҙ уны билдә йөрөттөк.

Төрөк-фарсы хәнйәре

Төрөк-фарсы хәнйәре бик һығылмалы, бөгөлмәле. Тимере ҡаты, ул һабы менән тоташ, уға кейҙерелеп ултыртылмаған. Һабы һырлап ороп йәки башҡа төрлө ҡаты ағастан эшләнә. Ике яҡлап синәлә, шымартыла. Бысағы бик үткер, осо кәкре, сиған хәнйәре кеүек йоҡа, бәреп, ҡалын таҡтаға сәнсһең, һабы ике яҡҡа ҡалтырап зыңлап тора. Тимәк, ҡоросо – булат иретмәле. Бысағы сағыштырмаса киң, уртаһынан оҙон һыҙмаһы бар. Тотҡаһы ике яҡлап тура, остары йомрайтып эшләнгән ялтыр еҙҙән тора.

Фарсы хәнйәре

Фарсы хәнйәренең һабы күпселек осраҡта йылан башлы. Ә төрөктәрҙең хәнйәре һабы аҫ, ләтсә, шәшке башлы. Күрәһең, ҡасандыр был хайуандар фарсы һәм төрөк халҡының мифологияһында билдәле бер урын тотҡан.


Беҙҙең көнсығыш Табын ҡәбиләһе ырыуҙарының боронғо мифик хайуандары ла бар. Улар бөркөт һәм йылан. Ҡылыс, хәнйәр һаптарында был йәндәрҙең башы һәр саҡ ғибәрәт.

Айбалта

Кешелек тарихының һәр үҫеш меңйыллығына берәр ҡорал беркетһәк һәм һәр ҡоралдың киң ҡулланыу осорона ла бер нисә быуат бирһәк, айбалта ҡоралдар араһында йәше буйынса нисәнсе урында торор ине икән? Һис шикһеҙ, кешенең кеше булып аяғына баҫа башлағас, ташланыу, һөжүм итеү һәм һаҡланыу ҡоралының тәүгеһе – таш. Ябай, йомро, ҡырлы, йә һупалаҡ таш! Унан һуң кеше ҡулына төбөр суҡмар алғандыр. Ташты, ҡаты ағас оронон сей тире менән нәпҡа бәйләп, киҫтән эшләп алғандыр. Ҡулай бысаҡ, һөңгө осо... Унан тәүге айбалта булғандыр. Айбалтанан һуң уҡ-һаҙаҡтар – тәүге утлы ҡоралдар. Айбалтаны эшләү, уны ҡулланыу бынан мең йылдан да элек башланғандыр, тигән фараздамын. Айбалта – кеше һәм һуғыш атының тәнен яра саба торған бик ҡурҡыныс ҡорал. Айбалта – ташланыу ҙа, дошмандан һаҡланыу ҙа ҡоралы. Уның тышҡы төҙөлөшө төрлө халыҡтарҙа төрлө фигелле. Оҙон һаплы, еңел, үткер бәләкәй генә балта. Уның менән дошмандың торҡаһын вата һуғыу, көйәген яра сабыу, атын сафтан сығарыу ауыр булмаған. Ҡурҡыныс ҡорал.

Төрки һәм фарсы халыҡтарының айбалтаһы биш-туғыҙ көнлөк яңы тыуған айҙы хәтерләткән. Беҙ бала ваҡытта – 50-се йылдарҙа – беҙҙең төбәктә алтын йыуыу зәхмәтле яңы көс менән ҡуҙғалып китте. Шул боронғо айбалталарҙың береһен атайым алтын йыуыусыларҙан алып ҡайтып, бик оҙаҡ игәп, үткерләгәндән һуң, ағас ялғашта билмән ите турау өсөн ҡулайлаштырып алған ине. Тыуған айҙы хәтерләтә ине беҙ яғы – үткер яғы.

Төйтәһе оҙон түгел, һап ҡуйырға ҙур булмаған тишеге булды. Айҙы хәтерләткәс, уны халыҡ телендә айбалта тип атағандар. Ләкин тарихи сығанаҡтарҙа мороно алғараҡ сығып торған, ә арты һуҙмалы ла, хәҙерге балталарҙы хәтерләткәне булған. Уны төрлө итеп ҡойғандар. Мәҫәлән, Киев Русендә, Скандинавия, Герман халыҡтарының балтаһының ҡырҡма яғы оҙон булмаған, ә һуҡма яғы һабы өҫтөнән байтаҡҡа ҡалҡып торған.



Балтаның ҡырҡма яғы, ғәҙәттә, тышҡа көмрө. Балтаның ҡырҡмаһын «беҙ» ҙә, «кейәк» тә тип атағандар. Ҡайһы бер ерҙә «секир» – сәкер. Урыҫ теленә ул «секира» булып күсерелгән.

Һүрәттәге 4-се балта Киев Русе ерҙәрендә табылһа ла, формаһы нормандарҙан күсерелгән, тигән фекерҙә тарихсы-археологтар. Уның беҙ өлөшө ҡыҫҡа, 8–10 см, әммә төйтәһе һабынан өҫкә лә 8–10 см тиклем сығып торған. Күрәһең, ул уңлы-һуллы һелтәнеп һуғышыу өсөн уңайлы.

Был скандинав-славян-герман балтаһы ла төрлө-төрлө рәүештә ҡойолған. Һуғыш балталары хәҙерге ағас эшкәртеүҙә, утын ярыуҙа ҡулланылған балтанан байтаҡҡа йоҡа ла, бәләкәй ҙә булған, сөнки еңел булыуы, йөрөтөргә лә, һыңар ҡул менән атта ла, йәйәүле булғанда ла һуғышыу өсөн уңайлы булыуы шарт. Шулай ҙа йәйәүле ғәскәр һуғышсыһына тәғәйене бер ни тиклем ҙур ҙа, ауырыраҡ та була. Төркиҙәрҙә айбалта менән һөңгөнөң берләшкән рәүеше лә осраған. Ғәҙәттәге айбалтаның һабы ерҙән алып һуғышсының күкрәгенә тиклем оҙонлоҡта, йәки 110–135 см булһа, һөңгө-айбалтала оҙонлоғо беҙ һөңгө, ҡармау һөңгөнән әҙ генә ҡыҫҡараҡ та, йыуныраҡ та булған, сөнки уның менән сәнсеп тә, һелтәп сабып та булған.

Айбалта-һөңгөнөң беҙ ерен дә һәм уға кейҙереп йөрөткән күн тыҡманы ла «кейәк» тип атағандар. Был һөңгөнөң һабында ҡа-

йыш менән уратылған ике тотҡа, һуңғыһының осонда мүлдергә булған. Айбалтаның йөҙөндә бер йә ике тишек тишелгән, был кейәкте – чехолды бәйләр өсөн хеҙмәт иткән. Бәләкәй балталар күберәк һыбайлылар ҡулында булһа, ҙурҙары йәйәүле ғәскәрҙә булған. Әммә бәләкәй балтаның һабы оҙонораҡ була. Был ҡорал нигеҙҙә – ташланыу ҡоралы (оружие нападения).

Ян һәм уҡ (уҡ-һаҙаҡ)

Яҡшы аттка менеп, ҡулына алып
Уҡ-һаҙаккай тигән ҡоралын,
Аямаған йәнен, түккән ҡанын,
Һис бирмәгән башҡорт Уралын.

Был йырҙы тыңлау менән, күҙ алдыма ялбыр яллы, тулы ҡойроҡло, көмрө танаулы ярһыу ҡара ҡонан өҫтөндә күҙ ҡарашын алға төбәгән, ҡыҙыу, дыуамалыраҡ йәш ирҙең йән-фарманға сабып барған килеш өҙәңгеһенә тора биреп төҙәп, шыйлатып уҡ артынан уҡ атып барғаны күҙ алдына баҫа.

Һуғыш яланы түбә-түпһәле, соҡор-саҡыр ваҡ ағаслыҡтарҙан тороуға ҡарамаҫтан, арғымағын ул, теҙгенен тартмайынса, кәүҙәһенең боролошо менән генә бара. Арғымағы ла өйрәнгән, хужаһы боттары менән ҡыҫып, ҡайһы яҡҡа иңкәйһә, ул да шул яҡҡа борола. Һуғышсының һул ҡулында аршин ярым оҙонлоғонда ян, уң ҡулы менән ул һаҙағынан берәм-берәм уҡтарын сығара.

Ян һәм уҡ – кешелек аңы-аҡылы уйлап тапҡан боронғо һәм иң оҙаҡ ҡулланылған атыу ҡоралы. Ян һәм уҡ бик борон да, бынан 12–13 мең йыл әлек үк кеше тормошонда ҡулланылыш таба башлап, 1812 йылда һәм унан һуңғараҡ та ҡулланыуҙа була әле. Тәүҙә ул һунар өсөн генә ҡулланылһа, аҙаҡ һуғыш ҡоралына ла әүерелә. Ян-йәйә һәм уҡты ҡытайҙар, төрки халыҡтар тәүҙә ҡорал иткәндер, тигән фекерҙәмен.


Ян һәм уҡты ҡулланғас, Атилла, Бумын ҡаған, Сыңғыҙхан, ярты Ер шарын баҫып алып, иң көслө һәм иң ҙур империя төҙөй алалар. Башҡа халыҡтарҙа ян һәм уҡ әле ҡорал да булмай. Ян һәм уҡ ҡулланыу һуғыш осоронда Бумын ҡағанға ла, Атиллаға ла, Сыңғыҙханға ла, ҡытайҙарға ла яңынан-яңы һуғыш алымдары ҡулланыуға килтергән. Ҡытайҙарҙың әрмеһе, мәҫәлән, күпселек ҡылыс һәм ян-уҡ менән ҡоралланған йәйәүле һуғышсыларҙан торған. Уларҙың һуғыш алымы дошманға ҙур тиҙлек менән ташланыу түгел, ә ҡаршы килгән дошманды көтөп ятып, яҡын ара ҡалғас, уға йөҙәр меңләгән уҡ ямғыры яуҙырыу. Шулай тиеп, дошманды һирәгәйтеп, яралап, бутап алғас, ҡылыс менән һөжүмгә күскәндәр. Хәҙерге хәрби тел менән әйткәндә, иң алда артподготовка үткәргәндәр. Төрки халыҡтарҙың йәйәүле ғәскәре булма-

ған. Улар дошманға ҙур ҡойон булып ҡапыл ташланып, ҡылыс һуғышында ҡыйратҡандар. Йә булмаһа, әҙерәк көс менән еңел кавалерия ҡулланып, дошмандың өҫтөнә уҡ яуҙырғандар ҙа ҡасыу сәхнәһен күрһәткәндәр. Еңеүгә сарсаған дошман «ҡасыусыларҙы» ҡыуа килеп, төп көстәр ҡорған «тоҡ» ауыҙынан эскә кергәндәрен һиҙмәй ҙә ҡалғандар. «Тоҡ»тоң торошо «Ш» һәм «П» хәрефтәрен хәтерләткән. «Тоҡ» ауыҙы ябылып, еңеүселәрҙе ҡасыусылар арттан да, ҡабырғаларҙан да, алдан да турарға керешкәндәр.

Билдәле, илдә, төрлө ҡитғала, төрлө халыҡ төрлө быуатта төрлөсә эшләгәндер уҡ-янды. Әммә мин беҙҙә, Урал алдында (беҙ Урал алдында йәшәйбеҙ, сөнки ҡояш беҙҙән, көнсығыштан, сыға), йәки Учалы районында йәшәгән Табын ҡәбиләһе кешеләренең уҡ-янды эшләү алымдары тураһында яҙмаҡсымын.

Минең атайым һәм инәйем ауыл уҡытыусылары ине. Һуғыштан һуң уҡытыусыларҙы райондың төрлө ауылдарына ебәреп эшләттеләр. Нихайәт, 1950 йылда ата-әсәмдең тыуған ауылдары Ҡорамаға ҡайтарҙылар.

Атайым йорт халғанға тиклем тороршоҡ өй булмағас, беҙҙең ғаилә инәйемдең олатаһы 1930 йылда кулак тип һөргөнгә оҙатылғас, мәктәп итеп ҡулланылған йорттоң ике бүлмәһендә йәшәнек. Өс бүлмәһендә мәктәп кластары ине. Өй ҡыйығы аҫтында бик күп күгәрсен йәшәр ине. Берҙән-бер көн атайым ағайым менән миңә: «Малайҙар, ҡыйыҡ аҫтында күгәрсен тиҙәге бик күп, көрәк алып, тишектән шуларҙы ергә ташлағыҙ, колхоз ашлама итеп ала», – тине. Ағай менән икәүләп эшкә тотондоҡ. Ҡыйыҡтың кеше керә алмаҫтай мөйөшөндә тиҙәк күп өйөлгән ине. Икәүләп шуны аҡтара торғас, ниндәйҙер оҙон таҡта ҡумта килеп сыҡты. Эсенән нимәлер ҡыҫылып күренгән кеүек. Тиҙәк-балсыҡтан таҙартып, тартҡыслай торғас, ҡумтаның ҡапҡасы асылып китте. Эсенән ҙур туҙ киҫәгенә төрөлгән ян, еҙ әпесле, тотҡалы хәнйәр, боронғо яҙыулы китап, ике уҡ, тишекле тар ҡаты ҡалай, ат йүгәненең ауыҙлығы, ике еҙ өҙәңге, орден Святой Анны килеп сыҡты. Ул саҡта миңә – туғыҙ, ағайыма ун ике йәш ине. Ағай менән кәңәшләшеп, атайға нимәне күрһәтергә, нимәне күрһәтмәҫкә тигән ҡарар сығарҙыҡ. Хәнйәрҙе, оҙон ҡалайҙы, ике уҡ башын (ағастары серегән ине), ике өҙәңгене, йүгән ауыҙлығын йәшерҙек. Янды, орденды, иҫке китапты тоҡҡа һалып түбәнгә төшөрҙөк. Табылған әйберҙәрҙе ҡарағас, атайым: «Берәүгә лә, шундай әйберҙәр таптыҡ, тип һөйләп йөрөмәгеҙ», – тип ҡаты киҫәтте. Бигерәк тә орден тураһында әсәйем менән оҙаҡ кәңәшләштеләр. Күрәһең, батша орденын һаҡлай, тигән хәбәрҙән ҡурҡҡандарҙыр. Шулай ҙа атайҙың йыйған урынынан табып, мин ул орденды ике тапҡыр малайҙар араһына тағып сыҡтым. Ике тапҡыр ағайым уны минән талап алып өйгә керетте. Ул орденды



мин башҡа күрмәнем. Табылған әйберҙәрҙең яҙмышы түбәндәгесә булды.

Ҡарағош башына оҡшаған еҙ әпесле, тотҡалы хәнйәрҙе ағайым 1974 йылдарға тиклем кәрәк саҡта биләндә йөрөттө. Ул һунарсы ине. Күрше-күләнгә мал һуйышырға ла шул хәнйәрҙе алып бара ине. Бик үткер, йылдар буйы ҡайраҡ күрмәне, тиер ине. Күрәһең, булат ҡоросо булғандыр. Ҡайҙалыр ҡырҙа ҡынынан һурылып төшөп ҡалған.

Оҙон, тар ҡаты ҡалай нимә ине? Ситтәренән тишектәре, ә дүрт яғынан киң генә яҫма ҡайыш һыймалы ҡулҡылды (скоба) бар ине. Уны атайым 50-се йылдарҙа колхоздың РКК аттарына комиссия ағзаһы, һунарсы, йылҡысы Сәйфулла Хәйерзаманов ағайға бирҙе. «Сәйфулла, бына боронғо маңғайлыҡ. Ал, бәлки, кәрәк булыр», – тине. Сәйфулла ағай уны йүгәненә тығып йөрөнө. Ҡалай аттың маңлайын, моронона тиклем яба ине.

Боронғо китап, йүгән ауыҙлығының да яҙмышын хәтерләмәйем. Еҙ өҙәңгеләр атайым келәтендә оҙаҡ һаҡланды. Унан ағайҙың һарайына күсте. Әгәр шул булһа, бересе һаман ҡайҙалыр тора, буғай, минең һарайҙа ике уҡ башы. Беҙ уны яңы уҡтарға ҡуйып, бер нисә йыл атышып уйнап йөрөнөк. Уларҙың рәүешен хәтерләһәм дә, аҙаҡ ҡайҙа булғандарын хәтерләмәйем. Янды атайым ташламаны ла, беҙҙең ҡулға ла бирмәне. Ул һәр саҡ «комод» тигән өй һандығының артында һөйәүле торҙо.

Барлыҡ төҫө менән ян ҡарайып бөткән ине. Атайым һөйләгәнсә, өлөштәре түбәндәгесә ине.

Алда һәм Ҡолас – яндың төп өлөштәре. Алғыһы – алда. Ҡолас – уртала. Кибет – иң аҫта. Ул ҡыҫҡа. Кереште тартҡан саҡта кибет – ҡаршы көс. Тәтене ысҡындырғас, алда менән ҡоласты кире этәреүсе, кире урынына ҡайтарыусы. Урыҫ һүҙе квита кибеттән килеп сыҡҡан. Немец йәки англо-сакстар телендә кибет – рессор. Рессор ҡуйылған еңел арбаны ла урыҫтар кибитка тип атағандар бит.

Яндың дөйөм оҙонлоғо – 1 метр 20 см самаһы. Ул өс ҡатлы юның, бер-береһенә һалынған аҫас киҫәктәренән тора ине. Иң тыштағыһының тышы йомро килеш. Эс яғы шымартылып юнланған. Сөнки шуның кеүек үк икенсе ҡаты аҫас юнма уға беркетелгән эс яҡтан. Әммә уның ике яғы ла тигеҙ итеп юнланған. Икеһенең дә ике яҡтан да остары олайып, бергә һығылып, өй кәзәһенең мөйөҙөнә керетелгән ине. Өсөнсө ҡаты ҡыҫҡа 75 – 80 см булыр. Был өлөшө лә беренсе ҡат кеүек үк. Тигеҙ юнланған яғы икенсе ҡатҡа беркетелгән. Ә тышҡы йомро яғы ике яҡтан – өс ҡырлы итеп бик оҫталап юнылған.

Аҫтарҙың тышҡы икеһе муйыл булып, эскеһе – ҡыҫҡаһы – ҡайын ине. Мин 4-се класта уҡығанда атайым ул янды дәрескә керетеп, уның төҙөлөшөн һәм ҡулланылышын беҙгә һөйләй ине. Яҙ буһа, беҙгә, малайҙарға, «Буҡты шар» тигән шырлыҡтан тал, муйыл килтерергә ҡуша ла, унан һәр беребеҙгә ян эшләп бирә ине. Боронғо яндың өс ҡаты ла бер-береһенә балауыҙ кеүек ҡара-һары елем менән йәбештерелеп, тыштан бик таҙа, тигеҙ туҙ менән ураған. Туҙ тышынан ҡайыш менән бик тығыҙ итеп уратылып нығытылған. Уҡ һала торған ере ҡалын ҡайыш менән өҫтән уратылған. Тотҡа урынында уҡ ятмалы ярыҡ та бар. Тәтегәсе – кереше бер метр самаһы. Ул ат ҡойроғоноң оҙон ҡылдарынан бик тығыҙ итеп икенән ишелгән. Тәтегәс – кереш ҡарағас сайыры һәм ҡайын туҙы һағыҙы иретмәһендә тотолған. Тәтегәстең ике яҡ башы ла ҡайыш әлмәккә бәйләнгән. Ә ҡайыш әлмәкте яндың осондағы мөйөҙгә кейҙергәс, ян аҫтарын бөгә биреп, икенсе осон да икенсе мөйөҙгә кейҙергәндәр.

Тәтегәс – уны тәте тип тә йөрөткәндәр. Беҙҙең Табын Барын яугирҙары, нигеҙҙә, тик ат ҡойроғоноң оҙон ҡылынан үрелгән тәте йөрөткән. Уға теләһә ниндәй йылҡының ҡылы ярамаған. Ниңәлер айғыр малыныҡын түгел, ә бейә малының ҡылына өҫтөнлөк биргәндәр. Һәм ул һис шикһеҙ ете йәштән оло булырға тейеш булмаған. Бейәнең төҫө лә әһәмиәткә әйә булған. Иң яҡшы ҡыл аҡ бейәлә, унан күк һары саптар, ерән туры һәм һуңғыһы ҡара бейә ҡылы иҫәпләнгән. Беҙ күргән яндың тәтегәсе урталай өҙәк ине, тик мөйөҙҙә ҡороп ярылып бөткән ҡайыш әлмәктәр генә ике яҡта һәлберәп торор булды.

Хайуандарҙың физиологияһы менән бөтөнләй таныш түгел ҡайһы бер авторҙар яндың керешен бүре тарамышынан да, һарыҡ эсәгенән дә, ат-ыйыр малы тарамышынан да «эшләп» ҡуялар! Белгән кешегә был ижадсылар яҙыуы көлкө генә.

Беренсенән, меңәрләгән ғәскәрҙе ҡоралландырыу өсөн нисә мең бүре тоторға кәрәк? Икенсенән, бүренең, эттең, төлкөнөң, бик наҡлыҡ менән һыҙырғанда, тәпәйе өҫтөнән сығанаҡ быуынына тиклем аралыҡта ни бары 20 – 25 см тарамыш алып була. Бер янға бер метр тарамыш кәрәк.


Тарамыш кипһә, ҡата, бөгәрләнә. Уны себен ашай, ҡортлай, микробтар серетеп, юҡҡа сыға. Практик яҡтан тарамыш тәте өсөн бөтөнләйгә яраҡһыҙ. Уны шиғырҙа ғына яҙып була. Тәтегәсте беҙҙең Табын Барын олатайҙары йә ҡылдан, һабаҡлыҡтан эшләгәндәр. Һабаҡлыҡ нимә ул? Ул – тегенә торған еп. Тик уны айырым ваҡытта һәм бик ентекләп илəп, тетеп эшләгәндәр.

Йүнәтә йә ҡалып

Йүнәтә – һабаҡты, йәйәне, янды үҙ фиғеленә килтереп тарта торған йә таҡта, йә сатрашлап ҡағылған ҡорамал. Уны, нигеҙҙə, ҡарағастан йә ҡайындан эшләгәндәр. Оҙонлоғо ике аршин, ə киңлеге бер аршин, йә киңлеге бер аршин, йә əҙ генə оҙонораҡ, киңерәк итеп яһағандар.

Бөгөлмəгəн əҙернəне йүнəтəгə һалып, уның арҡыры ағастарына ҡағылған ҡарағас сөйҙəр араһына һалып, һаҙаҡҡа, йəйəгə, янға рəүеш биргəндəр. Йүнəтə нисек эшлəнһə, һаҙаҡтың да рəүеше шуға буйһонған.

Йəйəгə ҡарап, ғəҙəттə, янсының исемен əйткəндəр. Бер йүнəтəлə ике-өс һəм унан да күберәк йəйə бөгə алғандар. Йүнəтəнең ҡаттарының күплеге һəм бөгə торған ҡарағас сөйҙəрҙең йыуанлығы, оҙонлоғо бының тəьмин иткəн, сөнки һаҙаҡтарҙы ҡат-ҡат итеп тə һалып булған. Йəйə кибеп, йə кибə бирəп, үҙ фиғелен алғас, уны тағы ла бөгə бирəп, ике осондағы мөйөҙҙəргə тəтегес кейҙергəндəр. Һуғышсы эйəр муҡсаһында һаҡлыҡҡа унлаған тəте йөрөткəн. Улар оҙонлоҡтары менəн дə бер-береһенəн айырылған. Сөнки йəйə кибə килə, уның ҡоршайыуы ла ҙурайған. Тимəк, кереш ҡатыланған.



Йүнәтә һүҙенә аңлатма биреү урынлылыр. Беҙҙә, Барын Табында, Ҡара Табында, берәй нәмәне йә эшләп, йә әҙерләп биреүҙе, йүнәтеп биреү, тиҙәр. Тимәк, һаҙаҡты бөгөп эшләп биреү йүнәтеп биреүҙе аңлатҡан. Ә ҡорамалын йүнәтә, тигәндәр. Малай ваҡытта йүнәтәнең нимә икәнен ишетһәк тә, күреп үҫмәгәс, студент йылдарында һораша-һораша, ул ҡоралдың нимә булыуын һәм рәүешен аяҡҡа баҫтырырға мөмкинселек булды.

Һөйәк башлы ҡыу йәйә...
Тартам, тиеп тарталмаһам,
Миңә хурлыҡ!
Тартҡан саҡта сатырлап һыныр булһаң,
Билдәле, ул ваҡытта һиңә хурлыҡ!

Бына нисек итеп һөйләшкән уҡсылар йәйәләре менән.

Уҡ

Ҡанһыҙ ҡон ҡайтмаҫ,
Яныҡыҙ уҡ атмаҫ!


Эйе, уҡһыҙ ян уйынсыҡ торошло! Һәр һаҙаҡтың, йәйәнең, яндың бөгөлөш тәрәнлегенә ҡарап, уҡтарҙың оҙонлоғо билдәләнгән. Дөрөҫөрәге, һәр йүнәтәнең үҙ уҡтары булған, оҙонлоғо буйынса, сөнки тәтенән – керештән тотҡалағы уҡ уяһына тиклем ара йүнәтәнең эшләнешенә бәйле була.

Уҡтарҙың ҡулланылышы һәм исемдәре уҡ башаҡтарына бәйле: ҡырма-ҡырҡма башаҡ, һыҙма башаҡ, беҙ башаҡ, тупай башаҡ, сыраҡ башаҡ, төрмә башаҡ. Башаҡтарҙың исеменә ҡарап, уҡтар ҙа ҡырма уҡ, һыҙма уҡ, беҙ баш уҡ, тупай йәки күкәй уҡ, төрмә уҡ, сыраҡ уҡ тип аталған.

Уҡтарҙың барыһы ла тиерлек керештең – тәтенең өстән ике өлөшө оҙонлоғонда була. Тик күкәй башаҡлы тупай уҡ ҡына бер аҙ ҡыҫҡараҡ була. Һәр уҡтың ҡулланылышы йөҙлөктөң йәки алайҙың хәрби бурысына ҡарап ҡулланылған.

Ҡырҡма уҡ менән көйәк кеймәгән йәйәүле һәм атлы ғәскәргә ҡаршы барғанда ла һәм ҡыуғында ла атҡандар. Ул ҙур ҡырҡма яра ҡалдырған. Башаҡ бите йыйырсыҡтары тыштан эскә түгел, киренсә, эстән, уртанан ситкә ярылған. Бындай башаҡ тәнгә кергәндә еңелерәк үткән, ә һурып алғанда йыртма яра ҡалдырған. Тимәк, ҡан күберәк аҡҡан. Башаҡ уҡтың да тәғәйенләнеше шул уҡ.

Беҙ уҡ һәм һыҙма уҡ менән ҡыл һайман, көйәк кейгән һуғышсыға атҡандар. Сөнки уларға тимер дүңгәләктәрҙән торған кейем әллә ни ҙур ҡаршылыҡ булмаған. Дошман тәненә дүңгәләк аша еңел кергән. Тупай башаҡлы күкәй уҡ, сыраҡ уҡ, диуарҙарҙы ҡа-



маҕанда, уларҙы яндырып өсөн ҡулланылған. Хәҙерге зажигательный снаряд була инде. Башҡорттар Азов һәм Төньяҡ һуғыштарында был уҡтарҙы бик киң ҡулланғандар. 1812–1814 йылғы һуғыштарҙа ла Германияның, Австрияның, Франциянының күп замоктарын сыраҡ һәм тупай уҡтар яндырған. Уҡ башына ыҫмалалы етен, баҡта, мүк, йөн ҡыҫтырып, ут төртөп атҡандар.

Төрлө-төрлө осло уҡтарҙан, һөңгөләрҙән, ҡылыстарҙан йәки мечтарҙан һуғышсыларҙы һаҡлау өсөн төрлө-төрлө алымдар уйлап тапҡандар. Әле тимер иретеп, уҡ, һөңгө баштары, ҡылыстар, хәнйәр бысаҡтар уйлап табылһа ла, һаҡланыу ҡоралы булған тимер күлдәктәр бер ни тиклем һуңлабыраҡ ҡулланыла башлай. Иң алда ул, әлбиттә, ҡалын, ҡаты өҫ кейемендә ҡулланыу табыла. Суртан тотор өсөн, ҡылдан һиртмәк, йүкәнән сабата, ат септәһе, һабаҡтыҡтан, эре булһа ла, ау, йылым үрергә өйрәнгәс, кешеләр, ҡылыстан һаҡланыу өсөн, ат ҡылынан һайман үргәндәр. Иң алда ат ҡойроғо ялынан алынған ҡылдан эре һәм бик йым итеп сасаҡ бауҙар ишелгән. Ҡыл сасаҡбау ни тиклем йыуан һәм йым булһа, ул шул тиклем яҡшы һаналған. Ләкин һайманға тәғәйенләнгән ҡыл сасаҡ-бауҙарҙың артыҡ йыуан булыуы ла хуш күрелмәгән. Йыуан ҡыл сасаҡ-бәйҙәр, үрмә күлдәктең муйын, ҡулбаш, ең, арҡа тирәләренә тура килтереп үрелгән. Ҡыл һаймандар Атилла, боронғо төрки алтайлылар, ҡараиттар, бәжәнәктәр, хазарҙар, һундар тарафынан ҡулланылған. Был халыҡтарҙың ғәскәрҙәре, нигеҙҙә, тик һыбайлыларҙан торғанлыҡтан, ҡыл һаймандар һуңғы

ҡылтимер һ. б. көйәктәрҙән ҡайһы бер үҙенсәлектәре менән өҫтөн торған. Беренсенән, ул еңел булған, һуғышсының хәрәкәтен сикләмәгән. Бер ни тиклем ел-ямғырҙан һаҡлаған, тиҙ кейеп, тиҙ сисеп булған, туҙмаған, яланда йоҡлағанда аҫҡа ла, баш осона ла, өҫкә лә ябынып булған. Иң мөһиме: ниндәй көс менән сабыуға ҡарамаҫтан, тиҙ генә өҙөлөп, яҙылып, үтәнән-түтә киҫелеп бармаған. Һуғышсыны һаҡлау ҡеүәһе ярайһы уҡ юғары була. Ләкин ул осло уҡтан, һөңгөнән – сәнсеү ҡоралынан насар һаҡлаған. Ҡыл һаймандың бәйләнеш үрмә үрнәге беҙгә килеп етмәгән, әммә хәҙерге ваҡыттағы йөндән бәйләнгән күлдәк-свитерҙар, балаҫтар, һис шикһеҙ, уның үрнәгелер. Сыңғыҙхан, Батый хан ғәскәренең дә байтаҡ өлөшө ҡыл һайман кейгәндер, юғиһә, уның булмышы ауыҙ-тел ижадында, хәтирәләрҙә беҙгә килеп етмәҫ ине.

Төрлө ҡоралдарҙың, көнкүреш әйберҙәренең башҡорт халҡында булғанлығы һәм уларҙың ҡулланылышын уның исемдәре үк дәлилләй. Әгәр, мәҫәлән, башҡорт һуғышсыһында һайман тигән һаҡланыу ҡоралы булмаһа, уның һайман йәки бүтән төрлө исеме лә булмаҫ ине.

Һаймандың икенсе төрө – ҡайыш һайман, тире һайман. Уны үгеҙ тиреһенән теккәндәр. Фәҙәттә ҡыуғыр үгеҙ тиреһе ҡулланылған. Тире һайман, ҡыл һайман кеүек, баштан аша кейелмәгән. Ул бишмәт кеүек кейелеп, алғы яҡтан аҫас ҡаптырмалар менән эләктерелгән. Ҡыл һайман кеүек, тубыҡҡа тиклем булмаған. Тире-ҡайыш һайман ҡыҫҡараҡ. Арҡа, күкрәк, муйын, ҡулбаш тирәһенә ҡайыш менән тегеп, тағы ла бер ҡат ҡалын тире тегер булғандар. Еңе лә ҡыҫҡа булып, тире йөнө тышҡа ҡалдырылып тегелгән.

Тире һаймандың ыңғай яҡтары: ул ҡылыстан да, һөңгө, бысаҡтан да нығыраҡ һаҡлаған. Көс менән бик тура ярғанда ғына ҡырҡылған һәм ҡылыс беҙенең оҙонлоғо буйынса ла киҫелмәгән. Тимәк, яра ул тиклем тәрән дә булмаған. Ҡыйыш, ятҡартып сәнскәндә, сапҡанда, тәндән шыуып китер өсөн, тышҡа ҡаратып тегелгән йөндәре ярҙам иткән. Һөңгө осо, ҡылыс беҙе төкәлеп ҡалмаҫ өсөн, тире-ҡайыш һайманды мөмкин тиклем йөйһеҙ итеп тегергә лә кәрәк булған. Билдәле, ҡыл һәм тире-ҡайыш һайман тимер әҙ һәм әле эшкәртелмәгән төбәктәрҙә ҡулланылған, сөнки ҡылыс, һөңгө башы, уҡ башы ҡулай йәки тимер булғас, тимәк, тимер күлдәк йәше буйынса ҡыл, ҡайыш күлдәктән әллә ни оло ла, кесе лә түгелдер. Тире һуңғараҡ ҡайыш һаймандың кире яғы – уны йөрөтөүҙә лә булған. Ул ҡаты булғанлыҡтан, тоҡҡа йәки төрнәп эйәр дуғаһына бәйләп йөрөтөү ҙә ҙур уңайһыҙлыҡтар тыуҙырған. Ямғыр аҫтында ебегән, себен, бөжәк йыйылған, еҫе лә сыҡҡан. Ҡорола ҡатҡан, бөкләп һалып булмаған, һыуыҡта туңған. Ә һәр саҡ яуҙа йөрөгән, йылы күрмәгән һуғышсы өсөн был һайман ғазаптар, хатта ауырыуҙар ҙа килтергән.

Көйәк

Көйәк – төрлө алымдар менән эшләнгән, төрлө ваҡиғаһыуғыштарҙа ҡулланылған тимер күлдәк. Көйәк – оҙон, ҡыҫҡа еңле, еңһеҙ һәм башҡа фиғелдә эшләнгән. Дүңгәләк көйәк, ҡабырсаҡ көйәк, тәңкә көйәк, тип һөйләй ине батырҙар тураһында ҡәртнәйем.

Буласаҡ дошмандың ғәмәлдә ниндәй ҡорал менән ҡораллаңыуын алдан ебәрелгән разведчик-шымсылар хәбәр итеп торор булған. Дошман атлымы, йәйәүлеме, аралашмы, һуғыш алымдары – барыһы ла өйрәнелгән. Әгәр дошман йәйәүле, ҡалҡан һәм меч – шпага, һөңгө менән ҡоралланған булһа, тимәк, көйәк ваҡ дүңгәләктәрҙән торған. Сөнки дошман был осраҡта тик сәнсеү алымы ҡулланыр булған. Әгәр дошман уҡ яуҙырып, һуңынан ҡылыс сабыу алымына күсә икән, өҫтөнлөк ҡабырсаҡ, тәңкә көйәктеке булған. Көйәк тимерҙе ҡыҙҙырып, көйҙөрөп, унан сыбыҡтимер һуҙып, уны нәҙек оҙон икенсе тимергә урап, ҡапыл һыуға тығып һыуытып, һуңынан дүңгәләктәргә ҡырҡып бер-береһенә ялғап эшләнгән алым булған. Көйәк күлдәк ул көйҙөрөп эшләүҙе аңлатҡан. Шул уҡ кейем урыҫ телендә кольчуга тип атала. Кольчуга ла – төрки һүҙе. Ҡыл сығa, тимерсыбыҡ, сыбыҡтимер – былар бөтәһе лә бер мәғәнәне аңлата. Тимерҙән ҡыл сығарыу, тимерсыбыҡ яһау. Ҡыл сығa – ҡыл чыга – кольчуга. Урыҫта ул борон булмаған, сөнки уның исеме лә юҡ. Балтик буйында, хәҙерге Псков, Иваново, Владимир һәм башҡа ерҙәрендә тимер эшләү, тимер табыу юҡ кимәлендә була. Барлыҡ тимер ҡоралдар йә бәжәнәктәрҙән, һундарҙан, һуғыш менән килгән төркиҙәрҙән, йә рум, германдарҙан алынған. Фәҙәттә улар оҙон ауыр таҡта ҡалҡан, ике ҡырлы рум мечы һәм суҡмар менән ҡораллаңып, нигеҙҙә, барлыҡ ғәскәре йәйәүле, әммә салбарһыҙ булған. Салбарҙың, итектең нимә икәнен дә белмәгән был халыҡтарҙың ғәскәре традиция – ғәҙәт буйынса йәйәүлеләрҙән торған. Ат менеү өсөн салбар кәрәк булған. Ә бөтә Русте, Европаны баҫып алған Атилла бумын Ҡаған, Төмән, Сыңғыҙхан ғәскәре тик салбарлыларҙан һәм атлыларҙан торған. Әлбиттә, көйәктең эрерәк тә, ваҡ та дүңгәләктәрҙән торған төрлө рәүеше була. Тирене яҡшылап ҡайыш итеп эшләргә өйрәнгәс, көйәктең икенсе рәүешлеләре лә барлыҡҡа килә. Мәҫәлән, ҡабырсаҡ көйәк һәм тәңкә көйәк. Ҡалын, ләкин тире кеүек түгел, йомшағыраҡ ҡайыштан бишмәт тегеп, тимерҙән ярайһы уҡ ҙур ҡабырсаҡтар йә тәңкәләр эшләнгән. Тәңкәләр, ҡабырсаҡтар төрлө фиғелдә, төрлө ҡалынлыҡта, төрлө оҙонлоҡта һәм киңлектә булып, бер көйәктә бер үк төрлө тәңкәләр, тимер ҡабырсаҡтар ҡулланылған. Әгәр ҡабырсаҡтар тышҡа ҡумтыҡ (выпуклый) булһа, тәңкәләр тигеҙ рәүешле булған. Дегет менән еңелсә генә майланып, йомшартылған ҡайыш

бишмәткә тимер ҡабырсаҡтар һәм тәңкәләр йоҡа тегеҙ ҡайышы менән өҫтән-аҫтан, ә ҡайһы береһе уңдан-һулдан ике урындан тегелгән. Ҡабырсаҡтарҙың сите бер-береһен бер ни тиклем ябып тороуы ла шарт булған. Тәңкә көйәктәр ҡуптыҡ булмайынса бишмәткә туранан-тура, ялпаҡ көйөнсә, ләкин бер-береһен әҙ генә ябып, тигеҙ итеп, ике урындан тегелгән. Ауырлыҡтары ҡабырсаҡтарҙың һәм тәңкәләрҙең ҙурлығынан, ҡалынлығынан ҡала. Тимер көйәктең ауырлығы 6–10 кг самаһы була. Әлбиттә, ауыр кейем һуғышсының ҡуҙғалыу хәрәкәтен сикләгән.

Тимер көйәк өҫ кейеменә кейелгән. Әммә дошман һуғышсыһын алдар өсөн, уның өҫтөнән ҡалын елән, йөн, булмаһа, киндер сәкмән кейгәндәр. Ҡайһы бер көйәктең көләпәрәһе лә булған. Яртыһы дүңгәләкләп, яртыһы ҡабырсаҡлы, тәңкәле көйәктәр ҙә осраған.

Торҡа

Торҡа – башты һаҡлай торған баш кейеме. Ул һуғыш ваҡытында һуғышсының башын, муйынын ҡылыс сабыуҙан, айбалта менән һуғыуҙан һаҡлаған. Алтай, Сахра-Ҡыпсаҡ, Урал ерлегендә табылған торҡалар төҙөлөшө, нигеҙҙә, бер төрлөрәк булһа кәрәк. Әле 1980 йылдарҙа Силәбе өлкәһе Троицк – Өс тамаҡ ҡалаһының музейында «Азиатский шлем типичный» тип яҙылған торҡа ята ине. Ул көмрәйеп осланып бөткән дүрт өсмөйөштән тора ине. Күҙаллау өсөн шуны күҙ алдына килтерер кәрәк. Тирмәне баш кейеме дәүмәленә тиклем бәләкәсәйтеп, өҫкө яғынан тигеҙ итеп арҡырыға-арҡыры дүрт өлөшкә киҫергә. Әлбиттә, был осраҡта «тирмә» ҡалын тимерҙән була. Ҡалынлығы 4 мм самаһы булыр. Өлөштәрҙе бергә йәбештерер өсөн 5 см киңлегендәй таҫма менән өлөштәр бер-береһенә синәлгән. Таҫма өҫтөнән ҡуптайтма бар. Осо һөҙәгерәк осло, башында – түрпәһендә шырт, европалылар, рим, византиялыларҙыҡы кеүек «торчащий стержень» түгел, баш бармаҡтың өҫкө буынындай ғына күтәртмә. Дүрт өлөштө берләштерер өсөн, шыртҡа тимер дүңгәләк кейҙерелгән, дүңгәләк шыртҡа тигеҙ ултырһа ла, ике-өс ҡулҡыһы бар. Күрәһең, ул тишектәргә ат ҡойроғонан йәки ҡаурыйҙан, бик булмаһа, ҡылғандан сасаҡ тыҡҡандарҙыр. Меңәрләгән һыбайлылар йәнфарман алға сапҡанда ул сасаҡтар елберләп, бик матур күренеш тыуҙырғандыр. «Типичный азиатский шлем» тип аталғанының арт яғынан оҙонораҡ, муйынды ҡаплап иңбашҡа ятырҙай ваҡ ҡына тимер үрмә бар. Ә алғы яҡтан был үрмә шаҡмаҡтары эрерәк, һәм ул эйәктең аҫҡы өлөшөнә тиклем үк һалбырап тора. Тимер тотҡаның икенсеһе шул уҡ рәүештә, әммә алғы яҡтан тимер септә урынына күҙлек һәм танаулыҡ бар ине.

Танаулыҡлы торҡаның ваҡ сыбыҡтимерҙән үрелгән елкәлеге бар. Әгәр хәтерем яңылышмаһа, Силәбе өлкәһе Чесма (Шишмә), Троицк (Өс-Тамаҡ) райондарының осрашҡан еренән алыҫ түгел ерҙә, Аҡһаҡ Тимер менән Туҡтамыш хандың алғаҫҡы төмәндәре араһындағы ҡан ҡойғос алыш яланында табыла. Риүәйәттәр буйынса, был алышта Туҡтамыш хан төмәндәре араһында, Аҡһаҡ Тимергә ҡаршы һуғышҡан билдәле бер йәш баһадирға ҡаршы сығып, Аҡһаҡ Тимерҙең иң яратҡан ҡыҙы һәләк була. Аҡһаҡ Тимер ҡыҙы һәләк булған ергә Таш диуар өйҙөрә. Таштарҙы бер нисә тиҫтә саҡрым ерҙән һуғышсылар бер ҡулдан икенсеһенә биреп, ташып өйәләр. Ул диуар ҡалдыҡтары әле 1979 йылда ла бар ине. Был тарихи ҡомартҡыға бөгөн Силәбе өлкәһе хакимиәте һәм тарихсылары тарихи ҡомартҡы тип ҡарамайҙар, үкенес, үҙҙәренең тарихы булмағас, ҡараш та ситен. Ә бит тарих дөйөм, бер илдә йәшәгәс.

Ҡалҡан

Ҡалҡан – һаҡланыу ҡоралы. Уны, нигеҙҙә, йәйәүле һуғышсылар ҡулланған. Шуға күрә лә ҡалҡан Византия, Рум, Герман, Скандинавия илдәрендә күберәк ҡулланылып, уларҙың рәүеше лә төрлөсә булған.

Мағулдарҙың, төркиҙәрҙең, фарсыларҙың, ғәрәптәрҙең ғәскәре, нигеҙҙә, атлы булғас, ҡул ҡалҡаны ул илдәрҙә әҙ таралыш таба йә бөтөнләй булмай. Әгәр һуғышсы уң ҡул менән һөңгө, ҡылыс менән ҡулланһа, һул ҡул менән атты тейешле ергә йүнәлтеү, ҡалҡан да тотоу мөмкин булмаған. Әгәр көнбайыш илдәр ғәскәренең ҡалҡаны оҙонса дүрт мөйөшлө, дүрткел, йә булмаһа күкәй бит булһа, төркиҙәрҙең ҡалҡаны, әгәр ул атһыҙ һуғышҡан хәлдә, ҡалҡан һәр саҡ түңәрәк булған. Тәүге ҡалҡандар, әлбиттә, ваҡ талдан, муйылдан, ҡайын, артыштан һәм башҡа ағастарҙан үреп, тире менән көпләнгән булған. Унан һуңыраҡ ҡалҡандар «таҡта»ға әйләнгән. Тимерҙе ярайһы уҡ эшкәртергә өйрәнгәс, ҡалҡандар тимер йәймәһенән төрлө рәүештә, төрлө ҙурлыҡта эшләнгән. Бик боронғо беҙҙең ата-бабаларыбыҙ ҡулға тотоп күтәрмәле ҡалҡанды бик әҙ ҡулланғандар. Нигеҙҙә, ул һыбайлыға кәрәк тә булмаған. Шуның өсөн дә боронғо төркиҙәр ваҡ ҡалҡандарҙы тышҡы кейемгә, күкрәккә һәм арҡаға ҡайыш менән теккәндәр. Күкрәктәгеһе уның дүрткел булһа, арҡа ҡалҡандың сит-сите йомрайтылған йәки түңәрәк уҡ булған. Сөнки ҡылыс, һөңгө, уҡ, наҙаҡ йөрөткәндә йә ҡулланғанда арҡа ҡалҡандың, әгәр ул дүрткел булһа, мөйөштәре ҡамасаулыҡ килтергән. Ҡул сығанағы ла һәр саҡ тимергә төртөлөп яраланған. Күкрәклек тә, арҡалыҡ та тула кейеҙ, ҡайыш, тире, йә булмаһа, һуғылған киндер туҡымаһы менән ҡапланған. Был үҙ нәүбәтендә дошманды алдау

ҙа булған ҡалҡан көплəү. Күкрəклектең һəм арҡалыҡ ҡалҡандың сит-сите ҡуптыҡ – ҡайма итеп яһалған. Сөнки күкрəккə йəки арҡаға сəнскəндə һөңгө, меч осо тотлоҡһон өсөн шулай эшлəнгəн. Ауыр ҡул ҡалҡандары менəн византиялылар, англосаксстар, германдар һəм славяндар ҡоралланған. Сөнки уларҙа атлы һуғышсылар, төркиҙəрҙəн күрмəксе, бик һуң ғына барлыҡҡа килгəн. Дөйөм бер ҡалып тураһында һүҙ əйтеп булмай, əлбиттə. Əгəр Киев дəүлəтенең бəжəнəктəр, Башҡорт хан менəн йə берлəшеп, йə ҡапма-ҡаршы һуғыштарында яу ҡоралдары бер төрлөрəк булһа, Дəшт-Ҡыпсаҡтың Көнсығыш һəм Урал – Иҙел буйҙарындағы яу ҡоралдары, əлбиттə, айырмалы булған. Боронғо урыҫтарҙа кейемдəренең нисек булыуын һəм һуғыштарында ниндəй төрлө алышҡа өҫтөнлөк биреүҙəре тураһында фəндəр академияһының тарих институты сығарған китапҡа мөрəжəғəт итəйек. Тарих фəндəре докторы Л. В. Черепкин, боронғо тарихсы С. М. Соловьевтың «История России с древнейших времен» тигəн китабын яңынан сығарған (Мəскəү, 1960 йыл). Был китаптың 15–16-сы биттəрендə түбəндəге юлдар бар: «Об одежде князей можем иметь понятие из картины, приложенной к известному Святославову сборнику: здесь Святослав и сыновья его Глеб и Ярослав, представлены в кафтанах немного ниже колена... На Святославе шапка не так высокая, желтоватого цвета, с синими наушниками и темно-красною опушкою... На княгине покрывало, завязанное под бородою, верхняя одежда красного цвета с широкими рукавами...»

Шул уҡ китапта (21-се бит) былай тип яҙыла:

«В ожидании битвы ратники надевали брони (тимер кейемдəрен), но пред Липецкою битвою Мстислав Удалой дал новгородцам на выбор: сражаться на конях или пешком, те отвечали, что не хотят помирать на лошадях, но хотят биться пеши, как бились отцы их на Колакче, и, сбросив с себя порты и сапоги, побежали босые на неприятеля».

Һуғыш аты

Һөйлəшеп ултырғанда мин атайымдан һуғыш атының ниндəй талаптарға яуап биргəнен һораным.

Атайым Ильясов Мөжəүир Əбделфəн улы элекке кавалерист-сабельник ине. 1930–1932 йылдарҙа ул Украинала беренсе атлы армияла хеҙмəттə була.

– Һуғыш аты бик күп талаптарға яуап бирергə тейеш, – тип башланы атайым. – Беренсенəн, ул кəүҙəле булырға тейеш. Артыҡ бейек тə, тəпəш тə түгел. Ерҙəн алып мундаһына тиклем 140–150 см. Һалбыр түгел, ялы, ҡойроғо тулы булыуы ыңғай. Тояҡтары ярылмаған, йомро, əҙ генə ослораҡ. Ипподромдарҙа

ҡыҫҡа араға сапҡан саф тоҡомло тигән аттарҙың бәкәлдәре тайыусан була. Ундай ат – ат түгел! Аттың бәкәлдәре текә, ҡыҫҡа булһын. Бына беҙҙең башҡорт аттары шундай, улым. Аттың һаулығы – төп шарт. Ул йүткермәһен, янған булмаһын. Ашарға талымһыҙ булыуы бик кәрәк. Ниндәй һыу булһа ла эсергә тейеш, нимә бирһәң, шуны ашауы – шарт. Тештәре тулы булһын, ҡоро теше булмаһын. Башы бәләкәй, ҡаҡ, күҙе үткер, ҡолағы ишеткер, мундаһы бейек, биле көмрө булыуы бик кәрәк. Саңҡы билле ат оҙаҡ йөрөй алмай, түҙемһеҙ була. Һөҙөмтәлә, аунай, тумалай башлай. Аттың танау эсен ҡараһаң, унда борсаҡ һыйырлыҡ ике-өс тишек булыр. Әгәр өс һәм унан күберәк тишек бар икән, тимәк, ул ат йөрөк! Аттың алдына тороп, уның күҙҙәрендә үҙ кәүҙәң ни тиклем күберәк күренһә, ат шул тиклем уяу, йүгерек, йөрөк була. Әгәр башың, ҡулбашың, әҙ генә кәүҙәң күренһә, өмөт икелерәк. Аттың ҡойроғон да күтәреп ҡарарға кәрәк. Әгәр ул ҡойроғон ҡулдан түбәнгә һыпырып тартып ала икән, йәки ҡойроҡто күтәреү ауыр икән, тимәк, ат бик ҡарыулы. Түше киң, ҡабырға араһына өс бармаҡ һыймалы булһа ла яҡшы. Һуғыш аты бик батыр булыуы шарт. Һаҙға, батҡылға, тәрән һыу кисеүгә, соҡорға, ярға ҡурҡмай менергә, керергә тейеш. Уның һикерә белеүе лә бик кәрәк. Бынан тыш, һуғыш атының йәше 4 – 9-ҙан оло булмаһын. Башы йомшаҡ, тыңлаусан булыуы һәм өркмәүе, башҡа аттарҙан үҙен һаҡлай алыуы кәрәк. Һуғыш атының төҫө лә үҙе бер шарт. Ул аҡ, күк булмаһын. Сөнки аҡ ат йыраҡтан һәм төндә күренә, һуғыш ваҡытында ла билдәле. Аҡ ат – ул штаб йәки ҡаҙанлыҡ аты! Һуғыш атының башҡа сифаттары ла булыуы мотлаҡ. Мәҫәлән, ул шәп сапһын, юртһын, егәрле атлаһын, ауыҙлыҡты таламаһын, йыш бышҡырмаһын, сит аттарҙы күргәндә кешнәмәһен. Әйәрҙән төшһәң, ҡасмаһын, тышау һалдырһын, менәм тиһәң, өҙәңгегә баҫтырһын. Төҫө ерән, туры, ҡара, һоро булыуы теләккә шарт.

Аттың башына нуҡта кейҙерелә. Нуҡта ике ҡатлы, ҡалын, яҫы, йомшаҡ ҡайыштан тегелә. Морондоғо була, ә маңғайлыҡ булмай. Уны боронғо ваҡытта куйғандар. Эйәк аҫтынан дуңғәләк тимер йәки осо аса муйыл ағасынан бәйләмес нығытыла. Нуҡта бәйләмесенә йәки тимер дуңғәләккә оҙонлоғо 15–18 метрҙай нәҙек, еңел ҡайыш йә ҡыл арҡан бәйләнә. Уны кәләплəп, осо менән эйәрҙең алғы тотҡаһына йә дуғаһына бәйләп ҡуялар. Сылбырҙың тәғәйенләнеше бик күп. Беренсенән, походта саҡта ял итергә, йәки төн ҡунырға туҡталғанда атты, йыраҡ китмәһен өсөн, ағасҡа, ташҡа, хатта ҡылғанға бәйләп була. Ҡаҡ дала ерҙәрҙә, яуҙа булғанда башҡорт һуғышсыһы сылбыр осонда ырғаҡлы ағас йөрөткән. Сөнки ат бәйләр ағас, таш һәм башҡа нәмә булмағанлыҡтан, ырғаҡ ағасты йомран, байбаҡ ояһына тыҡҡандар. Ырғаҡ, ояның ситенә әләгеп, атты тотҡарлаған.

Боронғораҡ һуғышсылар бик оҫта боғалаҡ ырғытҡандар. Боғалаҡлап сабып барған арғымаҡты ла, болан, мышыны ла, дошман һуғышсыһын да таймаслап тотоп, һөйрәп сапҡандар. Аттың башына нуҡта өҫтөнән йүгән кейҙергәндәр. Йүгән дә ҡалын, яҫы ҡайыштан ике ҡатлап, ике ситенән аймаҡлап, ҡайып тегелгән. Һуғыш атының йүгәне суҡһыҙ, таралғылары көслө ауыҙлығы уң яҡтан сисмәле. Таралғы ҡаяуы оҙон, түреһенән 4 – 5 мм сығып тора. Йүгәндең ауыҙлығы остарында ике тимер ҡуласа. Йүгәндә маңғайлыҡ та, морондоҡ та йә салмаштырып, уртаһын дүрткеллəп, йә киң, яҫы ҡайыштан тура тоташтырыла. Был ҡайышҡа, аттың башын һаҡлар өсөн, оҙонса тимерҙән манғалыҡ та элгәндәр. Теҙгене оҙон. Ныҡ ҡайыштан тегелә. Йүгәндең тамаҡһаһы ҡайыштан, көслө таралғыла, йә ағас элмәктә була.

Боронғо эйәр тик ағастан торған. Һәм уның дуңғалары ла, япҡағы ла күберәге ҡайындан, имəндəн яһалған. Эйәр, нигеҙҙə, дүрт өлөштән тора. Эйәр аҫтында ике ятма, йә япҡаҡ. Уң ятма һəм һул ятма. Аттың арҡаһын һуҡмаҫ өсөн, эйәр ятмалары алдан да, арттан да əҙерәк өҫкə көмрөрәк итеп яһағандар. Шулай иткəндə, ул аттың ҡулбашын да, ҡабырғаһын да төртмəгəн. Ятма ярайһы уҡ оҙон булыуы ла шарт. Был да ат арҡаһын баҫыуҙан һаҡлаған. Ятмаларҙы алғы эйəр тотҡаһы һəм артҡы дуға берләштергəн. Ятма аҫтан ҡалын кейеҙ менəн көпләнгəн. Эйəр тыштан өҫкə яғы күн менəн көпләнеп, кейеҙ мендəр һалынған. Ул «күпсек» тип аталған. Эйəр ятмаларының һəр икеһенең алдынан да артынан тишектəре аша ҡайыш һиртмəккə сыңға йə ағас элмəк яһалған. Алғы яҡка түшлек, артҡа ҡойошҡан кейҙерелгəн. Өҙəңгелəр боронғо ваҡыттараҡ ҡаты тамырҙан бөгөлөп эшлəнер булһа, тимер эшлəү юлға һалынғас, еҙҙəн, тимерҙəн бəшəрлəп, сымарлап ҡойғандар. Тимер өҙəңгелə ҡыш аяҡ өшөмəһен өсөн, уны киндер туҡыма менəн урағандар. Өҙəңге ҡайыштары яҫы, ҡалын, ныҡ булырға тейеш. Ул оҙонайтмалы, ҡыҫҡартмалы. Һəр һыбайлы үҙенə ярарлыҡ итеп өҙəңге ҡайышын үҙгəрткəн. Фəҙəттə, ул ҡулдың ҡултыҡ аҫтынан бармаҡ остарына тиклем самалана. Эйəр айылдары икəү. Алғы һəм артҡы айыл. Айылдар киң, яҫы, ныҡ ҡайыштан ике ҡатлап тегелə. Эйəр артына күн муҡса, йə төрəн муҡса бəйлəнə. Унда дарыу үлəндəре төйҙөгө, кереш һабаҡлыҡ ҡылдары, уҡ башаҡтары, кипкəн ҡорот, утлы ҡорал булһа, дары, йəҙрəлəр, саҡма, уға тетмə йөн, таҙа яулыҡ һəм башҡа нəмəлəр һалғандар. Фөмүмəн, һуғышсы һəм һуғыш аты бер кəүҙəне, тотош берлекте ни тиклем уңышлы башҡарһалар, шул тиклем яуҙа улар еңеүгə дəғүə итə алғандар.

Бына шулай тип һөйлəне атайым. Был һүҙҙəргə мин аҙаҡ үҙем инандым. Сөнки миңə ҡырҡ йылдан ашыу «хеҙмəтем һуғышы» осоронда бик күп «хəрби аттар» тоторға тура килде.

Күңелем һандығы əсендəге «аҫыл таштарҙың» бер генə өлөшө əле был. Тəңрем насип итһə, киләсəктə лə уртаҡлашыр зиннəттəрем байтаҡ.



Ҡолой кантон көсөкөв

Ауға түгел, яуға киттеләр...

Рәсәй империяһының атлы ғәскәре генералы Григорий Семен улы Волконский, ике ҡатлы таш йорттоң тәҙрәһе төбөндә, Яйыҡ буйлап аҡҡан һалды күҙәтә ине. Был ағас һалдар уның ярҙамында – гражданлыҡ эштәр буйынса губернатор бойороғо буйынса, Яйыҡтың үрге ағымындағы урманлы тауҙар яғынан, губерна ҡалаһы – Ырымбур ҡәлғәһен нығытыу һәм төҙөлөш эштәре өсөн килә. Урманлы тауҙарҙа йыуан ҡарағай, ҡарағастарҙы ҡырҡыу, уны һыу буйына ташыу, йылғаға төшөрөп һалдар эшләү һәм оҙатып ағыҙып килтереү – бөтәһе лә, хәҙер ғәскәри ҡатламда торған, башҡорттарға йөкмәтелгән. Ниңә әле ул эшкә һаман да ғәскәри башҡорттарҙы ғына ҡушабыҙ? Ниңә ул эшкә Яйыҡ казактарын, сит-ят Ҡарғалы татарҙарын ҡушмайбыҙ әле, тип, шул һорауҙы асыҡлауҙы кәрәклекте, һәм эште бит ойоштороу – гражданлыҡ эштәре буйынса губернатор эше лә баһа, тип уйланы генерал-губернатор.

Был турала гражданлыҡ эштәре буйынса губернатор Наврозов Матвей Андрей улына бойороҡ яҙҙырыр өсөн, беренсе ярҙамсыһы вице-губернатор Илья Федор улы Федоровты адъютанты аша саҡыртты. Адъютант, ниңәлер, китте лә юғалды. Асыуы килгән генерал, арҡалығы муйыл сыбығынан бороп үрелгән ултырғысынан торған ғына ине, ҡапыл ишек асылып китте лә, унан башы күренгән адъютант, виценың өйҙә юҡлығын хәбәр итте. Әҙ генә уйланып алғас, генерал-губернатор Волконский, адъютантына губерна дворяндары етәксеһе Осоргин Савва Федор улын табып килтерергә бойорҙо.

Ағас эше бик ауыр эш икәнен ул, губернатор булып 1803 йылда император Александр I Павел улы тарафынан тәғәйенләнә-

гәс тә, башҡорт ғәскәрҙәренең торошон тикшергәндә, тәүләп үҙ күҙе менән күрҙе. Ведомость – теҙмә менән яҙылған исемшәрифтәр, полктарҙа, тыныс осорҙа, 500, 570, 610-сы һанлы булһа ла, ысынбарлыҡта, һәр полктан теп-теүәл йөҙ кеше етмәй ине.

– «Ҡайҙа ҡалған йөҙлөктәр», – тигән һорауға, уға, ул йөҙлөктәрҙең – һуғышсыларҙың бынан 150–200 саҡрым ерҙә, тауҙар яғында ағас ҡырҡыуҙары, һалдарҙы йылғала оҙатып килгәс, тағы ла китеүҙәрен әйттеләр. Был эш гражданлыҡ губернатор Матвей Андрей улы Наврозов күрһәтмәһе менән эшләнеүен дә еткерҙеләр.

– Нишләп гражданлыҡ губернаторы, баш губернатор – хәрби губернаторҙан рөхсәт алмайынса, хәрби эшкә тығыла? – тип ярһып киткәйне генерал-губернатор Волконский. Әммә 60 йәшлек губернатор үҙен ҡулға алды.

Ҡыҫҡа буйлы, төйөп ҡуйған кеүек ауыр, кешеләргә һөҙөп, һалҡын ҡараған дворяндар етәксеһе Савва Осоргин, икенсе ҡаттағы генерал-губернатор бүлмәһенә ишек шаҡымайынса, килеп керҙе. Керҙе лә, шаҡ ҡатты, сөнки генерал-губернатор, бүлмәһенең нәҡ уртаһында, нәҡ тә Савва Осоргин ҡаршыһында тора ине.

– АҒас эше, әлбиттә, кәрәк эш, – тип һүҙ башланы хәрби губернатор, – әммә беҙ был хужалыҡ, гражданлыҡ эшенә хәрби һуғышсы башҡорттарҙы ҡушып ҙур яңылышлыҡ эшләйбеҙ. Ғәскәрҙең хәрби әҙерлеген, мөмкинселеген юғалтабыҙ. Император ғәли йәнәптәре, беҙгә, һәр көн көнбайышҡа – сик буйына, һаҡта торған полктарға, ярҙам ебәререгә әмер биреүе мөмкин. Ырымбур губернаһы хәрби ғәскәрҙәрендә Яйыҡ казактары, йәй көнө, йөҙгә егерме генә. Ә татарҙарҙан берәү ҙә юҡ. Ниңә шул халыҡтан беҙ ағас киҫтермәйбеҙ? Ниңә тупланған, ҡоралланған армияның әҙерлеген күрә белә тарҡатабыҙ? Хәҙер үк Наврозов бойороғон кире алып, ғәскәри һуғышсыларҙы үҙ сафтарына ҡайтарырға, тигәнен яҙһын. Ә мин уға шул яңылышлыҡты төҙәтергә бойорам...

Был дворяндар берлеге етәксеһе Савва Осоргиндың бурысы булмаһа ла, ул әште тиҙ генә тейешле кешеләргә еткерәсәген белдерҙе. Әммә шуны өҫтәне:

– Әгәр беҙҙе, Яйыҡ казактарын, урман киҫергә ебәрәләр икән, беҙ үҙебеҙҙән булған һаҡ полктарын таратып ҡайтарабыҙ. Урманға ла бармайбыҙ, батшаға полк та булмаясаҡ, тип белдергәндәр казактар үҙ «Круг»тарынан һуң. Ә Ҡарғалы татарҙары был эштән ҡырҡа баш тартҡандар, ағас эшен беҙ белмәйбеҙ. Ағас эше, әнә, башҡорттар эше, тип һылтанғандар, тине Савва Осоргин. Әммә генерал-губернаторҙың күрһәтмәһен үтәр өсөн, тиҙерәк сығыу яғын ҡараны, сөнки бойороҡ кәтғи ине.

Гражданлыҡ эштәре буйынса губернатор булған Матвей Наврозов, үҙе күпселек ваҡыт Өфөлә ултырһа ла, хәрби генерал-

губернаторҙан шөрләберәк, булһа кәрәк, Ырымбурҙа ла оҙаҡ ҡына туҡталып көнитмеш мәсьәләләр менән шөғөлләнеп, кире китә. Уның был килеүе, нәҡ тә генерал-губернаторҙың, Наврозов эшенә ризаһыҙлыҡ белдереүе менән тура килде. Гражданлыҡ эштәре менән шөғөлләнгән губернатор, императорҙың һәм Сенаттың ҡарары буйынса, хәрби генерал-губернаторға буйһона ине.

Генерал, икенсе ҡаттағы ашханаһына кереп, төшкө ашты ашап сығыуға, уға, ҡайҙандыр, ярым ҡыҙмаса Матвей Наврозовты табып килтерҙеләр. Ҡаты уҡ күңелле булмаған генерал-губернатор Григорий Волконскийҙың эш бүлмәһенә, башындағы кәләпүшен тотоп килеп кергән, гражданлыҡ эштәре губернаторы Наврозовҡа һынаулы ҡарашын текәп ҡарап ултырҙы. Был һынаулы ҡараштан Наврозов та ҡаушай төштө, әммә ауыҙ асып бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Генерал-губернаторҙың: «Матвей», – тип, бик ҡәтғи ҙә, яуап талап иткәндәй, бойороҡло ла ауаз менән әйтеүе булды, тышта, урамда шалтыр-шолтор арба тәгәрмәстәре, ат тояҡтары тауышы ишетелде. Шунда уҡ кемдеңдер оҙон итеп «тырррр» бойороғо тәҙрә аша бүлмәне солғап алды.

Генерал-губернатор ҙа, гражданлыҡ губернаторы ла тәҙрә аша был олоҫтағы төп йорт алдына килеп туҡтаған көймәгә күҙ ташланылар.

Көймә эсенән Һамар менән Ырымбур араһында йөрөгән тулы мундирлы штабс-капитан Селезнев һәм губерна Ям-почта хеҙмәте идаралығы офицеры һикереп төштөләр ҙә, тәүгеһе ҡулындағы тире сумкаһын тотоп керер ишеккә йүгерҙе. Ишек алдында һаҡта торған ике һаҡсыны ул бар тип тә белмәй, һә тигәнсе губернатор бүлмәһенә килеп керҙе. Фәҙәттәге алым – үҙ-үҙеңде атап күрһәтеү, белдертеү бурысын да үтәп тормаҫтан, генерал-губернаторҙың ҡулына йоҡа ғына тирегә төрөлгән һары ҡағыҙҙы тотторҙо. Үҙе тотлоға-тотлоға Наполеон Бонапарттың Рәсәйгә баҫып кереүе тураһында хәбәр итте.

Генерал Волконский ашығып, император Александр I-нең 6 июль 1812 йылда яҙған манифесын уҡый башланы.

Манифест императора Александра I

«Божией милостью Мы, Александр Первый, Император и самодержец Всероссийский и прочая, и прочая, и прочая.

Неприятель вступил в пределы наши и продолжает нести оружие свое внутрь России, надеясь силою и соблазнами потрясть спокойствие великой сей державы. Он положил в уме своем, злобное намерение – разрушить славу её и благоденствие; с лукавством в сердце и лестью в устах несет Он вечные для ней цепи и оковы. Мы, призвав на помощь Бога, поставляем в пре-

граду ему войска. Наши, кипящие мужеством попрать, опрокинуть Его, и то, что останется не истреблённого, согнать с лица земли нашей, мы полагаем на силу и крепость их твёрдую надежду: но не можем и не должны скрывать от верных наших подданных, что собранные им разнодержавные силы велики, и что отважность Его требует неусыпного против неё бодрствования. Сего ради при сей твёрдой надежде на храброе наше воинство полагаем. Мы за необходимо нужное собрать внутри государства новые силы, которые нанося новый ужас врагу, составляли бы вторую ограду в подкреплении первой, и в защиту домов, жен и детей каждого из всех. Мы уже воззвали к первопрестольному граду нашему Москве, а ныне взываем ко всем Нашим верноподданным, ко всем сословиям, и состоянием духовным и мирским, приглашая их вместе с нами едино душным и общим восстанием содействовать против всех вражеских замыслов и покушений. Да найдёт он на каждом шаге верных сынов России, поражающих Его всеми средствами и силами, не внимая никаким Его лукавствам и обманам, да встретит он в каждом дворянстве Пожарского, в каждом духовном Палицина, в каждом гражданине Минина. Благородное дворянское сословие! Ты во все времена было спасителем Отечества. Святейший Синод и духовенство! Вы всегда теплыми молитвами своими призывали благодать на славу России. Народ русский! Храброе потомство храбрых славян! Ты неоднократно сокрушал зубы устремлямшихся на тебя львов и тигров; соединитесь все: со крестом в сердце и с оружием в руках и никакие силы человеческие вас не одолеют. Для первоначального составления предназначенных сил предоставляется во всех губерниях дворянству сводить поставляемых ими для защиты Отечества людей, избирая из среды самих себя начальника над оными, и давая о числе их знать в Москву, где избран будет главный на(д) всеми предводитель.

В лагере близ Полоцка июля 6-го дня 1812г.

На подлинном написано собственною
Его Императорского Величества рукою тако: Александр
Верно: генер(ал) Кн. Волконский.

Батша манифесын уҡып сыҡҡандан һуң, уның аҫтына ҡултамғаһын һалды һәм генерал Волконский ҡапыл урынынан һикереп торҙо.

– Хәҙер үк губерна канцелярияһы идаралығы һәм эске эштәр бүлеге етәкселәрен һәм ағзаларын йыйырға, – тип тыныс, әммә ҡәтғи бойороҡ бирҙе.

Ярты сәғәт үтеүгә, генерал-губернатор бүлмәһенә барыһы ла йыйылған ине. Килеүселәргә күҙ йөрөтөп сыҡты ла, ул, ғәҙәтенсә,

кемдең килеү-килмәүен дә барлап тормайынса, үзенең эш өçтәле артынан аяҡ өçтө тороп, батша Александр I ебәргән манифесты етди тауыш менән уҡый башланы. Губерна канцелярияһы, эске эштәр бүлеге һәм башҡа дәрәжәлеләр, барыһы ла, Франция менән Рәсәйҙең мөнәсәбәттәре бик ҡырҡыу булыуын беләләр ине.

Манифеста 1812 йылдың июнь айының таңында, Неман йылғаһы аша Франция императоры Банопарт Наполеондың ғәскәре Рәсәй еренә баçып керә башлауы һәм ике ил араһында һуғыш башланыуы тураһында әйтелә. Бөгөнгө көндә һуғыш әле көнбайыш Рәсәйҙә бара.

Урыç армияһы икәү. Барклай де Толли командалығындағыһы саҡрым артынан саҡрым ҡалдырып, Вильно Дрисса, Полоцк йүнәлешендә, ә икенсеһе генерал Багратион етәкселегендәгеһе һаҙлыҡтар, киң, яçы арҡалыҡтар, тәрән йыйынтылар, урмандар аша көньяҡтараҡ Гродно, Слуцк, Бабруйский аша, ил эсенә эскә сигенә. Әле улар бергә ҡушыла алмайҙар. Аса араһына кергән таш кеүек, Наполеондың фельдмаршалы Морат, ә француzса әйткәндә, Мюрат атлылары ике урыç армияһы ҡушылыуына юл ҡуймайынса, уңға ла, һулға ла ташланып һуғышалар.

Мюрат сығышы буйынса француз булмаһа ла, үҙ илендә – төньяҡ Африкала француз мөхитендә белем һәм тәрбиә ала. Сөнки уның иле Францияның колонияһы булараҡ, унан бик йоғонтоло ине. Үçеп еткәс, ул француз армияһында хеҙмәтен башлай. Самаһыҙ тәүәккәллеге, ҡыйыулығы, ҡайнар ҡанлылығы уны башҡаларҙан айырмалы дәрәжәһен тиҙ үçтереүгә ярҙам итә.

Наполеон армияһында, француздарҙан башҡа саксондар, пруссактар, австриецтар, швейцариялылар, итальяндар, голландтар, испандар, унда йәшәгән Марокко, Алжир кешеләрен дә атҡа атландырған ине фельдмаршал Морат атлы Мюрат. Был ваҡиғалар, әлбиттә, манифеста юҡ.

Әле 1811 йылда көнбайыш сик армияһын нығытыу өсөн императорҙың шәхси указы менән 1-се һәм 2-се Башҡорт атлы полктары Неман ярҙарына еткерелгән ине.

Указ императора Александра I, данный генералу от кавалерии князю Волконскому, о сформировании трех полков, одного из ставропольских калмыков и двух из башкир.

7 апреля 1811 г.

«Для усиления армии Нашей иррегулярными войсками и чтобы приобучить на первое время к службе калмык и башкир, обитающих в краю, управлению Вашему порученном, признали Мы за нужное нарядить три полка, один из ставропольских калмык и два из башкир, для чего повелеваем Вам:

Полк Ставропольский составить из 500 человек рядовых при атамане их и надлежащем числе офицеров и урядников. Башкирские же два полка, назвав по нумерам, должны быть каждый из 500 человек, определя к каждой 5-сотенной команде из них же командира и старшин, по примеру прочих иррегулярных войск.

Назначение сборных мест зависит от собственного рассмотрения Вашего с тем однако ж, чтобы сне происходило со всевозможною поспешностью. Как скоро оные полки соберутся, велеть им следовать каждому особо к Симбирску, снабдив каждый маршрутом, а копии с них прислать к военному министру, уведомя его и о времени, когда и откуда которая команда или полк в поход выступает, дабы военный министр мог встретить их заблаговременно предписаниями своими о дальнейшем их назначении.

В каждый полк прикомандировать одного надёжного и исправного армейского или гарнизонного штаб-офицера и снабдить его инструкциею о соблюдении в пути во всём должного порядка.

Ставропольские калмыки должны будут иметь исправное оружие по положению, а башкиры – употребляемое по их обыкновению.

Всем им быть о дву-конь.

Жалованья имеют получать все рядовые, каждый по 12 руб. в год и указ(ан)ный месячный провиант; да на одну лошадь фураж в натуре, а на другую-за оные деньгами по справочным ценам; офицеры же и старшины против офицеров гусарских полков с того времени, как они за 100 вёрст от сборных мест найдутся по самые возвращение их в домы.

При выступлении всем как офицерам и старшинам, так и рядовым на исправу выдать в зачёт полутрётное жалованье; на что к Вам и особая сумма доставляется.

На покупку в тех местах, где казённых магазинов не будет, провианта и фуража отпустить в каждый полк начальникам по 2000 руб., в коих они отчёт дать обязаны. Сумма же на то равномерно к Вам посылается.

О(б) успехе в исполнении по сему, равно и о том, кто вами избран будет в каждый полк начальником и кто из штаб-офицеров к ним прикомандированы будут, имеете доносить Мне и военного министра уведомлять.»

...Нәҡ тә шул ике полк, Неман ярҙарында беренселәрҙән булып, Рәсәй сиген һаҡлап Наполеон ғәскәренә ҡаршы тәүге һуғышҡа инде. Әммә ни тиклем ҡаты һуғышыуға ҡарамаҫтан, хәрби ҡөҙрәтен, һәләтен юғалтмай, башҡа ғәскәрҙәр менән бергә әскә сигенергә мәжбүр булды.

Император манифесында, башҡорттарҙан һәм Яйыҡ казактарынан өҫтәмә атлы полктар төҙөп яу ҡырына оҙатыр өсөн, Түбәнге Новгород тәғәйенләнгән ине. Был манифест һәм указ губерна үҙәге булған Ырымбурға 1812 йылдың 25 июленә килеп етте. Генерал-губернатор ҡулындағы манифестҡа император Александр I тарафынан 6 июль 1812 йыл ҡул ҡуйылған ине. Ун туғыҙ көн, ун туғыҙ төн тигәндә килеп еткән был хәбәр. Фәҙәттә тик Мәскәү менән Өфө араһында Ям-почта аттары ҡырҡ көн йөрөр булды. Ә Өфөнән Ырымбурға 8–10 көн эсендә килеп етерҙәр ине. Күрәһең, ғәҙәти хәлдәр булған осорҙа сапҡындарҙың сослоғо ике тапҡырҙан артып киткән.

...Бойороҡ указ-манифест яҙылыуын яҙылған. Әммә буласаҡ, төҙөләсәк армияға матди ярҙам бүленеүе, уларҙы кәрәк-яраҡ, ат нөйәттәре, һуғышсыларҙы кейем-һалым (мыят), ҡорал менән тәьмин итеү тураһында бер һүҙ ҙә юҡ. Манифестың төп фекере: «Организовать и отправлять иррегулярные полки», – ине.

Генерал-губернатор манифесты уҡып бөткәс, барлыҡ дәрәжәлеләргә күҙ йөрөтөп сыҡты ла, тынып ҡалды. Бүлмәлә ауыр, күңелһеҙ тынлыҡ урынлашты. Аныҡ һәм ҡырҡа бойороҡтар биреү өсөн кәрәкле урынбаҫарҙары менән кәңәшләшергә ваҡыт булмағанлыҡтан, губернатор, ниндәй һорау иҫенә төшә, шуның буйынса бойороҡ бирә башланы. Губерна ҡаҙна палатаһы һәм губерна дәүләт милке һәм мөлкәте палатаһы етәкселәренә, ҡаҙнала әле нисә һум аҡса булыуын, килемдәрҙе, сығымдарҙы яҙма рәүештә талап итте. Бынан тыш милек палатаһына, һаҡлауҙа нисә эйәр, ат нөйәттәре әпсен-төпсөндәре барлығы тураһында, иҫәп ҡағыҙының хәҙер үк өҫтәлдә булыуын ҡәтғи талап итте. Шулай уҡ губерна аҙыҡ-түлек комиссияһынан, һарайҙарҙа күпме он, ярма, һоло, башҡа аҙыҡ-түлектең иҫәбен дә һораны.

Йыйылышта ҡатнашыусылар губернаторға ниндәй ҙә булһа кәңәш бирергә әҙер түгелдәр ине, сөнки һуғыш хәбәре барыһының да аңын шаңкытҡайны.

Шул мәлдә ҡайҙандыр һуңлап килеп кергән вице-губернатор Федоров Илья Федорович ҡулындағы йоҡа ҡайыштан тегелгән муҡсаһының әлмәктәрен ысҡындырып ебәрҙе лә, ҡалын һары ҡағыҙҙарын сығарып генерал-губернаторға, мөғәзәйҙәрҙә нисә эйәр, йүгән, серге, һөңгө, ҡылыс һәм башҡа кәрәк-яраҡтар барлығын ҡысҡырып уҡып сыҡты. Был әйберҙәрҙең, ул-был сыға ҡалһа, казак регуляр полктарын ҡоралландырыу өсөн һаҡланғанын һәм ул ун бер казак полкын тәьмин итеүгә етәсәген белдерҙе.

Бүлмәлә тағы ла тынлыҡ урынлашты. Генерал-губернатор манифесҡа күҙ йөрөтөп сыҡты ла:

– Ә башҡорт полктарына, башҡорт полктарына ҡайҙа? Уларҙы нимә менән ҡоралландырабыҙ? Бындай тәғәйенләп бүлеүҙе кем эшләне? – тип һорау бирҙе.

Алғы рәттә ултырған гражданлыҡ губернаторы Матвей Наврозов ҡапыл генерал-губернатор Волконскийға:

– Беҙ, ғәли йәнәптәре, башҡорттарҙы ҡоралландырырға тейеш түгелбеҙ. Батшаларыбыҙ уларға ихтирам йөҙөнән төрлө походтарға сақырһа ла, бер ваҡытта ла ҡулдарына ҡорал тараттырмаған. Улар үҙҙәре ҡайҙандыр, йә һатып алып, йә үҙҙәренең йәшерен родовой мейестәрендә ҡорал һуғалар. Беҙ уларҙы ҡоралландырырға тейеш түгелбеҙ. Яуға барғас, үлгеләре килмәһә, француздарҙан талап алырҙар, – тине.

Тыңлаусылар араһында тартынып ҡына хихылдаусылары ла табылды. Әммә губернаторҙың Наврозовҡа төбәп:

– Улар ил һаҡларға баралар, Матвей! Ил һаҡларға! Мин улар менән 1768, 1787, 1795 йылғы һуғыштарҙа бергә ҡатнаштым. Илгә бик бирелгән, сая, тәүәккәл һуғышалар. Нимә, беҙ уларҙы йоҙроҡ менән һуғыштырайыҡмы? Һин төшөнәһеңме, Матвей, наконец-то! Матвей Андреевич! Һеҙ – губернала минең хужалыҡ эштәре буйынса ярҙамсы икәнегеҙҙе иҫегеҙгә төшөрәм. Губерналағы сәйәсәт йүнәлеше, хәрби эштәр, бөйөк император ғәли йәнәптәре тарафынан миңә йөкмәтелгән. Император барлыҡ полктарҙы тейешенсә хәрби тәртипкә килтереп фронтҡа ебәрергә ҡуша. Ә һеҙ һуғышсыларҙы көндәлек хәрби күнекмәләрҙән айырып, минең менән кәңәшләшмәйенсә, утын киҫергә ебәргәнһегеҙ. Кемдән рөхсәт һорап, өс полктан йөҙәр кеше эшкә ебәрелде? – тип, генерал башҡорт ғәскәрҙәре канцелярияһы командующийына боролдо.

– Ғәли йәнәптәре, беҙ уны хәрби идаралыҡ ҡушыуы буйынса эшләнек, – тип аҡланды быныһы. Ә губерна хәрби идаралығы, үҙ бойороғон, хужалыҡ эштәре губернаторы бойороғо буйынса эшләүен белдерҙе.

Алтмыш туғыҙ йәшлек генерал-губернатор, үҙенән байтаҡҡа йәш, хәйләкәр, ике йөҙлө ҡуштаны Наврозовҡа тауышын бик күтәргенә килһә лә, түҙҙе. Беренсенән, бында барлыҡ губерна идаралыҡтары етәкселәре йыйылған ине. Икенсенән, Матвей Наврозовтың сит тамға, сит кешеләр тарафынан, төрлө дәүләт баҫҡыстары етәкселәренә, ялған шикәйәттәр яҙҙырыуға оҫта икәнлеге тураһында хәбәрҙәр һәр саҡ йөрөнө. Шул хәбәрҙәр ҙә, был буталсыҡ осорҙа, үҙ ағымы менән барған мөнәсәбәттәрҙе үҙгәртмәһен өсөн, генерал-губернатор, үҙенең әске һиҙемләүен тыңланы. Шуға ла, ул башҡаса был хәбәрҙе ҡуйыртмай, кире, ҡырҡа бойороҡтарға күсте:

– Эштәге һуғышсыларҙы өс көн эсендә кире полктарына ҡайтарырға. Хәҙер үк манифесты төрки теленә тәржемә итеп, шул тәржемә йөкмәткеле ҡағыҙҙарҙы таратырға, һәр өйәҙгә, кантонлыҡҡа сапҡындар ебәрергә. Ям-почта аттарын да тик шул маҡсатта ҡулланырға. Сиркәүҙәрҙә, мәсеттәрҙә халыҡтарҙы йыйып, император ғәли йәнәптәренең мөрәжәғәт иғланын уҡырға. Өçтәмә рәүештә, минең дә фарманды уҡырға. Сапҡындар билдәләнгәнсе фарман әҙер буласаҡ.

Әллә генерал-губернатор үҙ фарманына керетеп яҙһын тип, әллә тырыш эшмәкәр хеҙмәткәр булыуын күрһәтергә телəп, Матвей Наврозов, генералдың һөйләүенән бер аҙға туҡтап ҡалыуынан файҙаланып, үҙ фекерен әйтеп һалды:

– Хәрби положениены иçкә алып, башҡорт кантонлыҡтарында һәр бер десятинанан өçтәмә рәүештә бишәр бот игенде өйәҙ амбарҙарына тапшырырға яһаҡ һалырға, тип тә яҙырға.

– Ә башҡаларға? Башҡаларға әллә һуғыш сыҡмағанмы? – тип, борола биреп һорау бирҙе генерал-губернатор.

– Башҡалар бит уңдырышһыҙ ерҙә, ҡоролоҡ ерҙә йәшәйҙәр, — тип яуапланы Наврозов.

– Матвей, иçеңдә тот, башҡорттар ҡара яҙҙан ҡара көҙгә тиклем хеҙмәттә. Ә бит, Яйыҡ казактары йәйге хеҙмәттән ҡотҡарылғандар элек-электән. Быны Сенат үҙе хәл иткән. Беҙҙән башҡа, беҙгә тиклем. Күрәһең, ул осорҙа ла «халыҡ исеменəн» императорға яҙыу ойоштороусылар булған икән, – тип генерал Наврозовҡа төрттөрҙө.

– Башҡорттарҙың иң көслөһө, иң хеҙмәткәре ғəскәрҙә булғас, уларҙың сәсеү майҙаны ла, бесəн эшләү дəүмәле лə байтаҡҡа кәмене. Стат управление шундай мəғлүмәт бирə бит. Тимəк, һалымды тик башҡорт кантонлыҡтарына ғына өçтәргə кəрəкмəй. Ул дөйөм өçтəлергə тейеш. Һəм реаль факттарға ҡарап, миңə һəр өйəҙ, һəр кантонлыҡ буйынса сəселгəн иген майҙандарының күлəмен бирегеҙ, – тип бойорҙо.

– Ит əҙерләүгə лə өçтəмə яһаҡ кəрəк, – тип тағы ла һүҙгə ҡушылды Матвей Наврозов.

– Юҡ, иткə яһаҡ өçтəлмəй. Беренсенəн, яуға былай ҙа меңəрлəгəн аттар китə. Ə халыҡта ныйыр, һарыҡ малы һаны атҡа ҡарағанда əҙ. Был барлыҡ губерна халҡын аслыҡҡа дусар итеү була. Икенсенəн, итте беҙҙең крайҙан көнбайыш Русияға иçкертмəйенсə нисек еткерерһең? Юҡ, ит яһағы булмай, – тип ҡырт киçте генерал.

Матвей Наврозов башҡаса өндəшмəне. Йыйылғандар ҙа үҙара бышыр-бышыр һөйләшеп алдылар ҙа тағы ла шымып ҡалдылар.

– Фарманда, – тип һүҙен дауам итте губернатор, – иррегуляр ғәскәргә һуғыш кәрәк-яраҡтарын әҙерләү халыҡтың үҙ иңенә төшә. Әлбиттә, полктар күбәйәсәк. Тимәк, уның ауырлығы ла күбәйәсәк. Батша ғәли йәнәптәренең башҡортҡа тимерлектәренең эшләүен тыйған фарманы булһа ла, ул бик күптәнге. Уға хәҙер етмеш алты йыл уҙған. Шуға ла башҡорттарҙа тимерлектәрҙе эшләтеү бөгөн маҡсатҡа ярашлы булырға тейеш. Тимерлектәрҙе эшләтеү ҡорал әҙерләүҙә лә кәрәк-яраҡ өсөн дә өҫтәмә ярҙам буласаҡ. Золотоустье – Алтын Тамаҡ – Златоуст тау округы етәкселегенә, Миәстә, Силәбелә, Сыбаркүлдә һәм башҡа зауыттарҙа ғәскәрҙәр өсөн ҡорал, кәрәк-яраҡ әҙерләү ҡушылған. Губерна рекрут комитетына, өйәҙ етәкселәренә, кантон башлыҡтарына рекруттарҙы иҫәпкә алып, һәр өйәҙ, һәр кантонлыҡта үҙендә полктар төҙөргә. Полктарҙа һуғышсылар һаны 500-ҙән дә кәм булмаҫҡа тейеш. Был полктың яуға инә торған көсө. Бынан тыш, һәр полктың үҙенең бәйләнеш, хужалыҡ, тәьминәт, табиплыҡ, артмаҡ аттар, йөк йөрөтөүсе бүлектәре лә булыуы мотлаҡ. Күҙһеҙ, ҡолаҡһыҙ яу алып барып булмай. Ул бүлектәр айырым булып, туранан-тура полк командирына буйһондорола. Һәр бер полк командиры итеп үҙҙәренең кешеләрен – башҡортто тәғәйенләргә. Сөнки башҡорт һуғышсылары урыҫса белмәй һәм улар үҙ милләте кешеһенә генә буйһона. Башҡаларҙың ҡушыуын тыңламайҙар. Ә башҡорт полкы командирының өҫтөнән беҙ үҙ командирҙарыбыҙҙы – урыҫ офицерҙарын тәғәйенләрбеҙ. Тәҡдимдәрегеҙҙе фарманға керетергә исем-шәрифтәрен миңә бирегеҙ, – тип, вице губернатор Илья Федор улы Федоровҡа ҡараны.

Аттар һанын алыу, аттарҙы армияға алыуҙы ойоштороуҙы аттар әҙерләүсе комитетҡа ҡушты. Армияны хеҙмәтләндереү буйынса табибтар етмәй ине, дөрөҫөрәге, улар юҡ ине. Шуға күрә дүрт ауыр яралының өсәүһе һәр саҡ баҡыйлыҡҡа күсә ине. Был һорауҙарҙан тыш, губерна етәксеһе Ям-почта элемтә эшенә лә иғтибар итте. Ырымбур – Өфө – Мәскәү, Ырымбур – Һамар, Ырымбур – Екатеринбург, Ырымбур һәм өйәҙҙәр, кантонлыҡ үҙәктәре араһында даими Ям бәйләнеше, кәрәк осраҡта сапҡындар эше ойоштороу ҡаралды.

Генерал-губернатор Волконский Европала дары еҫе таралыуҙы белгәс, үҙенә төшә торған бурысты алдан аңлап, Европаға ғәскәрҙәрҙе көсәйтеү өсөн әҙерлекле өс Башҡорт атлы полкын әҙерләп ҡуйған ине. Манифесты ҡулына алып, губерна хеҙмәткәрҙәре менән кәңәшмә үткәреү менән шул уҡ көндө, йәки 1812 йылдың 25 июлендә үк, ул өс полктың да яуға ебәрелеүе тураһында әмерен яҙҙы. Әммә манифесты тупланыу урыны Түбәнге Новгород булғанлыҡтан, полктар артабан ҡайһы корпус, ҡайһы

армияға йүнәлтмә алыу өсөн тәғәйен ергә һамар, Симбирск, Арзамас аша 1812 йылдың 29–30 сентябрендә килеп еттеләр.

Һәр ваҡыт хәрби әҙерлекле был полктар Башҡортостандың өс төбәгендә урынлашҡандар ине 4-се атлы полк 4-се һәм 5-се башҡорт кантонлығы кешеләренән төҙөлөп, Миәс менән Силәбе араһында, Сыбаркүл нығытмаһы янында, Күңгерәү ауылында тора ине. Был полк үҙенең һуғышсылары һаны буйынса ике полкка торошло булып ҙурайҙы. Сөнки Күңгерәү, Златоуст, Ҡатау, Өфө юлы менән барған полкка, Өфө өйәҙенән Стәрлетамаҡ олоҫо 8-се кантондан һуғышсылар ҡушылды.

Өсөнсө атлы полк Үрге Урал өйәҙе Йылайыр ҡәлғәһе яғындағы Сибай, Ишбулды ауылында тора ине. Ә бишенсе полк Бөгөлмә өйәҙендә тороп, шул уҡ юл Ҡазан, Һары-сабаҡ-Чебоксары Түбәнге Новгородҡа бер үк ваҡытта килеп еттеләр. Уларға, артабанғы бер туҡтауһыҙ бәрелештәр, ҡара-ҡаршы сәнсешеүҙәр, сабышыуҙар менән Австрия, Германия ере аша Парижға тиклем булған юлдарында Аллаһы Тәғәлә исеменән иҫән-һау ҡайтыуҙарын теләп, уңыштар, еңеүҙәр насип итһен инде тип, һыҡрап-һыҡташып оҙатып ҡалдылар ата-инәләре, ҡатындары, балалары.

Губерна идаралығы ултырышында, хәрби генерал Григорий Семен улы Волконский, барлыҡ өйәҙ-кантонлыҡтарға махсус сапҡындар урынына, көн һайын һәр төрлө эш, йә башҡа сәфәр менән килгән, әҙ генә дәрәжәле булған кешеләрҙе табып, батша ғәли йәнәптәренең иғлан-мөрәжәғәтен ҡулдарына тапшырып, тиҙ генә үҙ төбәктәренә ҡайтарырға ҡушты.

* * *

Илле алты йәшлек старшина Йыражбай Буҙаҡай улы, дүртенсе кантон башлығы Ҡорама Муйнаҡовтың күрһәтмәһе менән, губерна баш ҡалаһы Ырымбурға һәр төрлө ҡағыҙ эштәре менән бер йомаға, өсөнсө көн килгән ине...

Ҡорама Муйнаҡ улы Рәсүлев кантон башлығы булһа ла, уҡыуяҙыуға моҡаҫ ине. Шуға күрә лә, ул, губерна үҙәгенә, уҡый-яҙа һәм урыҫ телен ярайһы уҡ һөрмәләгән старшиналарын – Йыражбайҙы, Баязитты, йә үҙе артыҡ уҡ ышанып бармаған писары Төхмәтулла Үтәйевте йөрөтөр булды.

Дүртенсе кантондан ҡор башы, старшина Йыражбай Буҙаҡаевты, бишенсе кантондан Арғаяш олоҫо Көҙәш ауылынан Ҡотлоҡәҙим старшина Көҙәшевте һәм башҡаларҙы губернатор канцелярияһына саҡыртып алдылар ҙа, батша Александр I манифесын һәм генерал-губернатор Волконскийҙың ике телдә – урыҫса һәм төркисә яҙылған фарманын уҡып, уны пакетҡа һалып,

һәр береһенең ҡулдарына тотторҙолар. Тотторҙолар һәм хәҙер үк, һәр береһенә, ҡайтыу юлына сығырға бойорҙолар. Йыражбай менән Ҡотлоҡәҙим Көҙәшев бер йүнәлештә ҡайтҡанлыҡтан, үҙҙәрен бергәрәк тоттолар. Юлдары Тал ҡалаға – Верхнеуральскиға, унан Уҡлы-Ҡарағай нығытмаһына тиклем бергә килде. Йыражбай Буҙаҡаев Үрге Урал ҡаласығынан тура Мәҫкәү, Науырыҙ ауылдарына сығып, артабанғы юлын Кәтерин юлы менән дауам итер ине. Әммә быйылғы ҡыш бик күп ҡарлы булғанлыҡтан, Яйыҡ йылғаһы киң булып ташты. Унан аҡҡан боҙҙар күперҙең бүрәнә тотҡан баҫтарын ҡайһыһын ҡыйшайтып, ҡайһыһын һурып, ағыҙып алып киткәнлектән, күперҙәр емерек ине. Уны әлегә махсус рәүештә лә эшләмәнеләр кеүек. Сөнки һирәк-һаяҡ булһа ла, һалдат ағып үтә ине.

Уҡлы Ҡарағайҙа, унан һуң да, Йыражбай һәр ауыл һайын һуғыш башланыуы, ул турала батшаның манифесы, ә губернаторҙың фарманы булыуы тураһында һөрән һалып килде. Ул туҡтаған һәр ауылда әҙме-күпме кешеләр йыйылды. Өндәшмәй генә тыңланылар ҙа, шомһоноп, ауыр уйҙары менән таралыштылар. Батша тағы ла бөтә ир-атты һуғышҡа алып китә инде... Әллә ниндәй ҡырҙарҙа, әллә ниндәй илдәрҙә ҡанһырап ятып ҡала инде балаҡайҙарҙың, ғәзиз атайҙарҙың башҡайҙары, тип үрһәләнделәр. Бындай осҡон йыйылыштар Ахунда, Асыуҙыла, Аҡбулатта булды. Старшина Буҙаҡай улы Йыражбай, үҙенең ауылы Малай-Муйнаҡҡа ҡараңғы төшөр саҡта ғына ҡайтып етте. Ул төнгә ҡарамай юлын дауам итергә уйлаған ине, әммә кибетле (рессорлы) арбаның алғы күсәрендә ултырып ат тотҡан күсәрсе-күсәр, бер тәгәрмәстең ватылыу ихтималлығы бар, тигәс, төнгә юлға сығыуҙан баш тартты. Аттар ҙа талсыҡты, үҙҙәре лә, ҡатын да һағындырған. Бер төн менән ваҡиғалар үҙгәрмәҫ, тине аҡыллы баш Йомабай ҡоҙаһы. Ысынлап та, ҡоҙа дөрөҫ уйлай, тип һығымта сығарҙы Йыражбай.

Ям-почта юлы тармаҡланыу менән кантон үҙәген Ҡорама Муйнаҡ улы Рәсүлев әлекке Ҡорама ауылына күсергән ине. Ҡорама ауылының исеме кантон Ҡорама Муйнаҡ улы Рәсүлевтең исеменә тап килһә лә, ул исемдең нигеҙе башҡа, күптәнге һәм бөтөнләйгә икенсе кеше исеме.

Ҡорама Бурама улы Ҡунаев, оло ҡартталары Ҡунай ултырағынан көнсығыштараҡ, Ҡомас тауы алды шишмәлектәре буйына, нигеҙләнгәйне. Ҡораманың кантон үҙәге булып китеүе, уның юл сатында булыуына бәйле ине. Бер юл саты, юл тармағы өйәҙгә Троицкиға – Өстамаҡҡа китһә, икенсе саты Золотоустье – Исәт – Екатеринбург, ә өсөнсө саты Сыбаркүл крепосы – Силәбе өйәҙен ялғай ине. Көньяҡ-көнсығыш Уралда ҡара металлургия, алтын табыу сәнәғәте үҫешкән һайын ҡалалар ҙа үҫеш алды. Ул

ҡалаларҙы бәйләр Ям юлдары ла үҙгәрә торҙо. Ә кантон үҙәгенә Ям юлы өҫтөндә булыу үҙе бер шарт ине.

Старшина Йыражбай Буҙаҡай улы һыйыр көтөүе сығыр алдынан уҡ, үҙ идаралығында – Малай-Муйнаҡ ауылында унлыҡтарҙы, иллелек башлыҡтарын һәм йөҙлөктәрҙе йыйып, батша, губернатор мөрәжәғәт фармандары буйынса күрһәтмәләр бирҙе лә ике Ирәндек тауы араһынан Уй йылғаһын кисеп, Көсөк юлы менән Ҡорама кантон идаралығына килде.

Төпөш, төптән сыҡҡан, йәмшегерәк танаулы, әммә үҙ һүҙле һәм зиһенле Ҡорама кантон, старшина атының ҡапҡа төбөнә бик иртә килеп туҡтауынан бер ҙә шом-шөбһә һиҙмәне. Тәбиғәттәре йомшаҡ уҡ булмаған был ике кеше бер-береһенә, ни әйтерһең, тигәндәй ҡарап торҙолар ҙа, Йыражбай уға ҡуйынынан сығарып, батша манифесын һәм губернатор фарманын тоттороҙо. Ҡорама уны көтөп алынған аманат кеүек, ҡулына тартып тигәндәй алды ла, төргәкте әйләндереп-әйләндереп ғәжәпһенеү менән ҡарап, артында торған сәркәтибе Төхмәтуллаға биреп, уҡырға ҡушты. Сәркәтип Төхмәт батша манифесының төрки тәржемәһен уҡый ғына башлағайны, кантон башлығы уны ҡырт киҫте:

– Урыҫсаһын уҡы! – тине ул, старшина алдында үҙенең белемле лә, йәнәһе урыҫ телен дә белеүен белгертер өсөн.

Ҡорама кантон урыҫса бер аҙ һупалай ине, сөнки ул башҡорт ғәскәре менән 1806–1808 йылдарҙа урыҫ-төрөк һуғышында ла, унан алдағы урыҫ армияһының яуҙарында ҡатнашып ҡайтты. 1799 йылдарҙа Кавказда, Грузияла батырлыҡтар күрһәтеп, Өфө наместничествоһында генерал-губернатор, аҙаҡ Ырымбурҙа инфантериянан генерал Игельстромдың күҙенә күренде. Ауан, тәүәккәл ине Ҡорама Муйнаҡов. Әммә яҙырға өйрәнмәне. Ә Ҡөрьән сүрәләрен яҡшы уҡ белде.

Ҡорама кантон сәркәтип Төхмәт Үтәев батша манифесын да, губернатор фарманын да уҡып сыҡҡас, бөгөн хәбәр итеп, иртәгә кантонлыҡтың барлыҡ старшиналарын, йөҙлөктәрҙе, муллаларҙы, йыйынға саҡырырға ҡарар итте.

Элек 4-се һәм 5-се кантонлыҡтарҙан төҙөлгән 4-се полк яуға киткән ине. Яуға китер һуғышсыларҙың хәбәр итеп өлгөргәндәренең ағай-энеләре, ҡатындары элекке башҡорт ауылы Күңгерәүгә килеп оҙатып ҡалдылар. Һуғыш ғауғаһы хәбәре барлыҡ кантонлыҡҡа таралып өлгөргән ине инде. Әммә берәү ҙә, тағы бөтә халыҡты үҙ шомлоғо эсенә алыр, өҫтәмә саҡырыу булыр тип уйламай ине. Һуғышҡа китеүселәрҙән тыш, әллә ни кәрәклеге ҡалмаһа ла, көнсығыш сик буйында һәр ҡәлғә, һәр нығытмала казаклыҡ хеҙмәтен алып барыусылар ҙа үҙ урындарында торҙолар. Улар Исәттә – Екатеринбургта, Силәбелә, Ҡурғанда, Троицкиҙа, Верхнеуральскиҙа һәм вағыраҡ һәр нығытмала бар ине.

1812 йыл августының тәүге көндәрендә үк йыйылған был йыйын Ҡорама ауылында, «Мулла тау» тип аталған кескәй тау өҫтөндә үтте. Ул тауҙан тирә-йүн бик күркәм булып күренеп тора. Тау башы тигеҙлегенә ҙур ҡаҙандар әлделәр. Ҡаҙылыҡлы тыу бейәне салдылар. Һәр ҡаҙан тулы ит бығыр-бығыр ҡайнай ине.

Саҡырылған да, саҡырылмаған да кешеләр тирә-йүн ауылдарынан килеп, һәр береһе үҙ урынын алғас, Ҡорама кантон Муйнаҡов ҡулын күтәреп халыҡты тынысландырҙы ла һүҙҙе батша манифесын алып килгән, араларында йәше менән иң оло старшинаға Йыражбай Буҙаҡай улына бирҙе. Аяғына йомшаҡ ситек, өҫтөнә уҡалы, еңел йоҡа елән, ә башына тирмә кеүек ослораҡ, сит-сите төҫлө ептәр менән сигелгән түбәтәй кейгән, киң ҡулбашлы, ҡалын кәүҙәле, урта буйлы Йыражбай уртаға сығып баҫты ла шунда уҡ һүҙ башланы.

– Ағай-эне, туғандар, ҡорҙаштар, хеҙмәттәштәр! Беҙгә, Рәсәй иленә Франция тигән илдең Наполеоны бик ҙур әрмеһе менән баҫып ингән. Урыҫ әрмеһе бөгөнгө көндә ҡала артынан ҡала ҡалдырып, Смоленск һәм Мәскәү тигән баш ҡалаға сигенә лә сигенә. Бөтә Рәсәй ҙур хәүеф һәм ҡурҡыныс аҫтында. Батша ғәли йәнәптәре һәм губернатор беҙгә мөрәжәғәт һәм өндәүнамә ебәргән. Бына ул, Ырымбурҙан үҙ ҡулым менән килтерҙем, — тип манифесты һәм генерал-губернаторҙың тәржемә фарманын уҡып сыҡты.

Ил өҫтөнә килгән ҙур бәлә тураһындағы был хәбәрҙе халыҡ тыныс ҡына ҡабул итте кеүек. Әлегә хеҙмәттән буш йәки линиянан алмаш килгәс кенә ҡайтҡан яугирҙар өсөн был хәбәр хатта, ҡәҙимге белдереү кеүек кенә тойолдо.

Тик бәләнең ҙур, бик ҙур булыуын аңлаған аҡһаҡалдар үҙ-ара лыбыр-лыбыр һөйләшергә, ә оло инәйҙәр ара-тирә баштарын һелкеп, уфтана башланылар.

Яу күргән Ҡорама кантон барлыҡ старшиналарға яуға барасаҡ ир-аттың исемлектәрен төҙөп тәстиҡ итергә, идаралыҡҡа килтерергә бойорҙо. Һәр йорт старшинаһы, үҙҙәренең яуға ебәрерлек кешеләренән тыш, уларҙың һаулығына, ғаиләне ашатыр кеше ҡалыуы-ҡалмауына, кәрәк-яраҡ менән тәьминәтенә, йәшенә иғтибар итеү кәрәклеген әйттеләр. Бынан башҡа, ҡатын-ҡыҙға яра һәм ауырыу дауалау өсөн һәр төрлө дарыу үләндәрен йыйып киптереү, уларға ваҡ тоҡсайҙар тегеү, ҡорот, кипкән, ыҫланған ит, ҡаҡ, кейем-һалым тегеп әҙерләү эштәренән башҡа ир-атҡа ҡорал һуғыу, тимерлектәрҙе эшләтеү, арбалар эшләү, тәгәрмәс бөгөп, уларҙы тимер менән ҡоршау, дегет ҡайнатыу, ҡайыш эшләү, йүгән, һуғыш аттарына түшлек, ҡойошҡан, эйәрҙәр эшләү, серге баҫыу, нәҙек ҡыларҡандар ишеү һәм башҡа бик күп эштәрҙе эшләү ысулдарын тағы ла киңәйтергә ҡарар ҡылдылар.

Йыйын кантон идаралығын һайланы. Ул идаралыҡ ағзалары һәр олоҫта, һәр ауылда нисә һуғыш аты булыуын да, ҡайһы тимерлектә күпме, ниндәй ҡорал ҡуйылғанын да белергә тейеш ине. Олораҡ ир-ат ҡылдан нәҙек итеп үрелгән һәм һағыҙ менән ыуылған бихисап кереш-тәте, яндар бөгөргә йүнәтә таҡталары, ҡыл етмәһә, керешкә һабаҡтыҡ бәйе эшләү бурыстары ҡуйылды. Быларҙан башҡа булған ҡылыс-хәнйәрҙәрҙе үткерләү, ҡылыс, һөңгө баштарын ослау кеүек бурыстар борон-борондан ҡарттар эше ине. Төрлө хәбәрҙәр, төрлө бойороҡтар килеп торҙо кантонлыҡҡа. Халыҡ өсөн иң ауыры итек тегеү булғандыр, ахыры. Беренсенән, уға бик оҫта ҡуллы кеше кәрәк ине. Икенсенән, итектең ҡунысына яраҡлы күн эшләп булһа ла, табанлығына һәм үксәһенә һалыр ҡалын күн эшләү, уны тегеү ауырыраҡ ине. Сөнки табанлыҡ һәм үксәлек тегергә тейешенсә кәрәкле әнә йәки осло, нәҙек оҙон беҙ булманы. Был ҡоралдарҙы эшләү, бигерәк тә йыуан әнә һуғыу, уның күҙәнәген тишеү – мөмкин үк булмаған эш ине. Шуға ла ҡалын күнлекте осо киртләс беҙ менән үтә сәнсеп, һағыҙға ышҡылған һабаҡтыҡты тартып сығарып, тегер булдылар. Борон-борондан яуға йөрөгәнлектән, быуындан быуынға күсә килгән был әҙерлек эштәре халыҡҡа таныш ине. Шуға күрә лә артыҡ ғауғалашмай, һәр кем үҙ өлөшөнә тейгән бурысты тыныс ҡына үтәргә кереште. Дарыу үләндәре онтағы һалыр өсөн ҡыҙҙар ваҡ-ваҡ тоҡсайҙар, етендән һуғылған таҫтамал-ҡулъяулыҡтар, йәйә керештәре өсөн күн тоҡсайҙар ҙа тектеләр. Инәйҙәр, ҡәртнәйҙәр, ҡатындар йылы көпө, еңел тун, итек әсенән кейер өсөн тире ойоҡ, бармаҡсан бейәләй, ҡолаҡсын бүрек, һаҡлыҡҡа күлдәк, оҙон ыштан һәм башҡа кәрәк-яраҡ эшләүҙе үҙ иңдәрендәге бурыс тип беләләр. Уларға һәр береһенә әйтеү ҙә, нисек эшләргә өйрәтеү ҙә кәрәкмәй. Ҡорамала, Мулла тау башында үткәрелгән был йыйын ҡарары барлыҡ халыҡ өсөн дә мөкәддәс бурыс булды.

Ҡорама кантондың, бер ҡарамаҡҡа ҡырыҫ, үҙ һүҙле кеше булып ҡыланыуы, уның урыҫ администрацияһы вәкиле, уның ҡуйылмышы булыуында ине. Әммә ул урыҫ администрацияһының халыҡҡа йоғонтоло түгеллеген, уның халыҡтан айырмалы, башҡа булыуын төшөнә ине. Халыҡ үҙ идаралығы менән йәшәй. Халыҡ өсөн иң иғтибарға лайыҡлыһы – мулла-абыҙҙар һүҙе. Ә уларҙың һүҙен тамам ҡарарлаштырыусы йыйын булды. Табындар олоҫо уны «Майҙан» тип йөрөттө. Майҙанда төп ҡарарҙы тәҡдим итеүселәр, уны халыҡҡа хупларға, йә кире ҡағыу өсөн, мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйыу, әлбиттә, аҡһаҡалдар ҡороноң ҡулында булды. Бында кантон башлығы ла бик әүҙем ҡатнашты, әммә уның тәҡдимдәре көслә ҡарарға, теге йәки был һорауҙарҙы керетергә тырышыуы, халыҡ өсөн мотлаҡ булманы. Ололарҙан, аҡһаҡалдар

ҡоронан, кантон башлығы тәҡдименән тыш, ул ҡарарҙарҙы тормошҡа ашырыусы йәш, көслө ир-аттың талабы, тәҡдиме бик һәлмәкле ине. Шуға күрә аҡһаҡалдар ҡоронда уның ҡор башы, ҡабул ителеүгә тәҡдим ителгән һорауҙарҙы ғәмгә әйтеп бөткәндән һуң, һәр саҡ тынып ҡалыр булды. Тынып ҡалыр ҙа, ян-яғына ҡараныр ине. Рәсми рәүештә йәш ир-аттан һүҙ, тәҡдим дә һоралманы. Әммә ҡор башының вәғәз һүҙенән һуң тынып ҡалыуы – ризаһығыҙмы? Кемдең ниндәй тәҡдимдәре бар? – тигән һорауы менән бер ине. Ҡорама кантон өсөн йыйын ҡарары мотлаҡ ине, сөнки ул бер үҙе йыйын ҡарарына ҡаршы сығып, үҙ халҡына үҙен дошман итеп ҡуйғыһы килмәне.

Дөйөм кантон йыйылышында һайланған халыҡ идаралығы һәр ауылда халыҡ йыйынын йыйып, кемдәрҙе яуға ебәрергә тейешлектәрен билдәләргә бурыс алды.

– Һуғыш беҙгә барыбер килеп етмәҫ, улар ҡалмаҡтар түгел бит. Суҡлы кейем, ҡауырһын тағылған арҡыры эшләпә менән беҙҙең Урал көртөндә, Урал буранында ни эшләһендәр улар? Ҡалмаҡ, әнә, эшкәртелмәгән сирәмәт тирене аяғына ла, өҫтөнә лә кейгәс, беҙҙең менән бер аҙ алышып маташты. Әммә улар ҙа ҡышҡыһын булдыра алмайҙар. Ҡыш ер ҡаҙып, байбаҡтары кеүек тиреләренә төрөнөп, шул соҡорҙарында яталар. Әселектән эшкәртелгән тире тун, аяҡҡа йөн ойоҡ, быйма кейгәс, беҙ Урал ҡышына ла бирешмәйбеҙ, ҡалмаҡҡа ла. Көнбайыш халҡын да беҙ күрҙек инде Пруссия һәм Швед һуғышында. Оҙон утмылтыҡ, аҡ ойоҡ кейеп, ҡайҙан килеп етһендәр улар беҙгә? – тип үҙ һүҙен әйтте йөҙбашы Баязит. – Шулай ҙа, бер мөхиттә йәшәгәс, яуға бармай ҡалыу башҡорттоң ҡағиҙәһендә түгел. Батша үҙе лә, губернатор ҙа беҙгә ҡағыҙ аша мөрәжәғәт иткән бит. Башҡа милләттән бит бер ҙә ғәскәр тупларға ҡарар итмәгән, – тип һүҙен йомғаҡлағандай итте.

Дөйөм кантон ырыу йыйыны ҡарарынан һуң, тәмле һурпа, һимеҙ ит ашап, халыҡ тиҙ генә таралышты. Таралышмаҫ борон олоҫ старшиналары, үҙҙәре айырым кәңәшләшеп, кемдең ҡайһы ауылда, ҡасан йыйылыш үткәреүен билдәләп, өгөт-нәсихәт өсөн бер-береһенең йыйынына барырға һүҙ беркеттеләр. Кантон башы Ҡорама Муйнаҡ улы үҙенең сәркәтибе Төхмәт Үтәйевҡа манифесты һәм губернатор фарманын тиҙ генә күсереп, һәр олоҫ старшинаһына бирep ҡайтарырға бойорҙо.

Һәр йортта, һәр түбәлә йыйылыштар үткәреү ярайһы уҡ ваҡытты алды. Һуғыш башланыуы тураһында халыҡ белһә лә, һәм яуға китеүселәр өсөн һәр өй һайын кәрәк-яраҡ әҙерләнһә лә, йыйындар үткәреү мотлаҡ ине. Сөнки һуғышҡа кемде ебәреү, кемде ебәрмәү тураһында дөйөм йыйындың ҡарары кәрәк ине. Һәр кантондан, нисә һуғышсы алынырға тейешлеге тураһында, губернаторҙан килгән фарман булһа ла, кантондың үҙе тарафы-

нан һәр йорттан, һәр түбәнән нисә кеше алынасағы тураһында асыҡ һан юҡ ине. Был олоҫ старшиналарын уңайһыҙ уҡ хәлгә, билдәһеҙлеккә ҡуйҙы. Шуға был мәсьәләне олоҫ старшиналары үҙҙәре хәл итмәйенсә, һәр олоҫтоң үҙ аҡһаҡалдарының ҡорона ҡуйҙы. Аҡһаҡалдар һәр саҡ аҡһаҡалдарса хәл итте мәсьәләне.

Билдәле абыҙ һәм аҡыл әйәһе Мөхәмәдйәр мулланың ейәне Хөсәйенбәк хәҙер үҙе олоҫ аҡһаҡалдарының күренеклеһе. Уларҙың күбеһенә урыҫ дәүләтенең һәр баҫҡынсы һуғыштарында ҡатнашып, бик күп ҙур һыуҙарҙы кисергә, ялҡынлы уттар аша үтергә, баш әйләнерлек бейек диуарҙарға үрмәләргә тура килгән. Дошманға дәррәү көс менән ҡаршы тороу өсөн көнбайыш ерҙәрендә ҡалаларҙың күп булыуын, халыҡтың да ишле икәнен белә улар. Бынан тыш ул яҡта тәбиғәттең йомшаҡ булыуын, һәр төрлө емеш-еләктең һәм бөртөклөләрҙең иртә сәселгәнен, ҡырау алмай бешеп өлгөрөүен дә хәтерләйҙәр, әммә был һуғыш башҡасараҡ. Ул осорҙа беҙ урыҫтар менән һәр саҡ кеше еренә, сит халыҡтар иленә баҫҡын булып керҙек. Ә хәҙер, бөгөн дошман беҙгә үҙе кергән. Был һуғыштың эттәхиәте башҡа бит, тип уйланылар аҡһаҡалдар.

– Күмәгебеҙҙең иленә баҫып кергәндә, күмәклəп дөмбәҫләргә кәрәк инде, — тип, Хөсәйен мулланың фекерен белгәндәй, хорунжий Әсфәндиәр һүҙен дауам итте. Холҡо бик тәүәккәл, ҡырҡыу, ҡыҙыу булғаны өсөн халыҡ уны ихтирам итһә лә, әллә иркәләп, әллә хорунжий булыуына ҡарамаҫтан, йәшлеген билдәләп, Әсфән, ҡайһы берһе Әстән тиер ҙә ҡуйыр ине. Кемдәрҙе яуға ебәрергә, кемдәрҙе ҡалдырыу мәсьәләһен кантонлыҡта түгел, һәр ауыл үҙе хәл итте. Ғаиләһенән әлекке һуғышта шаһиттар булғандарға, мал-тыуары ишле булғандарға, һаулығы аҡһағандарға, күп балалыларға әрме хеҙмәте янаманы.

Яуға китергә тейешле кешеләрҙең исемлеге төҙөлдө. Унлыҡтары, иллелектәре, йөҙлөктәре билдәләнде. Улар ҙа һәр берһе үҙ кешеләренең әйбер-ҡараһы, аҙығы, аты, ҡоралы булыу булмауын тикшерҙе, барланы, етмәгәнде хәстәрләште. Йөҙлөктәр Ҡорамала, Мулдаҡайҙа, Ҡужайҙа, Малай-Муйнаҡта, Ҡолаҡтыла йыйылырға тейештәр ине. Бара торған юл бик йыраҡ, бөтә әйберҙәрҙе әйәргә бәйләп алып йөрөү мөмкин булмағанлыҡтан, һәр биш һуғышсыға ике атлы берәр арба тәғәйен әҙерләнде. Ул арбала биш кешенең әйберҙәре, киптерелгән аҙыҡ-түлектән башҡа, әлегә кәрәкмәгән ҡорал, ҡорал кәрәк-яраҡтары һаҡлана ине. Әммә йөҙлөктәрҙең үҙ-ара килешеүе буйынса, бер һуғышсы ла, бер ҡасан да билдәренән ҡылыстарын һәм хәнйәрҙәрен һалырға тейеш түгелдәр ине. Был Башҡорт полктарында яҙылмаған боронғо ҡанун ине.

Ҡорал әҙерләгәндә һөңгө буйынса тауыш сыҡты: был һуғышта ниндәй төрлө һөңгө ҡулай буласаҡ? Берәүҙәр ҡармаулы ҡаяу һөңгөһөнә өҫтөнлөк бирҙеләр. Икенселәре дүңгәрәкле тимер күлдәк кейгән осорҙағы кеүек сәнске, йәки һалдау һөңгөнө тәҡдим иттеләр. Һалдау һөңгө еңел, әммә нәҙек тәрән яра һала. Һабы ҡыҫҡа була. Урҙаһы йыуан. Урҙаһы йыуан булған өсөн дә, ауыр булмаһын тип, ҡыҫҡа нап ҡуялар. Һалдау тәрән яра халғас, тартып алғанда ҡайырыла, сөнки ул һуғыш ҡыҙыу хәрәкәттә бара. Һөңгөнө тартып алыуға тиҙ мәл үтһә лә, ул һуғышсыны тотҡарлай. Ҡаяу һәм ҡармау һөңгөһө ике алым эшләй. Осо япраҡ кеүек ҡаяу тәрән кермәһә лә, тәнгә үлемесле киң яра һала. Яранан тиҙ һурып алына. Уның менән һыбайлы дошманды атһыҙ ҡалдырып була. Ырғаҡ менән ҡармап алып, ат өҫтөнән һөйрәп төшөрәһең дә уға йә ипташең, йә үҙең арҡаһына ҡаҙайһың. Ҡармауҙың һабы ла оҙон, йөрөтөргә, йөҙләккә кейҙерергә йөҙләксәһе лә бар, тип ҡармауҙы хупланылар. Әҙерлек эштәре алып барғанда, ауыр мәсьәләләрҙең береһе булып, арба үҙәктәрен эшләү, тәгәрмәстәргә ҡоршау тартыу, уларға көпсәк тимере һәм дә алғы кендек эшләү торҙо. Сөнки, беренсенән, урыҫ хөкүмәтенең башҡортҡа тимерлек тотоуҙы үлем язаһы ҡуйып, тыйған ине. Тимерлектәр бөткәс, билдәле, тимерселәр ҙә бөттө. Шөғөл һүнде, алымдар онотолдо. Был халыҡтың көндәлек тормошона ла кире йоғонто яһаны. Тимерлек осорона тиклем үк булған һыу өсөн ағас күнәктәр, өңөп эшләнгән ағас алдыр-табаҡтар, тәгәстәр, ағас ҡалаҡтар тағы ла ҡорҙа, табында урын алды. Тимерлек тотоу үлем язаһы менән ҡарарланһа ла, халыҡ үҙ йүнен тапты. Элек ҙур, дөйөм ырыу өсөн иретелә һәм һуғыла торған асыҡ та, өҫтө көмбәҙле ябыҡ та тимер иретеү мейестәрен һәр хәлле башҡорт, үҙенең йәшерен урынында, ауылдан йыраҡ түгел, йә яр аҫтында өңөлгән, йә таш ҡая араһына һары балсыҡ менән генә һыланған, әммә ҡаттансыҡһыҙ ҡойолған кеүек, йым таштарҙан тығыҙ итеп һалынған таш мейес тотто. Ул мейесте тормошто аңлаған ырыу, түбә, йорт серен һаҡларҙай кешеләр генә белде. Йөҙәр йыллап үлем язаһы ҡурҡынысы аҫтында йәшәгән башҡорт төбәге шулай ҙа үҙ боронғо шөғөлдәрен – тимер, баҡыр, ҡорос һуғыу ысулдарын, бик һирәклән булһа ла, һаҡлап алып ҡалды.

Тимер үҙе лә булманы, сөнки башҡорттағы тимерлек үлем язаһына тигеҙ булғанлыҡтан, мәғдәнде иретеү күп төтөн сығара ине. Шуның өсөн дә мәғдән иретеүсе һәр ауылда, уның һәр бейеклегендә иретеү алып барғанда, төтөн сыҡҡан ваҡытта күҙәтеүселәр, улар янында йүгереүселәр торҙо. Йүгереүсе булып һәр саҡ майҙанда йүгереп үҙған үҫмер малайҙар, үткер, йүгерек ҡыҙ балалар ҙа булды. Уларҙың бурысы – йыраҡтан күренгән юл башында йә арбалы, йә һыбайлы кешенең килеп сығыуын күҙәтеү.

Йүгерек тура тимерлеккә йүгерә. Ә унда шунда уҡ тимер ирегән ҡуҙҙы һүндерәләр, йәки килеүсенең кем икәнен асыҡлағанса, төтөнһөҙ күмер яғалар, ҡапыл ныҡ эҫелек биреүсе, әммә башта төтөнлө сатыр-сотор яғыуҙы һүлпәнәйтәләр.

Ләкин күпселектә эттәхиәт башҡасараҡ була. Старшинаны, йөҙбашын һайлағанда, халыҡ үҙ мәнфәғәтен аңлаусы урыҫҡа, тимәк, власҡа мөкиббән кешене һайлауҙан һаҡ булды. Шуға ла күп старшиналар халыҡтыҡы булды, улар араһынан сыҡты. Һуғыштарҙа бер әҙәм дә кермәҫлек ҡырҡыу ерҙәргә урыҫтар уларҙы ебәрҙеләр. Әммә әҙҙәре, бик әҙҙәре генә урыҫ әфисәрҙәре тарафынан баһаға лайыҡ булды. Улары ла урыҫ әфисәренә яҡшы мөғәмәләлә булғандары. Әҙ генә үҙ теләгеңде, үҙ талабыңды әйттеңме – һин «басурман!» Бер үҙең егерме дошман һалдатына бирешмәһәң дә, һин күренмәйһең. Старшиналарҙың, йөҙбаштарының һәр береһе ут-ялҡын үткән кешеләр булды. Йыражбай ҙа, Исхаҡ та, Ильяс та, Баязит та һәм башҡалар ҙа. Иллелек баштары Мостафа, Нафиҡ, Ишнияз, Таһир үҙҙәре генә ни тора! Һәр береһе һолдо һәм бөтмөр һуғышсы. Улар әҙерләй, улар таба, улар һәр ауырлыҡты хәл итә. Тимерлектәрҙе барын, ҡыуаҡан, тиләү, күбәләк, ҡара-табын олоҫтарында эшләүен эшләтеп ебәрҙеләр ҙә ул, әммә дәүләттән тимерлектәрҙе башҡорттар араһында яңынан эшләтеп ебәреү тураһында указ-күрһәтнамә булманы. Ҡоралланған башҡорттар ул-был сығара ҡалһа, ғәйепләү өсөн указдың булмауы уңайлы ине. Етмеш алты йыл элек ҡулланыуға кергән был ҡанун бөгөн илде ҡурсалауға түгел, батша һәм урыҫ дәүләте мәнфәғәтен һаҡлай ине. Сөнки ҡораллы башҡортто ғәйепләү өсөн ҡануни нигеҙ һаҡлана килде.

Мейестәрҙә тимер мәғдәнен иретеү өсөн яҡын тирәләге боронғо соҡорҙарҙы ҡаҙҙылар. Тимер ҡатнаш таштан ябай ташты айырып сүплəнеләр. Кинйәкәй, Бүләкәй, Бурама, Ҡаҫмаҡты тирәһендәге боронғо тимер, баҡыр ятҡылыҡтарын таҙартырға мәжбүр булдылар. Ҡыятүр, Алтын-Тамаҡ зауыттарына арба кендеге, тәгәрмәстәргә ҡоршаулыҡ, тәгәрмәс көпсәктәренә «көпсәк тимере» һорап мөрәжәғәт итеп тә ҡаранылар. Әммә «от государя для обеспечения иррегулярных полков нет заказа, – тип буш ҡайтарҙылар. Хәйләһеҙ, тыңлаусан, ҡуйылған бурысты үтәүгә тоғро булған, хәҙер инде дөйөм хәрби мәнфәғәттә йәшәгән был халыҡ өсөн, Алтын Тамаҡ-Золотоустье-Златоуст, Мосолов, Лугниндарҙың кире яуабы үтәлгеһеҙ ҡаршылыҡ түгел ине. Был ауыр мәсьәләне лә йөҙ баштары-старшиналар үҙ яуаплылығына алды. Мәғдән иретеү, ҡоршау, ҡойоу, йәймә иҙеү, кендек һуғыу, көпсәк дүңгәләкләү эштәре менән йәнәш беҙ, уҡ баштары, ҡаяу, ҡырҡма, һөңгө остары, хәнйәрҙәр, йәймәле иретмәнән йоҡа

үткер, һығылмалы, кәкрерәк ҡылыстар һуғыу, 4-се, 5-се, 6-сы кантонлыҡта оҫталары булған һәр ауылында барҙы.

Әммә, нишләптер, кантон янында үткән йыйындан һуң байтаҡ көндәр үтеп китһә лә, олоҫтарға өҫтәмә бер ниндәй ҙә күрһәтмә лә, тикшереү ҙә килмәне. Әйтерһең дә, кантон да, кантонлыҡ та юҡ. Тәғәйен тәғәйен инде. Ул халыҡтыҡы түгел. Ул губернатор ҡушыуын һәм теләген башҡарыусы! Ә халыҡ алдында уның яуаплылығы юҡ. Йөҙ баштары старшиналар, кантонлыҡтан дөйөм ғәскәрҙең һанын да, ҡасан, ҡайҙан бергә тупланып, ҡайһы юл менән сығып китеүҙәрен дә белмәйҙәр. Бындай күрһәтмә кантондан уларға юҡ, сөнки ул үҙе лә белмәй.

Башҡа әйбер-ҡара менән ғәскәр тәьмин булды, тип иҫәпләргә лә ярайҙыр, хатта тетелгән йөндән сәкмәндек буҫтау баҫыу ҙа, унан ҡышҡылыҡта кейер өсөн сәкмәндәр тегеү ҙә... Кемдеңдер ҡыш кейә торған йылы сәкмәне бар, ә кемдеңдер юҡ. Бына шул сәкмәнһеҙҙәргә йылы сәкмәндәр тектеләр ҙә инде. Сепрәк тауар етмәгәнлектән, сәкмәндәрҙең ең, итәк-салғыйҙарына яға (алға ябыу) әйләнәһенә йоҡа, йомшаҡ кәзә күне һалдылар, ә ҡаптырмалары муйылдан, элмәктәрен ҡуныс күненән тектеләр. Сепрәккә ҡарағанда ныҡ та, матурыраҡ та килеп сыҡты. Шулай ҙа, иң тот-ҡарлаусы арбалар булды. Тимер үҙәк, уға кейҙерерлек көпсәк әсендәге ҡанатлы тимер дүңгәләк булмағанлыҡтан, оҫталар ағас үҙәкле арбалар эшләргә мәжбүр булдылар. Тимерен дә иретеп ҡойор ине улар, әммә ваҡыт тарайғандан-тарая барҙы. Тергеҙелгән тимерлектәрҙә лә тимер эштәре барҙы барыуын. Ни тиһәң дә, кендеклек тимерһеҙ ике үҙәкле арба яһап булмай. Кендек тимере булһа, арба ике үҙәклеһе була. Булмаһа, күп әйбер һыйырлыҡ арба булмай. Шуға ла, ҡайһы бер оҫталар өсөнсө юл менән киттеләр. Еңел ике тәгәрмәсле ҡош арбалары ла эшләнеләр. Ике тәгәрмәсле, ике аяҡлы булғаны өсөн уны ҡош арбаһы, ә өҫтөнән ике яҡҡа сығып торған киңлектәре, эскә кәкре нәҙегерәк ағастарҙан, уртаһы соңҡолаҡлы итеп эшләнгәне өсөн ҡайһы берәүҙәр уны ҡанатлы арба тип тә йөрөттөләр. Ҡарт ҡарағастан йәки ташта үҫкән ҡаты йыуан ҡайындан бер бөтөн бүкәнле, йыуан үҙәкле артҡылар, алғылар өсөн йыуан эсле көпсәктәр эшләү, уларҙы тишеп ун тояҡ ултыртыу бик ҙур оҫталыҡ талап итте. Ағас оҫталары халыҡ араһында бихисап ине. Шулай ҙа көпсәк эшләү, уға ҡарағастан тояҡтар ултыртыу эше иң-иңдәрҙеке булды. Өй, ауыл тирәһендә ҡайын тояҡлы тәгәрмәстәр, бөгөн эшләнгән тәртнә менән йөрөп булһа ла, йыраҡ походҡа төбө үҙәккә бөгөп эшләнгән тәртнә яраҡһыҙ ине. Шуға ла тимерселәр, нисек кенә ҡыйын булмаһын, тәртнә башына тимер һуғып кейҙерҙеләр.

Көндәлек мәшәкәт менән таң атты ла кис булды, таң атты ла кис булды. Утығып, ирендәре өҫтөнә йомшаҡ йөндәр сыҡҡан,

бауыр күтәргән, малайлыҡ ҡоронан егеттәр исеменә керер кермәҫтәр өсөн дә бик яуаплы эш йөкмәтелде. Улар йылҡы көтөүҙәренән һайлап алынған дүрт йәшлек ҡонандарҙы, биш йәшлек дүнәндәрҙе һыбайға ла, егергә лә өйрәттеләр. Тәжрибәле, ат фигелен яҡшы белгән, ауырыһа, ат дауалаусы белгес аҡһаҡал-табиптар, ул ҡонан-дүнәндәрҙе өтөп көйҙөрҙөләр. Көйҙөрөү – ул ҡонанды, дүнәнде атҡа әйләндереү. Бестереү алымы ла бар. Әммә көйҙөрөү – яраның бәләкәйлеге, тиҙ төҙәлеүе менән айырылып тора. Көйҙөрөүселәр ҙә оҫталыҡтары менән халыҡ араһында танылған кешеләр. Улар араһында билдәле көйҙөрөүсе мал табибы Дәбрез Атъетәр улы Хажикарам, Шаһиморат һәм башҡалар булды. Былар бөтәһе лә һуғышҡа барасаҡ ғүмер уртаһындағы иргеттәр ине.

Йүгән, нуҡта кейҙерелгән ҡонандың, дүнәндең, муйынынан оҙон ҡыл арҡанды киң итеп ғормап, ығырмауҙап бәйләнеләр ҙә, арҡандың оҙон осон аҫтан, ҡаршы яҡ артҡы аяғының сасағы аҫтынан әләктереп, осон, тағы ла киң итеп бәйләнгән ығырмау аҫтынан алып, әләктерелгән аяҡ яҡтан-өҫтән, көслө итеп яйлап тарттылар. Сәйфелмөлөк ҡонандың башындағы теҙгенде ныҡ итеп тотоп торҙо. Тартыуҙан, артҡы аяғы алға китеп, дүнән ултыра. Шул саҡта теҙген тотоусы дүнәндең башын ҡабырғаға, ергә тарта. Ат яйлап ҡына ҡабырғаһына ятҡас, уның башына ятып ергә беректерҙеләр. Икенсеһе арҡан осо менән буш аяҡтарын тарттырып бәйләне. Ике алғы аяғын тышау менән тышап, артҡа тартып бәйләнеләр. Сөнки ат ятҡан килеш тә алғы аяҡтары менән кешегә сапсырға мөмкин ине. Хажи карам йығылған дүнәндең тоҡсайын артҡа тартып, ҡойроҡ ҡылынан сүп-сарҙы таҙартты. Ҡомғандан ҡойоп тороусының һыуы менән уны йыуҙы. Һырмалсыҡтың, билсәндең ҙур япрағын иҙеп алған йәшел һуты менән күкәйлектең икеһен дә таҙартып һөрттө. Был ваҡытта уның ярҙамсылары ҡыҙыу ут яғып, сәтәкәй бармаҡтан нәҙегерәк ағас һаплы оҙон тимерҙе ағарғансы баҙраталар ине. Тимер ағара биреп баҙрағас, Хажикарам уны айғырҙың тоҡсайы аша тәүҙә бер күкәйенә, унан тимер тағыла баҙрағас, икенсе күкәйенә лә өтөп тиште лә, күкәй эсен көйҙөрөп, тимерҙе унда тота бирҙе. Тимерҙе алғас, уҡмашып бешеп ҡатҡан ҡан, һүл ағып торған яра-тишекте бөтөнләйгә ҡапланы. Көйҙөргәс, уға бысраҡ та кермәне, кергәне лә үлде, ә яра бәләкәй генә тишек булып ҡалды. Шулай көн һайын, унарлаған дүнән-ҡонандарҙы көйҙөрттөләр. Һуғышҡа мотлаҡ көйҙөрөлгән ат менеү кәрәк була. Сөнки көйҙөрөлмәгән, йәки бысаҡ менән ярып бестерелмәгән ҡонан-дүнәндәр йә үҙ-ара һуғышалар, йә бейә эҙләп кешнәйҙәр. Ә ул һуғышта һис кәрәкмәгән алым. Бигерәк тә һаҡта, йә баҫҡында, шымсылда йөрөгәндә.

Туғыҙынсы һарыса айының уртаһы етеп килә ине. Хәҙер әҙерләнәһе ҡоралдар, тейәйһе арбалар, менәһе аттар ҙа билдәле һәм өйрәтелделәр. Әммә иң мөһим һорауҙарҙың береһе – барлыҡ аттарҙың һаулығын һәм тояҡтарының торошон ҡарап, һуңғы тапҡыр айыраһы һәм исемләп һәр һуғышсыға, йә үҙе һайлаған, йә үҙе өйрәткән атты беркетәһе генә ҡалды.

Аттың һаулығы һәм тояҡтарының бөтөнләгә ғәскәрҙең тиҙ һәм ышаныслы хәрәкәтенә бәйле. Был эште лә ғәскәрҙең йөҙбаштары үҙ өҫтөнә алды. Олораҡ, элек даға күргән аттарҙы дағаланылар, сөнки Алтын Тамаҡ ҡорал заводы буласаҡ 18-се полкка ла бер аҙ тимер, даға сөйҙәре бирҙе. Яңы өйрәтелгән ҡонан-дүнәндәрҙе дағалау бик бикәр ине. Беренсенән, улар дүрт йыуан бүрәнәнән эшләнгән дағалау ятмаһына кермәйҙәр. Керһәләр ҙә имгәнеп, яраланып сығалар. Ҡайһы береһе хатта имгәнеүҙән йөрәй алмаҫлыҡ хәлгә ҡала. Әммә башҡа сара юҡ. Йәш менгеләрҙе даға етешмәгәнлектән дағаламанылар. Уларҙың тояҡ һөйәктәре бөтөн, ярылмаған, сит-сите бәрҙәк йәки ҡырҡма стакан тояҡ, тип әйтеүем. Тик ул тояҡтар ауыртмаһын һәм тағы ла ҡырҡмараҡ булһын өсөн, тояҡ эсендәге йөрәктәрен тәрән итеп алырға кәрәк. Әгәр тояҡ йөрәге үҫешһә, ат тояҡ уртаһындағы кимерсәк һөйәккә баҫып йөрөргә мәжбүр. Ә ул йөрәй-йөрәй һыҙлай башлай. Һөҙөмтәлә ат аҡһай, йә, ололар әйтмешләй, тапҡаҡлай. Тапҡаҡлаған ат йүнгә тарымаҫ, ҡоралһыҙ яуға ярамаҫ.

Ниһайәт, сапҡындар Ҡорама Муйнаҡов кантондан һәр йөҙлөккә лә хәбәр һәм ҡағыҙ килтерҙе. Ҡағыҙҙы ғәрәп хәрефтәре менән кантон ярҙамсыһы Төхмәтулла Үтәев яҙған ине.

Һарыса айының фәлән көнөндә генерал-губернатор әфәнденең кешеһе штаб капитаны Тихановский тигән кеше буласаҡ полк йөҙлөктәренең хәрби әҙерлеген тикшерергә килә. Һәр йөҙлөктө ҡарап сығып, хәрби күнекмәләр уҙғарасаҡ. Шуның өсөн ике көнлөк әҙерлек менән барлыҡ полктарға ла Әүеш күле буйына, яланға йыйылырға тигән әмер кантондан килтерҙеләр.

Билдәләнгән көндөң иртәһендә күл буйы яланы атлы йөҙлөктәр менән тулды. Капитан Тихановский килеүен көнө буйы көткән 4-се кантон начальнигы Ҡорама Муйнаҡов йөҙәп бөткән ине. Ниһайәт, Ҡолаҡты ауылының оҙон үрендә ҡуш ат егелгән кырандас күренде. Уҡлы Ҡарағай-Ахун, Фомин-Ҡолаҡты юлы менән килгән капитан Тихановский, кантон үҙәге Ҡорамаға боролдо.

Ҡорама кантон, Ҡорамша мулла, кантон ярҙамсыһы Төхмәтулла Үтәев торған ергә, фуражка, оҙон ҡуныслы итек, биле, ҡулбаштары ҡайыш менән арҡыс-торҡос быуылған штаб-капитаны кырандастан килеп төштө. Уның менән бергә хәрби кейемдә денщик тип аталған кешеһе лә килде.

Штаб капитаны ҡылысын алып таҡты, өҫ кейемдәрен ҡағыштырып әлмәктәрен әлде лә ҡылыс таҡҡан йыуантыҡ 52 йәшлек кантон начальнигы Ҡорама Муйнаҡов һәм уның менән килгәндәргә, ҡулын фуражкаһына терәп, һаулыҡ һорашты ла һәр береһе менән ҡул бирep күрешеп сыҡты. Артабанғы юлды кантон менән штаб капитаны кантон касалкаһында, ә денщик менән кантон ярҙамсыһы капитан кырандасына юлдарын дауам иттеләр.

«Күпер түбә» тип аталған түбә башында кантон идаралығы һәм уның өйө тора. Ҡунаҡтар килеүгә кантондың ике бисәһе, уларҙың ярҙамсылары – йәш ҡатындар, йүгереп йөрөп табын әҙерләйҙәр ине. Кантон ярҙамсыһы, Ырымбурға һәр төрлө ҡағыҙҙар менән йышыраҡ йөрөгәнгә урыҫтарҙа өй йыһазы башҡараҡ булыуын байтаҡ күргән. Шуға ла ул хужаһына килгән ҡунаҡтарға ашты тышта, ҡапҡа эсе – ураҙала, таҡталар менән ширҙекле өҫтәл эшләп, аш-һыуҙы шунда ҡуйырға тәҡдим иткәйне, хужа риза булманы. Һый өйҙә, киң урындыҡта, кейеҙ өҫтөнә йәйелгән ебәк ашъяулыҡ өҫтөндә була, тип ҡырт киҫте. Ашъяулыҡ өҫтөндә ризыҡ-ниғмәт күп ине. Боҫкоп ултырған һимеҙ һарыҡ, ҡаҙ ите, аҒас туҫтаҡта һурпа, ҡорот, бешкән йәймә, ҡымыҙ, үлән һалынған ҡытай сәйе, әжегәй, ҡаймаҡ, ҡаҡ, тағы ла башҡа төрлө ашамлыҡ тулы булды.

Юлдан арып-талсығып килгән капитанға урындыҡ түренән урын күрһәтелгәс, аптыраны. Бер аяғына, бер итегенә ҡараны. Асыҡҡан ине. Урындыҡ ситенә, ширлеккә ултырып ҡараны. Әммә кантон начальнигы уны, ай-вайына ҡарамай, түргә көслəне. Аптыраған капитан ҡайыштарын ысҡындырып, өҫкө мундирын систе. Төхмәт уның аяғынан итеген һалдырырға булышты. Капитандың аяғында ойоғо юҡ ине. Ул солғау-сылғау менән генә аяғын урап итек кейгән булған икән. Бергә килгән денщигы ла ялан аяҡ, баҡһаң, уларҙа ойоҡбаш кейеү ғәҙәте юҡ икән. Ә башҡорт ирҙәренең дә, ҡатын-ҡыҙҙарының да аяҡтарында ҡупшы, йоҡа итеп бәйләнгән аҡ йөн ойоҡтар. Ялан аяҡлы капитан күлдәксән, ике яғынан да ҡуптыҡ, үҙе галифе тип атаған салбары менән урындыҡ түренә менеп китергә мәжбүр булды. Әммә ултыра алманы. Аяғын ары ла, бире лә бөклəп ҡараны, һис килештерә алманы. Уға мендәр бирҙеләр. Ахырҙа, терһәге менән мендәргә таянып, ялан аяғын һуҙып ятырға мәжбүр булды.

Иң түр башына, сәлләһен һалып түбәтәй кейеп алған, Ҡорамша мулла менеп ултырҙы. Уның йәнәшенә, муллаҡы кеүек үк, ап-аҡ йөн ойоҡ кейгән, шулай уҡ түбәтәйле кантон начальнигы, ә ситтән аш өләшеүсе Төхмәт ултырҙы. Капитандың түбәнге яғынан, ситтән шулай уҡ ялан аяҡлы денщик урын алды.

Асыҡҡан капитан, инде ашай башларға мөмкиндер тип, һимеҙ, ҙур ит киҫәгенә ҡулын һонған ғына ине, Ҡорамша ҡарт уны еңел генә хәрәкәт менән туҡтатты. Кантон, руссалап, капитанға ниҙер аңлатты.

Ҡулына еҙ тас, ҡомған, ҡулбашына таҫтамал һалған Төхмәтулла, ҡорҙағыларҙың һәр береһенең ҡулын йыуҙырып сыҡты. Ҡорамша мулла ашҡа фатиха биреп, бөтәһе лә доға ҡылғас, ашарға рөхсәт, тигәндәй, ишара яһалды. Асыҡҡан юлсылар, ары ла, бире лә тулғанып ятып, бик ныҡ ашанылар.

Фәҙәттәге урыҫ өйө эсендәге болалыҡ менән башҡорт өйөнөң йыйнаҡлығына, һәр әйберҙең үҙ урынында булыуына иғтибар итеп ятты капитан. Һауыт-һаба, аш бешереү, кәрәк-яраҡ алғы, икенсе өйҙә ине. Ҡунаҡ өйөндә, киң урындыҡта йомшаҡ ҡалын кейеҙ, юрғандар, ҙур-ҙур һандыҡтар, көндәлек әйберҙәр һәндерәһе. Өйҙө бүлеп торған бүрәнә яҡҡа келәм эленгән. Уның өҫтөнә бер нисә мылтыҡ, ике ҡылыс, бер пистолет беркетелгән. Ә мөйөштә семәрләп эшләнгән ҡаты ҡалай ҡалҡан, шунда уҡ һөйәп ҡуйылған һөңгө осона эленгән ине.

Тәндәрен, бигерәк тә аяҡтарын асыҡ күрһәтергә өйрәнмәгән башҡорттар өсөн, аш-һыу табынында ялан аяҡ ятҡан ике урыҫ кешеһе хужаларға бик йәмһеҙ һәм әҙәпһеҙлек булып тойолдо. Шуғамылыр кантон ярҙамсыһының ҡолағына ниҙер бышылданы. Ярҙамсыһы сығып китеп, бер аҙ ваҡыт үтеүгә, бәйләнгән ике аҡ ойоҡ тотоп килеп керҙе лә кантонға тотторҙо. Аптыраған капитан бер ойоҡтарға, бер кантон начальнигына ҡарай, ләкин эштең ниҙә икәнен төшөнмәй ине әле. Шул саҡ кантон:

– На, господин капитан. У нас, у башкир голая нога около мяса и супа не ходит, наденьте, – тип капитан менән денщикка ойоҡ тотторҙо.

Үҙ ғүмерендә бер тапҡыр ҙа ойоҡ, бигерәк тә йөн ойоҡ кеймәгән капитан быға бик ҡыуанды. Ойоҡтарҙы әйләндереп-әйләндереп самалап ҡараны ла, аяғына бик йәпһеҙ итеп кейеп алды. Ҡулдары менән ойоҡ аша, аяҡ тәпәйҙәрен тота-тота, бер туҡтауһыҙ спасибо-спасибоны һуға ине.

Тартынып, әҙәп һаҡлап тормайынса, табындағы һәр ниғмәтте һоғалай-һоғалай ашаны штаб капитаны. Унан һуң сәй эстеләр. Аштан һуң, ғәҙәт буйынса ял итеп тә тормайынса, Ҡорамша мулланан башҡалары, идаралыҡҡа керҙеләр. Кантон һәм уның ярҙамсыһына капитан уларға электән билдәле булған – ғәскәрҙәрҙе ҡарау, өйрәтеү күнекмәләрен үткәреү тураһында һөйләне лә, был яҡтарға ғәскәрҙәрҙе тағы ла ҡарап яуға оҙатып ебәреү өсөн, губернаторҙың үҙенең киләсәген әйтте.

Тәғәйен көн, кантондың әмере буйынса, Әүеш күле яланына бөтә йөҙлөктәр ҙә сафҡа теҙелгән ине. Кырандастан төшөп, йәйәүләп, кантон башлығы менән губернатор вәкиле алты йөҙлөктөң һәр береһенең алдына килеп, һаулыҡ һорашып сыҡтылар. Штаб капитаны һәр йөҙлөктөң, иллелектең, унлыҡтың һанын, башлығының исем-шәрифен, хәрби баҫҡысын, дәрәжәһен, элек ҡайҙа, ҡайһы һуғыштарҙа ҡатнашыуын яҙып алды. Бынан башҡа арбаларҙың, тәгәрмәстәрҙең, тәртнә төптәренең ныҡлығын, ҡамыт ҡолаҡбауҙарын, ҡайһы бер әйәр айылдарын ҡапшап ҡараны. Арбаларҙағы тоҡтарҙың эсендә нимә барлығын да һораны. Ҡыҫҡаһы риза, бик риза булды штаб капитаны Тихановский. Ғәли йәнәптәре генерал губернатор килһә лә йөҙ ҡыҙармаҫ. Иррегуляр ғәскәр булыуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер һәрпеш регуляр полктарың ары тороһон. Ғәскәр эсендәге тәртип тә бик юғары күренә. Һәр һуғышсы өсөн башлыҡтарының, улар теле менән әйткәндә, «Түрә»нең һүҙе ҡанун. Түрәнең фарманын, һис шикһеҙ, ниндәй генә хәл булмаһын, үтәйәсәктәр. Ә был хәрби әҙерлек ҡуйылған бурыстың үтәлеү кимәленең юғары булыуы тураһында һөйләй, тип уйланы капитан.

4-се кантонлыҡ кешеләренән төҙөлгән был полкка Ырымбур губернаһы генералы Григорий Волконский 18-се һан биргәйне. Ә бына шул уҡ табынлылар, барындар, әйлеләр, ҡаратабындар, налйот, терһәктәр, һыҙғы, мәкәтиндәрҙән торған ике йыйылма полкка 16-сы һәм 17-се һан беркетелде. Был ике полктың йыйылыу урыны Арғужа күленең көньяғында, Үрге Ҡолһары йәки Хәлит, Түбәнге Ҡолһары йәки Биҡҡол ауылдары булды. Был ике полктың да һәр береһендә йөҙлөктәр һәм улар башы булһа ла, ике полктың да төп түрәһе 5-се кантон начальнигы Мөхәмәтҡолой Йәрмөхәмәт улы Көсөкөв булды. Генерал-губернатор Волконский 16-сы полкка командир итеп Ырымбур 4-се линия полкынан капитан Михаил Труновты тәғәйенләгән ине. Ә 17-се полкка Троицк-Алтынтамаҡ гарнизоны батальон командиры майор Александр Овсянников беркетелде.

Ҡунаҡтар килеү хәбәрен алғас, хәрби уйындарҙы башламайынса, көтөргә булдылар. Алты йөҙләгән кешене ашатыр өсөн, күлдең яры буйлап, теҙеп ҡаҙандар аҫҡандар. Иҫке Байрамғол ауылы ғына түгел, һәр йөҙлөктөң үҙ ауылынан килгән ҡатын-ҡыҙ үҙ ҡаҙанлыҡтары янында, олораҡ йәштәге ир-ат ҡаҙанлыҡтар аҫтына утын әҙерләү менән мәшғүлдәр. Бына бер ваҡыт Арҡыры тау яғында сыңыр-сыңыр булып ҡыңғырау ишетелде. Шунда уҡ ослап дүрт ат егелгән һәм әйәрле ике ат арттан бәйләнгән ҙур кырандас күренде. Уның артынан икешәр ат егелгән тағы ла икәү килә. Әммә быларының дуғаһында ҡыңғырау юҡ ине. Ҙур

кырандастан ҡылыс таҡҡан, урта буйлы, төптән сыҡҡан ҡарағастай ҡалын, киң яурынлы. үткер ҡара күҙле 40–45 йәштәр самаһындағы ир төштө. Шулай уҡ ҡылыс таҡҡан, ике урыҫ әфисәре төшөп ян-яҡҡа боролоп баш эйеп, ғәскәрҙең һаулыҡ һорашҡандан һуң, хужалар менән берәм-берәм танышып, күрешеп сыҡтылар. Килгәндәрҙән икәүһе капитан Трунов һәм майор Овсянников булһа, киң яурынлыһы 5-се кантон башлығы Ҡолой Йәрмөхәмәт улы Көсөкөв ине. Ҡалған өсәүһе күсәрҙәр, ярҙамсылар.

Ҡолой кантон Көсөкөв хужалар араһынан 4-се кантон башы Ҡорама Муйнаҡов менән оҙаҡ ҡына ваҡыт ҡулдарын һелкеп тотоп күрештеләр. Илле ике йәшлек Ҡорама һулаҡай аяғына һылтыҡлап атлай ине. Кавказ-Ҡаф тауҙарындағы бер алышта бот төбө йомро һөйәгенең башына ҡылыс менән сабылғайны. Әллә шунда тарамышы өҙөлдө, әллә һөйәк башы сатнаны, әммә шунан һуң ул төҙәлгәс тә һылтыҡлап атлар булды. Мөхәмәтҡолой Көсөкөвтөң ҡосаҡлап, ҡулдары менән яурынын һөйә-һөйә күрешкән кеше, үҙе кеүек үк, 48 йәшлек йөҙ башы Йыражбай Буҙаҡай улы булды. Мөхәмәтҡолой менән Йыражбайҙың дөйөм ҡарт аталары Иҫәнгилде. Йыражбайҙың ҡарт атаһы Буҙаҡай менән Мөхәмәтҡолойҙоң ҡарт атаһы Йортомбай – бер туғандар, Туғаҙаҡ улдары. Ҡорама Муйнаҡов, инде иллене үтеп, аяғы аҡһаҡ булғанға әрме сафында яуға баралмай. Ғөмүмән, ул холҡо-фиғеле менән дә хәрби ҙә, бик үк һуғышсы ла түгел ине. Ә арҙамсыһы бик хәйләкәр Төхмәт Үтәйевҡа ул ышанып та бөтмәне. Шуға күрә лә Ҡорама кантондың 18-се полкты төҙөүҙә ышанып тапшырған кешеләре Йыражбай Буҙаҡаев, Ҡужәхмәт Насыров һәм Баязит булды. Урыҫ әфисәре Тихановский, әҙер полкка бөгөн килеп күренеп, үҙен полк командиры итеп хис итһә лә, алай полк һуғышсылары уны бер кем тип тә белмәне. Уның һуғышсыларға мөрәжәғәт итеп нимәлер әйтеүен береһе лә төшөнмәне.

Ҡунаҡтар килеп аралашҡас, ғәскәрҙе яңынан күҙ аша үткәреү, ҡарау башланды, әммә тиҙ генә бөттө. Шунда уҡ һуғышсыларҙың һуғышҡа әҙерлеген һынау башланды. Ҙур ялан буйлап түңәрәкләп сабып барған килеш, бесән тултырылған тоҡтарҙы яра сабыу, һөңгө менән үтә сәнсеү, ҡаҙып эшләнгән киң соҡор аша һикереп үтеү, тал сыбыҡтарын уңлы-һуллы ҡылыс менән сапҡыслау, ырғаҡлы һөңгө менән дошманды ат өҫтөнән ҡармап алып һөйрәп алып китеү һәм башҡа ярыштар, алымдар күрһәттеләр. Сабып барған аттан һикереп төшөп, тағы ла атланып алыу ҙа ҙур оҫталыҡ өлгөһө булды.

Күберәк йәйәү ғәскәр менән етәкселек иткән һәм йәйәүлеләр һуғышына өйрәнгән урыҫ әфисәрҙәре өсөн башҡорттарҙың ат өҫтөндәге оҫталыҡтары иҫ китмәле булды. Былар әллә тыуғандан

алып ат өҫтөнән төшмәйҙәрме? Шулай аптырашта ҡалды улар, иррегуляр ғәскәр һуғышсыларының оҫталығына.

Һуғыш алымдарына оҡшаған был күрһәтмә-күнегеүҙәр үткәс, ғәскәр ҡаҙанлыҡтар яныһа йыйылды. Кем ултырып һурпа эсте, кемдер торған килеш итле һөйәк кимерҙе... Һәр һуғышсының артҡы эйәр дуғаһына сит-сите нәҙек ҡайыш менән аша сәнсеп тегелгән, ә ауыҙы бөрөштөрөп бәйләнгән күн тоҡсайҙа ун ҡаҙаҡтай йә арпаһы, йә һолоһо бар ине. Ит һөйәктәре мөйөлөп, һурпа ла эселгәс, һәр һуғышсы күлгә төшөрөп аттарын эсергәндән һуң, эйәрҙән һоло һалынған шул морондоҡ муҡсайҙарын алып, аттарының башына кейҙереп, ике ҡолағы артына ҡайыш менән бәйләп ҡуйҙы.

Килгән ҡунаҡтарға үрҙәрәк, сауыл ситенә ҡор түшәлгән. Унда ла ҡоштабаҡтарҙа өҫтөнә эре, һарыраҡ тоҙ һибелгән киҫәк-киҫәк ит боу сығарып ултыра. Был юлы, полк командирҙарына, итектәрен сисеп, түргә уҙыу хәҙәте юҡ ине. Әммә ике кантон башы, ҡул һуҙымы ғына ерҙә үҫеп ултырған ваҡ ҡайынға ҡылыстарын сисеп әлделәр ҙә, йомшаҡ итектәре өҫтөнән кейелгән, ҡаты күндән тегелгән үксәле ҡаталарын һалып, ҡорҙоң өҫкө яғына, ике-һе ике мөйөшкә ултырҙылар. Өс урыҫ әфисәре лә ҡылыстарын сисеп ергә һалдылар ҙа кантон түрәләренең ян-яғынан урын алдылар.

5-се кантондың башы Мөхәмәтҡолой Көсөкөв, Ҡорама кантонға ҡарағанда, урыҫтар менән нығыраҡ аралашҡан кеше. Боронғо башҡорт Әүлиә Силәбе иштәктең аҫаба ерендә төҙөлөп, инде ҙур ғына ҡәлғә-ҡасаба булып барған, каруандар туҡтай торған Силәбе ҡаласығы 5-се кантон ерендә. Унда килмешәк урыҫтар байтаҡ. Мөхәмәтҡолой Көсөкөв улар менән һәр ваҡыт аралашырға тура килгәнлектән, урыҫса һәйбәт һөйләшә ине. Ҡолой, урыҫ әфисәрҙәренең һәр табыны тигәндәй, әҙ генә һөт ҡушылған тоноҡ һыуһыҙ үтмәгәнен белеп, өс сиреклек тип аталған ҙур һауытта шул самогон тигән эсемлекте килтергән ине. Ярҙамсыһы Абдулмоталлапҡа эсемлекте килтерергә ымланы. Хужаһының һәр ымын төшөнөп бөткәнлектән, ул шунда уҡ ҙур ҡайыш муҡса килтерҙе.

Биләгән вазифалары ла, дәрәжәләре лә кантондарға ҡарағанда бик бәләкәй, әле йүнләп ҡан да күрмәгән әфисәрҙәр алдында ике кантон да үҙҙәрен иркен һәм кантондарса тоттолар. Мөхәмәтҡолой хәрби дәрәжәһе майор булған Овсянниковҡа ҡарап, бармағы менән ҡайыш муҡсайға күрһәтте лә, үҙе һис бер ни булмағандай, ҙур, быулы, тоҙло итте алып алдына һалды. Әммә ашай башламаны, сөнки табын хужаһы Ҡорама Муйнаҡовтың ашҡа фатиха биреүен көттө. Ҡорама үҙе лә, ярҙамсыһы Төхмәтулла аша ла әйттереүгә ҡарамаҫтан, йыш ҡына бергә алып йөрөгән Ҡорамша мулла бөгөн

был ғәскәри күрһәтмәгә килмәне. Төхмәтулла уға Ҡорама кантондың үтенесен ҡәтғи фарман кеүегерәк итеп еткерҙе. Ләкин Ҡорамша мулла, унда урыҫ кешеләренең булыуын һәм уларҙың һәр саҡ табында араҡы әсеүҙәрен белеп, барыуҙан ҡырҡа баш тартты.

Ғәскәр ҡарауҙан ҡайтҡас, кантон, аш-һыу әҙерләүҙе ойоштороу өсөн Төхмәтуллаға бында – кантон идараһында ҡалырға бойорҙо. Төхмәтулланың иҫәбе ябай. Әгәр Ҡорама ҡәтғи бойороҡ буйынса ғәскәрҙәр янына китһә, электән күҙе төшөп йөрөгән һылыу ҡатын Ғәйшәне, Ҡорамша мулланың ҡатынын күреүгә бер яйы сыға тип өмөтләнде. Ҡорамша мулла килмәгәс, табындағы аш-һыуҙы тәғәм итергә фатиха биреү Ҡорама кантондың үҙенә тура килде.

Ҡолой кантондың ҡайыш муҡсаға күрһәтеүе булды, дәрәжәһе ҙурыраҡ Овсянников, тоноҡ шыйыҡсаны үҙ сумкаһында йөрөгән бардагына һалып эсеп тә ебәрҙе. Бер-бер артлы өсөһө лә шул хәрәкәтте ҡабатлағас, иткә, тәгәстәге һурпаға тотондолар. Тоноҡ шыйыҡса кәмегән һайын, ҡорҙа һүҙ ҡуйыра барҙы. Әллә булған, әллә булмаған һәр төрлө батырлыҡтары, Тубыл буйында йәшәгән ноғай халҡын, нисек итеп көслән, сиркәүҙә үҙ диндәренә суҡындырыуҙарын, старовер тигән кешеләрҙе шпицрутен менән туҡмауҙарын, канвой менән оло Иҙел аръяғынан хоҡуҡһыҙ крәҫтиәндәрҙе ҡыуып килтереп, Тубыл, Исәт йылғаһы буйына башҡорт ауылдары өҫтөнә килтереп ултыртыуҙарын, әллә кемдең Аграпиналарына йөрөүҙәрен, ә Феклаларының төндә үҙе янға килеүен ҙур ваҡиға һәм өлгәшеү тип, маҡтана-маҡтана кемуҙарҙан һөйләнеләр.

Ҡорама кантон өндәшмәй генә ашаны, ә Мөхәмәтҡолой дөйөм һүҙгә ҡушылып, урыҫсалап, тегеләрҙе йә дөрөҫләй, йә хәбәрҙәрен дәлилләп, бармаҡтары менән ниҙер иҫәпләп күрһәтә ине. Ҡорама кантон йыраҡ та түгел һаҡта торған үҙ кешеһен бармаҡ менән генә саҡырып алды ла, уның ҡолағына ниҙер шыбырланы. Күп тә үтмәне табын алдына, түштәренә дүрт ҡырлап ҡырҡылып ҡалын үгеҙ тиреһе тегелгән, ә арҡаларына ҡалаҡ һөйәктәре араһын һәм билде һаҡлап тороусы ҡалай тағылған оҙон буйлы, киң күкрәкле ике ир-азамат Йыражбай менән Баязит килеп, аттарынан төштеләр. Улар менән һүҙ алышып, ниҙер дөрөҫләгәс, Ҡорама кантон ҡорҙағыларға берәмләп кенә түгел, ә күмәкләп һуғышҡан кеүек уйын күрһәтеләсәген әйтте. Барыһының да иғтибарын йәлеп итеп үҙенә ҡаратҡас, ул урыҫсалап һөйләргә кереште:

– С древнейших времен у нас, у башкир табынского рода, существовал обряд-борьба за сохранение чести рода, земли или его дочерей. Суть обряда состоит в том, что на свадьбе джигиты, соревнуясь между собой верхом, в стрельбе из лука, в скачке и в

борьбе самый удалой имеет право получать туесок с руки девушки, и невесты никому не отдав, должен первым успеть разбить об угол дома отца, родовой старшины, или абыза, или аксакала. Если таковое имеется, то и о клейменное дерево, скалу. Борьба ведется иногда, целенаправленно, иногда неожиданно, по ходу событий.

– Разговоры! ..

– Она называется «Кот сабыу», т. е. защита чести рода, земли, чести девушки рода. Сейчас вам покажут этот обряд во время свадьбы.

– Сначала будет соревнование по стрельбе из лука вскачь, с расстояния не меньше 25–30 саженей. Право получения с руки девушки туеска имеет тот полк, чьи стрелы больше попадут на овечье шкуру, и кто успеет первым разбить туесок.

Обычно, такая борьба между всадниками продолжается внутри с десяток верст расстояния. Чтобы всем, и гостям было видно, мы проведем игру на поле между деревнями Байрамгул и Балбаҡ, где поставлены два столба с тамгой. Одна тамга рода Айшан, а другая Тайшан. Из шести сотен мы отбираем по сто всадников с каждой стороны. А сейчас, после нашего кумыса и вашего напитка, идемте смотреть соревнование сторон, – тип яйлап ҡына һүҙен бөтөрҙө Ҡорама кантон. Унан һуң ярайһы уҡ ҡыҙмаса ҡунаҡтарға нәүбәттәге сәкәштереүҙән һуң дауам итте:

– Честь девушки, которая выходит замуж другому роду, считалась честью всего рода. Каждого из его членов, а это равнялась и равняется чести родной земли. Эта честь должна остаться в родном роду.

– Если туесок принадлежал не девушке, а молодой разведенной или вдове, но не замужней женщине, то она верхом, если надо и с оружием, должна была сражаться за получение туеска сама, то есть за свою собственную честь, чистоту и невинность...

Йыражбай менән Баязитты ҡыҫтап ҡорға саҡырһалар ҙа, улар ултырманылар. Ике яҡтың ике йөҙбашы, үҙ яугирҙарын ярышҡа әҙерләргә ҡабаланып, кире киттеләр.

Ҡайҙа, гарнизонда, ҡайҙа, ҡала шәрәмәте ҡабағында ултырып, һирәк-һаяҡ ҡына йә урлашырға килгән ҡалмаҡтарҙы, йә казак станицаларына барымтаға килгән ҡаҙаҡтарҙы баҫтырыуҙа ҡатнашҡан хәрби тип аталған, әммә урыҫ булғандары өсөн алай-полк башына тәғәйен ителгән был ҡыҙмаса кешеләр, алда ни тиклем көсөргәнешле һуғыш алымын күрербеҙ тип уйламайҙар ҙа.

Ҡорама кантон итәк-салғыйҙарын йыйыштырып, урынынан тороп ҡылысын тағыуға, ҡорҙағылар ҙа аяҡ өҫтөндә ине. Уларҙың һәр береһенә кырандастарын, тарантастарына егелгән аттарын килтерҙеләр.

5-се кантон башлығы Мөхәмәтҡолой Көсөкөвҡа был яҡ, был ерҙәр үҙ һәм бик таныш ине.

Ҡасандыр был ерҙәр уның ҡарт атаһы Бейғараның – Ҡара бейҙең, Ҡара кешенең йәки халыҡ ҡушҡан ҡушамат «Көсөк»төң ере булған. Уның ысын исемен хәҙер берәү ҙә хәтерләмәй ҙә, белмәй ҙә. Ҡара бей тип йәки бей исемен, ул үҫкәс, ғәйрәтләнгәс, ҙур мөлкәткә хужа булғас ҡына алды. Ҡара кеше тигән исеме лә төҫкә ҡара булғаны өсөн халыҡ тарафынан йәбештерелгән. Ә бына «Көсөк» тигән ҡушаматы уға сабый сағынан уҡ, имсәк имгән ваҡытынан уҡ бирелгән. Тыуғанда ул етлекмәйерәк, бик сибек, бик арыҡ-ябыҡ, ҡаҡ һөйәк булып тигәндәй донъя күрә. Инәһенең һөтө әҙ булғанлыҡтан, уға бейә һөтө лә, кәзә һөтө лә эсерәләр, әммә бала үнжемәй. Өҫтәүенә, тән генәһенә ҡысынма сығып, һуңынан шыр ҡутырға әйләнә. Әммә бала үҙе бик теремек була, баҡыйлыҡҡа китергә ашыҡмай.

Шулай бер көн, ҡышлауҙа йәйләүҙән-йәйләүгә йөрөп, ҡурай тартып, үлән һуттары менән кешеләрҙе дауалап йөрөгән дәрүиш килеп сыға. Сабыйҙы был дәрүиш-табибҡа күрһәтәләр. Ҡомған алып ҡулдарын, битен йыуып тәһәрәт алғас, дәрүиш сабыйҙы ҡулына ала. Бала, уның ҡулында бер аҙ әйләнә-тулғана ла, ҡапыл илауынан туҡтап, йоҡлап китә.

Тирмәгә кергәндә, дәрүиштең туҙып бөткән еләненең итәк остарын имсәктәре һалбырап бөткән кәнтәй эт тешләп, йолҡоп-йолҡоп алған икән. Дәрүиш табиб быны үҙенсә аңлатҡан:

– Был тирмәлә ҡаты ауырыу сабый бар. Бар кер, мин итәгеңде йолҡоп алған кеүек, ул сабыйҙың ауырыуын йолҡоп ал, тип әйтте кәнтәй, тигән. Сабыйҙы кәнтәйҙең көсөктәре араһына һалып имеҙегеҙ. Әммә эттең ашауын, тамағын ҡарағыҙ, – тигән дә был тирмәләгеләр менән хушлашып, шунда уҡ юғалған. Аҙаҡ уны берәү ҙә күрмәгән.

Шулай эшләгәндәр. Сабыйҙы эт көсөктәре араһына һалып имеҙер булғандар. Супылдатып -супылдатып имә икән сабый. Бер нисә көн үткәс, ни күҙҙәре менән күрһендәр, сабый бермә-бер төҙәлә башлаған. Тәнендәге барлыҡ ҡутырҙары һыпырылып төшкән. Сәстәре, ҡаштары үҫкән. Бала арыуайып, утырып киткән. Елле, киң күкрәкле, яурынлы бәһлеүән булып үҫеп еткән.

Шунан аҙаҡ Бейғараға «Көсөк» тигән ҡушамат бик ныҡ булып, ғүмерлеккә йәбешкән дә, барлыҡ бала-сағалары «Көсөк», аҙаҡ Көсөкөв шәрифен йөрөткән.

Мөхәмәтҡолой Көсөкөв бала сағында боронғо ултыраҡтары Мулдаш күле ярындағы, хәҙер ниңәлер «Өргән күле»тип йөрөтөлгән Ҡармыш бабайҙарының зат-зәүеренә килеп йөрөгәнен хәтерләй. Унан улар малайҙар менән Яйыҡ буйы Серәкәй тауынан Мейесле-Мейәс буйы Серәкәй тауына тиклем шаяра-ҡотора

һыбай саба торғандар ине. Ул Серәкәй тауы буйында көсөктәрҙең ултырағы булды, хәҙер ҙә бар ул. Хәҙер ҙә унда зат-зәүерҙәре йәшәйҙәр. Тик бына атаһы Йәрмөхәмәттең Мейесле һыуының Биҙәртау-Иман тау, ә хәҙер Илмәнтау тип йөрөтөлгән тау үңерендәге ҡыҫынҡы еренә эшләнгән тирмәнен боҙоу, ерен тартып алыу ниәте менән Алтын Тамаҡ-Золотоустье килмешәге Максим Перфирей улы Масолов үҙенең ҡуштандары менән күп яуызлыҡтар эшләне. Төндә килеп ҡарауылсы тирмәнселәр менән һуғышыу, хатта атышыу, тирмән тәғәрмәстәренең тояҡтарын бысып китеү кеүек күп этлектәре булды.

Йортомбай, Ишмөхәмәт ҡартаталары ул Масоловтарҙы һәм башҡаларҙы был теләктәренән ваз кисереү өсөн нимә генә ҡулланманы. Үҙҙәре кеүек үк, быуала таш тарта торған һыу тәғәрмәстәрен сапҡысланылар, бер йылы хатта төндә быуаларын һыу ағырлыҡ итеп йырҙылар. Шул осорҙа оҙайлы ямғырҙар башланып китеп, быуала һыу артҡандан-артты ла әллә шул әҙ-мәҙ ҡазылған ерҙән, әллә башҡа урындан быуаны емереп ташҡын ташты ла китте. Быуа емерелде, уны эшләтеү бик ауырға тура килде.

Ҡайҙандыр Тула, Мәскәү яҡтарынан ҡол крәҫтиәндәрҙе ҡыуып килтерҙеләр. Уларҙың һөйләүҙәре буйынса, 500-гә яҡын кеше, яҙ юлға сыҡһа ла, аттары ябығыуҙан һәм арба тәғәрмәстәре, көпсәктәре сыҙамай юлда оҙаҡ тотҡарланғандар. Өҫтәүенә, эсәк ауырыуы йоғоп, кешеләрҙең ярты һынан күбеһе үлеп бөткән. Байтағы юлда ҡасҡан. Ни бары йөҙләгәне генә, бер ниндәй эш ҡоралһыҙ – балта, бысҡы, көрәкһеҙ, туҙып бөткән арба һәм тәғәрмәстәре менән, күбеһе йәйәүле килеп еткәндәр. Максим Перфирей улы Масолов, инәлеп-ялынып башҡорттарға барған.

Әммә башҡорттар уларҙың бынан китеүен талап иткәндәр. Максимға:

– Кит был ерҙән. Әгәр китмәһәң, мәтри, малай, – тигәндәр.

Уларҙың китеүен бигерәк тә Әйлеләр һәм Барындар талап иткәндәр. Сөнки Тағанай тауына текәлеп ятҡан төп Урал армыты барындарҙыҡы, ә унан көнбайыштараҡ һәм төньяҡтараҡ ятҡан Йөрмә, Иҫәл, Яман түбә тигән ерҙәр Әйле ырыуыныҡы булған. Максим Масолов уларға ант итеп үҙенекен иҫбат иткән. Имеш, уның атаһы үҙ белдеге менән килмәгән, ә батша әмере, батша фарманы менән килгән. Имеш, әгәр зауыт ҡоролоп бөтөп, быуа ла эшләнһә, һәр мең бот тимерҙең ярты һын башҡорттарға вәғәҙә итә. Тимерлек тотоу үлем язаһы менән тыйылғанлыҡтан, был тәкдим башҡорттарҙы ҡыҙыҡһындыра. Быға риза булып, үҙ арба-аттары менән йыуан ҡарағастарҙы ташып, шулар менән нығытып, быуаны башҡорттар эшләп биргән. Сөнки Мәскәү, Тула өлкәһенән килгән эшселәр ағас эшен белмәгән һәм ер эшенә ҡоралдары ла булмай.

Ер хужалары аҫабалар һаман да быға риза булмайҙар, әммә ярлы-ябағаны аҡса биреп эшләтәләр.

Максим Масолов ҡапыл тарихҡа билдәһеҙ сәбәп менән баҡыйлыҡҡа китә лә ҡуя. Уның улы Василий, 1769 йылда зауытты тиҙ генә шул уҡ Тула купецы Ларион Иван улы Лугининға һатып, был тирәнән китә.

Яңы заводсы Лугинин Башҡорт ерҙәренә ҡулын ныҡ тыға. Йортомбай менән Ишмөхәмәттең ерҙәре, Мейесле йылғаһының тыҡрығында ултырған тирмәне (ере) Лугининға күсә. Былары губерна һәм батша һанаттары ярҙамында эшләнә. Көсөктәрҙең ере икегә бүленә. Әммә Лугинин, шул тирмәндең өҫтөнә зауыт төҙөп алғас, унда ҡасаба барлыҡҡа килә, улар ҙы ашатыу һәм һатыу итер өсөн ер эшкәртеү, бөртөклөләр сәсеү кәрәк булғанға даулашып, башҡорт ерҙәрен тартып алып, тағы ла ерен киңәйтә.

Шулай итеп, көсөктәрҙең ере Мейесле йылғаһы башынан түбәнге Мейәс ҡасабаһына 15 саҡрым етмәҫ арала өҙөлә, бүленә лә, унан аша Арғужа күленән түбәнгә тиклем, инде ҡала булып килгән ныҡытма – Силәбегә 15–25 саҡрым етмәҫ борон, тағы ла ҡырҡыла. Шуға ла Туғаҙаҡ улы Йортомбай күсенеү ҡарарына килә. Йортомбайҙың өсөнсө быуын оло ҡартатаһы Амангилде лә, уның атаһы Бейғара – Ҡара кеше йәки Ҡара Көсөктең Мәсекәй тигән убырлы күл буйындағы ултырағынан Ҡыйҙыш тауы ышығына, аҙаҡ уның исеме менән аталып, Амангилде шырлығы ҡаршыһына күскән ине. Ҡарт атаһы Амангилде шунда баҡыйлыҡҡа китте.

Йортомбай шул Амангилде шырлығы ҡаршыһында был аҡ донъяға оран һалып, ҙур итеп ауыҙын асып тәүләп илаған. Шул ерҙә 4–5 йәшлек малай булып, йүгереп йөрөп уйнаған, шунда уны тәүләп йылан саҡҡан. Яраһын үткер бәке менән арҡыс-торҡос ҡырҡып ҡанын ағыҙғандар. Ауыҙына һөт ҡойғандар. Тәнен ала йөн ҡысмау менән ыуып, үҙен әсе ҡатыҡҡа һалып төҙәлткәндәр. Шунан аҙаҡ ул йыланды ҡулы менән тотмаҫ булған, бик ҡурҡҡан.

Бик ҡуйы, бик ҙур томан ятҡан ине ул көнө бөтә Мейесле йылғаһының ҙур һаҙына ла, Амангилде шырлығына ла. Хатта арттағы Ҡыйҙыш тау ҙа, ундағы Ҡутырҙы ла күренмәй. Ғәжәп хәл булды был. Томан ергә ятһа – көн аяҙа тигән була торғандар ине. Әммә көн аяҙыманы. Кисен бөтә һауаны йәшелле-күкле йомро ҡуйы болот ҡаплап алды ла, әйтерһең дә, ул Мейәс-Мейесле йылғаһының һаҙына төштө. Дауыл башланды, ер менән күк бергә тоташты. Апаҡ булып йәшен бер-бер артлы ялтланы ла ялтланы. Аҙағынан имәнес итеп сатырлап-гөрһөлдәп һауаны ярҙы ла ярҙы.

Йортомбай үҙ ғүмерендә бер нимәнән дә ҡурҡмаһа ла, тәбиғәттең ике күренешенән ысынлап та шөрләй ине. Бересе йәшен, икенсеһе йылан.

– Ата инде хәҙер, ата инде, – тип ятты ул өйөндә шул төндә. Иртәнгелә көн ап-аяҙ ине. Шул иртәлә ҡайҙандыр килеп сыҡҡан христиан динен алған оҙон буйлы нуғай ҡатыны, башҡортса һөйләнә-һөйләнә, ә үҙе суҡына-суҡына өйҙән өйгә хәйер-милостыня һорап йөрөй ине.

Йортомбайҙың тәпәйгә тәпәй һалып, Ҡыйҙыш ҡарағасынан буралған арандай йортона, нишләптер, ниндәй уҫал эттәрен өрҙөрмәй, ишекте киң итеп асып, Анна ҡарсыҡ килеп керҙе. Һорап та тормайынса алдағы өйҙөң урындыҡ ширҙегенә «уф» тип килеп ултырҙы. Шунан, үҙенсә ниндәйҙер «Псалма»ларын һөйләгәс:

– Хозяин, кисә төндә һеҙҙең һаҙға аждаһа осоп килде. Хәҙер ул Мейәс йылғаһы һәм күленең ҡамышлығында йәшәйәсәк. Ике көндә бер баш хайуанды йотоп торасаҡ. Хайуандарҙы йотоп бөткәс, кешеләргә күсәсәк... Әгәр минең балаларыма һәм миңә бер туйырлыҡ тәғәм бирһәң, беҙ, ҡамдар, уға бер гонаһлы әҙәм балаһын йоторға табып бирер инек. Ул саҡта аждаһа ҡырҡ йыл бер йән эйәһенә лә теймәйәсәк, һин дә тыныс йәшәрһең, – тине.

Йортомбайға был хәбәр ялған да, ысын да булып тойолдо. Сөнки Йортомбайға ғына түгел, бөтә бала-сағаға бала саҡтан уҡ ен-пәрейҙәр, өй башында топ-топ йөрөгән төйгөс аяҡтар, шырау йөнлө алпамышалар, аждаһалар тураһында оло ҡарсыҡтарҙың һөйләүҙәрен тыңлап үҫергә тура килде. Шуғамылыр, ул аждаһаларҙың күл-һаҙлыҡтарҙа йәшәгәнлегенә, күктә йәшен йәшнәтеп, ҡойон ҡойҙороп осоп йөрөгәнлегенә ышана ине.

Анна ҡарсыҡтың был хәбәренә барлыҡ ултыраҡ шау-гөр килде. Урын алмаштырыу тураһында улар күптән уйлашалар ине. Сөнки сәбәп бар. Был тирәгә бынан 30–35 йыл самаһы элек килеп сыҡҡан урыҫ кешеләре ергә даулашалар.

– Хәҙер Арғужа күленең түбәнге яғындағы ерҙәргә болаша башларҙар. Ул ерҙәргә тиҙерәк үҙ ырыуҙаштарын, ағай-энеләрҙе ултыртып ҡалыр кәрәк. Был ултыраҡҡа тейешле кешеләрҙе ҡалдырырға ла түбәнгә күсергә кәрәк, күңелгә шом һалып, ҡамыштарҙы йығып, бүрәнәләй шыуышып йөрөгән аждаһа ла йыраҡ ҡалыр, – тип, Йортомбай был урындан күсергә ҡырҡа ҡарап итте. Өйөр-өйөр бейәләрен, тай-тулаҡтарын йылға буйлап түбәнгә ҡыуырға ҡушты. Ике тәүлек эсендә ҡолоҡайҙар, ябағайҙар, арып ҡайҙа туҡтайҙар, шул урынға төпләнергә бойорҙо кешеләренә.

Әммә өйөр йылға буйлап китмәне. Биҙәр тауҙың көньяғынан Сыбар күллек аша үтеп, тағы ла Мейесле йылғаһына килеп төртөлдөләр. Йылғаның тәшәлтәле ере, тәшәлтәле кисеүе булыуға ҡарамаҫтан, унан аша сыҡмайынса, өйөрөлөп туҡтанылар. Шул ерҙә Иҫәнгилде балалары менән ултыраҡ ҡорҙо.

Оло улы Туғаҙаҡ Урал армыты менән Ирәндек араһындағы йәйләүгә Ара Тауға йәш бисәләре менән күскән ине. Ләкин

Туғаҙактың оло бисәһе, улы Йортомбай менән ҡайныһы Иҫәнгилде еренә, Мейесле йылғаһының ярына, эйәреп килеп, үҙенә оя ҡорҙо. Ул тораҡты ла Иҫәнгилде тип атанылар. Йылға ярында уҡ ултырмаған йыраҡтағы был ауыл, йәше менән кесе булһа ла, аҙаҡ Оло Иҫәнгилде булып китте, сөнки унда халыҡ һаны ишәйҙе, йорттар артты.

Иҫәнгилде хәҙер бик оло йәштә. Оло ғаилә мәшәҡәттәрен ике, өс бисәһенән тыуған ҡырҡмаһа ҡырҡ балаһына, ейәндәренә тапшырған да, хужалыҡ эштәренә ҡыҫылмаһа ла, ер-һыу, мөнәсәбәт, ғөрөф-ғәҙәт һорауҙарын ҡулдан тулыһынса ысҡындырмаған кеүек. Тыңлайҙармы, тыңламайҙармы – ул бойора, ҡуша, унан хатта кәңәш һорайҙар. Шунан һуң ул ҡушҡан эштәренең үтәү-үтәмәүҙәрен тыныс ҡына күҙәтеп йөрөй. Әгәр һүҙенә ҡолаҡ һалмаһалар, үҙ-үҙенә ниҙер һөйләп, кәкре таяғы менән ергә һуғып-һуғып ала. Хатта үткән-һүткәнгә таяғының осо менән төртөп тә ебәрә.

Был ергә зат-зәүерҙең бер өлөшө кире килеүенә ул ҡаршы булманы. Сөнки оло ҡартаталары Иҫәнбәт Солтан, Күкәм бей был ерҙәрҙә йәшәгәндәр. Уларҙан ҡалған нәҫел-нәсәптәр әле лә был тирәгә һибелгәндәр. Ғаиләләр ишәйеп киткәс, был урын тарая төштө. Сөнки һәр береһенең мал-тыуары аралаша, тибенлектә йөрөгән малды, яҙға сығып һимереп китһә, танырмын тимә. Өйөр айғырҙары яраланып үлгәнсе талашалар. Әнә, былтыр Ҡәһәтерәндең айғыры, Дәүләтбайҙың өйөр айғырының йән ерен өҙөп тартып алды. Бысаҡлап та өлгөрә алманылар... Бындай хәлдәр булғылап тора. Һунарсы, ҡошсо Хисмәтулланың эттәре бүре менән йәрәштерелгән. Улар ҙа башҡа эттәргә көн күрһәтмәйҙәр..

Шуға күрә лә Йортомбай ҡартатаһы ауылы Иҫәнгилденән ситкәрәк күсергә булды. Был фекерен уға еткерҙе.

– Ултыраҡ булырҙай бер нисә ерҙе үҙ ит тә, шунда ҡояш төшкән, әммә һыу аҡмай торған ергә, ҡайын таяғына шәрбәт һылап, ағас төбөнә ҡаҙап сыҡ. Бер-ике йыл көт. Әгәр шул таяҡтарыңдың береһенә ҡырмыҫҡалар иләү ҡорһа, ултыраҡты шул буйға ултырт, ҡотло ер шул булыр, – тине. Йортомбай атаһының һүҙен тотто. Мейәс йылғаһының уң ярынан 2 саҡрым самаһы ерҙәге түпһәлдә ҡырмыҫҡалар иләү өйҙө. Шул ерҙә икенсе Иҫәнгилде үҫеп сыҡты.

Мөхәмәтҡолой Көсөкөв был хәтирәләрҙең барыһын да белә һәм ул хәтирәләр уның күңел түрендә. Күңел түрендә һәм йөрәге, тәне менән ҡушылып үҫкән...

Ҡорама кантон һөйләгән ысын һуғыш уйынын күрергә өс ҡыҙмаса офицер икешәр ат егелгән тарантастарына, ә кантондар дүртәр ат егелгән кырандастарына ултырып, һуғыш уйыны яланына килгәндә, ғәскәрҙәр, сабып барып сәпкә, аса бағана араһына

кирелгән һарыҡ тиреһенә атыр өсөн, Ҡыҙыл Таш йылғаһы түбәлеге менән Бәләкәй Ҡомас тауы араһына теҙелгәндәр ине. Атыу өсөн сәпкә сапҡан тәүге уҡсы, илле һуҡай сапҡас, икенсеһе ҡуҙғалды. Шулай бер-бер артлы йөҙ уҡсы һәр береһе үҙ тиреһенә икешәр уҡ атты. Түрәләр был күренеште Ҡыҙыл Таш түбәһенең көнсығыш битенән күҙәттеләр.

Баязиттың да, Йыражбайҙың да һайланмыштары бер үк ваҡытта, бер үк фармандан һуң бергә саба башланылар. Ярыш бында кем тиҙерәк уҡ тейҙереүгә генә түгел, ә йөҙлөктәрҙең уҡтарын кем алдараҡ атып бөтөүгә һәм сәпкә күберәк тейҙереүгә лә ҡоролған.

Сәмле, һай, сәмле барҙы сабыш та, атыш та, кемдең аты йүгерегерәк, шул уҡсы алға сыҡты. Әммә шәп сабып та, яйыраҡ сабып та сәпкә уҡ тейҙерә алмағандар ҙа булды. Әҙ генә аттың да, үҙеңдең дә хәрәкәтеңде бер бөтөн итеп тоҫҡаманың икән, уҡ сәпкә теймәй. Ҡарап торғандарҙың ни тиклем сәмләнеп ҡысҡырыуҙары ла, ҡул һелтәп әллә ниндәй хәрәкәттәр яһауҙары ла ярҙам итмәй.

Бына бер ваҡыт һуңғы унлыҡ төркөмө араһынан бик тилбер, ҡуян кеүек йомарланып сапҡан туры өҫтөндә, бәләкәй генә «егет» йәнәштәге ҡыуғынсыны «һә» тигәнсе ете-һигеҙ ҡуһайға артта ҡалдырып, сәпкә йомолдо. Бына ул уҡ атыу һыҙығына етеп килә. Күренмәгән, еңел хәрәкәттәр менән бер уғын ян тәтеһенә ҡуйып, бер уғын ауыҙына арҡыры тешләп, йән-фарман сабып килеп, тәүҙә береһен, унан икенсе уғын ысҡындырып ебәрҙе. Сәнске беҙ-уҡтар икеһе лә ҡара тирегә барып ҡаҙалып, еңелсә генә бәүелә биреп торалар ине. Халыҡ дәррәү ҡысҡырып ебәрҙе.

– Дан булды, Фәфифә, бик дан булды! Афарин! – тип шаулаштылар ҙа, Баязиттың уҡсылары Фәфифәгә маҡтау һүҙҙәре яуҙырып, уны ҡурсалап уратып алдылар.

– Вот молодец! Вот молодец, – тип урыҫ әфисәрҙәре лә маҡтайҙар. Уның атына, хәрәкәтенә, мәргәнлегенә аптырайҙар, вот джигит, вот настоящий джигит, тип һоҡланалар.

– А ведь не джигит! Она из пятой сотни, девушка! Лечить будет, там, на войне, – тип Ҡорама кантон асыҡлыҡ индергәс, урыҫ әфисәрҙәре бөтөнләйгә аптыранылыр.

– Не может быть, не может быть! – тип, уҡсыны күрһәтеүҙәрен һоранылар.

Мөхәмәтҡолой ҡорҙашы Ҡорама Муйнаҡовтан, белмәмешкә һалышып:

– Ул Мулдаш абыҙҙарының ҡыҙымы, әллә бикбаштарҙыҡымы? – тип һораны.

Мөхәмәтҡолой Ғәфифәне белә ине. Өс йыл әлек булһа кәрәк, Төмән воеводаһы Ҡолой, кантон начальнигы булыу менән, дәрбәнт ҡалмаҡтарын ҡыуыу өсөн ярҙам һораған ине.

Урыҫтар менән бергә барған был яу ҙур ғына булһа ла, ул турала артыҡ хәтер-хәбәр булманы. Үлгәндәр ике яҡтан да бихисап булды. Тубыл буйы ҡанға батты. Бына шул һуғышта арттан башына ҡылыс менән сабыуҙан йөҙ башы Ураҙай шәһит булған ине. Мосолман ғөрөф-ғәҙәте буйынса Ураҙайҙың кәүҙәһен үҙ ауылында, Мулдашта ерләнеләр. Мөхәмәтҡолой Ураҙайҙы ерләшергә үҙе килде. Шунда күрҙе ул тол ҡалған Ғәфифәне. Күрҙе генә түгел, уңайын тура килтереп, соланда ҡулбашынан ҡосаҡлап ҡыҫты:

– Үлгән артынан үлеп булмай. Яныңа килермен. Кеше ебәрермен. Мин тәғәйенләгән урынға сығырһың, йәме, – тип ҡолағына шыбырланы.

Килде ул, бер нисә тапҡыр килде Ғәфифәгә. Әммә ҡолағы төлкөнөкөләй һаҡ, үткер зиһенле был ҡатын Ҡолойҙо үҙ итмәне. Беренсенән, йәш айырмаһы егерме бер-егерме ике йәш ине. Былай Ҡолой бик оло ла күренмәй. Икенсенән, өйҙә уның тағы ла ике ҡатыны бар икән. Исемдәре Аҡбикә һәм Зөләйхә икән тип белешеп ҡуйҙы Ғәфифә. Ә Ҡолой йә Ырымбурға, Үрге Уралға, йә Сыбаркүл, Мейәскә килгән һайын Мулдашҡа, Ғәфифәгә инә. Тора-бара ул Мөхәмәтҡолойға әллә өйрәнә, әллә үҙ уйҙары ағымына ризалашып, әллә еңгәһенең һүҙенә ҡолаҡ һалып, Мөхәмәтҡолой менән кеше күрмәгәндә һөйләшә башланы.

Ысынлап та, үлгән үлгән инде. Ураҙайҙы башҡаса ҡайтарып булмай. Инде бит бер нисә йыл үтеп китте. Күңелгә оҡшаған кеше осрамай ҙа осрамай. Күңел төбө буш. Ни Ураҙайҙан бала күреп булманы. Һәр саҡ атай-инәй менән йәшәп булмай бит. Быйыл, Алла бирһә, егерме ете йәш тула. Үҙе бер ғүмер. Яңғыҙ булыу талсыҡтырҙы, эс-бауыр өҙөлөп килә. Ғәлиә еңгәм ирешә: кеше анау тиклем ерҙән килә лә килә. Ниңә һөйләшмәйһең? Ниәте бар бит уның. Кантон башы булған кеше бушҡа ваҡыт уҙғарып йөрөмәҫ... Ас-яланғас булмаҫһың. Зиннәтле күлдәктәр кейерһең, зиннәтле алҡалар тағырһың. Ҡағыр, тиер инең, балаң юҡ. Йәшең китеп ултыра. Ике бисәһе булһа ни? Йәш бисә иң иркәһе була. Ир йәш бисәһен ярата ул. Ҡайҙа барһа ла, үҙе менән алып йөрөй. Ерһыу күрерһең. Ҙур мәсеттәрҙә уҡымышлы абыстайҙар менән аралашырһың. Ололар әйткән: ҡарт ҡуйынында ҡалас бар, йәш ҡулында ҡамсы бар. Ҡарт тип ни! Бер ҙә ҡарт түгел... Ир уртаһы ир! Ҡырҡ һигеҙ, ҡырҡ туғыҙ ҡарт буламы, тип Ғәфифәне еңгәһе өгөтләне лә өгөтләне.

Еңгәһенең был һүҙҙәренән һуң Ғәфифәнең күңеле Мөхәмәтҡолойға борола бирҙе. Нәүбәттәге килеүендә Мөхәмәтҡолой уға

бисәләре тураһында һөйләне. Йәшермәне, нисек бар, шулай һөйләне Ғәфифәгә.

Оло ҡатыныңың исеме Аҡбикә. Ул Мөхәмәтҡолойҙан өс йәшкә оло икән. Сөнки ул Ҡолойҙоң еңгәһе булған. Ғәҙәттәгесә, еңгә менән тәнәй шаярып, һөйләшеп тә йөрөгәндәр. Ә кем белгән инде ағаһының Рәсәйҙең бөтмәҫ һуғышында ситтә башын һалырын? Үҙенән өс йәшкә кесе Зөләйхә исемле ҡыҙға күҙе төшөп йөрөһә лә, атаһы Йәрмөхәммәт уға еңгәһен алып бирә.

Йоланы боҙоу – ситкә бала ебәреү булғас, ул ҡаршылаша алмай. Ике балалы еңгәһен ала. Ғаилә, бала яҙмышын уйлағанда, Йәрмөхәммәт мәсьәләне дөрөҫ хәл итте кеүек. Вафат булған улының балалары Иҡсан менән Мәликә хәҙер йәки ғүмерлек етем, йә сит атай ҡулында булмай. Ул үҙе ҡартатаһы, ҡартинәһе, ул балаларҙың яҙмышын һәр саҡ тикшереп тороҫар.

Мөхәмәтҡолойҙоң күҙ атып атып йөрөгән ҡыҙын икенсе кешегә тормошҡа бирәләр. Унда Зөләйхә ул таба. Уға Хөсәйен тип исем ҡушалар. Әммә Зөләйхәгә ире менән оҙаҡ йәшәргә насип булмай. Уның ире:

– Һин Мөхәмәтҡолойҙо яратып йөрөгәнһең, – тип өс мәртәбә талаҡ әйтә. Ә ысынбарлығында Зөләйхә Ҡолой тураһында һис уйҙа булмай. Уй тик Ҡолойҙоҡо ғына була. Шулай итеп ғәйепһеҙ Зөләйхә әллә ниндәй кәмһетелеүҙәргә дусар була. Быны ишеткән Ҡолой, һис бер кем менән һөйләшмәй, кәңәш тә ҡормай, бара ла тол Зөлхизәне урлап тигәндәй ала ла ҡайта икенсе бисәлеккә. Был хәл 1786 йылдың, хәҙерге иҫәбе буйынса туғыҙынсы – һарыса айында була. Шулай итеп 23 йәшлек Мөхәмәтҡолой ике ҡатынлы булып китә. Унан уның хәрби казак тормошо башлана. Линия хеҙмәтенә йөрөүҙәр, сит ил походтарында ҡатнашыуҙар, яраланыуҙар, хәрби мәктәптә уҡыу – бөтәһе лә Мөхәмәтҡолойҙо урыҫса ла, ғәрәпсә лә уҡырға, яҙырға, ислам тәғлимәтенә өйрәтте.

Донъяның әсеһен дә, сөсөһөн дә күргән Йәрмөхәммәт балаларына белем бирергә ынтылып, уларҙы төрлө мәҙрәсәләрҙә, ҡартыһы йәҙитсә (фәнни), ҡартыһы хәрби белем биреү мәктәбендә лә уҡытты. Мөхәмәтҡолой үҙе лә булмышы менән бик отҡор, зиһенле булды. Һуғыш алымдарының төрлөһөн өйрәнде, хәрби етәкселеккә тәҡдимдәр керетеп, уларҙы уңышлы ҡулландылар. Шуға күрә лә уның хәрби дәрәжәһе тиҙ үҫте. 1798 йылдың 10 апрель көнө император Павел I указы менән, башҡорт илен «ҡаты бейәләй кейеп» тотор өсөн, кантон системаһын индерҙеләр. Шул осорҙа Мөхәмәтҡолой ҡайһы ҡалалалыр хәрби мәктәптә уҡып, уны тамамлаған йыл ине. Хәҙерге Арғаяш яғында 5-се кантон ойошторола. Кантон үҙәге Мәтәл ауылы була. 1798 йыл 5-се кантондың беренсе кантон башлығы итеп Дәрбиш

ауылынан Килмәт Дәрбишев тәғәйенләнә. Уҡыу-яҙыу эшен белгән кешеләр бик һирәк булған өсөн, хәрби генерал-губернатор Николай Николай улы Бахметов уҡыу йорттарынан белемле лә, хәрби ҙә башҡорт кешеләрен эҙләтә.

35 йәшлек Мөхәмәтҡолойҙо 5-се кантонға, урыҫса уҡый-яҙа белмәгән кантон башы Килмәт Дәрбишевҡа ярҙамсы итеп ҡуялар. Бер йыл үтеүгә, йәше олоғайған, ауырыу баҫып килгән, өҫтәүенә, уҡый-яҙа белмәгән кешегә кантон башында ултырырға ярамағанлығын аңлап, Килмәт үҙ вазифаһын үҙе тәҡдим итеп, Ҡолой Көсөкөвҡа 1800 йылда тапшыра.

Шул ваҡыттан ул кантон башлығы эшен бик бирелеп эшләй. Кешеләр менән дә, түрәләр менән дә аралашыу уны эш һоллоғона, эш алымдарына өйрәтә. 1812 йылғы һуғыш башланғанда инде ул һуғыш походтарын да, түрә-ҡараҡтарын да, аслыҡты ла, муллыҡты ла байтаҡ татыған да, күргән дә ине.

Бына бөгөнгө уҡ атыу ярышы бик сәмле барҙы. Сая Ғәфифә, һалтан булыуынан файҙаланыпмы, йәки шөғөл эҙләпме, халыҡтан меңәр йыллыҡтарҙа йыйылған һол буйынса, төрлө ауырыуҙы төрлө ысул менән дауаларға өйрәнде. Яра бәйләргә лә, эрен ҡайтарырға ла, ҡан туҡтатырға ла белә ул. Ҡасан, нимә өсөн ниндәй үләнде ҡулланыу алымдарын үҙләштерҙе.

Һәр ғәскәргә лә табип кәрәк, яу ҡанһыҙ ҙа, үлемһеҙ ҙә булмай. Яуҙа ҡатын-ҡыҙҙың дауаһы икеләтә шифалы. Ил-һыуынан йыраҡта, һәр көн тигәндәй, үлемдең күҙенә ҡарап йөрөгән, тупаҫлыҡ мөғәләмәһе кисергән яугирға йылы һүҙ, йомшаҡ ҡулдар икеләтә шифа. Ғәфифәгә 18-се полкка табиб булып хеҙмәткә сақырыу иң алда тәҡдим генә булды. Уның балаһыҙ, буйҙаҡ булыуын да белгәс, Ҡорама кантон уға хеҙмәткә барырға бойорҙо. Ҡайҙалыр табиблыҡҡа уҡып сыҡҡан йәш-елкенсәктәр менән ул алай ҙа дауалаусылар төркөмөн тәшкил итте. Ә атта йөрөргә, ҡорал менән мөғәләмә итергә лә уға тиҫтерҙәре, ағалары өйрәтте. Үҙе лә уға әүәҫ булды. Ат менер ҙә йәйләүҙән йәйләүгә сабышып барырҙар ине әхирәттәре менән.

Бөгөн ул бик уңышлы атты уҡтан. Ике уғы ла тирегә ҡаҙалды. Урыҫ әфисәрҙәре алдында бындай уңышы өсөн Ҡорама кантон уға үксәле еңел итеҡ, һабы торна аяғынан торған, суҡлап алтындан үрелгән мүлдергәле ҡамсы бүләк итте. Ул ғына ла түгел, «Ҡот туйысы»н – балланған ҡыҙыл көртмәле менән тулы туҙ туйысты Ҡорама кантон Ғәфифә ҡулына тапшырып, ҡот сабыу ярышы башланасаҡ. Һәм ул мәл етте.

Ҡунаҡ тамашасылар шул уҡ урында, «Ҡыҙыл таш» түбәһе бейеклегендә торҙолар. Ҡот сабыуҙа ҡатнашыусыларҙың һәр ике яғы иң йүгерек атҡа менгән ике һуғышсыны һайлап алдылар. Был ике егет, билдәләнгән йыраҡлыҡтан уртала ҡот туйысын тотоп

торған ҡыҙҙың ҡулынан кем алда туйысты әләктереп ала, шул алдан ҡуйылған «Ырыу бағанаһына» туйысты һуғыу өсөн үҙ йүнәлешенә саба. Китә ҡыуыш, китә болаш туйыс өсөн.

Мөхәмәтҡолой ҡапыл ултырғыстары күндән тегелгән ҙур кырандасынан һикереп төштө лә күсәренә һәм урынбаҫарына ҡысҡырҙы:

– Е... е... е... е... ерән йүгеректе сисегеҙ! Тиҙ генә!.. «Ҡот туйысына» болашам! – тип әйткәнен һиҙмәй ҙә ҡалды. Ул «һә» тигәнсе тыныс холоҡло, әммә бер ҡыҙһа, ҡыҙғандан-ҡыҙа торған тороҡло, тибенгеле яратҡан ерәне өҫтөндә ине. Ҡорама ла, әфисәрҙәр ҙә был ҡыҙыу, намыҫсан бәһлеүән кантон башлығына аптырап киттеләр. Ә ул, Ҡолой, башҡаса һис бер кемгә һүҙ әйтмәй, Баязит йөҙлөгө егете янына сапты. Ерәне лә уны аңланы булһа кәрәк. Шул тиклем һуҙылып сапты, шундуҡ теге егет саба башлай торған ергә барып етте лә, уға бойороп, ҡал, тигәндәй, ҡулын артҡа һелтәне, ярһыу ауаз сығарып, алға, Ғәфифә «Ҡот туйысы»н тотоп торған ергә йомолдо. Бөтәһе лә «ah!» итте. Бер ҡасан да бер кем дә күрмәгән, ишетмәгән хәл ине был! Кантон начальнигы! Түрә! Йәнтүрә түрә! Йәнтүрә үҙе «Ҡот туйысына» болаша! Әммә ҡаршы яҡ та ҡаушап ҡалманы. Ҡолой дөйөм фарман биреүҙән алда саба башлағас, ултыраҡта торған берәү ҡыҙып, һөрән һалып килеп сыҡты ла, Ҡолойға ҡаршы, Ғәфифәгә табан уҡтай оса башланы. Баязиттың йөҙлөгөндәге саянан да сая Йәлембәт ине был. Ҡолой кеүек Йәлембәт төптән сыҡмаған. Оҙон, асҡаҡ. Эйәр өҫтөнән ике аршинға ҡулы һуҙыла. Өҫтәүенә, аршин ярым оҙонлоғондағы ҡылысы һуҙылһа...

Өс аршин ярым ергә ул, Йәлембәт хужа! Ҡулдары көслө, тарамыш. Әммә бөгөн ҡылыс юҡ, бармаҡтар ғына. Иркенләберәк, туйысты ҡармар өсөн йәтешләргә кәрәк. Әлбиттә, етер саҡта ғына, Йәлембәт, әллә әҙ генә яҡында булды, әллә уның ҡараһы Ҡолойҙоң ерәненән дә тилбер, Ғәфифәгә әҙ генә алда етте бит, шилма. Оҙон бармаҡтары менән туйыстың оҙон ҡайыш-бауын яҙа-йоҙа әләктереп алды алыуын. Әммә әҙ генә ситкә тайпылырға ваҡыттың бер миҡдары, мәле етмәне уға. Ал һаны ла, арт һаны ла тигеҙ суртандай ерән ат, Йәлембәттең ҡараһына һырығып һыйпап үтеүгә, ҡара ҡабырғаһы яҡҡа һөрләгөп китте, әммә йығылманы. Тик был бәрелешеүгә Йәлембәттең генә ҡулынан «Ҡот туйысы» өйрәләп-өйрәләп ситкә осто.

Үҙ холҡона ғына түгел, һәр хәрәкәтенә иҫәпле Ҡолой, үтеп китмәйенсә, ерәнен келтә, туйыс төшкән ергә борҙо ла, йәһәт кенә һикереп төшөп, туйысты әләктереп алып, семәрле бәшәр өҙәңгеһенә баҫып, ерәненә менер-менмәҫтән Баязит ҡуйҙыртҡан ырыу бағанаһы «Бабай баш – Суҡ таш» түбәһенә киреғә сапты.

Ҡолой менән Йәлембәт һуғылыр-һуғылмаҫтан, уларға ян-яҡтан ябырылып һыбайлылар саба ине. Әллә ҡыуанысынан, әллә маһайыуынан, әллә Ғәфифә күрһен тип, туйысты баш өҫтөндә өйөрә-өйөрә, намыҫланып, асырғаланып ҡысҡыра-ҡысҡыра саба ине Ҡолой «Бабай баш»ҡа. Әммә уға ҡаршы төштөләр. Шуға ла ул яһтайып уңға боролдо. Башҡаларҙы ебәрмәҫ өсөн, уның ике яғынан да Баязиттың егеттәре ҡурсалаша ине...

Әммә йыражбайҙар ҙа сарға! Һағыҙаҡ кеүек, әле бер тишеккә, әле икенсеһенә даулашалар. Хатта ҡамсылар, талсыбыҡтар ҙа эшкә ҡушыла. Ҡолойҙоң ерәненең һул яғынан бер өйөр «һағыҙаҡтар» һырыны. Һағыҙаҡтар, тиеүем, ул Йыражбай йөҙләгә егеттәре, тигән һүҙем инде. Ҡолойға улар «Бабай баш»ҡа, хәҙер әйтмешләй, Суҡ ташҡа боролорға ирек бирмәнеләр. Кәм түгел, һис кәм түгел икән менгән арғымаҡтары ла. Йән-фарман сабып барғанда Ҡолойҙоң елкәһенән ағас ырғаҡ менән Йыражбайҙың «Алаш» тигән ҡушаматлы һуғышсыһы әләктереп алды ла артҡа ҡайырҙы. Теҙген тотҡан һул ҡулын ысҡындырмаһа ла, «Ҡот туйысы» тотҡан уң ҡулын ул күтәрҙе лә ебәрҙе. Шул мәлдә уның ерәне менән тамам йәнәшләгән көмрә танаулы бурыл арғымаҡ өҫтөндәге Ҡужәхмәт Ҡолойҙоң ҡулындағы туйысты тартып алды ла саяланып ҡысҡырып ебәрҙе. Унан, уңға келт боролоп, Балбаҡ мазарлығының бирге яғына ултыртылған семәрле тамғалы йыуан бағанаға табан елдерҙе.

Инде яландағы барлыҡ һыбайлылар Ҡужәхмәт артынан йомолдолар. Алдан үҙ-ара килешеү буйынса, әгәр «Ҡот туйысы»н ҡаршылар әләктерә ҡалһалар, ҡот һуғырға сабыусыны тамға бағанаһына ебәрмәҫ өсөн алға ҡуйылған егермеләгән һыбайлы ҡаршы сыға. Ҡужәхмәткә ҡаршы сыҡҡан һыбайлылар уны ҡамап, «Ҡыҙыл таш» шырлығына ҡыҫтылар. Ҡужәхмәттең бурандай осҡан бурылы арттағыларҙан байтаҡҡа алға һурылғанға күрә, ул егерме һыбайға бер үҙе ҡаршы булып ҡалды.

Тал сыбығы ла әләкте, арҡаһы ҡамсы әсеһен дә татыны. Намыҫ өсөн көрәш бара ине... Үҙ ырыуыңда, уның әсендәге үҙ тамғаңдың ҡотон, намыҫын һаҡлауҙа кантон начальнигы ла, йөҙсө лә, хәрби дәрәжә лә юҡ. Дошман генералын баҫыу ябай һалдат өсөн дан ғына. Бында ла «Яһауыл» дәрәжәһе алған Ҡужәхмәт Баязиттың ябай һуғышсылары өсөн бер ни түгел ине.

Аптыраған Ҡужәхмәт «Ҡыҙыл таш» шырлығына кереп китте. Әммә ҡаршы яҡҡа ҡуйы тал, муйыл, ереклек аша барып сығыуға, уны тағы ла биш-алты йәш егет менән «Ҡот туйысы» биргән ҡыҙ үҙе ҡаршы алды. Китте тағы ла болаш. Йәш егеттәр Ҡужәхмәткә, ваҡ күгәүен кеүек, тауыш-тынһыҙ ғына төрлө яҡтан ябырылдылар. Бына уларҙың береһе нәҙек оҙон бармаҡтары менән туйыстың ҡайыш бауынан әләктереп алды ла, аты менән ситкә ҡайпылып,

бар көсөнә тартты. Бал менән еүешләнеп бөткән шыуғаҡ ҡайыш бау Ҡужәхмәттең ҡулынан шыуып сыҡты ла ҡуйҙы. Өҙөлгән ҡайыш баулы «Ҡот туйысы»н йәш егет уҡтай осоп киләп алдараҡ сабып барған ярһыған туры бейәһе өҫтөндә ултырған Ғәфифәгә тотторҙо. Асыуы килгән Ҡужәхмәт:

– Өҫкә, өҫкә, өҫкө кисеүгә сабығыҙ, – тип шырлыҡ аша шаулашҡан болашсыларға ярһып-ярһып ҡысҡырҙы ла үҙе Ғәфифәне ҡурсалап барған йәш егеттәр артынан сапты. Ҡайҙа инде ул Ғәфифәнең ел еткермәҫ туры бейәһенә етешеү...

Яландың арғы осона тиклем туры бейә, йәш егеттәрҙең дә аттарын ҡалдырып, ҡомло кисеү аша сығып та юғалды.

Ҡарап тороусылар шырлыҡ ашаһында ниндәй ваҡиғалар булыуын белмәһәләр ҙә, Ҡужәхмәттең тауышын ишетеп, бөтәһе лә «Кыҙыл таш» ҡаяһы яҡҡа саптылар. Ҡулынан «Ҡот туйысы»н ысҡындырған Ҡолой, бик намыҫланып, ғәрләнеп, кире «Ҡот сабыу»ҙы күҙәтеп тороусы Ҡорама кантон һәм өс әфисәр янына килде. Әле улар бейеккәрәк, түбә өҫтөнә менгәндәр ине. Ҡолой улар янына килгәс, тегеләр уны бер хуплап, бер ҡуплап, шаҡылдашып көлөштөләр.

Шул ваҡыт улар аҫта, Түбәнге кисеү аша сабып сыҡҡан Ғәфифәне күреп ҡалдылар. Уның уң ҡулында «Ҡот туйысы» ине! Эйе, эйе, «Ҡот туйысы»! Туйыстың өҙөлгән ҡайышына ни аралалыр ялғап, үҙенең ҡомас яулығын бәйләп алған ине Ғәфифә. Ана ул ҡыҙарып, елдә елберләп осоп килә.

Мөхәмәтҡолой, быны күргәс, янындағыларға тағы бер һүҙ ҙә өндәшмәй түбәнгә, Ғәфифә янына сапты. Үҙе саба, үҙе Ғәфифәгә түбәнең артҡы яғынан, үҙәк аша сығырға юл күрһәтеп, ҡысҡыраҡысҡыра елдерә ине. Ерән ат, әллә йылғыр туры бейәгә етеп килгәнгә, ғәйһәр ғәйрәтләнде. Һуҙылып һуҙыла инде. Бына ул Ғәфифәгә килеп етеп, уны йәнәшләне. Ғәфифә, былай ҙа сыбыҡтамыр еләге кеүек тулышҡан ҡап-ҡара күҙҙәренән әре тамсылар тәгәрәтеп, әллә ҡыуанысынан, әллә Мөхәмәтҡолой менән йәнәшәләп, намыҫ һаҡлап сапҡандарына сикһеҙ шатланып, уға йылмая ине. Ошо мәлдә ул ҡомас яулығы бәйләнгән «Ҡот туйысы»н Мөхәмәтҡолойға тапшырҙы. Был уның Мөхәмәтҡолойға туйыс биреүе генә түгел ине. Ғәфифә уға күңелен бирҙе, йөрәген тапшырҙы...

Ә Мөхәмәтҡолой был ҙур бүләкте башҡаса сит кешеләргә бирмәйәсәгенә эстән генә ант итеп, алға йомолдо. Бына улар үҙәк аша төшөп, «Бабай баш»ҡа етеп киләләр. Ҡот сабыусыларҙың күбеһе туйысты күҙҙән ысҡындырып, дөрөҫөрәге, уның ҡайҙа икәнен белмәй, түбә битенән болашмаҡ сабып өҫкә килеп менгәндәр ине. Алдан күрә белгәндәре, түбә тирәһенә туҡтамай,

юл менән алға, «Бабай баш» янында торған тамғалы ҡарағас бағанаһына елдерәләр ине.

Саҡ ҡына, әҙ генә өлгөрмәнеләр юлдан сабып алға сығыусылар. Мөхәмәтҡолой менән Ғәфифә һаҙыран ерҙе сығып, юл аша үтеп, «Бабай баш» бағанаһына килеп еттеләр ҙә, һөйләшкәндәй, аттарынан һикереп тә төштөләр.

Мөхәмәтҡолой сабып килеп еткән һыбайлыларға бер һирпелеп ҡараны ла йүгереп барып туйыстың ҡайыш ҡолағынан тотоп, тамға бағанаһына һуҡты. Унан туйыстан ҡулы менән һөҙөп алып, баллы көртмәлене бағанаға һыланы. Хәҙер бәхәс итеп ҡараһындар инде...

Был күренеште күргән ҡаршылар, уфтанып, бер-береһен ғәйепләй-ғәйепләй, кире юрттылар. Баязиттыҡылар, ҡыуаныстарынан еңел ҡырпыу бүректәрен һауаға сөйә-сөйә, һөрән-ауаз ҡысҡыралар ине.

Ошо шау-шыу араһында Ҡолой Ғәфифә янына уҡ килеп, уны тәбрик итеп ҡосаҡланы. Ғәфифәнең йомшаҡ сәстәре битенә тейеүенән ләззәт кисерҙе. Шунда уҡ уның ҡолағына:

– Тиҙҙән, бик тиҙҙән оло яуға ҡуҙғалабыҙ. Атайыңа яусы ебәрәм. Мәсетегеҙҙә никах уҡытайыҡ. Һуғышҡа никахлы ҡатын булып китеүең лазым. Был турала мин губернаторға ла әйтермен. Беҙҙең алайға күсерермен, – тине. Ғәфифә Мөхәмәтҡолойға бер һүҙ ҙә әйтә алманы. Уның өндәшмәүе ризалығы булды, буғай. Икеһе лә аттарына менеп, йәнәшәләп Ҡорама кантон һәм әфисәрҙәр торған ергә киттеләр. Етер саҡта айырылып, Ғәфифә үҙ йөҙләгөнә, ә Мөхәмәтҡолой кырандасы, тарантастар яныңа бородло.

Түбә битенә барлыҡ алай ике яҡҡа бүленеп теҙелгән ине. Уртаға сығып, Ҡорама кантон телмәр тотто. Ҙур һуғыш уйыны күрһәтеүҙәренә ризалығын белдереп, барыһына ла рәхмәт әйтте. Унан һуң берәм-берәм сығып һүҙ алдылар. Ырымбур полкының 4-се линия капитаны Михаил Трунов Ҡолһары ауылында торған төҙөлөп бөтәсәк 16-сы полкка командир була, имеш...

Уның аҙағынан һуғышҡа әҙер, әле алда торған полкка командир буласаҡ, әлегә йәйәүле батальон командиры Трофим Ефим улы Тихановский һәм аҙаҡтан Троицк гарнизоны батальон командиры майор Александр Овсянников һүҙ тотто:

– Бындай ҙур һуғыш уйынын күрмәгән әфисәрҙәр күренештән шаҡ ҡатҡан. Нишләп һуң бындай ғәскәри халыҡ үҙаллы йәшәй алмаған? – тигән фекер ҙә ысҡындырҙы капитан Трофим Тихановский...

Ҡорама кантон ҡунаҡтарҙың һүҙен нисек өлгөрә, шулай тәржемә итеп барҙы. Алай һуғышсылары, булмыштары, мәнеләре менән сит-бауыр булған был кешеләр нишләп беҙгә баш булырға

тейештәр, тип аптыранылар. Әммә Йыражбай ҙа, Баязит та, яуға барғас, һуғышсыларға урыҫ телен дә өйрәнергә кәрәк, әгәр телде белмәһәгеҙ, улар бер нимә лә аңлата, бер күрһәтмә лә бирә алмаясаҡтар, тип төшөндөрҙөләр. Шулай булғас, алайҙың төп етәкселәре кемдәр була һуң? Әлеге лә баяғы Йыражбай менән Баязит инде.

Баязит ҡартатаһы «Зәһәр Баязит»тың исемен йөрөтә. Холҡо, булмышы, тәбиғәте, ғәйрәте менән дә зәһәр ине «Зәһәр Баязит». Әммә ейәненә ҡартатаһының барлыҡ зәһәрлеге күсмәһә лә, әллә осор шауҡымы, әллә әҙме-күпме ғилемлеге уны ҡайһы бер зәһәр ҡылыҡтарынан тота ине. Шулай ҙа уға зәһәр Баязит түгел, ә «Сарға Баязит» тип мөһөр баҫҡан халыҡтың осло теле. Сарға Баязит йөҙлөк һуғышсылары менән һөйләшкәндә, уларға уйланырға урын ҡалдырып фекерен әйтә. Башҡа ырыуҙарҙа, бәлки, «Сарға» һүҙе юҡтыр. Әммә барын-табындар «сарға» һүҙенә күп һәм тәрән мәғәнә һалғандар. Сарға холоҡло Баязит, беренсенән, әҙмә-әҙлекле, маҡсатлы, уны еренә еткереүсе, башланған эшен, бурысын, уйын, ниндәй ҡаршылыҡ булыуға ҡарамаҫтан, ташламаусы. Тиренән йәбешкәкте тырнап та ала алмаған кеүек, Баязитты маҡсатынан айырыу – ҙур һорау. Әле ул үҙ уйҙарына яҙылмаған фекер төйнәп, былай тине:

– Улар беҙгә өҫтән килгән бурыстарҙы еткереп кенә тороусылар булыр, ҡалғанын үҙебеҙ хәл итербеҙ, – тип Йыражбайҙың һүҙен ҡеүәтләне. – Әле кантонлыҡта генерал-губернаторҙан ҡасан яуға ҡуҙғалыу тураһында хәбәр беленмәй. Әммә беҙ уға көн һайын әҙер булырға тейешбеҙ, – тип һүҙен бөтөрҙө ул.

Шул саҡта 5-се кантон башы Мөхәмәтҡолой һүҙ алып:

– Үрге Урал гарнизоны етәксеһе майор Илья Бутлерға хәбәр килгән. Генерал-губернатор Гиргурий Волконский линия буйлап ғәскәрҙәрҙе ҡарап килә икән. Иртәнән һуңға ул Вирхуралда була. Унан бында килергә тейеш була. Әммә ул бында килеп өлгөрмәне. Хәҙер ул Уйскиҙа, унан Сыбаркүлгә керә лә беҙҙең 16-сы һәм 17-се полкка килә. Унда әле беҙҙең Арғаяш халҡынан башҡа Ҡонашаҡтың 19-сы полкы ла тора. Генерал-губернатор килеүгә, беҙ ҙә уға һуғыш алымдарын күрһәтәсәкбеҙ. Шуға ла бөтә иллелектәр, йөҙлөктәр, өс көн уҙыуға беҙгә рәхим итегеҙ! Бергәләп һуғышырбыҙ, өйрәнербеҙ, – тине.

Дөйөм хәбәр бөтөп, «хуш» әйтелгәс, һәр ауылдың унлығы, унлыҡтары теҙелеп, сафҡа баҫып, ҡайтыу юлға сыҡтылар.

Ҡорама кантондың иҫәбе буйынса, бөгөн, ҡалған көндө, ҡунаҡтарҙы һый эргәһендә ҡаҡайғансы һыйлап, ял итеп, иртәгә иртә менән уларҙы юлға оҙатырға ине. Мөхәмәтҡолой Ҡорама кантондың түренә барыуҙан, ойоштороу эшенең күплегенә һылтанып, ҡырҡа баш тартты. Сәбәбе лә сәбәп ине шул. Губернатор саҡлы

губернатор үҙе килә бит! Хәҙер уны яңы ауылда, яңы идара йортонда, яңы йәшәгән йортта ҡаршы алыр кәрәк бит. Ысынлап та, 4–5 көн эсендә 16-сы һәм 17-се алайҙы тулыландырып, ҡоралландырып, хәрби уйындар ойоштороуҙы ентеклә ҡушып, тикшерер кәрәк. Алтын Тамаҡтан иткә алмашып, килешелгән 200 ҡылысты, 300 беҙ-һөңгөнө алып ҡайттылар микән? Бынан башҡа хужалыҡ эштәре, ашау-эсеү һәм башҡа мәсьәләләр бихисап ине...

Тағы һис йыраҡҡа һуҙмайынса хәл итә торған шәхси мәсьәләләр ҙә бар. Ул – Ғәфифәне һоратып, атаһына яусы ебәреү. Үҙенә лә барыу... Яусы ыңғай хәбәр менән ҡайтһа, шунда уҡ никах уҡытып, Ғәфифәне алырға ла ҡайтырға. Әгәр риза булмаһа, мулла алып барып, күрше Көсөк йә Һөйөндөк ауылы мәсетендә никах уҡытып, ҡолағын тешләп ҡуйырға ла яуға бергә китеп, унда берегергә...

Шулай ҙа ниндәй осраҡта ла генерал-губернаторға әйтеп, унан был турала ҡағыҙ алып ҡуйырға кәрәк. Юғиһә, унда ниндәй хәл булмаҫ. Шулай фекер йөрөттө Мөхәмәтҡолой.

Ҡорама кантондың табынына бармай юлға ҡуҙғалғас, ул ыңғай йүнәлештән 7–8 саҡрым ситтә ятҡан Мулдаш ауылына, ҙур кырандасында саң туҙҙырып, эт өрҙөрөп килеп керҙе лә ауылдың түрендә ҡояшҡа ҡарап ултырған, оҙонға һуҙылған, урам яҡҡа өс тәҙрәле йортҡа туҡтаны. Өйлә намаҙы ваҡыты ине. Мөхәмәтҡолойға берәү ҙә ҡаршы сыҡманы. Ул, тып-тыныс ҡапҡа эсенән үтеп, өс баҫҡыслы күрнисәнән соланға, унан өйгә тиклем керҙе. Мөхәмәтҡолой кантон был ерҙә кантон да, түрә лә түгел. Ул – әлегә билдәһеҙ юлаусы. Кейеҙ, сигеүле япмалар өҫтөнә түшәлгән ҙур намаҙлыҡ алдында Бикбаш ҡатыны Бәҙерниса абыстай менән йәнәш торалар ине. Өй эсе тып-тын. Ҡолойға күтәрелеп ҡараусы ла булманы. Ике оло кешенең намаҙын бүлдерергә хаҡһыҙлығына, эсенә биреп, ишек төбөндә малай кеүек торҙо кантон башлығы. Башҡа сара юҡ ине. Нимәлер ҡыштырлағандай булғас, мейес менән өй яғы араһындағы һул яҡта элеүле торған шаршауҙың ситен һаҡ ҡына тартып асып ебәреүе булды, унда урындыҡ өҫтөндә аҡ тула ойоҡ, ҡул, аяҡ суҡтарына тиклем бөрөп бәйләнгән буйҡат-буйҡат оҙон ыштан, күлдәк кейгән, башы аҡ яулыҡ менән бөркәнгән, тик ҡаштары ҡыйылып, күҙҙәре генә ялтырап торған Ғәфифәне лә намаҙлыҡ алдында күрҙе.

Ҡыҫҡа ғына мыйыҡлы, түңәрәк һаҡаллы, ҡылысының осо иҙәнгә тейеп туҡ-туҡ иткән был кешегә Ғәфифә бер генә күҙ һирпте лә башҡаса боролманы. Ҡолой, ни эшләргә лә белмәй тора биреп, кире ҡапҡа эсенә -ураҙаға сыҡты.

Ураҙа киң, таҙа. Таш ҡойма менән уратып алынған. Ҡолойҙоң яңы йорто, ҡапҡа эсе кеүек булмаһа ла, япма баҫаналары йыуан ҡарағастан. Унда әле ауыҙлығы ла ысҡындырылмаған, әйәр

айылдары ла бушатылмаған, тиргә ҡатҡан яу аты – Ғәфифәнең туры, тилбер бейәһе тора ине. Әйәрҙә ике суғы булған асалы еңел генә ҡамсы, ҡыны йоҡа күн менән уратылған, әммә тышы төрлө ебәк ептәр, мәрйендәр йәбештерелгән, төрлө төҫтәге таштар менән биҙәлгән, тотҡаһы тамыр, үҙе бик йоҡа, еңел, кәкрерәк ҡылыс мүлдергәһенән генә әлеүле тора. Төптәрәк ике бура. Өй кеүек ҡоролма. Береһе мунсалыр. Тәҙрәһе лә бәләкәй, ишектәре лә шар асыҡ. Икенсеһе йәшәлгән өйгә оҡшаш. Тәҙрә япмалары, эстән ҡорған тороуы шул турала һөйләй ине.

Ул арала арттан ике ҙур эт килеп сығып, Ҡолойға саҡ-саҡ аҫылынманылар. Күрнисәгә йүгереп менеп, шунда әлеүле торған көйәнтәне ҡулына алып, һелтәп өлгөрҙө. Тора биргәс, күрәһең, тыштағы шау-шыуға өйҙән Бикбаш ҡарт аҡ күлдәк, аҡ ыштан, йоҡа ситек кейгән килеш килеп сыҡты ла, ҡылыс таҡҡан был кешегә ни әйтергә белмәй аптырап ҡарап торҙо. Унан һуң иҫенә төшкәндәй, был таныш түгел кеше янынан үтеп, әйәһе сыҡҡас, тағы ла асырғаланып-лаулап өрөп күрнисәгә менеп килгән эттәрен ҡыуып, бер һарайға бикләне лә, мосафирҙы саҡырып, өйгә керҙе. Һәр саҡ ҡолас йәйеп, ҡосаҡлап, ҙур иғтибар күрһәтелеп ҡаршы алыуға өйрәнгән Ҡолой кантонға, был «рәхим ит, мосафир» кеүек әйтеүе оҡшамаһа ла, хужаның артынан эйәреп өйгә керҙе. Бәҙерниса абыстай, сит мосафирҙың өйгә кереүен шәйләп, ҡуш яулығын башына һалып, ҡыҙы янына – сымылдыҡҡа кереп китте.

Өйгә кергәс, Бикбаш алғы өйҙәге урындыҡтың ширлегенә ултырҙы ла, ҡыҫҡа ғына доға уҡып, «Аллаһу Әкбәр» иткәс, мосафирға теклəп ҡарап, һорау бирҙе:

– Кем улы булаһың? Ҡайһы төбәктең һыуын эсәһең? Шишмәң башы ҡайһы армыт үңерендә?

– Көсөк тоҡомо Йәрмөхәммәт улы булам. Атым – Ҡолой, Ҡараһыу, Мейесле шишмәлеге һыуын эсәм. 5-се кантон башымын. Бейғара – Көсөк батыр ейәне Мөхәмәтҡолой булам, – тигәс, Бикбаш ҡарт уға иғтибар менән ҡарай башланы.

Ни хәжәте бар икән был кешенең миндә, тип уйланы ул. Төрлө-төрлө уйҙар йүгерҙе башынан. Ниңә был кешенең башҡаға түгел, ә тик Бикбашҡа килеүенә генә һис төшөнә алманы.

Ҡолой ҙа, бәлки, буласаҡ ҡайныһына нимә тип тә һүҙ башларға белмәй, аптырабыраҡ ҡалды. Күрәһең, сымылдыҡ эсендә Ғәфифә был кешенең кем булыуын һәм уның нимә йомошлағанын инәһенә моронлатҡандыр. Бәҙерниса абыстай сымылдыҡ эсенән сығып, эсе ҡуптыҡ ҙур еҙ самауырына һыу ҡойоп, соланға сығарҙы.

Ҡолой аптыраған Бикбашҡа бик етди тауыш менән:

– Ишеткәнһегеҙҙер, Бикбаш атай, Рәсәйгә бик ҙур яу менән Наполеон тигән батша баҫып ингән. Көнбайышта ике ай ярым

инде һуғыш бара. Ғали йәнәптәре бөйөк батша Әләксәндер губернатор аша беҙгә мөрәжәғәтнамә ебәргән. Рәсәйҙе һаҡларға беҙҙе, башҡорттарҙы, тағы ла яуға саҡыра. Әле бына һеҙҙең кантонда яу әҙерлеген күрһәттеләр. Хәҙер беҙҙә, 5-се кантонда ҡарайбыҙ. Генерал-губернатор Гиргурий Волконский әфәнде үҙе килә. Һуғышҡа әҙерлекте бөтә яҡтан да күрһәтергә кәрәк... Ялауҙы ла, бәйләүҙе лә, сей яраны ла. Ялауһыҙ – дауалауһыҙ һуғышсы булмаған кеүек, һуғыш та яраһыҙ булмай. Ә яраны дауалау өсөн табип кәрәк. Дауаламаһаң, бөттө... Шуға күрә лә, Бикбаш атай, ҡыҙығыҙ Ғәфифә, табип булараҡ, ул да ғәскәргә саҡырыла. Һеҙ уны миңә, 18-се алайға тапшырып ебәрергә тейешһегеҙ, – тип мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙы.

– Дөрөҫөрәге, ул генерал-губернатор килгәндә ғәскәрҙә табип вазифаһын үтәргә тейеш. Һәм яу әҙерлеген ҡарағанда ғына түгел, – тип ҡәтғи әйтте.

Бикбаш та бик күп яу күргән кеше. Үлем менән ҡырҡмаһа ҡырҡ тапҡыр күҙгә-күҙ ҡарашып торғаны бар. Хәҙер инде ул оло. Ғүмер баҡый йә алай башы, йә йөҙ башы булды. Рәсәй яуҙарына ла, ҡалмаҡҡа ла, ҡаҙаҡҡа ла күп барҙы. Бикбаш, бик ҡырҡыу холоҡло булһа ла, әле олоғая биргәс, ул дәрәжәләрҙән ситтәрәк торғас, күптән үҙе лә, үҙенә лә былай киҫкен өндәшкәндәре юҡ ине. Был әллә бойороҡ, әллә үтенескә оҡшаш мөрәжәғәтте тыңлағас, Бикбаш та Ҡолойға ҡырҡа ғына кире яуап бирер өсөн ауыҙын асты ла кире япты:

– Кем, Йәрмөхәммәт Көсөктөң улы булам, тинеңме әле? – тип ҡабаттан һораны.

– Эйе, эйе, Көсөков Йәрмөхәммәт улы булам. Мейәс һыуы, Иҫәнгилде ҡәрйәһенән. Хәҙер үҙ ултырағымда йәшәйем. Ике ҙур йорт күтәрҙем. Өс тирмәнем бар. Тағы икеһен төҙөп бөтәбеҙ. Мәсет һалдыҡ, шунда мәҙрәсә лә эшләй, – тип үҙенең кем икәнен күрһәтер өсөн теҙеп алып китте.

– Йәрмөхәммәт... Йәрмөхәммәтте белəм мин. Ҡафҡа, Ҡаф тауҙарына яуға бергә барҙыҡ. Ә ҡалмаҡҡа ҡаршы нисәмә тапҡыр барғанда осраштыҡ, – тип ул иң алда үҙенең был ҡылыслы кешенең атаһын белеүен аңғартты. – Минең йөҙлөктә һеҙҙең олоҫтан Яратҡол, Ураҙбай ауылдарынан егеттәр булды...

Әммә Ҡолойҙоң Бикбаш ҡарт хәбәрендә эше юҡ ине. Ул төп бурыстың береһен үтәне кеүек. Ғәфифәнең атаһына ҡыҙының әрмегә алынасағын әйтте.

Бикбаш менән Ҡолой шулай бер-береһен һынап ултырғанда, Бәҙерниса абыстай урындыҡҡа аш яулығы йәйҙе. Уның ситенә ағастан юнып эшләнгән, өҫтө самауыр төбөнән төшкән күмерҙән көйөп бөткән киң генә таҡтаны алып ҡуйҙы ла ҡайнаған самауырҙы килтерергә, иренә ымланы.

Шул вакыт тышта шартлап урам капкалы асылды. Һарайҙағы эттәрҙе өрҙөрөп, кулына кағыҙ тоткан кантон хәбәрсеһе йәнфарманға йүгереп өйгә үк килеп керҙе лә кантонға кағыҙ тоторҙо.

– Сапкын килтерҙе, — тип әйтеп йәһәтерәк кире сыкты. Колой урыҫса яҙылған был хатка тиҙ генә күҙ йөрөтөп сыкты ла урынынан торҙо. Шул арала, кайҙан алғандыр, әммә был хәбәр тиҙ етте, бик тиҙ етте кыуып Колой кантонды. Троицк-Өстамак кәлғәһе гарнизон майоры Александр Овсянников уға генерал-губернаторҙың Уйск гарнизонынан кайһылыр йүнәлештә киткәнен хәбәр иткән. Әле бит ул, майор Овсянников, Корама кантондың табынында тоноҡ һыуҙы эсә-эсә ит ашап ултырырға тейеш ине лә баһа. Өркөткән, бик өркөткән был хәбәр бөтә табындағы кунактарҙы, тип уйлап, тышка сыкты.

Әллә ул күрмәй калған, әллә сымылдык яктан икенсе ишек булған, баяғы эт кыуған көйәнтәгә һыулы күнәктәр әлгән Фәфифә менән ул йөҙгә-йөҙ осрашты.

– Фәфифә! Ашығыс хәбәр килде, миңә тиҙ генә кайтырға кәрәк. Һине беҙҙәге ғәскәри әҙерлеккә сакырырҙар, килерһең. Үҙеңде губернаторға күрһәтермен. Шунда беҙҙә никахка инербеҙ. Атайың менән инәйеңде лә алдырырбыҙ, – тип Фәфифәнең башын күкрәгенә кыҫып косакланы ла, сыгып, кырандасына ултырҙы. Көтә-көтә көтөк булып, ирекһенеп торған дүрт ат кырандасты борҙолар ҙа, һеңкелдәтә-һеңкелдәтә тартып, йәнфарман кайтыу яккә юрттылар.

Был тирәлә лә Колой юлдарҙы яҡшы белә ине. Ул оло картатаһы Кара кеше-Көсөк ауылы аша, Түһәле ултырағының уң яғы менән тура Сыбаркүл кәлғәһе аша, Ураҙбай, унан һуң Яратҡол ауылдары ерҙәре аша үҙ ултырағына, Мостафа ауылы янындағы Актүбә калкыулығында ултырған «Мейәс йорт» кышлауына килеп етте. Уның килеүен, дуғаһында сыңлаған кыңғырауҙары тауышын ишетеп, бала-сағалары, ике бисәһе Акбикә һәм Зөләйхә, ҙур таҡта капҡаларын шар асып, каршы алдылар. Капҡанан кереп, кырындасынан төшөү менән ул ярҙамсыһына барлык йортауайҙарҙы, йөҙлөк-иллелектәрҙе иртәгә иртә менән үк кантон идаралығына сакырырға бойорҙо.

Киң бура өйҙөң йомшак кейеҙҙәр, балаҫтар менән түшәлгән таҡта урындығында аш ашағанда бер туғандай татыу бисәләре Акбикә менән Зөләйхәнән йорт-куранық, мал-тыуарҙың имен-аманлығын һораны.

Тирә-йүндең тирмәндәргә нисә бот ашлык килтереп тарттырғанын, көҙгә тартым булһа ла, нисә колоҡай тыуыуын, кышкылыкка һарай, аҙбар-кураларҙы эшләү йә төҙәтеү эшендә эшләгәндәрҙең эшкә мөнәсәбәтен, тиреләрҙән кайыш эшләү

барышын һәм башҡа йөҙләгән бурысты үҙе өйҙә булмағанда йәшерәк ҡатыны Зөләйхә, шәһит булған ағаһының улы, оло бисәһенә әйәреп килгән Иҡсан үҙ күҙәтеүҙәренә һәм идаралыҡтарына алалар. Иҡсан хәҙер, үҙе тулы ир ҡоронда. Үҙ йорто, бисәһе һәм ике балаһы бар. Икеһе лә Көсөктәр, тимәк ир балалар.

Аҡбикәнең Иҡсан менән бер туған ҡыҙы Мәлихәһе бар. Ул да буй еткереп, уға ҙур туй үткәреп, айырым ҙур ғаилә булырға әҙерләнә.

Зөләйхәнең дә әйәреп килгән Хөсәйен тигән улы бар. Ул да тулы ир. Уға хәҙер 26 йәш. Зөләйхәнән тыуған ҡыҙы Сәйфәхә лә тормошта. Ә бына Зарифа менән Камилә үҫеп киләләр, бүре бүрке менән бәреп йыҡһаң да йығылмаҫлыҡ булып. Донъя көтөргә бик етди булырға оҡшап ирендәрен ҡымтып, күҙгә тура ҡарап, ҡашыяҡ, аш-һыу араһында инәләренә, еңгәләренә булышып йөрөп яталар.

Ҡолой нисек тә булһа бер етди улын донъя терәге итеп һуғыштан алып ҡалыу юлдарын эстән генә юл буйлап та уйлап килгән ине. Шул уйҙарына батып, ул тышҡа төп өйҙән башҡа тағы ла 5–7 өй ултырған ҙур ураҙаға – ҡапҡа эсенә сығып, йыуан бүрәнәгә ултырҙы.

Әгәр үҙ урыныма Иҡсанды ҡалдырһам, ул башҡаларҙы ҡыйыһытыр микән?.. Үҙ улым түгел бит... Аҡайҙыҡы. Хөсәйенде лә ҡалдырып булмай. Ул бөтөнләйгә минең ҡан түгел. Юҡ, уны хужа итергә ярамай. Хәсән! Һуғышҡа бик сарға инде! Әммә ул йәшерәк. Көндәлек тормоштоң әкен-сөкөнөн еренә еткереп алып бара алмаҫ. Ҡайтыуыңа бөтә донъяң емерек булыуы ихтимал. Бер ҙә тары сәсәйем, арпа сәсәйем, тип тормай бит. Уға гел генә ат менергә лә, бөркөт сөйөп, бүре баҫтырып йөрөргә. Әйтәһе лә юҡ, бик оҫта уҡсы. Янды ла йүнәтә, бөгөп, үҙе эшләй. Ҡулы оҫта шилманың. Әммә соҡоп эшләй торған эшкә өҫтән ҡарай. Әгәр бүре, ҡыр кәзәһе, кейек ата алмаһалар, иптәштәре менән бергә көнө буйы ярышып сабып, һөңгө осона кейҙерелгән бүректәренә йән-фарман осҡан килеш атып тейҙереү өсөн ярышалар. Юҡ, Хәсән әлегә донъясы түгел. Үҙем менән ул да, ағалары ла китер яуға. Ә бына Фәбделхалиҡ урта йөҙ. Уға бөтәһе лә берешерәк. Өҫтәүенә, ул һолло. Хисабы бар. Иң йәтеше шул Фәбделхалиҡ буласаҡ. Генерал-губернатор үҙемде ҡалдырмаҫ, ике алайға баш булырға кәрәк бит. Урыҫ командирҙары бар ҙа ул барлығын, тик уларҙы аңлаусы юҡ. Бер һуғышсыға ла бойороҡ-фарман бирә алмай. Күҙле бүкән булып йөрөрҙәр инде ҡамасаулап.

Шулай ҙа урынға кантон башы итеп кемде ҡалдырыуҙы генерал-губернатор үҙе хәл итә. Бына бит ҡағыҙ ебәргән, кемде ваҡытлыса кантон башы итеп ҡалдырыуға тәҡдим һораған. Яҙырмын, үҙе килгәс, ҡарар...

Шундай уйҙар менән башы тулы булды кантондың. Ул һорауҙар, киләсәк мәсьәләләр... Ә бит һуғыш күрһәтмәһен ойоштороу, губернаторға әҙерлекте күрһәтеү бик ҙур бурыс, бик ҙур. Ул һорауҙар менән иртәгә иртәнән мәшғүл булырмын. Бөгөн кис Зөләйхә янында булырмын... Һуғышҡа китеүҙе әйтермен. Хөсәйендең дә һуғышҡа алыныуын әйтергә тура килер, тик ул аңламаҫ. Хәсәндең дә китеүен белһә, йөрәге ярылыр. Зарифа ҡыҙ менән генә тороп ҡала бит. Ҡорһағында кем барлығын әле үҙе өндәшмәй, хәйер, бөгөн, бәлки, уның турала һүҙ сығыр...

Ҡолой, Зөләйхәне яратам, тип тә, яратмайым, тип тә әйтә алмай. Әллә ниндәй буталсыҡ хистәр эсендә йөрөй ул. Бер яҡтан, яҙмыштары бәйләнгән. Уртаҡлыҡ күп. Уртаҡ ике балалары бар, Хәсәне менән Зарифаһы. Әгәр икенселәр яҙмыш ҡамсыһына бергә ишелеп үрелмәгән булһалар, ул Зөләйхәне яратыр ине, бик яратыр ине, моғайын. Әлбиттә, ул ҡыҙ ваҡытында уҡ Мөхәмәт-ҡолойға бирелгән булһа... Уның бит сит кешенән балаһы бар. Зөләйхәне урлап алып ҡайтыу ул намыҫ һәм күмерҙәге инде һүнгән осҡондо өрөп терелтеү булды. Әммә ул янманы ла ҡуйҙы. Зөләйхәнең тәнендә ул теге иренең еҫен, ҡулдарының юлын күрә, буғай. Шуға ла Ҡолойҙа Зөләйхәгә ҡарата булған хистәр өргән күмерҙәге осҡон, ут булып тоҡанманы. Аҙаҡ ул хис Зөләйхәне йәлләү һәм тормош бурыстары менән уҡмашты ла ҡуйҙы. Әлбиттә, Зөләйхә тормошта Аҡбикәгә ҡарағанда етдиерәк, ҙурыраҡ мәсьәләләрҙе лә хәл итә ала. Үҙенә генә лә түгел, тирә-йүнгә лә етерлек ғилеме бар. Мәҙрәсәлә ҡыҙ балаларҙы уҡыта, уларҙы тормош серҙәренә өйрәтә. Ул да кантон нәҫеленән. Атаһы Төпәйҙәр, Бутастар ҡаны.

Ә бына Аҡбикәһе – тулыһынса хужабикә. Барлыҡ келәттәрҙең асҡысы унда. Ҡайһы келәттә нимә күпме, ҡайҙа ятҡанлығын Аҡбикәнән башҡа берәү ҙә белмәй. Һәр йортҡа аҙыҡ-түлекте лә ул өләшә. Ә ул өләшер аҙыҡтар атай етәкселегендә, Аҡбикә менән Зөләйхә күҙәтеүе аҫтында келәттәргә керә. Тормоштағы был ҡанун нисектер Ҡолойға оҡшап етмәй. Барлыҡ әйбер-ҡараға, аҙыҡ-түлеккә Аҡбикә хужа. Ә бит Зөләйхәнең дә балалары бар. Аҡбикә ҡайһы саҡта кәрәк әйберҙе Зөләйхә менән балаларына биреп тә етмәйҙер. Әгәр ул мәсьәләне Аҡбикәгә ҡаты ҡуйғанда... Тик һәр нәмәне уға әйтеп тә еткермәйҙәрҙер. Уның да булыуы мөмкин. Шуның өсөн яуға китмәҫ борон һәр ике ҡатынға үҙ келәттәрен билдәләү һәм айырым асҡыстар тоттороу дөрөҫ булыр. Ә аш-һыуҙы, хәҙерге кеүек, дөйөм ашарҙар. Был турала Ҡолойҙоң өйөндә яҙылмаған ҡағиҙә бар. Иң алда бөтә балалар бер ҡорҙа дөйөм ашайҙар, эсәләр. Ҡунаҡ бүлмәһенә кәрәк саҡта ғына, ололарҙың саҡырыуы буйынса ғына керәләр. Ә Ҡолойҙоң төптәге бүлмәһенә балалар тик уның саҡырыуы буйынса ғына

керәләр. Ул бүлмәлә идаралыҡта ҡалдырмай торған ҡағыҙҙар, үҙенең шәхси ҡоралдары, пистолеты, ҡылыстары, һөңгөләре, ҡапыл ғына йә ҡыҫҡа яуға, йә губерна, провинция үҙәктәренә барғанда ала һәм кейә торған мыяттары.

Ҡапҡа эсендә һәр нәмәне тикшереп, осраҡандарға йә эш ҡушып, йә һорауына яуап алып кисте еткерҙе Ҡолой. Ҡояш көнбайышта Йәмәле тау, Биҙәртау, хәҙер ниңәлер Илмән тау һәм арҡыры ятҡан Таҡанай артына ҡыҙарып, бик ҡыҙарып байып бара ине. Һуңғы көндәрҙә Ҡолойға ла ҡанға мансылып батҡан ҡояш нурҙары уны үҙенең эсенә һурған кеүек тойола башланы. Белә ул үҙенең бүлкелдәп ҡан аҡҡан һуғыш яланына китәсәген. Шул аҡҡан ҡандың шәүләһен бөтә көнбайыш офоҡто ҡып-ҡыҙыл нурға мансып, тыныс ҡына батып барған ҡояш нурының йыраҡтағы сағылышы ла кеүек һиҙә ул. Эсе боша ине Ҡолойҙоң, эсе боша ине. Бөтә донъя, йорт, бала-саға, ҡатындар, тыуған ер, ил тороп ҡала! Ул үҙе лә һиҙмәҫтән уның осорона тиклем үк үҙ ерен үҙ илен ташлап китергә мәжбүр булған ир-аҙамат сығарған «Арғужа» йырын эстән генә көйләй башланы:

Арғужа ла күлен буйлағанда,
Ятып ҡалды ҡайыш дилбегәм.
Ҡалманы ла минең, эй, дилбегәм,
Ҡала минең ғәзиз илгенәм.

Ҡала, ҡала шул, нишләйһең. Бик теләһәң, бәлки, нимәгәлер һалыша биреп яуҙан ҡалып та булалыр... Ни тиһәң дә, ғүмеренең шундай осоро, 48 йәш тулып 49-ға атлай. Теләһәң, оло, теләмәһәң, әле ир уртаһы булырҙай, 50-гә лә етмәгән... Юҡ, Ҡолойҙоң әле олоғаяһы килмәй. Һаулығы ла быға дәлил. Бер һуҡҡанда әле урта ғәйрәтле ирҙе һуғып йығырлыҡ ҡарыуы бар. Ҡылысы менән бер нелтәгәндә беләк йыуанлығындай еректе лә өҙә саба. Һынап тора ул һәр саҡ үҙ ғәйрәтен. Уға бер ҙә күрһәтмә ғәскәри һынау кәрәкмәй.

Китеүен китәһең дә ул, донъя-мөлкәттән башҡа 30–35 ауылды берләштергән кантонлыҡ та бар бит әле. Ул ауылдарҙағы халыҡтың да мәнфәғәте бар. Төп мәнфәғәт шул кантонлыҡлыҡты икмәк менән тәьмин итеүҙә булышыу. Итен, һыуын, башҡаһын үҙҙәре табалар. Бына ер эшкәртергә төрән, тырма сөйҙәре, тәгәрмәс ҡоршауҙары, үҙәклектәр йә башҡа бик күп тимер-томор табып биреү үҙе ҙур мәсьәлә. Быға бер йүнен дә тапҡан ине ул.

Шәмбе көнө алыш-бireш өсөн ҙур баҙар ойоштора ине. Ул баҙар йылына өс-дүрт тапҡыр ойоштороло. Көҙ, ашлыҡ һуғылып алынғас, кантон идаралығы фәлән көндә, фәлән ауылда шәмбе баҙары ойоштора. Ашлыҡҡа, ит-майға, еләк-емешкә, күн һәм

башҡа ауыл хужалығы әйберҙәре, тимер ҡорамалдарға, эш ҡоралдарына, көнкүреш әйберҙәренә алмаштырыла, тип Силәбегә, Сыбаркүлгә, Мейәскә, хатта Алтын Тамаҡ-Златоустҡа хәбәр ебәрелә ине.

Ҡышҡылыҡҡа аҙыҡ-түлек, он, ярма, ит-май әҙерләүгә теләүселәр кантонлыҡтың шәмбе баҙарына бик әүҙем йөрөнөләр. Бына шунда үҙе лә йөрөр булды Ҡолой кантон дүрт ат егелгән повозкаһында ҡыңғырауҙарын зыңғырлатып, Зөләйхәһен ултыртып. Баҙарға Ҡолой кантондың тоҡтарға тултырылған ылау-ылау оно, көрпәһе, бөтәүе-тарыһы, арпаһы, һоло бойҙайы... Бынан башҡа яңы ғына салынған һыйыр, ҡуй ите. Тоҙлап, елдә киптерелгәндәре лә. Аҡ май ҙа, һары май ҙа, сейәлеһе һәм көртмәлеһе лә, ҡағы, әжегәйе һәм башҡалар. Бына шунда инде ул алыш-бирештә, аҡсаға һатыу итеү ҙә. Һәр кем аҙыҡ-түлеген үҙе һатты, үҙе әйбергә алмаштырҙы.

Бейек олтанлы, оҙон ҡуныслы итеген кейеп, ҡылысын тағып, ике ҡулын артҡа ҡуйып, һалмаҡ ҡына атлап, баҙар ҡарап йөрөнө кантон башлығы. Баҙарға ул аҙна һайын килә, дуҫ-ишен, знакумдарын күрә, халыҡ менән аралаша. Үҙе һатыу итмәй. Һатыу итергә тәғәйен кешеләре бар. Улар өҫтөнән дөйөм ҡарау, дөйөм етәксе Зөләйхә. Зөләйхә хаҡ ҡуя. Зөләйхә хаҡ төшөрә. Ҡайҙа, күпме аҙыҡ-түлек һатылған, ни саҡлыға һатылған, нисә һум аҡса кергән — уларҙы Зөләйхә белә.

Әммә ул бөтә кантонлыҡтың тигәндәй аҡсаһы өсөн кантон начальнигы ярҙамсыһы Сәйфелмөлөккә яуаплы. Асҡаҡ, йәшелерәк күҙле, тилбер Сәйфелмөлөк иҫәп-хисапҡа шәп булды. Троицкиҙа асылған, йәҙитсә уҡытылған мәктәпте тамамлап ҡайтҡайны. Ун һигеҙе тулыу менән 1807 йылда казаклыҡҡа яҙылды. Хеҙмәткә әүрәтә башланылар, әлбиттә, зат-зәүер, ағалары менән берлектә.

Бына шул Сәйфелмөлөк, кантон бисәһе тип тормай, Зөләйхәнән һуңғы тиненә тиклем иҫәпләтеп, алыш-биреште үҙ ҡағыҙына яҙҙырып ҡуя торғайны. Ул, шундай хисап яратҡас, ваҡсыл һәм һәр нәмәне еренә еткереп эшләргә яратыусы тип үҙен танытты. Ул хатта Зөләйхәнең күпме аҡса тапшырғанын, күпме әйбер-ҡара, аҙыҡ-түлек алыштырылыуы тураһындағы яҙыуға ҡултамғаһын, көнмә-көнөн күрһәтеп һалыуын талап итте. Ә Зөләйхә уға ҡултамғаһын һалманы. Зөләйхә ҡултамғаһын һалмағас, ул һатыусыларҙан аҡсаны үҙе йыймаҡсы булып киткәйне, ләкин улар Сәйфелмөлөккә килем аҡсаһын бирмәнеләр, тик алыш-биреште, алмаш әйберҙең генә хаҡтарын әйтеп торҙолар.

– Кантонша бөтә белә бит, – тип кенә яуапланылар. Күрәһең, Сәйфелмөлөккә баҙарҙың бөтә әкен-сөкөнөн әйтеү кантондың үҙе тарафынан тыйылғандыр. Сөнки Сәйфелмөлөк губернаға

алған табышты икенсе төрлөрәк итеп тә яҙып ебәреүе мөмкин бит. Унан ғауғалаш китә. Йә губерна канцелярияһы начальнигы Алексей Терентьевич Ермолаев, йә гражданлыҡ губернаторы Матвей Наврозов алдында ғәйепһеҙлегеңде иҫбатларға тура киләсәк...

Ҡаты тотто Ҡолой уларҙың барыһын да. Ҡолойҙоң шәхси милке булып иҫәпләнгән биш мең йылҡыһы, әллә нисә мең баш ҡуйы, йөҙләгән дөйәһе, ҡыр-урманда, ауыл түбәләрендә туҙып йөрөгән хисапһыҙ кәзәләре, Мейәс, Ҡарабыу, Иш йылғаларындағы биш тирмәне, унда эшләгән бөтәһе ике йөҙҙән артыҡ кешеһе, дөйөм хужалыҡ булып, ысынбарлыҡта кантон халҡының ауыр йылдарҙа ышанысы ла, таянысы ла ине. Кантонлыҡҡа аслыҡ ҡуркыныс булманы. Мал-тыуарға үләт килгәндә лә уларға йоға һалманы. Сөнки кантон малдары ауыл тирәһенән алыҫтараҡ, айырым торҙо, ауыл малдары менән аралашманы. Быны Ҡолой кантон үҙе шулай ҡуйған ине. Һәр төрлө уйлап табыуға ла ул бик оҫта булды.

Ә Сәйфелмөлөк аҡса талап итте лә аҡса талап итте... Уның был ҡылығын Зөләйхә ире Ҡолойға ла әйтеп ҡараны, ләкин ире уға яҡлашмаған төҫлө күренде.

– Һатыу эше бит, ике яҡлы яуаплылыҡты ярата, – тип ҡоро ғына әйтте.

Һәр баҙар һайын Сәйфелмөлөктөң биргән иҫәп-хисабынан һуң Ҡолой кантон аҡсаһын күпмеһен ҡайҙа тоторға үҙе фарман яҙа. Мәсет, мәҙрәсәгә, ундағы балаларҙы ашатыуға, күперҙәр һалыуға, эшләгән халыҡҡа аҙыҡ-түлек таратып биреү, ҡайһы ауылға, олоҫҡа күпме, миҙгеленә ҡарап хужалыҡ эштәренә, һаҡ, сапҡындар тотоу һәм башҡа ҡырҡмаһа ҡырҡ эшкә бүлгесләне.

Һуғыш ғауғаһы сыҡҡас, Алтынтамаҡ-Златоустҡа барып, ата-олаталарынан ҡалған тотҡаһы тамыр, ә тимер осо – әпесе бөркөт башлы аманат ҡылысын биреп, шуның кеүек 500 ҡылыс һуғыуҙы һораны. Шул 500 ҡылысҡа 500 һарыҡ вәғәҙә итеп, ваҡытын да билдәләгәндәр ине. Ул килешеүгә хәҙер ике ай ваҡыт үтте. Ҡорама кантонға китер алдынан һорауының үтәлешен белеү өсөн Алтынтамаҡҡа кеше ебәргән ине, әле ул күренмәй. Үҙе алдараҡ ҡайтты, буғай. Бына шулай төрлө уй, төрлө мәсьәләләрҙе хәл итеү юлдарын эҙләп, кис еткереп килә...

Ә иртәгәһен... Иртәгә иртә менән йөҙәрләгән мәсьәләләрҙе сисергә, хәл итергә кәрәк буласаҡ. Әле губернаторҙың ҡасан килеүе билдәһеҙ. Әгәр шул көндәрҙә килер булһа, Сыбаркүлдән сапҡын килеп хәбәр итер ине. Ул Сыбаркүлгә килгәс тә, унда берике көн булыр әле. Бәләкәй булһа ла, завод шәрәмәте, ҡәлғәһе, һаҡсы ротаһы бар. Ҡойо йылға, Ҡаҙыбай, Булат, Тимер, Төхмәт һәм башҡа ауылдар 4-се кантонға ҡараһалар ҙа, улар тирәһенә

килеп урынлашҡан, христиан динен алған мордвалар, бокалдар, ноғайҙар һәм Рәсәйҙең урта өлөшөнән ҡасандыр Мосоловтар, Лугиниҙар, завод эше өсөн ҡыуып килтергән урыҫ кешеләре лә бар.

Улар дәүләт крәҫтиәндәре, үҙҙәренең түрәләре әйтмешләй, крепостной крәҫтиәндәр. Ситкә китергә лә, ҡасырға ла иректәре юҡ. Ҡасҡалар, йә Себер оҙаталар, йә һалдаттар килтереп, уларҙың ҡулына шпицрутен тигән тал сыбығы биреп, ҡасаҡты строй аша үткәреп һуҡтыралар.

Ҡолой шуныһын аңламай, ниңәлер, һуғыш башланһа, шуларҙы «казак»ти ҙә ебәрәләр. Ҡолой бит белә. Әле тәүге Наполеон һуғышына, 1805–1807 йылдарҙа, ағаһы Сәғит Көсөкөвты ла алдылар. Ул осорҙа уға 46 йәш ине. Йөҙләк башы булды Сәғит тә. Шул Сәғит ағаһы аптырап һөйләй торған ине:

– Бында, урыҫтарҙы, мордваларҙы килтереп ултыртҡан ауылдарҙа, заводчиктарҙан туҡмалып, шешенеп бөткән мужиктарҙы рекрут яһап, казаклыкка яҙып, йәнәһе, Силәбе казактары булып һуғышта беҙҙең менән йәнәш йөрөнөләр, — тиер ине. Казактар ни, Тын-Дон буйында ла инде. Телдәре лә беҙҙеңсәрәк, ғөрөфтәре лә. Яйыҡ, Урал, Исәт казактары тигәне нимә була һуң? Ниндәй казак булһын инде, крепостнойҙар бит улар. Күскенселәр, ҡасаҡтар, һәр төрлө илбаҫарҙар, тип аптырар ҙа йөрөр ине Сәғит ағаһы.

Бына әле лә шул крепостнойҙарҙы ҡоралландыралар ҙа, казак яһап, бергә ойошторалар ҙа ебәрәләр. Уларҙың күбеһе атҡа менә лә белмәй. Меңһә лә, һәйбәт итеп йөрөй алмай.

Мөхәмәтҡолой әлекке яҙмаларҙан белә ине, 1805 йылда Рәсәйҙе һаҡлап, Наполеонға ҡаршы тик ҡыш, пасха тигән көндәре осоронда, 1000 Ырымбур, Силәбе, Исәт «казагы» ни бары 600 ҡалмаҡ атлыһы, әммә 7000 башҡорт яуға китте. Был мәғлүмәттәр Ҡолойҙоң иҫендә. Әммә Наполеондың был һуғышы бик ҙурға оҡшай. Тимәк, «казактар»ҙа, башҡорттар ҙа күп алынасаҡ.

Генерал-губернаторҙың юлы нисек булыр икән? Унан бит, һәр ҡәлғә-нығытмала казактарҙы, дөрөҫөрәге, крепостной крәҫтиәндәрҙе ҡоралландырыу өсөн ҡорал һораясаҡтар. Шуға ла ул Уҡлы Ҡарағай, Уй крепостарынан һуң тура Алтынтамаҡ-Златоуст ҡорал заводына барыр. Унан Мейәскә килер, унан Сыбаркүлгә. Сыбаркүлдән һуң беҙгә керер. Генерал-губернаторға 6-сы, 4-се кантондарҙағы иррегуляр башҡорт ғәскәренең өйрәнеү ғәскәрен күргә тура килмәне, шуға ла беҙгә, һис һүҙһеҙ, Сыбаркүлдән һуң керер. Артабан Силәбегә, Троицкиға, Степнойға беҙҙән һуң юл алыр, тип фекерләне кантон. Әгәр шулай булһа, минең әле 8–9 көнөм бар. Шул 8–9 көндә миңә көн дә, төн дә булмаһын, тип үҙ-

үҙенә бурыс ҡуйҙы кантон начальнигы. Әммә үҙеңде, үҙеңдең шәхси тормошоңдо ла онотма, тине ул тағы ла үҙ-үҙенә.

Идаралыҡҡа кереп, ҡорҙашы Ҡорама кантонға хат яҙҙы. Сапҡын уҡый алмаһын тип, хатты урыҫ хәрефтәре менән урыҫса яҙҙы. Дүртенсе кантондың йөҙ баштарын, иллелектәрен алдағы кесе йоманан да ҡалмай килеүҙәрен һораны. Иң ҙур үтенес шул булды – Ҡорама кантон үҙе менән йәш абыстайын килтерһен. Уға ҡушып Мулдаш ауылынан Бикбаш ҡыҙы Ғәфифәне лә һуғыш аты менән алһын. Уны ул, йәнәһе лә, губернаторға ғәскәри табиб итеп, күрһәтмәксе. Хатта Ҡолой генерал-губернаторға, уның ҡуштандарына, ҡорҙашы Ҡорама кантон ғаиләһенә, Ғәфифәнең ата-әсәһенә айырым тирмә ултыртырға бойорҙо. Ошо яҙылған хатты бәләкәй генә япмалы ялпаҡ туҙ туйыҫҡа һалып, саҡырылған сапҡынға тоттороҙо.

Хәҙер, һуғыш башланғас, сапҡындар һәр 10 саҡрым һайын тора. Юл билдәле. Бишкүл, Ҡаҙыбай, Булат, Ҡолаҡты, Ҡорама. Иртәгә төшкә хәбәр етһә, кискә ул хәбәр кире киләсәк. Сөнки һуғыш осоронда башҡортта һәр хатҡа, һәр хәбәргә ыңғаймы, киреме, барыбер яуап булырға тейеш ине. Был борон-борондан килгән олатайҙар ҡануны.

Ҡолой иртәгенән иртә менән ниндәй һорауҙарҙы хәл итәһен яҙыштырҙы. Ярҙамсыһы Сәйфелмөлөккә лә әйтеп яҙҙырҙы. Өҫтөнә ауҙарылған йөктең ниндәйҙәр өлөшө, төшкәндәй булды.

Мөхәмәтҡолой 29 йыл Аҡбикә менән һәм 26 йыл Зөләйхә менән йәшәһә лә, тирә-йүндә ике бисәле кантон булып исеме сыҡһа ла, ғәмәлдә ул яңғыҙ ине. Ғүмере буйы күңеле буш булды. Йәшлегенән ысын мөхәббәт ләззәтен татымаған был 49 йәшлек ир хәҙер, һуңлап булһа ла, Ғәфифәгә ғашиҡ булды ла ҡуйҙы. Ул ғашиҡлыҡ тойғоһо берәүҙән дә һораманы, йөрәк түренә керҙе лә ултырҙы. Үҙе лә белмәне ул үҙенең ғашиҡ булыуын. Әлбиттә, ул Мөхәмәтҡолойға йәше менән тиң түгел. Йәш араһы 22 йыл. Әммә ул, Мөхәмәтҡолой, Ғәфифәнең йәшен түгел, ә үҙен уйланы, үҙен яратты. Мөхәмәтҡолойҙоң үҙе кеүек үк ҡырҡыу, ҡыйыу был ҡатын һис ҡасан һис аптырап торғандарҙан түгел. Яҙыуы, уҡыуы ла бар, үҙе табип та. Ул, Ғәфифә, имеш, Сәмәрҡәнд яғынан Әбүғәлисиндең табиблыҡ буйынса яҙма күсермәләрен дә алдырып уҡый икән, тигән хәбәр таралған. Ат өҫтөндә яралған бисә был. Уны нишләп һуғышҡа алып китмәйһең инде? Сапҡын аша Ғәфифәне килтереүен һорап, Ҡорама кантонға хат ебәргәндән алып Мөхәмәтҡолой, барлыҡ хужалыҡ, ойоштороу эштәре тураһындағы уйҙарын ташлап, Ғәфифәгә булған хисенә сумды.

Хәҙер инде ҡараңғы төштө. Ә уның йә Аҡбикә, йә Зөләйхә янына ҡайтып ятаһы килмәй. Шулай ҙа ярамай. Кантон башы бөгөн бисәләренә ҡайтмаған икән, тигән хәбәр бисә-сәсә

араһында йәшен тиҙлеге менән тараласаҡ. Төнгө ҡараулсылар ҙа ҡарап тора. Билендәге яҫы ҡайышлы ҡылысын, мүлдергәһен сисеп, ҡулындағы ҡамсыһын идара бүлмәһендәге ҡарағас сөйгә әлде лә, бүлмәһен шыуҙырмалы йоҙаҡ менән биклəп, икенсе өйөнә табан йүнәлде.

Икенсе, Зөләйхә йәшәгән өйгә китеп барғанда, уға ҡапыл балалары иҫенә төшөп, төп, оло йортҡа боролдо. Сөнки әле балалар бөтәһе лә төп йортта, ашталыр. Ҡатындары ла шундалыр. Юлдан, Ҡорама кантондан ҡайтҡан ваҡытта ла ул ҡатындары, балалары менән аралаша алманы. Бөтәһенә лә баш ҡағып ҡына иҫәнлəште лә тиҙерәк, тиҙерәк күрһәтмәләр бирер өсөн идаралығына ашыҡҡайны. Ни тиһәң дә, балалар уны көтөп тора бит. Һинең эшең күп булыуында балаларҙың ни ғәйебе бар? Балалар балалар инде. Күстәнәс көтәләрҙер, тип һаҡсы ҡарауылсыға ҡысҡырҙы. Сыбаркүл ҡәлғәһенең трактир лавкаһынан ул балаларға тәм-том, каруансылар ҡалдырған йөҙөм, кипкән өрөк, ер сәтләүегенән төйөп эшләнгән хәлүә алып ҡайтҡан ине. Шул нигмәттәр ҙур кырандаста ҡалған икән... Һаҡсы күн муҡсаны килтергәс, Ҡолой оло өйгә йүнәлде.

Унда, ҙур өйҙә, ысынлап та, Аҡбикә менән Зөләйхә балаларҙы ашатып, йоҡоға әҙерләйҙәр ине. Аҡбикәнән тыуған 10 йәшлек Сәйфәха һәм Зөләйхәнән тыуған, шулай уҡ 10 йәшлек Камилә һәм 7 йәшлек Сәфәр, ашауҙарынан туҡтап, атайҙарына йүгереп килеп һырылдылар.

Мөхәмәтҡолой, һәр береһен һөйөп, баштарынан һыйпап, муҡсайынан услап-услап уларға тәм-том өләште лә ҡалғанын ситкә ҡуйҙы. Ҡатындары менән ултырып аш ашағас, төпкө бүлмәләге әҙерләнгән түшәккә ятты. Арығайны, бик талсыҡҡайны ул. Әллә иртәгә хәл итә торған мәшәкәтле эштәрҙең бик күп булыуына борсолоп, тәрән йоҡоға китә алманы, тик һуңғараҡ арыған лыҡ үҙенекен итте, иҙрәп йоҡоға талды.

Эттәрҙең лаулап өрөүенә, өй тирәһендә тотолған малтыуарҙы шаулап көтөүгә ҡыуған көтөүселəр тауышына уянып китте ул.

Һәр береһе ике йөҙ башҡа еткән егерме дүрт өйөрө йыраҡта, Урал тауҙары араһында, ҡартаталарының боронғо ерҙәре Нәрәле, Һары Түр, Ҡылысбай, Шыйҙытҡан, Таҙанай тауҙары туғайлыҡтарында йөрөйҙәр. Унан башҡа бер нисә йөҙ һауын бейәләр яҡында, Мейәс һыуы туғайлыҡтарында көтөлә. Уларҙан ҡымыҙ эшлəп, үҙ халҡына алмаш-тилмәшкә тотоналар. Ә иң ҡуйы һөт биргән 30–40 бейә һаумал ҡымыҙ өсөн йорт тирәһендә һылайҙар. Нәрәле, Һары Түр, Ҡылысбай, Серәкәй тауҙары буйында ер өйҙәрҙә алмашҡа ятҡан көтөүселəр 4–5 көнгә, йә иттәре бөткән

һайын, бер тыу бейә, йә аҡһаҡ, йә һуҡыр ҡалған берәй баш алып һуйып торалар.

Дөйөм хужалыҡ эше менән Әбүтаһир үҙенең өс улы менән етәкселек итә. Көтөүселәр ул яҡ ауылдарҙа йәшәйҙәр. Ит үҙҙәрендә етерлек... Тик ондо ғына һораһалар, ылауға тейәп алып барып бирәләр.

Анау йылдары Һатҡы, Златоуст, Мейәс заводтары менән бер осор Ҡолой кантон бик уңышлы алыш-биреш итеп алған ине. Көндәрҙән бер көн Ҡолой кантондың Аҡ түбә өҫтөндәге Мейәс йортона Златоуст заводтары хужаһы Андрей Кнауф килде. Килеүенең үҙ сәбәбе булды. Завод кешеләренең аҙыҡ-түлек, бигерәк тә ит, он менән тәьмин ителеүе бик насарайған икән. Ырымбурҙан алып Исәткә, Себер яҡҡа һуҙылған ҡәлғә гарнизондары киңәйтелгән, оҙонайтылған. Тирә-йүндәге башҡорт ауылдарына ҡыуып килтерелеп йәшәгән крепостной урыҫ, мордва һәм башҡа милләт кешеләре аҙыҡ-түлек менән гарнизондарҙы ла, завод эшселәрен дә тәьмин итә алмай икән. Златоуст тау заводтары хужаһы Ҡолойҙан үтенеп ит, он һораны. Әлбиттә, Ҡолой алмашына уҡ, һөңгө баштары, ҡылыстар, йүгән ауыҙлыҡтары, өҙәңгеләр, эйәрдуғалар, арба ҡорамалдарына тимерҙәр, иң мөһиме арба кендеге, таралғылар, көпсәк тимерҙәре, тәгәрмәс ҡоршауҙары, һауыт-һаба, бығау һәм шыуҙырма йоҙаҡтар, мейес ҡапҡастары, торбалар, торондар һәм тырмаештәре, тағы ла әллә нисә төрлө әйберҙәр яһап биреү шартына заводҡа аҙыҡ-түлек менән ярҙам итеп торорға ризалашты. Урыҫтарҙан күп тапҡыр алданып, отолоп, ауыҙы бешкән Мөхәмәтҡолой был юлы завод түрәһенә был килешеүҙе ҡағыҙға теркәүҙе лә шарт итеп ҡуйҙы. Урыҫса һөйләшкән әллә немец, әллә швед, әллә поляк кешеһе тәүҙә шартҡа, ҡушҡуллап риза булһа ла, аҙаҡ һүлпәнәйеп:

– Кучукович! Зачем нам писать нужно? Ты мне мясо и муку, а я тебе железки и оружия, – тип бик еңел генә хәбәргә күсте.

Әммә Мөхәмәтҡолой үҙ һүҙендә нык торҙо:

– Вот ты на войну с Наполеоном не ходил, сидел у себя на заводе, а мы воевать ходили в в 1805–1807 годах, – тип төшөндөрҙө.

Был һүҙҙәрҙән һуң завод түрәһе бик йомшарҙы. Ҡолой уға тағы ла:

– Еще не известно с этим Наполеоном. Ведь царь нам сказал держать башкирские полки на готове. А сам нам оружия не дает, – тип тә өҫтәне.

– Ну ладно, Кучукович, быть тому, – тип ярҙамсыһына килешеү ҡағыҙы тултырырға ҡушты. Ҡолой ҙа, үҙ нәүбәтендә, ярҙамсылары Әбүтаһир һәм Сәйфелмөлөккә иң башта бер бот иттең сама менән хаҡын билдәләргә һуңғы баҙарҙарҙа бер ҡаҙаҡ

ит нисә тәңкәгә тура килгәнен белергә лә завод кешеһенә тәкдим индерергә бойорҙо.

– Түлкә, – тине ул урыҫсалап, – мәтри, малайҙар, отолорлоҡ булмаһын. Беҙгә уларҙы һурырға кәрәк. Уларҙың бер ҡаҙаҡ тимер хаҡын түбән төшөрөп, үҙебеҙҙең тәғәмде ҡыйбатайтыу лазым, – тип Әбүтаһирға күҙ ҡыҫып ҡуйҙы. – Ҡарағыҙ уны. Уларҙың һоранып бара торған ере юҡ. Тирә-яҡты гарнизондар ашап тора. Беҙҙең шартҡа күнмәй уның башҡа сараһы юҡ. Кусать бит всем ахута, – тип, Сәйфелмөлөккә күҙ ҡыҫты.

Завод хужаһының тәүҙә килешеү ҡағыҙына ҡул ҡуйыуға ҡаршылығының үҙ сәбәбе булған икән. Ул да булһа әлекке батшабикә Анна Ивановнаның халуйы, Э. И. Бирон яҙған, 1736 йылғы 11 февраль указы икән. Ул указда башҡортҡа ҡорал һатмау, тимерлектәр тотоу һәм башҡа ҡарарҙар үлем язаһы менән ҡаралған икән. Әле батша башҡортто һуғышҡа саҡырһа ла, уға һаман ҡорал бирмәй икән. Ә указ әлегә тиклем юҡҡа сығарылмаған. Ул указды юҡҡа сығарыу башҡортҡа бөтә хоҡуҡтарын кире ҡайтарыуға тиң.

– Алла һаҡлаһын, әлдә ул указ юҡҡа сығарылмаған, – тип эстән генә ҡыуанып ултырҙы тау округы начальнигы. – Юғиһә үҙеңде лә ҡыуырҙар, заводыңды ла емереп ағыҙып ебәрерҙәр Әй буйлап...

Шундай уйҙар, шундай хәтирәләр килде кантондың башына. Әллә тороп ҡатындарҙың берәйһенең янына барып килергәме, тигән дә уй килде башына. Балалар хәҙер ҡаты йоҡлайҙыр. Башҡаларҙа нисектер, ә Ҡолой үҙенең йортонда ҡатындары араһында шундай яҙылмаған ҡағиҙә ҡуйған. Үҙе төп йортта, түрҙә, ҙур бүлмәһендә йоҡлай. Элек киң таҡта урындыҡта, ҡалын кейеҙ-юрғандар өҫтөндә ятты. Хәҙер, бына бер нисә йыл, оҫта ҡуллы Шаһыбал бик киң һәм ныҡ итеп ҙур ятма, урыҫтар әйтмешләй, карауат эшләп бирҙе. Биҙа йәтеш. Кәрәк икән, йылыға – мейес янына ҡуяһың, кәрәк икән, тәҙрә төбөнә – яҡтыға. Унда ҡағыҙ-ҡоғоҙ, йә китаптар ҙа уҡып ятырға була.

Йылынан торғоһо килмәне уның. Ҡатындарының да янына барғыһы килмәне. Булмаған, әле килмәгән, әллә килә, әллә юҡ, Ғәфифәгә тоғролоҡ һаҡлау тойғоһо көсәйҙе лә китте. Ҡояш сыҡҡайны. Ята торғас, иртәнге намаҙға һуңланы. Тейешенсә тәһәрәт алып, ғөсөллөнгәс, иртәнге сәйҙән һуң идаралығына китте.

Ярҙамсылары Сәйфелмөлөк һәм Әбүтаһир әле килмәгәндәр. Шуға ла ул иркенләп бөгөнгө йыйынға килеүсе старшиналар, йөҙ башлыҡтары, иллелектәр, аҡһаҡалдар һәм муллалар алдында, нисегерәк нотоҡ тоторға, ниндәй мәсьәләләрҙе һәм нисек хәл итеүҙе, бурыстарҙы һәм йөкләмәләр тураһында уйланды. Ҡайһы береһен шул уҡ Сыбаркүлгә, Силәбегә каруан менән килеп, ҡытай

ебәгенә йәбештерелгән, һары ҡағыҙға теркәп тә барҙы. Иртәнге Зуха менән Өйлә намаҙы араһында саҡырылған кешеләр ҡайһы арбала, ҡайһы һыбай кантон идаралығының ҡаршыһына, ағаҫлыҡтар ситендәге ялансыҡҡа йыйылғандар ине. Ҡолойҙоң һиҙемләүе буйынса, 5-се кантондан йыйылған 16–17-се алайға күҙ-ҡолаҡ итеп ҡуйылған капитан Трунов һәм майор Овсянников килеп етергә тейештәр ине. Әммә улар әлегә юҡ. Булмауҙары ла хәйерле. Ҡамасаулап, тотҡарлап йөрөүҙән башҡа һис бер нәмә әшләй алмайҙар бит инде. Әлегә әйҙә ятһындар Троицкиҙа, тоноҡ шыйыҡса һемереп. Генерал-губернатор 7–8 көндән килһә, улар унан 1–2 көн алда килерҙәр, моғайын. Әле улар юҡ икән, тимәк, губернатор ҙа юҡ. Беҙҙең алайға килер булғас, улар үҙ вазифаларынан бушатылғандарҙыр инде. Шулайыраҡ һәм дөрөҫ фекер йөрөттө Ҡолой. Ҡолойҙоң үҙенең дә хәрби дәрәжәһе уларҙан кәм түгел. Ул әфисәрҙәрҙең әфисәр була алмаясаҡтарын да Ҡолой төҫмөрләй белә ул. Һуғышсылар бит ул әфисәрҙәрҙе түгел, ә Ҡолойҙо, улар әйтмешләй, Түрәне, Баштүрәне, Йәнтүрәне генә түрә итеп таныясаҡтар. Бөтә ике алай һуғышсылары ла Ҡолойҙоң бойороҡ-фарманын үтәйәсәктәр. Түрә әйтһә, атҡа менер, түрә әйтһә, ятып йоҡлар, әмер бирһә, юлға сығыр поход яланында. Ә үҙе алға төшөп, уң ҡулына еңел һөңгөһөн, йә ҡылысын тотоп, башҡортсалап әмер-оран ҡысҡырып, йә алға, алға! Йә һулдан ура, йә уңдан урап ал, йә дошмандың шул еренә төйнәлеп сапҡысла, йә ваҡытлыса сигенеү уйынын уйнарға, тигән әмерҙәрен биреп, дошманға йөҙгә-йөҙ килеп ташланған Түрәгә, Баштүрәгә, Йән Түрәһенә нисек әйәрмәйһең дә нисек дошманың менән сәнсешмәйең, сабышмайһың?! Батыр булһаң да, ҡурҡаҡ булһаң да, башҡаса сара юҡ. Әле яуҙа, һуғышта булмаған егеттәр һуғыштың әсе-сөсөһөн дә, тәрән яра алып, ҡанһырап үлгәндәрҙе лә, сәнселеп, сабылып, яра алып баҡыйлыҡҡа китә алмай ҡысҡырып ятыусыларҙы ла күргәндәре юҡ. Һуғыш-һуйыштан бер-ике тапҡыр тере сыҡһалар, һолданалар. Арҡаны, йә үҙеңде, йәнәштәге иптәшеңде нисек һаҡлауҙы аңлайһың.

Фәҙәттәгесә, халыҡты барлағандай, күҙ йөрөтөп сыҡты ла кантон, бөтәһенә лә йә арбаларға, йә ергә, йә дүңгәктәргә ултырып, урын алыуҙы һораны. Ун ике йөҙ башы, егерме дүрт иллелек башы, 5–7 старшина, муллалар, ярҙамсылар менән илле самаһы кеше йыйылған ине. Һөйләйәсәк телмәрен, кантон башы булараҡ, ул иҫкәрмә лә, күрһәтмә лә, бойороҡ та, һорау ҙа кеүек итеп уйланы. Әммә ул ваҡыты-ваҡыты менән бәхәскә лә әүерелеп китте. Һуғыш үҙе генә түгел, ә уның тураһындағы хәбәр ҙә кешеләрҙе үҙгәртә лә ҡуя. Кисә генә, ни әйтһәң дә, риза булырҙай халыҡ, бөгөн күбеһенең үҙ фекере, үҙ теләге тыуған. Кантон:

– Ағай-әне, ҡустылар, туғандар, уландар! Һеҙгә мәғлүм булыуынса, француз менән һуғыш башланған, – тип тоҡанырағ тойолған һүҙ башы алды. – Батшанан беҙгә әмер бар. Бөтә башҡорт халҡы ил һаҡларға яуға күтәрелә. Барлыҡ кантондар ҙа алайҙар төҙөйҙәр, полктар, урыҫса әйткәндә. Беҙ үҙ-үҙебеҙҙе хеҙмәтләндереүсе лә, үҙ-үҙебеҙҙе ҡоралландырыусы ла, ашатып-кейендереүсе лә. Дәүләт беҙгә ярҙам итерме, юҡмы, ул да билдәле түгел. Батша мөрәжәғәтнамәһендә ул турала әйтмәй, губернатор ҙа яҙмай, әммә һәр кантондан нисә полк һуғышҡа ебәреләсәген билдәләй. Һәр алайҙа 650 кеше, 500 һуғышсы, 100 кеше 150 артмаҡ менән, кейем-һалым, аҙыҡ-түлек. 50 кеше тәьминәттә. Аттарға һәм алайға аҙыҡ табыу, ҡуныу урынын һәм шартын билдәләү, табиплыҡ, яғыр усаҡ һәм башҡа бурыстар. Уларын минең ярҙамсыларым билдәләр. Һәр йөҙлөк башы үҙ йөҙлөгөнә бөтә кәрәк-яраҡ менән тәьмин булырға тейеш. Йыртылған кейемде, итекте ямар өсөн епкә тиклем... Ул ваҡ һорауҙы йәмғегеҙ ҙә беләһегеҙ. Беҙҙән ике алай. Хәрби губернатор уларҙы 16-сы һәм 17-се полк тип билдәләй. Уларҙың нигеҙе, икешәр, өсәр йөҙлөктәре күптән ҡоролған, ҡорал менән дә тәьмин ителгән. Ә ҡалғандарын ҡалғандары менән тултырыу, уныһы беҙҙең бурыс. Һуғышҡа кем китә, кем ҡала, быныһын, старшиналар, йөҙ баштары, үҙегеҙ билдәләйһегеҙ. Һәр ауылда ике көн эсендә старшиналар, йөҙлөктәр, иллелектәр йыйылыштары үткәрергә кәрәк. Ғәриптәр, ауырыуҙар, әлекке һуғыштарҙан ҡаты яра менән ҡайтыусылар һәм 50 йәштән ололар ҙа ҡала. Әгәр үҙҙәре теләһә лә, йә әфисәр дәрәжәһе булып, һау булһа, 55-кә тиклем дә алып була. 15-кә етмәгән, 3 балалы, йылҡыһы 5-тән, һыйыры 2-нән, һарығы 20-нән әҙ, ҡатыны ауырыу, йә ғәриф булһа ла, һуғышҡа алмаҫҡа, әгәр ҙә ул 4 дисәтинә ер ҙә сәсә алмаһа. Етлегеүенә ҡарап, яуға 20–21 йәштән алырға. Әйәргә көсө етмәгәндәрҙе лә алмаҫҡа, нығынһындар. Улар өсөн дә алда Рәсәйҙә ваҡиғалар күп булыр әле. Казакта, линия хеҙмәтендәгеләргә, улар араһындағы яуға ҡатнашыусыларға дәрәжә өҫтәргә кәрәк буласаҡ. Әгәр ғаиләләренә ҡышҡа етерлек бесәндәре, ашарға ондары булмаһа, старшиналарға был һорауға бик етди ҡарарға. Был турала ошаҡ булмаһын... Унан һуң һаңғырау, ҡолаҡҡа бик ҡаты, күҙгә тоноҡ күреүселәр ҙә ғәскәрҙә булмаҫҡа тейештәр. Был һорауҙы һәр йыйылышта ҡул күтәртеп хәл итер кәрәк. Үҙҙәре теләүселәр булһа, ҡағыҙҙа иң алда, шуларҙың теҙмәһе булырға тейеш.

Ҡуҙғалып китеп ҡайҙа тиклем барабыҙҙыр, полктар эсендә ниндәй үҙгәрештәр индерерҙәр – уныһы мәғлүм түгел. Әммә ҡушыуҙар, бүлгесләүҙәр буласаҡ. Яуҙа шулай ул... Тулыланыу ҙа, бүлгесләнеү ҙә була, быларын яу шарты үҙе әйтә. Дарыу үләндәренә ныҡ иғтибар итеү кәрәк. Һәр бер һуғышсыла яра япраҡ,

билсән-әрекмән төйҙөгө тоҡсайҙа етерлек булһын. Эс тотҡанда һары дүңгәләк, әрем онтағы, ирәле булһа, алтын тамыр, ҡарағас әнәһе лә алыу файҙалы. Улар тәнгә көс бирә, быларҙы һеҙ беләһегеҙ. Унан һуң бик фәкирҙәрҙе лә алмайбыҙ. Әгәр берәҙәк булып ҙүе һау, әммә ғаиләһе юҡ икән, ундайҙарға ат, өҫ-башына кейем, аҙыҡ-түлекте кантон идаралығы бирер. Кемдең хәле маҡтанырлыҡ түгел, шуларға идаралыҡ ярҙам итер. Аттарығыҙ көр булырға тейеш, бик көр. Шунан, артмаҡ аттар тураһында әйткән инем. Беҙ ҙә арбалар егәйек. Һәр арбаға ике ат. Өсөнсөһө етәктә булыр. Арбаға бөтә әйберҙәрҙе һалырбыҙ, аҙыҡ-түлек. Иң мөһиме, арҡандар, балталар. Ҙур һыуҙарҙы йә һал, йә бормалар менән сығырға тура киләсәк. Ә уларҙы бәйләү, нығытыу өсөн бик күп арҡан кәрәк була. Арбаларға арҡандар ҙа тейәйбеҙ. Унан һуң, яу походы яу походы инде, төрлө ваҡиға булыуы ихтимал. Ауырып та китеүселәр булыр, уйламағанда имгәнеүселәр ҙә. Кешене бит ташлап китеп булмай, һалып алырға тура киләсәк. Йылыла, арба өҫтөндә йоҡлап та була. Яуын ваҡытында, ҡаплаһаң, аҫтына ла керерһең. Яуында кантон ни ҙә генерал ни, һалдат ни, башыңа төшһә, ер тишегенә лә керерһең...

Шул арала кантон начальнигына Златоустҡа ебәргән кешеһе Ҡәҙер, арттан ҡилеп, оҙаҡ ҡына ваҡыт ниҙер һөйләне. Бөтә халыҡтың күҙе Ҡәҙер менән кантон башлығында ине. Ҡәҙер ҡулындағы ҡылысын да кантонға тотторҙо. Ҡәҙер-Ҡәҙерғәлинең һүҙҙәрен Ҡолой кантон бер етдиләнеп, бер кемделер мыҫҡыллаған кеүек йөҙөн сырыштырып тыңланы ла, тағы ла турая биреп, халҡына былай тине:

– Минең фаразлауым дөрөҫ булған. Генерал-губернатор Сыбаркүл ҡәлғәһенә лә кермәй, тура Златоустҡа боролған. Бөгөнгө көндә ул Алтынтамаҡ-Златоуста, Ҡыя Түрҙә. Унда начальство ла, алмашынып ята, ти. Мин уларҙан 500 ҡылыс һуғырға һораған инем. Һәр ҡылысҡа бер ҡуй вәғәҙә ҡылған инем. Волконский генералға Троицк-Алтынтамаҡ гарнизоны майоры Әлексәндер Овсянников та тағылып алған, ти. Генерал-губернатор зауыттың яңы етәкселегенә 500 ҡылысты беҙгә түгел, ә Троицк-Силәбе, Степной казактарына бирергә бойорған. Ә ул, Златоуст йыуаны, беҙҙән 250 ҡуй итен инәлеп-ялбарып алдан алған ине.

Ҡолой былай ҙа бик киҫкен кеше ине. Теләген тормошҡа ашырыр өсөн уға хәҙер бер ҡаршылыҡ та ҡаршылыҡ түгел.

– Бөгөн кис үк яҡшы ҡораллы бер йөҙлөк әҙер булһын. Икешәр ат егелгән төбө көплө алты-ете соңҡа арбаны хәҙер үк Златоустҡа сығарып ебәрегеҙ, – тип Сәйфелмөлөк менән Әбүтаһирға бойорҙо ла һүҙен дауам итте:

– Генерал-губернатор, беҙгә тип яһалған ҡылыстар, һөңгө, уҡ баштары менән үҙенә яҡындарҙы ҡоралландырып, беҙҙе француз-ға ҡоро йоҙроҡ менән ебәрергә уйлаймы? Хәҙер һуғыш осоро! Тормошта һуғыш ҡануны хаким. Әгәр ул шулай ҡыланһа, беҙгә килгәнендә беҙ уны үҙен Овсянниковы менән ҡулға алып, ер зинданға бикләп тә ҡуйырбыҙ. Рәсәйҙә янаралдар бөткәнме? Ҡарт етмеш йәшлек янарал кемгә кәрәк? Бер һелтәүҙән ары китә алмаҫ, асыуым килмәһә, – тип бик эҙәргеләнде кантон начальнигы.

Әллә бында генерал-губернаторҙың ғәйебе юҡ микән? Был эш эйәреп йөрөгән Овсянников майорҙың һорауы буйынса бирелгән әмер түгел микән? Килһендәр әле, килһендәр. Асыҡлармын. Әгәр шул Овсянников һорауы буйынса эшләнһә, мин уны һуғышҡа киткәндә юлда уҡ кәбәген туҙҙырырмын. Мин бит Златоуст заводына ҡорал өсөн түләгәнмен. Ул эшләнгән ҡоралдар, тимәк, беҙҙеке!

Златоуст беҙҙән 100 саҡрым самаһы. Генерал-губернатор заводта 2–3 көн генә торор. Уның артынан гражданлыҡ, йәки хужалыҡ эштәре губернаторы Матвей Наврозов та килеп еткән, ти. Була әле улар унда, була. Унан һуң Һатҡыға, ә, бәлки, Ҡатауға етерҙәр. Ҡатауға китһәләр, Әҫем, Өфө аша ҡайтып та китерҙәр. Миңә хәҙер Сыбаркүл коменданты менән яҡшы мөнәсәбәтте өҙмәҫкә кәрәк. Ни тиһәң дә, хәбәр Ырымбурҙан шуның аша килә бит... Әгәр Златоустан бире сыҡһа, ул барыбер Мейәстә туҡтай. Бер йоҡлаһа, 2 көн үтә, юлы менән 3 көн. Унан килә Сыбаркүлгә. Унда эштәр хөрт. Указ – Сыбаркүл казактарынан полк төҙөргә. Ә унда бөгөн ярты-йорто бер рота тора.

Әгәр бөгөн кис бер йөҙлөк менән Арғужа күленең аҫтынан Биҙәртау-Илмәнтауҙың моронон үтеп, Түрге яҡ күле янынан туп-тура Алтынтамаҡ заводына Өйләнән алда барып етәбеҙ ҙә тура завод хужаһының алҡымынан алабыҙ. Бөтә ҡылыстарҙы тейәйбеҙ, уҡ, һөңгө баштарын, бөтәһен дә. Һәм, һис шикһеҙ, үҙем барам. Үҙем алҡымынан алам ул йыуан урыҫтың, тип ҡайнаны ла ҡайнаны.

Әммә үҙен ҡулға алып, бөгөнгө, хәҙерге бурыстарға кире ҡайтты.

– Тағы ла бер мөһим эш, – тип халыҡҡа ҡарап ҡулын күтәрҙе. — Аттар беҙҙең етерлек. Ҡонан, дүнәндәр, тип әйтеүем. Бейә менмәгеҙ. Олатайҙар бер ваҡытта ла бейә менмәгән. Борон, бейә менеп яуға барған, тип кешене кәмһетергә, йә дөйөм көлөү ойоштороу өсөн әйткәндәр. Яуға бармаһа ла, ил өҫтөндә, ил эсендә йәш, буйға ҡалмаған йүгерек бейә менеп ил-йортто ҡурсалаған сая ҡыҙ-ҡатындарыбыҙ бихисап. Улар был иҫәпкә кермәй. Киреһенсә, уларға һоҡланырға һәм ундайҙарҙы хөрмәт итергә

кәрәк. Бейә йомшаҡ та йөрөй, әлбиттә, ауыҙы ла борғанда ҡаты булмай.

– Дөрөҫ, дөрөҫ, – тип ҡеүәтләне уны йөҙ баштары.

Унан һуң кантон, старшиналарға, һәр алайға 5-әр яһауыл, 5 йөҙлөк, 5 хорунжий, 10 иллелектең һәм урыҫтар квартирмейстр тип йөрөткән хужалыҡ эштәре идаралығы, уның кешеләре, ике яҙыусы, мулланың исем-шәрифтәрен теҙмә итеп яҙып биреүҙәрен 2 көндән һуңға ҡалмайынса кантон идаралығына бирергә ҡушты. Тора биргәс, ул, иҫенә төшкәндәй:

– Бейә ҡолон килтерергә, ҡымыҙ эшләргә һөт бирергә тейеш. Унан, бейә түҙемһеҙ, тиҙ талсыға. Ашауға әрһеҙ булмай. Һөрөнмәһә лә, өркөүсән була. Быларын беләһегеҙ. Иң төп мәсьәләнең берене – аттың, менге атының, һуғыш атының башы йомшаҡ булырға тейеш. Ҡаты башлы ат борола һалмай. Боролманың икән, өлгөрмәйһең, йә күкрәгең тишек, йә кәүҙәңдә башың юҡ...

Шуға күрә лә ат башы, уның ҡатылығы, йомшаҡлығы һинең ғүмереңә бәйләнгән. Аттың башы ҡаты йәки йомшаҡ булыуында, йүгәнгә ниндәй ауыҙлыҡ тегелеүенә лә бәйле. Әгәр ул тимер икән, ул бик нәҙек булмаҫҡа ла тейеш. Нәҙек булһа, ауыҙҙың уртын йырта. Аҫас ауыҙлыҡ бик һәйбәт була. Ҡыш ат ауыҙын өшөтмәй, әммә ул уртаһынан өҙөлөүсән була. Шуға күрә уны һаҡлығы менән өсәү, дүртәү эшләп, һалып алыу кәрәк.

Бынан башҡа йөҙәрләгән йөкләмәләр биреп, өйрәтеп, һөйләп, талап итеп, һүҙен тамамланы кантон начальнигы. Уға йөҙлөктәр, иллелектәр теге йәки был кешенең ғәскәргә алыныуы, йә ҡалыуы тураһында байтаҡ һорауҙар бирһәләр ҙә, кантон ул һорауҙарҙы үҙҙәренә ҡалдырҙы.

– Аҡһаҡалдар, старшиналар, йөҙлөктәр хәл итһен, әммә һәр алайҙа 4–5 көн эсендә кәм тигәндә 600 йәки 650 кеше сафта торорға тейеш, – тип ҡәтғи бойорҙо.

Халыҡ таралғас, ул өйгә ҡайтып тиҙ-тиҙ ашаны ла, хужалыҡ эштәре буйынса йөкләмәләр биреп, Ҡолһары ауылында йорттарҙа торған 16-сы полкка китте.

Ҡолһарыға ул дүрт ат егелгән ҙур повозкаһында түгел, ә ҡушлап егелгән, суртан кеүек шыма, буй-һындары беп-береш ике ҡара ат егелгән еңел тарантасында барҙы. Полк, төшкө ашты ашап бөтөп, ҡоралдарын, әйбер-ҡараларын йыйып йөрөй ине. Ҡолһарыға килгәндә, юлда уның башына төрлө уйҙар килде... Юлда губернаторға осрауыбыҙ мөмкин. Осраһа, ул Алтынтамаҡ менән Түрге яҡ күле араһында осрар. Түрге яҡ күленән һуң уның юлы келтә уңға борола. Ул тирәгә беҙ ҡараңғылатып ҡына барып етергә тейешбеҙ. Ә генерал-губернатор төндә йөрөмәҫ. Урал тауҙары араһында ул казак ғәскәри иллелек, йөҙлөктәрен дә йөрөтмәҫ. Уға ул бик үк ышаныслы түгел. Губернаторҙы оҙатып ғәскәри

регулярҙарҙың ике унлығы, йәки иллелеге йөрөйҙөр. Улар менән осрашыу оҙаҡ һорауҙар, аңлашыуҙар менән бөтәсәк. Иң яҡшыһы – осрашмау. Шуға күрә лә Мөхәмәтҡолой кантон ҡояшҡа ҡарап алды ла үтә үк ашыҡмаҫҡа булды. Арттан һыбай эйәреп йөрөгән йомошсоға старшинаны, йөҙлөктө, ике иллелекте, ун унлыҡты йыйырға ҡушты ла, үҙе тарантастан төшөп, артҡа бәйләнгән эйәрле йүгерек ерән атын ҡараны, уны муйынынан һөйҙө лә ҙур, оҙон, һәр 70–80 ат ҡаршы бәйләнгән япма аҫтында эйәрле торған һуғыш аттарын ҡарарға китте.

Был һарай бынан 10–12 йыл элек, бөтә башҡортҡа казаклыҡ, ғәскәрилек иғлан ителгәс үк, бағаналары йыуан ҡарағастан ултыртылып, арҡылылары оҙон шыйҙан, йә ҡарағай, йә әрселгән ҡайындан һалынған ине. Өҫтө ябыулы. Йә һуғылған арпаның, йә тарының, йә арыштың һаламын, ҡыҙыл йәки һары балсыҡ менән бутап, шуның иҙмәһе менән йыш итеп бер-береһенә буй һалып эшләнгән ҡыйыҡҡа һылағандар. Уның өҫтөнән ҡайҙа кәҫ, ҡайҙа һалам өйөлгән. Ҡыҫҡаһы, яҙлы-көҙлө һыуҙан наҡлаулы. Был ҙур ябыуҙың дүрт яғы ла төп алып мүккә һалынған бүрәнәләр. Яҙ булһа, аттарға еләҫ булһын һәм һәр кем үҙ атын тиҙ генә сығара алһын тип, япманың ян-яҡтарын һүтәләр ҙә өйөп ҡуялар. Аттар ике яҡтан да уҫтыҡтарҙан ашайҙар. Ә уҫтыҡтар араһынан һәр ат янына барып, йүгәнен ипләргә, сисергә лә, кейҙерергә лә була.

Япма аҫты еләҫ, һалҡынса ине, эҫе ҡояш ҡыҙҙырмай. Башҡорт ауылдарында, бигерәк тә уның көнсығыш, төньяҡ-көнсығышында һәм көньяҡ-көнсығышында сик буйҙарында, әле казаклыҡ, ғәскәрилек фарманы булмаған осорҙа ла, һәр йәйләүҙә, һәр ултыраҡ ҡышлауҙа тигәндәй, эйәрле 10–15 ат торҙо. Быны тормош үҙе талап итте. Сөнки һәр саҡ, әле төньяҡтан һәм көньяҡтан урыҫтар көнсығыш Башҡортостанға килгәнгә тиклем үк, ул олоҫҡа ҡаҙаҡтар, аҙаҡ ҡалмаҡтар баҫҡын булып кереп торҙо. Ереңде, халҡыңды һаҡламаһаң, илһеҙ ҡалаһың, тимәк, ҡол булаһың. Ярым ғәскәри тормош көнсығыш башҡорттары өсөн ғәҙәти хәл. Урыҫ, ҡалмаҡ баҫҡынсылыҡтарына ҡаршы көрәшә-көрәшә ике быуаттан артыҡ ваҡыт үтте, быйылғы йылға тиклем. Әле урыҫ йыллығы менән 1812 йыл килә. Һижри менән нисәнсе йыл әле... 1227, буғай, тип күңеленән генә иҫәпләп ҡуйҙы кантон. Урыҫ идаралығы яйлап башҡорт араһына ла таралғас, бына был ғәскәри ҡатлам итеп ҡаралыу халыҡҡа ла әллә ни күңел ҡыйынлығы килтермәне кеүек. Сөнки ғәскәри тормош көнкүреш кеүегерәк тә ине. Шуға ла үткән ун йыллыҡ эсендә халыҡ уға өйрәнде лә китте, тип уйлап, кантон начальнигы ярҙамсыһы Әбүтаһирға кире идаралыҡҡа ҡайтырға, Сәйфелмөлөктө һәм кәрәкле башҡа кешеләрҙе алып иртәгә үк йәйләүҙәрҙә, ауылдарҙа йыйылыштар үткәреүҙә ҡатнашырға бойорҙо.

Кешеләрҙе ғәскәргә алғанда әшләп йөрөгәндәренең һәр береһенә шунда уҡ алмашсы билдәләргә ҡушты. Әгәр тирмәнсе үҙе һорап яуға сыға икән, урынына тирмәндәрҙе туҡтатмай эшләтә торған кеше булырға тейеш. Һәм һәр ерҙә лә. Был ҡәтғи ҡушыу. Әгәр Әбүтаһир был бойороҡто үтәмәй икән, башы Себер яҡҡа ҡарап атлар. Мәтри уны, тип, Әбүтаһирҙың артынан оҙаҡ ҡарап ҡалды. Унан һуң ул әле 16-сы полк һаны бирелгән йөҙлөк етәкселеге йыйылған урынға килде. Килгәс, кире уйлап, ниңә һуң әле мин ҡуйыласаҡ бурысты унлыҡ, иллелектәргә генә аңлатайым? Уны бурысҡа бара торғандарҙың барыһына ла аңлатырға кәрәк, тигән һығымтаға килеп, бөтә полкка теҙелергә бойорҙо.

– Ҡорал менәнме, ҡоралһыҙмы? – тип һоранылар.

– Ҡорал менән. Кемдең хәнйәре, пистолеты бар, уларҙы ла алырға, – тине кантон.

Оҙаҡ та үтмәй йәйәүле алай-полк теҙелде. Кантон начальнигы алға сығып, барыһына ла ҡыҫҡа ғына мөрәжәғәт итте:

– Яуға эҙерлекте тәьмин итер өсөн беҙ бөгөн һәм иртәгә бер ҙур бурыс үтәргә тейешбеҙ. Шул бурысты үтәр өсөн ике йөҙлөк ҡораллы һуғышсы кәрәк. Алла бойорһа, иртәгә кис кире ҡайтабыҙ. Теләүселәр хәҙер аттарын эйәрләһендәр ҙә йөҙлөк башы Әлимсура һәм Азамат артынан ҡуҙғалһындар. Тәүге туҡталыш Һаҡтау алдында, – тине лә ерән йүгереге арттан бәйләнгән тарантасына ултырып, юлға төшөп, Арғужа күле яғына юртты.

Тамам көҙгә ауышҡан, әммә әҫе бер көнө ҡыуа-ҡыуа бара торғас, ҡап-ҡара аттарҙың осаларына ап-аҡ күбек сыҡты. Ҙур, бик ҙур күл ярының ҡайһы береһе эскә, ҡайһы береһе тышҡа, ер тәненә кереп киткән юлы менән бара торғас, Биҙәртау-Илмәнтауҙың бер биләне аша үтеп, тағы ла Мейәс йылғаһының үҙәненә төшөп, Һаҡтау ҡаршыһына туҡтанылар.

Ике икейөҙлөктө шунда көтөп алды Мөхәмәтҡолой. Егеттәр килеп етеп, аттарын ҡайындарға бәйләгәс, кантон башы уларға әйтер һүҙен әйтте:

– Беҙ ғәҙеллек даулап Златоустҡа барабыҙ. Ике айҙан артыҡ ваҡыт үтте. Мин Златоуст зауыты етәкселеге менән 500 ҡылысҡа, 50 мең уҡ башына, 200 мең сәнскә һөңгө башын эшләп бирергә килешкән инем. Һуғыш сығыуын да һиҙенә инек. Хәҙер бөтә халыҡ күтәрелә. Батшанан мөрәжәғәт барлығын беләһегеҙ. Бер нисә аҙнанан, ә, бәлки, алдағы йомала юлға ҡуҙғалабыҙ. Ә ҡорал етешмәй. Губерна ла, батша ла беҙгә ҡорал биреүҙе өнәмәй. Үҙегеҙ ҡоралланығыҙ, үҙегеҙҙә былай ҙа ҡорал бар, яйлап йыйғанһығыҙ беҙһеҙ ҙә, үҙегеҙ эшләгәнһегеҙ, тинеләр.

Мин иртә яҙҙа уҡ, Ырымбурға барғанда, ҡорал тураһында мәсьәләне ҡабырғаһы менән ҡуйҙым. Эшләнгән ҡоралды беҙ шул көндәрҙә алып, таратырға тейеш инек. Хаҡы ла түләнгән. Беҙгә

тигән ҡоралды казак тип аталған крепостнойҙарҙан ойоштороласаҡ Троицкий, Сыбаркүл, Силәбе, Степной кешеләренә бирмәкселәр икән. Ә беҙ буш ҡул менән яуға китергә тейешбеҙме? Ҡылыстарыбыҙ бер төрлө түгел, кемдең оҙон, кемдеңдер ҡыҫҡараҡ. Ятаған тотҡандарығыҙ ҙа байтаҡ күренә. Беҙгә хәҙер ҡаяу һөңгө түгел, осло һөңгө кәрәк. Ул ослораҡ, еңел. Дошмандың ҡайһы еренә сәнсһәң дә, мырт итеп керә. Шыумай, тәрән яра һала. Уҡ баштары ла нәҙегерәк, оҙонораҡ, ослораҡ, тимәк, йыраҡҡараҡ һәм төҙөрәк тейә. Бына шул ҡоралдарҙы беҙ заводҡа барып, иң алда яҡшылап һөйләшеп, һорайбыҙ. Завод хужалары алмашынып ята, тип хәбәр еткергән ине күҙ-ҡолаҡ.

Генерал-губернатор ҙа, халыҡ эштәре буйынса губернатор Наврозов та тап шул эш менән йөрөйҙәрҙер. Берәүһе тапшыра, берәүһе эш ала, күрәһең. Кемдең кем икәнен аҙаҡ, Алла бойорһа, солохло көндәрҙә күрербеҙ... Әлегә беҙгә ҡорал кәрәк. Завод тирәләрен күреү миңә бик лазым. Күрмәй, һөйләшмәй дау ҡуптарыу килешмәҫ. Әммә заводты беҙ баҫмаһаҡ та, емермәһәк тә, ул халыҡ күргә тейеш. Заводта бөгөн беҙ хужа! Шуның өсөн һәр кем ҡоралын йәшермәй ҡулында тоторға тейеш. Күрһендәр, белһендәр, беҙ баҫҡын түгел, беҙ ил һаҡларға барабыҙ! Был төп тәғлимәт. Берегеҙ ҙә завод эшселәренә ҡылыс, ҡорал күтәрмәгеҙ. Беҙҙән һуң мәйет булырға тейеш түгел ябай кешеләр араһында. Әммә ҡулдың ҡатылығын улар тойорға тейеш. Әле алмаш-тилмәш булып ятҡан хужалар янына үҙем керәм.

Донъя хәлен белеп булмай, минең менән бергә 5–7 егет бергә керә. Кем теләй, шулар. Һәр береһендә наган булһын һәм дә ҡылыс. Минең бер ымлауымды, күҙ ҡарашын, баш ҡағыуҙы улар белергә тейеш. Өйрәтермен. Минең һәр бер бороҡ, әмеремде үтәргә тейеш һуғышсылар булһын... Хуш!

Иң мөһиме! Хәҙер беҙ йылға буйлап барып, Түрге яҡ күленә етәбеҙ ҙә, юлдан боролоп, ял итәбеҙ. Тамаҡ туйҙырайыҡ. Аттар ҙа ашаһын. Ҡараңғы төшкәнсе юлды ҡарауыллайбыҙ. Генерал-губернатор Мейәс заводына үтергә тейеш. Уны үткәрәбеҙ ҙә үҙебеҙ Златоустҡа йомолабыҙ. Таң атыуға беҙ унда булырға тейешбеҙ... Хәҙер төп бурыс – Түрге яҡ – Тургояк күленә етеп, ялға урынлашыу, генерал-губернаторҙың үтеүен күҙәтеү.

Түрге яҡ күленең ситенән йыраҡ түгел, юл үткән ҡайынлыҡ аръяғында, яланда туҡтанылар. Һәр мәл һайын алмашлап күҙәтеүселәрҙе билдәләнеләр ҙә, кемдер әйәрен алып атын тышаны, кемдер оҙон сылбыр менән бәйләп, ялға урынлаштылар. Ҡарауылсылар ике тапҡыр алмашынды. Әммә губернатор үтмәне.

Ҡояш төп Урал армытына килеп төшөп, уның аса-ҡаялы үркәсе араһына ҡыҫылғайны... Шул саҡ ҡулдарын юл ыңғайына

һелтәй-һелтәй ике күҙәтеүсе лә йүгереп килгәнен күрҙеләр. Мөхәмәтҡолой ятҡан еренән, утҡа бешкәндәй, һикереп торҙо.

– Аттарға, аттарға, – тине, шым ғына, үҙе күҙәтеүселәргә ҡаршы китте.

– Түрә, түрә! Әле генә үтте, әле генә үттеләр, – тип болашмаҡ, аһыҡтай-аһыҡтай һөйләнеләр ике күҙәтеүсе.

– Кемдәр, нисә һыбайлы, нисә арбала?– тип һораны кантон.

– Икешәр ат егелгән өс арба. Арттарынан унлаған һыбайлы. Өс һыбайлы иң алдан бара. Араһы утыҙ ҡуһай булыр. Шәп үк бармайҙар. Аттары уртаса ғына тиҙлектә юрта.

– Ҡайһы яҡҡа үттеләр һуң? Ҡояш батҡан яҡҡамы, әллә ҡояш сыҡҡан яҡҡамы?– тип төпсөнөп һораны кантон.

– Был яҡҡа, ҡояш сыҡҡан яҡҡа, – тигәс, түрә:

– Аттарға киттек, – тип тоноҡ ҡына ауаз бирҙе лә үҙе янына килтерелгән ерәненә менеп алды.

Урал тауҙың төп һырты Тағанай армыты менән осрашмаҫ өсөн, бөгәжәләнеп, уның көнбайышҡа боролған билән енең өҫтөнә тиклем үк ул ерәне өҫтөндә барҙы.

– Нисек ҡармаҡларға был кешене? – тип уйланды. – Беҙ барып еткәнсе таң атасаҡ. Бәхеткә күрә, айлы төн тора. Уның да тулған сағы.

– Һеҙ ҡайҙа китеп бараһығыҙ? Изге бурыс менәнме, әллә илбаҫарлыҡ юлы менәнме?– тип һорай ине бите табаҡтай булып тулған Айбисә Ҡолойҙан.

– Беҙ ил һаҡлау бурысын үтәргә китеп барабыҙ! Шул маҡсатыбыҙҙы үтәһәк, илдең күп дошманының йәне өҙөләсәк, күп ираҙаматтарыбыҙҙың ғүмере һаҡланып ҡаласаҡ, – тип яуаплағандай, төп түрә кантон да табаҡтай битен күтәреп, айға бағып бара ине.

Бына улар төп Урал армытының билдәшен менеп етеп, уның көнбайышҡа боролған бормаһы Ҡыя Түрҙең ҡибла яғына сыҡтылар. Кантон түрә ерәненән төшөп, тарантасҡа ултырып алды. Ә ай, ҡояш кеүек, тауҙар артына төшөп китергә ашыҡманы. Бисурашайтан фиғелле ҡаяларҙы, елдә йыртылып бөтөп елберләгән күләгәләрен, бөткөһөҙ шәүләләрен юлға һалған ҡарағайҙарҙы һары йөҙлө, шаҙраҡ битле Айбисә, күҙҙәрен тултырып, был төн илбаҫарҙарын да һынаулы ҡарашы менән ентекле тикшереп, һауала йөҙҙө. Бер боролмала яҡын килеп, өҫтөңдән генә ҡарап, икенсе боролмала, ана-а-а-ау тау шәүләһе һыҙығы өҫтөндә торҙо...

Бара торғас, йыраҡта, алда күренеп-күренеп ҡалған бик ҙур, бик бейек армыт, Өрәңгенең көнсығыш бите ҡараңғылыҡ күгелйеменең ҡайһы ерен төртөп күренә башланы.

– Таң, таң ата, – тип уйланылар барыһы ла. – Тиҙҙән Ҡыя Түр заводына етәбеҙ...

Иңкешкә төшә башланылар. Йыраҡта эттәр өргәне, һарһытып олоғандары ла ишетелгәндәй була. Тик ул олоу ҡушар ат егелгән һигеҙ арба тәгәрмәстәренең арҡалары өҫтә күренеп ятҡан шыма таштарға менеп дөңгөрләүҙәре аҫтында йә ишетелмәй, йә һирәк-һаяҡ һыңҡылдап һыҡтаған ауаз булып ҡолаҡҡа йәбешә.

Түбән төшә биреп тауыштар ишетелгәндәй булып завод эсендә ут шәүләһе күренгәс, кантон бөтәһен дә тағы туҡтатты:

– Хәҙер һуғыш осоро. Златоуст аша Өфөгә ғәскәр үтә. Беҙҙән алда киткән 4-се һәм 5-се полктар, шәғбән менән рамаҙан араһында бынан үткән башҡалар ҙа. Шуның өсөн ғәскәргә шау-шыулы иғтибар булмаясаҡ. Фәҙәттәге үткән ғәскәр тип ҡараясаҡтар. Бер йөҙлөк арбалар менән завод ҡапҡаһы алдында торорға тейеш. Бер йөҙлөк рекруттар йоҡлаған ерҙән йыраҡ түгел торорға тейеш. Әгәр һалдаттарҙы уятып, улар беҙгә ҡорал күтәрһәләр, башҡа сара ҡалмай, ҡапҡалары төбөндә үк сапҡысларға. Ул ваҡытта хәл ҡатмарлаша. Алыш еренән китеү ул осраҡта көнбайышҡа була. Осрашыу урыны Өрәңге алдында, Әй кисеүен үтеп, Уралтау итәгендә. Шул яҡ менән ҡайтырбыҙ. Беҙҙе көнбайыш яҡҡа китеп баралар тип белһендәр. Әммә эште ҡорал ҡулланыуға алып барып еткермәҫ кәрәк. Ҡорал күтәреү әгәр үҙҙәре башлаһалар ғына...

Рекруттар, тип әйткәнем, улар хәрби хеҙмәткә ун-ун биш йылға алынған, дәүләт алдында енәйәт ҡылған кешеләр. Уларҙы заводчиктар ғәскәргә һалдат итеп бирә. Әммә улар араһында бөтәһе лә енәйәтсе түгел. Күбеһе заводтағы ауыр хеҙмәткә түҙә алмай өйҙәренә ҡасҡан крепостной крәҫтиәндәр. Араларында башҡорт, мишәр ҙә бар. Әммә күп түгел. Байтағы моҡшалар, әрзәләр, арҙар, суҡынмыш татарҙар...

Зауыт ҡапҡаһы янында арбалар ҙа торорға тейеш. Ҡоралдар завод ихатаһы эсендәлер. Арбаларҙы эскә керетеп тейәргә кәрәк булыр. Шау-шыулы тейәү булһа, бер иллелек арбаларға ҡорал тейәй, ә икенсе иллелек һаҡ хеҙмәтендә, заводҡа берәүҙе лә индермәй ҙә, сығармай ҙа. Ә мин – заводчик менән мәсьәләне тыныс юл менән хәл итергә тырышырмын.

Әлимсура, Азамат! Биш таңҡаҫтай егет хәҙерҙән үк миңә еп булып тағылһындар. Уларға күрһәтмәне айырым аңлатырмын. – Шулай һөйләштеләр ҙә, түбәнгәрәк төшөп, Әй һыуының быуаһы буйлап заводҡа киттеләр.

Ҡыя Түр заводы Алтынтамаҡ тигән ерҙә, Урал армыттарының Ҡыя Түр тигән бейеклеге менән Өрәңге тауы морононда, Әйгә Таҫма йылғаһы ҡойған ерҙә урынлашҡан ине.

Ҡолой завод идаралығын да, идаралыҡ хужаһының ҡайҙа йәшәгәнен дә яҡшы хәтерләй. Бик иртә булғанғалыр, урамдарҙа һис бер кеше күренмәй. Йөҙлөктәр, таралышып, үҙ урындарын биләнеләр. Завод ҡапҡаһына ҡаршы ике ҡатлы таш йорттоң

рәштәкәле ҡапҡаһы таш сынйыр менән уратылып биклəнгəн ине. Ҡолой биш егете менән, аттарын бəйлəп, бəлəкəй ҡапҡаға етеүе булды, башына бейек картуз, оҙон ҡуыслы итек кейгəн, ҡулына мылтыҡ тотҡан һалдат улар ҡаршыһына килеп тə етте. Ҡолой бик етди төҫ алып:

– Отправляемся на войну с Наполеоном. Командир казачьей кавалерийской бригады Епанча, – тип үҙен таныттылар, бик тиҙ ғали йəнəптəре завод түрəһен күргəн теләүен белдерҙе.

Бил ҡайыштарына пистолет, билдəренə ҡылыс таҡҡан был кешеләр һис ябай түгел ине ҡарауылсы начальнигына ла.

Ҡолойҙоң давай ҙа давай, быстрее тигəн һүҙҙəренəн һуң семəрле тимер ҡапҡа асылып китте. Алтауһы ла шунда уҡ эскə ынтылдылар. Арттараҡ килгəн ике унлыҡ, ҡапҡа эсенə кереп, тиҙ генə баш ҡарауылсыны ҡоралһыҙландырып, ауыҙына сепрəк тығып, бер бүлмəгə биклəп, ҡарауыл аҫтына алдылар ҙа тыныс ҡына урамды, тирə-йүнде күҙəтергə керештеләр. Ҡаршыла, завод ҡапҡаһы төбөндə, йөҙлөк егеттəре тора.

Ҡолой үҙенə таныш баҫҡыс буйлап икенсе ҡатҡа менеп барғанда, сиркəүҙең ҡыңғырауы ҡаға башланы.

– Ни булды? Ни хикмəт был? Əллə беҙҙең уйҙы белеп, бөтə гарнизон һалдаттарын аяҡҡа баҫтыралармы? Тиҙерəк, тиҙерəк кереп был əҙəмгə баш булырға кəрəк, – тип уйланы ул. Йүгереп килеп ҡалын таҡталы ишекте асып ебəргəндə, мөйөштəге иконаға ҡарап, хужа псалмалар уҡый ине. Ул тауышҡа əҙ генə борола бирҙе лə, ҡулын күтəрə биреп, тыныс булырға һорағандай итте. Ишеге булмаған икенсе бүлмəлə ағас карауат башына ҡылысын, кейемдəрен элеп, кемдер ҡаты йоҡлай. Сиркəү ҡыңғырауы һуҡты ла һуҡты. Урамдан сиркəүгə табан кешеләр күмəкләшеп-күмəкләшеп үтə башланылар. Өҫтəлдə ашалып бөтмəгəн ризыҡ, киҫək-киҫək бешкəн ит, пирогтар, бөкрөштəр, сите теленгəн ҙур икмək ята. Əлеге тоноҡ аҡ һыу... Күрəһең, был тəғəмде хужа уяныуға яңынан əҙерлəгəндəр. Ниһайət, заводтың яңы управляющийы Фурман уҡыуынан туҡтаны.

Ҡолой Златоуст заводы Мəскəүҙəн килгəн немец сығышлы Андрей Кнауфҡа бирелгəнен белһə лə, дəүлəт тарафынан кире унан тартып алынғанын белмəй ине əле. Шулай ҙа был алыш-биреш оҙаҡҡа һуҙылды. Сөнки Андрей тип аталған фон Кнауф үҙенең ҡуртымға алынған хужалығы өсөн түләүҙе бирмəне. Һөҙөмтəлə, дəүлəттең ассигнация банкы вəкиле, заводтың яңы управляющийы Фурман менəн Кнауф арабында бəхəс сығып, уның килешеү менəн бөтөүен тоноҡ һыу менəн төнə буйы йыуғандар ине. Бөгөн христиан диненең ҙур бер байрамы икəн. Успенская байрамы. Христостың инəһе Мария үлгəн көн, шуны билдəлəйҙəр. Ҡайғыралар, эсəлəр. Сиркəүҙə суҡынышалар...

Кнауф та, Фурман да, ситтән ҡарағанда, Православие динендә торған кеүек булһалар ҙа, ысынбарлыҡта улар икеһе лә Православныйҙар түгел ине. Шуға ла заводтың әлекке хужаһы Кнауф сиркәүгә ашыҡманы, сисенеп тә тормай, ауҙарылған ерендә йоҡлай бирҙе. Ә яңы хужа Фурманға халыҡ араһына барырға кәрәк. Үҙеңде күрһәтергә кәрәк, кешеләргә лә ҡарау насар булмаҫ. Кантон начальнигы менән, әле таныш түгел Фурман, был ҡылыс таҡҡан билбауының аҫтына пистолет тыҡҡан, албаҫтылай, үҙе ҡораллы биш егет эйәртеп, уның бүлмәһенә һорамай килеп кергән кешегә аптырап ҡарап торҙо.

– Что вам надобно? – тип екерҙе ул Ҡолойға.

Кеше екереүенә, бигерәк тә кантон начальнигы булараҡ үҙенә екергәнгә өйрәнмәгән Ҡолой ҡапыл ҡыҙып китте.

– Твоя лысая голова, – тип Фурмандан да көслөрәк тауыш сығарып, ҡылысын зыңлатып ҡынынан һурып сығарҙы. Егеттәрҙең икәүһе шунда уҡ Кнауф йоҡлаған бүлмәгә кереп, уның ҡылысын, стенала элеүле торған пистолеттарҙы, мылтыҡтарҙы алдылар.

Ҡобараһы осҡан Фурман аҡылға килде булһа кәрәк. Ул үҙенең баҡыйлыҡҡа китеүенең сигендә генә тороуын аңланы, буғай.

– Что происходит, объясните?– тип хәҙер инде түбән генә тауыш менән һораны.

Ҡолой мәсьәләне тыныс юл менән хәл итергә кәрәклеген бөтә булмышы менән аңлай ине. Әммә хәл итергә кәрәк һис шикһеҙ.

– Мы идем маршем на войну. Нашего кантонного управления есть соглашение с заводом на поставку оружия. Вот соглашение. На нем есть и подпись гражданского губернатора Матвея Наврозова. Мы должны, сейчас же получить оружие и следовать на место сбора армии, – тип һорауын бик ышаныслы еткерҙе.

Завод хужаһы бер Ҡолойҙоң ҡулындағы ҡылысҡа, бер ҡағыҙға ҡарап, уны ҡалтыранған ҡулдары менән алды һәм бик ентекләп уҡырға кереште. Уҡыған һайын уны аптырау тойғоһо солғап ала барҙы.

– Нишләп һуң, улай булғас, кисә генә шул уҡ гражданлыҡ губернаторы Наврозов генерал-губернатор үҙе башҡорт полктарына ҡоралды әлегә бирмәҫкә, иң алда казактарға, уларҙың полктарын ҡоралландырырға тигән күрһәтмә бирҙе? – тип аптыраны. Әммә Фурман Наврозовтың ҡултамғаһы әле һуғыш башланмаҫ борон, 1812 йылдың дүртенсе айында ҡуйылғанын ҡапыл ғына аңлай алманы.

Ҡолой кантон Ырымбурға барғанында, бер осраҡта файҙаһы булыр тип, Наврозовтан ҡултамға алғайны. Килешеү Кнауф менән, әлекке хужа менән ине.

Заводҡа эшселәр етмәү генә түгел, ә уларҙы ашатыу ҙа бик ауыр мәсьәлә. Эшсене ашатмағас, ул эшләмәй, дөрөҫөрәге эшләй алмай. Тау-урмандар араһына ҡасыуҙары иң алда тамаҡтары туймауҙан. Оҙайлы, бик ауыр көндәрендәлер, урман араһында улар һарына, ҡымыҙлыҡ, еләк-емеш менән булһа ла тамағын аҫрай. Унан үҙ яғына, үҙ йортона йүнәлә. Күбеһе ирекһеҙ, ҡыуып килтерелгән халыҡ бит. Хәйер, әле генә заводты үҙ ҡулына ала башлаған Фурман әле был эштәрҙең нескәлеген аңлап бөтөрә алмай. Мәскәүский Сенат ебәргән бит үҙен. Алдында торған ҡылыслы кешенең биш тирмәне, ҡуй, һыйыр көтөүҙәре, эшселәренең хеҙмәте менән үҙенең тамағы туйып ултырыуын да белмәй әле ул.

Исәт йылғаһы, Тубыл, Уй, Яйыҡ буйлап Ырымбурға һәм унан да ары ултыраҡ тапҡан кочевник ҡасаҡ-казактар Сенат алдында сик һаҡлайбыҙ тигән һылтау аҫтында заводтарға аҙыҡ-түлек биреүҙән баш тартыуҙарын да әле ул белмәй. Бирһәләр ҙә, хәрби гарнизондарға ғына әҙ-мәҙ бүлеүҙәре тик үҙҙәренә генә мәғлүм. Заводтарҙы аҙыҡ-түлек менән тәьмин итеү күберәк башҡорт кантондарының өҫтөнә ятты.

Ҡолой тәбиғәте менән ҡырҡыу, баш эймәҫ, үҙ мәнфәғәтен яҡлай алырлыҡ тәғлимәтле һәм урыҫса телде белгәнгә, ул Ҡарабаш, Силәбе, Һатҡы, Златоуст, Троицк, Сыбаркүл һәм башҡа воеводаларға бирешеп бармай. Киреһенсә, үҙҙәрен һорандырырға мәжбүр итә. Ә гражданлыҡ эштәр губернаторы булараҡ, Наврозов ул эштәр менән шөғөлләнергә бурыслы. Бигерәк тә хәҙер, завод дәүләткә күскәс. Шуға ла был тәьминәтле килешеү заводҡа ит, он, ярма кеүек аҙыҡтарға алмашҡа иррегуляр кантон полкына ҡорал биреү уның маҡсатына ярашлы ине...

Аптыраған хужа был уҫал кешене нисек тә албырғатыр өсөн өҫтәл артына саҡырҙы ла:

– Андрей Андреевич, – тип йоҡлап ятҡан Кнауфҡа ҡысҡырҙы.

Йоҡоһонан иләүерәп килеп торған фон Кнауф, бер ҡулы менән ҡыҫҡа һаҡалын һыйпап, икенсе ҡулы менән төшөп барған салбарын тотоп, алғы бүлмәгә килеп сыҡты ла, ҡораллы башҡорттарға күҙ йөрөтөп:

–А-а-а-а... Кулуй, Кулуй, мой любезный, – тип кантон начальнигын ҡосаҡлап алды. Унан:

– Садись, туря, садись! Душа Туря! Янтуря, – тип исемдәр тағып, уны, Ҡолой кантонды, ай-вайына ҡуймай, таҡта «топчан» тип аталған өҫтәл артына ултыртты.

– Вениамин Данилович, – тип Фурманға мөрәжәғәт итте Кнауф. – Этот человек хорошо помогал заводу. Хорошо! Если бы не он, завод бы закрылся давно. Без питания хана дело... – һәм башҡа һүҙҙәр менән бер туҡтауһыҙ Ҡолойҙо маҡтап, үҙе уның арҡаһынан һөйә, үҙе уға эре киҫәкле иттәрҙе алдына һала ине.

Оҙаҡ һәм ентекле ревизия алып барған комиссияның һуңғы акты булмағанлыҡтан, Кнауф Фурманға складтарҙың һәм башҡа ҡоролма әйберҙәр һаҡланған келәт асҡысын бирмәгән ине.

Ҡолой ҡорал алырға килгәнлеге тураһында һөйләгәс, Кнауф уға губернаторҙар килеүен, ғәскәргә күпме ҡорал кәрәк буласағын һәм Наврозовтың башҡорт полктарына ҡарағанда казак полктарына ҡоралды беренсе нәүбәттә биреү тураһында яңы хужаға күрһәтмә биреүен һөйләне. Ҡулына тоноҡ һыу тотҡан Вениамин Данилович, Кнауфтың һөйләүен раҫлап, тулыһынса ризалыҡ билгеһен белдереп баш ҡаға-ҡаға өҫтәл янына килеп ултырҙы ла, ҙур майлы итте тотоп ҡына алған ине, Ҡолой уның ҡул бәкәлдәренән һығып тотоп алып, итте кире һалдырҙы. Өҫтәл ашъяулығын дүрт мөйөшөнән күтәреп алып, артта торған егеттәргә тоторҙо. Ҡылысының һабы осондағы еҙ әпесен Фурмандың ауыҙына килтереп терәне лә:

– На, грызи! Ни ты, ни твоя новая шайка больше не погрызет мясо. И сейчас же дай команду, чтобы были отгружены мои повозки! Сейчас же иначе башка секу!– тип Ҡолой Фурмандың алҡымынан алды.

Ҡобараһы осҡан яңы хужа:

– Андрей Андреевич! Вы составили соглашение, вы должны были оплатить. Ключи у вас, отгружайте, – тип әйтә алды. Унан һуң бар көсөнә:

– Кондрат, Кондрат, – тип урынбаҫарын саҡыра башланы.

Кондраттың баҫҡыстан шаҡ та шоҡ йүгереп килеүе ишетелгәс, Ҡолой Кнауфҡа:

– Бөтә арбаларҙы тултырып тейәтергә һәм өҫтәп тағы ла өс бистарка ат егергә Кондратҡа ҡуш, – тип бойорҙо.

Кондрат йүгереп килеп кереүгә, фон Кнауф ҡулына асҡыстарҙы алып ултыра ине инде. Күрәһең, әле ҡағыҙҙа барлыҡ завод ҡорамдары һәм ҡорамалдары, етештерелгән ҡоралдар, кәрәк-яраҡ әйберҙәре менән күсмәһә лә, Исәт тау округы Сенаттың ҡушыуы буйынса үҙ кешеһен тәғәйенләп ҡуйған ине. Хужа икәү булғанлыҡтан, олораҡ һәм тәжрибәлерәк Кнауф Фурманға ҡарап.

– Вениамин Данилович! Прикажите Кондрату для выполнения договорных условий, – тине.

– Ваше сиятельство, документ отгрузки будем писать не сегодняшним числом, – тип әйтә алды Фурман. Хәйләкәр фон Кнауф был тәҡдимгә һүҙһеҙ риза булды, сөнки ҡорал ебәреү ҡағыҙын Кондрат – Фурмандың ярҙамсыһы – үҙе яҙасаҡ. Кондраттың ҡулъяҙмаһы ҡорал ебәрелеүенең Фурман осоронда булыуын һөйләйәсәк. Ә был киләсәктә Кнауф өсөн бик уңай булыуы ихтимал. Һәм Ҡолой өсөн дә, ул бит һуғышҡа бара, диндәрендәге кеүек ҡорбан салырға түгел. Ил һаҡларға! Шул уҡ

Фурманды, минән тартып алынасаҡ заводты һаҡларға бара. Мин бит үҙ ҡолағым менән ишеттем, генерал-губернатор, башҡорттарға ҡорал бирмәҫкә, тимәне бит! Уны Матвей әйтте. Ә уның, гражданлыҡ губернаторҙың ҡоралда ни эше бар? Бөтәһе лә һуғышҡа бара. Былар бит башҡорттар, полктар төҙөп бөткәндәр, юлға ниәтләнәләр. Ә казактар әле полкка ойошмағандар. Ҡыш көнө линияла торғандары, беҙ һуғышҡа бармайбыҙ, линия ҡарауыллайбыҙ, тип һуғыштан янтаялар тигән һүҙ әйтте бит генерал-губернатор. Ҡоралдарҙы бирмәй мөмкин түгел, тип уйланы. Әгәр гражданлыҡ эштәре губернаторы Наврозовҡа полктарҙы ҡоралландырыу бурысын йөкмәткән булһалар ҙа, ҡоралдарҙы Ҡолойға тейәтеү Кнауф өсөн насар һөҙөмтә бирмәҫ ине. Беренсенән, бурысты түләргә кәрәк, икенсенән, ғәскәргә ҡоралланыу бөгөн дөйөм бурыс, өсөнсөнән, ҡуйылған бит яңы кеше. Ә ҡорал уның кешеһе тарафынан бирелә. Уға мин үҙем шаһит, үҙем күрҙем, тип уйлап, асҡыстарҙы тубығына етеп торған сәкмән, итек кейгән, әммә ялан баш Кондратҡа тотторҙо.

Яңы хужа Фурман ҡоралдарҙың ҡайҙа һәм күпме ятҡанын әлегә асыҡ ҡына белмәй ҙә, хәтерләмәй ҙә. Ҡаршыһында торған Кондратҡа йәнәш килеп баҫҡан Ҡолой Фурмандың күҙҙәренә тура ҡарап торҙо. Фурмандың Кондратҡа күҙ ҡыҫыуы, йәки башҡа хәрәкәттәре, ымлауы ла мөмкин түгел ине, сөнки ул иҙән таҡталарының шығырлауынан үҙенең артына йомшаҡ ҡына баҫып, дүрт бәһлеүәндең килеп тороуын белде.

– Кондрат! На все повозки грузить оружия... имеющиеся ружья, наконечники стрел и пиков. – Унан һуң, был кешеләрҙән тиҙерәк ҡотолоу өсөнмө, әллә Ҡолойҙоң талабын иҫенә төшөрөпмө: – Сейчас же! – тип өҫтәне.

Ҡолой биш егеттең икеһен янына саҡырып алды ла:

– Хәҙер үк был Кондраттан ҡалмай артынан барығыҙ. Әлимсура менән Азаматҡа әйтегеҙ. Мин әйткән ҡоралдарҙы тоҡтарға һалып һәм тағы ла уларҙан егелгән өс арба алып, тиҙ генә боролорға! Ә беҙ һеҙ тейәгәнсе бында булабыҙ, – тине.

Фурман бер аҙ тыныслanғас, Ҡолой Кнауфҡа:

– Андрей Андреевич! Я должен проверить ваших указаний. Чтобы не было вам скучно, я около вас оставляю трех этих молодцов с обнаженными саблями... Пока мы не уедем, никуда и ни гу-гу! Поняли? – тип икеһенең дә ҡаршыһына килеп, пистолет көбәгенең осо менән әйәктәрен берәм-берәм күтәреп, күҙенә ҡаратты. Икеһе лә, уны аңлағандарын белдереп, еңелсә баш ҡаҡты.

Ә тышта көн йылы. Урамда өсмөйөшлө ҡыл тартылған таҡтала көй уйнайҙар, бейейҙәр. Халыҡ ары ла, бире лә үтә. Һыбайлы, ҡораллы килеш завод ҡапҡаһы алдындағы торған йөҙлөк һуғыш-

сылары янына уҡ килеп һорашалар, һүҙ ҡушалар. Үҙҙәренең Аллаларының инәһе үлгәнгә лә әллә ҡыуанып, әллә ҡайғырып, иртә менән үк эсеп алған был кешеләрҙе Ҡолой күңеле менән аңламаны. Завод кешеләре тормошонда ла, үҙ-ара мөнәсәбәтендә лә Ҡолой һис һуғыш шауҡымы һиҙмәне. Әллә был күргәҙмә сыуалыштар башҡорттарҙы ниндәйҙер сит ил һуғышына ебәреү өсөн генә эшләнәме? Бәлки, берәү ҙә Рәсәйгә баҫып кермәгәндер? Әлегә тиклем һис бер батша Рәсәйҙе баҫып, ил эсенә кергәне лә, ҙур яу ҡуптарғаны ла юҡ та баһа. Рәсәй һәр ваҡыт үҙе баҫып керҙе күрше илдәргә, күрше халыҡтар еренә.

Генералдан хәбәр килер ҙә ул... Ә бына Фурман менән Кнауф бер ҙә һуғыш башланған тип бошонмайҙар бит, Златоуст халҡы ла... Бер ҙә полктар төҙөргә атлығып тормайҙар. Сиркәүе даңҡ та доңҡ ҡыңғырау һуға. Халыҡтың бер өлөшө сиркәү янында, попты тыңлап, асыҡ һауала уҡына ла суҡына.

Күбеһе урамда иҫерек. Уйнайҙар, бейейҙәр, таҡмаҡ сурыталар йәш мәрйәләр. Был ниндәй һуғыш? Һуғыш бар микән һуң? Әллә һуғыш башҡорт өсөн дә, казактар өсөн генәме?.. Ҡайһы бер ҡатын-ҡыҙҙары илаша. Илауҙары ла шул... Сепрәк менән ҡоро күҙҙәрен һөртөү генә шикелле... Оҙон һүҙҙең ҡыҫҡаһы, һуғыш шомо юҡ был ҡалала... Үҙ-ара һөйләшеүҙәре лә аҙыҡ-түлек хаҡына ҡоролған:

– В связи с войной, говорят, что башкиры прекратят поставку крупы, муки и мяса. Как бы, где-нибудь запастись... А то вот они идут на войну, а прокорм оставили своим женам... – Ҡорал тейәлеүҙең барышын йыраҡтан күҙәтеп йөрөгән Ҡолой урамда шундай һөйләшеүҙәр ҙә ишетте.

Бына бер ваҡыт дөбөр-шатыр завод ҡапҡалары асылды. Унан йән-фарман сабып бер-бер артлы туғыҙ арба килеп сыҡты ла Ҡыя Түр моронона, уңға йомолдо. Ҡапҡа төбөндә торған йөҙлөк ҡылыстарын ҡындарына тығып, бишәр-бишәр рәткә теҙелеп, аттарын атлатып, арбалар артынан киттеләр. Рекруттар казармаһы янында торған ҡылыссылар һәр береһе арҡаһына мылтыҡ аҫып, өҫтәүенә, биш бистаркаға дары, улар әйтмешләй, «фузейҙәр» – йәҙрәләр тейәп, тәүге ылауҙар артынан эйәрҙеләр.

– Яҡшы, бик яҡшы, – тип уйланы Ҡолой. Ҡайтып еткәс, ике полкка ла, артһа, 4-се кантон алайына ла ҡорал таратып, генерал-губернатор килеүгә һуғыш әҙерлеген күрһәтеүҙе ойоштороp ине.

Аптыраны кантон ҡалалағы был дөйөм хәлгә. Уға атын килтерҙеләр. Ерәнен менеп алғас, ул Кнауф менән Фурман ултырған өйҙөң асыҡ тәҙрәһенә килеп:

– Вениамин, – тип ҡысҡырыуға, тәҙрәнән туҙып бөткән сәсле Фурман һәм уның янынан уларҙы ҡарауыллаған өс егеттең бере-

һенең башы күренде. Ҡолой егеттәргә сығып, аттарына менергә ҡушты ла Вениаминға, заводтың яңы хужаһына ҡарап:

– Если хочешь жить и работать, смотри, сиди смирно. Мы все будем наблюдать. Если поднимешь шум, считай, твое тело вонючее упадет без головы. Мы тебя везде найдем. Понял?– тип һораны.

– Понял, понял, – тип ҡабатланы Фурман.

Шул ваҡиғалар менән әлегә Фурман да, Златоуст ҡалаһы ла Ҡолойҙоң тормош ағышынан төшөп ҡалды. Тынысланды Ҡолой. Был тирәлә, Силәбене, Исәтте, Ырымбурҙы иҫәпкә алмағанда, Ҡолойҙоң ике полкына ла ҡаршы торорлоҡ көс юҡ икәнен ул белә. Булған хәрби көстәр әлегә бик бәләкәй, ойошмағандар, ҡоралдары ла әҙ. Ҡәлғәләрҙә торған гарнизондар ҡораллы, әлбиттә, әммә уларҙың, ниндәйҙер Фурмандың ҡушыуы буйынса, ысынбарлыҡта регуляр ике полкка ҡаршы торорлоҡ мөмкинселеге лә, теләктәре лә булмаясаҡ. Бында, Исәт ҡалаһына хәбәр итеп, Ҡыштым гарнизоны командиры Расторгуев ҡына эште бутауы мөмкин. Расторгуев түрәләрҙән, бигерәк тә губерна түрәләренән бик ҡурҡа торған кеше.

Яҙҙың тәүге айында генерал-губернатор бөтә кантон начальниктарын, гарнизондар һәм завод етәкселеген саҡырған ине. Расторгуевтың эше менән риза булмайынса, генерал-губернатор уға шелтә биргән ине. Хәҙер ул генерал-губернаторҙың килеүенән ҡурҡып, йәнен ҡулына тотоп ултыралыр... Мин уға кереп күренәйем, хәл-әхүәл һорашайым, үҙемдең хәлдәрҙе өҫтәнмөҫтән булһа ла әйтәйем. Әгәр ул, Расторгуев минең менән, Ҡолой менән килешеп йәшәмәһә, уға, гарнизонға һәм заводҡа башҡорт олоҫтары-волостары аҙыҡ-түлек бирмәүе мөмкин. Ни әшләйһең, һуғыш бит. Һуғыш яугирҙарын тәьмин итер кәрәк тип, уның да алҡымынан алыр кәрәк. Бына генерал-губернатор Наврозов менән миңә ҡунаҡҡа килә. Минең 1000-дән артыҡ ойошҡан ике полкым бар, шуларҙы ҡарай, тип әйтергә кәрәк. Бер ыңғайҙан Ҡыштым гарнизоны һанын, ҡоралланыуын да ҡарармын тигән уй менән, бер иллелекте әйәртеп, Һаҡ тау алдынан Ҡыштымға боролдо. Ҡайтҡас, ҡоралдарҙы ҡайҙа һаҡлап торорға йөҙләк баштарына әмер бирҙе.

Расторгуев та Алла улының инәһе үлгән көндө һәйбәт кенә билдәләгән ине. Был кешеләр менән аралашһа ла, Ҡолой бер нәмәне һис төшөнә алманы. Нишләп улар һәр ваҡыт әҙ генә һөт һалынған һыу кеүек шыйыҡсаны әсәләр ҙә алйып йөрөйҙәр? Һуң Аллаһы Тәғәлә уларҙы иҫерек килеш тыуҙырмаған бит. Тыуып, әҙ генә үҫә бирәләр ҙә, бөтәһе лә шуға тотона. Аптырарһың, тип, үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә барҙы ул.

Расторгуевҡа Ҡолой алдан уйлаған уйҙарын бөтә еткерҙе.

– Генерал-губернатор бөгөн Мейәстә, смотри, никуда не выезжай, друган, погоришь, – тип ҡурҡытып ҡуйҙы.

Тимәк, Расторгуев аша әлегә хәбәр китмәгән һәм булмаясаҡ, тип фекер йөрөттө Ҡолой. Нисек тыныс килгән, шулай тыныс ҡайтты ул.

Ҡыҙмаса Расторгуевтан ул байтаҡ хәбәрҙәр ишетте. Генерал-губернатор, имеш, Исәт тау округы менән һөйләшеп, заводтарҙан рекруттарҙы һалдатҡа, регуляр әрмегә алмаҫҡа бойорған. Имеш, һалдатҡа һәм иррегуляр полктарға башҡорттарҙы, типтәр-мишәрҙәрҙе, сауҙагәрҙәрҙе, ҡасаҡтарҙы, икмәк үҫтермәгән крепостнойҙарҙы, помещиктар үҙҙәре биргән крәҫтиәндәрҙе, сик һаҡлағандарҙы ҡарттар менән алмаштырып, башҡорт һәм урыҫ казактарын ғына алырға фарман биргән, имеш. Сөнки генерал-губернаторға батша ғәли йәнәптәре шулай ҡушҡан. Рәсәй ҙур, һалдат етерлек. Ә бына суйын иретергә мастеровойҙар, әшселәр етмәй. Имеш, башҡорттар заводта эшләргә теләмәйҙәр икән, китһендәр һуғышҡа...

Расторгуевтың был һүҙҙәре, әлбиттә, Ҡолойҙа ҡаршылыҡлы уйҙар кисертте. Асыуы килде уның завод хужаларына.

– Беҙ һуғышырға тейешбеҙ, ә улар бында тыныс ҡына араҡы һемерергә һәм осалары тығыҙ мәрйәләре менән хихылдашырға тейештәр...

Шулай ҙа Златоустағы хәл, бер заводҡа ике хужа хасил булыуы һәм Расторгуевтың Ҡыштым, Ҡарабаш һәм башҡа заводтарҙың дәүләт милкенә әүерелә, тигән хәбәре уны ниңәлер тағы ла тынысландырҙы. Әйтерһең дә, Кнауф, Фурман, Расторгуевтар башҡаса булмаясаҡ. Батша, дәүләт кенә хужа буласаҡ.

Илмән тауының билдәше менән үҙ ауылына ҡайтҡан саҡта Ҡолойҙо, Аман-Ҡарағайҙан көнбайыштараҡ ҡалмаҡтарҙы бер нисә урыҫ гарнизоны менән берлектә туҙҙырып ҡайтып килгәндәге кеүек, рух күтәренкелеге һәм бөгөн ҡылған эшенең, беренсенән, һөҙөмтәле, икенсенән, киләсәк яу өсөн бик уңыш тәьмин итеүсе аҙым булыуын уйлап кинәнде. Был аҙым бер ҙә баҫҡынсылыҡ түгел, был аҙым мәжбүри һәм бик дөрөҫ, үҙ ваҡытында булды, тип ҡыуанды. Уйҙарынан күкрәгенә моң тулып, артта тыныс ҡына килгән илле егеткә лә иғтибар итмәй, ҡысҡырып йырлап ебәрҙе.

Мөгөҙ ҙә генә һаплы яныма
Ефәк тә еп кәрәк, керешкә.
Ҡайҙа ғына булһа, батыр кәрәк,
Тәүәккәллек кәрәк һәр эшкә.

Ҡайтып еткәнсе, аҡшам намаҙы етә яҙҙы. Ҡайтҡан ваҡытта, Ҡарабашҡа боролған юл сатында уҡ, ул йөҙлөктәргә ҡоралдарҙы ҡайҙа ҡуйыуҙы ла, унан һуң ҡорал алып ҡайтыуҙы ла һис бер кемгә әйтмәүҙе иҫкәрткән ине. Ярайһы уҡ йыраҡтан, еңелсә генә саң туҙҙырып, ашыҡмай ғына килеүсе был иллелек ҡалҡыуҙа урынлашҡан ауылға күренеп тора ине.

Был ауылдағы малайҙарҙың бер ҡылығы бар. Был ҡылыҡ инде йола булып килә. Ҡайҙандыр ситтән, йә хәрби походтан, йә яуҙан теҙелеп килгән атлыларға ауыл малайҙары бөтәһе лә болашмаҡ ҡаршы йүгерә. Малайҙар, атлыларға барып еткәс, ағаһын, йә атаһын, йә еҙнәһен әҙләп тормай, кемгә ҡайһы атлы яҡын, ул шуға йәбешә. Малайҙарҙы атлылар йә ҡулдарынан, йә елкәләренән әләктереп, ат өҫтөнә, эйәр алдына ултырталар ҙа шул рәүешле ауылға ҡайтып керәләр. Уларға ҡаршы һәр кемдең яҡыны, бисәһе, инәһе, еңгәһе, йәшертен генә һөйгән ҡыҙы сыға. Китә шау-шыу... Һәр ҡатын-ҡыҙ үҙ кешеһенең аты теҙгененән тотоп, үҙ өйөнә етәклән алып ҡайта.

Ҡолойҙо бөгөн ике бисәһенең береһе ҡаршы алманы. Әммә артта килгән иллелектәрҙе әллә ҡайҙа, Мейәс йылғаһының таллыҡтары араһында, йәшенеп торған малайҙар, улар менән бергә болашмаҡ йүгерешкән йәш ҡатын-ҡыҙ ҡаршы алды. Һәр ҡатын-ҡыҙ үҙ һөйгәненең, үҙ иренең аты теҙгенен тотоп, ауылға йүнәлде. Бындағы ырыу халҡында, барын-табында, ҡара-табында шундай йола йәшәне. Яуҙан йәки йыраҡ барымтанан ҡайтҡан ирҙең, егеттең аты теҙгененән тотоп, ауылға, ә никахлашҡандары өйҙәренә алып ҡайтыу йолаһы булды. Ә никахланмаған ҡыҙҙар ауылға керер алдынан, йә ауылға кереү менән үк теҙгенде ысҡындыралар. Унан өҙәңгегә тотоналар, унан әйтер һүҙен бербереһенә әйтеп, тороп ҡалалар. Бөтә осраҡта ла ул һөйләшеү ҡайҙа, ҡасан осрашыу, йә яусы ебәреү, никахлашыу менән бөтә ине. Быны барыһы ла белде, тимәк, ул ҡыҙ билдәләнгән, уға инәү налынған, йәки башҡа кеше, сит кеше килеп болашырға хаҡы юҡлығын иҫбатлаусы ҡанун булды...

Ҡолойҙо, кантон начальнигын, аттарын ҡараусы Ғәйфулла ғына йүгерек ҡолаһының башынан тотоп, ҙур, киң ҡапҡа эсенә керетте. Ҡапҡа эсендәге өс йорттоң һәр береһенә кереп, ике бисәһенең хәл-әхүәлен белешергә ниәтләнгән ине лә, килеп сыҡманы. Оло ҡатыны Аҡбикә өйҙә юҡ. Төп өйҙә аш-һыу бешереп, йыуынып, өй таҙартып, бала-сағаларҙың өҫтөн йыуып йөрөүсе ике ҡатын бер ауыҙҙан тиерлек:

– Аҡбикә апай иртә менән үк сығып киткән ине, әле ҡайтмаған, – тинеләр.

Ғәҙәтенсә, ауыл ҡыҙыра был, тип уйланы Ҡолой. Йәштән алып шундай холҡо булды, өйҙән сығып китә лә юҡ була. Әллә ҡайҙа

бара. Ҡайһы өйгә керһә лә, уны сәйгә саҡыралар. Шунан китә хәбәр, шунан китә ғәйбәт. Күберәк ул көндәше Зөләйхәгә һүҙ тейҙерә. Йәнәһе, өйөн бола тота, балаларын ҡарамай, иргә баш һалмай... Ҡолой, әлбиттә, Аҡбикәнең бындай һүҙ оҫтаһы икәнен белмәй. Уға, кантонға, берәү ҙә, һинең бисәң былай ҙа, һинең бисәң тегеләй, тип һөйләмәй. Әммә Аҡбикәнең был ҡылығы арҡаһында уның өйө эсендәге хәл-ваҡиғалар күп осраҡта бар ғәмгә билдәле булып, шыш-быштар күп йөрөй. Хатта Ҡолой Аҡбикәнең өйөнә нисә тапҡыр кергән дә, Зөләйхәнең өйөнә нисә тапҡыр кергән... Ғөмүмән, Аҡбикәнең холҡо бер ҡатлы кеүек күренһә лә, хәҙер ул күп һол алды, йәш ваҡытындағы кеүек ҡурҡмай. Йәш ваҡытында уны, инде ғүмер буйы ирһеҙ йәшәлер микән, тигән уй ҡурҡыта һәм был ысынбарлыҡ башы өҫтөндә болот кеүек тора ине. Сөнки ирһеҙ ҡатынға, бигерәк тә балалы тол бисәгә яусы ебәреүселәр булмай тиерлек. Ә төндә һарай артынан килеүсене, берәйһе әҙ генә хиҙеп ҡалды икән, бөттө, иң ҙур ғәйеп, иң ҙур гонаһ һанала тирә-йүндә... Йылдар буйы буш бауырҙы күтәреп йөрөү, ай-һай, ауыр... Рәхмәт ҡайныма, тиер ине. Әйттерҙе лә, саҡырҙы ла, никах уҡытты ла ҡуйҙы тәнәйе менән. Тәнәй ярты ир. Ир булмағанда тулы ир булды ла ҡуйҙы. Йәш ваҡытта ҡыҙыҡ ине лә ул... Аҙаҡ ул үҙен Ҡолойҙан оло ла, уға элекке кеүек еңгә түгел, ә апай иттереп хис итә башланы. Ҡолой бушаманы. Йә ҡалмаҡҡа, йә ҡаҙаҡҡа, йә әллә шведме, нимесме, Ҡаф тауынамы яуға китә лә юғала. Йөрө инде үҙәгең өҙөлөп... Йөрөп-йөрөп ҡайта. Ҡайтһа ла, үҙ ирең кеүек булып ҡайтмай. Нисектер ят, һалҡын булып ҡайта. Шулай тойола ул Аҡбикәгә.

Ул йылда Ҡолойҙоң һул ҡултығы аҫтына ике яҡлы ҡылыс тығылып, ҡабырғаһының да, ҡулының да һум итен ярып һалған тәрән яраһы әсеп, бешегеп, әренләп йөрөнө. Яраһын дауалаһа ла, күңелен биреп теләп дауаламаны Аҡбикә. Бурысы итеп кенә дауаланы Ҡолойҙоң яраһын. Тик күрше ауылдан имсе Кәримә ҡарсыҡты килтереп, оло өйгә һалып ҡуйып, төрлө дарыу үләндәре, туҙ дегете, әркмән, яра япраҡ, ҡарағас әнәләре ҡайнатмаһы менән йыуа торғас, тәрән сей яра сөрөшөп, тартылып кипте. Һул ҡулын һәр саҡ һелтәп әшләтә торғас, тиреһенең тартылыуы ла яҙылды.

Аҡбикәнең, әллә тәбиғи булмышы шулаймы? Өйҙән өйгә йөрөү, бөтмәҫ хәбәр йөрөтөү, ғәйбәт тыңлап һөйләү... Әллә Ҡолойҙо күңелендә үҙ итмәүеме? Әллә донъя көтөргә теләге юҡмы? Был ҙур өйҙөң барлыҡ келәттәренең, таҡта, бүрәнә ҡумталарының асҡыстары уға бик ауырмы? Эше лә юҡ кимәлендә бит. Төп йорттағы ашнаҡсыларға ике көнгә бер, йә көн һайын кис тейешле күләмдәге аҙыҡ-түлекте биреү. Үлсәү-ғәләмәт юҡ. Бизмәндәренең һәлмәктәрен юғалтҡанға тиклем сама менән булһа ла үлсәп бирә торған ине. Хәҙер үлсәп бирмәй. Беренсенән, ул

алабарманлығы арҡаһында бер түгел, ике һәлмәкте юғалтты. Береһе бер ҡаҙаҡлыҡ, береһе ике мыҫҡаллыҡ. Үлсәмәй бирһең, мәшәҡәте лә әҙерәк шул, күҙ менән самалай. Ондоң да нисә һоҙғаҡ китеүен белә, иттең дә, балдың да... Төп өйҙәге көн һайын өс ашауҙан башҡа бәләкәй өйҙә лә ашау бар бит әле. Төндәрен, йә ашау менән ашау араһында балалар асығалар. Зөләйхәнең өйөнә, балаларына ла ашнаҡсылар аша аҙыҡ-түлек ебәрә. Әммә дөйөм тикшереүҙе, күҙәтеүҙе Зөләйхә алып бара. Был йомала нисә ҡаҙаҡ ит, бал, нисә икмәк, нисә мыҫҡал сәй әселгәнен ул белә. Хисапҡа шәп ул. Ике яҡтың да тикшереү һөҙөмтәләре түкмәй-сәсмәй Ҡолойға етә тора. Әммә ул бер ҡасан да был мәсьәлә буйынса бисәләрен тәнҡитләмәне. Ике бисә бер-береһен тикшереп торҙолар.

Ҡолойға Аҡбикә бер ҡараһаң еңгә, бер ҡараһаң, йөҙәрләгән хеҙмәтселәре кеүек хеҙмәтсе. Аҡбикә үҙе шиҡанлай башлаһа, Ҡолой, шиҡанлап ала торған бисәгә барған кеүек, бара. Әммә ҡапма-ҡаршылыҡлы тойғо менән йәшәне. Уға яйлап әллә ниндәй хис кереп урынлашты ла ҡуйҙы. Уртаҡ тағы ла балалары булһа ла, ул хис яҙылманы. Яҡындан бер-береһен улар һирәк-һаяҡ, тик ҡараңғыла ғына тоялар ине. Иртә менән береһе тәнәй, икенсеһе еңгәгә әүерелделәр. Һәр ваҡыт ауыл рәтләп йөрөгәне өсөн, бик асыуы килеп, ҡамсы менән һелтәргә лә уйлағайны Ҡолой Аҡбикәне. Тик балаларын уйлап, уйҙарынан кире ҡайтты. Етеп килгән Зарифаһы инде тиҙҙән утығырҙай, Ғәбделхалик бар, уға 10 йәш.

Ә бына Зөләйхә лә өйҙә юҡ бит. Ҡолойҙо бер йомаға юлға сыҡҡан, тип уйлап, ул күсәренән ат ектереп, 15–20 саҡрым алыҫлыҡтағы ата йортона киткән. Зөләйхәнең дә ҙур ҡапҡа эсендә айырым үҙ өйө. Өй йыйыштырыусы тотоп йәшәһә лә, балаларын ата-инәһендә йәшәтергә ғәҙәт тапты. Был мәсьәлә буйынса Ҡолой менән ҡырҡыу ғына һүҙ булһа ла, ул барыбер үҙенсә эшләне. Ҡолой һиҙә ине, Зөләйхәнең күңелендә күп нәмә йәшерен. Йәшерен уй, йәшерен ҡылыҡ, йәшерен ғәмәл. Зөләйхәнең күңеле һәм башҡарған ғәмәле һәр саҡ тип әйтерлек Ҡолой менән килешеп, бер һүҙҙә эшләнмәгәс, Ҡолой яйлап унан һүрелгәндән-һүрелде кеүек.

Ҡапма-ҡаршылыҡлы тойғоһон Ҡолой башта үҙе лә аңламаны. Ләкин ул был турала һис бер кемгә әйтмәне, дөрөҫөрәге, әйтә алманы. Халыҡ ни әйтер? Ул бит кантон башлығы. Кантондағы барлыҡ халыҡ уға ҡарап тора. Кантон халҡы ғына түгел, бөтә тирә-йүн, хатта завод халҡы ла. Көҙ булһа Ҡолой, завод управляющийҙары менән ашлыҡ сабырға, көлтәләр ташырға, бесән эшләшергә килешеү төҙөй. Завод эшселәренең күбеһе крепостной крәҫтиәндәр булғанлыҡтан, ауыл хеҙмәте уларға завод эшенә

ҡараған да яҡыныраҡ. Өҫтәүенә, бында туйғансы ит, икмәк ашайһың. Мастеровойҙың таяғы ла юҡ, розга менән дә һуҡтырмайҙар. Шуға күрә лә завод эшселәре йылына бер килә торған был «ял йортона» ашҡынып, хатта болашып торҙолар. Ҡолойҙоң һәм уның кешеләренең завод эшселәре араһында таныш-белештәре бихисап. Бигерәк тә ябай завод эшсеһе менән малсы, игенсе тиҙ дуҫлашты, уртаҡ тел таба алды. Златоуст, Мейәс, Ҡыштым, Ҡарабаш, Силәбе, Сыбаркүл заводтарының эшселәре ауыл хеҙмәтсәндәре менән күп осраҡта бер фекерҙә булдылар. Был меҫкен кешеләр бөтәһе лә ситтән ҡыуып килтерелгән халыҡ. Улар хоҡуҡһыҙ, бер ергә сыға ла, китә лә алмайҙар. Ҡасһа – Себер, каторга, эшкә һуңлаһа, розга менән һуҡтыралар, йә «ғәйепле»не ике яҡлап теҙелеп торған бер рота һалдаттар араһынан үткәреп, «шпицрутен» тигән тал сыбығы менән ҡайыҙлаталар.

Шул дуҫлыҡ Златоустҡа ҡорал таларға барғанда бик ярҙам итте. Кондраттың әйтеүе генә булды, эшселәр үҙҙәре йүгереп йөрөп ҡорал тейәнеләр, үҙҙәре оҙаттылар. Ҡорал алып ҡайтыуға әле тәүлек үтməһә лә, был Ҡолойға күптәнге бер ваҡиға кеүек кенә булып ҡалды.

Үҙе шул халҡы, ил өсөн ашҡынып ҙур эштәр башҡарып йөрөһә лә, был диуарҙай йорт-ҡура эсендә ул яңғыҙ ине. Күңеле буш, арты ныҡ булмауында бик тә, бик тә бошондо. Бына ул яуға китер, әллә ҡайтыр, әллә яу яланында башы ятып ҡалыр. Был ике бисәгә, донъяны һаҡлап, тыныс тормош көтөүҙәренә һис күңеле ышанмай ине. Ҡолой яуға китеүенең икенсе көнөндә үк үҙ-ара талаш башланасаҡ. Һүҙҙе, донъяны бүлеүҙе, айырым йәшәүҙе иң алда Аҡбикә башлаясаҡ. Яйлап, һуҙып, мыҙылып, тәмләп, дәлиллəп һөйләйәсәк ул. Зөләйхә иң алда түҙер, өндәшмәҫ. Әммә эстән ул күптән инде үҙ күҙаллауын ҡорған. Шулай ҙа ул әле маҡсат түгел. Уйы ныҡлы маҡсатҡа әйләнгәнсе үҙе өсөн ул, әлбиттә, был донъяның әкен-сөкөнөн барлап, ҡайһы яҡҡа күпме йыһаз, милек, мал-тыуар айырылыуын иҫәпләп ҡуйыр. Бисәләренең булмыштарына ҡарап, Ҡолой уларҙың уй-фекерҙәрен үҙенсә тағатты.

Ҡолойҙоң көтмәгәндә ҡайтып төшөүен ҡайҙандыр, һайыҫкан теленән ишетеп, Аҡбикә өйөнә йүгерә-йүгерә атлай ине. Ҙур өйҙөң ҡунаҡ бүлмәһенең түрендә губернатор килһә тип ҡуйылған ҙур өҫтәл артында Ҡолой ашыҡмай ғына ашнаҡсылар яраштырып биргән ашты ашай ине. Зөләйхәнең ата йортона киткәнен белгән Аҡбикә, тәүҙә Ҡолой миңə кермәнеме икән, тип, өйөнə керҙе. Зарифа менән Ғабделхалиҡтан:

– Атайығыҙ килмәнеме, – тип һораны ла тиҙерәк төп йортҡа йүгерҙе.

Ҡолойҙоң ҡунаҡ бүлмәһендә аш ашап ултырғанын белгәс, уның ҡорот яратҡанын хәтерләп, ҙур тәгәстә шыйыҡ ҡорот тотоп

уның янына инде. Ирҙе һәр ваҡыт ҡаршы алыу йолаһы боҙолоуында үҙенең ғәйебе булыуын аңлаған Аҡбикә:

– Ҡайттың дамы ни? – тигән әллә һорауына, әллә хәбәренә Ҡолой өндәшмәне лә, башын да бороп ҡараманы. Өйгә кереп, йылы аш алдына ҡуйылғас, ул уйҙары менән Аҡбикәне лә, Зөләйхәне лә онотто. Аш алдында ул иртәгә үк ҡоралдарҙы таратып бирергә, алайҙарҙың исемлек теҙмәләрен алырға, унлыҡ, иллелектәрҙе барларға ҡарар итте. Бынһы иртәгә. Ә иртәнән һуң губернатор килгәнсе үҙебеҙгә һуғышта ҡуллана торған алымдарҙы, хәрәкәттәрҙе ҡабатларға ла ҡабатларға. Унан һуң полкта айырым мылтыҡсылар йөҙлөгө ойошторорға кәрәк, тип уйланы. Уларҙы һәр ваҡыт йәшереп, һағауылда тотоп, дошманды уларға эйәртеп килтереү алымы ла бар бит әле.

Ҡолойҙо 1805 йылда ла Франция яуына тип алдылар ҙа, унда бармайынса, аттарын Ҡаф тауына табан бороп, Грузия тигән ергә кергәндәр ине. Ана шунда тау халҡы, тау-таш араһында бик оҫта йәшенеп ятып, көтмәгәндә мылтыҡтан ут асалар. Мылтыҡ тауҙа уңайлылыр ул. Сөнки атҡас, ҡаяға йәшеренеп, уны тағы ҡоралар. Тағы ла аталар. Тигеҙ ерҙәге һуғышта, бәлки, берҙәм (залп) атыу кәрәкмәйҙер. Сөнки берҙәм атаһың да, мылтыҡтарҙы ҡорғансы шаҡтай ваҡыт үтә, ә дошманға шул ғына кәрәк, ҡылыстарын болғап араға килеп тә керә.

Шулай төрлө уйҙар эсендә йөҙҙө Ҡолой. Аҡбикә менән Зөләйхә уның бөгөнгө тормошонда, әйтерһең дә, һыуға баттылар... Уйҙары менән ул һуғыш яланында алыша ине. Шул ваҡыт шым ғына сығып киткән Аҡбикә йүгереп килеп керҙе лә:

– Ҡолой, һиңә Сыбаркүлдән һыбайлы урыҫ килгән, сығыуыңды һорай, – тине.

Ҡолой бейек күрнисәһенә сығыуына, ярым хәрби, ярым көндәлек кейемдәге кеше ат өҫтөндә пәйҙә булды. Ҡолойҙо күреү менән ул:

– Господин 14-го класса, господин начальник... господин кантонный начальник 14-го класса,– тип тотлоға-тотлоға һөйләнеп ат өҫтөнән төштө лә ҡуйынынан сығарған ҡағыҙ төргәген тотторо:

– Спецкурьер привез из Златоуста, от дистанции до дистанции, – тине.

Ҡағыҙҙы асмайынса Ҡолой кантон идаралығына китте. Идаралыҡта уның ярҙамсылары, Ҡолойҙан дүрт йәшкә оло, инәләре башҡа булған ағаһы Көсөков Сәйфелмөлөк һәм үҙенән алты-ете йәшкә кесе Байғазин Әбүтаһир, йөҙлөк, иллелек баштары йыйылған ине. Көндөң кисәү булыуына ҡарамаҫтан, бөтәһе лә ҙур яуаплылыҡ тойоп килгәндәр. Ҡолой үҙенең юлда һәм өйҙә, аш

алдында уйлаған уйҙарын бик ентекләп, бурыс итеп аңлатып бирҙе.

– Генерал-губернатор беҙгә һис шикһеҙ киләсәк. Һуңғы ваҡытта уның кәйефе лә яҡшынан уҡ түгел. Батшанан хат артынан хат килә. Бер сапҡын ҡайтып китеп өлгөрмәй, икенсеһе килә. Казактар араһында үҙ-ара мөнәсәбәт ҡырҡылаша бара. Улар һаман да йә гарнизон хеҙмәте, йә тик иген игеү бурысын ғына йөкмәтеүҙәрен талап итәләр. Өҫтәүенә, өс сүмес тигәндәй, тағы һуғыш сыҡҡан. Һуғышҡа бармаҫ өсөн кемдәрелер саҡырыуһыҙ кире Себер гарнизондарына киткәндәр. Кемдәрелер тәмәке һалып, күҙҙәре «сипый»ға әйләнгән. Әммә атамандары генерал-губернаторҙан бик ҡаты бойороҡ һәм янау алғас, ниһайәт, казак полктары ла төҙөлә башланы.

Французға яуға барыу Курган яғына гарнизон хеҙмәтенә барыу түгел. Казактарҙың менергә аттары етмәй ине. Бына ҡасан кәрәк булды Башҡорт аттары! Крепостной крәҫтиәндәр булып ҡыуылып килгәс, дәүләт һәм завод хужалары көнбайыш өлкәләрҙән йә йөк тартыусы – тяжеловоз, йә рысак, йә верховой тоҡом тип аталған аттар килтереп, шуларҙы казактар үрсетәләр ине. Менге аттары тәүге 10 саҡрымға ғына һәйбәт йөрөнө. Йыраҡ китә башлаһаң, арыйҙар, тирләйҙәр, лапшыйҙар. Шуға күрә казактар, башҡорттарҙан инәлеп булһа ла, арыу-асығыуҙы белмәҫ Башҡорт аттарын һорап, менер булдылар.

Ҡолой өсөн генералдың килеүе икеләнеүһеҙ ине. Һуғыш әҙерлеген күрһәтергә ялан һайлау, ат һикертергә ҡаршылыҡтар ҡуйыу, соҡорҙар ҡазыу, сабып барған килеш һөңгө осондағы тирегә уҡ тейҙереү, тал сыбыҡтарын уңлы-һуллы сабыу, һөңгө менән сабып барған килеш ҡарасҡыларҙы сәнсеү, тиҙ генә ут тоҡандыра белеү, ҡаҙанһыҙ, һыуһыҙ ит бешерә белеү ысулдарын күрһәтеү һәм башҡа бик күп яу юлы алымдарын йөҙләп баштарына һөйләп:

–Генерал-губернаторға шуларҙы күрһәтергә кәрәк, – тине.

Златоустан килгән хатты уҡығас, ул шуны төшөндө. Бирмә-Пермь тау округы, Златоуст һәм башҡа заводтарҙан һуғышҡа рекруттар алыуҙы тыйып, етешмәгән халдат рәтен башҡорттарҙан тултыртмаҡсы икән. Завод эшселәрен һуғышҡа ебәреү – преступление, заводтар туҡтаясаҡ. Пушкалар, мылтыҡтар ҡойолмаясаҡ, тимәк, француз Рәсәйҙе буш ҡул менән аласаҡ... Ана, башҡорттар, инородецтар заводҡа эшкә барыуҙан баш тарталар. Килһендәр ана һуғышҡа, йәнәһе.

– Аҡыллы, аҡыллы, бик аҡыллы уйлай был тауыҡ баштар, – тип фекер йөрөттө Ҡолой. Йөҙлөктәр, иллелектәр таралышҡас, был хаттың йөкмәткеһен ҡабаттан уҡып, тағы ла аптыраны. Әгәр беҙ, 4-се, 5-се, 6-сы һәм 3-сө кантондар, был зауыт хужаларына

ҡолаҡ һалһаҡ, алайҙарҙы 500 түгел, ә 1000 кешегә тиклем өҫтәһәк, ни булыр?

Беренсенән, заводсылар ни башмағыма таянып беҙгә ундай күрһәтмәләр бирер яталар әле? Беҙгә күрһәтмә бирергә уларҙың ни хоҡуғы бар? Беҙ – кантон начальниктары, һуғыш осоронда тик генерал-губернаторға буйһонабыҙ. Ә тыныс ваҡытта гражданлыҡ губернаторының да күрһәтмәһенә ҡолаҡ һалабыҙ. Әгәр беҙ бөтә халҡыбыҙҙы яуға алып китһәк, 10 меңләп йылҡыны кем көтөр? Ҡолондарға, һыйыр-быҙауҙарға, һарыҡ-бәрәстәргә кем бесән эшләр? Биш тирмәнгә йыл әйләнәһенә он тартыр өсөн кем 2500 десятинанан артыҡ ерҙе һөрөр, эшкәртер, сәсер? Халыҡ нимә ашар? Завод кешеләренә лә икмәк, ит, һөт булмай бит!

Юҡ, Рәсәйҙә заводтар бихисап. Ашамаһалар, улар ҡорал да, төрән дә, тырма теше лә һуҡмаҫтар. Халыҡты ас ҡалдырып, төплө фекер йөрөтмәүсе Аҡбикәләргә ышанып, донъя ҡалдырып булмай.

Генерал килһә, шул һорауҙы хәл итергә кәрәк. Оло улы Иҡсанды ваҡытлыса кантон начальнигы иттереп раҫлатырға. Иҡсандың холҡо ҡырҡыу, ярмаһы ҡоро. Ҡайһы ваҡыт ул уны үҙенең улы итеп тә тоя. Сөнки атаһының башҡа бисәһенән тыуған, бер туған уҡ булмаған, ағаһы кардон хеҙмәтендә ятҡанында еңгәһе Аҡбикә шиҡланғанға, ул уның күңелен күрә торған ине. Атаһы Йәрмөхәммәт әллә шуны һиҙеп, улы вафат булыу менән Ҡолойға тол ҡалған киленен алды ла бирҙе. Һин уны яратаһыңмы-юҡмы, унда уның эше юҡ. Шуға ла ул ҡайһы ваҡыт Иҡсанды үҙенә оҡшатып та ҡуя. Әммә Аҡбикәгә күңеле ятмағас ятманы инде. Уның бөтә күңеле бушлығын тултырыусы алыҫтағы Ғәфифә ине. Ғәфифәне ул көттө лә, риза булмауынан ҡурҡты ла... Ярҙамсыһы Әбүтаһир аша Мирхажи мулланы саҡыртып, уға шым ғына һорау аша бурыс йөкмәтте.

– Мирхажи муллаға хәҙер үк юлға сығырға! Иртәнән һуңдан да ҡалмайынса Ҡорама кантон Муйнаҡ улы Рәсүлев үҙенең йөҙлөк, иллелектәре менән беҙгә киләсәк. Мулдаш ауылына кереп, бына шундай сәләм хаттың береһен Бикбаш йөҙлөккә, береһен уның ҡыҙы Ғәфифәгә бирергә. – Һәм һүҙ аша әлекке йөҙ башы Бикбашҡа, абыстайы Бәҙерниса менән ҡунаҡҡа, ә ҡыҙҙары Ғәфифәне, табип булараҡ, алайҙарҙың һуғыш әҙерлеге күнекмәләрендә генерал-губернатор менән осрашырға тейешлеге тураһында хәбәр еткерергә ҡушты.

– Әрме жыйнағас, – тип уйланы Ҡолой, – һуғышһыҙ булмай. Һуғыш булғас, һуйыш та, сәнсеш тә, сабыш та була. Тимәк, үлтерелгәндәр һәм яралылар бихисап буласаҡ. Бында ҡалған халыҡтың ашар икмәген ҡайғыртҡан кеүек, яралыларға ла тәүге табип ярҙамын күрһәтеү мотлаҡ. Шуның өсөн һәр алайҙа үҙенең шәфҡәт

туташтары ла, шәфҡәт күрһәтеүселәре лә булырға тейеш бит. Генерал-губернаторға башҡа урындарҙа яралыларға ярҙам күрһәтеү өлгөләрен һис күрһәтмәйҙәр, сөнки ул ярҙам хәҙерге регуляр әрмеһендә лә юҡ кимәлендә. Ә беҙҙә бына бар. Күп, бик күп йөрөнө башҡорт һәр төрлө яуға. Йыраҡҡа ла, яҡынға ла. Нимескә барһаң да, таулыларға ла, дала ҡашҡары – ҡалмаҡҡа барһаң да шул яра, шул ҡан һурҡыуҙары, аяҡ-ҡул өҙөлөүҙәре, һыныуҙары һәм һөйәк тайыуҙары. Һәммәһе лә була. Бына шунда кәрәк тә инде ҡан ағыуын туҡтатыу алымдары.

Яра бәйләү, һынған-тайған һөйәктәрҙе үҙ урынына ултыртып, таяҡ һалып бәйләү һәм башҡа бик күп алымдарҙы яҡшы белеү, өйрәнеү һәм өйрәтер кешеләрҙе бергә туплау кеүек һорауҙарҙы ла ситтә ҡалдырманы Ҡолой. Ул хеҙмәт күптән инде ойошҡан, тик яңы кешеләр өҫтәргә, кем оло, кем кесе дәрәжәләрен билдәләргә һәм үҙҙәрен бер иллелек итеп баш ҡуйырға ла кәрәк-яраҡтарын барларға.

Атъетәрев Дәбриз – абруйлы табип. Ул кешеләрҙе генә түгел, аттарҙы ла күптән дауалай. Һәр төрлө тышҡы йоғонтолар менән бергә дарыу үләндәрен, сайырҙы, ҡайын дегетен, хатта һары, ҡара, аҡ балсыҡтарҙы бик оҫта файҙалана. Йәштәрҙе лә өйрәтә, үҙе лә ҡуллана килде. Уны шул иллелек башы итеп билдәләргә лә ярҙамсы итеп Ғәфифәне ҡуйырға, тигән ҡарарға килде Ҡолой. Ҡыҙ-ҡатынды күрә-тороп ҡул һуғышына индереп булмай. Ирҙәргә ҡаршы һөҙгө йәки ҡылыс менән айҡалаша алмай, уныһы билдәле. Ә бына шәфҡәтлелек хеҙмәте һуғышсыларҙан йә артта килә, йә һуғыш яланына, ни тиһәң дә, алыш һүрелә төшкәс керә. Тимәк, үлем уға хәҙер үк йөҙгә-йөҙ килмәй...

Шул уйҙарын теүәлләп, барлыҡ әкен-сөкөнөн уйлап бөткәс, Ҡолой Дәбризде саҡыртты. Оҙаҡ һөйләштеләр улар Дәбриз менән. Кешеләрҙе берәмләп барланылар. Нисә ат, арба, кейем-һалым, төйөлгән дарыу үләндәре, дегет, бал һағыҙы һәм башҡа бик күп төрлө дауалау нисбәттәре, алымдары иҫкә төшөрөлдө.

Дәбриз яҙыу-һыҙыуға маһир булғанлыҡтан, Ҡолой уға ҡағыҙ биреп, барлыҡ дауалау алымдарын онотмаҫ өсөн яҙырға ҡушты. (Һәм ул яҙма киләсәктә һуғыш яландарын үтеп ҡайтып, халыҡ араһында ҡулдан-ҡулға күсерелеп йөрөнө.) Дәбриз ул ҡағыҙҙы китап фиғелле итеп тегеп, яраларҙан тыш, һыуыҡ тейгәндә, баш ауыртҡанда, эс киткәндә, тән ҡыҙыулығы артҡанда, йүтәлләгәндә һәм башҡа төрлө сирҙәрҙе дауалау, йәки хәлен яҡшыртыу ысулдарын яҙҙы. Бигерәк тә ул үҙенә ярҙамсы итеп Бохара яҡтарынан алдырып, Әбүғәлисинаның ауырыуҙарҙы дауалау алымдарын яҙған «Мең дә бер кәңәш» яҙмаһы күсермәләрен алып уҡып, уны бик уңышлы ҡулланған дауасы Ғәфифә тәғәйенләнеүенә бик тә һөйөндө, мин белмәгән алымдарҙы өйрәтер, тип ҡыуанды.

Ә был ваҡытта Мирхажи мулла күсәре менән ҡушлап егелгән ике туры атта Сыбаркүлгә етеп бара ине. Хәҙер был тирәлә Мейәс һыуының һул яғында, Юлдыбай тауы итәгендә ултырған Көсөк ауылына етергә күп ҡалманы Мирхажи муллаға. Был ерҙәр – Көсөктәрҙең төп ерҙәре. Мейәс йылғаһы тарлауығындағы алтын йыуыу өсөн дә, тирмән тартыу өсөн дә ҡоролған ҙур һыу ҡуласаһын ҡайҙандыр был яҡҡа килгән сауҙагәр Лунгин әле теге ваҡытта уҡ Ырымбур губернаһы һәм Өфө үҙидаралығы урыҫ чиновниктарының туранан-тура ярҙамы һөҙөмтәһендә талап алған ине. Салауат яуы алдынан Мосолов тигәне уны икенсе алпауытҡа, Лугининға һатҡан.

Шул осорҙан Көсөктәрҙең ере икегә бүленде. Уртала Лугинин заводы, Мейәс заводы пәйҙә булды. Шулай ҙа Көсөктәрҙе Мейәс ултырағына терәлеп ятҡан «Ҡара йылға», һуңынан «Черное» тип атап йөрөтөлгән ерҙәренән ситкә, эскәрәк күсенергә мәжбүр итте Лугинин. Көсөктәр менән Лугининдың, һуңғараҡ дәүләт ассигнацияһы банкы менән судлашыу оҙаҡ барҙы.

Ҡара йылға ултырағы, уға терәлеп ятҡан Биҙәртау, Сәскәле, Бикәләр тигән ерҙәр ҡаҙнаға күскәс, Көсөктәрҙең бер тармағы мал-тыуарҙары, бала-сағалары менән Тиләү ырыуы еренә күсенеп китеп, унда яңы Көсөк ауылын нигеҙләнеләр. Уларҙың башҡа сараһы ҡалманы. Сөнки ере өсөн дәғүәләшеү осоронда, Көсөктәрҙең ата-бабалары барын-табындарҙан, ҡыуаҡан ырыуы кешеләре менән 600 кешенән артыҡ һуғышсы йыйып, Мейәс заводын туҙҙырыуҙа ҡатнашыуын дәлиллəп, ғәйеп тағалар. Көсөктәрҙең старшинаһы Мортаза Көсөков, Юлай Аҙналин һәм Тиләү ырыуы старшиналары Муса Килкин, Әмин Ибраев менән 1774 йылда Ҡатау-Ивановск заводына һөжүм итәләр. Сим-Әҫем заводын яндыралар.

Әммә 1798 йылда бик хәрби, һуғышсан рухлы Мортазиндар хәрби сословие – казаклыҡҡа яҙылыуға мәжбүрҙәр. Уларҙы Мейәс тирәһенән, үҙ ерҙәренән ҡыуыу маҡсатында Үрге Урал гарнизонына беркетәләр. Мейәс эргәһе Ҡара йылға ауылынан Үрге Уралға, хеҙмәткә бик йыраҡ, 200 саҡрым булғанлыҡтан, 1774 йылда Михельсон менән Күңгерәү янында һуғышта баш һалған яугир дуҫы Әмин Ибраев еренә, Тиләүҙәргә күсеп китәләр. Сөнки Үрге Урал крепосы улар нигеҙләгән Яңы Көсөк ауылынан 30–35 саҡрым ғына ерҙә була.

Мирхажи мулла, талдан үрелгән касалкаһында, тыныс ҡына юртҡан ике туры ат бышҡырыуына, күсәренең күкрәгенән ҡутарылып сыҡҡан һағышлы, йә күрнисәгә менгәндәй, күтәренке, йә йән өҙгөс һыҡтау ауаздарын тирә-йүнгә таратып, һалмаҡ ҡына тәгәрәгән һәмбелдәүестә бик күп уйҙар, хәтирәләр кисерҙе.

Көсөк ауылы хәҙерге Мейәс заводына егерме саҡрымдай ғына ерҙә ята. Әле кантондар барлыҡҡа килеп, ерҙәр алыш та биреш булып бүленгән осорҙа Ҡолой кантон боронғо үҙ ерҙәрен, Көсөк тип аталған ата-бабаларының ер мираҫы булырҙай тораҡ ерҙәрен дә үҙенә ҡушып яҙҙырҙы.

Ләкин Көсөк батырҙың ҡәбере үҙ торағында, Серәкәй тауы итәгендәге түбәлә булһа ла, улы Амангилде осоронда уларҙың бер ҡауымы, Амангилде торағын ҡалдырып, Мейәс һыуы буйлап түбәнгә юлланды. Ҡартаталары Иҫәнгилде ҡолоҡайҙары туҡтаған ерҙән йыраҡ түгел, Мейәс һыуының һул ярында нигеҙ ҡорҙо. Ауыл ҙурайғандан-ҙурайҙы. Тора-бара Иҫәнгилденең Туғаҙаҡ тигән улы көтмәгәндә ғаиләләре менән туҙышып, Уй һыуының аръяғында үҙ торағында айырылып ҡалғас, улы Йортомбай ҡартатаһы ултырағынан йыраҡ түгел ауыл нигеҙләне.

Ә Көсөк ауылы айырылып ҡалды. Сөнки уртала Мейәс заводы барлыҡҡа килде. Унан тыш, шул тирәләге ерҙәрҙе халыҡ үҙе һатты, тигән булып, ялған ҡағыҙ тултырып, шул уҡ завод хужалары, Лугинин, унан һуң губерна чиновниктары тартып алдылар. Тартып алдылар ҙа, Рәсәйҙең Тула, Мәскәү тирәләренән ҡол крәстиәндәрен, уларҙан башҡа суҡынған сирмеш, уғырҙарҙы килтереп урынлаштырҙылар. Улары яңы ауылдар төпләне. Унан башҡа Сыбаркүл, Күңгерәү нығытмалары ла барлыҡҡа килде. Шулай итеп, Көсөктәрҙең ере икегә бүленде лә ҡуйҙы. Бер өлөшө көнбайышта, Урал армыттары Ҡылысбай, Шыйҙытҡан алдында, бер өлөшө Мейәс һыуының урта ағымы тигәндәй ерҙә.

Мирхажи мулла ана шул Көсөк ауылынан һигеҙ саҡрым самаһы көнбайышта, Ирәмәл йылғаһы буйында урынлашҡан Мулдаш ауылына бара. «Мулдаш» исеме лә – Көсөктәрҙең боронғо ата-бабаларының атамаһы.

Бөтөнләйгә яҡтырҙы. «Сәскәле» тип аталған урманлы тау ҡыраһын үткәс, алда ҙур һаҙлыҡ күренде. Уның ашаһында, оҙон тауҙың көн битендә, итәккә һырышып Көсөк ауылы ята. Көсөктә, Ҡолой кантондың атаһы Йәрмөхәммәттең уртансы бисәһенән тыуған улы Сәғиттең улы Сәйфелмөлөк йәшәй. Ул хәҙер буй еткергән, утыҡҡан. Беләгендә көсө бар. Әммә Сәйфелмөлөктөң Мирхажи муллаға оҡшамаған бер холҡо бар: ул бар нәмәне күрә, бар нәмәне белә. Бәләкәй генә ваҡиғаны ла ҙур итеп һөйләй. Оло түрәләргә һәр саҡ ярарға тырыша. Силәбе алпауытын ҡатынына йәбешкәне өсөн йәһәннәмгә оҙатҡан Ирәлене белеп, урыҫ түрәләренә ошаҡлап, Себер һөрҙөргән ине. Әммә Ирәле Себерҙән ҡасып ҡайтып, Арғужа күленең ҡамышлығында йәшеренеп йөрөгәнен суртан таймаслап торған Сәйфелмөлөк күрә лә тағы ла барып ошаҡлай. Ирәлене хәҙер инде Иркүткә оҙаталар. Ирәленең

ағай-әнеһе Сәйфелмөлөккә теш ҡайрағас, ул Иҫәнгилде ауылын ҡалдырып, Көсөк ауылына, боронғо тораҡтарына күсә.

Сәйфелмөлөк кемгә оҡшап шулай һатлыҡ булғандыр?.. Әммә уның башҡа зат-зәүере лә, уландары ла осло телле лә, һаҡ ҡолаҡ та, төнгө өкө лә булманы.

Мирхажи мулла барыһын да белә. Әммә ул, күңеле менән Сәйфелмөлөккә кергеһе килмәһә лә, һаҡлыҡ һәм боҫҡон хәбәре өсөн уға керергә ниәтләне. Күсәренә ҡайҙа, ҡайһы йортҡа барырға өйрәтте лә, үҙе тирә-йүнде күҙәтә башланы. Әммә алыҫ-алыҫҡа ҡарап булмай. Мейәс йылғаһының ҙур һаҙы ап-аҡ томан аҫтында ине. Ҡайҙалыр, йыраҡ та түгел, торналар торайруҡлай. Эргәлә, туғайлыҡта тышаулы һәм буш йөрөгән йылҡы малы күренә. Ҡояш, ҡып-ҡыҙыл булып, yртыһы Сәскәле арҡалығынан сыҡҡан да, ярты һы сыға алмай, анау ағастарҙың осона йәбешкән.

Ауылға килеп кереүенә уны бер көтөү өрәгәс эттәр ҡаршыланы. Улар, арбалы ат күрмәгәндәй, бер алға сығып, бер арттан абалайҙар. Күрәһең, төн тыныс булмағандыр, әле һаман тынысланалмайҙар, тип уйлауына, күсәре аттарын юнып, таҡта итеп эшләнгән ҡарағас баҫаналы ҡапҡа алдына килтереп туҡтатты. Ҡапҡа әсенән ас яңаҡлы, аяғына тула ҡуныслы сарыҡ кейгән үткер ҡарашлы, йәшелерәк күҙле Сәйфулла килеп сыҡты.

Секрәйеңкерәп ҡарай торғас, ул Мирхажи мулланы, абайланы, буғай.

– Эй! Мирхажи ағай икән дә баһа! Танымай торам. Йә, әйҙә, керегеҙ, – тип ҡапҡаһын аса башлаған ине, уны Мирхажи мулла туҡтатты.

– Йә, кем, Сәйфулла ҡустым! Илтифатың өсөн ҙур рәхмәт. Аттар тороп торһон. Әҙерәк ял итһендәр, тиреләре ҡатһын. Беҙ былай ғына, әҙерәк һөйләшәйек тә, юлаусының юлда булыуы лазым, – тине.

– Йә, улай булғас, күңелегеҙ булһын. Шулай ҙа иртәнге сәйҙән аша атламағыҙ. Иртәнге намаҙҙы бөтөп кенә тора инек, – тине. – Кем, Мәфтүхә, сәй әҙерлә, мулла ағай килгән, юлға ашығалар, тиҙерәк бул, – тип ҡатынына әмер бирҙе.

Мирхажи мулла касалкаһынан төшөп, ойоған аяҡтарын яҙыр өсөн әҙ-мәҙ хәрәкәт яһағанда уҡ ауыл урамына күҙ һалып өлгөргәйне инде. Бер-ике яңы өй төҙөлөп ята икән. Тимәк, балалар буласаҡ. Балалар булһа, йорт-кура ла теүәл булыр. Аллаһы Тәғәлә, уларға иман һәм һаулыҡ бир, тип үҙ алдына доға ҡылды. Ул арала Сәйфулла өйөнә ҡыҫтап саҡырҙы. Өйгә кереп ултырып, был өйгә, өйҙөң хужаларына именлек, аманлыҡ теләп доға ҡылыу менән, Сәйфулла һорау артынан һорау яуҙыра башланы.

– Ҡайҙан киләһегеҙ? Ҡайҙа бараһығыҙ? Кемгә? Ни өсөн?

Әммә Мирхажи ҡарт уның бер һорауына ла яуап бирмәне. Ул үҙе һораша башланы.

– Халыҡ яу тураһында нимә һөйләй? 4-се полк һеҙҙә, Көсөктә йыйылып ойоштороло́домо? Ҡайҙа йәшәнеләр? Нисә һыбайлы булды? Ҡоралдары иҫкеме, әллә яңымы? Кемдәр йөҙ башы булды? Нисә иллелек? Ашау-эсеү тәьминәтле булдымы? – Тағы әллә күпме шундай һорауҙар биргәс, Сәйфулла Мирхажи мулланы һуғыш һорауҙары менән йөрөйҙөр, тигән фекергә килде.

– Бикбаш атҡа атланғанмы? Йөҙ башы булып килдеме? Мулдаш ауылы халҡы хәҙер 4-се кантонғамы, әллә 5-се кантонғамы ҡарай? 4-се полкта табиплыҡ, унлыҡ, егермелек бармы? – тип тә һораны. Шунда уҡ Сәйфулланың хәбәренән, ауыҙына боҙ ҡапҡандай, шымып ҡалды.

– 4-се полкта табиплыҡ хеҙмәте булды. Уға етәксе итеп Златоуста лекарҙар мәктәбен бөткән Ғәфифә тигән табибә яҙылғайны. Киткәнме, юҡмы, уныһын белмәйем, – тип һүҙен туҡтатты. Унан һуң икеләнгән кеүек бер аҙ торғас: Ул табибәне 18-се алайға яҙғандар, тигән дә хәбәр бар. Әгәр шул һүҙ хаҡ булһа, ул әле китмәгәндер. 18-се алай, әле генә һуғыш күнекмәләрен үткәреп бөтөп, яуға китергә әҙерләнә. Унда беҙҙән дә байтаҡ халыҡ бар. Кантондарҙың сиген, өйәҙҙәрҙең ерен бер туҡтауһыҙ үҙгәртеп тороу һөҙөмтәһендә, беҙ әлегә саҡлы ҡайһы кантонға ингәнебеҙҙе лә белмәнек, әллә 4-се, әллә 5-се кантонға.

– Кем яҙған һуң? Ҡайһы олоҫ рәйесе яҙған? – тип һораны Мирхажи.

– Туңғатар олоҫоноҡо, беҙ хәҙер шунда ҡарайбыҙ шикелле. Өйәҙе Өстамаҡта, тиме? – тип ярым икеләнеүле хәбәр һөйләне Сәйфулла.

Сәйфулланың был хәбәренән Мирхажи мулла, Көсөк ауылы хәҙер Троицк-Өстамаҡ өйәҙенә керә икән, тип уйланы. Сөнки былтыр, 1811-ҙә, Һижриның 1226-һында, тағы ла ревизия тип аталған барлау осоронда ерҙәрҙе лә бүлгеләү, ауылдарҙы ла, олоҫтан олоҫҡа күсереүҙәр булған ине. Ул ревизияла ниңәлер башҡортта 4 йәшлек айғыр-ҡонандар нисәү, нисә десятина бөртөклөләр сәселә, ғаиләлә 16–20 йәшлек нисә ир-егет бар, ҡайыш, күн эшләү, тәгәрмәс бөгөү, сана, арба эшләүсе ҡоролмалар һәр ауыл һайынмы, әллә бер нисә ауылға берәүме булыуы тураһында ла мәғлүмәт йыйғандар ине. Күрәһең, юҡҡа булмаған, губернатор һуғыш сығасағын белеп, ундай иҫәп-хисапты алғандыр, тип уйланы Мирхажи мулла.

– Ә Бикбаш, Бикбаш үҙе киттеме, әллә ҡалдымы? Йәше лә оло бит инде, – тине ул.

– Юҡ, уландары ебәрмәне, буғай. Өйҙә булырға тейеш. Хәҙер ҡайҙа инде уға өҙәңгегә аяғын күтәреп баҫыу?

Сәйфулланың был хәбәренән һуң Мирхажи мулла үҙенең юлы уңышлы сығыуына тамам инанды.

– Ә һин, һине ҡайһы алайға беркеттеләр?

– Мин шул, үҙебеҙҙең 18-се алайҙа. Минең менән бергә беҙҙән байтаҡ кешеләр бар. Ағайым Айҙарәле, ҡустым Айҙарбәк, уларҙан башҡа ауылдан 7–8 кеше. Әле 4-се алай менән дә байтаҡ кеше китте. Арбалыларҙың бер нисә кеше Һөләймәндән, Мулдаҡайҙан, тиҙәрме, Оло Иҙелгә еткәс, кире борғандар. Аръяғына арба кәрәкмәй, бөтә әйберҙәр тик артмаҡ аттарҙа ғына була, тигәндәр. Беҙ һуңлап сыҡһаҡ, ҡышҡа, сана юлына ҡалырбыҙ микән? Бөтә кеше юлға әҙерләнә. Ҡаҡ, ит, ҡорот, сәйгә, дарыуға үлән япраҡтары тегәбеҙ тоҡсайҙарға. Кантон башы һөңгө, уҡ остары таратырға вәғәҙә иткән, тигән дә хәбәрҙәр йөрөй. Ә беҙ көн дә әмер көтәбеҙ йөҙ башынан. Улар үҙҙәре иң алда ҡайҙалыр, һеҙҙең яҡҡа барып, губернаторҙы күреп киләләр тигән хәбәр бар.

Һеҙҙең яҡҡа һәм Силәбегә губернатор килә, тип үткәндә Баязит йөҙ башы һөйләп китте. Губернатор беҙҙең һуғыш күнекмәһенә, Әүеш буйына килеп өлгөрә алмаған. Әле кантондар һәм ҡәлғә-нығытмаларҙа нисек ғәскәрҙәр ойоштороlғанын ҡарап йөрөй икән. Тиҙҙән ҡырау төшөр инде. Үләндәр ҡыу, һутһыҙ булып ҡалыр. Ҡар төшөргә лә күп ҡалмаҫ. Йыраҡ юлда аттарға ауыр буласаҡ. Һеҙҙең кантонда һуғыш күнекмәһе ҡасан була? Ул өйрәнеүҙәр үтер инде... Унан һуң булыр инде ул юлға сығыу, – тип тынып ҡалды Сәйфулла.

Шул арала киң урындыҡҡа Сәйфулланың ҡатыны Мәфтүхә ашъяулыҡ йәйеп, тиҙ генә ҡаймаҡ, арпа ононан бөкрөштәр, әжегәй, ҡоймаҡ, бал, ҡаҡ килтерҙе.

Сәй эсеү оҙаҡ дауам итмәне. Күсере менән яҡшы итеп ризыҡланып алғас, инде ирекһеҙләнә башлаған аттарына ултырып, Юлдыбай менән Ҡыйҙыш тауы араһынан үткән юл менән Убалы йылғаһы аша, Ҡара Сура йәки Төлкөсура батыр ҡәберлеге аша, Мулдашҡа етте.

Мирхажи күп ер-һыуҙарҙы, сахра-ҡомлоҡтарҙы, кеше ашаусы балыҡтар йөҙгән диңгеҙҙәрҙе, арҡаларында килбәтһеҙ аса ҡуптыҡтар йөрөткән, тәртипһеҙ әҙәм кеүек төкөрөшкән ҙур хайуандарҙы ла күргән. Мирхажи мулла Ҡәғбәнең үҙенә барып, уның бөтә йолаларын үтәп ҡайтҡанда, Ҡаф тауы буйында йәшәгән Ҡарасәйҙәрҙә лә ҡолон йәшәр ваҡыт үткәрҙе. Ул көндәр тай ғүмеренә менгәшә башлап, үҙ иленә ҡайтҡас, Байғазы ауылының ҙур мәсетендә бөтә халыҡ алдында уның «Хажилыҡ» атамаһын таныныlар.

Һәр бер ҡәрйәнең имам-хатибын, мөдәрисен белһә лә, ул йөҙ башы Бикбаштың өйөн белмәй ине. Рәхмәнғол үҙәге менән килеп, Ирәмәл йылғаһы аша һалынған тар, мөшкөл генә күпер аша сы-

ғып, ниңәлер аттары һулға тартты. Аттар ҙа һәр сағ изгелек, көндәлек тормоштағы әхлағи бурыс-ҡануниәтен һәр кемгә көн һайын тәстиҡләүсе был йорт ҡаршыһына үҙҙәре килеп туҡтанылар.

Өйлә намаҙына халыҡ мәсеткә йыйыла ине. Улар Мирхажи мулланың өйлә намаҙына Мулдаш мәсетенә килеүендә ҙур мәғәнә һәм мөһим мәғлүмәт көтәләр ине. Уның килеүен алдан берәү ҙә белмәне. Әммә бындай семәрле касалкала, суртан кеүек шыма көр аттар егеп, күсер менән килгән мулланың халыҡ йыйылған ваҡытҡа ҡапыл килеп төшөүе үҙе генә лә күп фекер уятырлыҡ ине. Мирхажи мулланың йомошо бөтөнләйгә башҡа юҫыҡта булһа ла, ул сер сисмәне. Иңенә төшкән хажилыҡты еренә еткереп үтәү бурысын үҙенә үҙе ҡуйҙы. Касалканан төшөп, өҫ-башын ҡағып-һуҡты ла уны көтөп торған, һәр бер кеше менән, ҡәбиленә (сортына) ҡарамай, ике ҡуллап күрешеп сығып, доға ҡылғас, яй ғына мәсеткә атланы.

Әле мәсеткә кермәҫ борон эштең бындай йүнәлешкә бороло-уын көтмәгән Мирхажи халыҡ алдында ваҡиғаларҙың бик шомло булыуын үҙенсә аңлатырға ҡарар итте. Шул телмәрем, шул вәғәзем мине Бикбаш йөҙбашының өйөнә килтерер, тип ҡарар итте.

Мәсеткә кергәс, унда ауылдың имам-хатибы, Ураҙайҙар тоҡомо Хәйретдин мулла ҡаршы алды. Кәрәкле йылы тойғо-миһерҙе үтәгәс, Хәйретдин мулла Мирхажиға мәсеттең михрап урынын күрһәтеп, һүҙ бирҙе.

Башта улар бөтәһе лә өйлә намаҙын уҡынылар. Намаҙ тамам булып һәр кеше иркенләберәк үҙ урынын алғас, Мирхажи мулла барлыҡ халайыҡты тағы ла тәбриклəп сәләмләгәс, хәҙер инде, бөтәһенә лә билдәле һуғыш хәбәре килеүен бик тәьҫирләнеп, күп ир-егеттең ғаилә, балаларын ҡалдырып тағы ла яуға китеүен һәм китәсәген, күңеле төбөндәге һырҡырау өндәре сығарып, әсенеп һөйләне.

– Рәсәйҙең беҙ һәм беҙҙең ата-бабаларыбыҙ белгән барлыҡ быуаты һәр сағ һуғыш менән үткән. Бөгөн дә шул. Һәр сағ һуғышы булмаҫ ине. Күрәһең, уның батшаларының сәйәсәте шулай. Күршеңә насар һүҙ әйтмәһәң, төртмәһәң, ул һиңә ниңә һуҡһын? Һуҡҡас, ул да, күрше лә, яуапһыҙ ҡалмай. Шунан китә һуғыш. Кеше мөнәсәбәте ил мөнәсәбәтенә тиң. Үҙең нисек, күршең дә шулай. Тик бына батшаларҙың яһиллығынан халыҡ яфа сигә. Берәүҙәре сит ерҙә ҡан түгә, башын һала. Икенселәре яуҙағыларҙың өлөшөн эшләп, бында интегә, тир түгә... Ағай-эне, мине, мулланы, дөрөҫ аңлағыҙ. Мин ғәли йәнәптәре, олуғ падишаһыбыҙға һүҙ тейҙереп, әйтмәйем. Әммә хәкиҡәт бар. Падишаһтар була ла китә. Беҙгә үҙ халҡыбыҙҙы, үҙ балаларыбыҙҙы ҡурсалау мәсьәләһе

бөгөн алға сыға. Нимесе лә, француҙы ла Рәсәйгә күпме яу асһалар ҙа, аҡ ойоҡтарын, еңел кәләпүштәрен кейеп, күкрәктәренә арҡыс-торҡос ебәк уҡа бауҙар тартып, беҙгә, Уралға килеп етә аласаҡтары юҡ. Йә көрткә, йә батҡаҡҡа батып, ялан аяҡ ҡаласаҡтар. Улар шул Мәскәү, Питербур тирәһендә тапаныр-тапаныр ҙа, һыуыҡ төшһә, йылы илдәренә үҙҙәре ҡасырҙар. Бер яҡтан ҡараһаң, беҙгә яуға ҡуптарылыуҙың хәжәте лә юҡ кеүек. Кемде, кемдән һаҡлайбыҙ беҙ? Бында бер дәүләт баҫҡысында торғандар икенсе бер дәүләт баҫҡысында тороусылар менән яғалаша. Ә түбәндә, ерҙә тороусыларға, ни хәжәт уларҙың үҙ-ара төрткөләшеүенән? Әммә улар түбәндә тороусыларҙы йәлеп итәләр. Түбәндә тороусылар, ил һаҡлайбыҙ, тигән булып, ғәмәлдә, баҫҡыста тороусыларҙы һаҡлайҙар. Нишләмәк кәрәк һуң, бер илдә, бер батшалыҡта йәшәгәс, шул батшаның мәнфәғәтен яҡларға ла, һаҡларға ла мәжбүрбеҙ. Яуға тигәс, яуға инде. Уны хәҙер туҡтатып булмай.

Әммә ҡалғандар, бөгөн булған мал-тыуарҙы барлап, ишәйтеп, киләһе яҙға бөртөклөләрҙең сәсеү майҙанын тарайтыу түгел, ә киңәйтеү тураһында уйларға кәрәк. Яуға киткән аттар урынына эш аттарын бөгөн әҙерләй башлау лазым. Төп мәсьәлә – балалар ас, ҡатын-ҡыҙ яланғас, һыуыҡ өйҙә ултырмаһын...

Мирхажи мулланың был вәғәз һүҙҙәргә сит ауылда, сит мәсеттә бик үк хаҡы булмаһа ла, үҙ ерендәге, үҙ кантонлығы ауылдарында һөйләгән кеүек күрһәтмәле лә, бойороҡ ауазы ла халыҡҡа дөйөм бурыс булып өҫтәренә ятты. Был һүҙҙәрҙе ҡайҙа һөйләһә лә, әйлеләрҙәме, ҡатайҙарҙамы, барындарҙамы, ул хаҡ кеүек ине.

Мирхажи мулланың һүҙҙәрен ҡеүәтләп, Йәнтимер мулла ла шул юҫыҡта һүҙ йөрөттө. Халыҡ мәсеттән намаҙ уҡып, күңел бурысын үтәп ҡайтманы. Халыҡ мәсеттән ҙур яуаплылыҡ, бурыс йөкмәп ҡайтты. Ҡайттылар ҙа, һәр кем үҙ «әйәренә» ҡарап арҡаһына йөк һалды. Кемдер ҡышҡылыҡҡа бесән ташый, кемдер утын килтерә, кемдер Әүендә ашлыҡ көлтәһе һуға, аш иләй. Кемдер өйөн нығыта, яҙғылыҡҡа орлоҡ әҙерләй. Халыҡ таралышҡан арала Мирхажи мулла Бикбаш янынан килеп, уны айырым сәләмләне лә, уға Войсковой старшина Ҡолой кантон Көсөкөвтан аманат килтереүен әйтте.

– Аманат миндә, – тине. Был һүҙҙәрҙән һуң Бикбаш үҙенә бик үк таныш булмаған – был мулланы өйөнә саҡырырға мәжбүр булды.

Бикбаштың йорто мәсет янында, тәҙрәләре менән Ирәмәл йылғаһы аша Билән үренә ҡарап ултыра. Өйгә кереп, урын алып, ҡайҙан кем тарафынан юлланыуын әйткәс, Мирхажи мулла ҡуйынынан сығарып, Бикбашҡа төргәк эсендә хат тоторҙо. Төргәкте таратып, ҡағыҙҙы башлы-артлы әйләндереп ҡараны ла, уҡый

алмағас, ҡарсығы Бәҙернисаны саҡырҙы. Йәнәш бүлмәлә аш-һыу менән мәшғүл булып йөрөгән ҡатыны, ишек шаршауы аша башын тығып ҡараны ла,

– Ни булған, бабай?– тип һораны.

– Бына, Мирхажи хәҙрәт ҡағыҙ килтергән. Күҙ алмай, уҡып бирсе, – тине.

Бүлмәнән инәһе урынына ҡап-ҡара оҙон сәсле, ҡара күҙле, түштәре ике бүлкәт булып ҡуптайып торған, аяғына йомшаҡ итек, сәскәле зәңгәр күлдәк кейгән бик мөләйем йәш ҡатын килеп сыҡты ла, атлаған аяҡ тауыштарын да ишеттермәй, йомшаҡ ҡына килеп, атаһының ҡулынан ҡағыҙҙы алды.

Был ҡатындың мөләйемлегенә, матурлығына иҫе китеп ултырған Мирхажи мулла, иҫен йыйып:

– Бына, бына... Бынығы һеҙгәлер, моғайын, – тип ҡатындың исем-шәрифен дә һорап тормайынса эске түш кеҫәһенән икенсе төргәкте сығарҙы.

Аптырабыраҡ ҡалған йәш ҡатындың шунда уҡ йөҙөнә алһыулыҡ йүгерҙе, бит алмалары ҡыҙарҙы. Шулай ҙа, бик уңайһыҙланып булһа ла, һаҡ ҡына Мирхажи мулланың ҡулынан билдәһеҙ төргәкте алып, шәп-шәп атлап, кире инәһе янына кереп китте.

Донъя, көнкүреш, әлеге лә баяғы һуғыш тураһында, полктар төҙөү, һуғышҡа өйрәнеү-күнекмәләр, губернаторҙың килеүе тураһында һөйләшеүҙәр барған мәлдә аш-һыу өлгөрҙө. Киң таҡталарҙан ҙур итеп эшләнгән урындыҡҡа сәскәләр, биҙәктәр сигелгән ашъяулыҡ йәйелде.

Ашъяулыҡ өҫтөнә ағас алдыр менән өйөп ит, бишбармаҡ, ҡаҙылыҡ, буҙа, ҙур-ҙур һыныҡтарға һындырылған көлсә икмәк ҡуйылды. Көсөк ауылындағы ашыҡ-бошоҡ сәй эсеү Мирхажи мулланың танһығын ҡандырмаған ине. Шуға ла ул һыуһап килеп, Бикбаштың тәүге тәҡдименән һуң уҡ буҙаға ҡул һондо. Бер тын алыуҙа ҙур туҫтаҡ буҙаны һемергәс, Мирхажи мулланың тәндәре яҙылып, тауышы ла асыла төштө кеүек. Бикбаш уға һынаулы ғына ҡарап ҡуйҙы, әммә бер һүҙ ҙә әйтмәне.

Шул арала ҡатыны Бәҙерниса килеп керҙе. Бикбаштың һүҙһеҙ ҡарашына ул: Ғәскәр старшинаһы кантон Ҡолой Көсөкөв үҙеңде ҡунаҡҡа саҡыра. Иртәнән һуңға мине лә алып килеүеңде һорағаң.

– Ә-ә-ә... үткәндә килеп киткән Ҡолоймо? Йәрмөхәммәт улымы?– тип һораны Бикбаш.

Бәҙерниса урынына бөтә тәне сымырлап ултырған Мирхажи мулла яуап бирҙе:

– Эйе, эйе. Войсковой старшина, үҙе саҡыра. Генерал-губернатор ҙа килә икән. Оломон тип торма. Ундай ихтирам һәр кешегә әләкмәй, боронғо йөҙ башы.

– Ниңә мин боронғо булайым?.. Хәҙер үк өҙәңгегә баҫа алам. 4-се полк Урағай башында уҡ яуға китте. Алтынтамаҡта төп жыйналыу булды. Унда һеҙҙең 5-се кантондан һәм беҙҙең 4-се кантон егеттәре китте. Мин урыҫса белгәс, үҙ йөҙләгөмдә алып барып тапшырҙым. Яуға алманылар. Ҡартһың, тинеләр. Ил ҡурсалауға, ер һаҡларға ҡартлыҡтың ни хәжәте бар... Ереңде, халҡыңдың мәнфәғәтен олоһо ла, кесеһе лә һаҡларға бурыслы!

– Шулай, шулай! Дөрөҫ әйтәһең, кем, Бикбаш ағай. Бына Ҡолойҙо, кантонды әйтәм, булмағанды бар итеп, бөтә халыҡты төйнәп, ойоштороп, шул ойошҡан көс менән барлыҡ ғәләмде ас итмәй тотоп килә бит. Ҡолойҙоң үҙенә ни күп кәрәкме? Әле мин уйлап йөрөйөм, бында, Мейәс һыуының ярына нигеҙ ҡорғас, тик яҡын тирәләге ауылдарға ғына өс мәсет төҙөттө. Мәктәп мәҙрәсәһендә ир балалар ҙа, ҡыҙ балалар ҙа һабаҡ ала, уҡырға, яҙырға өйрәнәләр. Ислам тәғлимәтен дә, донъяуи ҡанундарҙы, фәнни нигеҙҙәрҙе лә өйрәнәләр. Яҙҙан алып көҙгә тиклем халыҡ бергә эшләй, үҙ ерҙәрен күмәклән һөрәләр, тырматалар, сәсәләр. Быйыл яҙ ҡарап торам, ҡырҡ ете һуҡа һөрөп килә. Һәр һуҡаға икешәр ат егелгән, бер-бер артлы киләләр. Бер үткәндә ете ҡуһай ерҙе аҡтаралар. Күҙ күреме ерҙе бер көндә һөрҙөләр ҙә сыҡтылар. Икмәк үҫкәс, уны теүәл итеп көлтә бәйләүе, ташыуы, һуғып алаһы бар. Халыҡ ни, күмәкләгәс, уны ла һә тигәнсе эшләйҙәр. Берәү ҙә ҡышҡылыҡҡа икмәкһеҙ ҡалмай. Көҙ булдымы, һәр илле башы, йөҙ башы, үҙ кешеләренең көнкүрешенә ҡарап, ғаиләһенең һанын иҫтә тотоп, үҙҙәре өләшәләр. Өләшеүгә кантон ҡыҫылмай. Киләһе яҙға нисә бот орлоҡ кәрәк буласағын ул үҙе алдан хисаплап ҡуя. Нисә бот халыҡҡа ашарға, ҡыш бәрәстәргә, ҡолоҡайҙарға. Нисә бот бөртөклөнө һатырға һәм кәрәк-яраҡҡа алмаштырырға. Быларҙы бөтәһен дә кантон белә...

Әммә Мирхажи мулла Бикбаш ҡартҡа Мөхәмәтҡолой кантондың иҫәп-хисап менән шөғөлләнеүсе дүрт-биш кешеһе барлығын һәм улар араһында Ҡолойҙоң икенсе бисәһе Зөләйхәнең билдәле бер урын алып тороуын өндәшмәне. Кантон башы яҙған хаттың йөкмәткеһен ире Бикбашҡа еткергән Бәҙерниса сығып киткәс, Мирхажи мулла, һүҙен дауам итте:

– Һәр йөҙлөктөң тәғәйен үҙ йылҡы өйөрө бар. 100 ат менге булһа, 100 йәки 50–70 артмаҡ ат. Быныһы походҡа йә линия хеҙмәтенә барғанда. Мал беҙҙә, кантондыҡы булып иҫәпләнһә лә, ысынбарлыҡта һәр йөҙлөктөкө. Берәүҙе лә ситкә ҡаҡмай кантон. Шуға ла уны «Түрә» тип кенә йөрөтәләр. Күбеһе уның ысын исемен дә белмәй. Түрә! Бигерәк тә йәштәр өсөн... Биш тирмән бар. Бишеһе биш йөҙлөктөкө. Ҡыш онға, ярмаға аптырамайбыҙ. Түрә үҙе халыҡтан артырҙай тәғәмде заводтарға килешеү менән бирә. Уларҙан кәрәк-яраҡ ала. Һеҙҙә нисектер, Бикбаш ағай, беҙ-

ҙә әле булһа тимерлектәр асыҡтан-асыҡ эшләп китә алмай. Бер башҡорт быуаты элек Рәсәй батшалығы башҡортто үлем язаһы менән ҡурҡытып, янап, тимерлектәрен эшләтеүҙе тыйған була. Шул ҡараҙы һаман киреҙ һүтә алмайҙар. Башҡортҡа тимер һуғыу кәрәклеген һәм был уларҙың үҙ эше икәнен бөтәһе лә белә. Тик, был һорауҙы кәрәгенсә хәл итеүҙе талап итеп, берәүҙең дә батша алдына баҫҡаны юҡ. Тимер менән эш итмәгәс, халыҡ араһында тимерселәр ҙә һирәгәйҙе. Һирәгәйҙе генә түгел, тимер оҫталары бөттө тигәндәй. Ә ниндәй ҡәмәлле, оҫта, бик оҫта ҡарттайҙар бар ине! Һүрелде тимер эше башҡортта. Батша башҡортто өс быуатҡа артҡа ҡалдырҙы. Халыҡтың үҫешен, ғәмәл баҫҡысының күтәрелеүен, тимен, ҡем, Бикбаш ағай... Хәҙер бит, Бикбаш ағай, халыҡта һандал, тимер эшкәртерлек төрлө ҡорамалдар ғына түгеле йүнле һәлмәкле балға ла юҡ бит. Ҡыуалдылар бөтөнләйгә күренмәй. Әнә шулай бер башҡорт быуаты әсендә, Ғәли йондоҙоноң бер кереп сығыуы осоронда, күпме һөнәр һәм һөнәрселәр юғалттыҡ. Бөтә ерҙә тимерлектәрҙе аҫкан хәлдә лә, Бикбаш ағай, нәғәз оҫталар килеп сыҡҡанса, ун бишегерме йыл кәрәк буласаҡ. Әле бит емерелеп, емерттереп бөткән мәғдән мейестәрен тергеҙеү мәсьәләһе тора. Белмәгән кеше уны эшләй ҙә алмай. Эшләһә лә, әккәһенә килтерә алмай. Бына бит ул, өҙөлгән епте табып ялғау нисек ауыр. Ялғаһаң да, төйөнһөҙ бәйләп булмай. Ә төйөнлө бау тормошта ла, ҡороҡҡа ла уңай түгел...

Бер аҙ һүҙһеҙ, өндәшмәй ашанылар. Һүҙгә Мирхажи мулла кеүек әүәҫ булмаған Бикбаш йә хуплап, йә риза уҡ булмауын белгерткән фекер әйтмәне. Әйе лә һә тигән ауаздан башҡа тауыш-һүҙ сыҡманы. Тынлыҡты мулла боҙҙо,

– Үткән йомала һеҙҙә лә ғәскәр күнегеүҙәре үткән, тип ишеттем. Нисек, уңай сыҡтымы? Кемдәр килде? Ярыштар булдымы? – тип һораны Мирхажи.

– Булды. Мин барҙым. Кантон Ҡорама Итжыймаҫ ейәне үҙе саҡырҙы. Әле минең урынға йөҙ башы итеп тәғәйенләнгән Баязит ҡаһарман үҙе лә килеп әйтеп китте. Халыҡ бик күп булды, барлыҡ тирә-йүн йыйылды. Ауыл-ауыл булып арбала ла, һыбай ҙа килгәндәр. Фәләмәт тамаша булды. Ике алайға бүлерлек булған 18-се тип аталған полк, икегә бүленеп, «Ҡот сабыу» йолаһын күрһәтте. Ул һөңгө ташлау, ҡылыс менән сабыу, уҡ атыу... Һәммәһе лә бик мәргәнлек һәм һоллолоҡ күрһәтте. Йәштәр үҫеп тора бит. Беҙҙең осор яугирҙары хәҙер олоғайып бөттө тиерлек. Ә ҡорал ҡулдан ҡулға күсә килә... Шулай ҙа, тимен, был Рәсәй һуғышһыҙ тора алмай. Унда ла һуғыш, бында ла һуғыш. Әлегә ҡәҙәр Рәсәйгә баҫып инеүсе булманы бит. Тик сик буйы

ыҙғыштары булды. Ә бына был... Бынығы етди күренә. Наполеоны ла етди кешелер... Етди булмаһа, бындай яу күтәрә алмаҫ ине...

Бына шундай ярым сәйәси, ярым тормош ағышы мәсьәләләрен һөйләшеп ултырҙылар. Тышта аттарын әллә тыйып, әллә һөйөп һөйләшкән күсеренең тауышын ишеткәс, Мирхажи мулла өй хужаһына төп мәсьәләне әйтмәксе булды.

– Минең килеүем, Бикбаш ағай, оло ниәтле. Ысын күңелдән изге уйҙар, яҡшы теләктәр менән юл алып килдем һеҙгә. Бөгөн белмәһәң, иртәгә белерһең барыбер. Мин ҡайтып киткәс, йөҙ һорау алдында тороп ҡалғансы, бында саҡта мәсьәләне уртаға һалып һөйләшәйек. Аңлашылмаған һорауҙар булһа, бергәләп аңлашырбыҙ.

Төп һүҙҙе нимәнән башлайым икән, тип уйланғандай, өҫкә, һайғаҡҡа ҡарап ултырҙы ла һүҙ башланы Мирхажи мулла.

– Бикбаш әфәнде, – тип рәсмисәрәк һүҙ башланы ул. – Һеҙгә мин ике хат алып килдем. Береһе һеҙгә, нөсхәһен Бәҙерниса абыстай еткерҙе үҙегеҙгә. Икенсе хат һеҙҙең ҡыҙығыҙ Ғәфифәгә. Бәҙерниса абыстай уның да йөкмәткеһен беләлер. Ҡыҙы менән сер һөйләшәләрҙер әле. Ике хатты ла үҙ ҡулдары менән войсковой старшина, кантон үҙе яҙған. – Бикбашҡа йоғонто яһар өсөн ул «войсковой старшина, кантон» һүҙҙәренә баҫым яһап, махсус рәүештә ҡулланды.

– Мөхәмәтҡолой ҙур түрәләр алдында ла бик абруйлы. Һүҙе үтә. Халыҡ араһында ла абруйы көслө. Бер нисә олоҫ халҡына елямғыр тейҙермәй, ойоштороп, ас-яланғас итмәй тота. Хәҙер тормош ғәскәри тәртиптә булғас, бөтә халыҡ та ғәскәри хеҙмәттәге кеүек. Һәр ғаиләнең бурысы, йөкләмәһе бар. Кемдәрҙер тәғәрмәс, дуға, сана бөгә, арба эшләй. Кемдәрҙер ҡайыш, күн эшләй, шунда уҡ итек тегәләр. Кемдәрҙер быйма, кейеҙ баҫа. Эште халыҡҡа кантон үҙе бүлеп биргән. Мал ҡарау, иген үҫтереү, оҫталыҡ эштәре бөтә бүленгән беҙҙә. Башҡа ерҙә, бындай берҙәмлек бер ҙә һиҙелмәй бит. Һеҙҙә лә ул, Бикбаш әфәнде, ойошоп уҡ эшләйҙәр, тип әйтмәҫ инем. Кантонығыҙ сит ырыу кешеһе түгелме? Шулайыраҡ тойола, бик үк үҙ итеп бармай кеүек...

– Ул яғы ла барҙыр инде, хәҙрәт, – тип һүҙҙе дауам итте Бикбаш. – Ҡара-табындар беҙгә был яҡтарға, Буғай хаким осоронда ер һорап, Ҡарабаштың аръяғынан, Йүрмә тауы буйынан килгәндәр. Уларҙың бер өлөшө көнбайышҡа күсеп китеп, урыҫ батшаһына баш һалғас, бер өлөшө Бүре солтан менән беҙгә килеп, дөйөм жыйында ер һорағандар. Беҙҙекеләр уларға Яйыҡтың аръяғынан, Мышағыр тауын уратып ер биргәндәр. Ҡорама кантондың атаһы Муйнаҡтың ҡарт атаһы Итжыймаҫ ул осорҙа әле донъяла булмай. Бүре солтандың кешеләре килгәс, Ҡәйеп улы Ҡораманың малайы Ураҙҙың, ауылының осонда бер аҙ йәшәйҙәр.

Бүре солтандың кешеләре менән Ураҙҙың кешеләре ығы ла зығы килгәс, Бүре солтан уларҙы Ҡандыбулаҡ йылғаһының ярына күсерергә мәжбүр була. Ауылдың, Ураҙҙың бирге осо Бүре аймағы булып ҡала. Әнә шул Бүре солтандың нәҫел-нәсбәте ул Итжыймаҫ...

Шул Итжыймаҫтың оло бисәһенән Рәсүл тыуа. Бик ҡарыулы кеше була. Ҡалмаҡтар менән алышта ҡаһарманлыҡ күрһәтә. Ҡылыс һуғышында бер ҡалмаҡ та уға ҡаршы тора алмай. Ауылды үҙе нигеҙләп ҡышлау итеп ҡорған, ҡағыҙға үҙ исеме менән теркәтә алған. Һеҙҙәге кеүек бер төптән бер хужалыҡ, тигәндәй, йәшәү беҙҙә лә булыр ине ул. Беренсенән, Оло Муйнаҡ балалары менән Итжыймаҫ Муйнағы араһында ер өсөн ғауға сыға. Ер Буғай хакимдың улы Оло Муйнаҡ балаларыныҡы. Ә Рәсүл Муйнағы бында үҙе килмешәк, ҡара-табынлы. Оло Муйнаҡ балалары – барындар, уларға ер бирмәйҙәр. Ә Рәсүл Башҡорт ханына ҡаршы һуғышып та, тағы аҙаҡ, ниндәйҙер бер походта булып, урыҫ хакимиәте тарафынан тарханлыҡ ала.

Барындар биргән ер, Аят йылғаһы Уй боролмаһынан казактар тарафынан ҡыҫырыҡланғас, Рәсүл, тарханлыҡ дәрәжәһе менән баҫым яһап, улын Муйнаҡты беҙҙең яҡҡа ултырта. Ул саҡта Оло Муйнаҡ балалары Әсән балалары менән йәнәш, Уй һыуының һул яғында, Әсән кисеүе тирәһендә йәшәгәндәр.

Муйнаҡ Рәсүлев Уйҙың һул яғына килеүен килә, әммә ҙур ғауға башлана. Ғауға барынлы сотник Яуымбай менән ҡара-табынлы Рәсүл араһында бара...

Ә Ҡорама – Муйнаҡ Рәсүлевтең улы. Ул Ҡаф тауы һуғышында бик тәүәккәллек күрһәтеп, урыҫ командирҙарына оҡшап ҡала. Шунан уны кантон начальнигы итеп ҡуялар. Былай ул, малай кеше булараҡ, насар түгел. Беҙгә яманлығы тейгәне юҡ. Әммә һеҙҙәге кеүек халыҡты бер төптән итеп ойоштора алмай, күрәһең. Сәсеү ерҙәре лә алаҡ-йолаҡ, бер бөтөн ер түгел. Иген майҙанын бер ергә туплаһалар, бергә эшләү, үҙенән үҙе ойошор ине лә ул. Һәр йөҙлөк үҙ ерен эшкәртһә, күршеһенә лә ярҙамға килер ине. Беҙ уны, Мирхажи хәҙрәт, белеп ятабыҙ. Бына әле һарысай башы етеүгә, бер алайҙы яуға оҙаттыҡ. Ураҡайҙың аҙаҡтары ине. Ул алайға, урыҫтарса полкка, 4-се һан бирелгән. Ҡайҙа барып яуға ингәндәрҙер, әлегә бер хәбәр ҙә юҡ. Ир уртаһындағы бик ҡаһарман кешеләр ал бирмәҫ йөрәк ҡонан-дүнәндәрҙе менеп киттеләр. Юлдары еңеүле булһын инде...

Әллә Мирхажи муллаға ҡабаланырға кәрәк тигәнде ишаралап, әллә төнгө юлға сығыуҙан шик-шөбһә һиҙеп, күсер аттарын тынысландырғандай, һөйләнә лә һөйләнә. Быны һиҙеп ултырған Мирхажи мулла Бикбаштың хәбәрен ҡеүәтләп, йә ул мәғлүмәттәрҙе бик үк белеп еткермәүен раҫлап, күберәк:

– Әлләәә, әлләәә, – тип, һорау аралаш һүҙҙәрен тәстиҡләп ултырҙы.

– Бәлки, ойошоп бергә әшләп тә китерҙәр ине, башҡа ауылдарҙағы хәлле кешеләр уға ышанманылар. Шыуғыр була Муйнаҡ Рәсүлев. Үҙ фекере лә ныҡ булмай. Хәҙер вәғәҙә итә, файҙаһы булмаһа, хәҙер үк үҙ һүҙенән баш тартҡан. Һәр саҡ ыңғай һыпырған, ыңғай шыҡырлаған. Шуға ла уға «һайыҫҡан» тигән ҡушамат таҡҡандар. Улы Ҡорама ла шулайыраҡ... мәсьәләне бик наҡ ҡарай.

Ҡашҡа тәкә тигән бәһлеүәндең ағай-эненә – Оло Муйнаҡтар, уны ҡыуып ебәрәләр. Әммә ул тағы ла Яуымбай сотниктың еренә, Ирәндек артына, Йәмле йылғаһы буйына ултыраҡ ҡора. Ул ер Яуымбайҙың йәйләү ере була. Муйнаҡ Рәсүлев үҙ кешеләрен, шул Бәләкәй Муйнаҡҡа күсерә. Шунда йәшәй. Әлеге кантон башы Ҡорама ла шул ауыл кешеһе.

Бикбаш хәбәренең шул еренә еткәс, уны Мирхажи мулла бүлде:

– Кем, Бикбаш әфәнде, мәғлүмәтле һөйләшеү бик тә, бик тә зауыҡлы ла... мәҙәк тә. Тик бына ҡояш ауыша башлаған икән. Икендене юлда уҡыйһы ине. Намаҙлығым бар. Юлаусының юлда булыуы яҡшы. Түрә иртәгә иртә менән ҡайтып етеүемде һораған ине... Һеҙҙе саҡырыу хатына ыңғай яуап бирепһегеҙ, тигән фекерҙәмен. Уға кире яуап бирергә кәрәкмәҫ. Күңеле урынында түгел уның. Яу кешеһе бит... Яуға китә. Унда ни булмаҫ та, ни ҡыумаҫ? Үҙе кешеләргә шәфҡәт күрһәтһә лә, хәләл ефетһеҙ булмаһа ла, ғүмере буйы ул күңелендә яңғыҙ. Ҡәнәғәтлек кисерһә лә, яңғыҙ. Әле өс-дүрт йыл элек линия хеҙмәтендә бер ҡорҙашы шәһит булып, уны бына шул ауылға килтереп ҡуйышып йөрөгәнендә күңеленә бер гүзәл кереп ята. Инде нисәмә йыл ул бында килә лә китә, килә лә китә. Һеҙгә күренеп йөрөмәйҙер инде ул, – тигәс, Бикбаш һүҙҙең Ғәфифә ҡыҙы тураһында барғанын тамам төшөндө.

– Хатты, тим, икенсеһен, Мөхәмәтҡолой неҙҙең ҡыҙығыҙ Ғәфифәгә яҙған. Уны ла тапшырырға насип булды. Хатты уҡығандыр, йөкмәткеһен Бәҙерниса абыстайың да беләлер. Килергә кәрәк булыр... килергә... Ҡарсығыңды ла, ҡыҙыңды ла алып кил, генерал-губернатор Волконский ярҙамсылары менән үҙе килә...

– Унан һуң, – тип тауышын әкренәйтте Мирхажи мулла, – Мөхәмәтҡолой кантон – войсковой старшина, бик ҡыҙыу, үҙ һүҙле кеше кәрәгендә. Ауыҙына бер алғанды төкөрөп ташламай. Бикбаш әфәнде риза булмаһа, мин үҙ белдегем буйынса эшләйәсәкмен, тип тә хәбәр һалды миңә, – тине Мирхажи.

Шул ваҡыт Бикбаштың ҡапыл тамырҙарына һулҡылдап ҡан тула башланы. Тәндәре сымырлап, ҡойҡаһына ҡан һауып, сәстәре шытырлап яй ғына ҡалҡа башланы.

– Миңә, сотникка, үҙ өйөмдә ҡыҙымды талап алыу өсөн шарт ҡуялармы?

Йүгереп барып, стенала элеүле торған ҡылысын ҡынынан һурып сығарып, хәҙер үк был хәбәрҙе һөйләүсе мулланы ҡыуып сығарыр сиккә еткәйне...

Шул ваҡыт йомшаҡ ситектәрендә иҙән таҡталарын шығырлатмай, уның өҫтөнән неләүһен кеүек һис бер тауышһыҙ килеп кергән ҡатыны Бәҙерниса Бикбашҡа бәрхәттәй йомшаҡ тауышы менән:

– Атаһы, – тип өндәшеүе булды, уның ҡыҙыулығы һүрелде лә ҡуйҙы.

– Атаһы, атаһы, тимен, Мирхажи мулла кире юлланамы ни? Күсәре аттарын егеп ята ләһа, инде кисәү бит, юлдары оҙон, – тине. – Беҙҙе шәмбе көнөнә саҡырғандар. Ундай ергә буш ҡул менән барып булмай. Беҙгә әҙерләнергә кәрәк, шуға ла һинең һүҙең кәрәк. Барабыҙмы, юҡмы? Кантон башынан килгән хәбәрҙәр бик етдигә оҡшай. Тиккә түгелдер. Әнә, Ғәфифә өҫ кейемдәрен ҡараштыра ла башланы, – тине. Был һүҙҙәрҙән һуң Бикбаш тамам һыуынды.

– Барабыҙ инде, анау тиклем ерҙән ат ҡыуып махсус рәүештә саҡырыусы килгәс, баш тартыу оҡшамаҫ. Ҡунаҡҡа барыу әле уның һорауҙарын үтәү тигән һүҙ түгел бит әле. Шәриғәт көслә фәмәл башҡарыуға ла ҡушмай...

– Һәм тыйырға ла ҡушмай, – тип Мирхажи мулла һүҙҙең осон еткереп ҡуйҙы. Һүҙҙең нимә тураһында барғанын бөтәһе лә аңланы, әммә өҫтәп берәү ҙә өндәшмәне.

Мирхажи мулла икенде намаҙы етмәҫ борон юлға сыға алды. Ул юлға сығыр алдынан Бәҙерниса абыстай Бикташтың батшалар йәйәү йөрөй торған ергә китеүенән файҙаланып, Мирхажи муллаға былай тип шыбырланы.

– Ғәфифәгә яусылар күп килде, нисәмә тапҡыр инде. Ул Алтынтамаҡ ҡалаһында ликәрҙәр (лекарь) әҙерләй торған мәктәпкә ебәрелгәйне. Өйәҙ ҡарары менән кантун тарафынан ун ҡыҙ... Шунда уҡығанында уға бер әҙәмдең күҙе төшкән. Килә лә килә. Үҙе шул Залтауыс ҡалаһында йәшәй. Әллә марый, әллә сыуыш, әллә суҡынған ноғай. Беҙ урыҫса белмәгәс, ни нәмә һөйләгәнен дә белмәйбеҙ. Атаһы әҙерәк һөрмәләтә лә ул урыҫса, тик һурпаһы бик шыйыҡ шул... Уткәндә килгәнендә атаһы бик ҡоро һөйләште. Һөйләшмәне инде, ҡыуҙы ла ҡайтарҙы. Унан Златаустан, бире Әтлән тигән ерҙән дә берәү юлға үлән үҫтермәй... Уларҙан башҡа был тирәнән дә бихисап. Мөхәмәтколойға 48, ә беҙгә 70. Ул беҙҙең бала һынындай ғына. Әгәр икеһе лә риза булһа, мин бабайҙы нисек булһа ла күндерермен. Тик үҙҙәре әйеш-көйөшөн бөтә өшәләһендәр. – Бикташтың артта ҡалғырған,

йә төкөргән тауышын ишеткәс, Бәҙерниса тиҙ генә өс баҫҡысты ике атлап күрнисәгә күтәрелде. Мирхажи мулла, үҙенең был вәкәләтлегенең бик уңышлы сығыуын һиҙеп, эстән ҙур ҡәнәғәтләнеү кисерҙе. Шуға ла ул Бикташтың ҡул-биттәрен, ҡатыны Бәҙерниса әҙерләп биргән ҡомғандан тәһәрәт алырын, ғөсөлләнеүен көтөп торҙо. Ә Бикташ ашыҡманы. Ололоғон, үҙенең олпатлығын тойоп, Мирхажи мулланың уны көтәсәген белеп, яйлап ҡына һөртөндө. Еләнен кейҙе. Унан ашыҡмай ғына, һәр баҫҡысты шәйләгәндәй, яй ғына төштө. Мирхажи мулла һаубуллашыу ниәте менән уға ҡаршы ике ҡуллап килеп ҡул биреүен дә бик ихлас ҡабул итте. Әллә уның атаһының һүҙһеҙ ҡушыуын, әллә теләгәнен белеп ҡолаҡтарына алҡаларын элеп, гәрәбә-мәрйендәр, уҡа менән биҙәлгән түшелдереген кейгән, сигеүле түбәтәйе эсенән артҡа ҡойолоп торған сәстәренә сулпылар таҡҡан еңел биҙәкле, итәк остарына яулы еләнен кейгән көләс Ғәфифә уға, Мирхажи муллаға ҡапҡа асты. Бикташ менән дә, Бәҙерниса абыстай менән дә хушлашып, кырандасына ултырғас, ҡапҡа тотоп торған Ғәфифәнең ҡара күҙҙәрендә йылы ямғырҙан һуң муртып, мөлдөрәп бешкән ҡара муйыл емеше кеүек күҙҙәре өҫтөнән тулышып тамған тамсыларҙы күрҙе.

– Булды, булды, бөтәһе лә булды, – тип ҡыуанды Мирхажи мулла ул тамсыларҙы күреп. Әммә Ғәфифәне аңлауы ауыр ине. Әллә Ҡолойға ҡарата ҡапыл тыуған тойғомо, әллә ҡотолғоһоҙ көндәштәр ҡосағына ирекһеҙҙән үҙен дусар итеүме, теләкме был? Үҙе хыял иткән яҙмыш түгел... Шулай ҙа... Әммә ул яҙмышты ебәргеһе лә килмәне. Үҙенән үҙе йәшергән тойғоһо уны Мирхажи мулла кырандасына арттан йәбешеп, Мөхәмәтҡолой янына барғыһы килде. Әммә унда Мөхәмәтҡолой урынына Ғәфифәне күреп йәндәре әсегән Аҡбикә менән Зөләйхәнең яман күҙҙәре ҡаршы алырынан ҡурҡты. Ҡурҡмаҫлыҡмы ни? Уларға бит Ғәфифә бала ғына. Уларҙың оло балалары менән бер йәштә, әммә эске тойғоһо, эске күңеле, тәбиғәте, булмышы ышаныслы рухи ла, тәбиғи лә, көслө, үҙ һүҙлерәк ирҙе йөрөтә ине. Ә ул ир – Мөхәмәтҡолой! Тик шуныһы, ниңә ул ирҙең йылылығы, йәше әҙ генә самалаш түгел икән? Булһа ни? Еңгәм әйтмешләй, бер ҙә оло түгел. Әйтһә, һүҙе бар. Айыуҙың алҡымын тоторлоҡ, бүренең билен бөгөрлөк бит. Ә Ғәфифәнең күңелендә бөтә яҡтан да ҡарыулы ир ята. Ҡатын булараҡ, ул тәбиғәте, холҡо, булмышы, ә иң мөһиме, үҙ теләге менән ул иргә, әлегә юҡ иргә буйһоноулы. Күңеле менән. Әгәр шулай булмаһа, буйһоноусанлығына инанмаһа, уны татымаһа, күрһәтмәһә лә, ғаиләлә ул үҙенең үҙаллылығын да, үҙ фекерен дә тормошҡа ашыра алмаясаҡ. Ғәфифә был яҙылмаған ҡанунды күптән инде үҙенең күңеленең үҙәге менән ҡабул иткән. Әгәр ул ир менән уҙышмаҡтан үҙ

фекерен генә раҫлай башлаһа, ни була? Ул ирҙе тиңһенмәү, уның ҡарашын раҫламау була. Тимәк, тормош бәхәсле юлда. Ҡатынға үҙ теләгең шул үҙ һүҙле ир тарафынан эшләтер өсөн уның менән бер теләктә булыу зарур түгелме? Теләктәш, фекерҙәш булмаһаң, тимәк, һин дөйөм тәндә башҡа аҫа. Тора-бара башҡа ғаилә аҫаһы. Йәки ғаиләлә аҫаһыҙлыҡ үҙенән үҙе тыуа. Был инде талаҡҡа килтерә. Мирхажи мулла шул ҡапҡа төбөндә үк тәрән уйҙарға сумып, был ҡап-ҡара муйыл емешен йыуған тамсыларҙы күҙ алдына килтереп, үҙе лә, уфтанды ла, хушланды ла... Сыҙай алмай алғы аяҡтары менән тибенеп торған суртандай турылар, кырандасты берҙәм тартып, урамға сыҡтылар. Сығыу менән уның башына келт итеп бер фекер килде. Ғәфифә менән Мөхәмәтҡолойҙоң ижабын ҡайҙа уҡытырға? Уны Мостафала ла, үҙ ауылы Ҡолойҙа ла уҡытып булмай, нисектер уңайһыҙ. Аҡбикә менән Зөләйхәнең өҫтөнә дегетле бысраҡ һыу һибеү кеүек була бит. Донъя хәлен, алдағыны Әүлиә лә йөп һанлы итеп әйтә алмай. Әгәр минең был вәкәләтемде белеп ҡалһалар, бигерәк тә Зөләйхә. Миңә бит улар менән бер олоҫта йәшәүе бик ауыр буласаҡ, бик ауыр... Ҡолой һуғышҡа китер, ә беҙ бит ҡалабыҙ. Зөләйхә Аҡбикә кеүек шаталаҡ, хәбәрсе, бер ҡатлы түгел. Уның уй-фекерен белеү өсөн иң алда үҙеңдең тәбиғи һиҙемләнеүең тәрәнлеге кәрәк. Үҙ шәхсиәтенә, Зөләйхә бик иғтибарлы... Уның һәр бер бышбышына дөрөҫ һығымта бирә белеү кәрәк. Шаталаҡ түгел, ҡулына уҡ бирһәң дә, ашыҡмай. Иҫәплəп уҡтың ебәрелеү көсөн белеп кенә керештән ысҡындыра. Тейһә, тейенгә, теймәгә тирегә тип атмай. Ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙҙың ҙурмы, бәләкәйме ғаилә тоторға яраҡлығын байтаҡ сифаттар билдәләй, тип фекер йөрөтә Мирхажи мулла. Йәш ҡатындар уға һәләтһеҙ. Улар егерме бишкә тиклем, тип әйтәйемме, төнгө ывый-сывыйҙан бушамай. Киләсәк тураһында уйламай ҙа. Уйларға ла теләмәй. Киләсәк уның алдында рауза сәскәләре араһында. Иң ҙур теләге – Аллаһы Тәғәлә биргән йәре янында булһын. Балалар пәйҙә булғас, уның көнкүреше үҙгәрә, иренә мөнәсәбәте лә. Көндәлек өйҙәге эш, бала артынан бала уның күңелен бер аҙ тупаҫайта ла, иренә ҡарата ғәмһеҙәйтә лә. Ғәмһеҙлеккә ғәмһеҙлек. Ире лә шулайыраҡ булып китергә мәжбүр.

Инә бүре лә бит атаны ояға ла керетмәй, көсөкләһә, көсөктәрен дә унан ҡурсалай. Ҡыҫҡаһы, ҡатын-ҡыҙ ниңәлер кемдәндер көнсөл, ҡыҙғансыҡ булып китә. Уның холҡо тормош ҡаҡҡылауына ауаздаш булып, үҙ йүнәлешен ала. Әммә ул теләк йүгәнһеҙ бейә кеүек булмай. Ул һәр саҡ башындағы йүгәне теҙгененән хужаһының ҡайҙалыр бороуын да, бәйләп ҡуйыуын да теләй. Күңеле һәр саҡ азатлыҡты эҙләй, ләкин теҙген ысҡынһа, кем тотоп бәйләр икән тип өҫтөләнә. Кире бәйләп ҡуйыуҙарын теләй, ә үҙе азатлыҡ

әҙләй. Ана шулай ҡапма-ҡаршылыҡлы күп тойғолар эсендә йөҙә ул. Олоғая килеп ҡырҡа етеүгә ул тамам бешә. Әммә уның менән саф хистәре түгел, ә ниндәйҙер һөҙөмтә сығырлыҡ тойғолары етәкселек итә башлай. Бер ҡарағаң, ул инә бүре! Аяуһыҙ. Ниндәй матур ҡолондарҙың, бәрәстәрҙең һөйәктәрен шатыр-шотор итеп тешләп ашай ҙа ҡуя. Йәлләп тормай. Бер ҡарағаң, ул ҡуян. Ҡулынан һис ҙур ғәмәл килмәй. Барлыҡ теләге – шул төлкөнө тотоп ашау, һәм уның балаларын да. Ә үҙе ғәмәлдә аҡ ҡына, йомшаҡ ҡына. Һыйпағаң, оҙон ҡолаҡтарын арҡаһына һала ла ебәрә. Аллаһы Тәғәлә уны ит ашаусы итеп яратмаған. Ә ит ашарға ниңәлер һәр ваҡыт ул хыяллана. Бына шундай бөталсыҡ уйҙарына солғанып, әммә маҡсатының мәжбүрилегенә төшөнөп, ул Хәйретдин мулланың өйөнә килеп туҡтаны.

Хәйретдин мулла менән улар яҡшы таныштар. Бер нисә тапҡыр осрашҡандары, һөйләшкәндәре бар. Өфөлә дини назариәт асылғанда ла улар был яҡ олоҫтан вәкәләтле булып бергә барғандар ине. Бергә ҡайттылар. Күрешеп, хәл-әхүәл һорағас, Мирхажи мулла йомошон тура әйтте.

– Кем, Хәйретдин ҡорҙаш, ике йөрәкте бергә ҡушырға йөрөйөм. Әле бына үҙем юлдамын. Туҡтап тора алмайым. Шул ике мәжнүнгә никах уҡып, яуға оҙатырға кәрәк ине. Икеһе лә яуға китә.

Был һорауға Хәйретдин мулла ҡаршы тора алманы.

– Шулай, шулай. Изге эш, ҡорҙаш. Ундай вәхшәт яуға китеүселәрҙе низамән никахландырыу – икеләтә изгелек, үҙең беләһең...

Хәйретдин мулла Мирхажинән никахҡа инеүселәрҙең кем икәнен дә, ҡасан икәнен дә һораманы.

– Мин килә алмаһам, никахты үҙең уҡырһың, исем-шәрифтәрен күрһәтеп хат яҙырмын. Килһәм, никах ғәмәлен бергәләп башҡарырбыҙ, – тине.

Ашыҡты Мирхажи юлға, бик тә ашыҡты. Сөнки уға ҡайтып, тиҙерәк хәбәрҙе Мөхәмәтҡолой кантонға еткерәһе бар. Ә никах мәсьәләһен хужа үҙе хәл итер. Үҙе уңайлы һанаған кешеләренә хаҡ ғәмәлде башҡарырға бойорор... Унан һуң бит, беҙ тоҡта ятмай. Мөхәмәтҡолойҙоң Ғәфифәгә булған мөнәсәбәтен Ҡорама кантон да, 18-се алайҙың һуғыш күнекмәләре осоронда бөтәһе лә күрҙе. Унда бит 16-сы, 17-се алайҙан йөҙлөктәр генә түгел, ә иллелектәр ҙә булды. Береһе әйтмәһә, береһе әйткәндер бисәләренә. Ә был инде бөтә ғәләм белә тигән һүҙ. Шыш-быштар күптән инде Зөләйхәнең дә, Аҡбикәнең дә ҡолағына еткергәндәрҙер. Минең ҡапыл ғына был тарафҡа юлланыуымды абыстайым да, күсәремдең ҡатыны ла белә. Тимәк, минең ҡайтып етеүемде, ниндәй хәбәр алып килеүемде тик Мөхәмәтҡолой кантон ғына

көтмәй, уларҙы Аҡбикә менән Зөләйхә ныҡыраҡ көтә. Ул хәбәрҙе, ул «ярҙы, яр һалыуҙы» ишетер өсөн әллә ниндәй хәйләләр ҡороп бөткәндәрҙер инде. Әлегә минең ниндәй хәбәр килтереүемде һис бер кем белмәй. Күсәр беҙҙең хәбәрҙе ишетмәне. Ул Бикташта алғы өйҙә ашаны, ә Хәйретдин мулланың ихатаһына ла ул кермәне.

Хәйретдин муллала туҡтамай юлға сыҡҡас, бына шундай уйҙар кисереп барҙы ул. Ә атыҡайҙар ҡайтыр юлға бышҡыра-бышҡыра, ҡойроҡтарын болғай-болғай алға ынтылдылар. Ирәмәл йылғаһының йомро ағас түшәлгән тар күпере аша ла ҡушлап егелгән турылар ҡурҡышып, бер-береһенә һырыға биреп, дөбөр-шатыр үттеләр ҙә киттеләр. Юл оҙон артылышҡа Ара тауҙың ҡыҫынҡы үҙәгенә тартылды. Мирхажи мулла был ерҙең тарихын яҡшы белә...

Урыҫ полковнигы Арсентьев өс меңлек ғәскәре менән бынан бер башҡорт быуаты элек, йәки өс арғымаҡ ғүмеренә тиң йыл элек, Красноуфимск, Көнгөр, Бөрө, унан һуң Табын ҡәлғәһе, Өфө тирәләрендә, карателдәр яҡлы халыҡтарҙың ауылдарын туҙҙырып, иманға ултыртып ҡайтҡан Бәпәнәй абыҙ Төрөпбирҙин Төлкөсура батыр Алдағолов, Юлдаш мулла Һөйәрембәтовтарҙы ҡулға элэктерергә Мейәс заводы менән Алтынтамаҡ араһынан төп Урал армыты буйлап шул ергә килеп сыға.

Арсентьевтың шымсылары уға Төлкөсура Ҡыйҙыш тауының көн битендә, шишмәлек янында туҡтаған тигән хәбәр килтерәләр. Ә Ҡыйҙыш тауы менән Юлдыбай тауы араһына тик шул Рахманғол үҙәге аша ғына үтеп була. Шул тәрән, оҙон, ике яғы текә тау битле үҙәккә ғәскәрен һуҙып килеп керә полковник Арсентьев.

Әммә Төлкөсура батыр ҙа йоҡламай. Уның күҙәтеүселәре урыҫ полковнигының ғәскәре оҙонға һуҙылып был яҡҡа килеүен хәбәр итәләр.

Бәпәнәй абыҙ, ҡаҙаҡ ханы Әбделхәйер кешеләренең башҡорттар менән һөйләшергә килеүҙәре тураһында хәбәр алып, бер иллелек менән Оло Кинйәкәй ауылына, үҙ йортона ҡайтҡан була. Төлкөсура батыр менән Юлдаш мулла үҙ көстәрен тиҙ генә шул Рахманғол үҙәгенең ике яҡ ярына урынлаштыралар. Аттарын артҡараҡ, ҡыра ышығына ҡалдырып, ике йөҙлөктөң уҡсылары, мылтыҡсылары кем ҡая, кем йығылған ағас, кем элек алтын йыуылған соҡор-саҡыр араһына кереп ятты. Ҡалған дүрт йөҙлөк аттарынан төшмәй үҙәктең осонда, унан сығыу урынында көттөләр. Палкауниктың ғәскәре һуҙылып, бер осо үҙәктең осона, Төлкөсураның дүрт йөҙлөгөнә ҡаршы килеп сығалар. Сығалар ҙа, ҡылыстарын ҡындарынан һурып алып, уларҙы көтәп торған башҡорттарҙың өҫтәренә ташланалар. Шуны ғына көтөп торған

Төлкөсура йөҙлөктәре лә, күптән инде һурып алынған ҡылыстарын болғап, Салауат оран ҡысҡырып, урыҫ атлыларына ябырылалар. Нәҡ тә шул ваҡытта үҙәккә һуҙылып кергән карателдәргә ике яҡ ярҙан берҙәм атыу башлана. Терәп тигәндәй аталар карателдәргә. Күптәре, бик күптәре шунда уҡ аттары өҫтөнән ҡойолоп төшәләр. Ни алға, ни артҡа ҡасып булмай. Алда ла уҡ, ваҡ йәҙрәләр ямғыры, артта ла шул уҡ хәл. Үҙәктән алға барып сыҡҡан Арсентьев атлыларына арттан һис ярҙам юҡ. Ул ян-яҡтан атылып, тарҡалып бөткән. Алға килеп сығып һөжүм итеүселәр, тоҙаҡҡа әләгеүҙәрен белеп, кем ҡайһы яҡҡа ҡаса ала, шулай дөйөм шөбһә-ҡурҡыуға бирелеп, тамам тарҡала. Күптәре теге донъяны ҡаршыланы. Йәндәре тәндәрендә булғандары ҡоралдарын ташлап, кем ҡаялыҡты, кем ҡуйылыҡты эҙләп ҡасалар. Был ғәскәри сынйырҙың артҡы ҡойроғо үҙәккә кермәйенсә, үҙ кешеләрен үлемгә дусар итеп, кире боролоп ҡастылар. Ҡасыусылар араһында полковник Арсентьев та бар ине.

Төлкөсура батыр һуғышсыларын дәртләндереп, дошмандары менән ҡылысҡа ҡылыс килеп йөрөгәнендә яраланып ағас төбөндә ятҡан һалдат уға арттан төҙәп ата. Йәҙрә башына тейеп, атынан йығылып төшөп йән бирә Төлкөсура батыр. Арсентьевтың алты алайы тамам ҡыйратыла.

Был ҙур еңелеү тураһында һис һөйләмәҫ булдылар. Башҡорт эштәре буйынса комиссия рәйесе, нәҫелдәре ноғайҙан булған Тәтеш – Тәтешевҡа – Татищевҡа рапорт менән еткерһәләр ҙә, батшаға был хәлде еткермәнеләр.

Төлкөсура батырҙы шул йән биргән ерендә ерләнеләр. Быға ла үҙ сәбәптәре булды. Беренсенән, көн дә эҫе ине. Ауылы ярайһы уҡ йыраҡ. Өҫтәүенә, тирә-йүндә суҡынмыш Тәфтиләүҙең һәм башҡа хәрби һанаттарҙың ғәскәри төркөмдәре менән тулған ине.

Шул осорҙан был ер – Төлкөсура батыр ере. Икенсе төрлө әйткәндә, Сура батыр ҡәбере тип аталды.

Ана шул Сура батыр ҡәберлеге йәнәшенә генә килеп еткәйне... ҡапыл күҙе алдынан ғына шыжлап, битенә еле бәрелеп, нимәлер үтеп китте лә туҡ итеп юл ситендәге ҡайынға барып сәнселде. Шуның артынан уҡ шул уҡ таш аръяғынан көлтәләй ут, унан һуң һаҫыҡ төтөн бөркөлдө. Йәҙрәһе арба тотҡаһына бәрелеп, сыйылдап ситкә осто. Аттар, үлемесле был ваҡиғаны белгән кеүек, арбаны һелкә тартып, тауға үрмәләгән юл менән сабып алып сығып киттеләр. Арттан:

– Башҡаса әҙең булмаһын бында! Йәнеңде һытырбыҙ, – тип ҡысҡырған һәм тағы ла мылтыҡ атҡан тауыштар ишетелде.

Көсөк ауылын үтеп, Мейәс йылғаһының тәшәлтәле кисеүенә еткәс, Мирхажи иҫенә килеп, иркенләберәк тын алды.

– Был ни ғиллә, – тип уйланы ул. – Был һис шикһеҙ минең килеүемдең һөҙөмтәһе. Был һис һүҙһеҙ Ғәфифәне алырға телән, уны ала алмай йөрөгәндең эше. Һис шикһеҙ! – Тик ул бер нәмәне төшөнмәне. Уны яусы булғаны өсөн аттылармы? Әллә буласаҡ кейәү итеп күрҙеләрме? Нисек булһа ла, булыр... – Аллаға шөкөр, әле гүргә керер көнөм етмәгән икән. – Көсөк ауылынан һуң ул Ям юлы менән Ҡаҙыбай ауылына еткәс кенә һулға, кантонлыҡтары еренә боролдо. Үҙ еренә кергәс, ул, үткән ваҡиғаны ентекләберәк һөҙөп, һығымталар сығарып, уйлай башланы.

... Әллә Аҡбикә менән Зөләйхәнең ҡарғышымы был? Ҡарғап та өлгөрҙөләрме ни мине? Миңә, мулла кешегә, был аҙым яраған эш микән? Ниңә миңә ҡушты әле был эште түрә? Башҡа насирҙары, ярҙамсылары ла күп бит! Мулла кешегә яусы булып йөрөү килешәме? Мине үлемдән балаларымдың бәхете ҡотҡарҙымы? Әллә Аллаһы Тәғәлә алдында гонаһһыҙлығыммы? Шәриғәт, әгәр теләһә, мөмкинселеге булһа, һәр ир-атҡа дүрткә тиклем хәләл ефет алырға рөхсәт итә. Бында минең намыҫлығым таҙа, мин шәриғәт ҡанунын боҙоу юлында йөрөмәйем. Ә шулай ҙа... ҡыҙҡатынды ла аңларға кәрәк. Ирең тағы ла көндәш килтерһен әле. Үҙе йәштер әле, матурҙыр, тип өҙгөләнерҙәр инде. Хәҙер икеһе лә дүрт тиҫтәне үткәндәр. Тормош боролмалары менән байтаҡ осраштылар. Тамаҡтары туҡ, өҫтәре бөтөн. Матди яҡтан ҡытлыҡ юҡ. Әммә һәр көн тәрән көсөргәнеш, уйҙар, көтөү менән үтә. Уға, иргә, мин кәрәк үк түгел, тип уйлана инде икеһе лә. Шулай фекер йөрөттө Мирхажи.

Эйе, эйе, шәриғәт һәр кемгә дүрткә тиклем хәләл ефет алыуға ризалығын бирә. Әммә тәфриҡһеҙ. Айырылыуһыҙ, ярҙамсыһыҙ, яҙмыш ҡосағына хәләл ефетеңде ташламау шарты менән. Әгәр «талаҡ» әйтергә тура килһә, уға тейешле тәғәм һәм нафиҡ шарттар тыуҙырғас ҡына, йәки йәшәргә мөмкинлек ысулы табып биргәс кенә... Ә балалар булғанда, шәриғәт «талаҡ»лыҡты хупламай... бер ҡасан да хупламаясаҡ.

Шулай үҙ-үҙен аҡлап, ғәйепһеҙлеген үҙенсә дәлиллəп килгән Мирхажи мулла унарлап-унарлап, йә иллелəп, төркөм-төркөм һыбайлыларҙың үтеп китеүҙәренә иғтибар итте.

– Тимәк, иртәгә, һуғыш әҙерлеге күнекмәләре башлана, – тип уйланы ул.

Генерал-губернатор килдеме? Әллә килергә генә йыйынамы? Ул генерал-губернатор тигәне фәләнсә кешеләрен эйәртеп килтерер инде... Хәрби күнекмәләр оҙаҡ булһа, ул тамаша ҡылырға килгәндәрҙе ашатыр кәрәк. Яҡшы юрғандар ябып, йомшаҡ түшәккә һалырға...

Һуғыш күнекмәләрен күрһәтер ерҙе лә әҙерләргә кәрәк бит. Ат һикертергә кәртәләр ҡорорға, соҡорҙар ҡаҙырға, ҡылыс менән

уңлы-һуллы һелтәп сабыу өсөн талсыбыҡтар, атып тейҙерер өсөн сәптәр. Һәр бер һуғышсының ҡоралдарын тикшереү, юлға әҙерлеген барлауҙар күп ваҡыттарын алыр инде. Генерал кисләтеп юлға сыҡмаҫ, йоҡлар ул...

– Ҡайҙа, кантондың берәй эшен мин дә эшләшәйем, – Бикбаштан алынған ризалыҡты ла тиҙерәк еткереү өсөн ул күсәренә аттарын ҡыуырға бойорҙо.

Ҡолой кантондың ауылына яҡынлашҡан һайын, Мирхажи мулла кырандасын йылп итеп үтеп китеүсе һыбайлылар күбәйгәндән-күбәйҙе. Ә урмандан сығып, Мейесле йылғаһының үҙәненә төшкәс, ул арғы яҡ ярҙа ҡырмыҫҡа иләүе кеүек кантон идаралығын һырып алған һыбайлыларҙы күрҙе. Күпер үрҙәрәк булғанға, ул унда барып торманы. Һыу тәрән, аттарҙың ҡашағаһы аша һуҡты. Арғы яҡҡа ул лысма һыу булып килеп сыҡты.

– Былай уҡ тәрән түгел ине ләһә, – тип үкенеп тә ҡуйҙы. Әммә һуң ине инде. Мирхажи мулланың килгәнен юғарынан ҡарап торғандар, күрәһең. Йөҙлөк башы Әлимсура сабып килеп, кантондың уны идаралыҡта көтөүен әйтте.

Нишләйһең, өҫ еүеш булһа була инде, Мирхажи мулла аттарын юрттырып тура идаралыҡҡа китте. Кырандасынан төшкән көшөл сысҡаны кеүек еүеш мулланы күреү менән өйөлөшөп торған атлылар көлөргә керештеләр. Бигерәк тә әле тауыштары ирҙәрсә үк булып етмәгән йомшаҡ мыйыҡлы йәштәр бер туҡтауһыҙ, муллаға ҡарамай, ҡайҙалыр ситкә бағып ҡытҡылданылар ҙа ҡытҡылданылар.

Итәк салғыйҙарынан һыу тамсылатып, һыу тулған итегендә ғорҡ-ғорҡ итеп атлап, Мирхажи мулла идаралыҡҡа килеп ингәндә, Мөхәмәтҡолой кантон ҡыҙып-ҡыҙып йөҙлөк, иллелек, унлыҡ баштарына аңлатма һәм бойороҡтар бирә ине.

– Һәр һуғышсының эйәр артмағында тик тәүге иң кәрәк-яраҡ булырға тейеш. Һәр һуғышсыға кәмендә иллешәр уҡ, ҡалған уҡ баштары артмаҡ атта. Беҙ һөңгө, ҡыҫҡа ян, ҡылыс, мүлдергәле бәләкәй ҡамсы. Аттарҙы көнө-төнө һолонан өҙмәгеҙ... Һәр бер атҡа ике тышау, бер оҙон сылбыр. Һаҡлыҡҡа берәр айыл, өҙәңге ҡайышы. Билдә осло, оҙон, үткер хәнйәр булырға тейеш. Кипкән ҡорот. Дарыу үләндәре онтағы... Һәр унлыҡҡа ике беҙ, ике-өс әнә, тегенеү һабаҡлыҡтары. Ике-өс ян кереше. Тегеү ептәрен, ян керешен буяу өсөн ҡайын туҙы ҡағыҙы. Һәр унлыҡҡа икешәр ҡайыраҡ. Ҡайыраҡһыҙ ҡылыс ҡан сығармаҫ тигән мәҡәлде онотмағыҙ...

Унан һуң... Унан һуң һәр унлыҡҡа берәү булһа ла ҡыңғырау. Төндә ҡырҙа йоҡлағанда исмаһам ун-ун биш атҡа бер ҡыңғырау булырға тейеш. Юғиһә, нисек тапмаҡ кәрәк аттарығыҙҙы сит ерҙә? Тағы ла шул... өҫтәп әйтәм. Әле һуғышҡа еткәнсе ике мең

саҡрым ер бар. Беҙ барып еткәнсе ул Наполеон Рәсәйҙең ҡайһы төбәгендә булыр, уныһы ла әле беҙгә мәғлүм түгел.

Кисә кис беҙгә Троицк ҡалаһында торған ике йөҙлөк йәйәүле һалдаттарҙың башы, улар әйтмешләй, гарнизон батальоны командиры, майор, беҙҙеңсә, войсковая старшинаға тиң кеше, Александр Овсянников килде. Оҙаҡ һөйләшеп ултырҙыҡ. Ҡасан сығып китеүебеҙҙе ул да белмәй. Әле генерал-губернатор, аҙаҡ керермен, тип, Сыбаркүлгә туҡтамаған. Тура Силәбегә килгән. Унан һуң Силәбе тирәһендәге полктарҙы ҡарай. Унан Троицкийға килә лә линия гарнизондарына китә. Унда казактар шау-шыу булып яталар икән. Ер эше менән булып, икмәк тә бир, линия хеҙмәтен дә үтә. Унан тағы ла шул ҡол булып йәшәгән илде һаҡлайым тип, төрлө һуғыштарға йөрө... Беҙ линия хеҙмәтенә бармайбыҙ. Ниндәйҙер аҡ салбарлы Наполеон менән дә һуғышырға бармайбыҙ, тип дау ҡуптаралар икән.

Генерал, Силәбенән бер батальон һалдат алып, линия хеҙмәтенән ҡасҡан ҡасаҡ казактар менән аңлашырға бара икән. Уларға, казактарға, мылтыҡ та вәғәҙә иткәндәр. Беҙгә, башҡортҡа, мылтыҡ биреүҙе өнәмәйҙәр, ти Овсянников.

Майор Овсянников 17-се алайға урыҫ ғәскәре тәртиптәре өйрәтергә ҡуйылған. Ул бөгөндән беҙҙең кеше. Тик ул һеҙҙең менән етәкселек итә алмай. Ул һеҙҙе, һеҙ уны аңламайһығыҙ. Өҫтәүенә, әле ул йүнле итеп һыбай ҙа йөрөй алмай. Ат өҫтөндә ҡалҡанбаш кеүек... Шуға ла ул тарантаста ғына йөрөй.

Беҙ, бөтә башҡорт атлылары, Түбәнге Новгород тигән ҡала тирәһендә жыйналабыҙ ҙа, унан төрлө корпустарға, төрлө әрмеләргә бүлеп ебәрәләр икән. Шуны белдем, генерал беҙгә алдағы йома үткәс кенә килә икән. Эшләйһе эштәр бик күп. Бер йома – ул ваҡыт түгел. Унан бит әле беҙҙең ураҡ эше тора. Йыйылған икмәкте урынлаштырыу ҙа, кәбәк һаламдарын өйөп ҡуйыу ҙа бар. Үткәрелмәгән ауылдарҙа йыйылыштарҙы үткәреп, йөҙлөктәр, үҙегеҙҙең урынға кеше тәғәйенләп, бөтә эштәрҙе өйрәтеү лазым.

Шул ваҡыт Ҡолой, ишек төбөндә ни эшләргә лә белмәй аптырап торған Мирхажи муллаһы күреп ҡалып, уның яһына ҡылысының осон таҡ та туҡ итеп һуғып килеп, ниҙер ҡолағына шыбырлап, үҙенең ял итә торған бүлмәһенә оҙатып ҡуйҙы.

Ҡарағайҙан ҙур, бейек итеп һалынған был ҡорамда бөтә халҡына ла мөрәжәғәт итеп, һүҙен дауам итте.

– Шуны белегеҙ! Юлға сығып киттек икән, беҙ башҡаса йортта йоҡламаясаҡбыҙ. Бер ерҙә лә беҙҙе бер кем көтөп тормай. Мосолмандар ҡәрйәһенә әләкһәк, ярай ҙа ул. Ә бит беҙ 1200 кеше! Унан да артығыраҡ аттар.

Һәр кемебеҙгә йоҡлар йылы урын, ә аттарға бесән булһа ла, ул да кәрәк... Ә бит Өпәнән алыҫлашҡан һайын мосолман ҡәрйәһе әҙ осрар. Бигерәк тә Ҡазан ҡалаһынан һуң. Түбәнге Новгородҡа Ҡазан, Һары Сабаҡ – Сабаҡһары – Чебоксары ҡалалары эргәһенән үтәбеҙ. Аттар егелгән оҙатыу арбаларын кәрәк-яраҡ менән шул Новгород ҡалаһына тиклем алып барырбыҙ, моғайын. Күҙ күрер, бәлки, Оло Иҙелгә еткәс, кире ҡайтарырбыҙ. Уға тиклем йөктәр бер аҙ бушар. Һололар бөтөр, аҙыҡ-түлек тә һәлмәкһеҙләнер... Арба өсөн юл бик алыҫ, тәгәрмәстәр һәм уларҙың көпсәктәре түҙерлек булһын. Һәр унлыҡҡа ике арба. Майлау өсөн дегет. Ҡазан ҡалаһынан алыҫлашҡас, ислам тәғлимәтле ауылдар бөтөр. Ундағы кешеләр беҙҙе яратып тормаҫ. Яуҙа йөрөгәндәр өсөн биш намаҙ ҡырҡа булмаҫ. Әммә Аҡшам намаҙын уҡырһығыҙ. Ул яҡтағы халыҡтар Ғайса пәйғәмбәрҙең тәүге тәғлимәтен тоталар. Улар ҡануны шулай. Ҡалағын да, һауытын да, бер уртам һыу ҙа бирмәҫ. Был улар өсөн ҙур гонаһ. Шуға күрә лә кешеләрҙән һоранып йөрөү ҡәтғи тыйыла. Үҙ-ара һуғыш сығып китеүе мөмкин. Ә беҙ ҡораллы, асыуығыҙ килеп, берәйһен сәстегеҙ, ебәрҙегеҙ...

Һораныу тик үҙ-ара ғына булырға тейеш. Берәү ҙә өйөнә керетмәҫ. Белеп ҡуйығыҙ, һеҙҙең өйөгөҙ – ҡырҙа өйөлгән бесән, һалам. Бесәнен аттар ашай, үҙегеҙ һаламда ятаһығыҙ. Был рөхсәт ителә, был бурлыҡ түгел.

Беҙ һуғышҡа китеп барабыҙ! Ил һаҡларға! Һәр берегеҙҙә ҡалын, оҙонлоғо кәм тигәндә аршин ярым, ә киңлеге бер аршинлыҡ самаһы кейеҙ – серге, уның өҫтөнән ике аршин оҙонлоғонда һәм бер аршин киңлектәге киндер япма булырға тейеш. Был мотлаҡ. Әгәр кейеҙ менән япма аттың арҡаһын эйәр ағасы менән ышҡылыуҙан һаҡлаһа, кис ул кейеҙе аҫҡа, япмаһы өҫкә ябынып ятырға, елдән ышыҡланырға кәрәк буласаҡ. Унан һуң һәр берегеҙҙә ҡарағас сайыры менән бешкәкләнгән, ҡалын туҙҙан тегелгән тәгәс булыуы мотлаҡ. Унан аш та, бутҡа ла ашап була. Үҙе еңел, эҫе түгел. Теләһәң, һоҫоп һыу эс, теләһәң, сәй эс.

Ҡолой кантон, һүҙен бөтөргәндәй булып, туҡтап ҡалды. Бөтәһе лә шымып, уның тағы ни әйтерен көттөләр.

– Һәм иң мөһиме, – тип, ул уң ҡулының һуҡ бармағын юғары күтәрҙе. – Әгәр ҙә беҙ бер аҙна эсендә мин әйткән шул мәсьәләне эшләмәһәк, ярты алай Өпәне үтеү менән юлда һөйрәлеп артта киләсәк. Йәки бөтөнләйгә хәрәкәтһеҙ тороп ҡаласаҡ. Хәҙер ураҒайҙың аҙағы, һарысайҙың башы, тиһәк тә була инде. Юлда ямғыры ла, ырашҡыһы ла булыр, ер туңыр, ҡар төшөп, тайғаҡҡа әйләнер. Ә беҙҙең күп аттар дағаһыҙ. Бөтә аттарҙың тояҡтарын ҡарап, тояҡ эстәрен, йөрәген ҡырып, буш дағаларҙы нығытып сығыу кәрәк. Ә дағаланмағандарҙы дүрт-биш көн эсендә дағалар-

ға. Һәр бер ауылда ҡуҙсығаларҙы эшләтергә. Күмерҙе бер-берегеҙҙән алығыҙ. Беҙҙең бит заводтар өсөн һүндерелгән күмеребеҙ ҙә бик күп. Ташығыҙ, йәлләмәй яндырығыҙ. Ҡуҙсығалар бөтәһе лә эшләһен. Ер аҫтындағылары ла, ер өҫтөндәгеләре лә. Бер нисәүенә губернаторҙан үҙем рөхсәт килтереп биргән инем. Йосоп батыр Арыҡов, Бәпәнә, Килмәк абыҙҙар күтәрелешенән һуң ҡуҙсыға эшләтеүселәрҙе үлем язаһы менән ҡурҡытып, батшабикә Анна Ивановна, дөрөҫөрәге, ҡуштаны Бирон тыйған ине. Уға бит хәҙер бихисап ваҡыт үткән. Ә указ һаман да алынмаған. Шулай ҙа хәҙер һирәк-һаяҡ ҡуҙсығалар эшләүен губерна кешеләре күрмәмешкә һалынһалар ҙа, кәрәк булһа, бармаҡ болғарға ғына торалар. Мин был эшкә үҙем яуап бирермен. Һәр бер ауылда берәү, кәрәк икән ике ҡуҙсыҡҡан эшләһен. Ат дағалай торған йүнәтмәне лә бүрәнәләрҙән тиҙ генә эшләп ебәрегеҙ. Дағаға тимер тапмаһағыҙ, Силәбе, Ҡыштым, Ҡарабаш, Сыбаркүл сабырға тура киләсәк. Хәҙер тимер иретерлек мейес эшләп тә, мәғдән ташып та өлгөрөп булмаҫ. Үҙебеҙҙең дә һаҡлауыстарҙа тимерҙәр булырға тейеш. 600 самаһы атҡа 2400 даға, 15 меңгә яҡын даға сөйө кәрәк буласаҡ. Һуғабыҙ. Бер ни хәл итеп булмай. Даға һуғабыҙ... Юғиһә, беҙ хәрәкәтһеҙ ҡалабыҙ. Ә беҙҙең төп ҡорал, – ул тиҙ, тыныс хәрәкәт итеүҙә. Дошмандың өҫтөнә һәр саҡ аңғармаҫтан ташланыу, тиҙ генә сапҡыслау ҙа юҡ булыу. Унан һуң, һағыҙаҡтар кеүек, ҡапыл икенсе ерҙә пәйҙә булыу. Йәнәһе, ҡасып китеүҙе күрһәтеп, дошманды тоҡ эсенә эйәртеп керетеү. Ә быларҙы һәм башҡа поход һуғыш алымдарын эшләү өсөн ныҡ тояҡлы, туҡ аттарһыҙ беҙ – байбаҡ! Йөҙлөктәр, бөгөн үк ҡуҙсыҡҡандарҙы барлап сығып, тейешле кешеләрен ҡуйып сығыу кәрәк. Иртәгә иртә менән был турала барығыҙ ҙа миңә тейешле эштең эшләнеүе тураһында хәбәр еткерегеҙ. – Иртә менән үк, тип, был һүҙгә айырым баҫым яһап әйтте, кантон башы. – Аттарҙы дағалау көнөтөнө барырға тейеш. Һәр ҡуҙсыҡҡанда тәүлек әйләнәһенә 9–10 кеше эшләһен. Бер оҫта, бер ҡыуалды менән һуҡҡыс йәки туҡмар, бер ярҙамсы. Һандалдар етмәйәсәк. Ялпаҡ тимер ҡулланырға тура киләсәк. Бик булмаһа, ҡара таш даға сүкергә түҙер әле... Унан һуң ҡайһы бер һөңгө баштары йыуанираҡ, тупаҫ. Шулай уҡ уҡ баштары ла. Уларҙы ла ослап, һуғып сығыу кәрәк. Һөңгө һәм уҡ баштары һуғышсыларға таратып бирелгән. Һәр унсы, ун башы быны тикшереп сыҡһын. Осло һөңгө, уҡ башы һуғышта туҡһан осраҡта үлемдән ҡотҡара. Өркмәгән, тыныс, етеҙ, ауыҙы йомшаҡ һуғыш аты, осло, үткер ҡорал һәм үҙегеҙҙең сослоғоғоҙ үлемдән дә ҡотҡарыр, еңеү ҙә тәьмин итер.

Йә, кемдең әйтер һүҙе бар? Ә һорауҙарҙы бирмәйек. Һәр бер һорау тыуҙырырлыҡ эштәрҙе бергәләп хәл итәйек. Бергәләп хәл итеү юлдарын эҙләйек. Барлыҡ һорауҙарҙы был ике көндә минең

ярҙамсыларға һәм йөҙлөктәргә бирегеҙ... Ә хәҙер бөтәгеҙ ҙә әшкә, тип кантон халыҡтарҙы таратты ла, ике ярҙамсыһын – Әбүтәһирҙы, Сәйфелмөлөктө, атаһы Йәрмөхәмәттең икенсе бисәһенән тыуған 53 йәшлек Сәғитте, йөҙлөк баштарын Азаматты, Әлимсураны, Хәйсәрҙе, Айҙарәлене һәм уларҙан башҡа тағы ла һигеҙ кешене алып ҡалып, шуны әйтте:

– Даға әшләү өсөн генә лә 45 бот яҡшы тимер кәрәк. Әгәр үҙебеҙҙә ул дәүмәл табылмаһа, Әлимсура, һин Силәбегә, ә Азамат – Сыбаркүлгә бөгөн үк юлланыр кәрәк. Әбүтәһир, һорау менән мөһөрлө ҡағыҙ яҙып бир. Силәбелә һәм Сыбаркүлдә ҡайҙа кемгә мөрәжәғәт итергә беләһегеҙ. Ҡаты һөйләшегеҙ. Тимер булмаһа, ит тә юҡ, икмәк тә, күмер ҙә бирмәйбеҙ тигән мөғәнәне еткерер кәрәк. Уйын өсөн һорамайбыҙ, һуғыш өсөн, тип әйтергә кәрәк. Бирмәһәләр, алҡымдарынан алығыҙ. Үҙегеҙ менән ҡораллы үҙ йөҙлөктәрегеҙҙе әйәртегеҙ. Ҡалаға кергәс, ҡылыстарығыҙҙы ҡындарынан алып, ҡаҡ яланғас тотоп керһендәр егеттәр. Белһендәр кем килгәнен! Беҙ ҡан ҡойорға, таларға килмәгәнбеҙ. Беҙ алмашҡа алмаш һорап килгәнбеҙ. Йә тимер, йә күмер! Йә тимер, йә икмәк! Бирмәй ҡараһындар... Мейесле йылғаһын быуып, икенсе яр менән ағыҙып ебәрербеҙ... Ул саҡта өйөртөп ҡараһындар ҡорған һыу тәгәрмәстәрен. Заводтары – шаҡ! Туҡтай ҙа ҡуя. Бирмәй генә ҡараһындар, – тип, ҡылысының кипкән ҡарағас тамыр тотҡаһын ҡыҫып-ҡыҫып тотоп, арлы-бирле бүлмә буйлап йөрөнө Мөхәмәтҡолой кантон.

– Һәр бер ҡораллы күтәрелештең дә үҙ тарихи ваҡыты, үҙ маҡсаты бар. Әгәр Наполеон Рәсәй дәүләтенә һуғыш асмаһа, 16-сы, 17-се алай-полк та тирә-йүнгә үҙ ҡеүәтен, үҙ тәүәккәллеген күрһәтер инеме икән? Дөйөм тарихи тулышыу ғына дөйөм хәрәкәткә хакимдыр... Тарихи хәҡиҡәт кенә һәр халыҡҡа тарихи мөмкинселек, тарихи фатихаһын бирә. Әгәр Аллаһы Тәғәләһенең фатихаһы юҡ икән, тарихи ваҡиға ла булмай. Беҙ һәр ҡайһыбыҙ, бигерәк тә башҡорттар, шул тарихи ваҡиғаларҙы эҙләп тә, уны булдырып та йәшәргә донъяға саҡырылғанбыҙ...

– Ә миңә көн ярымға, иң күбеһе ике көнгә ял бирегеҙ. Әбүтәһир, һин генерал-губернаторҙы нисек ҡаршы алыу мәсьәләһен, аш-һыу, йоҡлау, ҡунаҡтарға тейешле хөрмәт күрһәтеүҙе уйла, ойоштор. Һәм бөгөнгә һуңғыһы. – Ҡолой, йәш ярҙамсыһы Сәйфелмөлөккә ҡарап, былай тине: – Һине, Сәйфелмөлөк ҡустым, 17-се алайға яҙҙыҡ. Беҙҙең менән яуға барасаҡһың. Урыныңа атайың буласаҡ. Уға 53 йәш, яу өсөн олораҡ булып китте кеүек...

Ә минең урынға ваҡытлыса кем ҡалып тороуын генерал-губернатор килгәс, һөйләшеп, халыҡҡа еткерербеҙ. Кешеһе уйланылған, тик генерал-губернаторҙың ризалығы ғына кәрәк. Кемдең яуға китеүен, кемдең бында ҡалыуы тураһында ауылдарҙа

йыйылыштар үтеп бөттө. Бында ла бит эш бихисап. Ураҡ урыу, көлтә бәйләү, уларҙы ырҙынға ташыу. Көлтәләрҙе һыу үтмәҫлек итеп баштарын эскә һалып өйөү. Ҡыш буйы көлтәнән ашлыҡ һуғып, уны эш итеү. Тейешлегән халыҡҡа таратып биреү. Орлоҡ һалыу, туңға ер һөрөү. Ужым сәсеү, мал ҡураларын төҙәтеү. Һалҡындар төшһә, йәш малдарҙы, ҡолондарҙы, бәрәстәрҙе айырып алыу. Бесән эшләп бөтөү, уның тейешлегән ташыу. Мәктәп-мәҙрәсәләргә утын ҡырҡып, ташып биреү. Тирмән тартыу һәм башҡа эштәр бик күп. Былардың бит бөтәһен дә ойошторорға кәрәк. Ҡарт-ҡоро, бисә-сәсә, үҫмерҙәр менән генә эшләргә тура киләсәк. Шуға ла халыҡты аңлап, белгән, талапсан да урынбаҫар кәрәк, – тип фекер йөрөттө Мөхәмәтҡолой Көсөкөв.

5-се кантон башы, ул яуға китәсәк. Яуға китәсәк, үҙе телэп. 49-сы йәштә булыуын, Рәсәйҙең башҡа һуғыштарында ҡатнашыуын, кантонлыҡта ла кисектергегеҙ эштәрҙең күп булыуын, йә наулығының самалы булыуын, башҡа сәбәптәр табып, һуғышҡа бармау мөмкинселеген дә табып булыр ине. Әммә ул үҙ кантонлығындағы был ике 16-сы һәм 17-се полк халҡын бөтәһен дә белә. Исемшәрифтәрен дә, холоҡтарын да... Нисек уларҙың үҙҙәрен генә ебәреп, ҡул болғаған булып оҙатып ҡалаһың? Выжданы етмәй уға, Мөхәмәтҡолойҙоң. Әле 12 йыл бергә эшләнек. Ә бит олораҡтары менән шул уҡ Францияға 1805 йылда, Төркиәгә 1807 йылда, Швецияға ҡаршы 1708 йылдағы һуғыштарҙа бергә булып, ҡаһарманлыҡ күрһәтеп, иҫтәлекле ҡылыс, аҡса, көмөш миҙал менән ҡайтты бит ул.

1798 йылдан, батша Павел I, Петрович осоронан, 17–45 йәштәге бөтә аҫаба башҡорттар хәрби хеҙмәттә тора, тигән указ булды. Һәм ул мәжбүри булды.

Йыйылған халыҡтарына эштәр биреп, Мөхәмәтҡолой Мирхажи мулла янына ашыҡты. Ниндәй ҡарар, уй-фекер, тәҡдим менән килә Мирхажи? Ә Мирхажи мулла, һыу кейемдәрен сисеп, Ҡолой әйткән ҡоро мыят кейеп алып, бүлмәлә уны көтә ине.

Икегә лә бер-береһенә ҡаршы килеп, бик ихласлап, ике ҡуллап күрештеләр. Унан ултырып, тейешле доға уҡынылар.

– Йә, мулла, ниндәй хәбәрҙәр алып ҡайттың? – тип түҙемһеҙләнеп һораны Мөхәмәтҡолой.

– Эште бешерҙек, буғай, түрә. Бикбаш йөҙлөк, бигерәк тә абыстайы Бәҙерниса минең ниәтемде йылы ҡабул иттеләр.

Тәүҙә мин мәсьәләнең асылын тура әйтмәнем. Ҡунаҡҡа саҡырҙым. Һеҙҙең сәләм хатығыҙҙы Бикбаш йөҙ башына ла, инәһе Бәҙерниса аша ҡыҙҙары Ғәфифәгә лә тапшырҙым. Бик күркәм бала икән. Бик күркәм. Күрәһең, Ғәфифә хаттың эстәлеген инәһенә тулыһынса асҡан. Бынығы – бер. Икенсегә, иң мөһиме, ул риза булған. Юғиһә, инәһе уның теләгенә ҡушылып, килеү

мәсьәләһен ҡарты алдында һәр төрлө яҡтан хупламаҫ ине. Әбейе, ҡәтғи итеп барыу кәрәк, тигән фекерҙе әйткәс, Бикбаш та һынды. Ә бит башта уның тауышынан ҡорос сыңлаған икенсе заң сыға ине. Иртәгә иртә менән юлға сығырҙар...

Ләкин, түрә, бер ләкин бар бит әле... Мин Бикбаштың ҡапҡаһынан сыҡҡанда, уны асып тотоп торған Ғәфифәнең ҡара күҙҙәренән бөрсөктәй йәш тамсыларының тәгәрәп төшкәндәрен күрҙем... Бик хисле бала микән? Никахҡа ул риза. Мин шулай аңланым. Бикбаш та, Бәҙерниса ла. Юғиһә уларҙы төрлө яусылар бимазалай икән. Юлда шул яусыларҙың береһе ҡул күтәрҙе... Аллаһы Тәғәләнең ярҙамы менән бәләҡаза урап үтте... Эйе, яусылары бер... Икенсенән, түрә, ижапты бында уҡытыу килешмәҫ. Бындағы хәләлдәрең дау ҡуптармаһа ла, шау ҡуптарыуы ихтимал. Шауҙан йырағыраҡ торайыҡ. Ижапты унда, Мулдашта уҡытайыҡ.

Әҙерләнеп, барлыҡ тәғәм, тәм-том, бүләктәр менән унда барыу лазым. Мин ундағы Хәйретдин мулла менән һөйләштем. Ижапты ул уҡыр. Ризалығын алдым. Тик уның үҙен дә ризалау кәрәк булыр.

– Эйе, эйе, хәҙрәт, – тип ултырҙы кантон. Ә башынан Ғәфифә янына, бөгөн үк китеү кәрәклеге баҫты. Сөнки әле генерал-губернатор килгәнсе бер йомалай ваҡыт булһа ла, бәлки, ул ғәскәри әҙерлекте күрһәтеү менән юлға сығыуҙы бойорор. Кем белә, тип уйланы кантон. Уның уйҙары дөрөҫлөккә тап килә ине, буғай. Икенсенән, никах уҡытыу, йола буйынса ла, ҡыҙ яҡҡа барғас, унда уҡытыла. Был да дөрөҫ. Мирхажи хәҙрәт был эште лә бешереп ҡайтҡан. Хәҙер ваҡыт юҡ. Бөгөн, бөгөн үк юлға сығырға. Иртәгә бер көн, бер төн унда, Ғәфифә янында булырға... Иртәнән һуң төндә йәки иртә менән ҡайтып етергә кәрәк. Ғәфифәне әлегә алып ҡайтырға кәрәкмәйҙер. Яуға киткәндә, юл ыңғайы Алтынтамаҡта осрашырбыҙ. Кырандас ебәреп, унда алдырырмын. Тик шуныһы, уны генерал-губернаторға күрһәтеп булмай. Булмаһа ни? Мин уны статейный список-теҙмәгә керетәм дә яҙам. Яҙам да, губернаторҙан мөһөрлө ҡултамға алам. Жена тип яҙҙыртам, өстәүенә, лекарь, – тип.

Унан бит икенсе алым да бар. Генерал-губернаторға урыҫтар лекарь тип атаған беҙҙең табиптар командаһын да күрһәтеп була бит. Берләштерелгән табиптар командаһын. Мәҫәлән, Ҡорама Муйнаҡ улы Рәсүлевтең дә 18-се һәм 19-сы полктың табиптар берекмәһен дә. Беҙҙең 16-сы, 17-се полктар менән берләштереп. Генералға ул иррегуляр ғәскәрҙә күрһәтелгән яңы һүрәтнамә буласаҡ түгелме? Һуғышта бит яраланғандарға тәүге ярҙам күрһәтеү генә түгел, шәһит булғандарҙы ла асыҡларға, бер ергә йыйырға, мосолманды мосолманса ергә биреү ҙә ҙур сауап бит.

Әйе, әйе... Ул команда-берекмәгә ныгыраҡ иғтибар биреп, алдан уҡ Силәбенән, йә Алтынтамаҡтан уҡыған табиптар ҙа саҡырыр кәрәк. Һәм мотлаҡ. Әйҙә, генерал алдында һәр төрлө дауалау һәм тәүге ярҙам ысулдарын күрһәтһендәр. Был осраҡта, Ғәфифәнең килеүен ҙур шик аҫтына алмаҫтар. Әйҙә, ата-инәһе менән килһендәр. Ғәфифә һуғыш әҙерлеге күнекмәләрендә ҡатнашыр ә ата-инәһе ҡарап торор. Ҡунаҡ булырҙар. Нисек кенә булмаһын, миңә Ғәфифәне никахлы ҡатыным итеп алып китергә һуғышҡа. Ул никахлашыуҙы минең менән яуға киткән һуғышсылар белергә тейеш. Был Ғәфифәгә лә, миңә лә әхлаҡ, намыҫ өсөн кәрәк. Шундай ҡырҡмаһа ҡырҡ уйҙар эсендә арлы-бирле һуғылғас, Ҡолой ҡырҡа ғәмәлгә күсте.

Артынан бер тотам да ҡалмай эйәреп йөрөгән, әле алғы бүлмәлә көтөп ултырған йомошсоларын саҡырып алды ла, тиҙ генә Мулдашҡа, Хәйретдин муллаға кантон исеменән сапҡын ебәргә ҡушты. Ярҙамсыһы Әбүтаһирға Хәйретдин мулланың Бикбашҡа хат-хәбәр еткереүен үтенде. Мирхажи муллаға хаттың йөкмәт кеһен әйтте.

– Хәйретдин мулла Бикбашҡа еткерһен. Иртәгә иртә менән ижапҡа әҙерләнһендәр. – Ижаптан һуң бер-ике көндән юлға сығырҙар Ҡолой ауылына. Әбүтаһир һәм яңы ярҙамсыһы Сәғитте лә тиҙ генә йөрөп килеүҙәрен һораны. Мирхажи муллаға кире юлға, Мулдашҡа барыуын һорап, ризалығын алғас, уны әҙерләнергә өйөнә ҡайтарҙы.

Сәғит – Ҡолойҙоң ағаһы. Аталары Йәрмөхәмәт, ә инәләре башҡа. Сәғиттең инәһе Фәрхинур бик уҫал, үҙ һүҙле булды. Мөхәмәтҡолойҙоң инәһе Йәмилә менән һәр саҡ урынһыҙ ғауға сығарҙы. Үҙе бала тапты ла бала тапты. Ерҙәрҙе үлсәп сыҡҡас, һәр бер балаһына ер яҙҙырыу буйынса ире менән ғауға күтәрҙе. Сөнки Мөхәмәтҡолойҙоң да инәһенең балалары ишле. Уларға ла ер кәрәк. Йәрмөхәмәт оло бисәһе Фәрхинур торған ҡышлау ыҙманы уның улы Сәғиткә яҙҙырып, ул Сәғит ыҙмаһы Сәғит ауылы исемен алды.

Фәрхинурҙың иреш-талашынан тамам ялҡҡан Йәмилә үҙ балаларына бынан ситкәрәк күсеп ултырыуҙы һәр саҡ әйтә килде. Ә Йәрмөхәмәт ике ҡатынының талашыуын ауыр кисерә ине. Ул бәхәсте хатта өй эсендә элеүле торған өс тармаҡлы ҡайыш ҡамсы ла туҡтата алманы. Ә Ҡолой йәш сағында уҡ, 1787 йылдарҙа төньяҡ Ҡаф тауҙары ерендәге яуҙан ҡайтҡанында уҡ, шул Фәрхинурҙың ғауға-талашы өйҙәрендә ҡаршы алған ине. Шул осорҙан уҡ башҡа, ситкәрәк төплənеүҙе ниәт итте Ҡолой.

Үҫеп, иңенә ҡеүәт, башына зиһен, ә үҙенә дәрәжә кергәс, Мөхәмәтҡолой Сәғит ыҙмаһынан йәки боронғо ҡартаталары исеме менән йөрөгән Иҫәнгилде ҡышлауын ташлап, Мостафа то-

рағы йәнәшенән ер алып, ҙур йорт һалып сыҡҡайны. Йорт, тип, бер генә йорт түгел. Йыуан бүрәнә һәм таш ҡоймалар менән ҡамап алынған ҙур майҙанда эреле-ваҡлы унлаған йорт. Төп йорттан башҡа ике бисәһенең йорттары. Унда улар балалары менән йәшәйҙәр. Ҡунаҡ йорто. Төнәк йорто. Аҙыҡ-түлек, әйбер-ҡара һаҡлана торған бура йорттар. Ике ҙур мунса. Кер йыуыу йорто. Ҡыҙҙар йорто һәм башҡа ҡоролмалар, ат һарайы, һаҡсы һәм бурҙай эттәр бураһы бөркөт һәм ҡарсығалар йәшәй торған буралар һәм башҡа бөтәһе лә шул ҙур ҡойма эсендә – ураҙа ла ине. Ә кантон идаралығы йорто тышта, ураҙанан ситтә. Ана шул Сәғит ағаһын улы Сәйфелмөлөк урынына ярҙамсы яһаны, Ҡолой.

Әбүтаһир менән Сәғит оҙаҡламай килеп керҙеләр. Мөхәмәтҡолой уларға башында тыуған фекерҙәрен фарман кеүегерәк итеп ваҡлап, бәрсәкләп еткерҙе. Шул ниәтендә Силәбегә, һуғыш күнекмәләренә фельдшерҙар сағырып, хат тоттороп сапҡын ебәргә бойорҙо. Ҡоншаҡҡа, Сыбаркүлгә лә сапҡын ебәргә, тине ул. Бынан башҡа, әгәр ҡалһа, генерал-губернаторҙы, уны оҙатып йөрөүселәрҙе, полкка килә торған әфисәрҙәрҙе, башҡа ҡунаҡтарҙы ҡайҙа, нисек ашатырға-эсерергә ентекләп һөйләне. Бигерәк тә Бикбаш менән әбейенә һәм улар йоҡлай торған йорттан йыраҡ түгел Ғәфифә өсөн айырым аулаҡ өй булдырыуҙы ла айырып, баҫым менән әйтте. Быны Әбүтаһир менән Сәғит аңланылармы, юҡмы, әммә һәр саҡ күрһәтмәне үтәйәсәктәрен белдереп, баш ҡағып ултырҙылар. Әҙерлек эштәре бик ҡыҙыу һәм тиҙ барҙы.

Мөхәмәтҡолой өсөн төн ни ҙә көн ни. Һәр төрлө мең эш, хужалыҡ мәшәкәттәре, халҡы мәнфәғәтен яҡлап губерна, уның ришәүәтселеккә сумған санауниктәре менән һәр төрлө яғалашыу, халыҡ менән йыйылыштар үткәреү, эш ойоштороу – бөтәһе лә, әллә көн, әллә төн араһында башҡарылды. Ашатҡан һайын ауыҙҙарын нығыраҡ аса бирәләр, өйәҙҙәгеләр ҙә, губерналағылар ҙа. Бигерәк тә губерна кәнсәләре башлығы Алексей Терентьевич Ермолаевтың ауыҙы ҙур асыла. Араны йыраҡ тип тормай. Юлды өйрәнеп алды ла килә лә етә. Ҡолой үҙе лә ғәйепле инде. Нишләптер Ермолайҙың бер килгәнендә, әйтте бит быға. Ҡарабаш, Ҡыштым, Һатҡы, Мейәс, Златоуст, Силәбе заводтарына он, ярма, ит биреп, кантонына кәрәк-яраҡ алып тороуын.

Тәмле еҫ ҡайһы яҡтан килеүен тиҙ төшөндө Ермолай. Шунан алып ҡаңғырта башланы.

– Әйҙә, мин һиңә ярҙам тигән булып, губерна канцелярияһынан аҡса бүлдертәйем. Ә һин минең исемдән фәлән заводҡа фәлән саҡлы ит, башҡа аҙыҡ-түлек тапшыр. Мин һиңә, нимә һорайһың, шул тиклем кәрәк-яраҡ, тимер-томор бирҙертермен. Әлбиттә, ҡоралдан башҡаһын, – тип теңкәгә тейә.

Башта был тәкдим уңайлы кеүек булһа ла, Ҡолой аҙаҡ ул килешеүҙән әллә ни файҙа күрә алманы. Завод ҡара тамаҡтары менән Алексей Ермолаев исеменән килешеү төҙөп, уларға аҙыҡ-түлек тапшырып ҡараны.

Әммә заводтарҙан тапшырылған ит, он, ярма өсөн бер нәмә лә ала алманы. Ермолаев шым ғына килә лә, заводтарҙан аҙыҡ-түлек өсөн аҡса ала ла китә. Кантонға төрән дә, тырма тештәре лә, тирмәндәргә тейешле кәрәк-яраҡ та юҡ. Нәүбәттәге алданыуҙан һуң китте Ҡолой йөҙлөгөн әйәртеп Ҡыштым заводы менән аңлашырға. Әнбаш күле янында йөҙлөгөн туҡтатып, атһыҙ, йәйәүләтеп, урыҫ телен белгән ике һуғышсыһын Ҡыштым заводында хәрби гарнизон торамы, ул ҙурмы, торһа, ҡайһы ерҙә, завод идаралығынан йыраҡмы һәм башҡа һорауҙарға яуап белергә ебәрҙе. Ҡыштымда ҙур булмаған гарнизон торғанын белгәс, Ҡолой йөҙлөгө менән завод идаралығына килеп туҡтаны ла, үҙе хужаларына керҙе. Һорауҙы ярып һалғас, улар Ҡолойға яңы килешеү ҡағыҙы күрһәттеләр. Бынһында инде ит, он, ярма һәм башҡа аҙыҡ-түлек биреү тик Ермолаев исеменән генә төҙөлгән булып сыҡты. Ә элекке ҡағыҙҙағы кеүек Мөхәмәтҡолойҙоң ҡултамғаһы бөтөнләйгә юҡ. Иреш-талаш булманы. Мөхәмәтҡолойға йөҙлөгөн әйәртеп кире ҡайтып китергә генә ҡалды. Ырымбурҙан, Ям-почта аша Алексей Ермолаевтан килә торған аҡсаны көн һайын көттө ул. Әммә аҙна һайын ям аттары үтһә лә, аманат килмәне. Шул ваҡиғаларҙан һуң Мөхәмәтҡолой заводтарға аҙыҡ-түлек биреүҙе ҡәтғи туҡтатты. Китте талаш, китте аңлашыуҙар. Хәбәр-ғауға губернаға уҡ етте. Эште ҙурға ебәрмәҫ өсөн Ермолаев үҙе килеп төшмәһенме? Ҡолой кантон уны әйләндерелгән бүре бүрке кейеп ҡаршы алды. Һәр ваҡыттағыса алдына ҡуйылған тоноҡ һыуҙы эсеп теле асылғас, Ермолаев таҫма телләнеп һүҙ башлаған ине, Ҡолой уны ҡырт киҫте. Уның был ҡылығы тураһында генерал-губернаторға, Сенатҡа, хатта батшаның үҙенә яҙасағын белдерҙе. Әлбиттә, әгәр Терентьич Алексей үҙ вәғәҙәһен үтәмәһә. Бөгөн завод кешеләре ас, эшкә сыҡмай, завод туҡтауы мөмкин. Был ваҡиғаларға инде ике йыл үтте.

Иң мөһиме, бөгөн төнгә ҡаршы юлға сығыу. Йомошсоларын, күсәрен тағы ла саҡырып алып, ҙур кырандасына ике ат егергә, һуғышҡа китә торған ерәнен әйәрләп, арба артына бәйләргә бойорҙо. Аттарға етәрлек һоло алыу – күсәр бурысы. Ә бына ниндәй әйберҙәр, бүләктәр алыу тураһында кәңәш итергә ул Сәғиттең ҡатыны Сабира еңгәһенә китте. Кәңәшләшергә кәрәк. Бер баштан икәү яҡшы. Мирхажи мулланың абыстайы Шәфиҡәне лә саҡырыу насар булмаҫ, барыбер бөтә белә бит, тип, Мирхажи мулланың өйөнә килеп керҙе. Керҙе лә, уйынан кире ҡайтып, еңгәһе Сабираны бында саҡыртты. Сәй әҙер булып табынға

ултырғас, дүртәүләп, никахҡа кемдәр барыуын, кем никах уҡып, кемгә ниндәй бүләк һәм хәйер бирергә кәрәклеген ентекләп һөйләштеләр. Фекер алышҡандан һуң шундай ҡарарға килделәр. Мирхажи муллаға тағы ла шул оҙон юлды үтергә тура киләсәк. Ул барғас, күркәмлек һәм абруйлыҡ өсөн уның абыстайы Шәфиҡәне лә ҡалдырмаҫҡа. Еңгәһе Сабира бара алмаҫ, сөнки Сәғит ағай ҡала. Әҙерлек эштәре бында бихисап. Мирхажи муллаға әбейе менән икенсе кырандас, аттар, әммә күсәре шул уҡ буласаҡ.

Донъя хәлен белеп булмай, ҡораллы ике унлыҡты һаҡ өсөн, берәһен алдан, икенсеһен арттан эйәртеп алыу дөрөҫ булыр. Атыш, ғәләмәт булыуы ихтимал. Поход ҙурмы, бәләкәйме, нимә алырға, нисек үҙ бурысыңды үтәүҙе унлыҡ баштары бөтә белә. Уныһында ҡайғы юҡ. Хәҙер ваҡыттың һәр миҡдары ҡәҙерле. Ҡояш Илмән һәм Талыу армыттары өҫтөнә барып менгән. Юлға сығыу һәр төрлө мәшәҡәттәре менән тотҡарланыр әле. Төнө буйы юлда булырға тура килер. Көсөк ауылына иртәрәк барып еткәндә, старшина Сәйфуллаға, йә Рәхмәтуллаға кереп, бер аҙ ял итеп, өҫбашты ҡарап алыу яҡшы булыр. Сыбаркүлде үткәс, шул вәжеүәт (важибәт) менән Сәйфуллаға сапҡын ебәрҙеләр. Алдан хәбәр ет-һә, шайҙана тороронҙар исмаһам. Шулай уйланы Мөхәмәтҡолой. Уйлағаны хаҡ булды. Сапҡын килеп, хәл-әхүәлде һөйләгәс, Сәйфулла бөтә ауылды аяҡҡа баҫтырған. Әллә нисә йортта аш-һыу әҙерләнә. Хатта мунсаһы ла өлгөргән. Йәйге мунсаға күп кәрәкме ни?

Сәйфулла менән Рәхмәтулла старшина һәр өйгә тиерлек кешеләрҙе, аттарҙы бүлеп, урынлаштырып сыҡтылар. Старшинаның ҙур йортона Мөхәмәтҡолой, Мирхажи мулла абыстайы менән өсәүләп урынлаштылар. Кисәү булһа ла, мунса төштөләр, ғөсөллән-деләр. Баллап, ҡаҡлап сәй эскәс, тәрән йоҡоға сумдылар.

Рәхмәтулла старшина иртәсел, әммә йоҡоға иртә ята. Әле көтөү киткәндә, ҡайһы бер ир-атты күреп һөйләшеп, ауылдарҙағы хәл-әхүәлдәрҙе һорашып өйгә кереүгә, ҡунаҡтары өсәүһе лә аяҡ өҫтөндә ине. Иртәнге намаҙҙы бөгөн уҡый алманылар. Ҡояш күтәрелеп, Бикәләрҙең урманлы тау-түбәләренең өҫтөнә менер саҡта, юлсылар тағы ла юлландылар. Кәйефтәре көр, ял итеп, хатта йыуынып та алдылар.

Ҡыйҙыш менән Юлдыбай аралығындағы Көршәк шишмәһенә еткәс, Мирхажи мулла һыҙғырып барыһын да туҡтатты. Ул бик әсе итеп тә, ҡалын итеп тә оҫта һыҙғыра белә ине. Хатта өкө булып та өкөлдәр, төлкө булып та өрөр, ҡош булып та һайрар маһирлығы бар. Бөтәһе лә уның арбаһы янына йыйылғас, үткәндә уға атыу ваҡиғаһын һөйләне. Һис бер шикләнеү, ҡурҡыу тойғоһо булмаһа ла, унлыҡтар, үҙҙәре белеп, берәһе алға, юл буйлап тикшерергә, ә икенсеһе арттан, юлды ике яҡтан да 30–40 ҡуһай ерҙе һөҙөп

барырға булып киттеләр. Нишләйһең, ҡушылмаһа ла, һаҡсының бурысы һаҡлау. Төрлө яуҙарға йөрөп өйрәнеп бөткән һәр бурыстың үҙ алымын яҡшы белә ине Ҡолой.

Убалы йылғаһын үтеп, Мирхажи муллаға атҡан Рахманғол үҙәген дә хәтер-хәүефһеҙ үтеп, Мулдашҡа еттеләр. Юлда һөйләшеп килешкәнсә, Мирхажи мулла абыстайы менән тура Бикташтың йортона бара. Һөйләшә. Никах шарттарын, мәһәр күләмен белә. Кемгә, ниндәй бүләк биреүҙе билдәләйҙәр. Иң мөһиме, Мирхажи мулла менән абыстайы Бикбаш менән Бәҙернисаның күңелдәрен яуларға тейеш. Кем никах уҡыясаҡ. Артыҡ киңәйтмәй генә, иң яҡын ағай-энеләрҙе никах ашына саҡырыу, мәһәрҙе һәм бүләктәр бирешеү табынын ойоштороу һорауҙары ла ҡаралырға тейеш. Мөхәмәтҡолой, буласаҡ кейәү, буласаҡ ҡайныһы йортона бармай, тура Хәйретдин йортона барасаҡ. Унда ауыл старостаһы, ауыл һис шикһеҙ киләсәк. Алдан ебәрелгән сапҡын уға урынлашыу һәм һаҡлыҡ мәсьәләләрен һөйләһә, Бикбаш менән сара күреүҙәр әле. Уларға был тирәләге барлыҡ халыҡ билдәле.

Килешкән буйынса эшләнеләр. Урамға икешәр ат егелгән ике кырандас, ҡораллы унлыҡтар килеп кергәс, урамда уйнап йөрөгән бала-саға пыр туҙып йүгерешеп, төрлөһө төрлө яҡҡа ҡасты. Батырайып, лаулап өргән эттәр ҙә, балалар ҡасып бөткәс, шымдылар. Сүплек эҙләп, тауыҡтары менән тибенеп йөрөгән ҡыҙыл әтәс кенә һис ҡурҡманы! Кеткелдәп-кеткелдәп, тауыҡтарын саҡырып, ниҙер сүпләне лә, күкрәген киреп, һуҙып-һуҙып ҡысҡырҙы.

Урам неперелгән, тап-таҙа. Туҙып ятҡан таш та, ағас та, сүплек тә юҡ. Кемдең ел ҡапҡаһы, иркенерәк йәшәгәндәренең таҡта ҡапҡаһы шар асыҡ. Өй алдында ултырған түбәтәйле ир-ат, бөтәһе лә аяғүрә баҫып, килгән ҡунаҡтарға баҡҡан.

Ауылдың старостаһы килгән унлыҡтарҙы икешәрләп, йә өсәрләп бүлеп, йорттарға таратып керетте. Мөхәмәтҡолойҙоң аттарының башынан тотоп, Хәйретдин мулла үҙенә алып ҡайтты. Сапҡын килтергән хатта шулай һоралған ине. Бикбаштың да, таҡта ҡапҡаһы шар асыҡ. Әммә ул үҙе ҡапҡа төбөндә юҡ. Ҡушылған кешеһелер, моғайын, кемдер берәү Мирхажи мулланың аттарын етәкләп, Бикбаштың киң, асыҡ ураҙаһына килеп керҙеләр.

Бикбаш уны ҡапҡа әсендә лә ҡаршы алманы. Быға бер аҙ аптырабыраҡ ҡалған Мирхажи мулла кырандасынан төшөүгә, байрамса кейенгән Бикбаш, ҡатыны Бәҙерниса шаулаша-һөйләшә өйҙән килеп сыҡтылар ҙа, бик ихласлап килеп күрешеп, тапҡыр өйгә саҡырҙылар. Бара торған ергә сиратлап кереп сыҡҡас, өйгә керҙеләр.

Өй ҡунаҡса йыйыштырылған, аш-һыу ҙа әҙерләнгәне күренеп тора. Сәйгә ултырғас, Мирхажи мулла яйлап ҡына, ул тиклем үк уратмай буласаҡ мәжлестең ни сифатта үтәсәге тураһында фекер

һораны. Иренән алда хәбәр һөйләргә, тәкдим керетергә ярамағанлығын белһә лә, Бәҙерниса, күрәһең, үҙ-ара һөйләшеп, һүҙ алды.

– Хәбәр асыҡ, бөтәбеҙ өсөн дә булһын. Табынға кейәүҙе яраны менән сағырайыҡ.

Яран тигәнен бөтәһе лә аңланы. Ул Хәйретдин мулла менән уның абыстайы Сәйҙә була инде.

– Бында хәҙер йәшерен-боҫороно юҡ. Үҙҙәре риза булғас, бындай ҙур юл-яу алдынан ҡаршы килеп булмай. Атаһы Ҡорама кантонға барып Ғәфифәне яуҙан ҡалдырыуҙарын һораһа ла, ул ыңғай яуап ала алмаған. Сөнки өйәҙ табибы бер кешене лә, бигерәк тә табиплыҡ мәктәбен бөтөргәндәрҙе айырым иҫәптә тотоуҙы ҡәтғи итеп ҡуйған. Яуға бергә киткәс, бергә булһындар. Күҙ-ҡолаҡ ҡына түгел, бер-береһен ҡарап, бер-береһенә хужа булып, бер-береһен ҡурсалап йөрөрҙәр исмаһам. Юҡ, юҡ, теләһә нимә булһын, ҡырҡ сәбәп табырмын, әммә Ғәфифәне ҡурсалаусы кешеһеҙ ундай юлға ебәрмәҫ инек, – тип һөйләне Бәҙерниса.

Саҡырттылар кейәүҙе яраны менән был табынға. Күп ваҡыт та үтмәне, һарайға бикләнгән эттәрҙе саялатып, өрҙөрөп, абыстайы менән яраны һәм үҙе, буласаҡ кейәү Мөхәмәтҡолой, ҡапҡа эсенә килеп керҙеләр. Хужалар тороп, ҡунаҡтарҙы ҡаршы алырға күрнисәгә үк сыҡтылар. Тышта күрешеп, һөйләшә-һөйләшә өйгә килеп керҙеләр ҙә, тейешле сүрәләрҙе уҡығас, ҡулдарын йыуып, йомшаҡ кейеҙ, эргә юрғандар, аҫыл ашъяулыҡ өҫтөндәге бай тәғәмле табынға, урындыҡҡа менеп, ирҙәр аяҡ салып, ә өс абыстай, ҡатын-ҡыҙ ситтәнерәк урын алдылар.

Кергән кешеләр үҙ-ара һөләшә-һөйләшә ҡытай, каолин балсығынан эшләнгән, фарфор тип аталған сынаяҡтарҙың йә сылтыраған, йә келтерәгән тауыштарын, шыбырлап сәй яһалғанын тыңлап көтөп ултырҙылар. Ә кейәү табынға килмәй ҙә килмәй. Мөхәмәтҡолой Хәйретдин мулланы абыстайы менән ҡапҡа эсенә оҙатып кергәндә үк, ураҙа төбөндә ултырған өйҙәң тәҙрә пәрҙәһе бер яҡҡа тартылып, унан Ғәфифәнең ҡарап тороуын күрҙе. Буласаҡ ҡайны-ҡәйнәһе менән күрешкәс, уларҙың шаулашып һөйләшә-һөйләшә өйгә кергәнен көтә бирҙе лә туп-тура Ғәфифәнең өй ишеген хужаларса, ышаныслы, әммә ҡәтғи тартып асты ла бейек үк булмаған ишектән башын әйә биреп кереп, ишек төбөндә шаҡ ҡатты. Өйҙә бер кем юҡ ине. Арлы-бирле ҡараһа ла һис ни төшөнә алманы. Күңел күҙе күрмәһә, маңлай күҙе ботаҡ тишеге, ти. Ысынлап та, ҡайһы ваҡыт маңлай күҙе ботаҡ тишеге икән шул. Уңда ултырған ап-аҡ мейестән алып ҡаршы яҡҡа тиклем бүрәнәләр кеүек үк һары-көрәнһыу, әммә биҙәктәр төшөрөлгән пәрҙә тартылып, сымылдыҡ яһалған икән. Сымылдыҡ ситен әҙ

генә асыуы булды, эстә Фәфифәнең уға арты менән тороуын күрҙе.

– Фәфифә, – тине Ҡолой шым ғына. – Бына мин килдем, – тине лә ике ҡуллап Фәфифәне арттан ҡосаҡланы.

Әллә нәмә булды ла ҡуйҙы Фәфифәгә. Нисәмә йыл инде бер ирҙең дә ҡулы теймәгән тәне, өйрәтеүгә муйынына ҡороҡ ташланған тыу байтал кеүек, ҡалтыранды ла китте. Әллә ҡурҡыу, әллә оялыу, әллә ләззәт кисерә ине. Үҙе лә аңламаны.

– Фәфифә, мин килдем, бөгөн беҙ никахҡа инәбеҙ, – тип Ҡолой уны үҙенә әйләндерҙе лә, үҙе лә һиҙмәҫтән маңлайынан, унан һуң иреененән үбә башланы. Икеһенең дә тәндәре сымырлап, аяҡтары ҡалтыранды, тәндәренә әллә ниндәй эҫелек йүгерҙе.

– Бөгөн никахҡа инәбеҙ, – тип тағы ҡабатланы ул, – һин минең иң яратҡаным булырһың. Мин бит бер ваҡытта ла өйләнмәгәнмен. Ғүмерем буйы күңелем яңғыҙ булды. Ғүмерем буйы һине эҙләгәнмен икән.

– Мин дә, – тип саҡ-саҡ ҡына ирендәрен ҡыймылдатты Фәфифә лә.

– Бына һиңә әлегә бүләгемдең бер өлөшө, – тип, кеҫәһенән алтын алҡалар, көнсығыш көмөшөнән эшләнгән киң беләҙектәр, Мәрмәр диңгеҙенең гәрәбәләрен һәм Ҡыҙыл диңгеҙенең мәрйен-ҡылмауҙарын Фәфифәнең нәфис муйынына таҡты. Бармағына алтын балдаҡ кейҙерҙе. – Ҡалғанын ҡайҙа, ҡасан кейеүеңде үҙең беләһең. Ижапты мәсеттә бөтә ауыл халҡын йыйып уҡытабыҙ. Көслә уҡытыу төҫөн алмаһын, тип, ижапты үҙегеҙҙең мулла Хәйретдин ағай уҡыясаҡ. Ижап тантанаһына бер тыу бейә һуйҙыртам. Бөтә ауыл никах ашын ашар. Һин ризаһыңмы, – тип тағы ла шыбырлағандай итеп һораны Мөхәмәтҡолой.

Йәне ҡырағайланып китеп, тәне ләззәт татыған Фәфифә:

– Эйе, – тип саҡ әйтә алды.

– Кис ҡосаҡлармын тағы ла. Ә хәҙер миңә өйгә керергә кәрәк, – тип әйтеүе булды, Бәҙерниса абыстай:

– Фәфифә, Фәфифә, – тип ҡысҡыра-ҡысҡыра уның өйөнә табан килә ине. Мөхәмәтҡолой уның ҡаршыһына тап итеп килеп сыҡты ла һис бер ни булмағандай төп йортҡа атланы.

Ҙур өйҙәге табын янына барыһы ла йыйылып бөткәс, Мирхажи мулла, кейәүҙең атаһы рәүешен алып, һүҙ башланы:

– Ҡыҙ алмаҡ, ҡыҙ бирмәк күптәнге йола. Әммә йоланың да йолаһы бар. Йолаһын йолалайыҡ, ҡоҙа. Мәһәре күпме булыр? Миҡдарлапмы, әллә һанамаҡмы? Яурындыҡҡа ла һорарһыңмы? Әллә шәп атлата торған тула ҡуныслы шаҡ ҡатамы?

– Бер ҙә шаҡ ҡатып ултырмайбыҙ әле, ҡоҙа-хәҙрәт. Хәҙер һорайбыҙ беҙ уны. Хәҙер бүре алыр заман үтте. Мәһәренә шул булыр. Бүре толоптон. Әбейгә тау төлкөһөнөң бәсәһенән тегел-

гән тун. Аяғына болан аш ҡағы тирәһенән тегелгән үксәле итек. Ҡыҙыма кейәреләсәк алҡа, ҡулдарына көмөш беләҙек. Һәйбәт тауарҙан тегелгән күлдәк-ыштан. Миңә лә, әбейгә лә. Ун баш йылҡы, тине Бикбаш.

Ул, ун баш йылҡы, тигәс, Мирхажи мулла көлөмһөрәп ҡуйҙы ла, ун мең баш йылҡы хужаһы булған кешегә ун баш йылҡы йылҡымы ни ул, тип уйланы.

Уның көлөмһөрәүен күргәндәр, әлбиттә, һәр кем үҙенсә аңланы.

– Ун йылҡы, тип әйтәһеңме, ҡайным, – тип тәүләп өндәште Мөхәмәтҡолой.

Бер аҙ тын торғандан һуң Бикбаш:

– Эйе, ун йылҡы, – тине.

– Ниңә улай бик әҙ һуң? Егермене, иллене ал, – тине Ҡолой.

Табында тынлыҡ урынлашты. Уны тағы ла Бикбаш боҙҙо.

– Ярар. Биргәндең тешен ҡарамайҙар, тиҙәр. Үҙем әйткәнсә, ун баш миңә булыр. Араларында, бәлки, өйөр айғырына ярашлы хайуан килер. Малдың, өйөрҙөң дә ҡанын алмаштырырға кәрәк. Юғиһә өйөр иҫкереп бара. Ә вәғәҙә иткәндең ҡырҡ башы үҙеңдә торһон. Буласаҡ, киләсәк тиеүем инде, сабыйға нәҙер әйтәм. Ҡырҡ баш. Ә миңә ун да етер. Нәфсене тыя белеү ҙә Аллаһы Тәғәлә алдында сауап алыу. Бынан тыш... ике фарсы келәме... Шул булыр мәһәр. Шулаймы, әбей, – тип, сәй яһап таратып, биреп ултырған әбейенә борола биреп һораны.

– Ә Ғәфифәнең үҙенәсе, үҙенә, – тип һорау биргәндәй әйтте Бәҙерниса.

– Ә Ғәфифә үҙе ни теләй, шул булыр. Уға сик юҡ. Үҙе әйтер әле яйлап, – тине Ҡолой.

– Иң мөһиме, яуҙан иҫән-һау әйләнеп ҡайтһындар, дошманды еңеп, – тип өҫтәне Хәйретдин мулла.

– Эйе, эйе, дөрөҫ, – тип һүҙгә ҡушылды Мирхажи мулла.

– Ярар, мәһәрен хәл иттек. Ә ижапты кем уҡыр? Ҡайҙа үткәрәбеҙ был сараны? – тип һораны Ҡолой. Ҡолойҙоң был турала, ҡырҡа ҡарары бар ине. Никахҡа инеү, бөтә ауыл халҡын йыйып, мәсеттә, ә ижапты Хәйретдин мулла башҡарырға тейеш, тип ҡарар ҡылған ине ул. Алдан һөйләшеп ҡуйыу буйынса, нәк тә Ҡолой теләгәнсә үткәреү тәҡдимен Мирхажи мулла асып һалды. Ҡаршылар булманы. Мәсеткә барыр булғас, сәй табыны оҙаҡ барманы. Бәҙерниса абыстайҙың алдан саҡырылған ярҙамсылары, Ғәфифәнең ике туған апайҙары, еңгәләре алғы өйгә килеп тулдылар. Һуңлабыраҡ булһа ла, Ғәфифәнең 18-се полк менән яуға китәсәк ағайҙары, еҙнәләре лә ҡылыс тотоп килеп керҙеләр. Буласаҡ кейәүҙәре Ҡолой менән ике ҡуллап күрешеп, ғөрөфтө еренә еткерҙеләр. Бикбаш ике оло улы Ғафар менән Ғәфүргә

әйеш-көйөштө ситкәрәк китеп бөтә төшөндөрҙө. Барлыҡ халыҡ, нисек килгәндәр, шулай гөрөлөп мәсеткә китте. Ҡапҡа эсенә Ҡолойҙоң кырандасҡа егелгән ике ҡараһын керетеп, бороп ҡуйҙылар. Еңгәләре, апайҙары Ғәфифәне үҙ өйөндә кейендерепяһандырғансы, Ҡолой ҙа үҙенең әрҙегә кейә торған кейемдәрен, ярым хәрбисә, ярым халыҡса мыяттарын кейҙе. Текә уҡалы яға, ялтыр төймәле бишмәт, еҙ таралғылы ҡайыш билбауына швед һуғышында күрһәткән тәүәккәллеге өсөн алған исемле ҡылысын тағып ебәргәс, танығыһыҙ сүрәткә керҙе Ҡолой. Нәҡ тә кантон начальнигы булды ла ҡуйҙы.

Ғәфифәнең янына барырға һис мөрхәт тапмай, кырандасы янында көттө. Бына бер ваҡыт шаулашып, һөйләшә-көлөшә Ғәфифәнең өйөнән сыҡтылар ҙа, еңгәләре уртаһында килеп, кырандасҡа күрһәтелгән урынға менеп ултырҙы. Ҡолой йәнәшенән урын алды. Кем, нисек һыя, кырандасҡа шулай тейәлделәр ҙә, ҡапҡа асылыу менән мәсеткә ҡуҙғалдылар. Кантонды кантон тип белмәй, уға һәр төрлө төртмә-шаян һүҙҙәр әйтеп, көлөшә-көлөшә мәсет алдына килеп тә туҡтанылар.

Мәсет алды тулы кеше. Олоһо ла, кесеһе лә килгән. Кем исеме бөтә тирә-йүнгә билдәле Ҡолой кантонды күргә, ә ҡыҙ-ҡатын Ғәфифәнең күлдәген, өҫтөнә кейгән тәңкәле, уҡалы камзулын күргә, ә кемдер һуғышҡа бергә китәсәк был ике йәнде күргә, эскерһеҙ теләктәр әйтергә килгәндәр. Мәсеттән ситтәрәк, түбә итәгендә тағандарға ҡаҙандар эленгән. Ҡайһы бер ҙур ҡаҙандар тағанға эленмәй, толғаға ғына ҡуйылған. Төтөн аралаш тәмле ит быуы тирә-яҡҡа таралған. Хәбәр менән алдан ебәрелгән сапҡын аша Мөхәмәтҡолой бер тыу бейәне һатып алып, бөтә ауылды һурпа, ит менән һыйлар өсөн мул ғына итеп аҡса биреп ебәргән ине.

Ауыл башы староста, күрәһең, был эште бик сос ойошторған. Бөтә халыҡтың һәм Ғәфифәнең яҡындары, Ҡолойҙо оҙата килеүселәр яйлап ҡына мәсеткә керҙеләр. Хәйретдин мулла, Мирхажи кеүек үк, бындай сараларҙы һәр ваҡыт үткәреп торғанлыҡтан, кемдең, ҡайҙа тороуын, йә ултырыуын, йәки башҡа ғәмәлдәрҙе бик яҡшы белә. Мөхәмәтҡолойҙоң ата-инәһе булмағанлыҡтан, уларҙың урынын Мирхажи мулла менән абыстайы Шәфиҡә биләне. Ир менән ҡатын булыуҙары тураһында ҡарар ҡабул итеп, уны иғлан итер алдынан ниңәлер Хәйретдин мулла үҙ теләге менән риза булыуын Ғәфифәнән ҡабатлап ике тапҡыр һораны. Тәүге яуабында Ғәфифә әйе менән сикләнһә, икенсеһендә тулы яуап бирҙе.

– Эйе, үҙ теләгем менән барам, – тигәс, йәнәш ултырған Ҡолойҙоң ҡул бармаҡтарын башҡаларға күрһәтмәй генә ҡыҫып-ҡыҫып алды.

Ҡолой өсөн был Хәйретдин мулланың ижап уҡыуынан да ҡиммәтерәк ине. Шулай ҙа уның, хәҙер һеҙҙе, Мөхәмәтҡолой Йәрмөхәммәт улы ғаиләләһе ир, ә Ғәфифә Бикбаш ҡыҙын ғаиләләһе ҡатын, тип иғлан итәм, тигәс, Ҡолой Ғәфифәнең йомшаҡ ҡулдарын усы эсенә үк алып ҡыҫып-ҡыҫып алды.

Никах уҡылып бөткәс, Ҡолой кантон халыҡ менән аралашып, хис-тойғоларын, эштәрен, теләктәрен белергә тип, Ғәфифәнең үҙенә һәм еңгәләренә әйтте лә, өйөлөшөп торған ир-ат янына килде. Ихласлап барыһы менән дә күрешеп сыҡты. Никах уҡылһа ла, ҡайнаға булып бөтмәгән Ғафар һәм Ғәфүр ҡоронда ул үҙе һорау бирә башланы.

– Ауыл нисә десятина бөртөклөләр сәсте? Күпмеһен урҙығыҙ, һуҡтығыҙ? – тигән һорауға бирһе лә яуап бирә алманы. Һәр ҡайһыһы айырым-айырым, мин – өс десятина, мин – дүрт десятина, мин – ике, тип яуап бирә башлағас, быларҙың тырым-тырағай, һәр кем үҙ аллы эшләүен аңланы.

– Ә мал-тыуарығыҙ нисә баш, – тигән һорауға ла һәр кем үҙенең малдарының иҫәбен әйтте. Ә ҡайһы бирһе хисабын да белмәй ине.

– Беҙҙә, 5-се кантонда, тормош улай түгел. Беҙҙә ер дөйөм. Был минеке, был һинеке, тип тормайбыҙ. Ер кантонға беркетелгән. Беркеттек. Үҙебеҙҙең дөйөм йыйылыш ҡарары менән. Әммә һәр йөҙлөктөң үҙ ере, биләмәһе бар. Беҙ ерҙе һеҙҙең кеүек десятина менән бүлмәйбеҙ. Биләмә һәм уның сиге менән бүләбеҙ. Мәҫәлән, минең, кантон башлығы булһам да, үҙемә генә тәғәйен ерем юҡ. Мин, мәҫәлән, 16-сы алайҙың 1-се йөҙлөгөндә икән, тимәк, минең беренсе йөҙлөктә ерем. Беренсе йөҙлөккә дүрт ауыл ҡарай. Сәсеү ере сама менән 500 десятина. Ужым да сәсәбеҙ, 100 десятина самаһы. Һәр ауылға 125 десятина тура килә. Әнә шул 125 десятинаны тырым-тырағай түгел, ә дөйөм көс менән һөрәләр, сәсәләр, ураллар. Кантоныбыҙҙа 5 тирмән бар. Һәр ауыл халҡына ғаиләһенә ҡарап етерлек итеп он, ярма тартып таратабыҙ. Ә эштә бер ауыл үҙ эшен иртәрәк бөтһә, көтөп тормай, икенсе ауылға ярҙамға килә. Сөнки улар бер йөҙлөк кешеләре. Яҙмыштары уртаҡ. Урыуҙа ла, һуғыуҙа ла ырҙыныбыҙ берәү, ул уртаҡ. Мәҫәлән, яҙғыһын Иҫәнгилде ауылы илле һуҡа бергә төшөп, бер игенлекте һөрәләр. Бер көнгә 30–40 десятина ер һөрөлә. Күмәкләһең, яу ҡайта... Мал-тыуар ҙа дөйөм. Һәр йөҙлөктөң үҙ өйөрҙәре. Теләһәләр, егәләр, теләһәләр, өйрәтеп менәләр. Губерна өсөн ҡағыҙҙа бөтәһе лә минең исемдә яҙылһа ла, ғәмәлдә ул һәр алайҙыҡы, йәки, урыҫса әйткәндә, полктыҡы. Үҙҙәре баш, үҙҙәре түш. Ә мин, кантон башы булараҡ, дөйөм етәксе. Минең, губерна тарафынан бирелгән кантонлыҡ хоҡуҡтарымдан тыш, дөйөм хужалыҡҡа етәкселек хоҡуғым да бар. Быныһы ҙурыраҡ,

мөһимерәк. Ул хоҡукты миңә губернатор ҙа бирмәгән. Ул хоҡукты ергә хужалыҡ биргән. Ергә аҫабалыҡ биргән. Ә ергә хужалыҡты, аҫабалыҡты яҡлау, һаҡлау өсөн ата-бабаларыбыҙ, батырҙарыбыҙ, сәсәндәребеҙ, милли зиһенлеләребеҙ етәкселегендә быуаттар буйы көрәшкән. Дөйөм ил өсөн бөгөн дә көрәшәбеҙ. Әгәр беҙ дөйөм илдең тулы үҙаллылығын тәьмин итеүҙә күмәклəп көс һалмаһаҡ, һөҙөмтәһен әйтеүе, ай-һай, аҕай-эне, бик ауыр, бик ауыр.

Бына шул ерҙе күмәклəп, бергәлəп, бер ергә көстө туплап эшкәрткән, сәскән, урған, һуҡҡан кеүегерәк инде.

Малды ла дөйөм тотабыҙ, дөйөм ҡулланабыҙ үҙ мәнфәғәтебеҙҙә. Беҙҙә берәү ҙә ас түгел. Һәр йортта етерлек ит, икмәк, ярма, һөт булғас, башҡаһын үҙҙәре йүнәтә инде. Әйткәндәй, һауын һыйыр малын һәр кем үҙе тота, үҙ ғаиләһенә етерлеген. Ҡәлғә ҡалалар йыраҡ булғас, беҙ һатыу итмәйбеҙ. Ул завод-ҡәлғәләргә беҙҙекеләрҙе керетмәйҙәр ҙә, кергән хәлдә лә, урамдарында йөрөгән, үҙҙәре әйтмешләй, шпаналар һәм иҫеректәр алып барған аҙыҡ-түлекте йә урлай, йә талай. Беҙ ул һатыу итеүҙе Мейәс менән килешеп ҡараған инек, килеп сыҡманы. Беҙҙең халыҡ шуға ул баҙарҙан баш тартты. Ит һатыу ҙа, аш һатыу ҙа шулай. Айырым кешеләр унда баҙар ҡора алмай. Шуға ла һөт өсөн, һыйыр малын кемгә күпме һөт, май кәрәк, шул миҡдарҙа тоталар. Май эшләйҙәр ҙә, кантонлыҡҡа тапшырып, кемгә нимә кәрәк, шул әйберҙе һорайҙар. Күберәк сөй, балта, салғы, көрәк, ҡаҙан, тимер биҙрә, бысаҡ, хәнйәр... һорай.

Ә беҙ завод менән шул әйберҙәргә килешеүҙәр төҙөп эш итәбеҙ. Һеҙ тырым-тырағай эшләйһегеҙ. Беҙҙә һәр ғаилә башының аҫабалыҡ хоҡуғы бар. Ә ул үҙ ғаиләһе менән килешеп, ерҙе йөҙлөк еренә, дөйөмгә биргән. Айырым йәшәгәндәр ҙә бар. Әммә уларға ауырыраҡ. Ул ваҡытта беҙ уларҙан күрһәткән эш, ярҙам өсөн кантондан аҡса һорарға тейеш булабыҙ. Кантон идараһы менән килешеү төҙөргә мәжбүрҙәр. Әлбиттә, кантон сит ерҙән килгән кеше булһа. Ә үҙ кешебеҙ тәғәйенләнһә, ундай ҡытыршылыҡ аҙ була. Бына мин яуға китәм, әммә урынға үҙ кешебеҙҙе тәҡдим итергә йыйынабыҙ губернаторға. Һеҙҙең кантон яуға бармай. Уға шул дөйөм эште ойоштороу буйынса эш алып барырға кәрәк ине лә бит. Хәҙер уның иң таяныслы, иң һүҙ үтмәле абруйлылары яһауыл Насир Ҡужаҡаев, илле башы Әбдерәшит, йөҙ башы Бәшәретдин, яһауыл Йыражбай, йөҙ башы Баязит яуға китһәләр, кешеләрҙе берҙәм эшләргә күндереүе ауырға төшәсәк. Шулай ҙа һуғыш шауҡымы менән килгән ауырлыҡтар, бәлки, халыҡты был алым менән бергә эшләргә күндерер.

Бына шундай фәһемле лә, яңы ла фекер әйтте яңы кейәү. Мөхәмәтҡолой, халыҡ менән хушлашып, бәлки, мәңгегәлер китә

башлағас, уға аштың бешеуе һәм үҙе бүләк иткән тыу бейәнең итен ауыҙ итеп китеү өсөн, ҡаҙанлыҡ янына, табынға саҡырҙылар. Был тәҡдимдән баш тартыу, бер яҡтан, халыҡты һанға һуҡмау кеүек булһа, икенсе яҡтан, саҡырған, бигерәк тә ихлас саҡырған ергә бармау әхлаҡһыҙлык, тип уйланы ул. Өсөнсө яҡтан, аш ҡәҙерен бора баҫырға ярамай, ул ғөрөфтө боҙоу була, бигерәк тә үҙ никах ашын. Шуға ла ул тегендә, Ғәфифә янына һәм ҡайныһы өйөнә бик барғыһы килһә лә, туҡтарға, йәйелгән кейеҙ өҫтөнә аяҡ салып ултырып халыҡ менән ит ашарға мәжбүр булды.

Әммә халыҡтың уның менән, төрлө-төрлө һорауҙар биреп, һөйләшеп ултырғылары килде. Эш, төҙөлгән алайҙар, ҡорал менән тәьмин ителеү, тәүләп бер төркөм ҡыҙ-ҡатындың лекарҙар булып алайҙар менән яуға китеүе, әммә быға муллаларҙың да, халыҡтың да риза булмауы тураһында ла фекер әйттеләр. Барлыҡ һорауҙарға ла Ҡолой яуап бирҙе. Әммә һуңғы һорауға баҫым яһап, былай тине: «Яуға киткән һәм китәсәк башҡорт алайҙарында лекарҙар төркөмө бар. Әммә улар бөтәһе лә ирҙәр, бер үк ваҡытта һуғышсылар ҙа. Шәриғәт ҡыҙ-ҡатынды яуға ылыҡтырыуҙы хупламай кеүек. Әммә үҙе теләһә, ил һаҡлауҙа бурысын үтәп, яраланғандарға ярҙам итеү үҙе бер изге эш булғанлыҡтан, уға ҡаршы килә лә алмайҙыр. Губернатор килә беҙгә һуғыш әҙерлеген ҡарарға. Ул ризалыҡ бирә икән, теләгәндәргә юл асыҡ...

Башҡаса оҙаҡ ултыра алманы Ҡолой. Хушлашып, ҡайнағалары Ғафар һәм Ғәфүр оҙатыуында ҡайныһы йортона атланылар. Йорт ихатаһына кергәс, ҡайнағалары атаһы йортона, табындағылар янына керҙеләр. Ә Ҡолой сыҡылдашып көлөшкән, бер-береһен тыңламай болашмаҡ һөйләшкән еңгәләр һәм Ғәфифәгә апай тейеш кешеләр тауыштары сыҡҡан йортҡа атланы.

Өйгә кереү менән мут, сая еңгәләр Ҡолой кейәүҙән ҡайһы күлдәккә йыртыш, хушбый, көнсығыш быялаһынан эшләнгән көҙгө, тараҡ һәм әллә ниндәй ул белмәгән гәлсәр-зәбәржәт ҡашлы йөҙөктәрҙе уйынлы-ысынлы һорауҙар аша яуҙырҙылар. Шунда Ҡолой үҙенең бер ни тиклем яңылышлыҡ ебәреүен төшөндө.

Был һорауҙарҙы хәл итеү өсөн, уға йә еңгәһе, Сәғиттең ҡатыны Сабираны алып килергә, йә был бурыстарҙы үтәүгә Мирхажи мулланың абыстайы Шәфиҡәгә йөкмәтергә кәрәк булғанлығын аңланы. Әлбиттә, еңгәләр һораған барлыҡ нәмә булмаһа ла, кырандас артында ултырған һандыҡта ҡайһы бер нәмә барлығын ул белмәй ине әле. Был һандыҡты башҡа еңгәләре менән һөйләшеп, күсәренә һәм Шәфиҡә абыстайға белдереп, Сабира һәм башҡа еңгә тейеш кешеләре ултыртып ебәргәндәр ине. Кырандас артында ултырған һандыҡты Ҡолой юлда, әлбиттә, күргән ине. Зиһененең әллә ниндәй төйөнөн сисеп, шул һандыҡ уға, еңгәләренең һорауына батһа ла, тотонор бер әмәл булды. Кантон на-

чальнигы булыуын онотоп, бик кеселеклек һәм хуш күңеллелек күрһәтеп, тауышында шаярыу ҡылдарын сиртеп былай тине:

– Әй, еңгәләрем! Еңгәләрем минең, еңгәләрем! Берәү генә түгел, етәү һеҙ! Етәүегеҙ уҙышмаҡтан минән һорайһығыҙ ете бүләк. Ә бүләктәр һандыҡта. Ә ул һандыҡ кырандаста. Һандыҡҡа көс етмәй...

Шулай бик йәтеш сыҡты Ҡолой еңгәләренең һөжүменән, тиҙерәк барып һандыҡты асығыҙ, тип, еңгәләрен ул һуғар ҙа, был һуғар итеп өйҙән сығарып ебәрҙе.

Хәҙер улар икеһе генә ҡалды. Тик икеһе генә. Ҡояш әле ярайһы уҡ юғарыла. Өйлә намаҙы ваҡыты үткән ине инде. Уны әллә никахта, әллә аҙаҡ, таралышҡас, уҡынылар. Нисек кенә булмаһын, өйлә ваҡыты һөйләшеү менән үтте кеүек. Кешеләр яңы фекергә, яңы мәғлүмәткә әллә шаҡ ҡатып, әллә иҫтәре китеп, өйләне лә оноттолар. Хәйер, Хәйретдин мулла яндарында юҡ. Ул Бикташҡа никах ашына саҡырылғайны. Әле ваҡыт икендегә китеп бара.

– Никах ашына бергә керәйек. Хәҙер бергә беркеттеләр бит инде. Хәҙер беҙгә күберәк бергә булырға кәрәк ине лә бит. Өйрәнешеп тә өлгөрә алмай яуға сығып китәбеҙме? Бармай бер хәл дә итеп булмай. Өйәҙҙә лә, губернала ла ул мәсьәлә хәл ителгән. Тик бына ҡатын-ҡыҙҙар лекарҙар төркөмө генә барыу-бармауҙары ҡырҡа хәл ителмәгән шикелле. Әгәр ҙә ул һорау хәл ителмәһә? Һине үҙем менән алып китеп булмаҫ микән ни?

Ҡолойҙоң башын әллә ниндәй уйҙар баҫты. Ысынлап та, Ғәфифәнең минең менән яуға барыу-бармауы ҡыл өҫтөндә генә түгелме? Уны өйгә алып ҡайтып, Аҡбикә менән Зөләйхәнән талатырға ҡалдырып булмай. Уға ул үҙе лә риза булмай. Өйҙә башҡа бисәләр менән тигеҙерәк хоҡуҡта ҡалдырыр өсөн, кәмендә берике йыл бергә йәшәргә кәрәктер. Ә был юҡ. Ғәфифә яныңа ризалығын һорап инде өс-дүрт йыл килеп йөрөһәм дә, әлегә тиклем ризалыҡ булманы. Йылдар әрәм үтте. Әгәр губернатор әрмене боҙоп, ҡатын-ҡыҙҙы яуға ебәрергә риза булмаһа? Бөттө баш! Тимәк, Ғәфифә тағы ла нисәлер йылға шул йортта, атаһы йортонда тороп ҡаласаҡ. Губернатор миңә киләсәктә башҡорт алайҙары ҡушыла торған корпус, армия командующийҙарына 16–17-се полк башының ҡатынын, Бикташева Ғәфифә Бикбаш ҡыҙын денщик, лекарь итеп ебәрҙем, тигән мөһөрлө ҡултамғалы ҡағыҙ алып булмаясаҡ. Һис шикһеҙ, Ғәфифәне генерал-губернаторға күрһәтергә кәрәк тигән ҡарарға килде ул әстән.

– Һине үҙем менән алып китеп булмаҫ микән? – тип шөбһәләнеп бышырланы ул Ғәфифәнең ҡолағына. Уны үҙенә яҡын тартып, күңеленең эсенән бөркөлгән йылыһына сорнаны. Был йылылыҡты, эскерһеҙ тәрән шомланыуҙы күңеленең иң-иң нескә ере менән тойған Ғәфифә уға күҙҙәрен тултырып ҡараны ла:

– Ә мин ҡалмайым. Мине яуға алмаһалар ҙа, барам... Әйәреп китәм. Һинең менән бөтә, бөтә ауырлыҡтарҙы бергә кисереп, һине һаҡлап йөрөтөрмөн. Көн һайын Аллаһы Тәғәләнән һинең иҫәнлегеңде, һаулығыңды һорармын, – тине.

– Беҙҙең иҫәнлекте, беҙҙең һаулыҡты, тип әйт, Ғәфифә, – тине Ҡолой. – Әйҙә, атайың менән инәйең янына, никахыбыҙ ашына керәйек. Юғиһә улар беҙҙе күптән көтәләрҙер инде, – тигән тәҡдим индерһә лә, Ғәфифә баш тартты.

– Юҡ, унда ике мулла, абыстайҙар бар. Атайым, ике ағайым. Миңә оят, оялам керергә. Никах ашын еңгәләр бында килтерерҙәр. Һин бар унда. Уңайһыҙ булыр. Ысынлап та һине көтәләрҙер. Бар. Ашап бөткәс, һуңғараҡ сәй эсергә бында килерһең үҙең, – тип Ғәфифә Ҡолойҙо төп йортҡа оҙатты.

Барыһы ла Ҡолойҙоң ҡайҙа булғанын төшөнәләр, әлбиттә, бөтәһе лә уны көтәләр ине. Әммә ул турала береһе лә өндәшмәне.

Ҙур, киң урындыҡта сигеүле ашъяулыҡ өҫтөнә бик күп тәғәм ҡуйылған. Ағас туҫтаҡтарҙа өс төрлө ит боҫон борҡота, унан башҡа төрлө тәмләткестәр, бөккәндәр, ҡыҫтыбыйҙар, төрлө аҙыҡ-түлек тулған. Һәр кем үҙенә тәғәйен урынды алып урынлашҡас, Хәйретдин мулла аш-һыуға, был өйгә бәрәкәтлек, никахланыусыларға бәхетле, тигеҙ тормош, барыһына ла иҫәнлек-һаулыҡ теләп доға ҡылғас, яйлап ҡына аш, ит ашай башланылар. Ҡорҙаҡылар һөйләшеүҙе икенсе йүнәлештә башламаҫ борон, Ҡолой һүҙ башланы.

– Ҡайным, ҡәйнә, ҡайнағалар, хәҙрәттәр. Миҙгел осоро бик шомло. Һеҙҙән айырылып яуға китеү көнөн әлегә белмәйбеҙ. Һеҙҙең кантонлыҡта үткән кеүек, беҙҙә лә һуғыш алымдарын өйрәнеү күнекмәләре була. Бик күп күҙәтеүселәр килмәксе. Генерал-губернатор үҙе килә. Ваҡыт бик тар, тип әйтеүем инде. Иртәгә иртә менән үк беҙгә кире юлға сығырға кәрәк. Әҙерләй һәм әҙерләнәһе эштәр бихисап. Һеҙ, ҡайным, ҡәйнәм, иртәгә түгел, ә шаршамбы көнөнә беҙгә килегеҙ. Ғәфифә менән, әлбиттә, – тип өҫтәне.

Ҡолой иң башта уйында Ғәфифәне әлегә үҙ йортонда күрһәтергә теләмәгән ине. Әммә уны яуға алып китә алмау ҡурҡынысы килеп тыуғас, уйынан кире ҡайтты. Ир лекарҙар яуға бара, быныһы бәхәсһеҙ. Өйәҙ һайлап алынған ҡыҙ-ҡатындың исем-шәрифтәрен теҙмәгә кереткән былай керетеүгә. Әммә уға күп халыҡ ризаһыҙлыҡ белдерә. Губернаторҙың үҙенә лә яҙғандар шикелле. Быныһы әлегә әллә ысын, әллә буш хәбәр.

– Мин һеҙҙең менән һәр саҡ була алмам. Губерна, өйәҙ һәм башҡа ҡунаҡтарҙан тиҙ генә бушанып булмаҫ.

Һеҙ бына Мирхажи ағайҙы һәм Шәфиҡә абыстайҙы Ғәфифәгә морондоҡ атай, инәй яһағыҙ. Унда барғас та, ғөмүмән, ҡалған тормошта шулай бергә-бергә йәшәргә насип булһын.

Табын шулай яйлап ҡына дауам итте. Ҡолойҙоң был тәҡдимен бөтәһе лә хупланы. Шунда уҡ яңы ата-инәйҙәр бер-береһенә билге итеп күрес-бүләктәр бирештеләр. Хәйретдин мулла быны ла доға менән нығытып ҡуйҙы.

Ғафар менән Ғәфүр, Мөхәмәтҡолойҙан 16-сы һәм 17-се алайҙың нисек ҡоралланыуын һораштырҙылар.

– Әллә заводтан утлы ҡорал да алдығыҙмы? – тигән һорауға Ҡолой дөрөҫөн генә әйтә алманы. Сөнки заводтан һәм рекруттарҙан талап алынған мылтыҡтарҙы завод бирҙе, тип әйтеп булмай бит инде. Ҡолой өндәшмәне.

– Бар әҙерәк, – тип кенә ҡуйҙы.

Унан һуң Ғафар менән Ғәфүр Ҡолойҙоң 5-се кантонда нисек итеп дөйөм эшләүҙәре тураһында һорағас, уға тағы ла сама менән шул уҡ хәбәрҙе ҡабаттан һөйләп сығырға тура килде. Табын шулай төрлө юҫыҡта барҙы. Ниһайәт, икенде намаҙы ваҡыты етеп, барыһы ла намаҙға баҫтылар. Икенде бөткәс, тағы ла яйлап сәй эстеләр.

Ҡолойҙоң бөтә уйы, бөтә теләге тиҙерәк Ғәфифә янына барыу ине. Тик был табынды ташлап китергә һис сәбәп юҡ. Ниһайәт, сәбәп килеп сыҡты. Алғы бүлмәлә үҙ-ара ниҙер бүлешкән кеүек бер туҡтауһыҙ шарҡылдашҡан шаян, мут еңгәләр тауыш биреп, Ҡолойҙо саҡырып алдылар ҙа ҡырандастың артында ултырған һандыҡтың асҡысын талап итә башланылар. Үҙҙәре көләләр. Ҡолой тышҡа, ураҙаға сығып ҡырандасын ҡараны. Һандыҡ юҡ. Баҡһаң, уны еңгәләр Ғәфифәнең йортона керетеп ҡуйғандар ҡуйыуын, әммә аса алмай интегәләр икән. Ҡолой Ғәфифәнең өйөнә йүнәлгәс, көләкәс еңгәләр ҙә уның артынан әйәрҙеләр. Өйгә кергәс, китте асҡысҡа болаш... Ҡолойҙоң ни ерен генә һәрмәмәнеләр ҙә, ни ерен генә тотманылар шуҡ еңгәләр. Юҡбуһылға көлөп бармаған Ҡолойҙоң көлә-көлә эсе ҡатты. Был кәмиткә ҡарап, Ғәфифә лә күҙҙәренән йәше сыҡҡансы көлдө. Барлыҡ кеҫәләрен ҡарап бөттөләр, ә асҡыс юҡ. Баҡһаң, асҡыс Ҡолойҙоң усында булған икән. Ахырҙа Ҡолой үҙе һандыҡтың ҡапҡасын ҡыҫып ҡына асып, ҡулына ни әләгә, шуны берәмләп тартып сығара башланы. Сыр-сыу килеп һәр нәмәне еңгәләр әләктереп ала торҙолар. Кемгә нимә әләгерен берәү ҙә алдан белмәне. Сөнки Ҡолой үҙе лә һандыҡта нимәләр һалынғанын белмәй ине. Кемгә яулыҡ, кемгә хушбый, кемгә күлдәклек ситса тауар, кемгә шәл, кемгә көҙгө. Был әйберҙәрҙең һәр береһе бик ҡиммәтле бүләк булды. Сөнки был бүләктәр береһе лә был тирәлә бөтөнләйгә булмаған, йә бик-бик һирәк осрай торған әйбер ине.

Бүләктән һуң шаулашып-көлөшөп, төрлө хәл-ваҡиғаларҙы һөйләп оҙаҡ итеп сәй эстеләр, аш ашанылар.

Аҡшам етмәҫ борон һәр береһе шыпырт ҡына хушлашып, теләктәр теләп, өйҙәренә таралдылар. Һәр береһенең ҡурайында һауа торған ныйыры, баҡырып торған быҙауы, өйҙә ашарға көтөп торған ғәзиз балаҡайҙары бар бит. Шулай ҙа ике еңгә һуңғараҡ ҡалды. Былары, иң олораҡтары, донъя күргәндәре, тормоштоң әсеһен дә, сөсөһөн дә татығандары. Табындағы аш-һыуҙы йыйыштырып, ҡашығаяҡтарҙы йыуып, ситкәрәк, асыҡһалар-фәләп тип, ике ҡауышыусыға таҫҡалыҡ өҫтөнә бәләкәй табын ҡорҙолар. Икеһе лә тәүге зөфәфтә, ҡауышыуҙа булмаһалар ҙа, Ғәфифәнең ҡолағына ғына нимәлер бышырлайҙар ҙа, күмәкләшеп, өсәүләп көлөшәләр.

Кис, бөтөнләйгә аҡшамға ауышҡас, ике оло еңгә Хәжирә һәм Хәлимә тыныс йоҡо, хәйерле төн теләп хушлаштылар. Сығыр ваҡытта шуғырағы Хәлимә борола биреп:

– Мунса сабаһ намаҙынан һуң әҙер булыр, барығыҙ. Унда бөтә нәмә лә бар. Мунсаны һүрелтмәгеҙ, – тип, йылмая биреп, сығып китте.

Хәжирә лә, Хәлимә лә – Ғәфифәнең үҙ еңгәләре. Хәжирә Ғафарҙың, Хәлимә Ғәфүрҙең хәләл ефеттәре.

Ҡолойҙоң киләсәктәге тормошо, эше лә, яу алайҙары менән етәкселек итеү ҙә ниндәйҙер миҡдарҙа бөгөн хәл ителә. Әгәр бөгөн Ғәфифә менән ысын мәғәнәһендә ҡушыла алһалар, ул арҡа терәрлек ҙур рухи таяныс табасаҡ. Рухи ғына түгел, көндәлек ығы-зығы тормошонда етди ҡарарҙар ҡабул иткәндә лә, хеҙмәтендә лә ҙур, ышаныслы таяныс табасаҡ. Әлегә тиклем күңеле буш булды, таянысы булманы. Барлыҡ нәмәне лә кәңәшһеҙ, үҙе хәл итте. Арып, нимәгәлер асыуланып, йә ҡара көйөп ҡайтҡанда ла берәү ҙә уның хәлен дә, кәйефен дә, һаулығын да һорашманы. Аҡбикә лә, Зөләйхә лә үҙҙәрен таш ҡойма аръяғында ҡурҡынысһыҙ ерҙә йәшәүҙәренә инаналар. Әйтерһең дә, улар өсөн тормош шулай еңел генә, кантон бойороғо буйынса ғына ағып бара. Һәм мәңге шулай буласаҡ. Әйтерһең дә, уның шәхси уңыштары ла, эшләй алмағаң, һөйрәтә алмағаң йөгө юҡ.

– Их, исмаһам, берәү өйҙә мине яҡын күреп, хәл-әхүәлемде һораһа ине, – тип эстән генә һәр ваҡыт һыҙланды. Ғәфифә улай булмаҫ. Минең менән һәр нәмәне уртаҡлашыр. Ауыр хәлгә ҡалһам, минең менән бергә ҡайғырыр, ҡыуанһам, балалай, саф күңеле менән шатланыр.

Шулай фаразланы ул. Шуға ла әле уның әҫе тәнен тоймаҫтан алда уҡ Ғәфифә уға бөтмәҫ-төкәнмәҫ яҡын, үҙ. Әйтерһең дә, ул Ҡолойҙоң ярты тәне инде. Аҡшам намаҙын бөгөн уҡымайыҡ, тине лә шәмде өрөп һүндерҙе.

Сымылдыҡ эсендә еңгәләренең йоҡо түшәге әҙерләгәнен ул күргән ине. Фәфифәгә яҡын килеп, уны ҡосаҡлау менән үк бөтә тәненә ҡан йүгерҙе. Ләззәтле күңел рәхәтлеге солғап алды. Әлегә тиклем татылмаған хисте кисерҙе. Ул тойғо шул тиклем татлы, шул тиклем тәмле! Оҙон йомшаҡ сәстәре, гүзәл бите, йылы тәне, нәфис муйыны... Үҙе мең йылҡыға торорлоҡ мәһәр! Шым, бышылдап ҡына әйткән һүҙҙәре лә баҫалҡы, иркә, аҡыллы. Үҙ иткән йомшаҡ, нескә тауышы Ҡолойҙо әллә йыһанға, әллә Зөһрә йондоҙона алып менде. Әллә ожмахҡа килтерҙе. Иҫен дә, хәтерен дә тамам юғалтып, оҙон юлдан мең ғәмәлде үтеп арыһа ла, йоҡоға китә алмай, буласаҡ оҙон юл, ҡурҡыныс ҡанлы һуғышты күҙ алдына килтереп, күңелдәре шомланып, оҙаҡ йоҡлай алмай яттылар. Үҙеңде нисек тотоу, дөйөм хеҙмәт бурыстарынан башҡа өҫкә ниндәй кеймдәр алырға, аҙыҡ-түлек, яралыларға беренсе ярҙам күрһәтеү һәм башҡа бихисап һорауҙарҙы хәл итеү юлдарын һөйләшеп ята торғас, Арҡырсаҡ йондоҙо көнбайышҡа ауыша башлағас, арыған тәндәре ҡаты йоҡоға талды.

Ни тиклем ҡыйын булһа ла, йоҡолары ҡанмаһа ла, иртәнге намаҙға тороп, уны бергә уҡынылар. Фәфифә мейескә ут тоҡандырып, сәй ҡайнағас, еңгәләре ҡалдырған тәм-том менән сәй эстеләр ҙә, мунсала ғөсөлләнеп, тағы ла йоҡланылар.

Иртәнге сәйгә ваҡыт яҡынлашҡас, бимазалауҙың нимә икәнен дә уйламай, хатта уңайһыҙланмай ҙа, шаулап, был юлы инде йәшерәк еңгәләр Хәлиҙә, Гөлйемеш, Фәйрүзә көлөшөп килеп керҙеләр. Никах сәбәпселәрен ата йортона, иртәнге аш-сәйгә ҡыҫтай-ҡыҫтай саҡыра башланылар. Был ваҡытҡа никах сәбәпселәре йоҡонан торғандар ине инде. Фәфифә:

– Бармайым, атамдан, ағайҙарымдан оялам, – тиһә лә, еңгәләре бирешмәне.

– Барырға кәрәк, оҙон юлға сығырға тораһығыҙ. Ата йортонда күмәклән сәй эскән һуңғы табын, оҙатыу табыны. Хәҙер кейәү көсөктәрен әйәртеп ҡайтып китә. Ҡасан күрешәбеҙ ҙә, ҡасан ултырабыҙ әле былай күмәклән, – тигәс, Фәфифә өндәшмәне, ризалашты.

Ата йортонда ҙур табын йыйылған. Иртә булыуға ҡарамаҫтан, барлыҡ ағай-эне, муллалар, хатта ике унлыҡ башын да керетеп ҡорға ултыртҡандар. Ҡалғандары ҡапҡа эсендә йомро ағастың өҫтөн юнып эшләнгән киң урындыҡҡа менеп, кем кейеҙ өҫтөнә һуҙылып ятҡан, кем ситтән аяғын һалберәтеп ултыра.

Төп өйҙәге табындың йүнәлешен өй хужаһы Бикбаш алып барҙы.

– Вәғәҙә иткән мәһәр ваҡытында һәм тулы бирелергә тейеш. Сөнки иҙ китер ҙә барырһығыҙ... Мәһәр түләнеп бөтмәй тороп ҡалыр. Ә ул ғаләм алдында ла, шәриғәт алдында ла гонаһ. Эш

әйберҙә, малда түгел. Минең бөтә нәмәм бар, етерлек. Әммә бурыслы булып яуға китеү ярамаҫ, намыҫың таҙа булыу мең бәләнән ҡотҡарыр. Шәһитлектән ҡурҡыу ярамай. Уныһын Аллаһы Тәғәлә үҙе белә. Тик хәҙер икәүһегеҙ бит... Бер-берегеҙҙе бик ҡарап йөрөү тура килер. Кейәү яуҙа булған кеше. Ишеткәнем бар, бер сәм алһа, ул үҙенекен итмәйенсә туҡтамай. Ниндәй сетерекле хәлдә лә уға керә лә китә тип. Еңеүгә маҡсатлы... Фәфифә лә бик сая. Күңеленә алғанды еренә еткерә торған ҡыҙ булып үҫте... Был һүҙҙәрҙе әйтмәҫкә лә кәрәк ине ҡорҙа, китәһең бит, үкенесле булмаһын күңелгә, тием...

Мәһәр, алыш-биреш тураһында башҡаса хәбәр булманы. Һүҙ, нигеҙҙә, яу, уға барыу юлы ҡайҙа, унда барғас, төрлө полкты төрлө яҡҡа бүлгеҫләүҙәр тураһында барҙы. Ҡолой ҙа, Бикбаш та, башҡа ололар ҙа йыраҡта, көнбайышта бер нисә тапҡыр оло яуҙа булғас, унда тәүге осорҙан уҡ нимәләр кәрәклеген беләләр. Мөһим һорауҙарҙың береһе әнә менән еп булды. Эйе, әйе. Бәләкәй генә нәмәләр, ә уның һыҙ эш харап. Салбарың йыртылып китһә, нишләмәк кәрәк? Япраҡ менән дә, тире менән дә ҡапланып булмай. Тегергә кәрәк, ул берҙән-бер алым. Шуның өсөн һәр унлыҡта ике-өс әнә, һабаҡлыҡ, сайырлы еп булырға тейеш. Әнә тигәс тә, уның исеме генә бар инде ул. Әммә уны күреүсе кеше бик һирәк. Каруан менән ҡайҙандыр, Ҡытай яғынан, осо тишек, нәҙек оҙон тимер килтереп, шуның күҙәүенә бик ентеклəп иләнгән оҙон киндер састарын үткәреп, шунан уны ҡарағас сайыры менән ышҡып буяп тегенәләр ине. Әммә әнәләр йә һынып, йә юғалып бөткәс, епте туҡыма аша үткәреү өсөн осоноң бер ҡабырғаһын игәп, киртләслəп, беҙҙе ҡулландылар. Шуның өсөн һәр һуғышсыға еп әҙерлəп биреү ҡатын-ҡыҙ эше. Янға, епкә ҡарағанда байтаҡҡа йыуан, сайырланған керештәр ҙә әҙерлəү бик мөһим шөғөл. Әҙерлəнгəн керешептәр, ғәҙәттә, кереш муҡсайында була. Унан һуң тиҙҙән һалҡындар төшə. Һеҙҙе берəү ҙə көтəп тормай. Көн һайын асыҡ һауала йоҡларға тура киләсәк. Түшәк-юрғанды онотоғоҙ. Аяҡ кейеме лə, өҫ-баш кейеме лə йылы, еңел булыуы мотлаҡ. Унан һуң... унан һуң саҡма! Ул яҡта саҡма түгел, таш та табыуы ауыр. Саҡма аҡ таштар беҙҙə тулып ята. Шуларҙы һаҡлыҡҡа ватҡыслап алығыҙ. Саҡма таш яныңа тетмəһе лə, уны һалырға бысылған мөгөҙ ҙə кəрəк. Хатта уға бөкөһө лə. Сөнки ямғыр яуһа, мөгөҙ эсендə тетмə мамыҡ һыуланырға тейеш түгел. Эйəр айылдарығыҙ ныҡ булһын. Эйəрегеҙ əйлəнеп китерлек булмаһын. Өҙəңге ҡайыштарығыҙ ныҡ ҡалын, күп булырға тейеш. Сей-сирəмəт булһа, өҙөлə лə йолҡола. Һыу тейһə, һуҙыла, кипһə, ҡата. Һуғышта, ҡылыс алышында көс менəн сабыуҙың, һөңгө менəн дошманға сəнсеүҙең уңышлығы өҙəңге ҡайышының оҙонлоғонан ҡала. Кəрəкме, кəрəк түгелме, əммə Бикбаш, оло булараҡ, нəсихəт итеп

шуларҙы һөйләне. Кәңәш итте, аҡыл бирҙе. Кейәүем, һиңә әйтәм, улым, һин тыңла, йәки, киленем, һиңә әйтәм, ҡыҙым, һин тыңла, тигән мәҡсүдте күҙ уңында тотто, буғай. Йәнәһе, теләктe, маҡсатты, мәғәнәле сара һөҙөмтәһен әйтеп бирҙе. Эйе, хәбәре аҡһаҡалдарса, ваҡиғаларҙы алдан күреүгә ҡоролғайны. Улым йәки ҡыҙым, һин тыңла, тиеүе лә ҡасандыр улдың кейәү, ә ҡыҙҙың килен булыуын күҙаллап әйтелһә лә, һуғышта һәр нәмәнең килеш, йәпле булыуынан ғүмер көндәреңоҙон йәки ҡыҫҡа булыуы билдәләнә бит.

Табында һәр береһе, бигерәк тә Мирхажи һәм Хәйретдин муллалар нәсихәтле фекерҙәрҙе күп әйттеләр. Ҡалғандар шым ғына тыңланы. Табын аҙағын һиҙепме, йәштәр, алғы өйҙә ултырған килен-елкенсәктәр тышҡа таралышҡас, Ҡолой һүҙ алды:

– Мәһәр шуныһы менән, хатта байтаҡҡа арттырылып, үҙеңә ҡайтасаҡ. Әйбер, кейем-һалым да үҙегеҙ барғанда, Алла бойорһа, бойомға ашыр. Әйтер һүҙем шул. Ҡабатлап әйтәм инде.

– Мирхажи ағай, Мирхажи хәҙрәт, һеҙ Шәфиҡә апай менән минең ҡунаҡтарҙы ҡараһығыҙ инде, тип һорайым. Сөнки миңә губернатор менән әйәрсәндәренә тейешле сараны эҙерләп күрһәтеү лазым. Ҡайным, һеҙ Хәйретдин мулла менән ҡәйнәмде һәм Сәйҙә абыстайҙы, Ғәфифәне алып иртәнән һуңға килеп етерһегеҙ. Ғәфифәнең менге атын, ҡоралдарын да алыу кәрәк. Ҡалғанын Ғәфифә үҙе белер. Төрлө ауырыуҙарҙы нисек дауалау, нисек уларҙан һаҡланыу серҙәрен алай һуғышсыларына һөйләйәсәк Ғәфифә. Һыуыҡ тейеүҙе лә, теш һыҙлауын да, йүткереүҙән, яранан ҡан ағыуҙы туҡтатыу, һынған һөйәкте төҙәйтеп бәйләүҙе лә һәм башҡаларын да. Бәлки, губернаторҙың үҙенә лә һөйләргә тура килер. Һуғыш юлында ла, яуҙа ла бөтә дини ғөрөфтө үтәү ауыр булыр, әммә уны Аллаһы Тәғәлә ярлыҡар. Беҙҙә бит Уралда тәбиғәт шарттары ла көньяҡтағы кеүек түгел. Походта китеп барғанда ла, яу эсендә лә намаҙ башҡарыу мөмкин түгел. Булдыҡ, күрҙек бит инде яуҙың да, яу походының да нисек булғанын...

Табынды үҙ ғөрөф-ғәҙәте менән еренә еткереп тамамлағандан һуң, юлға сығыу, эҙерләнеп ҡайтыу мәшәкәте башланды. Шул ваҡыттан алып Мөхәмәтҡолой Ҡолой кантон булды ла ҡуйҙы. Уның ҡыҫҡа, аныҡ, ҡайһы берҙә киҫкен әмере шунда уҡ күсәрҙәргә лә, унлыҡтарға ла барып етте. Яу юлы, яу ауазы Бикташтың ҡапҡа эсенән үк башланды.

Ҡыҙыу аттар ҡайтыу юлға сыҡҡас, ярһынылар ҙа ярһынылар. Тәгәрмәстәр ергә әллә тейә, әллә теймәй. Унлыҡтар ҙа, береһе алдан баш, ә икенсеһе арттан оҙатыусы булып ян-яҡҡа хатта күҙ ҙә һалмай һыпырталар.

Ҡояш Имәнтауҙың, Биҙәртауҙың артына, хушлашҡан кеүек, тонйорап ҡына байырға батып бара ине. Мейәсле йылғаһы аша

һалынған таныш күпер аша дөбөр-шатыр үтеп киттеләр ҙә, аттар кантон идаралығы алдына барып туҡтанылар. Ҡолой, ике унлыҡ башын саҡырып, тиҙ генә йөҙлөк баштарын йыйырға бойорҙо. Идаралыҡта әле өйөнә ҡайтып китмәгән Сәғит ағаһы булһа ла, Әбүтаһир юҡ ине. Уны ла саҡыртты Ҡолой. Аҡшам етһә лә, айвайҙарына ҡараманы кантон. Сөнки уға ҡушып киткән бойороҡтарҙың үтәлеше һәм ниндәй яңы хәлдәр булған-булмағанын белеү мөһим ине.

Оҙаҡламай саҡырылғандар теүәл булдылар. Барыһының да килеүен күҙ йөрөтөп барлап сыҡҡас, кантон һәр бер йөҙ башынан һәр йөҙлөктөң әҙерлек кимәленең торошо тураһында яуап тыңланы. Тәү ҡарамаҡҡа, ваҡ ҡына булған һорауҙарҙы ла ентекләп һорашты. Аттарға ныҡлы тышау, нәҙек оҙон, ныҡлы сылбыр, йүгәндәренең тамаҡһаһы барлығын да һораны.

– Үҙем тикшерәм, әгәр мин әйткән һорауҙарҙың берәйһе үтәлмәһә, үпкәләштән булмаһын. Мин үҙем өсөн талап итмәйем. Мин һәр берегеҙҙең һаулығы, имен-аманлығы, иң мөһиме, дошманды еңеү өсөн шарттар уңай булһын өсөн тип талап итәм...

Бигерәк тә ул аттарҙың дағалау эшенең нисек тороуын төпсөнөп һораны. Иртәгә барлыҡ йөҙлөктәрҙе лә ҡарап сығыуын белдерҙе. Аттарҙың көрлөгөн, һуғышсыларҙың ғаиләләрен утынбесән, аҙыҡ-түлек менән тәьминәтлеген дә ныҡлап һорашты. Сөнки был һорауҙарҙың торошо һәр кешенең күңел торошона ҡайтып ҡалыуын үҙ башынан үткәргән. Хәрби әҙерлектең дөйөм торошон белгәндән һуң, әҙерлеккә тағы ла ике көн биреп, өсөнсө көнөндә ике алайҙы тулыһынса йыйып, генерал-губернатор килгәнсе үҙ аллы һуғыш күнекмәләрен үткәрергә ваҡыт билдәләне. Кантонлыҡта хәрби әҙерлектән башҡа, йөҙлөктәр, иллелектәр, унлыҡтар яуап биргән хужалыҡ эштәре лә бихисап. Ул, тәүге нәүбәттә, сәселгән арпаны, тарыны, арышты урып, көлтәләр бәйләп, уны ырҙындарға ташытыу. Әле һаҡлыҡ һарайҙарында ятҡан бөртөклөләр булһа ла, уны яңы уңыш менән тулыландырыу – үҙе бер оло бурыс. Яңы уңыш алғас та, уны дәүмәленә, кимәленә ҡарап бик дөрөҫ бүлгесләргә кәрәк. Йыл буйына ашарға тотонорға һәр ауылда, һәр ғаиләгә күпме бөртөклө бирергә. Тирмәндәр ҙә бар. Үҙҙәре он, ярма тарттырып алырҙар. Бесән әҙерләүҙе лә тиҙләтер кәрәк. Ужым арышын да күберәк итеп сәсеп ҡалдырыу, малтыуар һарайҙарын төҙәтеү һәм башҡа бихисап эштәр хәҙер күберәк һуғышҡа алынмаған ололар, ғәриберәктәр, үҫмер малайҙар һәм ҡыҙ-ҡатын иңенә төшә. Шул халыҡты ойоштороу, эш башҡартыу бурысын да шул уҡ йөҙ баштары, иллелек, унлыҡтар үтәй ине. Ә хәҙер уларҙың һәр береһенә алмаш кәрәк. Бына шундай ҡатмарлы бурыстар тора кантонлыҡ халҡы тормошонда. Быға әллә дөйөм хужалыҡ булып йәшәү, әллә һуғыш шомо, һуғыш

ғауғаһы ҙур мәшәкәттәр тыуҙырамы? Хәҙер генерал-губернатор килгәнсе мөмкин тиклем күберәк ауылдарҙы йөрөп, халыҡ менән һөйләшеп, уларҙы тынысландырырға тырышыр кәрәк. Хәрби кейемдәрҙе кейеп йөрөү урынлылыр халыҡ алдында. Күрһендәр, ирҙәре, улдары ғына түгел, бына мин дә, иллегә етеп килһәм дә, улар менән бергә яуға сабам, тип әйтмәһәм дә, күреп аңларҙар. Һуғышҡа минең менән бергә китеүселәрҙең ғаиләләрен күреп һөйләшеп сығыу ҙа кәрәк булыр. Бына шундай уйҙа һәм теләктә ине Ҡолой Көсөкөв.

Унан һуң йөҙлөктәр һәм башҡа дәрәжәләр урынына ҡала торған кешеләрҙе күреп, яҡын көндәрҙә үк ярҙамсылары Сәғит, Әбүтаһир, уртансы ҡатыны Зөләйхә менән иҫәп-хисап эштәрен барлап ултырып алыу кәрәк буласаҡ. Бигерәк тә заводтар менән аҙыҡ-түлеккә алмашҡа кәрәк-яраҡтар килешкәндә бик һаҡ һәм зиһенле булыу талап ителә. Һәр саҡ һатыу итеп шымарған, дәүләт баҫҡыстары эшен яҡшы күҙаллаған, бер тингә булһа ла һине оторға, алдарға торған завод хужалары менән килешеүҙәр төҙөүҙә һәм уның үтәлешен тикшереүҙә ҙур һаҡлыҡ һәм зиһен менән эш итеү һәр береһенең бурысы булһын.

Хәрбиҙәр һәм башҡаларға шул уйҙары менән уртаҡлашҡас, кантон, тағы ла яңы бурыстар биреп, уларҙы бушатты.

Бүлмәлә улар өсөһө генә ҡалды, ике ярҙамсыһы һәм үҙе. Тәүге һорауы Ҡолойҙоң ағаһы Сәғиткә булды.

– Мирхажи мулла менән минең ҡайҙа, ниңә китеүемде Аҡбикә менән Зөләйхә белдеме?

– Төрлө ғәйбәт хәбәрҙәр Аҡбикә килен ишеткән шикелле. Сабира еңгәң шулайыраҡ ти. Әммә минән береһе лә һораманы. Бер ни булмағандай тоталар үҙҙәрен, – тине Сәғит.

Был һүҙҙәрҙән һуң Ҡолойға еңел булып китте. Юғиһә ул Зөләйхәнең ғауға күтәреүе мөмкинселеген дә, атаһы йортона ҡайтып китеүен дә күҙаллаған ине. Ярай, шулай булһын, был яҡшыға, тип фекер йөрөттө ул. Ә Аҡбикә әҙерәк тыпырсыныр ҙа туҡтар. Тулаһа ла, ул тәртә аша атлай алмаҫ. Кире керер тәртә әсенә. Быны Ҡолой бик яҡшы белә. Себен тулап тәҙрә ватмаҫ, оло бейә арба емермәҫ.

– Ә килгән ҡунаҡтарға ашау-эсеү, йоҡлау шарттарын ойоштороғоҙмо?

Һорауға Әбүтаһир яуапланы:

– Генерал-губернаторға, уның менән килгән өс-дүрт кешегә оло йорт һәм ундағы бүлмәләр етер. Килгән муллаларҙы Мирхажи мулла үҙе ҡарар. Уның йортонда урын да, аш-һыу ҙа етерлек. Губернаторҙың әфисәрҙәренә – һары йорт, унда урын 10 кешелек. Ашхана һәм ашнаҡсылар бар. Үҙеңдең ҡунаҡтарыңа ла йорттар

әҙер, аш-һыуға кешеләр билдәләнгән. Һәр мөйөштә ҡарауылсылар торасаҡтар, – тип Әбүтәһир хужаһының күңелен күрҙе.

Шул хәбәрҙе үҙ-ара тикшереп, барлап ултырғанда, ҡапыл ишек асылып китте лә, «Ям»-сабыусы, хат-хәбәр йөрөтөүсе картузлы фуражкаһын кейеп килеп керҙе лә:

– Ваше высокоблагородие, войсковая старшина! Вам пакет для личного вручения, – тип ҙур, ҡалын пакет тотторҙо.

Гражданлыҡ эштәр буйынса губернатор Матвей Андрей улы Наврозов һәр башҡорт кантонының янына сәркәтип итеп үҙ кешеһен, күҙ-ҡолағын ебәргән ине. Ҡолой кантонға, ул үҙе Өфөгә килеп урынлашыу менән, Оло Иҙел яғынан Мәслимгә килеп төпләнгән ярты мосолман, ярты кафыр кешеһен губернатор ҡарары тигән, ҡағыҙ менән тәғәйенләгәйне. Ҡолой уны сәркәтип итеп идаралыҡта тотманы. Дүртенсе йөҙлөк башы Хәйсәргә, эшсе итеп ебәрҙе. Кантон идаралығына ул Наврозов биргән мөһөрлө ҡағыҙҙы тотоп бер нисә тапҡыр килһә лә, Ҡолой уны эшкә ҡушманы.

– Сәркәтиплеккә минең үҙ кешеләрем бар. Сәркәтип һорап минең Наврозовҡа мөрәжәғәт иткәнем юҡ. Һине миңә ебәргәндәр икән, тимәк, һин хәҙер минең ҡулым аҫтында. Ҡайҙа ҡушам, шунда бараһың. Әнә, дүртенсе алайға эшсе булып бар, – тип ебәргән ине ул был шымсыны.

Нәҡ тә ям арбаһы менән килгән ҡағыҙҙы алған ваҡытта, идаралыҡҡа тағы ла шул Наврозов кешеһе «үҙ» вазифаһын һорап килгән ине. Ҡолой, йөҙлөк башы Хәйсәрҙе кире саҡыртып, күҙ-ҡолаҡ булып йөрөргә теләүсене күрһәтте лә:

– Икенсе иллелеккә яҙып, һуғышҡа ал, – тип бойорҙо.

Ә үҙе хатты уҡырға кереште... Алай 500 йәки 600 кешелек булырға тейеш. Әгәр ул 600 кешелек булһа, менгеләр янында тағы ла 300–350 ат артмаҡта була. Һуңғыһы эйберҙәрҙең күплегенә йәки әҙлегенә бәйле. Башҡорт иррегуляр алайында поход старшинаһы – 1, дәрәжәһе майорға тиң; 6 – яһауыл, тимәк, йөҙлөк башы, йәки дәрәжәһе капитан; 6 хорунжий, йөҙлөк ярҙамсыһы, прапорщик; 12 иллелек, поручиктар; 7–10 кешелек, өйөрө менән алайҙа хужалыҡ эштәре башлығы. Ул квартирмистр тип атала. Аш-һыу, килем-һалым, фатирға урынлаштырыу эштәре менән мәшғүл була; мулла – оло булмаған, йәш, үҙе уҡый-яҙа белгән кеше. Кәрәк икән, ул мулла, кәрәк икән, сәркәтип, яҙыусы булыуы ла мөмкин. Унан башҡа бер төп яҙыусы ла була. Ул төркисә лә, ғәрәпсә лә, болғар хәрефе менән дә яҙа белгән кеше... Һәм ябай һуғышсылар, 500 йә 600 кеше. Һәр береһе үҙ аты, үҙ ҡоралы, үҙ кейеме менән. Кейем бер иш, бер төрлө булыуы талап ителмәй. Һайлап алынған кешеләргә шул хәрби иррегуляр ғәскәри дәрәжәһен бирep торорға кәрәк. Аҙаҡ ул дәрәжәләр генерал-губернатор тарафынан раҫланасаҡ, тип кәңәш ителә. Әгәр алай 500 кешелек булһа, ул

саҡта йөҙлөктәр 5 һәм башҡа дәрәжәләр ҙә әҙерәк була... Ә генерал үҙе алдағы аҙна башына, ҡарасай айының тәүге көндәренә киләсәген тәғәйен иткән.

Бына шундай хат-хәбәр алғас, Ҡолой, ниһайәт, билдәһеҙлектән ҡотолдо. Әбүтәһирға, өйҙәге хужалыҡ эштәрен ойоштороп алып барыусы мөдиргә, Аҡбикә менән Зөләйхәгә ҙур ҡунаҡтарҙың шишәмбе йәки шаршамбыла килеүҙәрен, ҡура-ҡаралтыларҙы тәртипкә килтереүҙе, мунсаларҙы әҙерләүҙе онотмауҙарын да иҫкәртте.

Унан һуң Көнашаҡта, Баязит ауылында, Мөслимдә һәм башҡа ауылдарҙа урынлашҡан 19-сы алай башы Искәндәргә лә хәбәр ебәрергә кәрәк. Хәйер, уларға үҙ өйәҙҙәренән дә хәбәр, бәлки, еткәндер...

3-сө кантон ерендә 1740 йылдан һуңғы осорҙа Оло Иҙел аръяғынан күсеп килгән мишәрҙәр тоҡомонан 2-се мишәр полкы төҙөлә башлаған ине. Дәүләт уларҙы ла, башҡорт полктары кеүек үк, иррегуляр полк итеп төҙөргә ҡарар ҡылды. Ә улар регуляр ғәскәргә ҡушылыуҙы һораны. Сөнки регуляр ғәскәргә ҡушылырҙай полк төҙөлһә, ҡоралланыу, өҫ-баш кейеме һәм бөтә башҡа тәьминәт ҡазнанан буласаҡ. Халҡы ҙур йөктән, ҙур һалымдан ҡотоласаҡ. Был 2-се мишәр полкы тип аталған алай Мөслим ауылында торҙо. Әммә полктың төҙөлөүе бик яй барҙы. Алайҙа полкта яуға барасаҡ кешеләр үҙ белдектәренә алмашына торҙо. Тәүҙә алынған һуғышҡа яраҡлы аттар ҙа тай-тырпыға, йәки йәштәре оло аттарға алмашып бөттө. Ҡорал, эйәр, әпсен-төпсөн дә ҡалдыҡтар менән тулыланды. Ә оҙон, еңел тартым ҡылыстары, торҡа, йәүшәндәр, йә йәшерелде йә өйҙә эленеүле торҙо.

Бер-береһенән үтә үк, айырым ултырмаған ундан артыҡ мишәр ауылы үҙе бер олоҫ булып берләшһә лә, 2-се мишәр полкы тулыһынса төҙөлә алманы. Төҙөлә алмаған полкка йүнле ойоштороусы ла килмәне. Шуға ла Щадрин етәкселеге ул төҙөлөп бөтмәгән ике йөҙлөктән генә торған полкка Бүре ауылынан Искәндәр исемле башҡорт хорунжийҙы тәғәйенләне.

Быға тиклем ул 19-сы башҡорт полкын төҙөнө. Әммә полкын тулыландырыу ауыр хәлдә торғас, уны Силәбе өйәҙенең Мейәс ҡалаһынан 40 саҡрым алыҫлығындағы Күңгерәү станицаһына күсерҙеләр. Тирә-йүндәге бер нисә мишәр ауылынан йыйылған халыҡ та алайҙы кәрәкле һанға еткерә алмағас, уны Өфө өйәҙендәге Салих ауылына күсерҙеләр. Өфө өйәҙенә, ул тиҙ генә тулыланып, 10 октябрҙә юлға ҡуҙғала. Уға командир итеп Күңгерәүгә килгәс үк, Урге Урал гарнизон батальоны командиры В. И. Бутлер тигән майор ҡуйылды. Ә Искәндәр уның беренсе ярҙамсыһы, ә ысынбарлыҡта көндәлек алай башы булды.

Был ваҡиға-сығалыштарҙы Ҡолой, әлбиттә, белеп үк етмәй. Әммә генерал-губернатор Волконскийҙың фарманын үтәп, 16-сы, 17-се алайҙа кемдәр биләгән баҫҡыстары буйынса теге йәки был дәрәжәгә тиң булғандарҙың исем-шәрифтәрен, йәшен, нисәнсе йөҙлөктән икәнлектәрен күрһәтеп, ҡағыҙға теркәп яҙҙы. Был губернаторҙың ҡулына биреләсәк. Ә бына йөҙлөктәрҙең ҡайһыһына мулла итеп, кемде тәғәйенләүҙе Мирхажи мулланан башҡа хәл итә алмай, уны көтөргә ҡарар итте. Ул кешеләрҙе Мирхажи мулла үҙе билдәләр, үҙе тәғәйенләр. Иң мөһиме, ғибәҙәт ҡылыуҙар, һуғыш шарттарына яраҡлашырға тейеш.

Генерал-губернатор ҡарасайҙың башына уҡ килер булғас, унан алда беҙ үҙебеҙ һуғыш күнекмәләрен ҡабатлап өлгөрә алмайбыҙ. Урындарға барып тикшерәһе, өйрәтәһе, әйтәһе кәңәштәр бик күп. Ауылдарҙы ла йөрөп сығыр кәрәк бит әле. Губернатор килеүгә ике, иң күбеһе өс көн ҡалған. Әле Ғәфифәне, ата-инәһен ҡаршыларға, урынлаштырырға, уларға ла ваҡыт бүләһе бар. Унан тыш, иртәгәнән алып полктарға, йәнәһе, командирҙар булып килеүсе урыҫ әфисәрҙәрен, Ырымбурҙан капитан Труновты һәм дә 17-се полкка тәғәйен майор Александр Овсянниковты эйәрсәндәре менән бергә ҡаршылайһы бар. Ярай ҙа, улар, килгәс, тәғәйен бүлмәлә иркенләп ятып, мунса кереп, тоноҡ һыуҙарын эсеп, кәрт уйнап ҡына ятһалар. Әгәр генерал килгәнсе полктарҙы ҡарап сығырға теләһәләр? Уларҙы йыйып, теҙеп күрһәтергә лә кәрәк бит. Был кешеләрҙең полктарҙы төҙөүҙә бер остоҡ та хеҙмәте кермәһә лә, әҙергә хәҙер булып генерал алдында күренәһеләре килеп, уны үҙҙәренсә күҙаллап ҡуйғандарҙыр инде. Ҡолой уларҙың икеһен дә килгән көндәрендә үк ҡыуып ҡайтарыр ине лә бит. Алдағы көндәрҙе лә уйларға тура килә. Ни тиһәң дә, юлда, һуғыш яланында ла, көнө-төнө бергә булырға тура килер. Килешеп эшләмәһәң, яҙыҡ булыр. Хатта бәлә лә килтерер... Ҡолойҙоң йомро башы уны шул фекергә килтерҙе.

Әфисәрҙәрҙең һәр һүҙе, һәр теләге һуғышсыларға минең аша етәсәк. Ул командирҙарҙы алайҙағы һуғышсылар аңламай ҙа, аңларға ла теләмәй. Ҡолой нимә әйтә, һуғышсылар шуны үтәйәсәктәр. Тик бына оло һыуҙарҙы нисек үтербеҙ икән? Хәҙер көн бөтөнләйгә көҙгә тартты, һыуҙар халҡынайҙы. Ат тәне лә, эт тәне лә тартышыр. Ә кешенеке бигерәк тә. Оло Иҙелдә лә, арғы көнбайыш ерҙәрендә лә бер юлы 50-шәр атты, һуғышсыны ҡаршы ярға сығарыусы борамдар-паромдар бар микән? Әллә һыуҙы боҙ ҡаплауын көтөп ятабыҙмы? Төрлө һорауҙар борсоно кантонды. Әгәр борамдар булмаһа? Хәҙер китеүҙең фәтүәһе юҡ. Йылға буйына барып, боҙ көтөп ятҡансы, әлегә өйҙә тороу уңайлы булмаҫмы? Барҙыр ул борамдар, барҙыр... Берәй йөҙлөктө алдан ебәреп, борамдарҙы эшләтеп ҡуйыр ине, Оло Иҙел бик йыраҡ.

Әллә әлегә тиҙ генә Мәскәүгә кереү, Наполеондың ғәскәре менән айҡалашырға тиҙ генә барып етеү батша өсөн бурыс түгелме? Әллә дөрөҫ, әллә юҡ, имеш, Наполеон Мәскәүҙе баҫып алған, тигән дә хәбәр ишетелеп ҡуя. Әммә уны һис бер кем һөйләгәне юҡ. Килеп-китеп йөрөгән завод түрәләре лә асыҡ итеп әйтә алмай.

Ялға ла, йоҡоға ла ваҡыты юҡ Ҡолойшоң. Оло Иҙелгә тиклем булһа ла, аттар өсөн һоло тейәтер кәрәк арбаларға. Иҫәп-хисап булмаһа, әште маҡсатлы башҡарып та булмай бит әле. Ике алайҙа, артмаҡтары менән 1650 тирәһе ат була. Һәр атҡа көнөнә 7–8 ҡаҙаҡ һоло биргәндә лә, 1650 атҡа 330 бот самаһы һоло кәрәк була бер көнгә. Бер ат арбаһына 30 бот һалғанда ла, бер көн ашатыр өсөн 11 арба кәрәк буласаҡ. Оло Иҙелгә саҡлы 20 көн барғанда ла, 220 арба, үҙе оло бер ылау барлыҡҡа килә. Уны ойоштороуы еңел түгел. Юлда һатып алып барып булыр ине лә бит, бөтәбеҙ ҙә шул бер юл менән барабыҙҙыр бит. Өфө–Бөгөлмә–Ҡазан. Алда киткәндәр бөртөклөләрҙе халыҡтан алып, ашатып бөткәндәрҙер, инде. Шулай ҙа тәьминәт бүлеген ҙурыраҡ итеп төҙөп, уларҙы алдан ебәрергә кәрәк. Алдан һөйләшеп, бөртөклөләрен һата торған кешеләр беҙҙең юлға сығарып көтөп торһондар. Был юлға сыға торған ылауҙар һанын кәметәсәк. Тик үҙ-ара хәбәрләшеү саралары төплө уйларға кәрәк тигән уйҙар эсендә ҡайнаны Ҡолой. Шундай унарлаған һорауҙарҙы урындарҙа йөҙлөктәр, иллелектәр менән кәңәш итер өсөн ауылдарға сығып китте ул.

Сәғит менән Әбүтаһирҙы, алдан килгән кешеләрҙе тейешенсә ҡаршы алып, урынлаштырыу һәм башҡа мәсьәләләрҙе хәл итеү өсөн идаралыҡта ҡалдырҙы. Идаралыҡ ихатаһында көнө-төнө сапҡын өсөн бер унлыҡты тотоуҙы ҡушты.

Аш урған, көлтәләрҙе ташып өйгән, һуҡҡан ырҙындарҙа ла, ҡаймаҡ туғып, һупалаҡ-һупалаҡ май эшләгән ҡатын-ҡыҙҙар янында ла күп эшләп етешә алмай йөрөгәндәрҙе лә күрҙе. Һәр ауылда, һәр олоҫта, һәр йортта эш ҡайнай. Бесән эшләйҙәр, кейеҙ һуғалар, итектәр, әпсен-төпсөн тегәләр, ҡорал яһайҙар, тәгәрмәс бөгәләр, аттарҙы дағалайҙар. Һәр ауылда уҡ һөңгө һабы эшләйҙәр. Ул барған һәр ерҙә халыҡ йыйылды. Һүҙ һуғыш, һуғышҡа китәсәктәрҙең ғаиләләре, ҡарт-ҡороно, бала-сағаны, ҡеүәтheҙҙәрҙе тәьмин итеүҙе, киткәндәр урынын кемдәр биләйәсәге тураһында ла, барҙы. Әгәр халыҡ кемгәлер риза булмаһа, уны алмаштырыу ҡаралды, тауышҡа ҡуйылды.

Ҡолой хәҙер һуғышҡа тиклемдәге Ҡолой түгел. Һуғышҡа тиклем, ул күберәк, үҙ фекерен яҡланы. Ҡайҙа кантон хоҡуғын, ҡайҙа дәрәжәһен ҡулланды. Ә хәҙер икенсе Ҡолой. Дәрәжәһен һәм хоҡуғын ҡулланып, халыҡ фекерен тормошҡа ашырыу юлына баҫты. Был фекерҙе, уға, Мирхажи мулла ла, әҙ генә һөйләшеү осоронда Хәйретдин мулла ла, аңына һалды.

«Бер-береһенә мөнәсәбәтле йән әйәләре бер-береһенә мөхәббәтле, инсафлы, кеселекле булырға бурыслы. Матди байлыҡ тамаҡ өсөн, рухи байлыҡ бәһәр өсөн. Яңынан тыуыу, яңы кеше булыу өсөн. Рухиәтең булмаһа, ватансыл да, мөхәббәтле лә, инсафлы ла була алмайһың». Тәрән мәғәнә ята ине Мирхажи мулла фекерендә. Яуға, ә, бәлки, шәһиткә киткәндә, күңелең һинең өйкәмәһен өсөн кешеләреңдә алдында әгәр гонаһың булһа, бер аҙ булһа ла уны кесерәйтеү теләген кеше күңеле хужаһына үҙе өндәшә. Ана шул эске тауышҡа уның буйһонмай сараһы булманы. Хәйер, рухлы һәм хисле, һәр йән әйәһенә ул ҡанундыр...

Ҡолой ул көндө үҙ торағына, идаралығына ҡайтып етә алманы. Һәр ерҙә йөҙлөк баштары менән йөҙмәһе йөҙ һорауҙы тикшерҙеләр, хәл иттеләр. Дәрәжә биреү исемлектәрен тикшерҙеләр.

Тик икенсе көндө көн өйләгә ауышҡас, сапҡын килеп, урыҫ әфисәрҙәренең дә, элекке йөҙ башы Бикбаштың да килеүе тураһында хәбәр килтерҙе. Сапҡын уға, Мирхажи мулла менән тағы ла ят мулланың ике абыстайы, олоһо һәм бик йәше менән килеүен бәйән иткәс, Ҡолой, ул йәш абыстайҙың Ғәфифә булыуына шиге ҡалманы. Осраша, күрә торған кешеләрен йәһәтләп күреп, тейешле фармандарын бирep, ул ҡайтыу яҡҡа юл алды.

Егерме биш-утыҙ саҡрым ерҙе һә тигәнсе үтеп, идаралығына килеп кергәндә, Сәғит менән Әбүтаһир үҙ-ара бәхәс итмәһәләр ҙә, ҡыҙыу-ҡыҙыу һөйләшәләр ине. Сәғит, аҡай булараҡ та, бисәһе аша ла, әле бөгөн килгән йәш абыстайҙы Ҡолойҙоң хәләле икәнен төҫмөрләй ине. Уны, Ҡолойҙоң үҙе күрһәтеүенсә, йылы, ҡушы өйгә урынлаштырҙы. Ләкин, бына күптән дә түгел, Силәбенән фельдшер йә лекарбеҙ, тип, биш кеше килеп төштө. Өсәүһе ир. Икәүһе күпте күргән, оло кешегә оҡшай. Ҡыҫҡа ғына һаҡал-мыйыҡлылар. Һәр береһенең ҡулында ҙур муҡсайҙарҙан башҡа бәләкәйе лә бар. Өсөнсөһө йәш, ябыҡ, оҙон. Уныһы ауанираҡ, ахырыһы, ололарының ауыҙына ғына ҡарап тора. Нимә әйтһәләр, шуны тиҙ генә үтәй. Әллә лекарь, әллә итек һалдырыусы. Ике олоһо йомшаҡ кейеҙле урындыҡҡа ятып киткәс, тиҙ генә оҙон ҡуныслы итектәрен һурып тартып алды. Ололар, икеһе лә, төрөпкә тип аталған һаҫыҡ тәмәке тарталар. Аптырап ҡарап торҙо был ғилләләрҙе Әбүтаһир. Ә икәүһе – ҡатын-ҡыҙ.

– Сестра милосердия, беҙ, беҙгә айырым бүлмә кәрәк, – тигәс, был хәлде көтмәгән Әбүтаһир, уларҙы йәш абыстай янына урынлаштырҙы. Ысын эттәхиәтте ул белмәй ине.

Ҡолой ярҙамсыларынан бөтә ваҡиғаларҙы ентекләп һорашты. Ауыр, бик ауыр хәлгә ҡалды ул күңелендә. Килгән әфисәрҙәр янына бармай мөмкин түгел. Иртәгә бит губернатор үҙе килә. Ул беҙҙең кеүек төндә йөрөмәҫ. Тура, һанама юл менән йөрөрмө, әллә Себер юлы менән Сыбаркүлгә килеп, унан беҙгә сығырмы? Әгәр

иртәгә килһә, иртә менән үк килеп етмәҫ. Тура килһә, әлбиттә, юл икеләтә, хатта өсләтә ҡыҫҡа. Әммә губернатор хәтле губернатор ауылдар араһы юлы менән йөрөмәҫ. Һаҡлыҡ та кәрәк бит. Сик хеҙмәте, гарнизон хеҙмәте, унан һуң һалым йөкмәгән казак, башҡорттар, бөтәһе лә тынысмы икән? Юҡ. Губернатор, төп тракт, Себер юлы менән Сыбаркүлгә киләсәк. Уға теймәй үтеп китмәҫ. Унда ла ҙур гарнизон тора. Һәр гарнизондан сүплән Урал казактары, Исәт казактары тигән полктар ҙа төҙәләр бит. Яҙ, үлән сығыу менән Сыбаркүл гарнизоны минән һатып алған ҡонандар хәҙер ат булғандыр инде. Ат тип, тулы мәғәнәһендә ат түгел, ә егергә, менергә тамам өйрәнеп, күнеккәндәрҙәр, тип үҙ ҡонандарының да яҙмышын уйланы Ҡолой.

Әгәр губернатор иртәгә 5-се кантонға барам, тип хәбәр ебәргән икән, тимәк, ул Силәбенән кисәге сыҡҡан. Ни тиһәң дә, Силәбе менән Сыбаркүл араһы һикһән саҡрымдан ашыуыраҡ. Ул араны ул, иртәнге сабаһ менән өйлә араһында үтә ала. Сыбаркүлдә туҡтаһа, унан беҙгә кискә табан сыҡмаҫ. Гарнизон һалдаттарын ҡарап, тикшереп, унан һуң сәркәүгә лә инмәй үтмәҫ. Тимәк, ул иртәгә лә беҙгә килеп етмәҫ. Үҙ урыҫтарында йоҡлауҙы хуп күрер. Өҫтәүенә, уға кис өҫтәл арты, күҙен йомоп ятҡан бешкән сусҡа балаһын ултыртасаҡтар. «Һөтлөрәк» мутлы һыу, әлбиттә, мул булыр.

Сыбаркүлдән беҙгә – уға – ваҡыт буйынса өйлә менән икенде араһы. Һыуһап, әҙерәк тәне зымбырлап килер... Әммә ул иртәнге сәйҙән һуң сыҡһа, өйләгә тиклем килеп етеүе лә мөмкин. Килгәс ашамай, әсмәй булмаҫ. Һәр бер йөҙлөк башын, иллелектәрҙе лә күрһәтеү кәрәк булыр. Бәлки, уларға айырым тамғалар килтергәндер. Исем-шәрифтәренең теҙмәһен ҡулына бирербеҙ, йә үҙем дәрәжәләрен дә күрһәтеп уҡып барырмын.

Шулай ҙа килгәс ашҡа саҡырырбыҙ. Сәй урынына балауыҙҙан әсетелгән ҙур туҫтаҡ әсе бал, йә әсетелгән буҙа бирербеҙ. Күңелләнеп, теле асылып китер. Аш алдында ғәскәрҙең һуғышҡа әҙерлеген күрһәтеүҙе һөйләрмен. Әлбиттә, минең тәҡдимгә әфисәрҙәр риза булһа. Булмаһалар, улар үҙҙәренекен ҡысҡырырҙар. Ә мин, уларҙың артынса, үҙемсә әмер бирермен. Егеттәр, тик минең фарман буйынса ғына эшләрҙәр, уға шик юҡ. Бөтәһе лә мин уйлағанса, йөҙлөктәр менән бергә ғәмәлдәрҙе ҡорғанса, килеп сығыр. Әйҙә ҡысҡырынһындар үҙҙәренсә йәйәүле батальон командирҙары. Йүнләп ат өҫтөндә лә ултыра алмайҙар. Улан йәки драгун тигән полктан булһалар... Унда эш тә, мөнәсәбәт тә башҡа булыр ине. Йәйәү йөрөргә өйрәнгән, йәйәүле һуғыш кешеһе инде. Һыбайлының һуғыш алымдары бөтөнләйгә башҡа бит. Йәйәүле һыбайлынан урман араһында батҡыл ерҙә, тар, ҡыҫынҡы урында, ҡая таштыҡта, соҡор-саҡыр, йығылған ағаслыҡтар араһында

өҫтән булыуы мөмкин. Әммә асыҡ ерҙә йәйәүле һыбайлыға ҡаршы тора алмай. Бында һан яғының да өҫтөнлөгө бик мөһим.

Губернаторҙың иртәгә лә килеп етә алмау ихтималлығы Ҡолойҙо баҫҡан ауыр тойғоларынан бер аҙ бушатты. Бөгөнгө кисте нисек үткәрергә үҙенсә ҡарар итте. Кискелеккә Мирхажи муллала табын әҙерләтергә. Зыр-зыуҙан һаҡланыу өсөн ҙур өйөнөң ҙур бүлмәһенә ҡунаҡтарын бөгөн саҡырмаҫҡа ҡарар итте. Мирхажи муллала тынысыраҡ та, аулаҡ та. Бындай теләкте Мирхажи муллаға Әбүтаһир еткерер. Кәрәк булһа, тейешле аҙыҡ-түлеген дә алып барыр. Ә Сәғит, Сәғит ағаһы губернатор керә торған төп йортто әҙерләтер. Аҡбикә менән Зөләйхәне лә йүгертер. Ашнаҡсылар, өй ҡараусылар, йомошсолар, мейесселәр, һыу ташыусылар, йыйыштырыусылар һәм башҡалар, иҫәпләһең бихисап ир-ат, ҡыҙ-ҡатын йыйыла. Әҙерләһендәр, әҙерләнһендәр. Өҫ-баштарын, тирә-йүндең таҙалығын тотһондар. Губернатор алдында йөҙ ҡыҙарырлыҡ булмаһын. Быларҙы Әбүтаһир менән Сәғит эшләр. Ә миңә хәҙер был ике әфисәр һәм фельдшерҙарҙы күреп, һөйләшеп, уртаҡ фекергә килеү кәрәк.

Ҡолой кантон – войсковая старшина, урыҫ әфисәрҙәренә тәғәйен йортҡа ҡылысын һәм уң биленә хәнйәрен, билбауы аҫтына пистолетын ҡыҫтырып барып кергәндә ҡыҙмаса әфисәрҙәр, ысынлап та, хәрәмләшә-хәрәмләшә кәрт һуғалар ине. Ниңәлер, эске күлдәктәре өҫтөнән ҡулбаштары аша һалынған ҡайыштарын кейеп ултырған ике әфисәр ҡораллы кантон начальнигын күреп, аяҡ өҫтә баҫып шаҡ ҡаттылар. Әллә иҫтәренә килеп, әллә хәрби кәрәклекте уйлап, икеһе лә Ҡолой алдында үҙҙәре менән таныштырҙылар.

– Командир 16-го иррегулярного башкирского полка, капитан Михаил Трунов, – тине йәшерәге, оҙонорағы.

– Командир 17-го отличившегося на Кавказской-грузинской баталии полка, майор Александр Овсянников, – тине икенсеһе, олорағы, йыуан, тәпәшерәге.

– А где они, ваши полки? Вы их видели? – тип һораны Ҡолой. – Где они стоят? Чем и как вооружены? Укомплектован ли состав? Каково материальное обеспечение? – тигәс, әфисәрҙәр аптырап киттеләр.

– Что, их нету что ли, полков-то? – тип һораны, ҡурҡышынан майор Овсянников.

Әгәр иртәгә генерал-губернатор килһә... Ә полктар булмаһа?.. Беҙ бит ул полктарҙы ойошторорға, матди тәьминәттә ярҙам итергә тейеш инек бит... Генерал килә, ә полк юҡ. Әллә быларҙы, 2-се мишәр полкы кеүек ойошорға теләмәйҙәрме? Генералға, полктар теүәл түгел, тиһәк, ул беҙҙең баштан һыйпамаҫ. Яуап-

һыҙлыҡ өсөн Себер оҙатыр, бөтә дәрәжәңдән ҡолаҡ ҡағырһың. Ҡобаралары осто капитан менән майорҙың.

Әфисәрҙәрҙең йөҙөнә сыҡҡан ҡобараларын ҡайтарыу өсөн, Ҡолой былай тип тыныслandырҙы:

– Не беспокойтесь! Боеспособный, общим с 1200 личным составом и укомплектованного с 1800 голов боевыми лошадьми два полка готовы, хоть завтра в поход. Начальник 5-го башкирского кантона, войсковая старшина, участник боевых действий на Кавказе, Австрии, в войне со Швецией. Кавалер орденов и медалей Кулуй Ярмухаметович Кучуков, – тигәс, ҡунаҡтар алдарында торған үҙҙәренән олпат та, дәрәжәһе лә ҙур, күп нуғыштар күргән был кешегә хөрмәт менән, башҡортса, ике ҡуллап күрешергә булдылар. Донъяуи хәл-әхүәлдәрҙе бер-береһенән һораша башлағас, ашнаҡсылар аш-һыу килтерҙеләр. Ашы аш та ул, әммә һыу тигәне әсе бал булды.

Ҡолой урыҫтарҙың, бигерәк тә хеҙмәттәге әфисәрҙәрҙең, холҡон белә. Һирәк осраҡта ғына улар иҫерткес эсмәй, аш ашайҙар. Шуға икеһе лә таныш түгел кеүек был эсемлекте бер тын алыуҙа эсеп тә ҡуйҙылар. Ҡолой үҙе ул аштан азат. Ҡымыҙ эсә, эсе буҙа ла эсә. Әммә әсе балды бер ваҡытта ла татығаны юҡ. Яйлап телдәре йомшарҙы. Эстәге әҫелек боттары буйлап тубыҡтарына төшөп хәлдәрен алды. Тәндәрен зымбырлатып бер билдәһеҙ зауыҡ килтерҙе. Туҫтаҡтарға күрһәтеп:

– Тағы ламы?– тип ымланы Ҡолой. Икеһе лә өндәшмәнеләр, әммә көлөмһөрәнеләр. Тимәк, был зауыҡ әйәһе – эсемлекте һорарға, намыҫтары етмәй. Ә эскеләре килә. Уларға нимә кәрәклеген ҡарап торған табынсы Фәлләмгә Ҡолойҙоң еңел генә баш ҡағыуы булды, туҫтаҡтар әсерәк еҫ таратып, еңелсә күберсеп, тағы ла тулды.

– Сегодня, товарищи, полки трогать не будем. Завтра, в полной боевой комплектовке они будут на построении прямо с утра. Там их и посмотрите, – тигәс, тәндәре рәхәтлеккә сумған был ике йән эйәһе урындарынан һис торғолары килмәне. Әллә торғолары килмәне, әллә тора алманылар, быуындары тотмай... Әсеп, шиңгән ҡамыр кеүек булдылар ҙа ҡуйҙылар. Әммә телдәре асылды.

Береһе өс аршиндай балыҡ тотҡан, икенсеһе бер ултырғанда бер үҙе бер күркәне ашап бөткәс, тәүгеһе бер сирек «первач»ты эсеп бөтһә лә, аяҡ өҫтөндә ҡайтып еткән. Тағы әллә ниндәй ҙур «батырлыҡтар» күрһәткәс, йәшерәге, Трунов тигәне, Маша, Мария хәбәрен башланы. Йәнәһе, ул, теге Марияны ла, был Зинканы ла баҫҡан. Тағы әллә кемдәргә лә өлгөргәс, майор ҙа түҙмәне. Ул да үҙенең ул өлкәләге «ватансылығы»нан әллә нисә ваҡиғаны бәйән итте.

Ҡолой, быларҙың тел төбөн аңлағас, хәбәр араһында:

– На показ военной подготовки я пригласил и лекарей. Их пятеро. Двое из них женщины, молодые, – тигәс, Труновтың күҙәрендә ҡыҙыҡһыныу балҡыны. – Они живут рядом, в квартире моей жены, – тигәс, ҡыҙыҡһыныуҙары тағы ла артты. – Специальной группы лекарей не было создано раньше, но сейчас она нужна, так как сейчас на войну едем большими группами и отдельно. Завтра генералу покажем и события оказания первой лекарьской помощи раненым, – тигәс, әфисәр, ҡыҙыҡһыныуҙарын йәшермәй:

– Где они? Давайте заранее познакомимся с ними, – тине майор Овсянников.

– Конечно, – тип хупланы Ҡолой үҙе лә был тәҡдимде.

Сығыр ваҡытта табынсы Фәлләмгә ул:

– Әгәр ҡунаҡтары менән килһәләр, аш-һыуҙан өҙмә. Әммә ҡамасаулама, ә мин Мирхажи муллаға ашҡа барам. Унда ла ҡунаҡтар бар, – тине.

Әфисәрҙәр бисәләр алдында «бравый» булғылары килептер инде, барлыҡ ялтырауыҡтарын, солдатский тип аталған тартмаҡылыстарын да элеп алдылар. Ә Ҡолой, киреһенсә, пистолет-ҡылыстарын Фәлләмгә биреп ҡалдырҙы.

Фәфифәнең өйөнә еткән һайын, ул, тиҙ генә тулап бармай торған йөрәгенең типкәнен һиҙә башланы. Һәр ваҡыттағыса, үҙен ныҡ тотто, үҙ-үҙен тынысландырҙы. Ниһайәт, бына ул өй. Тышта уҡ ҡоролған тәҙрә янынан үткәндә, әстәге сырҡылдашып көлөшкән тауыштар араһынан, бөтмәҫ-төкәнмәҫ үҙ тауышы ҡолағына һарылды. Бына ул ишек. Тыштан шаҡылдаттылар. Башҡорт ҡатын-ҡыҙының ғәҙәттәге өндәшмәүенә, һүҙһеҙ иғтибарына хас булмаған:

– Да, да, – һүҙе ишетелгәс, Ҡолой, ышаныслы көс менән ишекте һелкетә тигәндәй тартып асты ла эскә атланы. Әллә ниндәй уйынсыҡ-тәсәйҙәре, күрәһең, дауалауҙа ҡулланыла торған.

Өйгә кергәс, барыһы менән дә баш эйеп һаулыҡ һорашты ла үҙе менән таныштырҙы:

– Начальник пятого кантона, войсковая старшина, – тигәс, ике мәрйә күҙҙәрен шар асып, ҙур ҡыҙыҡһыныу менән уға баҡтылар.

Рәсми буласаҡ вазифаларын әйтмәй генә юлдаштарын да таныштырҙы:

– Капитан Оренбургского линейного батальона Михаил Трунов и Александр Овсянников, майор Троицкого гарнизонного батальона.

– А это моя жена Гафифа Бикбашевна, – тип, Фәфифәнең ҡулбашынан ҡыҫты.

– Вот оказывается Галя какая, – тип берене уға аптыраулы ҡараш ташланы ла, күҙен алмай Ҡолой менән Ғәфифәгә ҡарап ултырҙы.

– Нет, у нас Галя не бывает, не Галя, а Ғафифа, – тип Ҡолой уны төҙәтте. Икенсене, саҡ-саҡ телен бороп, – Ғафи-фа, – тип ҡабатланы. Әйтерһең дә быға тиклем улар исемдәрен әйтеп танышмағандар...

– У вас ведь тоже есть подобные имена – Глафира, Ефросинья, Фекла, Марфа, – тип теҙеп китте Ҡолой. Исемләп танышыу шуның менән тамам булды кеүек.

Әммә Трунов менән Овсянников үҙҙәре төбәлгәндәр менән яҡындан танышырға булғас, лекарихаларҙың берене Серафима, икенсене Фаина икәнлеге асыҡланды.

– Вот видишь, все под одну музыку, – тип, майор Овсянников күҙгә күренмәгән көсөргәнешлекте, һүҙе менән һыйпап, тигеҙләп ҡуйҙы.

Бынан һуң мөнәсәбәттәр ҡырҡа яҡшырҙы. Әфисәрҙәр ҡыҙҙар менән яҡшылап танышырға кереште. Башҡорт полктарына һуғыш әҙерлеге күнекмәләренә хәрби лекарҙар булып 5-се кантон начальнигы тарафынан саҡырылыуҙары раҫланғас, Трунов менән Овсянниковтың ҡыҙыҡһыныуы тағы ла артты. Саярағы, Серафима тигәне, иррегуляр һәм казак полктарында хәрби лекарҙар ярҙамы төҙөү Ырымбур губерна комитетындағы «Общественное здравие» хупланып, ойошторолғанын әйтте. Капитан менән майорҙың күҙҙәрендә, был яңылыҡтан һуң, ут сатҡылары күренеп сәсрәне. Уларҙың баштарына икенсе уй йүгерҙе, буғай. Ике оло фельдшерҙы һуғышҡа алмаҫтар. Үҙҙәре лә теләмәҫ, өйәҙҙең дә рөхсәте булмаҫ. Ни тиһәң дә иррегуляр ғәскәргә күберәк теләк менән яҙалар. Әллә дөрөҫ, әллә юҡ, йәнәһе, хәрби батырлыҡ күрһәтһәң төҙөлөшкә ярҙам, исемле шәхси ер, ниндәйҙер дәрәжә, хатта, аҡса, көмөш миҙал, ә, бәлки, унан да ҙурырағын бирәләр имеш, тигән хәбәр ҙә бар. Был әллә батшаның, әллә Сенаттың төҙәтмәләр индерелгән указы булһа кәрәк, тип хәтерләне майор.

Ҡолой капитан менән майорҙың әле генә баштарына килгән томанлы уй-теләктәрен төшөндө, буғай. Уларҙың уйы, был Серафима менән Фаинаны башҡорт полкына хеҙмәткә күсереп, бергә һуғышҡа алып китеү түгелме икән?

Әгәр шулай булһа, бик уңай, мәсьәлә бик ыңғай хәл ителер ине. Беренсенән, Ғәфифәне алып китеү мәсьәләһенең ыңғай хәл ителеүе еңелләшә, икенсенән, үҙ лекарҙар берәмегенең булыуы бик отошло. Әлегә тиклем башҡорт полктарында лекарҙар берәмеге булмай торған ине. Ә Ғәфифәнең унда йөрөмө бар. Ул бит Златоуста лекарҙар мәктәбен бөткән, уға ҡағыҙы ла бар. Генерал-губернатор алдында табиплыҡ берәмеген булдырыу, ул иррегуляр

ғәскәр өсөн яңылыҡ. Ҡаршы тора алмаҫ генерал. Киләсәктәге ғәскәрен берәмек командирҙарына – корпус, хатта, армия етәкселәренә ҡарата мөһөрлө ҡағыҙын да бирер. Ҡолой, был әфисәрҙәргә иғтибарҙары төшкән ҡыҙҙар менән яҡындан танышыу өсөн шарт тыуҙырырға булды.

Ҡайҙа барһа ла, үҙе ҡайтарып ебәрмәйенсә, артынан һаҡлап йөрөгән егеттәрҙең береһен, алғы өйгә сығып, саҡырып алды ла бойороҡ бирҙе. Йомошто үтәгәс, бөтәһенә лә, өсәүһенә лә ҡайтып ял итергә ҡушты. Кире кергәс, майорҙы ситкәрәк саҡырып шыбырланы. Туҡтаған йортта ашау-эсеү, йоҡлау шарттары булаҫағын аңланы майор. Ҡыҙҙың үҙ теләктәре менән иррегуляр полктарға күсеүе, бөгөнгө кисәнең һөҙөмтәһенә бәйле, тип фаразланы. Был Ҡолойҙоң үҙенә лә уңай. Хәҙер улар икәүләп Мирхажи муллаға ашҡа барасаҡтар. Унан һуң был өйгә кире килеп, татлы ләззәт кисерәсәк. Нинәйәт, уға ял итергә, йоҡоһо туйғансы көтөү киткәнгә тиклем йоҡларға мөрхәт буласаҡ.

Мирхажи муллала оҙаҡ ултырырға ниәте юҡ ине. Улар, Ғәфифә менән Мирхажи мулла йортона кергәндә, табын күптән башланып, уның урта өлөшө дауам итә ине, шикелле. Күрешеүҙәр, йыуышыуҙар, бүләк, күрес бирешеүҙәр, бөтәһе лә теүәл үтәлде. Морондоҡ атай-инәй булған, Мирхажи мулла үҙе лә, абыстайы Шәфиҡә лә, ярҙамсыһы Сәғит ағаһының ҡатыны, Ҡолойҙоң еңгәһе Сабира ла, был табынға, күренеп тора, етди әҙерләнгәндәр.

– Кейәүегеҙ, тимен, Бикбаш ҡоҙа, Бәҙерниса абыстай, һеҙ һораған мәһәрҙе миңә тапшырырға ҡушты. Шул оло, изге бурысты үтәп ҡуяйыҡ, – тип, Мирхажи мулла алғы өйгә ҡарап әйәк атыуы булды, ике егет береһе бүре толоптон, икенсеһе төлкө бәсәһенән тегелгән ҡупшы тун тотоп килеп керҙеләр ҙә, урын биргән кешеләр араһынан Бикбаштың иңбашына толоптон, ә абыстайына тун һалдылар. Ҡулына болан ашҡағы тиреһенән тегелгән үксәле итек тоторҙолар. Мирхажи мулланың абыстайы Шәфиҡә:

– Ҡоҙағыйға бүләк, – тип, ҡулдарына көмөш беләҙек кейҙерҙе. Ә усына зәбәржәт ҡашлы алтын алҡалар йомдорҙо. Унан һуң, ҡоҙағыйына ҙур төргәк бирep, ҡолағына:

– Ҡоҙа менән үҙеңә күлдәк менән ыштан, – тип шыбырланы.

– Ә илле баш йылҡыны иртәгә көтөүеңә ҡушырҙар, ҡайным, – тип, мәһәр хәбәрен йомғаҡланы Ҡолой. Бының менән генә бөтмәне әле, Мирхажи мулла менән Шәфиҡә абыстай, дуҫ булышайыҡ тип, дуҫлыҡ билдәһе итеп, Хәйретдин мулла менән Сәйҙә абыстайҙың һәр береһенә елән, тегелгән итек бүләк иттеләр. Никах уҡыған өсөн никах хәйере, тип Ҡолой Хәйретдин муллаға ла, әбейенә лә йылы көпө, төлкө бүрек, ә абыстайына ҙур, йылы, ҡалын шәл бүләк иткәндән һуң:

– Тағы ла ун йылҡы, – тип өҫтәне. Төп бүләкте алған кешеләрҙән тыш, һәр кем йәшенә, дәрәжәһенә ҡарап, бүләктәр алдылар. Бала-саға ҡулъяулыҡ, ҡысмау(ҡыҫбау), киҫет, яулыҡ, күлдәк, хушбый, сигеүле күлдәк, салбар, семәрле бил ҡайышы, хатта биҙәрле һаплы хәнйәр ҙә алдылар, утыҡҡан, быуындары ҡатҡан аҒай-эне, ир-ат. Бүләк бирешеүҙән һуң, доға ҡылдылар, унан баллы, татлы сәй эстеләр. Оҙаҡ ҡына һөйләшеп ултыра торғас, Сәғит аҒаһының ҡатыны, Сабира еңгәһе:

– Беҙ ни төнө буйы ултырһаҡ та ултырырбыҙ. Бына никахлыларҒа иртәгә ҙур түрәләр килә, тиме? Бик күп эштәре торалыр, әйҙә ял итһендәр. Юлға сығып китһәләр, уларҒа ял теймәҫ, – тип, Ҡолой күптән көткән хәбәрҙе һалды. Әй аҡыллы ла инде еңгәһе. Билдәле, берәү ҙә өндәшмәне. Берәү ҙә ҡалырҒа, ултырырҒа ла ҡыҫтаманы. Шулай ҙа Бикбаш түҙмәне. Әллә ризалығы ташып, шул мәһәр алған тойҒо аҫтында, әллә бындай аулаҡ табындың ҡасан әле булыуын аңлап, яуап һүҙе лә кәрәклеген төшөнөп һүҙгә килде:

– Рәхмәт, кейәү, ир икәнһең! Илде һаҡлағанда ла, шулай ир бул, шигебеҙ юҡ быға. Тик һау ҡайтығыҙ! Аяҡ-ҡулдарығыҙ теүәл булһын... – әллә күңеле тулды, башҡаса ул һүҙ әйтә алманы. Тамағына төйөр тығылды. Уны Хәйретдин мулла дауам итте:

– Ил ҡайғыһы, йорт ҡайғыһы, ир ҡайғыһы. Ил беҙҙе ҡайғыға һалды. Беҙ уны ҡайғыһынан ҡотҡарырҒа тейешбеҙ. Ҡотҡарыусы һеҙ инде, кейәү, хәҙер беҙ түгел. Ваҡытында атта ла саптыҡ, яуға ла саптыҡ. Аямай һуғыштыҡ, тере ҡалдыҡ. Беҙ ҙә һеҙгә шуны теләйбеҙ.

Башҡаса төбәп һүҙ әйтеүсе лә, барлыҡ табындың иғтибарын биреп оҙатыусы ла булманы.

Ҡарасай айында төндәр ҡараңғы. Күк шул тиклем аяҙ. Барлыҡ йондоҙҙар ҙа үҙ урындарында, ап-асыҡ, йым-йым йымылдайҙар. Ҡапыл Ҡолойға һуғыш яғы күҙ алдына килде. Бына улар, шул уҡ, 16-сы һәм 17-се алай йүнәлеш теҙелмәһендә (походҡа), йыраҡта янған ҡаланан дошманды бәреп сығарырҒа китеп баралар. Күҙәтеүселәрҙең хәбәр итеүҙәренә ҡарағанда, был ҡаланы уратып алған таш диуар юҡ. Төн ҡараңғы, һалҡын. Күктә шул уҡ йондоҙҙар. Йыраҡта ла, яҡында ла. Мәскәү аръяғында Балтика тип аталған диңгеҙ буйында ла, Ҡаф тауҙары яғында ла, ул ерҙәрҙең яҡтыраҡ, асығыраҡ, шыйығыраҡ күк көмбәҙендә йондоҙҙар шулай уҡ йымылдайҙар. Тик һәр яҡта торған урындары башҡа. Ҡолой уларҙы элекке походтарҙа йөрөгәнендә күп күҙәткәне булды. Аркъырсаҡты ла, иләк йондоҙҙо ла мин хәҙер ҡарап торам. Ә беҙҙә, ул йондоҙҙарҙы Аҡбикә, йә Зөләйхә ҡарап торамы икән, тип уйлап, эсе һыҙлап, тыуған илен һағыныу тойҒоһо семтеп-семтеп ала торған ине. Бөгөн һағыш тойҒоһо юҡ. Ул тойҒо тағы ла

тулыланған, күңеле мөлдөрәмә булған. Күктәге йондоҙҙар үҙҙәре мөлдөрәмә булып тулышып, йым-йым итеп, тартынып ҡына Ҡолой менән Фәфифәгә йылмайғандай тойола ине.

Өй тәҙрәләре ҡараңғы, тимәк, өйҙә бер кем юҡ. «Бравыйҙар» ҡыҙҙарҙы алып киткәндәр. Шәм-фәләндәр яҡтыртып торманылар. Тиҙерәк йылы юрған, йомшаҡ мендәргә Фәфифәнең ҡосағына сумаһы килде Ҡолойҙоң.

Эй ул төндөң тәмлелеге, ләззәтлеге, йоҡоһоноң рәхәтлеге. Бала кеүек иҙрәп йоҡлап киткәнен дә һиҙмәне. Таң атып, ҡояш сығыуға, миҡдар ваҡыт ҡалғас, иртәнге сабаһ намаҙын икәүләп уҡынылар. Сәй эстеләр. Ҡолой бөгөнгө көн бик яуаплы булыуын, губернаторҙың килеүен, 4-се кантонда Әүеш күле буйындағы кеүек өйрәнеү һуғыштары үткәреләсәген тасуирлап һөйләне. Фәфифә уға табиплыҡ берекмәһенең яра бәйләү, һынған аяҡ-ҡулға таяҡ бәйләп нығытыу һәм башҡа алымдарын күрһәтәсәктәрен һөйләгәс, Ҡолой бик ҡыуанды. Серафима, Фаина менән шул һәм башҡа һорауҙарҙы һөйләшеп өлгөргәндәр икән. Фәфифәгә ул оло фельдшерҙарҙы һәм Серафималарҙы күргә, улар менән бергә булырға ҡушты. Көнө буйы, ә, бәлки, генерал бында йоҡларға булһа, кис тә күреү мөмкинлеге булыу-булмауын, әммә ата-инәһе ҡайтыр булһа, хәбәр еткереүен һораны. Генерал-губернатор өсөн ҙур табын әҙерләнә. Әгәр бөтә уйлаған кеүек килеп сыҡһа, табында бергә булыу кәрәклеген дә әйтте. Көн әле аяҙ тора. Көндөҙ ҡояш ярайһы уҡ йылы ҡарай. Табын, бәлки, тышҡа әҙерләнгән өҫтәлдәрҙә булыр. Бәлки, юҡ, уны хәл итерҙәр. Ашыҡ-бошоҡ ашап, ул идаралығына китте. Кешеләр, дөйөм кантонлыҡ тормошо, ғөмүмән, ил яҙмышы тураһында яуаплылыҡ ҡайҙан килгәндер уға. Был өс төшөнсә өсөн ғүмер буйы эшләне, хеҙмәт итте. Әле лә ул шул яуаплылығы өҫтөндә.

Идаралыҡҡа килгәс, Ҡолой иң алда ике ярҙамсыһын һәм сапҡындар төркөмөнөң башын саҡыртты. Уның идаралыҡ тормошонда сапҡындар мөһим урын тотто. Барлыҡ идаралыҡ бәйләнештәр аша бара. Ә бәйләнеште сапҡын тәьмин итә. Шуныһы яҡшы. Ҡолой кисә үк ике алайҙың да йөҙ баштарына, Оло һәм Бәләкәй Ҡолһары ауылынан йыраҡ түгел яланда тупланырға бойороҡ биргән ине.

Губернатор килерҙәй юлда ла сапҡындар тора. Ул юлда күренеү менән, хәбәр идаралыҡҡа етәсәк. Уны ҡаршы алырға кантондың кырандасына әлеге ике ҡара ат егелгән. Әпсен-төпсөндәге һәр еҙ төймә ялтыраҡансы йышылған, зәңгәр дуғаға зыңғырларҙар эленгән. Кантондың яратҡан ерән аты ла эйәрләнеп, еҙле йүгәне теҙгененән кырандасҡа бәйләнгән. Хәрби кейемен ул идаралыҡта кейҙе, ҡоралдарын таҡты. Сәғит менән

Әбүтаһирҙан хужалыҡ эштәре, ҡунаҡтарҙы ҡаршылауға аш-һыу әҙерлеген һорашты. Сәғиткә әйтеп, ҡайныһы менән ҡәйнәһе урынлашҡан өйгә китте. Әммә йорт буш булып сыҡты. Тимәк, Мирхажи мулла уларҙы, Хәйретдин муллаһы ла ҡайтармағаң, үҙендә ҡалдырған. Уларға Ҡолой һәр йөҙлөккә, һәр алайға мулла беркетеп ебәреүҙәрен һорағаң ине. Бәлки, улар, урындағы үҙ назариәтендә күмәкләшеп, муллалар исемлеген ҡарайҙармы? Тәғәйен эштәре менән мәшғүлдәрме? Ул мөһим мәсьәлә. Яуҙа мосолман халҡы булыр әле, ике мишәр полкы ойоштороло бит. Бәлки, һуғыш ҡырында улар осрар. Беҙ, унда, һуғышта ғына түгел, ҡанға буялған көндәлек тормошта ла үҙ төҫөбөҙҙө, үҙ тәғлимәтебеҙҙе, ғөрөфөбөҙҙө шиңдерергә тейеш түгелбеҙ. Һәр алайҙа ғына түгел, һәр иллелектә үҙ хәҙрәте булырға тейеш.

Ике-өс көн булып китте, буғай, Ҡолойҙоң төп ғаиләһен күрмәгәненә. Әҙ генә ваҡытҡа булһа ла, балаларын, ҡатындарын күрергә тип, һәр береһенең йортона инһә лә, береһе лә өйҙә булманы. Йорт хеҙмәтен үтәүсе ҡатындар уларҙы төп йортта, ҡунаҡтарҙы ҡаршыларға әҙерләнәләр, барыһы ла шунда, тигәс, үҙ йортона – төп йортҡа йүнәлде Ҡолой. Ҡапҡа эсе, йорттарҙың тирә-яғы таҙартылған. Өй эсе тыштан башлана, тигәндәре, дөрөҫтөр. Оло йорттоң тышы ла, эсе лә гөлт итеп тора. Ҡапҡа эсенә үҫкән ҡайындар аҫтына ҙур, оҙон өҫтәлдәр, ситкәрәк таҫҡалыҡтар эшләнгән. Елаҫ тә, күләгә лә, елдән дә ышыҡ. Өй эсендә лә шундай уҡ хәл. Таҙа, киң, йылы. Оҙонлоғо алты, киңлеге дүрт ҡуһайлыҡ ҙур бүлмәгә лә өҫтәлдәр ҡуйылған. Өҫтәре сигеүле ашъяулыҡтар менән ябылып, туғай һәм болон сәскәләренең гөлләмәләре ҡуйылған. Ашнаҡсылар, өй ҡараусы ҡатын-ҡыҙҙар, килендәр Аҡбикә менән Зөләйхә етешә алмай, ҡырҡмаһа ҡырҡ емештән тәмле әсемлектәр, махсус салынған малдың татлы итенән һәр төрлө тәғәмдәр әҙерләйҙәр.

– Ҡайҙа булдың, нишләп юғалып торҙоң? – тигән һорау бирмәнеләр Ҡолойға. Хәйер, уларға бындай һорау биреү ҙә һәм ираттан асыҡлыҡ һорау үҙе әхлаҡ эсенә һыймай ине.

Әллә һүҙ ялғау өсөн, әллә донъяның теүәл булыуын барлап, ҡайғыртып йөрөгәндәрен күрһәтеү өсөн Аҡбикә:

– Ҡасанға килерҙәр икән ҡунаҡтар? Былай, барлыҡ нәмә әҙер, – тип белдерҙе.

Тик Зөләйхә генә асылып уҡ барманы. Ҡолой уларға, икеһенә лә, ишетелерлек итеп:

– Бөтә ҡунаҡтар ҡайтҡас, иркенләп һөйләшербеҙ, – тигән һүҙен ҡатындары төрлө мәғәнә һалып ҡабул иттеләр. Уның был билдәһеҙ «иркенләп һөйләшербеҙ»ендә, төндә һөйөшөрбөҙ, мин яуға киткәс үҙегеҙҙе нисек тоторға, нимәләр эшләргә, яңы көндәш килтерҙем, уның менән яуға китәм... балаларҙы, йортто

етемһерәтмәй ҡарағыҙ тигәнерәк фекерҙе аңланылар Аҡбикә лә, Зөләйхә лә.

Зөләйхә Ҡолойҙоң йортонда,шулай ҙа үҙен нисектер ситерәк тоя. Балалары шунда тыуып, шунда үҫһә лә, күңеле уның тик берәүҙең, тик берәүһе генә булаһы килә ине. Ғүмер буйы шул тирәлә хыялланды ул. Күптән инде ата йортона ҡайтып китер ине лә, шунда үҙ яҙмышын көтөп йәшәр ине. Һорап килерҙәр ине әле. Тик ул икенсе ҡатын булып, һис тә, бер кемгә сыҡмаҫ ине. Юҡ шул. Атай ҡайтармай.

– Киткәнһең, шунда таш кеүек батҡанһың. Һиңә башҡа яҙмыш юҡ. Ата йортона тик ҡунаҡ ҡына булып ҡайтырһың. Башҡа сифатта мин һине ҡабул итмәйем, – тип ҡырҡа әйтә.

Инәһе лә атаһына буйһона. Ул да бит Төпәй Бутасының икенсе бисәһе. Инәһе шул яҙмышты йотҡас, ҡыҙы ла шуға риза булырға тейеш.

– Киткән саҡта беҙҙән һураманың (һораманың) бит... Өйрәнеп, яратып киттең... Балаңа атай, өҫтөң-башың бөтөн, гөлт итеп тора. Әйәрсәндән башҡа, үҙ, уртаҡ балаларығыҙ бар. Ҡуй, ҡыҙым, юҡ менән булма, – тип инәһе лә нығыта килде.

Шулай ҙа Зөлхизәнең күңеле туймай, үҙенсә уйлай ине. Һәр саҡ өйҙә ултырғансы, бәлки, миңә лә ситтәр менән аралашырға кәрәктер, тигән уйын үҙенән-үҙе йәшерҙе. Әммә уйланы. Ә, бәлки, миңә Ҡолой менән бергә яуға китергә кәрәктер? Әнә, ике мәрйә, бер башҡорт ҡатыны яуға табип булып китә, тип һөйләйҙәр бит. Береһе, имеш, Ҡолойҙоң алайында була. Шундай шомло хәбәрҙәр ишетте ул хеҙмәтсе бисәләрҙән. Әммә улар һис башҡа нәмә һөйләмәйҙәр. Телдәре тештәренең һәр саҡ аръяғында.

– Һуғышҡа ҡатындар ҙа китә икән? – тигән һүҙҙән башҡаһы юҡ.

Оло йорттан, Зөләйхә күҙҙәрен тултырып-тултырып ҡараһа ла, күңеле төшөп сыҡманы. Бөтәһе лә тыныс, тип уйланы Ҡолой. Тик ҡатындарын йәлләп, күңеле борсолдо. Бөтәһе өсөн дә...

Уның был борсолоуын уға ҡаршы йән-фарман йүгереп килгән йомошсо бүлде.

– Түрә, түрә, генерал-губернатор Сыбаркүл ҡәлғәһе аша беҙгә килергә арбаһына ултырған. Әйәрсән арбалары ла бар, унда ла аҫыл кейемле кешеләр. Ике арбала, күсәрҙәрҙән башҡа, биш кеше. Уларҙы бер унлыҡ казактар һаҡлап килә, тип хәле бөтөп, аһылдай-аһылдай һөйләне йомошсо.

Йомошсоноң артынан уҡ уға ҡаршы Әбүтаһир йүгерә ине. Ул да шул уҡ хәбәрҙе әйтте.

– Ҡораллы ике унлыҡ ат өҫтөндә. Һеҙҙе көтәләр, түрәм. Аттар ҙа әҙер. Улар идаралыҡ алдында.

– Бында ҡаршы алыусылар улар йолаһын үтәһендәр, – тип әйтеп өлгөрҙө Ҡолой. Шунда уҡ сығып ҡара арғымаҡтарына ултырҙы ла ҡаршы алырға юлға сыҡты. Уның артынан егерме ҡораллы һуғышсы эйәрҙе. Үҙ йортонан ун-ун биш саҡрым ер киткәндер, алда, Ҡолойҙоҡо кеүек уҡ дәүмәлдәге бейек, ҙур тәғәрмәсле, улар карета тип атаған арба һәм оҙатып һаҡлап йөрөүсе унлыҡ уландар күренде. Ҡолой юл ситенә боролдо. Ҡораллы унлыҡтары арбаның ике яғынан теҙелде.

Шул ваҡытта биш улан юл ситендә кемдәр тороуын асыҡларға сабып килеп етте. Кемдең кем икәнлеген белгәндән һуң, кире елдерҙеләр.

Генерал-губернаторҙың каретаһы яҡынлашҡандан-яҡынлашты. Бына уның каретаһы Ҡолойҙоң, генералдыҡынан бәләкәй булмаған, кырандасы янына килеп туҡтаны. Күсәре янында ултырған деньщик тип аталған ярҙамсыһы һикереп төшөп каретаның ишеген асты. Унан бер хәрби кеше, уның артынса урта буйлы, йәше ярайһы уҡ оло, Ҡолойға атай булырҙай кеше килеп төштө. Кейеме лә ябай. Эстән күкрәген, тамағын ҡаплап торған, ҡара буҫтауҙан тегелгән, сит ил телендә әйткәндә, джемпер, уның өҫтөнән тубығына тиклем етеп торған көрән яғалы кафтан кейгән. Беҙҙеңсә ҡыҫҡа итәкле, түше ябыҡ елән кеүек. Кафтан өҫтөнән ордендарын таҡҡан. Ҡолойға ул ордендар таныш. Ырымбурға барғанда, губернаторға кергән һайын күрә ул уларҙы, изге Георгий, изге Анна һәм башҡа изгеләрҙе. Быларынан башҡа тағы ла изгеләре бар әле. Изге Андрей Первозванный, изге Александр... Тик Ҡолой аңлап етмәй, ниңә бөтәһе лә һәм ниңә изге?

Билендә ҡайыш та, ҡорал-фәлән дә юҡ. Аяғында оҙон ҡунышлы итек, башында бәләкәй ҡашлыҡлы, маңлайына үҙҙәренең ике башлы сәмреғошо төшөрөлгән түңәрәк баш кейеме. Уны картуз тип атайҙар.

Генерал кейемендә булмағас, генерал тип әйтерлек тә түгел, был кеше көлөп, бик ихласлап, мосолманса, ике ҡуллап килеп күреште Ҡолойға.

– Ну, здравствуй, здравствуй, Ҡулуй туря. Войсковая старшина, опора моя, – тип, Ҡолойҙоң киң арҡаһынан һөйә-һөйә үҙенең уны күреүенә шатлығын белдерҙе.

Шул ваҡыт Ҡолой кантон килгән юлдан йән-фарман сабып килеп, ике ғәскәри әфисәр уларҙың ҡаршыһында уҡ аттарынан һикереп төштөләр ҙә, ҡабаланып, болашмаҡ, һәр ҡайһыһы алдараҡ үҙ-үҙен танытырға йүгереп килеп ҡулдарын сикәләренә ҡуйып.

– Командир 16-го иррегулярного полка, капитан Михаил Трунов.

– Командир 17-го иррегулярного, 5-го кантона Челябинского уезда, майор Александр Овсянников, – тип үҙҙәрен таныштырыуға, губернатор уларға ла ҡулын бирҙе. Ләкин Ҡолойға һуҙған кеүек, ике ҡулын да бирмәне.

– Когда вы приехали в полк?– тип һораны.

– Вчера, ваше высокоблагородие, – тинеләр бер тауыштан.

– Не высокоблагородие, а генерал от кавалерии Александра Васильича Суворова, – тип баҫым яһап төҙәтте. – Вчера приехали, а сегодня военный смотр войск. Как я знаю, на учении будут все три полка – 16, 17, и 19, – тип Ҡолойға боролдо.

– Так точно, господин генерал от кавалерии, – тип Ҡолой бында полктар командиры кем икәнлеген иҫбатланы.

– Вчера, вчера, вчера приехали в полк, – тип үҙ алдына һөйләнә-һөйләнә каретаһына атланы генерал. Унан Ҡолойға борола биреп:

– Дальнейшие ваши планы каковы? – тип һорау бирҙе.

– Господин генерал-губернатор! Как доедем до правления, если будет желание, ознакомьтесь дебетом и кредитом кантона, источники прихода и расхода, – тигәс, генерал артынан килгән каретанан төшөп, аралашып килгән кешегә:

– Матвей Андреевич! По данному вопросу у меня нет к нему претензий, так ведь. Думаю, у вас тоже не будет, – тигәс, Матвейға:

– Да, да, – тип генерал-губернаторҙың һүҙен раҫлауҙан башҡа сара ҡалманы уға.

Ә был Матвей тигәне Матвей Андреевич Наврозов икәнлеген Ҡолой яҡшы белә. Ул губернала дәрәжәһе буйынса икенсе кеше, граждандар эше буйынса губернатор. Ул да генерал-губернатор кеүек, император тарафынан тәғәйенләнһә лә, барлыҡ булмышы, эше менән генерал-губернаторға буйһона. Тик ул Ырымбурҙа түгел, Өфөлә ултыра. Әммә генерал губерна буйынса сәфәргә сыҡһа, һәр ваҡыт Наврозовты саҡыртып ала. Бына был юлы ла ул Ырымбурға бармайынса, тура Алтынтамаҡҡа-Златоустьеға килгән ине. Был идаралыҡҡа генерал Волконский бер нисә тапҡыр килгәне бар ине. Ни тиһәң дә, Ҡолой, инде 1800 йылдан алып, кантон начальнигы. Ә Григорий Волконский 1803 йылдан Ырымбур генерал-губернаторы. Ҡолойҙо, тәүге кантон Килмәт Дәрбишевтең тәкдиме буйынса, 5-се кантон башы итеп тәүге генерал-губернатор, майор Николай Николаевич Бахметов ҡуйған ине. Әммә Ҡолой Волконский өсөн дә үҙ кеше. Уларҙы шул һуғыш юлдары аралаштырҙы, таныштырҙы. Әле Ҡолойға 25 йәш тә тулмағанда уны линия хеҙмәтенән регуляр ғәскәргә алдылар. Алдылар ҙа Рәсәйгә Ҡара диңгеҙҙең төньяҡ ерҙәрен, Ҡырымды ҡушыу буйынса һуғышҡа ебәрҙеләр. Башҡорт полктары бында ла бик теремек, ҡырҡыу хәрәкәт иттеләр. Дошмандың «аръергар-

дын» – авангардын тар-мар итеп, ҡапыл юҡ булдылар, йә бәйләнеш Ям хеҙмәтен пыран-заран килтерҙеләр. Нәҡ шул ваҡытта Ҡолой полковник Волконскийҙың йыйылма корпусында һуғышты. Волконскийҙан ҡыйыулығы һәм тәүәккәллеге өсөн бер нисә тапҡыр маҡтау, миҙал һәм шәхси бүләк – төрөк ятағаны алған ине. Андрей Волконский баҫҡыстан баҫҡысҡа күсеп йөрөгән гражданский чиновник булманы. Ул 1768–1774, 1787–1791 йылдарҙа – төрөк, 1795–1796 йылдарҙа Суворов армияһында хеҙмәт итте.

Губернаторлыҡҡа ул император Александр I, Павлович тарафынан 1803 йылда ҡуйылды. 9 йыл буйына бергә эшләгәндә үҙ-ара бәхәсләшеүҙәр, килешеүҙәр булды. Әммә бәхәс бер ваҡытта ла үҙ-ара низаҡ, дошманлашыу тойғоһо менән бөтмәне. Һәр саҡ Волконскийҙың:

– Ох, шилма, ох, шилма, доказывает ведь своеһы, – менән бөтөр ине.

Был шилма һүҙе губернаторҙың Ҡолойға ҡарата ихтирамы ла, еңелсә тәнҡите лә, уның менән килешеүе лә булды. Күп ваҡыт губернатор менән һүҙгә килеүгә уның канцелярия етәксеһе Ермолай Терентьич сәбәпсе булды. Кантондарҙың губернаторға, Ермолайға ҡарата күп кенә «сәләмдәре» булһа ла, губерна идаралығы уны йәшерә килде. Сөнки Ермолаев кантондарҙан йолҡҡан ҙур-ҙур ҡуштарҙы губерна идаралығы ағзаларына тотторор булды. Шулай ҡул ҡулды ғына йыуҙы. Битте йыуманы. Шул ҡулды Наврозов үҙ еңенә кейҙереп алды. Ил мәнфәғәте менән янғанкөйгән губернатор Волконский үҙе аҫтындағы бик күп сыймыйҙы белмәй ине.

Идаралыҡҡа кергәс килгәндәр күҙ генә йөрөтөп сыҡтылар. Стенала эленеүле торған ятағанды ҡулына алып:

– Мы все помним. Так ведь, Ҡулуй туря, – тине губернатор.

Бөтәһе лә аптырашып бер-береһенә ҡараштылар. Һаҡҡолаҡ һәм нығымталсы Наврозов был ҡоралдың уртаҡлығын төҫмөрләне, ләкин төп серенә төшөнә алманы. Идаралыҡтан сыҡҡас, кантон:

– Перед смотром войск всех приезжих гостей приглашаю на обед, – тиһә лә, генерал риза булманы.

– Сначала смотр полков, обед потом, – тип әҙерлекте үҙгәртте.

Полктарҙы ҡарар өсөн Һарыйылға менән Яратҡол ауылы араһындағы яланға килгәндә полктар, алдан хәбәр алып, теҙелгәндәр ине. Йөҙ баштарынан олоһо, көндәлек тормоштағы йорт старшинаһы Әлимсура губернатор ҡаршыһына килеп, уйнаҡлап торған сысҡанһырт ҡоланын бейетеп, 16-сы, 17-се, 19-сы полктарҙың теҙелеүен белдерҙе. 4-әр рәткә әҙ генә дуғараҡ булып теҙелгән 1700 ҡораллы һыбайлы губернаторға ҙур тәьҫир ҡалдырҙы.

Шунда уҡ карета-кырандастарынан төшөп, һуғышҡа керә торған аттарын менеп алдылар. Генерал-губернатор етеҙ туратында, Ҡолой кантон алыштырғыһыҙ ҡарыулы ерәнендә, ике әфисәр, берәһе – ҡарала, берәһе һоро атта полк ҡаршыһына киттеләр. Аттарын бейетеп полктар ҡаршыһына килеп еткәс, Әлимсура:

– Һөңгөләрҙе күтәргә! – тигән көслө тауышы бөтә яланға таралды.

Шунда уҡ меңәрләгән һөңгө, терпе урманын хәтерләтеп, һауаға күтәрелде. Был хәрәкәт тә ҙур тәьҫир ҡалдырҙы генералда. Әлимсураның нәүбәттәге:

– Һөңгөләрҙе төшөрөргә, – тигән бойороғонан һуң бөтәһе лә һөңгөләрен үҙ урынына, һул ҡулбашы яҡҡа урынлаштырҙылар. Тик осло остары ғына һәр һуғышсының башы аша сығып, әнәләре тырпайышып торған бик ҙур терпене хәтерләттеләр.

Генерал яй ғына полктар буйлап ҡарап китте. Аттар көр, йәш. Эйәр, йүгән, түшлек ҡайыштары киң, яңы. Һәр береһенең уҡ-һаҙағы, һөңгөһө, әҙ генә кәкерерәк оҙон, еңел ҡылыстары бар. Бөтәһенең дә булмаһа ла, ҡайһы берҙәренең билдәрендә пистолеттары күренә. Өҫ баштары ла йылы, ҡышҡыса тип әйтерлек. Бөтәһенең дә башында ҡолаҡсын бүрек. Полктарҙың тышҡы киәфәте менән бик риза булды генерал.

– Очень много работали, Ҡулуй туря! Молодец! Кроме не единой формы одежды, остальное все по-регулярному.

Полктарҙы бер осонан икенсе осона тиклем ҡарап сыҡҡандан һуң, ул кире боролоп аттарҙың тояҡтарын ҡарап үтә башланы. Бер һүҙ ҙә әйтмәне, әммә остан башҡа тиклем ат тояҡтарына күҙ һалды. Әлегә бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Фәскәрҙең тышҡы киәфәттәрен, ҡоралланыуын, йүгән-эйәрҙәрен ҡарап сыҡҡандан һуң, генерал һәм уны оҙатып йөрөүсе ике әфисәр һәм Ҡолой, үҙе ағастарҙан эшләнгән бейеклеккә – тәхеткә күтәрелделәр. Хәҙер һәр алай-полк тәхет түңәрәге буйлап сабып, һәр илле ҡуһай һайын эленгән тирегә сабып барған килеш атып тейҙерергә тейеш булған йөҙлөктәр теҙелә башланы. Йөҙлөк баштары Хәйсәрҙең һәм Ғаярҙың фарманы буйынса, йәнәш юлдан ике йөҙлөк егеттәре кем уҙарҙан сабышып киттеләр. Һәр һуғышсыға биш уҡ атырға кәрәк. Биш уҡты тейҙерергә тейеш һәр берәһе. Биш уҡ атҡас, һәр йөҙлөк үлән тултырылған тоҡтарға ла сәнсеп өлгөрөргә тейеш. Был уйын оҙаҡҡа һуҙылмаҡсы. Шуға күрә лә Ҡолой, оло улы Иҡсанды саҡырып алып, уҡ атыу, һөңгө ташлауҙы бер йөҙлөк менән сикләргә ҡушты. Уның төп уйы – генералдың иғтибарын икенсе алышҡа йүнәлтеү ине.

Был алышта ике иллелек оҫоҙ ағас һөңгөләре менән бер-береһен ат өҫтөнән этәреп төшөрөүҙе, тимәк, үлтереү, яралауҙы күрһәтәләр. Шул алыш аҙағынан алай фельдшерҙары яралыларҙы

ситкә, артҡа күсереү һәм беренсе ярҙам итеүҙе күрһәтәсәктәр. Ике майҙанда ла һуғыш, атыш, сәнсеш оҙаҡ барҙы. Һөңгө төртөшөүенән һуң, ятҡандарға ярҙам күрһәтеү башланғас, генерал-губернаторҙың иғтибары шунда йүнәлде.

– Кемдәр, нимә эшләйҙәр улар? – тип һораны ул Ҡолойҙан.

– В каждом полку мы организовали группу лекарей, по оказанию первой медицинской помощи раненым и по сбору погибших, чьи тела будут придаваться земле по нашему обычаю, – тигәс, губернатор аптырабыраҡ ҡалды. Иррегуляр ғәскәрҙә бындай берәмек әлегә тиклем булманы. Унда шәһит булалар, йә ҡайҙалыр, ситтә, берәй ҡалала ойошторолған госпиталь тигән төҙәлеү урынына тиклем түҙәләр. Түҙмәһәләр, юлда йән бирәләр.

Губернатор быға бик ҡыуанды. Дауалау дивизия кимәлендә дөйөм түгел, ә һәр ғәскәри берәмектең үҙ хеҙмәте булыу, әлегә булғаны юҡ. Был да яңылыҡ.

– А вот тот всадник-организатор, кто он такой? Какое у него звание? Армейское или казацкое?– тип һораны генерал. – Больно молодец! Бравый! – тип өҫтәне ул.

– Он – унтер-офицер. Ему – 29, был несколько раз в походах. Деловитый. Хорошо знает языки, казахский, русский. Хозяйственник, – тип дүрт-биш һүҙ менән Иҡсанды һүрәтләне.

Ҡолой яуға китһә, урынына кемде ҡалдырыу тураһында өйәҙ начальнигына бурыс ҡуйғайны губернатор. Өйәҙ етәксеһе бөгөн килмәгән. Силәбелә ауырып ята, тигән хәбәр килтерҙеләр уға. Полктарҙың ҡасан китеүен генерал үҙе генә белә. Башҡа һис бер кемгә был билгеһеҙ. Ул башҡалар өсөн йомоҡ. Урынбаҫар тураһында мәсьәләне хәл итергә кәрәк, һәм кисектергеһеҙ. Шуға ла ул Ҡолойға:

– Напишите представление на этого молодца с указанием всех данных. Выберем из числа представленных... А вот эти лекари?

Генералдың был һорауын ишеткәс, артта торған майор һүҙгә килде:

– Господин генерал! Лекарьские группы в полках созданы. Просим Вашего разрешения на их мобилизацию поименно?

Александр Овсянниковтың һорауы Ҡолой өсөн шул тиклем урынлы булды. Әйтерһең дә, ул Ҡолой өсөн һораны. Шуға ла ваҡытты ебәрмәҫ өсөн ул генералға борола биреп:

– Одна из них – моя жена, прошу принимать ее к 16-му полку, господин генерал. Она будет обучать лекарьскому делу других. Окончила в Златоусте лекарскую школу.

Губернаторға дивизия, корпус, армия командующийҙарына исемле, мөһөрлө ҡағыҙ яҙыу бер ни тормай. Шуға ла ул, артта, Наврозов янында торған кешегә, бындай ҡағыҙҙы бөгөн үк яҙып бирергә ҡушты.

Йөҙләк баштары һәм һәр бер һуғышсы өсөн был күнекмәләр үҙе бер һынау ине. Шуға ла күнекмәләрҙе барыһы ла үтәргә тырышты. Ә губернатор полктарҙың походҡа әҙерлеген билдәләп бик кинәнде. Полктарҙы төҙөүҙә, ойошторооуҙа ҡыл да ҡыбырлатмаған һәм уға һуңғы көндә генә килгән командирҙарға шелтә бирҙе. Хатта уларҙы бөтөнләйгә ҡайтарып ебәрергә уйлағайны. Әммә юлда бер урыҫ булмаған командир менән китеп барған ғәскәри кешеләргә, урындағы властар һәм кешеләренең дә мөнәсәбәттәрен аңлаған губернатор был ҡарарынан баш тартты.

14 октябрь 1812 йыл, иртә менән 16-сы, 18-се, 19-сы полктар юлға ҡуҙғаласаҡ. 16-сы полк – Ҡолһары ауылынан, 19-сы полк – Ҡоншаҡтан, Бүренән, ә 18-се полк, 4-се кантондың Мулдаҡай, Туңғатар, Малай-Муйнаҡ ауылдарынан сығып, Златоуст заводында осрашып, юлдары Өфө – Бөгөлмә – Ҡазан – Һары Сабаҡ (Чебоксары) – Түбәнге Новгород буласаҡ. Аръяғында корпустарға, армияларға бүлеп ебәрәләсәктәр. Генерал был турала кантон идаралығына барғас, бөтә йөҙ баштары һәм полк баштары йыйылғас, әйтергә ҡарар ҡылды.

Ҡолой кантондың ҙур өйөнөң ҙур бүлмәһендә генерал-губернатор ярҙамсыһы, канцелярия сәркәтибе урынбаҫары, капитан менән майор, ярҙамсылары, улы Иҡсан булды. Капитан Трунов, Фаина менән Серафиманы ла саҡырырға, Ҡолойҙан рөхсәт һорағас, Әбүтаһирға, Ғәфифәне лә саҡырырға ҡушты кантон. Муллаларҙы, ҡайныһы Бикбашты губернатор янына әйтмәҫкә булды. Килештермәне ул муллаларҙың губернатор янында булыуҙарын. Өҫтәүенә, губернатор трубка һура. Ә әфисәрҙәр тәмәкене ирендәренә һалып имәләр.

Ағаһы Сәғит, Аҡбикә менән Зөләйхәне табынға, губернатор янына керергә саҡырһа ла, икеһе лә урыҫтар янынан ҡырҡа баш тартып, өйҙәренә таралыштылар. Килендәр ҙә аш, башҡа тәғәмде индереүҙән ситләштеләр. Был бурыс йәш ирҙәргә үҙенән-үҙе күсте.

Бындай табында Ғәфифәнең бер ваҡытта ла булғаны юҡ. Бөтә ирҙәр, өҫтәүенә, урыҫтар бар. Губернаторҙы ул әллә ниндәй ҙур түрә тип тә күрмәй, дөрөҫөрәге, уның дәрәжәһен аңлап та етмәй. Ә бына Ҡолойҙо ул ҙур түрә тип белә. Ана бит, губернаторҙың йәнәшендә ултыра. Өҫтәүенә, ҡарт генералдан ҡалын, буйға ла оҙон, киң яурынлы. Әбүтаһир саҡырып килгәс, ул тәүҙә был табынға килмәҫкә уйлағайны. Әммә Серафима менән Фаина ла ҡыҫтай башлағас, уларға эйәрергә булды.

– Такое случается один раз в жизни. Быть в обществе самого генерал-губернатора – это честь. Надо идти. Обязательно надо идти, Гафия, тинеләр мәрйә ҡыҙҙары. Килде төп йортҡа Ғәфифә, әммә ҡорға кермәне. Ашнаҡсылар янында алғы өйҙә булды. Ашһыу алып биреште.

– Вот, девушки появились, наши, – тип Ҡолой генералдың иғтибарын ҡыҙҙарға йүнәлтте.

– Они сами хотели что ли на войну?– тип һораны генерал.

– По Вашему высокому предписанию, уездный комитет общественного здравия их направил на учение к полкам. Сейчас их надо приписать нам, вашим повелением, господин генерал, – тине майор Овсянников.

– Если разговор идет о создании новой структуры в иррегулярных частях, то почему бы нет? Гаврил, напишите приказ о переводе при их соглашении, – тип ситтә ултырған сәркәтибенә шунда уҡ фарман бирҙе.

Ҡолойҙоң уйланған уйҙары нисектер үҙенән-үҙе ыңғай сығып тора. Бигерәк тә ҙурыраҡ һорауҙар. Иҡсанды үҙ урыныма кантон башы итеп тәғәйенләү бөтә яҡтан да отошло булыр ине. Әгәр губернатор сит ерҙән кантон башы ебәрһә, дөйөм хужалыҡ тарҡалыуға юл аласаҡ. Әгәр Иҡсан кантон башы булмай икән, ул бит барыбер дөйөм хужалыҡ етәксеһе булып ҡаласаҡ. Мөлкәт бит губернаныҡы түгел, беҙҙеке. Кантондағы бөтә мөлкәт кантон кешеләренеке. Хатта идаралыҡ йорто ла. Беҙ уны идаралыҡҡа керетмәһәк, ҡайҙа килеп ултыра ул? Кантон үҙәген икенсе урынға алып китер. Ана бит, күсеп йөрөгәндәр бар. Кантон начальнигы ҡайҙан, үҙәге лә шунда. Юҡ, юҡ, был тирәлә Иҡсандан да арыу, Иҡсандан да йәтеш һын күренмәй. Уны өйәҙ ҙә линия хеҙмәтенән, ғәскәргә күсереп яҙмаған. Күрәһең, Иҡсан улар хәтерендә лә ниндәйҙер бер һаҡламға ҡуйылғандыр, тип фекерләне Ҡолой. Заводтар, сауҙагәрҙәр менән мөнәсәбәттәр ҙә Иҡсан аша хәл ителәсәк. Ә был яңы кантон менән Иҡсан араһында ҙур ҡапма-ҡаршылыҡ тыуҙырасаҡ. Иҡсан уға бер тин дә аҡса бирмәйәсәк. Яңы кантонға губерна кәнсәләренән, йә кантондағы хәллерәк кешеләрҙән һоранып йөрөргә тура киләсәк. Башҡа һөҙөмтәләре лә бик күп буласаҡ. Быларын бөтәһен дә генералға аулаҡта бик яҡшылап төшөндөрөргә кәрәк. Юғиһә, эш харап. Аш алдында оҙаҡ ултырырға ваҡыты булманы, күрәһең, генералдың.

Ҡунаҡ йортонан яйлап ҡына идаралыҡҡа барған юлда, Ҡолой генерал-губернаторҙың үҙенә генә Иҡсанды ваҡытлыса кантон башы итеп ҡалдырыуҙың бөтә ыңғай яҡтарын дәлилләне. Губернатор уны бүлдермәне, әммә бер һүҙ ҙә өндәшмәне. Улар идаралыҡҡа килгәндә өс алай-полктың да йөҙ баштары һәм башҡа хәрби дәрәжәлеләр йыйылған ине. Оҙатыусы һәм һаҡлаусы һыбайлылар төп йорт тирәһендә һағауылда йөрөгән кеүек, идаралыҡ тирәһендә аттарын бәйләгәндәр. Аяҡ өҫтө тороп ҡаршы алдылар губернаторҙы. Түргә, генерал артынан Наврозов һәм башҡалар үткәс, Ҡолой, ғәҙәттә, үҙе ултырған кантон ултырғысынан урын алды. Ике губернатор ике яғына ултырҙы. Башҡорт һуғышсылары

менән унтер офицер ваҡытынан уҡ аралашҡан Волконский, бүлмәгә тулған йәш, көслө кешеләр араһынан таныш йөҙ эҙләгәндәй ҡарап сыҡты ла:

– Сынки мои! Сынки Отчизны нашей! Враг попал на нашу Родину. Нанося поражения армиям нашим, он взял города и села. Состоялось большое сражение подступах к Москве. Сражение закончилось ни с чем. Его величеством императором Александром I, назначен новый главнокомандующий Российской армией Михаил Илларионович Кутузов. Армия Наполеона заняла Москву. Сюда, на нашу сторону он не пройдет и километра. Наша армия обороняя юго-восточные рубежи, расположился в окрестностях Москвы. Во всей России Великой формируются ополчения, регулярные и иррегулярные полки из башкир, казаков и калмык. Наша задача – пополнить армию резервом и окружив Москву, не дать возможности Наполеону получить резерва и продовольствия. Таков указ его величества государя – императора. Полки ваши организованы достойно. Вооружены и обеспечены необходимой амуницией и имуществом. Вы внедряете новшество, организовав в каждом полку свое лекарьское отделение. Об этом я расскажу в губернской врачебной управе.

Я очень рад, что вы сумели организовать подковку лошадей, что еще не сделаны в других полках. Это даст полкам беспрепятственно двигаться и в осеннюю, и в зимнюю гололедицу. Сейчас я вам объявляю присвоения, в основном, двойного звания. Линейного, армейского звания у кого есть, знаете. Я вам объявляю, своим приказом октября 1812 г. иррегулярные казацкие должностные звания, – тип, ҡулына сәркәтибе ебәргән ҡағыҙҙы алып, йөҙлөк баштарына, ярҙамсыларына, иллелек һәм унлыҡтарға, полктағы башҡа дәрәжә-баҫҡыстарға кемдәр лайыҡ, шуларҙың исем-шәрифтәрен күрһәтеп, үҙенең фарманын уҡыны. Һәр береһен торғоҙоп сығарып, ҡул ҡыҫып, изге юл, еңеү теләне.

Унан һуң икенсе фарманын уҡыны:

– Для защиты Отечества, целостности его границ и суверенитета его, от имени его величества Государя императора Александра Первого приказываю:

1. 14 октября 1812 г., 16-му, 18-му, 19-му иррегулярным башкирским полкам вступить в поход против врага.

2. 18-му полку 4-го кантона присоединиться в г. Златоусте.

3. Путь следования строго по путевому предписанию, Златоуст – Уфа – Бугульма – Казань – Чебоксары – Нижний Новгород.

Ҡағыҙҙан күҙен алып, генерал-губернатор дауам итте:

– Там вас формируют по корпусам, далее по армиям. Чуть позже за вами отправится и 17-ый полк. У них у одной из сотен

еще не до подкованы кони. Они поедут вместе с казачьим полком Троицкого уезда.

Вы молодцы и в другом отношении. Вы поражаете нас своей сплоченностью. Хозяйство у вас единое. Такого нигде нет в губернии. Поэтому семьи ваши будут защищены. Не будет ни голодных, ни гололапых, – тигәс, генерал-губернатор туҡтабыраҡ торҙо ла:

– Война есть война, – тип дауам итте. – Надо ведь еще кормить заводы и армию. У вас хорошо налажены поставки продовольствия им, на договорных основах. Разрушать данную систему нельзя... Особенно сегодня. Поэтому я назначаю, за время отсутствия Ҡулуй туря Ярмухаметовича, исполнительным начальником 5-го кантона Иксана Кулуевича Кучукова, освободив его от линейной службы, всеми правами и обязанностями кантонного начальника. Доброго пути Вам и Победного пути, сынки!

Губернаторҙың телмәрен йыйылған һуғышсыларҙың күбеһе аңлар-аңламаҫ булһа ла, уны Әбүтаһир менән Сәғит икеһе ике яҡта шым ғына, башҡортса һөйләп торҙолар.

Губернатор әле Троицк өйәҙенә етмәҫ борон Ҡолой Көсөкөвтың, Златоуст заводын бағып тигәндәй, ҡорал алып киткәнен белә ине. Ҡолойҙо Пугачев, Салауат, Баҙарғол, Юламан һүрәтендә һөйләһәләр ҙә, ул ғәскәр саҡыртманы.

Үҙе булған Ҡыҙыл, Магнит, Верхнеурал, Уйск гарнизондарын да ҡуҙғатманы. Ҡолой менән күп тапҡыр осрашып, уның холҡон белгәнгә күрә, ул:

– Кулуй зря непристойно не поступит. Наверное, была на это причина, – тип ошаҡҡа ҡолаҡ һалманы. Үҙе лә был төбәктә туплаңған ҡораллы әллә нисә мең башҡорттан ҡурҡманы ла, ҡасып, һаҡланып та йөрөмәне.

Генерал-губернаторҙың телмәренән һуң, һүҙҙе гражданлыҡ эштәре буйынса губернатор Матвей Наврозов алды. Ул 5-се кантонда ойоштороло ған эш һәм йәшәү алымын, ҡаҙнаға һалым биреүҙә бер пәрҙә, йәшереү ҡорғаны кеүегерәк ойошма итеп аңлатырға тырышты. Һәм ул, инородеческое инокомыслиеға килтерә, тип хәбәр һалғас, генерал-губернатор уны ҡырҡа туҡтатты:

– Матвей Андреевич! Все делается для блага кантона... Все!.. Тебе в сто карман легче лезть, или на один большой и добрый? Люди идут на войну! При этом добровольно! Они сами выбрали, кому голову сложить, кому живым, хлеб насущный добывать. Перед отправкой на войну нельзя, Матвей Андреевич, нельзя такие высказывания... Хорошо, что не все хорошо тебя понимают.

Был йыуаш халыҡты бер ҡыҙҙырһаң, башыңды һалып та туҡтатыуы еңел түгеллеген генерал-губернатар үткән яуҙар миҫалында белә ине.

Генералдың һүҙҙәренән һуң, Ҡолой үҙе һүҙ алды:

– Большое спасибо, ваше высокоблагородие, господин генерал-губернатор! Большое спасибо за Ваше высокое понимание нужд сегодняшнего нашего Отечества, и сынов Отечества. Мы с вами думаем за одно... – Шунан һуң, гражданлыҡ эштәре губернаторы Наврозовҡа төбәп:

– Матвей Андреевич! Сегодня Вы осмотрели полки и их готовность к сече. А, была бы ли она, эта готовность защитить Отчизну, если бы послушались Вашего приказа, минуя генерал-губернатора. – Был һүҙҙәрҙән һуң Матвей Наврозов кәләпүшен ҡырынайта биреп, башын бороп, Ҡолойға, юғарыға ҡараны.

– Да, да, о приказе отказа выдачи оружий, именно башкирским полкам. Ведь мы все оплатили. Все по договору. От казаков для создания полков не требуется никаких оплат. Как это понимать? Кого мы едем защищать? Но... но только не Вас, – тип Ҡолой, гражданлыҡ губернаторының йөҙөнә бик ҡаты сәпәне.

– Или другое... Что Вы скажете о составлении договоров с заводами и вашими представителями, без включения их производителей. Это, наверное, не без участия или согласия гражданского губернатора? – тигәс, генерал-губернатор аяғүрә баҫып:

– Матвей Андреевич! По прибытию в Уфу, со всеми отчетами о кредитах и дебетах по налогам по всем госучреждениям:

1. Губернской комисии народного продовольствия;

2. Губернскую строительную и дорожную комиссию;

3. Отчет губернского комитета Государственного подвижного ополчения, и по другим частям полный анализ прошу представить, – тигән бойороҡ алғас, быға тиклем ел-ямғырҙан һәр саҡ ҡасып ҡала торған Наврозов, Ҡолой кантон менән уйнарға ярамағанын яҡшы төшөндө.

Генерал-губернатор, Ҡолойҙоң фекерен тәрәнәйтмәй, һүҙен йомғаҡлағандай итеп:

– Ну, давайте, ребятушки, попрощаемся и просим благославления у Аллаха по-башкирски. Ведь Аллах един! – тигәс, Ҡолой кантон, Ҡолой түрә, бындағы муллаларҙың иң ололарына, Мирхажи һәм Хәйретдин муллаларға һүҙ бирҙе.

Дөйөм илдең, башҡорт еренең, халҡының, яуға китеүселәрҙең баштары еңеү менән, шәһитһеҙ ҡайтып етеүҙәрен, тағы ла әллә ниндәй йән әйәләре, изге әүлиә исеменән, иң мөһиме – Тыуған илгә имен-аман ҡайтып килеүҙәрен теләп, доға ҡылынғас, ике йөҙләгән ҡораллы егеттәргә эйәреп Волконский ҙа доға ҡылыуҙан саҡ-саҡ тыйылып ҡалды. Әгәр ул, яңылыш хискә бирелеп, ирекһеҙҙән доға ҡылһа, Наврозов тарафынан Императорға һәм

Оренбургский «губернский секретный комитет о раскольниках» тигән ойошмаға, һис шикһеҙ, шикәйәт етәр ине.

Губернаторҙың барлыҡ һүҙҙәренән башҡа, бигерәк тә: «Ну, давайте, ребятушки, попращаемся и просим благословления у Аллаха по-башкирски. Ведь Аллах един!» – тигән һүҙҙәре барлыҡ яугирҙарҙың йөрәгенә май булып барып ятты.

Ҡолой түрә еңелсә генә Мирхажи муллаға баш ҡаҡты. Юл алдынан барыһы ла доға ҡылдылар, береһе лә ашыҡманы. Урыҫ әфисәрҙәре лә, мәрйәләр ҙә, губернатор менән килгән кешеләр ҙә, береһе лә ғибәҙәтханаға әйләнгән идаралыҡтан сығып китмәнеләр.

Ҡолой кискелеккә урыҫса табын әҙерләткән ине. Наврозовҡа ҡаты бәрелгәндән һуң, ул, үҙ-ара мөнәсәбәтте шунда йомшартырмын, дөйөм хужалыҡтың өҫтөнлөгөн күп миҫалда һөйләрмен, тип, хеҙмәт итештереүсәнлеге артыу һөҙөмтәһендә һалымдарҙы теүәл һәм тулы үтәгәндән һуң ҡулланыуға ла, халыҡтың мәнфәғәтен ҡарауға ла еткәнен иҫбатларға йыйынған ине. Әммә генерал-губернатор әле Сыбаркүл ҡәлғәһендә туҡтамай, һәр саҡ үтеп китеүҙе һәм Күңгерәү-Кундравы станицаһында торған полкты ла иртәгә ҡарарға кәрәклеген әйтеп, юлға сығыуҙы хуш күрҙе.

Генералдың ҡайтыу юлына сығыуы Ҡолой өсөн, бер яҡтан, уңайһыҙ булды. Ҡолой Наврозовтың Иҡсанға эшендә һәр ваҡыт тәғәрмәсенә таяҡ тығып тороуы мөмкинлеген төҫмөрләне. Иҡсан бирешеп үк бара торғандарҙан түгел түгеллеккә. Наврозов уны эшенән дә бушата алмай. Уны генерал-губернатор үҙе, Волконский ғына хәл итә ала. Ә бындағы тормоштоң әйеш-көйөшөн генерал үҙе күрҙе. Өҫтәүенә, үҙ ғүмерендә тик хәрби тормош менән йәшәп, етештереү мәсьәләләренән бик алыҫ торған кешегә Ҡолой ауыл хужалығындағы йыл әйләнәһендәге эш дәүмәлен бик ҡыҫҡа булһа ла һөйләп өлгөрҙө. Хәҙер ул башҡа кантонлыҡтарҙа ла был алымды индереүҙе етди уйлаясаҡ. Тик шуныһы, унда ла, бында ла, хәрби берәмектәр төҙөп, оҙатып тороуға фарман алған генерал хужалыҡ эштәре менән мәшғүл була алырмы икән?

Шулай ҙа ул генералдан Иҡсанды ҡыйырһытырға юл ҡуйҙырмауын һораны. Бигерәк тә заводтар менән килешеүҙе Ермолаев менән Наврозов кешеләре аша түгел, Иҡсан уны үҙе төҙөргә тейеш, һәм килешеүҙә күрһәтелгән аҡса, йә кәрәк-яраҡ кантонлыҡтың үҙенә ҡайтарылыуы мотлаҡлығын баҫым яһап әйтте. Юғиһә, ул аҡсаны кантонлыҡ халҡының хеҙмәтенә бер дәхеле лә булмаған кеше йотоп торасаҡ. Шуға өйрәнгән бит инде улар. Ҡалъя бик майлы, һүҙ юҡ. Был алымдарҙы тиҙ ышанып барған Ҡолой үҙ елкәһендә ике-өс тапҡыр татыны. Әммә ғәҙеллекте уға һәр ваҡыт

ҡамсы болғап, хатта ҡамсы менән ярып, йә көс ҡулланып яулап алырға тура килде.

Губернатор Ҡолой менән тулыһынса ризалашты, уны үҙ иғтибарында тотасағын да вәғәҙә итте. Ул генерал менән һөйләшкән ваҡытта Наврозов һәм уның эйәрсәндәре, полкка килтерелгән ике әфисәр менән ҡулдарын һелтәй-һелтәй, хатта Ҡолой яҡҡа бармаҡ күрһәтеп, ниҙер аңлаталар ине. Ҡолой быныҢ да мәғәнәһен төшөндө. Йәнәһе, уны юлда тулыһынса етәкселектән ситләштерергә, ябай бер тәьминәтсе итеп ҡалдырырға өндәүен аңланы. Ләкин һуғышсыларҙың тик кемде генә тыңлауҙары, аңлауҙары Наврозовтың зиһененә барып етмәй ине.

Дуғаһына зыңғырҙар эленгән карета килгәс, Волконский Ҡолой менән ҡосаҡлашып хушлашты. Ҡарт, йомшаҡ күңелле, кешелекле генералдың күҙҙәре хатта еүешләнгәндәй тойолдо.

Генералды оҙата йөрөүселәр идаралыҡтан Мейәс йылғаһы аша һалынған ҡарағас күпергә йүнәлгәс, бер ни миҡдар ер оҙатыу өсөн барлыҡ йөҙ баштары, иллелектәр үҙ арғымаҡтарына атланып уның артынан киттеләр.

Идаралыҡ эргәһендә, яр башында бер үҙе тороп ҡалған Ҡолой Биҙәр тау-Иман тау-Илмән тау өҫтөндә ҡап-ҡара булып, уҡмашып, ялт та йолт булып, дөмбөрләп атҡан йәшен сағылдарын оҙаҡ ҡына ҡарап торҙо.

Күңеленә тағы ла етдилек һәм шом килде. Бессарабия тип аталған ерҙәге һуғыш яланындағы һуйыш күҙ алдына килде. Ҙур булмаған йылға аша ары ла, бире лә сабышып йөрөп, күкрәктәренә тимер таҡҡан, ҡулдарына ҡалай кейгән Кирасир тип аталған атлылар менән ҡылыс сабыштылар. Ике яғы ла үткер, киң, төҙ, оҙон ҡылыстары менән тиҙ генә һелтәүҙән мәхрүм булған кирасирҙарҙы кәкрерәк еңел ҡылыстары менән нисек сапҡыслауҙарын күҙ алдына килтерҙе. Уларҙың аттары ла йыуан, һимеҙ, ҙур башлы. Башҡорт аты кеүек ҡывыйтым борола алмайҙар. Улар боролғансы өҫтөндәгеһенә һелтәп, тартып та ебәрәһең... Күп ҡандары аҡты. Беҙ әҙерәк юғалтыу кисерҙек. Йыйналып шулар,тағы ла килдеме икән әллә?

Оҙатыусылар кире идаралыҡҡа килгәс, Ҡолой һәр алайға, йөҙлөккә лә кемдәр мулла булып тәғәйенләнгәндәрен һораны. Юлға сығырға бер йома ваҡыт бар. Һәр ауылда, һәр иллелектә инселәп ҡорбан салырға, бөтә ауыл халҡына ҡорбан ашы ашатырға бойорҙо. Һәр мәсеттә, мәҙрәсәлә, барлыҡ яҡынлыҡты теләп Ҡөрьән сығырға кәрәклеген әйтте. Юлға сығыр алдынан бер-береһенә ярҙам итеп кемгә утын, кемгә бесән, он, ярма таратыу кеүек эштәрҙе ойошторооуҙы Сәғит менән Әбүтаһирға ҡушты. Әммә Әбүтаһир, көтмәгәндә, яуға барырға теләүен, үҙенең уға әҙерлеген белдер-

гәс, Ҡолой ҡаршы килә алманы. Ә йөҙлөктәрҙе тиҙерәк үҙ ауылдарына таратыуҙы хуп күрҙе.

Шулай ҙа Ҡолой әҙер ашҡа ике әфисәрҙе, лекарь ҡыҙҙарын, ҡайныһы менән ҡәйнәһен, Ғәфифәне, абыстайҙары менән ике мулланы, килене менән Иҡсанды, үҙе менән бергә яуға киткән улдарын Исхаҡты, Хәсәнде, Аҡбикә менән Зөләйхәне бөтә балалары менән төп өйгә саҡырырға ҡушты. Үҙе, ашҡа тиклем тип, яуға менеп китә торған ерәнен менеп, яҡын-тирәләге ауылдарға тупланған ылауҙарҙың, дөрөҫөрәге, арбаларҙың һанын, ныҡлығын тикшерергә сығып китте.

Арбаларҙың күп өлөшө Ҡолһарыла, бер өлөшө Ялтыр ауылында тупланғайны. Сөнки үҙҙәрен гел үҙаллы тип тойған Шәйем балалары, Таймас тархан тоҡомдары, ылауҙы үҙ ҡулдарында тотмаҡсылар. Сөнки арбаларҙың да байтағы улар тырышлығы менән эшләнгәндәр, шуға ла Ҡолой бында бер ниндәй насарлыҡ күрмәне. Киреһенсә, хужалыҡ, тимәк, тәртиплелек күрҙе. Ә ғәскәрҙә тәртип булыу, ул ғәскәрҙе ғәскәр итә. Тәртипһеҙ ғәскәр – ул тәртипһеҙ кешеләрҙең генә йыйылмаһы.

Аҡшам намаҙы алдынан ғына ҡайтты ул йортона. Ҡайтты ла мәсеткә китте. Яңы тороҡ нигеҙләгәс, уға ҡушылып уҡ барған Мостафа ауылында ла ҙур мәсет, мәҙрәсә һалдырған ине. Әллә яуға китә торған кешеләрҙең рухы айҡаштымы, шул рух берләштерҙеме аҡһаҡалды ла, алты йәшлек сабыйҙы ла... Мәсет тулы кеше. Шығырым тулы – олоһо ла, кесеһе лә күп. Уларҙың байтағын 6–16 йәштәге малайҙар тәшкил итте. Ҡолой шым ғына артта ултырыусылар теҙеменә тубыҡланды.

Мирхажи мулла менән Хәйретдин мулла вәғәз һөйләй. Улар янында ҡайныһы Бикташ та урын алған. Мирхажи мулла менән Хәйретдин мулла Ҡолой белгән, төҫмөрләгән хәл-мәғлүмәттәрҙе, мосолман рухи донъяһының теүәлле булыуын, ватансыллыҡ мәсьәләһен алға сығарып, уны һаҡлау, ирмен тигән ирҙәргә мөкәддәс бурыс булыуы тураһында вәғәз тоттолар. Халыҡ өндәшмәй, берәү ҙә бер һүҙ ҙә әйтмәй, әммә күңелдәре тулышҡан, һытылырға торған яҙғы муйыл бөрөһөләй етешкән. Вәғәздән һуң һәр кем, һәр йән, хатта ағас ҡылыс эшләп билдәренә элеп алған ҙур, йомро ҡаҡ башлы малайҙар ҙа әллә ҡайҙа күренмәгән дошманға дәррәү барырға ризалар. Әммә мәсет тышында, байтаҡ ваҡыт инде, ҡараңғы. Үҙ-ара лыбыр-лыбыр һөйләшеп, терһәк таянырлыҡ таяу табып күңелдәренә өҫтәмә рух табып ҡайттылар мәсеттәгеләр барыһы ла.

Оло йорттағы табынды Ҡолой көттө лә, ниңәлер, унан ҡурҡты ла. Көттө, сөнки уға рәсми рәүештә, бына шул алайға шул командир була, тәғәйенләнем, тип, генерал-губернатор әйтмәһә лә, уның тарафынан һәр полкка урыҫ милләтенән тәғәйен кеше

барлығын Ҡолой белә. Ә ул ҡағыҙһыҙ командир, ысынбарлыҡта бар, ул кешеһеҙ, һис бер иррегуляр ғәскәр, уның берәмеге алайҙың да хәрби ойошҡан берҙәмлеге булыуы мөмкин түгел.

Яңы килгән кешеләр, әле бер тапҡыр ҙа яу ҡырында һыналғандары булмаһа ла, улар менән Ҡолойға билдәһеҙ ваҡыт яуҙа йөрөргә тура киләсәк. Ҡолой элекке яуҙарҙың миҫалында шуны белә. Илдән киткәс, әнә шул штабс-капитандар менән йыйналыу, тупланыу урынына тиклем баралар ҙа, унда, йә икенсе ғәскәри берәмеккә ҡушалар, йә, һирәк булһа ла, бөтөнләйгә бүлгеләп тараталар. Әммә һуңғыһы һирәк булды, сөнки был алымға бер төптән сыҡҡан кешеләр – башҡорттар, казактар, ҡалмыҡтар ҡырҡа ҡаршы булды. Шул нигеҙҙә хатта ҙур ғына низағтар ҙа булманы түгел. Был ваҡиғалар батшаға уҡ барып етеп, хатта унан фарман да алынды: иррегуляр ғәскәрҙәрҙе тарҡатмаҫҡа! Әммә яманлыҡтан йыраҡ булыу өсөн, милли ғәскәр берәмектәрен бергә тупларға ла ярамай. Араларында, үҙаллылыҡ яуларға, «Пугач»тар килеп сығыуы ла ихтимал бит. Әммә уларҙың үҙ-үҙен аямай, дөйөм тәғлимәт шауҡымы аҫтында сая, бик сая һуғышыуҙарын ҡулланмай ҙа мөмкин түгел. Ҡайҙа ауыр, хатта бик ауыр – иррегулярҙарҙы ҡулланып була. Уларҙағы юғалтыуҙарҙы ла дөйөм донесениеға керетмәҫкә оҫтарып алдылар, ҡайһы бер «юғалтыуһыҙ еңергә» өйрәнгән штабстар һәм уларҙан юғары торғандар...

Ҡолойҙоң үҙенең ғәскәри дәрәжәһе бар. Ул майор. Войсковая старшина. Уның дәүләтенең үҙ телендә, үҙ ғәскәри берәмегенең урыҫса атамаһы юҡ. Ул атамалар: полк, рота, батальон, лейтенант, капитан, майор, полковник, генерал, адмирал, маршал тигән дәрәжә атамалары бөтәһе лә немец, инглиз һәм башҡа көнбайыш илдәре теленән алынған. Борон уларҙа ғәскәри бүленеш булмаған. Шуға ла ул бүленештәрҙең үҙ телдәрендә атамалары ла юҡ, тип һөйләр булдылар абыҙҙар. Ҡолой, быны ғына түгел, башҡа бик күп тарихи мәғлүмәттәргә эйә. Әммә ул оҙаҡ ваҡыт ни өсөн хәрби дәрәжәлектең урыҫ әрмеһендә ике ҡатлы, ике исемле булыуын төшөнөп үк етмәне.

Дәрәжәһенең ике исемлеге уны Бессарабия һуғышында ла, башҡа яуҙарҙа ла оҙатып йөрөнө. Зауряд урядник, зауряд сотник, зауряд хорунжий тигән исемдәр тик башҡорт һәм казак ғәскәрендә генә булды. Әгәр ул ғәскәр Мәскәү дәүләтенеке булһа, шул уҡ сотник поручик була. Беҙҙә хорунжий булһа, уларҙа – прапорщик. Һәм һәр саҡ «зауряд» һүҙен ҡулланып әйттеләр, яҙҙылар. Бағһаң, ул ЗА уряд – хоҡуҡ бирмәй торған, беҙҙең дәрәжә уларҙың баҫҡысына тиң түгеллекте, ҡағыҙһыҙ кешене, ул дәрәжәгә хоҡуҡһыҙлыҡты аңлатҡан һүҙ икән. Өйрәтеүсе, етәкләүсе, алып барыусы – үрәтеүсе – үрәтник түгел, ә зауряд

урядник. Тимәк, батшалыҡ казактарға ла, башҡорт ғәскәре етәкселәренә лә ышанмай. Уларҙы за урядником, урядниктың йәки уларҙың унтер-офицерының аръяғында ғына тороусы, тип ҡараған. Әммә илдә, йәки батшалыҡҡа берәй яу, дау ҡубып килһә, шул зауряд есаулдар, зауряд хорунжийҙар һәр саҡ алда була. Әле лә шулай. Йөҙмәһе йөҙ ауырлыҡтарҙы үтеп, ойошторолған ғәскәри берәмек яуға китергә әҙер булғас, «штабс»тар килде, уларҙы ебәрҙеләр. Был дөрөҫмө икән, кәрәкме ул әфисәрҙәр беҙгә, тип һәр саҡ уйланы Ҡолой. Әммә дәүләтселек кем ҡулында, етәкселек тә шунда. Хәйер, бөгөн ул турала уйланырға ла, ниндәйҙер һөҙөмтә сығарырға ла кәрәкмәй Ҡолойға.

Мәсеттә халыҡ таралышҡас, Ҡолой, Мирхажи мулла һәм ҡайныһы Бикбаш ул урынлашҡан өйгә килделәр. Абыстайҙары һәм Ғәфифә өйҙә ине. Йомошсоһонан Ҡолой төп йортта аш-һыуҙың әҙерлеген һәм Иҡсандың бында килеүен һораны. Оҙаҡ көттөрмәне Иҡсан. Уға барлыҡ ҡунаҡтарҙы төп йортҡа оҙатырға ҡушып, үҙе әфисәрҙәр йортона китте. Ҡолой яу алдынан йортонда бер ниндәй ҙә шау, бигерәк тә ғауға сығыуын һис теләмәй ине. Ә бисәләренең быны сығарыуы бик тә мөмкин, тип уйланы. Әммә урыҫ әфисәрҙәренең, ә, бәлки, ҡыҙҙарҙың бында булыуҙары, ул хәлдең булыуына юл ҡуймауын да уйланы. Дөрөҫөрәге, шулай буласаҡ. Әгәр ҙә табын Ҡолой уйлағанса килеп сыҡһа, ҡалғанын ул бөтәһен дә юлға һаласаҡ. Бөгөн кис тә яҡшы үтәсәк. Иртәгә ҡунаҡтарҙы оҙатҡас, ғаилә мәсьәләләре, алайҙарҙың юлға әҙерлеге, дөйөм хужалыҡ эштәрен Иҡсан менән бергәләп хәл итеү юлдарын билдәләйәсәктәр. Ә улар бик тә, бик тә күп. Бөгөн ҡарасай айының алтынсы көнө, буғай. Һижринең 1432-һе. Юлға сығыуға теүәл бер йома бар.

Шул уйҙары менән әфисәрҙәр йортона килеп еткәндә өйҙә сыр-сыу, көлөшкән тауыштар ишетелә ине. Ҡолой, шаҡылдатмай, ишекте һелкә тартып эскә керҙе. Ҡайһы ваҡытта, нисек өлгөргәндәрҙер, әммә өй эсендәге күренеш көлкөлө лә, әхлаҡһыҙыраҡ та ине. Шуға ла ул чин буйынса ҙурырағына ҡәтғи тауыш менән:

– Овсянников, на выход, – тине лә, өйҙән кире сыҡты.

Күп тә үтмәне, ҡайышын биленә быуып, түш элмәктәрен әләәлә, ҡабаланып, ҡараңғыға береһе килеп сыҡты ла:

– Майор Овсянников прибыл, Ваше сиятельство, войсковая старшина, – тип хәрбиҙәрсә килеүен белгертте.

Булған ваҡиғанан нисек тә булһа аҡланыу өсөн дә кәрәк ине уның был «прибыл»ы. Киләсәктә был ваҡиғаны кем, нисек булһа ла кисерер, бөгөн ул Ҡолойға мөһим түгел. Аҙна ваҡыт эсендә был ике йәйәүле казак, йорттарына ҡайтып, әҙерләнеп килергә

тейештер бит. Иртәгә улар ҙа юлланыр өйҙәренә. Күрелгән хәлгә иғтибар ҙа итмәй, Ҡолой уға:

– Сию же час, все ко мне пожалуйте! Посидим, обсудим на едине сами, без губернатора, – тигәс, Овсянниковтың да, йәне тынысланды. – Я подожду, пойдемте вместе, тигәс, майор бик ҡабаланды.

Улар, бишәүләп ҙур йортҡа килеп кергәндә, бөтәһе лә генерал өсөн ҡуйылған оҙон өҫтәлдәр артына урынлашҡандар ине. Фәфифә лә бында. Инәһе Бәҙерниса, Хәйретдин мулла абыстайы Сәйҙә һәм Мирхажи мулла абыстайы Шәфиҡә менән үҙҙәре бер ситтәрәк ҡор яһағандар. Әфисәрҙәр менән килгән Серафима менән Фаина ла улар ҡорон тулыландырҙы. Мирхажи мулла ашҡа фатиха бирҙе. Табын оҙаҡ барҙы. Ҡолойға урыҫ әфисәрҙәре менән һүҙ аралаштырырға, йә ҡайныһы, йә муллалар менән дә һөйләшергә кәрәк. Ҙур ғаилә ағзаларын да онотмаҫҡа тырышты. Әфисәрҙәргә ул юл мәшәкәттәрен күберәк һөйләне. Юлға сығырға бер-ике көн ҡалғас, алайҙарҙың тәьминәт бүлектәрен алға ебәреү кәрәклеген һөйләһә лә, ул фекеренән баш тартты. Тырым-тырағай булмай, бөтә хеҙмәт бүлексәләренә лә бергә сығып китеү мөһимерәк булыр. Аттарға һоло тейәлгән арбаларҙы йыраҡ алып китмәҫ өсөн, уларҙы Өпәгә тиклем генә оҙатырға ҡарар итте. Ылауҙарҙы Өпә аръяғына алып китһәң, беренсенән, ҙур һыуҙарҙы ауыр арбалар менән сығыуы үҙе ғазап. Йыраҡ алып китһәң, ни тиһәң дә улар бер-береһенән юлда айырыла, юғала. Өҫтәүенә, хәҙер урмандар тулы заводтарҙан ҡасҡан ҡасаҡтар һәм урыҫтар, үҙҙәре лә дошман күргән раскольниктар тип аталған ас юлбаҫарҙар өйөрө юлдарҙа хаким итәләр. Шуның өсөн, кәм тигәндә, 10–15 арба ҡораллы кешеләре менән йөрөргә тейеш. Юғиһә, ат та, арбалар ҙа була, ә ылау хәҙер хужалыҡта бик кәрәк. Ашлыҡ көлтәләре, бесән, утын ташырға... Ылауҙы Өпәнең аръяғына алып китмәй, Еҙем аша, Өпә йылғаһына етергә лә, кире боролорға тигән әмерен ул әфисәрҙәргә шунда, ҡорҙа еткерҙе. Әммә әфисәрҙәр икеһе бер тауыштан:

– Ниңә беҙһеҙ ундай ҡарар ҡабул итәһең, уға беҙҙең чинлылар ҡарары булырға тейеш, – тигәс, Ҡолой:

– А сколько обозов дал ваш госгарнизон? Сколько телег, лошадей и фуража? – тип һорау бирҙе. – Ведь весь обоз взят у хозяйства! Согласно положения они могли бы сопровождать, только до Златоуста, до ста километров от дома. Это ведь госпредписание. Знаете ли вы об этом?– тип тағы ла һорау бирҙе.

Әллә табында һүҙ ҡуйыртмаҫҡа, әллә был войсковая старшина менән һүҙ көрәштермәҫ өсөн, әфисәрҙәр башҡа өндәшмәнеләр. Ашап ултырған аштары, йоҡлаған өйҙәре лә бит Ҡолойҙоҡо. «Был самодур кантон начальнигы төндә өйөнән дә ҡыуып сығарыр.

Ботоңдан тотоп, Мейәс йылғаһының төбөнә ташлар ҙа, шуның менән вәссәләм» тип уйлап та шөрләнеләр майор Овсянников менән капитан Трунов. Юлда ла бит төрлөсә. Меңәрләгән инородецтар. Бөтәһе лә ҡораллы, Аллам һаҡлаһын. Ҡолойҙоң был ҡырҡа ҡарарының артабанғы һөҙөмтәләре булмаһын, тип, килешеп хеҙмәт итеүҙе хуп күрҙеләр кеүек әфисәрҙәр ҙә. Бындай ҙур, хәрби һорауҙарҙы ла, ул, кантон начальнигы ғына хәл итерме тигән уйҙар улар башынан йүгереп үтте. Әммә икеһе, шыбырлай биреп, үҙ-ара һөйләшеп алғас, тынысландылар. Сөнки юғарынан килгән әмер барыбер уларға – майор Овсянниковҡа һәм капитан Труновҡа киләсәк. Ә беҙ уны, хәҙер инде, кантон начальнигына түгел, ә тик зауряд войсковая старшинаға үҙебеҙ ҡушабыҙ. Бер ҡайҙа ла бармаҫ. Әммә уның да дәрәжәһе ҙур бит әле. Унда барғас, дәрәжәһен, һис шикһеҙ, бер баҫҡыҫҡа үрләтерҙәр. Генерал-губернаторҙың армия командующийына яҙған донесениеһында шулай. Ә уны бирмәй, мөмкин түгел. Званиеһын Кутузов үҙе бирһә, урыҫса яҡшы белә. Беҙҙе кем әте, тип тә һанамаҫ микән? Беҙ полкка тик «приписанный» ғына булып йөрөрбөҙме икән? Ул – ҡурҡыныс та, бер, тип һөйләштеләр.

Өпәлә, гражданлыҡ губернаторы Наврозов янында генерал-губернатор тарафынан ҡуйылған иррегуляр ғәскәрҙәр вәкиле, әллә Азаматовтарҙың, әллә Бикмәтовтарҙың берәүһе, дәрәжәлеһе, ойоштороу эштәре менән шөғөлләнә икән. Иррегуляр ғәскәрҙә дәрәжә билдәләү һорауҙары менән дә, имеш, шөғөлләнә. Ә бына, иррегуляр ғәскәр берәмегенә беркетелгән әфисәрҙәр чинын һәм башҡа регуляр ғәскәри дәрәжәләрен губернатор тәҡдиме менән хәрби министр һәм табелдәге теҙмә буйынса император тарафынан да ҡаралған. Әгәр теҙмәлә вағыраҡ чиндар булһа, уны Государственный Совет тип аталған ойошма етәксеһе лә тәстиҡләгән.

Ҡолойға дәрәжәләр тәҡдиме кәрәкмәй. Уға был әфисәрҙәрҙең аттарға һәм кешеләргә, артабанғы юлда ашау, йоҡлау мәсьәләләрендә ярҙамы кәрәк. Табында урыҫ әфисәрҙәре менән буласаҡ яралылар, уларға ярҙам күрһәтеү берекмәләре, яралыларҙы алып йөрөү тураһында ла һүҙ барҙы. Сит ерҙәрҙә, йыраҡ илдәрҙә, ҙур һуғыштарҙа, әлегә ҡағыҙҙа булған полк командирҙарының был турала асыҡ ҡына төшөнсәһе юҡ ине. Ырымбур һәм Себер хәрби линияһынан йыраҡ китмәгән кешеләрҙең, әлбиттә, ҙур әрме хәрәкәте тураһында төшөнсәләре бик һай ине. Ә Ҡолой, Рәсәй дәүләтенең ҙур, хәрби хәрәкәттәрендә бер нисә тапҡыр булғас, ялан хәрәкәте тураһында күп нәмәне белә, йәки ысынбарлыҡҡа яҡын буласаҡ ваҡиғаларҙы асыҡ күҙаллай.

Ғәскәрҙең ҡайҙа һәм ниндәй маҡсат менән һуғыш алып барыуына, һуғышта яра алған яугирҙарҙың яҙмышы бәйле, тип һөйләй ине Ҡолой. Әгәр ул армия сит илгә, сит ергә баҫҡын булып кергә,

ул ил халҡы өсөн яралыһы ла дошман. Яралыларҙы бер ергә лә ҡалдырып булмай. Урындағы халыҡ та ярҙам күрһәтмәй. Фәскәр хәрәкәтенә эйәреп арбаларҙа, саналарҙа яралыларҙы алып йөрөп тә булмай. Шуға күрә лә сит илдә яралының яҙмышы тәҡдире ҡушҡанса була... Һуғышта өс юл бар. Дошманды, һис шикһеҙ, еңергә һәм ауыр яра алмай. Ауыр яра алып, дошманыңды юҡ итеү – ул үҙеңдең дә үлемеңә тиң. Тимәк, ул еңеү түгел. Шуға ла егеттәрҙән сослоҡ, ҡеүәт һәм батырлыҡ талап ителә. Шуға ла өйрәттек, өйрәтәбеҙ. Илгә кире иҫән-һау ҡайтыуҙың берҙән-бер шарты шул.

– Күп инде ул еңеүҙең йәки еңелеүҙең сәбәптәре. Мөһим шарттың береһе – ҡайҙа, ҡасан, кемгә ҡаршы, ниндәй ҡорал ҡулланыу. Мәҫәлән, хәҙерге һуғышта, минеңсә, оҙон, осло, бармаҡ йыуанлығындай сәнске һөңгө отошло. Һабы әлекке һөңгөләр кеүек оҙон уҡ булмаһын. Уларса нисектер, урыҫса «латы» тип аталған кеймле дошман булһа, сәнске һөңгө уны ала. Оҙон һаплы булмауы хәрәкәткә иркенлек бирә. Әммә ул көнбайыш «меч»ынан ике ярымға оҙон. Шуға ла алдан сәнсеп өлгөрәһең. Улар күберәк йәйәүле була. Өҫтән һелтәү өҫтөнлөк килтерә. Унан бит сәнске һөңгө менән ҡаҙайһың да, шунда уҡ һурып алаһың. Ҡайһы бер ерҙә сәнске һөңгөнө беҙ һөңгө тип тә атайҙар. Һөңгөнөң сығанаҡ мүлдергәһе лә, йөҙөк мүлдергәһе лә булһа йөрөтөүе йәтеш була. Әммә дошман «Каре» тип аталған теҙмәләренә уҡмашып алһалар, бында инде һөңгө ҡулланыу икеле. Ул ваҡытта, уларҙы, уҡ менән тиҙ-тиҙ атып, күптәрен яралап туҙҙырып алһаң, карелары бөтә. Алыш ялан ерҙә, асыҡлыҡта булһа, «беҙ»-һөңгөләр тағы ла ҡулланыла. Иркендә дошманыңды яныңа ебәрмәй сабып йөрөп хисаплайһың. Әммә һөңгө һуғышы ағас араһында бармай, унда ҡылыс һуғышы ла отошло түгел. Ағас араһында йәйәүлеләр өҫтөнлөк итә, тип Ҡолой бында ултырғандарға әллә фәһемлек өсөн, әллә хәтирәһен һөйләне.

Ҡорға, тоноҡ һыу йә булмаһа, әсе бал сыҡмағас, ниһайәт, әфисәрҙәр ҡыҙҙар менән ҡайтырға ҡуҙғалдылар. Ҡолой, Иҡсанға был «етешһеҙлек»те бөтөрөп, уларҙы оҙатып ҡуйырға ҡушты. Тышҡа тиклем үҙе лә оҙатты. Улар, Ҡолойға, иртәгә өйҙәренә ҡайтып, ҡарасай айының ун өсөндә килеүҙәрен белдерҙеләр. Әфисәрҙәр киткәс табын иркенәйҙе. Аулаҡта тартынмайса ныйланырға ла, һөйләшергә лә мөрхәт тыуҙы. Һүҙ, нигеҙҙә, һәр мәсеттә һуғышҡа китеүселәргә арнап, иҫән-һау, еңеү менән ҡайтыуҙарына бағышлап Ҡөрьән сығыу, һәр ауылда ҡорбан салыу тураһында барҙы. Был сараға тиклем эшләй торған эштәрҙе бөтөрөү, яуға китәсәктәрҙең ғаиләләренең тәьминәтле булыуҙарын тикшереп, ҡарап сығып, тейешле ярҙам өсөн Мирхажи мулланы үҙ кешеләре, үҙ диниә идаралығы менән ауылдарға сығырға һораны Ҡолой.

Иртәгәһен ҡайныһы Бикбашҡа ла, Хәйретдин муллаға ла үҙ ҡәрйәләренә ҡайтып, шундай уҡ сараларҙы ойоштороу мотлаҡ, тине. Әммә 4-се кантондың да йөҙлөк баштары ебегәндәрҙән түгел. Унда ла алай ярҙамсылары, тәьминәтселәр, иллелектәре лә бик сарға. Маҡсат ҡуйған эш йәки сара булһа, тирегә йәбешкән талпан кеүек ҡаҙалалар. Баязиты ла, Бикбулат та, Ильяс та, Йыражбай ҙа һәм башҡа бөтәһе лә бер ҡалыптан. Ат йығылмаһа, улар ат өҫтөнән осмайҙар, һөңгө, ҡылыс ҡулдарында уйынсыҡ кеүек уйнай. Уҡ менән осҡан ҡошто атып төшөрәләр. Уларҙың был маһирлыҡтарын Ҡолой белә. Элекке яуҙарҙа бергә булырға тура килгән ине.

Ҡолой арманһыҙ булып арып йөрөгәнгәме, әллә ҡайныһы Бикбаштың теләген һиҙепме, ҡымыҙҙан, буҙанан башҡа әсегән бал да ҡуйҙыртҡан ине. Әммә ул уны әфисәрҙәргә тәҡдим итмәне. Табында сит, ят бауыр ҡалмағас, абыстайҙар инәһенә әйәреп Фәфифә лә, Аҡбикә менән Зөләйхә лә бер ҡор булып беректеләр. Иттең, тәм-томдоң төрлөһөнән тыш, кем нимә теләй, әсемлектәре лә һәр кемдең күңеленә хуш килерлек. Ҡымыҙҙан биттәре алһыуланды, үҙҙәре лә теремекләнде, һүҙҙәре күбәйҙе. Ҡолой, ҡайныһы Бикбашҡа тәрән ағас сеүәтәгә балауыҙҙан әсетелгән балды ҡойғас, уны үҙ йәнәшенә ымлап саҡырып ултыртты. Икенсе сеүәтәнән һуң, Ҡолой менән Бикбаштың да тәне, ҡорғаҡһыған ағас сапсаҡ кеүек, бал әселеген һеңдереп, тулыланып, бүртеп, ҡыҙарып китте. Әсе ҡымыҙҙан һуң, Мирхажи менән Хәйретдин мулланың да тәндәре леберләп, ирәбәйеп киткән кеүек булды. Ҡорҙа, ҙур ғаиләлә бер тырпай булып үҫеп еткән, Ҡолойҙоң үҙ урынына кантон башы булып ҡаласаҡ Иҡсандан башҡа, тағы ла улдары бар ине. Улар, һәр берһе башлы-күҙле булып, һәр береһенең ата йорто тирәләй эшләнгән үҙ өйҙәре, аҙбар-ҡуралары бар. Оло ҡатын-ҡыҙ, абыстайҙар ҡорға ултырһа ла, биш килен дә әле алғы өйҙә үҙ-ара сырҡылдашалар. Хәбәрҙәре күп, болашмаҡ һөйләйҙәр. Әллә ғәйбәт, әллә дөрөҫтө һөйләйҙәр, этем белһен инде. Бына шул, йәш сутылдаҡтарҙың ирҙәре, ҡорҙа мыҡты булып, урын алғандар. Аҡбикәнән тыуған 27 йәшлек Исхаҡ, 25 йәшлек Фәбделхалиҡ, Зөләйхәнән тыуған 27 йәшлек Хәсән, 25 йәшлек Хөсәйен һәм 23 йәшлек Сәфәр. Һәр берһе, үҙ дәрәжәһен тотоп, тыныс ҡына һөйләшәләр.

Бикбаш уң ҡулын ҡуйынына тығып бишмәтенең әллә еңенән, әллә эске бөрмәһенә тегелгән элмәгенән ҡурай һурып сығарҙы. Бик ихласлап ҡарап сыҡҡандан һуң, ҡурайының тишектәрен, башын төкөрөкләне лә ҡыр аты тарпан кеүек боронғо, Урал тауҙары кеүек уңғыл-суңғыл, йә теҙмәгә һуҙылған мөһабәт оҙон армыт тары кеүек, ниндәйҙер мәғрур, бөйөк моң менән бөтә өйҙө солғап алды. Унан һуң, ҡурайын тештәренән алып, күңеле менән

ҡайҙалыр тауҙар араһына кереп китте лә шул уҡ моңло йырҙы бик эс бошорғос, һалмаҡ ҡына тауыш менән йырлап ебәрҙе.

Уралтауға барһам, ҡайта алмайым,
хайран ҡалам ҡоштар тауышына.
Үткән ғүмеремде искә төшөрәм мин,
сылтырап аҡҡан йылға тауышына.
Урал да ғына, Урал, эй, тирәгеҙ, Урал буйы ҡыҙырым саҡа икән,
Моңландырып, йырлап ебәрҙиһең, күңелдәргә үҙе лә заукы икән.
Арҡа ла ғына ерҙә, эй, ат уйнай, түбә генә ерҙә төлкө уйнай,
Атанан да бала йәшләй ҡалһа,
көн итеүкәйҙәрен көн дә уйлай...

Бикбаштың был Иҫке Уралынан һуң барыһы ла тынып ҡалды. Атаһы менән яуға китә торған биш ул да, алғы өй ишегенән баштарын тығып, төп ҡорға күҙҙәрен упайтып баҡҡан йәш киленсыркылдаҡтар ҙа моңға сорналып шым ҡалдылар. Һәр ҡайһыһы үҙ сабыйын, үҙ балаһын күҙ алдына килтерә. Әгәр һуғыштан ҡайта алмаһам, балаҡайҙарымдың арҡаһынан минән башҡа кем тупылдатып һөйөр тигән уй йөрәктәрен семтей ине. Һөйһә лә, балаһын саҡырып һөйә алмаған үҙ атаһындай булмаҫ инде.

Йырға яуапһыҙ ҡалған йырһыҙ табын йырсыны ла, йырлай белмәгән йырһөйәрҙе лә битараф ҡалдырмай. Башҡорттоң табынында борон-борондан килгән ғөрөф ул. Йырға йыр менән яуап биреү һәм йыраусынан кәм үк түгел итеп башҡарыу күптәрҙең намыҫ эше. Йыраҡҡа, сит ерҙәрҙәге һабантуйға исеме билдәле булған йөрөк атты оҙон бәйгегә килтергәндәге, башҡалар һәм урындағылар тоя торған хисте кисерҙе һәр кем.

Йәш ваҡытында үҙе лә күп утты үткән, һыуҙар кискән Мирхажи мулла ла донъяның күп яҡшылығын да, хәсрәт һыуын да эскән. Күп кешеләрҙе күргә һәм аралашырға тура килде уға. Илһөйәрҙәрҙе лә, тәғлимәтен, намыҫын һатҡан ике йөҙлөләрҙе лә. Мирхажи мулла – үҙ фекерле кеше. Бай, тип, байға ярамһаҡланманы. Ярлыны ярлы тип, кәмһетмәне. Киреһенсә, байҙан ярлыға һәр саҡ фытыр саҙаҡаһы ғына түгел, уға ҙур матди ярҙам бирҙертте. Байҙы ла, ярлыны ла ислам тәғлимәтенә буйһоноуҙы талап итеп кенә ҡалманы, уны ихтирам иттерҙе.

Ҡолой кантон көслө рухлы, ҡәтғи холоҡло, тәүәккәл, киҫкен тәбиғәтле кеше булһа ла, Мирхажи мулланы ихтирам итте. Фекеренә ҡолаҡ һалды. Кәңәшләште. Ул әйткән шәриғәт ҡанундарына үҙе буйһондо. Мирхажи мулланың зиһенлелеге, ғилеме, Ҡолойҙоң ғәскәри ҡырҡыулығы, халҡына иғтибарлылығы, илһөйәрлеге уларҙы рухи тигеҙлеккә куя. Әммә улар был күҙгә күренмәҫ бәйләнештә аңлап баһа бирмәйҙәр, рухиәттәре тигеҙлеге уларҙы дуҫ-

лаштыра. Берене – оло, икенсене кесе булып тормошта үҙ мөнәсәбәттәрен дә, матди көнкүреште лә тулыландыралар. Мирхажи муллаға 69 йәш. Әле уның тәнендә лә, рухында ла көс бар. Ҡолой уға улы кеүек кенә. Ҡолойға 48 йәш тулып үткән.

Бикбаш тағы ла ҡурайын алып шым ғына башлаған кеүек булһа ла, ҡапыл үргә, һауаға, бейектәге болоттарға етеп, уның алама остарына сатырман тотоноп алған илһам менән икенсе, оҙон көйҙө уйнап ебәрҙе. Уға эйәреп, шундай уҡ рух бейеклегендә, Мирхажи мулла ла уға ҡушылды.

Башҡортомдоң тоткан төп ҡоралы кәкре ҡылыс
менән үк икән,
Эй, был имперҙе бөтә айҡап сыҡтыҡ,
башҡортомдан батыры юҡ икән.
Арғыл ғына, арғыл, эй, артыла, арҡаһы күк бүре балаһы,
Эй, йәнен фиҙа ҡылыр иле өсөн,
Ҡолой кантон Көсөк балаһы.

Мирхажи мулла йырлап бөтөүгә:

– Хәҙрәт, мөмкинме, – тип ризалыҡ алғас, уны, йыр тыңлап, тәьҫирләнеп ултырған Хәсән менән Хөсәйен алмаҡтан-һалмаҡ дауам иттеләр.

Ҡараһыу ҙа буйлап, һай, китәбеҙ, ҡара ҡаҙҙар кеүек теҙелеп,
Эй, Мәскәүҙе лә дошман баҫҡан, тигәс,
йөрәккәйҙәр китте өҙөлөп.
Алыҫтарҙан ҡарап, эй күренмәй, Мәскәуский бейек таш-ҡала,
Эй, ризыҡкайың бөтөп, тупраҡ яҙһа,
тупраҡ яҙған ерҙә баш ҡала.

Бикбаш ҡурайсы ҡапыл туҡтаны.

– Был йырҙы, кейәү, һиңә бағышлайым. Һүҙҙәре лә килешә, «Ҡолой йыры» булһын, – тине Бикбаш.

– Юҡ, Ҡолой йыры түгел, ә «Ҡолой кантон» йыры булһын, – тине Хәйретдин мулла, төҙәтеп.

– Эйе, эйе, шулай булһын, – тиештеләр ҡорҙағылар. Иҫке кеүек тойолған был йырҙы ҡорҙағыларҙың бөтәһе тигәндәй отоп алды. Шул кистән һуң ул йыр тиҙ таралды.

Һуғышҡа китеү аһәңе, ил өсөн көрәш, еңеү рухы бөтәһенә лә яҡын, бөтәһенең дә теләге. Табындағы йыр бөтә халыҡҡа арналған булһа ла, ул моң халыҡтың бер вәкиле, һыны аша бирелеп, уның теле менән кире үҙен, халҡын һынландыра. Шуға ла бөтә халыҡ уны яратты, үҙ итте, шуға ла ул тик бишенсе кантонда ғына түгел, ә бөтә кантонлыҡтар халҡының яуға киткән алайҙарының көйө булды.

Был табында Ҡолойҙоң теләгенән тыш, уның өс ҡатыны оҫрашты. Тәүге икәүһе бер-береһен күптән инде бик яҡшы белә. Һәр береһе үҙенсә, үҙ булмышы менән. Ҡолой өсөн, хуп булған да, етешмәгән яҡтары ла ифрат күп. Әммә Ҡолой быға күҙ йома. Йәш ваҡытында атаһының һүҙен, йә үҙенең еңмешлеген еңә алмағас, хәҙер инде шул килешеүенең емешен татый. Был ике оло бисәләренән тыуған балаларға һуҡранмай ул. Улар ярҙамсылар, тыңлаулылар. Быға уның ғаиләләге абруйы ла һәм бисәләренә ҡарата талабы ла ярҙам иткәндер. Уның тәрбиәһендәге төп үҙәк – хеҙмәт һәм иманлылыҡ тәрбиәһе булды. Бисәләренә был ике төшөнсәне ул ҡәтғи ҡуйҙы. Тик бына нисектер ауыр һүҙ йә ҡулы менән ҡыйырһытмаһа ла, күңеле ике бисәһенең береһенә лә ятып барманы. Яҙмыш шулай ҡушҡас, уны Аллаһы Тәғәлә үҙе биргәндер, тип яҙмышына буйһоноп йәшәй бирҙе. Тормошоноң мәғәнәһе хәрби хеҙмәт тә, эш булды.

Әле бына, был оло табында, Мирхажи һәм Хәйретдин муллаларҙың абыстайҙары Шәфиҡә һәм Сәйҙә, Аҡбикә лә, Зөләйхә лә, Ғәфифә лә бер ерҙә. Сәйҙә абыстай, күрәһең, ҡыҙ-ҡатын тормошона бағышланған, ҙур тормош һабағынан иҫтәлекле миҫалдар һөйләйҙер. Шуға күрә лә әлегә аш-һыу менән мәшғүл булған килендәре: Иҡсандың ҡатыны Бибиәсмә, Исхаҡтыҡы – Гөлбәҙәр, Ғәбделхалиҡтыҡы – Сейә, Хәсәндеке – Зөлфиә, Хөсәйендеке – Мәстүрә һәм Сәфәрҙең иң йәш килене Нәсимә лә, шым ғына сығып, Сәйҙә абыстайҙың нәсихәттәрен йотлоғоп тыңлайҙар. Ара-тирә тыңлаусыларҙың араһынан:

– Эйе, эйе, шәриғәт шулай ҡушҡан бит. Шәриғәттән уҙмыш юҡ. Балаларыбыҙ теүәл. Аллаһы Тәғәлә уларҙың береһе менән дә бәхилләшергә яҙҙырманы, – тине Аҡбикә. Уның һүҙенә ҡеүәт биреп, баш ҡағыуҙарын, доға уҡып, Аллаһу әкбәр әйтеүҙәрен күреп була. Сәйҙә абыстайға Сәғиттең ҡатыны Сабира ла ҡушыла.

– Яҙмыш инде... Кемгәлер улай, кемгәлер былай... Миңә ике бәпесем менән бәхилләшергә тура килде. Башҡаса бала күрмәнем. Сәғит башҡа өйләнмәне. Хәле лә шулай инде. Әйттем-әйттем, өйлән, тинем. Исмаһам, бала-саға үрсер. Зыр-зыу булып, балалар менән йәшәге килеп китә лә ул. Юҡ, бына хәҙер икәү генәбеҙ.

– Эйе, ил-йорт күп булһа һәйбәт тә ул, – тип, Бикбаштың ҡатыны Бәҙерниса ла ҡушыла.

Ә килендәр, килендәр бөтәһе лә ауыҙҙарына һыу алғандай, шым булғандар. Бер-береһенә баштарын да бормай, күҙҙәре менән генә ҡарашалар.

Шулай тәрбиәләнеләр ололар йәштәрҙе. Өйҙә ике, Ҡолойҙоҡо кеүек өс бисә булғанда ла гонаһ күрмәнеләр, тормоштоң ғәҙәти алымы, тип ҡабул иттеләр.

Аҡбикә менән Зөләйхә иренең йәш ҡатынға әйәләшеүен әллә ҡасан уҡ ишеткәндәр ине. Тик көнө-төнө эш-хеҙмәт менән мәшғүл ирҙең ҡасан ул йәш ҡатынға барыуын һис төшөнә алманылар. Үҙе лә ул турала ләм-мим!

– Юҡ, ир һуғышҡа киткәндә, ҡырлы-мырлы булып, шау, ғауға күтәреп ҡалып булмаҫ инде. Ирҙе тыныс күңел менән, уның иҫән-һау ҡайтырын теләп, доғалар уҡып, донъяһын матур итеп көтөргә кәрәк. – Шулай тип өгөт-нәсихәт һәм күңелендәге ысын уйҙы һөйләне Аҡбикә. Ә Зөләйхә икенсерәк уйлай. Зөләйхәнең дә өс улы аталары менән яуға китә. Ниңә уға ла ире Ҡолой менән бергә китмәҫкә? Уға әле 45 йәш. Тәүге улы Хәсәнде тапҡанда, уға ни бары 18 йәш ине. Тәүге ире уны ҡаҡты ла һуҡты. Имеш, Зөләйхә һаман ире линия хеҙмәтендә булғанда, Ҡолой менән артта, бейек атҡолаҡ үләне араһында осрашалар. Имеш, Хәсән атаһына оҡшамаған, ул Ҡолойҙоң улы. Шулай итеп, килгән һайын йәберләгәс, исеме сығып бөткән Зөләйхә Ҡолойға сыҡты ла ҡуйҙы. Ҡолой Хәсәнде үҙ итте лә ҡуйҙы. Әллә баланы йәлләне, әллә эске күңеле үҙенеке итеп ҡабул итте.

Әммә тора-бара Ҡолой ҙа уны ҡалдыҡ, кеше бисәһе булған кеүегерәк хис-тойғо менән ҡабул итә башланы.

Әйтерһең дә, Ҡолой үҙе егет. Өйөндә үҙенән дә һолдо, өйрәнгән Аҡбикәһе бар. Аңламаҫһың был донъяны. Ата ҡаҙға өсдүрт инә ҡаҙ, ә әтәскә һигеҙ-туғыҙ тауыҡ биргән, Хоҙай. Ә кешегә? Кешегә лә ике-өс бисә биргән бит. Ниңә бер-береңде ғәйепләргә? Ә урыҫтар бер бисә менән йәшәйбеҙ тигән булһалар ҙа, Мариялары бихисап... Һәр ауылда икешәр тиһәң дә, яҙыҡ булмаҫ. Бөтәһе лә йәшерен, балалары ла. Ә беҙҙә – бөтә асыҡ, тип тә фекер йөрөттө Зөләйхә. Шулай ҙа ул ире менән яуға китер ине. Атҡа, өҙәңгегә баҫып, еңел менә. Уҡты мәргән ата. Ҡылыс та саба белә. Тик бына һөңгө менән кешегә гөрш иткәнсе сәнсә алмаҫ ине кеүек.

Үлмәйем, тиһәң, уға ла өйрәнәһең инде. Иреңде, улдарыңды һаҡлайым, тиһәң... Тик Зөләйхәне яуға алмаҫ шул Ҡолой. Губернаторҙан рөхсәт юҡ, ти. Ул үҙе, Ҡолойға әйтмәй генә, һуғышҡа китергә һорап ғарызнамә яҙған ине. Губернатор ул һорауҙы ҡарарға урынбаҫарына биргән, имеш. Ә ул, хәрби ярҙамсыһы, ҡараған да:

– Ты че, Зина! Ни в племя, ни в войну ты сейчас не годишься. Лучше дома щи сваргань, – тип көлөп сығарып ебәрҙе. Әммә Зөләйхә үҙен һуғышта насар ярҙамсы итеп һис тойманы. Шулай ҙа төплө генә Ғәфифәнең Ҡолой менән һуғышҡа алыныуын белмәй ине ул.

Табынды йомғаҡларға доға уҡый башлағас ҡына, Сәйҙә абыстай хәбәренән айырыла алдылар ҡатындар.

Иртәгә иртә менән ҡайныһы Бикбаш та, Хәйретдин мулла ла ҡайтыр юлға сыға. Губернаторҙың бойороғо буйынса 16-сы, 19-сы һәм 18-се полк, ҡарасайҙың 14-дә ҡуҙғаласаҡ. 18-се полк йөҙлөктәре, Малай-Муйнаҡ, Туңғатар, Иҫке Байрамғол, Мулдаҡай, Һөйөндәк олоҫтарындағы ауылдарынан Мулдашҡа йыйылып, Урал һырты аша, 30 саҡрымдан да артыҡ булмаған, Златоустҡа төшәләр. 19-сы полк Ҡоншаҡ, Бүре һәм башҡа ауылдарҙан Арғаяшҡа йыйылып, улар ҙа Златоустҡа юл аласаҡтар. Ә 16-сы полк Ҡолой етәкселегендә Ҡолһары ауылынан йүнәләсәк, Златоустҡа. 17-се полк, есаул Әлимсура етәкселегендә, 19-ҙы көнө ҡуҙғаласаҡ. Урыҫ әфисәрҙәре тура Златоустҡа барасаҡ. Артабанғы юл билдәле. Полктарҙың төрлөһө-төрлө көндә ҡуҙғалғанлыҡтан, Өпәгә тиклем барасаҡ һоло ылауҙарын да уртаға бүләсәк Ҡолой.

Ҡолойҙоң ҙур йортондағы табын яйлап ҡына, һәр ғөрөфтө һаҡлап, таралды. Сәғит ағаһының ҡатыны Сабира еңгәһе Ғәфифә менән уның йортона китте. Ә Ҡолой ике мулланы, ҡайныһы Бикбашты оҙатып, тышҡа сыҡтылар.

Көҙҙөң дә уртаһы етеп килә. Төндәр күптән инде оҙайҙы, ҡараңғыланды. Ҡайһы көнө ҡырау ҙа төшә. Үләндәр һарғайҙы, ҡатты. Ҡайҙа барһаң да, илдә шомло хәбәрҙәр йөрөй. Наполеон Мәскәүҙе алғас, хәҙер Петербургты яндырырға киткән икән, тип һөйләйҙәр. Ҡайһы берәһе, ул беҙгә Уралға килә икән, Һамарға, Ҡазанға етеп килә, имеш, тигән дә ҡыуыҡ осоралар. Сәйҙә менән Шәфиҡә абыстайҙар ҙа, тормош нәсихәттәре араһында, урамда йәки ҡатын-ҡыҙҙар ғына йыйылған аяттарҙа ишеткән имештәрҙе йәш килендәргә лә еткерергә өлгөрҙөләр.

Бикбаш та, Хәйретдин мулла ла, Ҡолой ҙа уларҙың был хәбәрҙәрен ишетһәләр ҙә, ҡыҫылманылар. Сөнки быныңбулмаҫ хәбәр икәнен яҡшы белә улар. Франҫуздың да, германдың да аттары боттарына йәбешкән аҡ салбары, аяҡтарындағы тар, осло, ҡаҡ күн кәүештәре менән ҡайҙа ул халҡын, буранлы көндә, бот төбөндәге ҡарҙы йыра-йыра беҙгә килеп һуғышыуҙары. Тибенә белмәгән аттары нимә, ботаҡ ашаһындармы? Йәки мылтыҡтары. Әгәр бер ергә тупланып, йәки ҡәлғә артынан атышһалар, бер мылтыҡҡа ике кеше тора. Берәһе мылтыҡ көбәгенән дары һала, унан сүбәк һалып төйә, унан йәҙрә төшөрә, тағы ла йоҡа сүбәк төйә. Шунан, саҡтырғысына ут бәрә торған таш һала ла, дошманына төҙәп атып ебәрә. Эйе. Утлы ҡоралдың әгәр йәҙрәһе тейһә, үлтерә, йә ауыр яра һала. Көслө ҡорал, һүҙ юҡ, быныһы билдәле.

Ә уҡты «һә» тигәнсе биш-ете, хатта ун уҡ атып була. Бөтә ғиллә уҡтың башында. Үлемесле йәки тәрән яра һалыуы ла башаҡтан. Тик ул ҡабырсаҡлы йәүшән кейгән дошманға ҡаршы көсһеҙәрәк. Ҡабырсаҡ өҫтөнән тайып ситкә оса, йә уны тишә алмай. Ә йәҙрә, яҡындан атһаң, йәүшәнде тишә һуға. Элек улар дүңгәләк-

ләп әшләнгән йәүшән кейә торғандар ине, тип хәтерләй Бикбаш. Улар уны йәйәүләп ҡылыс менән сабышыуҙа ҡулландылар. Ә беҙҙекеләр уға ҡаршы «дарыу»ҙы тиҙ уйлап тапҡандар. Беҙ-башаҡ ҡуйғандар уҡ осона. Ә ул дуҫғәләкле йәүшән аша тотҡарлыҡһыҙ кергән. Ғөмүмән, беҙ-башаҡ башҡа башаҡтарға ҡарағанда отошло. Ҡырма башаҡ, төрмә башаҡ, һыҙма башаҡтар ҙа көслө. Ләкин улар һайман кеймәгәндәр өсөн ҡурҡыныслы. Сөнки ҙур яра һалалар. Бикбаш та, башҡалар ҙа был турала яҡшы беләләр.

Франҫуздың Оло Иҙелгә лә, унан һуң Өпәгә, Уралтау аша, Мейесле йылғаһы, Уй, Яйыҡ, Ағиҙел башына етеүҙәре мөмкин түгел. Үҙебеҙгә, үҙебеҙҙең егеттәргә уларға ҡаршы дәррәү барыу лазым.

Тышта, һәр ҡайһыһы үҙе туҡтаған йортҡа йүнәлгәндә, төрлө һуғыш ваҡиғаларын да, еңеү тәьмин итә торған һәр төрлө алымдары тураһында фекер алыштылар. Мирхажи мулла, Бикбаш менән Ҡолойҙо үҙенә йәстүгә һәм сәйгә саҡырһа ла, Бикбаш иртәгә иртә менән ҡайтыу юлына сығыуын сәбәп итеп хушлашып, айырылыштылар. Әммә иртәнге сәйҙә Мирхажи мулла йортонда йыйылырға һүҙ беркеттеләр. Шунда хушлашасаҡтар...

Ҡолой ҡайныһы янына теләп керҙе. Бергәләп йәстү намаҙын уҡынылар. Унан әҙерләнгән сәйгә ултырҙылар. Хәҙер аулаҡ. Өсәүләп кенә ҡалғас Бикбаш та, әбейе Бәҙерниса ла ҡыҙҙары Ғәфифәнең артабанғы яҙмышы тураһында бик борсолоуҙарын белдерҙеләр.

– Кеше алдында һыр бирмәгән инем дә ул, кейәү. Иркәләп кенә үҫтергән балам бик йәл. Шул һуғыш арҡаһында тәүге кейәүҙе юғалттыҡ. Килтереп ерләштең, уға ла рәхмәтлебеҙ. Әллә ни хикмәт. Башҡортҡа һуғыш сыға ла тора. Ҡалмаҡ-ҡаҙаҡ яуҙары баҫылыуға яр аҫтынан тағы ла яу сыҡты. Беләм, кейәү, һаҡланып, үҙүҙеңдә аяп йөрөгән кеше түгелһең. Ә шулай ҙа аҡыллы батыр булырға кәрәк. Тиктән-тик үлемгә баш тығыу, ул батырлыҡмы икән? Ғәфифәне һаҡла. Кем белгән, үҙең ҡайта алмаһаң, йәдкәрең ҡайтыр... – Бикбаш тынып ҡалды. Бәҙерниса абыстай яулыҡ осо менән күҙ йәштәрен һөртә ине.

Теле еткән һүҙҙәр әйтеп, төрлөсә тынысландырҙы ул ололарҙы. Күңелле үк булмаған был һөйләшеүҙе инсафлы ғына тамамлап, Ғәфифә янына ашыҡты.

Мөмкинһеҙлектән аралашыуҙан мәхрүмдәр ҡосаҡлашып осраштылар. Һүҙҙәре лә, теләктәре лә беректе! Ҡолой Ғәфифәне бына инде дүртенсе йыл белһә лә, холҡон өйрәнеп бөтмәгән, ахыры. Юл ыңғайында ғына уның ауылына һуғыла йөрөнө. Унда ла осрашыу оло еңгәһе аша тартынып, оялып ҡына. Сая, үҙ һүҙенә тоғро, тура фекерле, тәүәккәл, ғәҙел, әммә ҡыҙғансыҡ холоҡло итеп тойҙо Ҡолой уны был өс төндә. Шулайҙыр. Сая ла,

ҡыҙғансыҡ та булып сыҡты кеүек Ғәфифә. Ҡолойҙоң ҡуйынында ул ултырған табын тирәһендә тәьҫораттары менән уртаҡлашты. Һәр бер кешегә тәү осрашҡандағы уҡ тыуған фекерен әйтте. Кешеләрҙең холҡон ни тиклем дөрөҫ үҡ тасуирлауына аптыраны Ҡолой. Шуға ла ул Ғәфифәне төҙәтеп һүҙ әйтмәне. Аҡбикәне ул ниңәлер әҙ һөйләне. Уны үҙенең көндәше итеп тә ҡарамай, буғай. Уны сит кеше, Ҡолойҙоң оло ҡатыны итеп тә күрмәй кеүек. Ә бына Зөләйхәне... Зөләйхәне ул ниңәлер ҡан көндәше кеүек ҡабул иткән. Зөләйхәнең әллә матурлығы, әллә аҡыллы уҡ һөйләүе, тәҡдимдәре, хатта йәш килендәргә бойороҡ биреүе оҡшамай шикелле Ғәфифәгә.

– Юҡ, Зөләйхәгә һине бирмәйем, бер остоҡ та! Һине бында уға ҡалдырып, ҡайтып та китмәйем, – тип, ҡырҡа һүҙ һалды. – Юлға бынан һинең менән бергә китәм, тиһә лә, инәһенең әйткән йомоштарын бында үтәү һәм үҙе менән ала торған әйберҙәрҙе лә бында алыу мөмкинселеге булмағанлыҡтан, артабанғы ҡарарынан туҡтап ҡалды. Үҙ-ара кем кемдеке булыу тойғоһон баҫҡас, ҡәзимге тормош мәсьәләләренә күстеләр.

Бөгөн уларҙы артабанғы бындағы тормош ҡыҙыҡһындырмай. Яу юлы, урыҫ халҡы менән мөнәсәбәт, ниндәй кәрәк-яраҡ алаһы... Мөһим, иң-иң кәрәк нәмәләр, ут өсөн саҡмалар, ептәр, әнә, беҙ һәм башҡаларҙы иҫәпләнеләр. Дарыу үләндәре төймәһе, бәйләү яулыҡтары. Ғәфифә өсөн көслө, йыуаш ике артмаҡ ат. Уларҙы ҡарарға махсус кеше. Ә дауалау бүлегенә аттарҙы ла, кешеләрҙе лә дауаларға белгәндәрҙе алдылар. Ғәфифә бик сая ҡатын. Сая булмаһа, ат менеп ирҙәр араһында яу сабыр инеме? Бәжегән, бешмәгән булмағас, булды. Унда ниндәй хәлдәр булмаҫ. Үҙ-үҙеңде яҡларлыҡ ихтыяры булыуы бик яҡшы, тип һөйөндө Ҡолой. Ә холҡоноң башҡа яҡтарына килгәндә, уларға һуғыш ҡырында өләшәһе нәмә юҡ. Бер-береңде дошмандан һаҡларға, баҫҡындан яҡлау мөһим.

Нимә алырға, нимә һалырға, тип һорауҙарының осона сығып, йоҡланылар.

Ҡолой, ғәҙәтенсә, яҡтырмаҫтан уҡ идаралыҡҡа китте. Иҡсан да, Сәғит тә, Әбүтаһир ҙа идаралыҡта инеләр. Үҙ-ара фекер алышалар, кәңәш ҡоралар. Хәҙер улар алдында ла еңел мәсьәләләр тормай. Яңы йөҙлөктәр, иллелектәр менән яңы бурыстарҙы үтәүҙе билдәләргә. Һәр йөҙлөккә теге йәки был эште башҡарыуға ваҡыт билдәләү яғында ине Иҡсан.

– Ҡырҡыу тотонорға уйлай малай, – тип һөйөндө Ҡолой. Күрәһең, ул эшкә ваҡыт билдәләүҙе хеҙмәтенән алып ҡайтҡан, тип уйлап ҡуйҙы ул. Әммә ул алым насар уҡ булмаҫ, моғайын. Кешеләргә яуаплылыҡ ҡына өҫтәр.

Уға ике ҡараһы егелгән кырандасын килтерҙеләр. Ғәфифәне ултыртып Мирхажи мулла йортона килгәндә, аш-һыу урындыҡҡа ултырған ине. Мирхажи муллаңың да йорто иркен, ураҙаһы ла киң. Күрнисәһе бейек йорттоң шәреҡкә һәм йәнүбкә баҡҡан һигеҙ тәҙрәһе бар. Аш-һыу ғәҙәти тәртиптә, ғәҙәти юҫыҡта барҙы. Ҡояш күтәрелә башлағас, улар юлға сыҡтылар. Иң алда ҡуштурылары менән Хәйретдин мулла, унан, Бикбаш ике ерәнендә, унан, ике ҡарала – Ҡолой менән Ғәфифә. Боронғо Биҙәр тау-Иман тау-Илмән тауҙан аша сығып, уның көнбайыш итәге менән Мейесле йылғаһы буйлап, Түрге яҡ күленә тиклем оҙатты Ҡолой ҡунаҡтарын. Ғәфифә, хушлашҡан ерҙә үк, атаһының кырандасы артына бәйле турыһын менеп алды. Йылы тойғо менән солғанып хушлаштылар. Кем белгән, бәлки, мәңгелеккәлер.

Ҡарасайҙың 14-те көнө, 18-се полк менән Ғәфифә, Золото-Устье-Алтынтамаҡта буласаҡ. Ә Ҡолойҙоң идаралығынан Алтынтамаҡҡа тиклем 110–115 саҡрым. Ул ике көнлөк юл. Ылауҙарҙы бер көн алда сығарырға кәрәк. Сама менән 750 атҡа, һәр береһенә 10 ҡаҙаҡтан 7 арбалыҡ йөк, шул Түрге яҡ күле яланында көтөп, аттарҙы ашатҡас, тәүге төркөм кире ҡайтыр. Тәүге төркөмдөң ҡыуғынына малайҙарҙы һәм бер генә оло кешене ҡуйһаң да ярай. Төп ир-ат яуға китә, ҡалғандары бөтә эштә. Ҡыуғынға ла көслө ирҙәр кәрәк. Арлы-бирле кеше әйләнеп тә ҡайта алмай. Күп һыналған шөғөл бит инде.

Икенсе, 7 арбалыҡ төркөм, Златоустан кире боролор. Аръяғы төпкөл, шау-урман. Ылауҙар ғәскәр менән бергә барыр. Өпә яҡҡа 50 арба йүнәләсәк. Һәр туҡталыш һайын 7 арба бушап, кире борола барһа ла, 7 көнлөк юл була. Ылау кешеләрен ҡораллandырыу мотлаҡ. Уларға утлы ҡоралды Златоустан алырға кәрәк буласаҡ. Ике тапҡыр ата торған, 20-ләгән пистолет, 10–15 ҡылыс, һөңгө кәрәк буласаҡ. Златоустан ары, юл ҡараҡтары, ылау талар өсөн, бер-береһенә хәбәр ебәреп торасаҡ. Бынһы көн кеүек асыҡ. Әммә улар күмәклəп һөжүм итмәй. Иң күбеһе – һәр ер өйөндә 3–4 кеше йәшәй. Төпкөлдә, урман-тауҙар араһында күплəп йәшәй алмайҙар. Аҙыҡ мәсьәләһе уларға бик ауыр. Аслыҡҡа түҙә алмай, раскольниктар хатта бер-береһен ашайҙар, тигән хәбәрҙәр йөрөй. Ә диндәренә хыянат итмәйҙәр. Әммә уларҙың урман-тауҙар араһына китеүҙәренең төп сәбәбе завод ҡоллоғонан ҡасыу, буғай. Ҡарасайҙың 14-дә, Алтынтамаҡта булыу өсөн, 13-сө, хатта 12-һе юлға сығыу кәрәк. Тимәк, дөйөм оҙатыу 12-һе, төшкө аштан һуң була. Ашты бөтәһенә лә бер ерҙә, ҡырҙа, дөйөм ҡаҙанлыҡта бешертергә. Бөгөн 8-се көн, буғай. Тимәк, 4 көн ҡалған. Унан һуң мәсьәләнең икенсе яғы ла бар бит әле. Беҙ 14 көнө киттек, ти. Ә 17-се полк 19-ҙы көнө. Ара 5 көнлөк юл. Беҙҙе кемдең армияһына ҡушалар ҙа, уларҙы, 17-се полкты, кем-

деңкорпусына ебәрәләр? Беҙ әлегә Түбәнге Новгородҡа барабыҙ. Ә Өпәнән һуң улар ҡайҙа китер? Билгеһеҙ бит. Халыҡ үҙ-ара аралашырға, бәхилләшергә лә тейеш бит. Тимәк, оҙатыу һәм хушлашыу ике полк өсөн дә бер ерҙә, бер көндә булһын. Шунан һуң үҙ-ара аҫай-әнеләшкәндәр бик күп.

Ҡайтып етә лә, барыһына ла 12-се көнө дөйөм оҙатыу, Ҡолһары ауылы янында булыуына, фарман бирә. Аш-һыуы ла, ҡымыҙы, әсе буҙаһы, балы ла, сәйе лә, ҡаҙандар тулы ит тә булһын. Бер ашап-эсеүҙән башҡа, тағы ла 1–2 көн ашарлыҡ бешкән ите булһын һәр кемдең. Тимәк, 1200 кешегә 230 бот самаһы ҡара ит кәрәк.

Һәр кешегә 7–8 ҡаҙаҡ ит, сама менән 20–22 баш йылҡы һуйырға кәрәк була. Оҙатыусылар ҙа бик күп була бит әле, тип уларҙы ла иҫәпкә һалды Ҡолой. 2 йәштәре тулған тай-тулаҡты иҫәпләп, 10 меңдән артыҡ баш йылҡы көтөүе өсөн 1200–1300 башы яуға китеп, тағы ла 20–25 башын һуйыу, хужалыҡтың өйөрө өсөн бер ни тормай. Әле бит иҫәпкә кермәгән ҡолоҡайҙар, ябағалар, 2 йәше тулмаған тайҙар ғына 2 мең баш. Унан да күберәк. Ит мәсьәләһен хәл итеү – бер ни тормай. Әле ҡуйҙар, үгеҙҙәр, таналар бар. Тимәк, был эште 10–11-се көнө эшләп, әҙерләп ҡуйыу маҡсатҡа ярашлы. Шундай уйҙар менән ҡайтып етте Ҡолой өйөнә. Бөгөн ул бер кемде лә тикшермәй ҙә, көндәлек хужалыҡ эшкә лә ҡушмай... Тура идаралыҡҡа кереп, йылҡылар һуйыу, ит бешереү, оҙатыуҙы ойоштороу мәсьәләләрен генә әйтәсәк. Унан башҡа, тағы ла бер мөһим эше бар.

Ике ҡылысын, ике хәнйәрҙе, уҡ баштарын, һөңгө остарын, Фәли бәкеһе кеүек итеп үткерләргә Сәхәүетдин гә ҡушасаҡ. Һөңгө һаптарына яңы, ныҡ ҡайыштарҙан ишеп мүлдергәләр ҡуйыу, ике-өс оҙон нәҙек ат бәйләрлек сылбыр әйәрҙәргә түшлек, ҡойошҡан ҡойолдороҡ сергеләр, һаҡлыҡҡа еҙләнгән икешәр йүгән, нуҡта, ныҡ тышауҙар, икешәр йүгән ауыҙлыҡтары, өҙәңгеләр, улар өҫтенән уҡалы япмалар һәм башҡа кәрәк-яраҡты йомошсолар, бөтә барлап, кырандас артына ҡуйыласаҡ һандыҡҡа һалып, күсәрҙәргә тапшырасаҡ. Кырандас тәғәрмәстәрен тарттырып, бер алғы, бер артҡыны ла арттан бәйләп алыу кәрәк буласаҡ. Юл бик оҙон. Түбәнге Новгородҡа тиклем, йәки уға еткәнсе тәғәрмәстәр түҙергә тейеш бит. Ә бына арба үҙәктәрен майлап барыу үҙе бер ҙур мәсьәлә инде. Һуйылған малдың майын иретеп, туҙ ҡағыҙына ҡушып та эшләйҙәр ине майҙы ҡайһы саҡта. Әммә, нигеҙҙә, башҡорттар, бигерәк тә тау, урман башҡорттары туҙҙан дегет ҡайнатырға бик оҫта булды. Ҡымыҙ йөрөтә торған бөкөлө ваҡ сапсаҡтарға дегет ҡойҙороп, арбаларға бәйләп алыу – мотлаҡ эш. Кырандасына Ҡолой шул ике ҡараһын ектерер, моғайын. Һуғыш атын, ерәнен эйәрле килеш артҡа бәйләтер. Ике күсәр алыр.

Бынан башҡа һаҡсылары, уларҙың артмаҡтары алдан да, арттан да киләсәк. Ике ҡораллы унлыҡ, Ҡолойҙоң кырандасы үҙе бер төркөм буласаҡ. Златоустан һуң кырандасҡа Фәфифә лә ултырасаҡ. Алдағы һандыҡ кейем-һалым, аҙыҡ-түлек, дарыу үләндәре төйөгө менән тулы буласаҡ. Юлда барғанда ҡар яуыр. Артабан арбала барыу мөмкин булмаясаҡ. Кырандасты ябыҡ санаға алмаштырырға тура киләсәк. Үҙе кеүек байҙарға керер, һорар. Бирмәһәләр, һорап та тормаҫ. Егеттәренә әйтеп, күңеленә оҡшағанын ектерер ҙә, сығыр ҙа китер. Аңлаһындар, Ҡолой кантон полкы менән һуғышҡа китеп бара. Сана көймәһе бирмәһә, үҙен һуғышҡа алып китер. Хәрби ваҡыт. Батша тарафынан булмаһа ла, яңы командующий Ҡотдосов тарафынан юлдағы мобилизация рөхсәт ителгән. Тик Ҡолойға көпкәк әсле, араҡы еҫе аңҡып торған һаҡаллы аҡ баштар кәрәкмәй. Уға арыҫлан кеүек һуғышсылар кәрәк. Саналарын, аҙыҡ-түлеген, бесән-һолоһон бирһә, шул еткән. Үҙе кәрәкмәй. Теләгәндәре үҙҙәре ҡушылыр. Үткән һуғыштар өлгөһө уға күпте өйрәткән. Ярлы-ябағанан һорау ҡәтғи тыйыла...

Ҡайтып еткәс, шулай эшләне Ҡолой. Бөтә тейешле әйберҙәрҙе, ҡоралдарҙы тәртипкә килтереп һалырға ҡушты. Оло йортона ҡайтып, ашап-эскәндән һуң, арманһыҙ булып, арып йоҡоға талды. Нисә йылғалыр инде тәү башлап Ҡолой, ғәмһеҙ, хужалыҡ эштәренән бушап, күңеле еңеләйеп, ҡайғыһыҙ йоҡланы. Тик ул был төндөң берҙән-бер ғәмһеҙ, ҡайғыһыҙ төн икәнен әле уйламаны. Киләсәк көндәр береһенән-береһе шомлораҡ, һәр көн, һәр төн үлем һағалауын, ауыр юлдар, һалҡын төндәр көтөүен зиһененә әле булһа яҙа алмай. Был ауырлыҡтарҙы уйлап, төбөнә етеп төшөнөүҙе, алдағы көндәрҙә Фәфифә менән бергә, оҙон юлда, кырандаста китеп барыу татлы хисе генә баҫа, буғай.

Ҡайғыһыҙ йоҡлаһа ла, иртә үк уны йөҙмәһә йөҙ-мәсьәлә баҫты. Иртә менән идаралыҡҡа килгәс, кантон начальнигы вазифаһын башҡарыусы улы Иҡсан, ярҙамсылары Сәғит һәм Әбүтаһир менән оҙатыу сараһын ойоштороу тураһында һөйләшеп ултырғанда, сапҡын өйәҙҙән ҡағыҙ килтерҙе. Өйәҙ идаралығы исправнигы, Ҡолой кантондан ҡасан, ҡайһы көнө полктарҙың яуға китеүен һораған. Ул көндө исправник килергә теләге барлығын белдергән.

Хоҡуҡи ҡанундарҙы үтәү, үтәмәү буйынса шәхес булараҡ, ул өйәҙҙең Земский суд, Земская полиция тигән ойошмаһына, ҡанун боҙһа, яуаплы булһа ла, Ҡолой, кантон начальнигы булараҡ, тура генерал-губернаторға буйһона. Өйәҙ исправнигенең кантон начальнигына, бер ниндәй ҙә хужалыҡ йәки хәрби эштәр буйынса буйһонмағас, Ҡолой ул исправникка ҡасан килеүҙәре тураһында хәбәр итергә лә, уның үҙен саҡырырға ла теләмәне. Һуғыш хәбәре

алып, алайҙарҙы ойоштороғанда, йөҙәр мәсьәләләр тыуып, өйәҙҙең башҡорт кантондарына бер ниндәй ҙә ярҙам күрһәтмәүен Ҡолой белә. Сөнки өйәҙҙә эшләгән башҡорт әфисәрҙәре Азаматовтар, Бутасовтар аша ла хәбәр етә килде. Исправниктың да, өйәҙ полицияһының да, башҡорт полктарын ойоштороуҙа бармаҡ аша ҡарағандарын һәм уларға ярҙам итергә теләп бармағандарын да Ҡолой төҫмөрләй. Был турала ул генерал-губернаторға доношение ебәрергә булһа ла, аҙаҡ кире уйланы. Килеп, эшкә ҡамасаулап йөрөүҙән башҡа, һис бер файҙа булмаҫ уларҙан, тип.

Ҡолой, йөҙлөктәргә, иллелектәргә, тиҙ генә, хәҙер үк, сапҡындар аша 12-се көн китеү һәм оҙатыуҙар тураһында хәбәр ебәрергә бойорҙо. Һәр унлыҡ үҙенә ҡаҙан аҫһын. Һәр йөҙлөк, һәр иллелек, үҙҙәренә һәм оҙата килеүселәргә йылҡы, ә ҡорбанлыҡҡа аса тояҡлылар салһын. Мирхажи муллаға, үҙе йөҙлөктәргә тәғәйен иткән муллалар менән киткәндәргә, дошманды еңеүҙе теләп Ҡөрьән сығарыуҙы ла хәтерләтте.

Халыҡ күңеленә яуаплылыҡ, һуғыш осоро аһаҡе, берҙәмлек һалыр өсөнмө, Ҡолой иртәгәһен йөрөк ерәненә, яу яланында йөрөй торған хәрби әйәрен һалдырҙы. Уның һәр бер таралғыһын, ҡайыштарының ныҡлығын үҙе ҡарап тикшереп сыҡты. Кешеләр нисек кейенергә кәрәклеген күрһен өсөн, көн һалҡын булмаһа ла, йылы еңел кейемдәрен, ҡолаҡсын бүрек, йөнө эскә ҡаратып тегелгән итеген, дүңгәләкле йәүшәнен кейҙе. Өҫтөнән ҡоралдарын элде. Кемдең тәңкәле, дүңгәләкле йәүшән-һаймандары бар, шуларҙы кейергә әйтәсәк Ҡолой. Сөнки элек Бессарабия ерендә яуҙа хәҙерге көнбайыш һуғышсыларында һөңгө күренмәне, оҙон мечтары булһа ла, ҡалҡандары һәм тимер кейемдәренең юҡ иҫәбендә булыуын күреп ҡайтҡан ине Ҡолой. Әммә уларҙа утлы ҡорал – оҙон мылтыҡ бар ине. Мылтыҡ йәҙрәһенән – тәңкәле йәүшән, ә мечтарынан һайман яҡшы һаҡланы. Өҙә саба ла, сәнсеп тә керетә алмай.

Ҡырҡ тапҡыр һөйләгәнсе, минең фиғелде күреп, белеп ҡалырҙар тип уйланы. Сөнки ҡайһы бер йәштәр, һайман да, йәүшән дә ауыр, уның менән сапсан һелтәнеп булмай. Башҡа кейә торған торҡа ла, ҡабырға күҙҙе ҡаплай, тип, уларҙы алмау яғында. Ауыр мечтың осо ғына сапһа ла, баш һөйәгең сатнап ярыласаҡ. Һөҙөмтәһе бер – шунда уҡ шәһит булып, баҡыйлыҡҡа күсәһең. Ә беҙ һуғышҡа баҡыйлыҡҡа китергә бармайбыҙ. Еңеп, тере ҡалып, иҫән-һау ҡайтыу насип булһын тип, барабыҙ.

Шулай тере миҫал булып, Ҡолой ауылдан ауылға йөрөнө. Сапҡындарын алдан ебәреп, бер нисә ауылдан унлыҡтарҙы, иллелектәрҙе, йөҙлөктәрҙе йыйҙы, тынғыһыҙ, бик тынғыһыҙ холоҡло Ҡолой. Үҙе лә ял итә белмәй, ярҙамсыларына ла, ҡулы аҫтын-

дағыларына ла тынғы юҡ. Һәр нәмәне еренә еткереп эшләтергә тырыша.

Һөңгө лә, уҡ баштары ла күберәк беҙе осло булыуын хуп күрҙе. Беҙ, тигәс тә, ысын беҙ кеүек түгел инде. Һөңгө осо беҙен эшләгәндә, ҡул суғы уртаса булған кешенең бармаҡтары йыуанлығы өлгө булып хеҙмәт итте. Уның өсөн халыҡта һәр бармаҡтың исеме булды: Баш бармаҡ, Бала үрҙәк, Урта тирәк, Айыр һәнәк, Бәпес бармаҡ. Фәҙәттә, күп осраҡта һөңгө осо Айыр һәнәк йыуанлығында, бик осло һәм оҙонлоғо уртаса, 2 йәки 5 вершок самаһы итеп эшләйҙәр. Ике аялыҡ йәки ике ус – ҡул суғы киңлеге оҙонлоғо тәнгә керһә, һәр дошман күҙен күккә олғаштыра.

Ә беҙ-уҡ баштары киртләс тә булып, йыуанлығы һеперткегә ҡырҡҡан тубылғылай. Оҙонлоғо 2–3 вершок самаһы. Элегерәк тал япрағы кеүек нәҙек оҙон ҡырҡма, уҡ башы эшләтә инек. Әммә ул тик йәйге һәм йәүшән кеймәгән осорҙа атылды. Ә ҡыш көнө ҡалын кейем кейгән дошманға япраҡ башлы уҡ йыртып керә алмаҫ. Керһә лә, тәрән яра һалып, уны сафтан сығармай. Шуға ла Ҡолой беҙ-уҡтарға, осло беҙ-һөңгөгә өҫтөнлөк бирҙе.

Ҡайтыуына мунса яҡҡандар ине. Мунсаға ул Аҡбикәне саҡырҙы. Ҡасан ул тағы ла мунса төшөр? Уны һис бер кем белмәй. Ул яҡтарҙа мунсаның нимә икәнен дә белмәйҙәр. Йә ялғашта ҡойоналар, булһа, ҙур ҡаҙандың аҫтына ут яғып, шуға төшөп, ебеп сығалар. Быны ла Ҡолой үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайтты.

Мунса төшкәс, сәй эскән ваҡытта, Аҡбикә атта бик оҫта йөрөгән йәш ҡатындың ҡайһы олоҫ ауылы ҡыҙы булыуын һораны. Балаларының булыу-булмауын белеү ҙә ситтә ҡалманы. Шулай урап-урап һорап сыҡҡас, ул төбәп һорау бирҙе:

– Бергә китәһегеҙ икән. Ауырға ҡалһа, ҡайҙа ҡалдыраһың инде уны, тип аптыратты. Аҡбикәнең, бындай ауан, бындай тәүәккәл булыуы аҡылына һис тә һыймай ине...

Тормоштағы ҡыҙы Мәлихәнең янына барырға ваҡыт таба алмай йыл үтте шикелле. Үҙе килгәнендә лә эштән, хеҙмәттән бушамай, һис аралаша алманы ҡыҙы менән. Уның менән инәһе Аҡбикә генә аралашты. Ә үҫеп, буй еткән ҡара һылыу Сәйфәхәһе атаһы менән аралашырға ла ояла кеүек. Бына әле лә атай килгәс, Камила янына барам, тип, төп йортҡа китте. Унда улар һәр кис йыйылып, ашъяулыҡ, ҡулъяулыҡ сигәләр, шәл бәйләйҙәр, күлдәк бесәләр. Ҡыҫҡаһы, еңгәләр, ҡыҙҙар эше менән булалар.

Аҡбикәгә, донъяның ҡыты-мытыһына хужа булараҡ, үҙе аңлағанса, юлға нәмәләр кәрәк буласағын әйтеп, айырым тоҡҡа һалып әҙерләргә ҡушты. Бәйләнгән йылы ойоҡтар, ҡулға бейәләй ҙә, бармаҡса ла, әске кейем, үҙҙәре бешереп ҡатырған һөйәк һабыны, үлән онтаҡтары һәм башҡа әйберҙәрҙе барлап, кырандаҫка ҙур һандыҡҡа һалырға һораны. Әйе. Һораны. Элек ҡуша торған ине.

Китер алдынан күңеле йомшарҙы. Иртәгәһенә, оло йортонда, тағы ла ҙур табын әҙерләтеп, барлыҡ ғаилә ағзаларын саҡыртты.

Бөтә кантон халҡы, бөтә утыҙлаған ауыл халҡы гөж килә. Мал һуялар, ҡорал, кейем-һалым әҙерләйҙәр. Илашалар, ҡосаҡлашалар. Ҡарасайҙың 11-е, Ҡолой йортонда һуңғы төн ҡуна. Көндөҙ ул Зөләйхәнең өйөндә булды. Уның үҙ ҡулы менән бешергән ризыҡтары менән һыйланды. Үҫеп, буй еткергән һәм кемдең кем икәнен айыра башлаған, танауына еҫ ала башлаған Зарифа ла, әллә атайҙарының, бәлки ғүмерлеккә китеүен аңлап, төп йортҡа барырға ашыҡманы. Шулай ҙа һуғыштың нисә йылға һуҙылырын һис кем әйтә алмай. Хатта губернатор ҙа.

– Зарифа, хәҙер үҫеп, буй еткергән. Сит-бауырҙы яҡын ебәрмәй, күҙ-ҡолаҡ булып торорға ағайҙары ла өйҙә булмай. Улар ҙа һуғышҡа китә. Һылыу Зарифаға һуғышҡа ярамағандар араһынан темеҫкенеп килеүселәр күп булыр инде. Әллә, тим, инәһе, мин өйҙә булмаһам да, затлы, тамырлы кеше килеп сыҡһа, үҙ-ара һөйләшегеҙ ҙә, ҡыҙҙы урынлаштырып ҡуйыу ҙа насар булмаҫ. Шәйемдәр булмаһа, Бутастар, Азаматтар бар. Уларҙың ҡайһы береһе линия хеҙмәтендә, ҡайһы береһе өйәҙҙә, исправникта хеҙмәттә. Тик икенсе ефетлеккә бирмә. Кейәү егет булһын. Шуны иҫеңдә тот. Бик үк бай булмаһа ла, затлы булһын. Башлы булһындар. Буш ҡыуыҡтың мираҫы ла буш була...

Кис бында, Зөләйхәгә килеп йоҡлауын әйтеп, ҡапҡа эсе кешеләре менән һөйләшеп сығырға, ҡайһы бер серле теләктәрҙе, донъя көтөү талаптарын әйтеү өсөн тышҡа сыҡты. Барыһы менән дә хушлашты Ҡолой. Кемдәндер һораны, кемделер өйрәтте, кемдәндер ғәфү үтенде. Эш өсөн ҡыҙып китеп, ҡайһы ваҡытта бик ҡыҙыулыҡ та күрһәткән осраҡтары булды шул. Ғәфү үтенгән кешеләренә хәйер-саҙаҡа таратты. Күсәрҙәрен күрҙе. Һарайҙа һоло ашап, шытып торған ҡараларын да, йөрәк ерәнен дә ялдарынан һөйҙө.

Һуңғы кисте оло йортта ике бисәһе, балалары, киленҙәре, ейәндәре, ярҙамсылары, Мирхажи мулла, башҡа зат-зәүере менән төрлө һорауҙарҙы тикшерә-тикшерә үткәрҙеләр. Ҡурай уйнап, үткән табында тыуған яңы йырҙы йырланылар. Йырға Ҡолой кантон исеме йәбеште лә ҡуйҙы. Төрлө кеше төрлөсә һүҙ сығарыр. Ғәҙәти хәл. Иң мөһиме – ғорур оло көй барлыҡҡа килде. Берәү ҙә васыят әйтмәне, һуғышҡа китәсәк улдары ла, башҡа зат-зәүер ҙә. Һинән йәки беҙҙән васыят булһын, тип, киленҙәр ҙә, байбисәләр ҙә, абыстай ҙа, ул турала ләм-мим, өндәшмәнеләр.

Алдан һөйләшеү буйынса, Мирхажи мулланы оҙатырға барған Ҡолой Зөләйхәнең өйөнә кереп, шунда йоҡланы. Аҡбикә кеүек, Зөләйхә лә теге матур, йәш ҡатындың кем, ҡайҙан булыуы, йәше, балалары, ире һәм башҡа тормош билдәләрен һорар, тип уйлағай-

ны Ҡолой. Ә Зөләйхә уны һораманы ла ҡуйҙы. Әйтерһең дә, Фәфифә уның өсөн юҡ. Әллә ниндәй алҡалар, һырғалар тағып килгән булған, ҙур йортҡа, табынға, тип, ҙәнсә генә уйлаһа ла, түҙмәне шул:

– Анау, үткәндәге табынға килгән йәш бисәне әйтәм, урыҫ әфисәрҙәренә оҡшарға тырышып, яҡут ташлы алҡалар, зөбәржәт ҡашлы йөҙөктәр, фирүзә ташынан гәрәбәләр тағып килгән булған... Ике күҙе аланлап, ике әфисәрҙә...

Ул яҡут-зөбәржәттәрҙе, Ҡолой, һин алып бирҙеңме, тип һорарға ҡурҡты. Ауға барһаң, ауыҙыңды ябып бар, тигәндәр. Уйламаҫһың, ауыҙыңа алырһың... Ҡыҙыу бит Ҡолой, тип уйлап, шымып ҡалды. Бөгөн яҡут та, зөбәржәт тә ҡайғыһы юҡ. Ҡолой иртәгә китә. Иртәгә ул был ваҡытта минең ҡуйынымда булмай. Ҡолой бөгөн минеке, тик минеке генә. Байтаҡ ваҡыт үтеп китте. Һағындым мин уны. Тик ул ҙәненең был теләген дә әйтә алманы. Яйлап ҡына сисенде...

Иртә тороп, Ҡолой, тағы ла сабынып, күңеленән мунса менән дә хушлашты. Оло йортоноң иң ҙур бүлмәһендә ял итеп, тейешле намаҙҙы уҡыны.

Мостафа ауылына терәп нигеҙләнгән торлағына, идаралыҡ алдына, өйләнән байтаҡҡа алда беренсе йөҙләк, ҡайһы бер ылауҙар килеп йыйылдылар. Ҡолһары ауылы яланына оҙатышҡан ергә барып ҡайтыу өсөн бисә, бала-сағалары ла еңел, йомшаҡ арбалар егелгән ҡырандасын, әйберҙәре менән күсәрҙәр алып китәсәк. Ә Ҡолой үҙе бөтә ҡоралдарын кейеп, ерәнендә һыбай барып төшөр халҡы ҡаршына. Унда аш бешкәндер инде. Өйлә намаҙын уҡып бөтөү менән юлға ҡуҙғалырға фарман бирер. Ә әлегә, әлегә ул үҙ йортонда. Хәҙер һуңғы хушлашыу сәйе буласаҡ.

Кантон башы булып ҡаласаҡ Иҡсан, унан башҡа биш улы – Исхаҡ, Фәбделхалиҡ, Хәсән, Хөсәйен, Сәфәр, уларҙың ғаиләләре Аҡбикә менән Зөләйхә, кантон ярҙамсылары, күсәрҙәр, Мирхажи мулла һәм башҡалар йыйылдылар. Бөгөн Ҡолой менән бергә уның 16-сы полкында Хәсән менән Фәбделхалиҡ китәсәк. Ә ҡалған өсәүһе, 17-се полктың төрлө йөҙләктәренә яҙылған. Быны Ҡолой үҙе шулай эшләне. Бөтә малайҙарҙы бер полкка һәм бер йөҙләккә туплаһаң, шау-шыуға сәбәп кенә буласаҡ. Был – бер. Икенсенән, яу – яу инде. Ул һуғыш, һуйыш. Баҡыйлыҡҡа китеүгә һәр саҡ тәрән яра сәбәп. Һуғышта берәүҙең дә өйҙәге кеүек башы ла ауырымай, һыуыҡ тейеп тә сөскөрмәй. Һуғышта яранан башҡа ауырыу юҡ. Шуға ла, бәлки, бер-береһенең шәһитен күрмәҫ өсөн дә шулай эшләне Ҡолой. Әммә ул ҙәненең был эшенә баһа биреп, дөрөҫ булдымы, әллә юҡмы икәнлеген белмәй. Был аҙымы өсөн ҡайһы ваҡыт икеләнеп тә ҡуя.

Ҙур табында, бөтә килгән кешеләр ҙә урын алғас, Мирхажи мулла ҡыҫҡа ғына вәғәздән һуң, күтәренке моңло тауыш менән доғалар уҡый башланы. Ҡор тып-тын булды. Әммә был тынлыҡ оҙаҡҡа барманы. Иң алда дөйөм тынлыҡты Ғәбделхалиҡтың кәләше Сейәнең һулҡылдап-һулҡылдап илаған тауышы боҙҙо. Уға шунда уҡ Хәсәндең ҡатыны Зөлфиә ҡушылды. Башҡа ҡатындар ҙа сыр-сыу килә башланы. Әммә Мирхажи мулла уҡыуынан туҡтаманы. Һулҡылдауҙар шыңшыуға күскәс тә, тауыш сығармай илап ултырғандар араһында, кемдер күҙ йәшен яулыҡ осо менән һөрттө, ә кемдеңдер күҙ йәштәре тәгәрәп, тура алдындағы сынаяғына тамды. Мирхажи мулла доғаларын уҡып бөткәс, зиһененә, теленә кешене ниндәй тынысландырыусы һүҙҙәр килә, шуларҙы вәғәз итте. Барыһының да тиҙҙән иҫән-һау ҡайтасағын, һуғыш оҙаҡ бармаясағын әйтте. Килгән дошмандың тиҙҙән өшөп, ас, ауырыуға һабышып Мәскәүҙе ташлап ҡасасағын фараз ҡылды. Шул фаразға тағы ла доға ҡылдылар.

Доға ҡылынғас та, Ҡолой, урынынан айырылырға теләмәй, ултыра бирҙе. Йәштәр тороп, һәр кем үҙенең өлөшөнә төшкәне менән етәкләшеп, йә йәнәшәләп тышҡа сыҡтылар. Әммә ваҡыт ҡыҫа ине. Ҡолой үҙе эсенән генә тағы доға уҡып, Аллаһу әкбәр әйтте лә урынынан тороп, йәнәш бүлмәләге яу кейемдәрен кейеп, ҡоралдарын таҡты. Кире кереп, урындыҡ ситенә, ширлеккә ултырҙы. Аҡбикә уға туҫтаҡ тултырып һөт бирҙе лә эсереп бөтмәй, яртыһын кире алды. Ә Зөләйхә көлсәнең ситен тешләтте.

Был да халыҡтың боронғо йолаһы. Ир-ат яуға китһә, уға һөт уртлатып, икмәк сәйнәтеп алып ҡалғандар. Ырым буйынса ҡалған бер уртам һөт, бер тешләм һыныҡ хужаһының иҫән-һау булыуын теләп, көтөп ята. Әле бында ашар икмәгең, эсер һыуың бөтмәгәнде юрай.

Үҙ ғүмерендә тәүләптер ул ике бисәһен дә бер ҡосаҡҡа алып ҡыҫты. Ҡыҫҡа ғына һаҡалын сәстәренә ышҡыны, еҫтәрен еҫкәне. Аҡбикәгә улы Ғәбделхалиҡ менән, ә Зөләйхәгә Хәсән менән хушлашаһы бар. Шуға күрә лә Ҡолой уларҙы ебәрҙе лә, үҙе яйлап ҡына күрнисәгә сыҡты.

Ерәне һаман да ер тибеп, нуҡта бәйен тартҡыслап, арлы-бирле йөрөй. Бейек күрнисәнән Мейесле һыуының таллығына, аръяғындағы киң, тигеҙ түшәлгән урманға, өҫтән түбәнгә ҡарап торҙо.

– Йә, хуш, йә, хушығыҙ тағы ла, – тип эстән генә уйлап, сарсор килгән ҡатын-ҡыҙ тауышына иғтибар итмәҫкә тырышып, ерәненә атланы.

Идаралыҡ алдына килеүселәрҙән башҡа, бик күп оҙатыусылар килгәндәр бергәләп дөйөм оҙатыу еренә.

Ҡолһары-Бикҡол ауылына киттеләр. Үтәһе һигеҙ-туғыҙ саҡрым юл халыҡ менән тулы. Йәйәүлеләр, төркөм-төркөм малайҙар, арбалы аттар, һыбайлылар. Унлыҡтар, бергә йыйылған иллелектәр ҡыйҡылап, саң туҙҙырып, йә шарҡылдап көлөп, йә әллә ниндәй ҡыҫҡа, хәрби йыр йырлап үтәләр ҙә үтәләр.

Ғәскәр яланға теҙелеп бөткәс, сафҡа теҙелде. Һәр бер иллелек, йөҙлөк башына үҙ кешеләренең теүәллеген белдергәс, йөҙлөктәр ҙә берәм-берәм алға сығып, үҙ кешеләренең һәм ылауҙарҙың килеп бөтөүе, теүәллеге һәм юлға әҙерлеге тураһында мәғлүмәт яһаны.

Ҡолой был яуаптарҙы ерәне өҫтөндә ҡабул итте. Унан һуң, ул өҙәңгеһенә баҫа биреп, бик көслө тауышы менән юлға сығыуҙың тәртибен әйтте:

– Хәҙер барығыҙ ҙа, һәр кем үҙ унлығы ҡаҙаны янында хушлашыу ашын ашайбыҙ. Унан һуң өйлә намаҙын уҡыйбыҙ ҙа... Аттарға.

Ҡолойҙоң был һүҙҙәре әллә әмер, әллә хәбәр булды. Тик уны бөтәһе лә һуңғы һүҙ итеп ҡабул итте. Ҡолой һәм уның йөҙлөк баштары Азамат, Әлимсура, Хәсән, Ҡорамша, Ураҙбай һәм 17-се алай йөҙ баштары халыҡ араһында йөрөп, хәл-әхүәл белештеләр. Әлимсураны Ҡолой 17-се алай башы итеп ҡалдырғанға күрә, ул уның урынына икенсе йөҙлөк башы итеп Айҙарәлене тәғәйен итте.

Ғөмүмән, башҡорттарҙа борон-борондан, улар тормошо солохһоҙ булғанда ғәскәри тәртип алға сыҡты.

Һәр ун һуғышсы үҙҙәренең араһынан иң көслө, иң ҡыйыу, иң үткерен, ҡалған туғыҙҙың тулы ризалығы менән унлыҡ башы итеп һайлап ҡуйылды. Унлыҡ башы булғас, әгәр ырыу-ҡәбилә сит, йыраҡ ергә күсенә икән, унлыҡтың бөтә ғаиләһенә, мал-тыуарына, бала-сағаның теүәллегенә ул яуаплы. Дөйөм бөтәһе лә яуаплы, әммә иллелек башы ҡаршында ул – унлыҡ башы яуаплы. Ултыраҡ тормош осоронда, ултыраҡта ул яуаплы. Йәйләүгә сыҡҡанда ла, унлыҡ башы алда. Ул йәйләү ерен билдәләй. Һәр ғаиләгә урын, мал-тыуарына ер-һыу күрһәтә. Тыныс осорҙа һәр ғаилә билдәле үҙ ерҙәренә йәйләүгә сығалар. Йәйләүгә сығырға теләмәгәндәре ултыраҡта, ауылда ҡала. Йорт-ҡура эше менән мәшғүл була. Йөҙлөктәге ун унбашы, үҙҙәре араһынан алай башлығына, буласаҡ йөҙ башының исем-шәрифен, теләктәрен еткерәләр. Әммә полк-алай башы, теге йәки был йөҙ башын үҙ белдегенә лә ҡарап ҡуя. Был бик яуаплы дәрәжә.

Һуғышта йөҙлөктөң етәкселек алымынан, ҡарарынан бөтә алайҙың яҙмышы ла хәл ителеүсән. Ә алай башын мең башы күйған. Башҡорттарҙа, ғөмүмән, Дәшт-Ҡыпсаҡта бик борондан наҡланып ҡалған был ғөрөф башҡа бер илдең дә ғәскәре араһын-

да үҙ исемле, үҙ хәрби дәрәжәләре һаҡланып, иррегуляр ғәскәр булып, Рәсәй батшалығында булыуын да, шул ғөрөфтәр, дәрәжәләр һаҡлағандыр.

Бөтә яланды тултырып, ағаслыҡ ситтәре менән урынлашып, ҙур яланды ҡамап алған ике меңләгән кеше ҡаҙандарҙы тиҙ бушаттылар. Өйлә ваҡытын үткәреп ебәрмәҫкә тырышты Мирхажи мулла. Ялан уртаһына ҙур-ҙур септә бүлектәр, улар өҫтөнә кейеҙҙәр, келәмдәр түшәлгән. Һәр йөҙлөккә тәғәйенләнгән муллалар, Мирхажи мулла һәм Ҡолой ҙа сығып, шул келәмдәр өҫтөнә баҫты. Моңло ла, моңһоҙ ҙа тауышы менән ашыҡмай, өйләне бөтә ҡәлебҡә һеңерлек итеп, күңел биреп үткәрҙе. Мирхажи мулланың вәғәзенән һуң, Ҡолой юлда барыу тәртибен тағы ла төшөндөрҙө. Кем йөҙлөгө артынан кем барыуын һәм йөҙлөктәрҙең араһы илле һуҡайҙан да артыҡ булмауын талап итте. Ылауҙар, ике йөҙлөктән һуң, уртала була. Алда барған йөҙлөктән йөҙ һуҡай алда баҫҡан хеҙмәтендәге егермелек һәм иң арттан да илле һуҡай ерҙә унлыҡ бара.

– Тәүге туҡтау Биҙәртауҙы төшөп, Мейәс йылғаһы туғайында. Әҙ генә ял иткәс, бөгөн төнгө туҡтау урыны – Түрге яҡ күленең ҡибла ярына яҡын яланлыҡта. Ә иртән тороп, Алтынтамаҡҡа етмәҫ борон, үләнле ерҙә төн үткәреү. Ҡарасайҙың 14-се көнө Алтынтамаҡҡа – Златоустҡа кереү. Осрашыуҙар шунда буласаҡ. Аръяғын Хоҙай үҙе генә белә. – Әлбиттә, Ҡолой юлдың һәм буласаҡ ваҡиғаларҙы үҙе лә төҫмөрләй.

Биҙәртауҙы – Илмәнде төшөп тәүге туҡталышҡа тиклем ул ат өҫтөндә барасаҡ. Ә ҡырандасы ылауҙар алдында, уртала. Алтынтамаҡта ул Ғәфифәне ҡаршы аласаҡ. Шул көндән башлап, уларҙың арбала ғына булған донъяһы, ә иң мөһиме — икеһе инде мәңгелеккә берегәсәк.

Юлда барыу тәртибен һәр йөҙлөккә әлек һөйләгән кеүек, бөгөн бөтә ғәләмгә тағы ла еткерҙе. Һөйләп бөткәс, саҡ ҡына халыҡҡа ҡарап торҙо ла:

– Аллаһу әкбәр! Аттарға! – тип ҡысҡырҙы.

Әле генә уға ҡарап тып-тын торған халыҡ, ҡырмыҫҡа иләүенә әйләнде. Кемдер ата-инәһе, ҡатыны, балалары менән ҡосаҡлашып хушлаша, кемдер атын тотоп сапсап ҡына өҙәңгеһенә баҫҡан, ә кемдер атын тота алмай, сабырһыҙлана.

Йөҙлөктәрҙең:

– Теҙелергә! – тигән фарманы яңғыраны. Анда ла бында ла туҙып, таралып йөрөгән кешеләр ниндәйҙер бер ойошҡан фиғел алды. Атлылар бишәр ҡат булып, дүртәр рәткә теҙелделәр. Оҙатыусылар өйөм-өйөм булып, атлылар ҡаршыһында торҙолар.

– Уң яҡтан беренсе йөҙлөккә дүртәр рәт, бишәр ҡат менән бер-бер артлы юлға! – тип бойорҙо Ҡолой.

Бөтә алай, артмаҡ аттар, ылауҙар көнбайышҡа киткән юлға төшөп, борғалана-борғалана ҡуҙғалып китте.

Яй ғына, ашыҡмай барған һыбайлылар йәнәшенән бала-саға, ҡатын-ҡыҙ сар ҙа сор булып эйәртешкән. Ҡайһы берҙәре ирҙәренең өҙәңгегә баҫҡан аяҡтарынан йәбешеп, йәнәш баралар.

Йөҙлөк баштарының береһе, мәргән уҡсы Азамат, саптарын бейетеп алдан бара. Ә Ҡолой, бөтә ғәскәрҙе барлағандай, күҙ үткәреп, арттан баға.

Алыҫта, алда күк Урал алды Илмәнтау, уның аръяғында Талыу ситтәнерәк, селтәрләнеп, Тағанайҙың осло ҡаялары төҫмөрләнә. Ярһыу Азамат күк тауҙарға ҡарап, илдә, яңы ғына алған кәләшен дә ҡалдырып китеүенә, әллә мәңгелеккә китеүенәме эсе өҙөлөп, йырлап ебәрҙе.

Йөрәк аткa менеп, ҡулға алып,
Ук-һаҙаҡкай, тигәнҡоралды,
Түгербеҙ ҙәҡанды, аямабыҙ йәнде,
Беҙ һаҡларбыҙ изге Уралды!

Һағыш-моң түккән был йырҙы, Азамат, күкрәгенең әллә ни еренән һурып алды. Ғәзиздәрен ҡалдырып, ирекһеҙҙән, яуға китергә мәжбүр булған һәр башҡорт һуғышсыһы йөрәгенә был йыр бөтмәҫ көс-дәрт өҫтәп, яҡты өмөттәр уятты...

Беҙ һаҡларбыҙ изге Уралды! Һау бул, ерем, әй, ғәзиз илем!



Автор һүҙе

2012 йылда 1812 йылғы Ватан һуғышы башланыуға 200 йыл тула. Мөхәмәтҡолой Көсөкөв ошо һуғышта ҡатнашҡан яу ҡаһарманы.

Башҡортостан халҡы һәм ситтәге ҡәрҙәштәребеҙ ҙә, был шәхесте уға арнап сығарылған йырҙағы кеүек уҫал, ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған кеше тип белә. Әммә ысын тарих улай түгел, ваҡыт етеү менән дөрөҫлөк өҫкә ҡалҡып сыға.

Фекер ебен Өфөлә 1954 йылда Ә. Харисов тарафынан төҙөлөп донъя күргән «Башҡорт халыҡ ижады» китабын асып башлайыҡ.

Ҡолой кантонды ла, бай, тиҙәр,
Ҡамсат та ғына бүрке бар, тиҙәр.
Үҙ хөкөмдәре лә үҙ ҡулында,
Ни ҡылһа ла, ирке бар, тиҙәр.

Ҡолой кантон менгән ҡара юрға
Юрғалай ҙа, башын борғолай.
Ҡолой кантон нахаҡ хөкөм итеп,
Бик күп ирҙәр зая булғылай.

Ҡолой кантондың да буйҙары –
Буйға ғына үҫкән тармалай.
Ил күҙенән ҡанлы йәш ағыҙған –
Ҡолой кантон менән Ермолай.

Кантон да ғына, кантон килә, тиҙәр,
Килгән кантондарҙан ҡаҡшаныҡ.
Яуыз кантондарҙы ҡуя икән
Рәсәй генә тигән батшалыҡ.

Йырҙың ысынбарлыҡҡа тура килмәгәнлеген текстарҙан сығып та дәлилләп була. Ҡолой Көсөкөвҡа арналған йырҙың һүҙҙәрен ижад иткән әҙәбиәт әһеле, башҡорт халыҡ йыры «Ҡара юрға»ны ҡулланған. Ниңә ул юрға һары йәки ҡола булмаған? Ә бит Ҡолойҙоң яуға менгән атын ерән тип иҫләйҙәр. Был деталь йыр һүҙҙәренең халыҡ тарафынан сығарылыуына шик тыуҙыра.

Китапта бирелгән йыр һүҙҙәренең нәүбәттәгеһе лә аңлашылмай:

Ҡолой кантондың да буйҙары –
Буйға ғына үҫкән тармалай.

Тарма тигән һүҙ беҙҙең яҡта юҡ. Беҙҙә ул киндер. Русса конопля. Һәм буйҙы киндергә тиңләмәйҙәр. Ағасҡа, ҡамышҡа тиңләйҙәр.

Был юлдар йәнәһе оҙон буйлы кешене һүрәтләй. Ә бит бөтә хәтирәләрҙә лә Ҡолойҙо төптән сыҡҡандай, киң күкрәкле итеп иҫкә алалар ине.

Мин бала ваҡытта халыҡ араһында Ҡолой кантон йырын бөтөнләй башҡа һүҙҙәр менән йырларҙар ине.

Башҡортомдоң тотҡан төп ҡоралы –
Кәк(е)ре ҡылыс менән уҡ икән.
Эй, был имперҙе бөтә айҡап сыҡтыҡ,
Башҡортомдан батыры юҡ икән.

Арғыл да ғына ергә, эй, ынтыла
Арҡаһы күк бүре балаһы.
Эй, йәнен фиҙа ҡылыр иле өсөн
Ҡолой кантон Көсөк балаһы.

Алыҫтан да ғына, һай, күренмәй
Мәскәүский бейек таш-кала.
Эй, ризыҡкайың бөтөп, тупраҡ яҙһа,
Тупраҡ яҙған ерҙә баш ҡала.

Ҡараһыу ҙа буйҙап, һай, беҙ киттек,
Ҡара ҡаҙҙар кеүек теҙелеп,
Эй, Мәскәүҙе лә дошман алған, тигәс,
Йөрәккәйҙәр китте өҙөлөп...

Мөгөҙ ҙә генә башлы, эй, яныма
Ебәк тә еп кәрәк керешкә,
Эй, ҡайҙа ғына булһа, батыр кәрәк,
Тәүәккәллек кәрәк һәр эштә.

Беҙ, һуғыш осоро балалары, һуғыштан һуң табындарҙа, Ҡолой кантонды ҙурлап йырлаған ағайҙарға, бабайҙарға аптырай торғайныҡ. Мәктәптә, сәхнәләрҙәге йырҙа ул хурлана, беҙгә, үҫмерҙәргә иң яуыз кешеләрҙең береһе итеп күрһәтелә. Ҡолой кантондың мин килтергән 5-се, 6-сы куплеттарын атайым Ильясов Мөжәүир, Мораттшин Мәүлитбай (Ҡорама ауылы), Яруллин Тәминдәр (Илсеғол), Ҡарабаев Мөхәмәтдин (Кәрим) һәм башҡа ағайҙар йырлар ине. Ә 7, 8, 9-сы строфаларҙы Ниғәмәт ағай Шоңҡаров 1962 йылда Арғаяш районында Васалимов Байрамғол ағайҙан яҙып алған. Шул уҡ һүҙҙәрҙе Кәтибә апай Кинйәбула-

това ла хәтирә итә. (Фольклор народов РСФСР, 1980 й., 157—158-се биттәр.)

Быларҙа халҡы өсөн бик күп эшләгән кантонды хурлау түгел, ә илен, ерен һаҡларға күтәрелгән ир азаматтарының ватансылыҡ тойғоһоноң, илде баҫҡын дошмандан тиҙерәк таҙартыу хистәренең урғылып сығыуын күрһәтә. Түбәндәге юлдар Арғаяш районында Мейәс йылғаһы ҡушылдығы Ҡараһыу, 16-сы, 17-се полктар ойошоп йыйылған ер – Ҡолһары ауылы тирәһен тасуирлай.

Ҡараһыу ҙа буйҙап, һай, беҙ киттек,
Ҡараҡаҙҙар кеүек теҙелеп,
Мәскәүҙе лә дошман алған, тигәс,
Йөрәккәйҙәр китте өҙөлөп....

Эйе, берҙәм халыҡтың ватансылығы ла берҙәм булған. Мөхәмәтҡолой Йәрмөхәммәт улы һуғыштан ҡайтҡас та 5-се кантон башы булып 1825 йылға тиклем эшләй. Полковник дәрәжәһендә отставкаға сыға.

Ҡолой кантон тураһында хәтирәләр беҙҙең яҡта бик күп йөрөнө. Беҙҙең яҡ тигәнем – Учалы районының төньяҡ өлөшө. Хәҙерге Силәбе өлкәһенең Уй, Сыбаркүл, Арғаяш райондары менән бер халыҡ, бер ырыу булып йәшәгәнбеҙ. Һөйләш телебеҙ бер үк. Әҙәби телдә булмаған һүҙҙәребеҙ ифрат күп.

Әҙәби тарихнамә уларҙың быуындан быуынға күсә килгән хәтирәләре, шәжәрәләре, зиһендәре һандығы төбөнән алып һаҡланды, яҙылды. Иғтибар һәм тарих өсөн барын-табындарҙың шәжәрәһенең күсермәһе ҡарттайҙар тарафынан һаҡланып, беҙҙең осорға еткән тармағы. Учалы еренән киткәс, Мейәс йылғаһының урта өлөшө көсөктәрҙең төп ере булып иҫәпләнгән.

Был китапты яҙғанда маҡсатым халҡыбыҙҙың һәр тарихи осорҙа ла ғәскәри тормошта йәшәгәнлеген күрһәтеү булды. Бынан алда яҙған әҫәрҙәремдә лә көнсығыш башҡорттарының ҡалмаҡ яуына ҡаршы туҡһан йылдан артыҡ үҙ илен, халҡын һаҡлау күренештәре урын алды. Улар менән һуғыш осоронда Рәсәй әле көнсығыш Башҡортостан еренән алыҫ уҡ тора. Ҡалмаҡтар менән бер быуатҡа яҡын һуғыш уға Урал тауын һәм көнсығыш ерҙәрен алыу өсөн уңай шарттар ғына тыуҙыра. Ерен, илен һаҡлау зарурлығы башҡортто һәр саҡ ғәскәри тормошта йәшәргә мәжбүр иткән. Баҫҡын булып, илгә кереүселәр, башҡорт халҡын ҡырып, әсир итеп иленә, еренә баҫҡынсы халыҡтың исемен биреү, ерен үҙенә мәңгелеккә ил итеп алыу төп маҡсат була. Бөгөнгө көндә бар булыуыбыҙға, милләтебеҙ исемен йөрөткән Башҡортостан тигән еребеҙ, илебеҙ булыуына, яугир атайҙарға, ҡарттайҙарыбыҙға мәңгелек бурыслыбыҙ.

2011, ноябрь

ЙӨКМӘТКЕҺЕ

Баш һүҙ (*Ғ. Б. Хөсәйенов*) 3
Буғай хаким 4
Вариҫтар ил ҡурсалай 39
Болоттар ҡуйырғандан ҡуйыра 94
Хәтерҙә ҡалғандар 122
Үҙ тарихым асылы 132
Олатайҙар тотҡан ҡоралдар 180
Ҡолой кантон Көсөкөв 213
Автор һүҙе 396

Литературно-художественное издание

ИЛЬЯСОВ Спартак Мужавирович

КОЛОЙ КАНТОН

(на башкирском языке)

Мөхәррире *Г. Й. Фазлиәхмәтова*
Рәссамы *Р. Ә. Сәйфуллин*
Биҙәлеш мөхәррире *А. Р. Мөхтәруллин*
Техник мөхәррире *В. Р. Абдрахманова*
Корректорҙары *Г. Р. Попова, Ф. Н. Харрасов, Л. Ф. Саниева*

Баҫырға ҡул ҡуйылды 16.04.12. Форматы 60 x 90 $^{1}/_{16}$. Офсет ҡағыҙы. Банниковская гарнитураһы. Шартлы баҫма таб. 25,0+0,25 форз. Шартлы буяу отт. 26,5. Иҫәп-нәшер таб. 23,98+0,45 форз. Тиражы 2000 дана. Заказ 1.00.39.12.

Башҡортостан Республикаһының Зәйнәб Биишева исемендәге
Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.

Әҙер файлдарҙан баҫылды.

Башҡортостан Республикаһының Өфө полиграфкомбинаты
дәүләт унитар предприятиеһы.
450001, Өфө, Октябрь проспекты, 2.